Ғ. С. Ҡунафин, М. Х. Иҙелбаев

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

9





Ғ. С. ҠУНАФИН, М. Х. ИҘЕЛБАЕВ

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

# 9

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн
уҡыу ҡулланмаһы

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:821.512.141
ББК 83.3 (2 Рос=Баш) я72
Ҡ 66

Дәреслектең «Халыҡ ижады», «Ауыҙ-тел әҙәбиәте», «Салауат Юлаев», «Дастансылыҡ традициялары», «XVI–XVIII быуаттар ҡулъяҙма шиғриәте», «XVI–XVIII быуаттар прозаһы» бүлектәрен профессор **М. Х. Иҙелбаев**, ҡалған бүлектәрҙе профессор **Ғ. С. Ҡунафин** яҙҙы.

**Ҡунафин, Ғ. С., Иҙелбаев, М. Х.**
Ҡ 66 Башҡорт әҙәбиәте : уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Ғ. С. Ҡунафин, М. Х. Иҙелбаев. – Өфө : Китап, 2017. – 296 бит.
ISBN 978-5-295-06768-6

**УДК 373.167.1:821.512.141**
**ББК 83.3 (2 Рос=Баш) я72**

**ТП–088/17**

**ISBN 978-5-295-06768-6**

© Ҡунафин Ғ. С., Иҙелбаев М. Х., 2017
© Василов А. Э., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## *Ҡәҙерле уҡыусылар!*

Урта кластарҙа «Башҡорт әҙәбиәте» дәрестәрендә һеҙҙең төп иғтибарығыҙ башҡорт халыҡ ижадының һәм яҙма әҙәбиәтенең, башҡорт яҙыусыларының айырым әҫәрҙәре менән танышыуға йүнәлтелде. Әгәр ҙә 5–6-сы кластарҙа әҙәбиәтте өйрәнеүҙең төп бурысы булып «яҙыусы һәм ысынбарлыҡ» мәсьәләһен асыҡлау һәм шуға бәйле рәүештә айырым художестволы әҫәрҙәрҙе уларҙа сағылыш тапҡан тормош күренештәре менән бәйләнештә анализлау торһа, 7–8-се кластарҙа был бурысҡа күренекле яҙыусыларҙың тормошо, ижадының идея-художество үҙенсәлектәре һәм әҙәбиәт теорияһының уларҙы асыҡлауға бәйле айырым төшөнсәләре тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр алыу өҫтәлә.

9-сы класта инде әҙәбиәтте өйрәнеүҙең яңы этабы башлана. Уны күҙаллау шаҡтай киңәйә, тәрәнәйә һәм ҡатмарлана төшә. Һүҙ сәнғәте буйынса һеҙ элек үҙләштергән бөтә факттар хәҙер билдәле бер системаға һалына, *әҙәбиәт эҙмә-эҙлекле тарихи-эстетик процесс рәүешендә өйрәнелә*. Әҙәбиәт курсында һеҙ, элек алған белемегеҙгә таянып, башҡорт халыҡ ижадының бөтә жанрҙары буйынса белем туплаһығыҙ. Бынан тыш, әҙәбиәттең төп үҫеш этаптары, уның күренекле вәкилдәренең тормошо һәм ижады хаҡында төплө мәғлүмәткә эйә булырһығыҙ.

9-сы класта башҡорт әҙәбиәте курсы түбәндәге бүлектәрҙән тора: инеш (унда художестволы әҙәбиәттең тәбиғәте, йәмғиәттәге роле, халыҡсанлығы, әҙәби мираҫ мәсьәләләре ҡарала), халыҡ ижады һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте, Башҡортостанда боронғо һәм урта быуаттарҙағы ҡулъяҙма әҙәбиәт (XVIII быуат аҙағына тиклем), XIX быуат башҡорт яҙма һәм баҫма әҙәбиәте, XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте.

Дәреслектә башҡорт һүҙ сәнғәтенең башҡа әҙәбиәттәр менән бәйләнештә ҡаралыуы, дөйөм күҙәтеү бүлектәре менән күренекле яҙыусыларҙың тормошо һәм ижады хаҡындағы бүлектәрҙең аралашып барыуы, уларҙан һуң һорауҙар һәм методик күрһәтмәләр, ҡайһы бер бүлектәрҙән һуң әҙәбиәт теорияһы буйынса айырым мәғлүмәттәр биреләүе башҡорт әҙәбиәтенең тарихи үҫеш юлын, дөйөм һәм үҙенсәлекле һыҙаттарын, ҙур әҙиптәренең ижади портреттарын эҙмә-эҙлекле һәм объектив яҡтыртырға ярҙам итер тип уйлайбыҙ.

Әҙәбиәт курсын яҡшыраҡ белеү өсөн, әлбиттә, өйрәнергә тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙе уҡыу, өҫтәмә әҙәбиәт менән танышыу ҙа маҡсатҡа ярашлы.

# ИНЕШ

## ХУДОЖЕСТВОЛЫ ӘҘӘБИӘТ

Көндәлек тормошта кешегә «сәнғәт» тип аталған күренештәр, әйберҙәр менән элек-электән йыш осрашырға тура килгән. Ул хәҙер бигерәк тә тәбиғи күренеш. Мәҙәниәт үҫешкән, уның ҡаҙаныштары менән осрашыу, уларҙан файҙаланыу мөмкинлектәре киңәйә барған был заманда сәнғәткә теге йәки был кимәлдә мөнәсәбәте, ҡатнашлығы булмаған кеше юҡтыр, моғайын. Кино, телевидение, театр, музыка, хореография (бейеү сәнғәте), һынлы сәнғәт (живопись), архитектура, скульптура, художестволы әҙәбиәт беҙҙең тормошобоҙға күптән ныҡлы үтеп ингән. Микеланджело, Рафаэль, Суриков, Репин, Айвазовский, Шишкин, Дәүләткилдеев, Нурмөхәмәтов, Лотфуллин кеүек рәссамдарҙың картиналары, Салауат Юлаевтың, Мостай Кәримдең Өфөләге мөһабәт һәйкәлдәре ҡайһы уҡыусыны, бигерәк тә тормошҡа әүҙем мөнәсәбәттә булған, күҙәтеүсән һәм эҙләнеүсән уҡыусыны, һоҡландырмай ҙа ҡулдарына ҡаурый йә төҫлө ҡәләм, пластилин йә башҡа материал алырға этәрмәй икән? Ә һуң кем генә «Ҡорос нисек сыныҡты», «Чапаев», «Салауат Юлаев», «Азат итеү», «Ҡайнар ҡар», «Яҙҙың ун ете мәле», «Һуғышҡа карттар ғына бара», «Ә бында таңдар тыныс ине» һымаҡ кинофильмдарҙың ҡайһыһын булһа ла ҡараманы һәм ҡаһарманлыҡтарҙың асылы һәм тормоштағы роле тураһында уйланманы икән? Бетховен, Моцарт, Чайковский, Глинка, Шостакович, Исмәғилев, Әхмәтов, Хәсәнов, Дауытов, Низаметдинов музыкаларын, «Урал», «Азамат», «Катюша», «Мәскәү кистәре», «Һәр ваҡыт булһын ҡояш!», «Былбылым», «Ел, ерәнем», «Төнгө Урал», «Ҡышҡы романс», «Өфө йүкәләре», «Ҡыңғыраулы мәктәп йылдары», «Миләш», «Ҡыр ҡаҙҙары», «Күҙҙәремә ҡара», «Күҙ нурым» кеүек йырҙарҙы йотлоғоп тыңламаған, хатта бергә ҡушылып йырламаған йә үҙе башҡарып ҡарамаған

кеше лә бик һирәктер. Уларҙың бөтәһе лә беҙҙе әҫәрләндерә, тулҡынландыра, уйландыра, матурлыҡҡа, рухи камиллыҡҡа, әүҙем тормошҡа һәм ижадҡа әйҙәй, ләззәтле хис-тойғолар донъяһында гиҙҙертә, тормоштағы насар күренештәрҙе кире ҡағырға, кәмселектәрҙән арынырға өйрәтә. Был йәһәттән сәнғәт төрҙәре араһында художестволы әҙәбиәт бигерәк тә айырыла.

**Художестволы әҙәбиәттең фәндән айырмалылығы һәм уның менән бәйләнешле яҡтары**

Сәнғәттең, шул иҫәптән художестволы әҙәбиәттең, кешеләргә ошондай тәьҫир итеү сере нимәлә? Был һорауға яуап биреү өсөн матур әҙәбиәтте фән менән сағыштырып ҡарарға мөмкин. Фәндең бик күп тармаҡтары бар: тарих, география, математика, физика, химия, астрономия, ботаника, зоология, геология, минералогия һ. б. Улар бөтәһе лә кешеләргә тирә-яҡ мөхитте, ижтимағи тормошто танып белергә, үҙенең аңбелемен, көнкүреш кимәлен үҫтерергә ярҙам итә. Художестволы әҙәбиәт тә ысынбарлыҡты, тормошто сағылдыра, кешеләрҙе дөрөҫ йәшәргә өйрәтә. Шуға ла атаҡлы рус әҙәбиәтсеһе Н. Чернышевский уны *«тормош дәреслеге»* тип атай. Был йәһәттән әҙәбиәт шул уҡ фән алдында торған маҡсатты тормошҡа ашыра. Сәнғәттең театр, музыка, кино кеүек төрҙәре менән тығыҙ бәйләнештә булған кеүек, ул фән менән дә тығыҙ бәйләнештә йәшәй. «Яҙыусыға заманса образлы фекерләү, *эрудиция* кәрәк, – ти күренекле яҙыусы Сыңғыҙ Айытматов. – Ул *тарихты, күрше фәндәрҙе* белергә тейеш» (курсив беҙҙеке. – *Ғ. Ҡ.*). Әйтәйек, һүҙ ҡеүәһен ныҡлы тойоу, уның төрлө-төрлө мәғәнә айыштарын (мәҫәлән, төп мәғәнәһе ҡиммәтле металдың атамаһы булған «алтын» һүҙе һәм уның кешегә, ижтимағи тормоштоң, көнкүрештең төрлө өлкә-тармаҡтарына бәйле күсмә мәғәнәләге ҡулланылышы: *алтын холоҡ, алтын баш, алтын ҡул, алтын ир (ҡатын), алтын баҫыу, алтын ағас, ҡара алтын, алтын тире, алтын ҡағыҙә, алтын стандарт, алтын ҡуласа* һ. б.), художестволы-эстетик ҡөҙрәтен тейешенсә балҡытып ебәреү өсөн яҙыусының тел ғилеменең фонетика, лексика, морфология, синтаксис кеүек бүлектәренә бәйле ҡағиҙәләрҙән, төшөнсәләрҙән мөмкин тиклем мәғлүмәтле булыуы мөһим. Художестволы әҙәбиәт тарих, психология, философия фәндәре менән дә тығыҙ бәйле. Ни генә тимә, тарихи-социаль ерлекһеҙ, тарихилыҡ принцибы менән һуғарылмаған әҫәрҙең заман рухын, заман тормошон тулы ҡанлы күрһәтеп биреүе мөмкин түгел. Ә инде психология мәсьәләләрен төплөрәк белгән һәм әҙәбиәттең төп предметы булған кешенең психологияһына, күңел донъяһына тәрәнерәк үтеп ингән һайын яҙыусының үҙ әҫәрҙәрендә төрлө социаль-психологик типтарҙы, характерҙарҙы, геройҙарҙы киңерәк, йәнлерәк һәм тормошсанырак һүрәтләү мөмкинлеге арта. Әҙәбиәт менән

философияның уртаҡ яҡтарына килгәндә инде, уларҙың тәүгеһен хатта ниндәйҙер кимәлдә кешенең рухи донъяһын һәм ысынбарлыҡты танып белеүҙең художестволы философияһы тип атарға булыр ине. Асылда кеше һәм йәмғиәт, кеше һәм тәбиғәт, улар араһындағы мөнәсәбәт, кешенең тормоштағы урыны һәм йәшәү мәғәнәһе, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, матурлыҡ һәм йәмһеҙлек ише проблемалар, кешеләр араһындағы төрлө яҡлы мөнәсәбәттәр, йәшәйештең башҡа хикмәтле яҡтары саҡ ҡына булһа ла сағылыш тапмаған әҫәрҙе осратыу мөмкин дә түгел.

Художестволы әҙәбиәт фәндең башҡа тармаҡтарына ла, ғөмүмән, ижтимағи аңдың барлыҡ төрҙәре даирәһенә лә еңел үтеп инә, ниндәй ҙә булһа фән өлкәһенә, дин, сәйәсәт, әхлаҡ, сәнғәт, юриспруденция кеүек ижтимағи аң төрҙәренә ҡағылышлы проблемаларҙы сағылдыра, шул өлкәләрҙә эшләгән кешеләрҙең тормошон, күңел донъяһын, эшмәкәрлеген һүрәтләй ала. Шуның менән ул беҙгә теге йәки был фән тармағы йә ижтимағи аң төрө тураһында ниндәй ҙә булһа төшөнсә булдырырға, ысынбарлыҡты киңерәк танып белергә булышлыҡ итә. Әммә ысынбарлыҡты танып белеү маҡсатына уларҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәренә генә хас сығанаҡтарҙы, предметтарҙы өйрәнеү аша өлгәшә. Мәҫәлән, астрономия күк есемдәренең һәм бөтә йыһандың төҙөлөшөн, үҫеш-үҙгәрешен, ботаника үҫемлектәр донъяһын, физика материяның (атомдарҙың, молекулаларҙың, кристалдарҙың, газдарҙың һ. б.) иң дөйөм үҙенсәлектәрен, төҙөлөшөн, хәрәкәт итеү формаларын тикшерә. Ә бына художестволы әҙәбиәт *фәҡәт кешене, уның ысынбарлыҡ менән тығыҙ бәйләнештәге күп яҡлы тормошон һәм ҡатмарлы күңел донъяһын* өйрәнә. Шуға ла М. Горький уны *кеше хаҡындағы ғилем* тип баһалаған.

Фән һәм художестволы әҙәбиәттең ысынбарлыҡты, тормошто өйрәнеү һәм сағылдырыу саралары ла төрлөсә. Ғалим ысынбарлыҡ күренештәрен логик фекерләү ярҙамында эҙмә-эҙлекле яҡтыртырға һәм билдәле бер һығымталарға килергә, ҡанундарға һалырға тырыша. Ул теүәл мәғлүмәттәр, һандар, төшөнсәләр, логик раҫлауҙар һәм ҡағиҙәләр менән эш итә. Иҫбатлап, дәлилләп бирелгән ошо күренештәрҙе, ҡағиҙәләрҙе һәр кем бары үҙе теләгән һәм булдыра алған тиклем ҡабул итә, үҙенсә үҙгәртә алмай. Уларҙы беҙ фәҡәт үҙләштерергә, нисек бар шулай ҡабул итергә тырышабыҙ. Яҙыусы иһә ысынбарлыҡты образлы фекерләү ярҙамында тыуҙырылған йәнле *картина-күренештәр* аша сағылдыра, *күрһәтеп* бирә. Күрһәтеп бирелгән был тормош, тәбиғәт күренештәрен һәр кем үҙенсә ҡабул итә, уйлана, хисләнә, илһамлана, йылмая, көлә, нәфрәтләнә, хатта ярһып китә, ҡыҫҡаһы, төрлө уй-фекерҙәргә, хис-тойғоларға бирелә, үҙенсә һығымта яһай. Ғалим менән яҙыусының ижади эшмәкәрлек-

тәрендәге был айырма хаҡында бөйөк рус тәнҡитсеһе В. Белинский: «Береһе *иҫбат итә,* икенсеһе *күрһәтә,* һәм һәр икеһе лә *ышандыра,* тик береһе – *логик дәлилдәр* менән, икенсеһе – *күренештәр* менән» (курсив беҙҙеке. – *Ғ. Ҡ.*), – тип бик мәргән әйтеп биргән. Быны асыҡ күҙ алдына килтереү маҡсатынан миҫалдарға мөрәжәғәт итәйек. Энциклопедияла – фәнни белешмәләр баҫмаһында көҙгә ошондай билдәләмә бирелә: «Ерҙең Төньяҡ ярымшарында көҙгө көн менән төндөң тигеҙлегенән (23 сентябрҙән) алып ҡышҡы ҡояш торошо көнөнәсә (21 йәки 22 декабргәсә) һуҙылған йыл миҙгеле». Был мәғлүмәттәр менән танышҡандан һуң, беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ үҙенсә генә фекер йөрөтөп, йә көлөп, йә көйләп ебәрмәй, бәлки уларҙы нисек бар шулай үҙләштерергә, хәтерендә ҡалдырырға тырыша.

Ә хәҙер шағир М. Аҡмулланың көҙ хаҡындағы уй-фекеренә күҙ һалайыҡ:

Ер йөҙөндә йәшлек күрке ҡалмайҙыр,
Биткә ыжғыр, һыуыҡ елдәр ыулайҙыр.
Дала тып-тын. Күк тә һорғолт күренеп,
Көндөң күҙе унан ҡарай алмайҙыр.

Был шиғри юлдарҙан күренеүенсә, шағир бер ниндәй ҙә һандар, логик дәлилдәр, терминдар менән эш итмәй, уның ҡарауы, тапҡыр һайлап алынған һүҙҙәр, йәнләндереү, метафора кеүек һүрәтләү саралары, талғын ағышлы шиғыр ритмы аша көҙҙөң өшәндергес һәм моңһоу картинаһын асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырыуға өлгәшә. Был картинаны һәр кем үҙенсә ҡабул итә, күҙ алдына үҙ «көҙөн» килтерә.

Яҙыусы тарафынан уның уй-фекерҙәре, хис-тойғолары, кисерештәре менән һуғарылып тыуҙырылған бына ошондай тормош күренешен ***художестволы образ*** тип атайҙар. Образлылыҡ – художестволы әҙәбиәттең айырылмаҫ үҙгәлеге, уны фәндән айырып тороусы иң мөһим һыҙаты.

**Художестволы әҙәбиәт – һүҙ сәнғәте**

Образлылыҡ – сәнғәттең башҡа төрҙәре өсөн дә уртаҡ сифат. Шулай булғас, художестволы әҙәбиәт уларҙан (һынлы сәнғәттән, музыканан, скульптуранан, архитектуранан һ. б.) нимәһе менән айырыла һуң?

Образдарҙы, тормош күренештәрен рәссам буяу ярҙамында тыуҙыра. Скульптор бронза, мәрмәр, гипс, ә архитектор таш, кирбес, бүрәнә һымаҡ материалдар менән эш итә. Композитор кешенең эске донъяһының иң нескә төҫмөрләнештәрен тауыш аша сағылдыра. Яҙыусы иһә образдарҙы һүҙҙәр ярҙамында тыуҙыра. Шуға күрә художестволы әҙәбиәтте *һүҙ сәнғәте* тип тә йөрөтәләр.

Кешелектең барлыҡҡа килеүе тарихындағы иң ҙур мөғжизә булған һүҙ менән эш итеү художестволы әҙәбиәтте күпмелер

дәрәжәлә сәнғәттең универсаль төрө яһай. Асылда ул ижтимағи тормоштоң барлыҡ өлкәләренә, ижтимағи аңдың бөтә төрҙәренә – дингә, фәнгә, әхлаҡҡа, юриспруденцияға (закондар сығарыу һәм уны ғәмәлгә ашырыу өлкәһенә), сәйәсәткә, сәнғәткә бәйле төрлө күренештәрҙе һүрәтләй, хәл-ваҡиғаларҙы бәйәнләй, проблемаларҙы күтәреп сыға һәм уларҙы хәл итеү юлдарын үҙенсә яҡтырта, күрһәтеп бирә ала. Ул үҙендә башҡа сәнғәт формаларына хас сифаттарҙың шаҡтай өлөшөн туплай. Мәҫәлән, музыка төп иғтибарын кешенең эске донъяһына, күңеленә генә йүнәлтә. Скульптура менән һынлы сәнғәт иһә тормош, тәбиғәт күренештәренең, кеше характерының, уй-кисерештәренең бары бер мәлдә тотоп алынған тышҡы билдәләрен, күҙгә күренгән яҡтарын ғына сағылдыра. Уларҙың образдарҙы, ижтимағи тормош һәм тәбиғәт күренештәрен туҡтауһыҙ хәрәкәттә, үҫеш-үҙгәрештә күрһәтер мөмкинлектәре лә юҡ. Ә бына һүҙ сәнғәте ысынбарлыҡтың, кеше тормошоноң күҙгә күренеп торған яҡтарын да һәм йәшерен, эске һыҙаттарын да, бер генә мәлен дә һәм оҙайлы йәшәү тарихын да, бер генә ваҡиғаһын да һәм уларҙың тулы бер теҙемен дә бөтә ҡатмарлыҡтарында, хәрәкәттәрендә, үҙ-ара бәйләнештәрендә һәм үҫеш-үҙгәрештәрендә кәүҙәләндерә. Бына шуға ла ул кешелек йәмғиәтенең үҫешендә айырыуса мөһим роль уйнаған үҙенсәлекле универсаль ижтимағи аң формаһы булып тора.

**Художестволы әҙәбиәттең ижтимағи әһәмиәте**

Тәрән йөкмәткеле һәм оҫта яҙылған әҫәрҙәр менән танышыу күңелдәребеҙгә һәр саҡ ләззәт һәм шатлыҡ килтерә. Шуғалырмы, ҡайһы берәүҙәр улар йөҙөндә бары һәйбәт ял итеү һәм күңел асыу сараһын күрә. Ләкин художестволы әҙәбиәттең кеше тормошондағы әһәмиәте күпкә етдиерәк һәм байыраҡ. Юҡ, бөйөк Пушкин һәм Салауат Юлаев, Лермонтов һәм Аҡмулла, Горький һәм Ғафури, Туҡай һәм Бабичтар ҡәләмгә кешеләрҙең буш ваҡыттарында күңелен асыу ниәтенән генә сығып тотонмағандар. Тикмәгә генә батша хөкүмәте уларҙы эҙәрлекләмәгән: Салауат Юлаевты, танауын киҫеп, мәңгелеккә каторгаға ебәргән. Пушкин, Лермонтов һәм Аҡмулланы үлтереүселәргә ирек ҡуйған. Горький һәм Ғафури өҫтөнән полиция күҙәтеүе урынлаштырған. Бабич власҡа яңы килгән, үҙе уларға өмөт бағлап мәдех яҙған ҡыҙылдар тарафынан йыртҡыстарса язалап үлтерелгән. Сөнки улар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә халыҡ массаһына кешенең ер йөҙөндәге иғтибарға, хөрмәткә һәм һоҡланыуға иң лайыҡ бөйөк һәм матур зат булыуын төшөндөргәндәр, уның аҡылын һәм рухын уятҡандар, уны матурлыҡты һәм яҡшылыҡты баһалай белергә өйрәткәндәр, яуызлыҡҡа һәм ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы көрәшкә әйҙәгәндәр. «Минең бурысым, – тип яҙған, мәҫәлән, М. Горький, – кешелә үҙ-үҙе менән

ғорурланыу тойғоһо уятыу, уға тормошта булғандың иң яҡшыһы, иң әһәмиәтлеһе, иң ҡәҙерлеһе, изгеһе ул һәм унан юғарыраҡ иғтибарға лайыҡ бер нәмә лә юҡ икәнде әйтеп биреү».

Художестволы әҙәбиәттең М. Горький, М. Ғафури, Ш. Бабич ише меңәрләгән яҙыусылар данлаған ана шул бөйөк зат – кеше тормошондағы беренсе әһәмиәте – ***ысынбарлыҡты танып белеүҙең*** иң көслө сараһы булыуы. Әҙәбиәт иң элек кешегә үҙен танырға өйрәтә, уға йәмғиәт тормошоноң, тәбиғәттең серле яҡтарын асып бирә, замандың ҡатмарлы һәм мөһим мәсьәләләренә яуап ҡайтара, киләсәктә хәл ителергә тейешле мәсьәләләргә юл яра. Шуның менән ул кешенең донъяға ҡарашы формалашыуына һәм үҫеүенә булышлыҡ итә, уны алға әйҙәй, бөйөк эштәргә рухландыра. Мәҫәлән, М. Аҡмулла һәм М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдинов һәм М. Ғафури, Ш. Бабич һәм Д. Юлтый әҫәрҙәре аша уҡыусы башҡорт халҡының XIX быуаттағы һәм XX быуат баштарындағы ауыр тормошо, аң-белем һәм мәҙәниәт кимәле, рухи ынтылыштары, көрәше, ғөрөф-ғәҙәттәре хаҡында шаҡтай бай мәғлүмәттәр туплай һәм тейешле һығымталар яһай ала.

Художестволы әҙәбиәт ысынбарлыҡты танып белеү генә түгел, уның төрлө күренештәренә, хәл-ваҡиғаларына, кешеләрҙең эш-ҡылыҡтарына тасуирлауҙар ярҙамында һәм тура мәғәнәһендә ***баһа биреү*** сығанағы ла булып тора. Яҙыусы үҙ әҫәрендә хикәйәләнелгән хәл-ваҡиғаларға, һүрәтләнгән образдарға һәм күренештәргә ҡарата битараф ҡына ҡалмай, төрлө сара-алымдар ярҙамында әүҙем мөнәсәбәт белдерә. Шул юл менән ул асылда уларға баһа бирә. Шиғри әҫәрҙәрҙә был баһа йыш ҡына туранан-тура белдерелеүе лә мөмкин. Эпик әҫәрҙәрҙә иһә ул юҡ-юҡ та уларҙың туҡымаһына публицистик һәм ғилми яҙмалар текстарын, фәнни мәғлүмәттәрҙе индереп ебәреү кеүек формаларҙы, лирик сигенеүҙәрҙе ҡулланыу аша тормошҡа ашырыла.

Һүҙ сәнғәте ***ижтимағи тәрбиә*** сараһы ла булып тора. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең «Мин постамын», «Һағыныу», «Йәмле Ағиҙел буйҙары» тигән әҫәрҙәрен алып ҡараһаҡ, уларҙың беҙҙә Тыуған илгә һәм халыҡҡа бирелгәнлек, дуҫлыҡ, хеҙмәтте һөйөү һәм фиҙаҡәрлек тойғолары тәрбиәләүгә, ҡара тир һәм ҡан түгеп яулаған тормоштоң ҡәҙерен белергә, мәғәнәле итеп йәшәргә өйрәтеүгә йүнәлтелгән булыуын асыҡ күрербеҙ. Әҙәбиәт кешеләрҙе гуманлылыҡҡа, бер-береңә ярҙам итешеп, үҙ-ара аралашып, татыу йәшәргә өндәй. Ғөмүмән, матур әҙәбиәт донъяһында әҙәп, тәрбиә, тәртип, әхлаҡи камиллыҡ мәсьәләләренә мөрәжәғәт итмәгән берәй әҫәрҙе осратыу мөмкин булмаған хәл.

Художестволы әҙәбиәт кешенең аҡылына ғына түгел, хис-тойғоларына ла мөрәжәғәт итә, уны әхлаҡи-этик яҡтан ғына түгел, ***эстетик*** йәһәттән дә тәрбиәләй. Ул кешенең рухи яҡтан

сынығыуына һәм камиллашыуына булышлыҡ итә, йөрәген һиҙгерерәк, күңелен зирәгерәк һәм нескәрәк яһай, гүзәллекте аңлай һәм баһалай белеү хисен үҫтерә. Әйтәйек, ижадтары бығаса һеҙгә бер ни тиклем таныш булған С. Юлаев, М. Ғафури, С. Ҡудаш, Д. Юлтый, Б. Бикбай, Ғ. Сәләм, С. Агиш, З. Биишева һәм М. Кәрим үҙҙәренең әҫәрҙәре менән тыуған ер, тәбиғәт, туған тел, әҙәбиәт һәм башҡа мәҙәни-рухи күренештәрҙең матурлығын тойорға, тормошобоҙҙоң, уны ең һыҙғанып төҙөгән, батырлыҡтар яһаған кешеләрҙең гүзәллеген, уй-кисерештәренең яҡтылығын һәм сафлығын күрергә, төшөнөргә өйрәтә, шул уҡ ваҡытта бөтә тиҫкәре һәм йәмһеҙ күренештәргә ҡарата нәфрәт, сирҡаныу тойғоһон тәрбиәләй. Ни генә тимә, матурлыҡ кешене уятып ебәрә, тынысһыҙлығын, вайымһыҙлығын юғалттыра, иң мөһиме, уның күңелен әүҙемлеккә, нимәгә булһа ла яуап эҙләргә һәм табырға әйҙәй, уға камиллыҡҡа, гармонияға юл аса. Инглиз философы Ф. Шиллер һүҙҙәре менән әйткәндә, матурлыҡ «көсөргәнешле кешелә – гармонияны, ә көсһөҙләнгәнендә энергияны аяҡҡа баҫтыра». Художестволы әҫәрҙең кеше күңелендә ана шул гармонияны һәм энергияны тыуҙырырлыҡ матурлыҡ тойғоһо уятырлыҡ, эстетик идеал барлыҡҡа килтерерлек булыуы бик мөһим. Кешенең эстетик аңын һәм зауығын үҫтереү – әҙәбиәттең иң төп бурыстарының береһе ул.

Шул рәүешле, ысын сәнғәт әҫәре беҙҙе тулҡынландыра, уйландыра, аҡылыбыҙҙы, әхлағыбыҙҙы камилыраҡ, күңелебеҙҙе һиҙгерерәк, зауыҡлыраҡ яһай, эшкә һәм ижадҡа дәртләндерә, ижтимағи әүҙемлеккә, кире күренештәрҙе инҡар итеүгә, тормошто мөмкин тиклем гармониялы алып барыуға әйҙәй. Бына ошо сифаттар художестволы әҙәбиәттең ижтимағи әһәмиәтен билдәләй ҙә инде.

**Әҙәбиәттең халыҡсанлығы**

Әҙәбиәттең ижтимағи әһәмиәтен, йәмғиәттең үҫешенә булышлыҡ итеү кимәлен, прогрессив булыу-булмауын иң элек халыҡсанлыҡ күҙлегенән сығып билдәләргә мөмкин. *Әҙәбиәттең халыҡсанлығы һүҙ сәнғәтенең ижтимағи асылын күрһәтеүсе иң мөһим идея-эстетик категория булып тора.* Уның тәбиғәте әҙәбиәттең фәҡәт замандың алдынғы фекер-ҡараштарын, киң халыҡ массаһының тормошон, уй-хыялдарын һәм теләк-ынтылыштарын сағылдырыуы, йәмғиәттең үҫешенә булышлыҡ итеүе менән билдәләнә. Тимәк, халыҡтың алға китеүен тотҡарлаған, аңын томалаған, уны хата аҙымдарға, хәүефле, яман эшҡылыҡтарға этәргән әҙәби әҫәрҙәрҙе беҙ һис тә халыҡсан тип әйтә алмайбыҙ. *Ысын халыҡсанлыҡ – ул халҡыңды хөрмәт итеү, ихлас яратыу, уның рухи үҫешенә, ирекле, мәғәнәле, етеш һәм матур, зауыҡлы йәшәйешенә булышлыҡ итерҙәй әҫәрҙәр тыуҙырыу тигән һүҙ. Ул ижадтың олпатлығын, образлы*

*фекерләү аша сағылыш тапҡан ҡараштың үткерлеген, киңлеген һәм тәрәнлеген, халыҡ тормошона яҡынлығын раҫлаусы күрһәткес.* Халыҡсанлыҡҡа өлгәшеү яҙыусыға еңел бирелмәй. Ул унан фекер-ҡараштар киңлеген һәм тәрәнлеген, образлы фекерләү маһирлығын ғына түгел, ҡыйыулыҡ та, төрлө ҡыйынлыҡтарға ҡаршы көрәш рухын да, хатта ҡайһы берҙә үлемгә илтер аҙымды ла талап итә. С. Юлаев, А. Пушкин, М. Лермонтов, М. Аҡмулла, Ш. Бабич, Д. Юлтый һәм башҡа әҙиптәрҙең тормошо, ижады ана шул хаҡта һөйләй, Л. Толстой, А. Ахматова, Һ. Дәүләтшина кеүек ҙур талант эйәләренең яҙмыштары шуға асыҡ миҫал.

Әйтергә кәрәк, совет осоронда беҙҙә халыҡсанлыҡ сифатына заманының алдынғы идеологияһын тыуҙырған, ижтимағи үҫешкә етәкселек иткән синыфтың әҙәбиәте генә эйә була, сөнки уның тотҡан юлы, ынтылыштары йәмғиәттәге ҡайһы бер башҡа социаль ҡатламдарҙың мәнфәғәттәренә лә хеҙмәт итә, тигән ҡараш ныҒынды. Эшселәр синыфы тап шундай ҡатлам итеп ҡаралды. Уның социаль һәм милли иҙеүҙең бөтә төрөн дә тамырынан юҡ итеү, ирекле һәм бәхетле социалистик йәмғиәт төҙөү өсөн көрәше крәҫтиән массаһының да, интеллигенцияның да өмөт-хыялдарына яуап бирә, бына шуға күрә лә уның әҙәбиәте киң халыҡ массаһына хеҙмәт итеүсе халыҡсан, алдынғы сәнғәт өлгөһө булып тора тип иҫәпләнде. Бындай фекер-ҡарашты тулыһынса инҡар итмәгән сүрәттә лә, уның бер яҡлы булыуын күрмәү мөмкин түгел. Үҙенән-үҙе һорау тыуа: фәҡәт заманы өсөн алдынғы иҫәпләнгән синыфтың әҙәбиәте генә халыҡсан да, башҡаларыныҡы халыҡсан була алмаймы? Улайһа, Гомер, Әбүлҡасим Фирҙәүси, Ҡол Ғәли, Салауат Юлаев, Иоганн Гёте, Оноре де Бальзак, Александр Пушкин, Лев Толстой, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев кеүек юғары ҡатламдан сыҡҡан меңәрләгән яҙыусыларҙың иң ҙур һынауҙы – ваҡыт һынауын үткән, әллә күпме кешеләр күңелендә урын алған, һаман да уҡылған һәм өйрәнелгән ижад емештәрен ҡайҙа ҡуябыҙ? Улар халыҡсан булмай сығамы? Ә бит халыҡ төшөнсәһе йәмғиәттә күпселекте тәшкил иткән хеҙмәт эйәләре менән генә сикләнмәй. Ул үҙ эсенә барлыҡ социаль ҡатламдарҙы ла – эшсе һәм крәҫтиәнде лә, интеллигенцияны ла, мал-мөлкәтле, хаким синыфтарҙы ла ала. Сәнғәт әҫәре, шул иҫәптән әҙәби ижад емеше, халыҡтың тар бер төркөмөнә, йә юғары, йә түбән ҡатламдарына төбәп кенә тыуҙырылмай, бәлки илдәге, йәмғиәттәге һәр кеше өсөн ижад ителә. Дөрөҫ, яҙыусының һәр ҡайһыһы билдәле бер социаль ҡатлам мөхитендә донъяға килә һәм тәрбиәләнә, зиһен-күңеленә иң элек уның уй-ҡараштарын, холоҡ-фиғелдәрен, психологияһын һеңдерә. Уға үҙ синыфының тормошо яҡшы таныш, яҡын һәм аңлайышлы. Әҫәрҙәрендә ул уның тормош-көнкүрешен,

уй-фекерҙәрен, әхлаҡ принциптарын, хис-тойғоларын, теләк-ынтылыштарын, йөрәк йылыһын һалып, сағыуыраҡ, ихласыраҡ һәм иркенерәк сағылдыра ала. Был йәһәттән әҙәбиәт синфи характерҙағы сифатҡа ла эйә идея-эстетик күренеш булып тора.

Яҙыусы үҙ әҫәрҙәрендә барыбер үҙенең ижтимағи позицияһын белдерә, ниндәй ҙә булһа социаль ҡатламдың тормошон, донъяға ҡарашын, теләк-ынтылыштарын, үҙе лә һиҙмәҫтән, киңерәк һәм тәрәнерәк сағылдыра. Мәҫәлән, В. Гюгоның «Хоҡуҡһыҙҙар», Э. Войничтың «Күгәүен», М. Горькийҙың «Әсә», М. Ғафуриҙың «Баҙарға сыҡтым», «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» кеүек әҫәрҙәре менән танышыу барышында беҙ уларҙың бөтә зиһен-күңелдәре менән иҙелеп йәшәгәндәр яғында булыуҙарын, байҙарға нәфрәтләнеп ҡарауҙарын асыҡ тоябыҙ.

Бында шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: яҙыусы – конкрет бер социаль ҡатламдың вәкиле булыу менән бер рәттән, дөйөм халыҡтың, кешелектең бер ағзаһы ла. Ул, синфи мәнфәғәттәр менән бергә, ил-ҡор, милләт һәм кешелек яҙмышы хаҡында ла ҡайғырта, баш вата. Бына шуға ла әҙиптең ижтимағи позицияһы һәр саҡ уның ниндәй социаль ҡатламдан сығыуына ҡарап ҡына билдәләнмәй. Әйтәйек, бөйөк рус яҙыусыһы Л. Толстой – хаким синыф вәкиле, граф. Ә бына ижадында, үҙе үк әйткәнсә, «йөҙ миллионлы ер эшкәртеүсе халыҡтың адвокаты» булараҡ сығыш яһай, шуның менән бер рәттән, ысынбарлыҡты, халыҡтың мөһим уй-кисерештәрен, хис-тойғоларын һоҡландырғыс йәнле картиналар аша тәрән, күп яҡлы һәм дөрөҫ сағылдырып, киң ҡатлам уҡыусыларҙың күңелен яулауға өлгәшә.

Ғөмүмән, сәнғәт әһелдәренең һәр ҡайһыһы үҙ ижад емештәренең мөмкин тиклем киң халыҡ массаһы тарафынан ҡабул ителеүен теләй, шуға өлгәшергә тырыша. Сөнки улар массалар уҡығанда, тамаша ҡылғанда, тәьҫирләнгәндә, уйланғанда, ғибрәт һәм фәһем алғанда ғына оҙаҡ йәшәйҙәр, ғүмерле булалар. Тормош күренештәрен, ундағы проблемаларҙы, хәл-ваҡиғаларҙы тар синфи позициянан ғына күҙаллау барыбер әҙәбиәттең офоҡтарын, ысынбарлыҡтың йәшәү закондарына, тәрән серҙәренә үтеп кереү, уларҙы төшөндөрөп биреү мөмкинлектәрен сикләй, уның халыҡта бер яҡлы, тар ҡараштар формалаштырыусы сығанаҡҡа әүерелеүенә килтерә. Яҙыусы бер яҡлы, тар синфи идеология позицияһынан ғына сығып эш итмәгәндә, киң ҡарашҡа, ҙур интеллектуаль көскә, зирәк зиһенгә эйә булғанда, үҙен рухи яҡтан азат итеп тойғанда, юғарынан төшкән ниндәйҙер күрһәтмәләрҙе һәм ҡарарҙарҙы, кешеләр әйткәндәрҙе көтөп тормаҫтан, үҙ аллы фекер йөрөткәндә генә ысынбарлыҡтың иң мөһим һәм ҡыҙыҡлы, иң етди һәм фәһемле яҡтарын күрә һәм ижтимағи-эстетик әһәмиәтен тиҙ генә юғалтмаҫлыҡ, халыҡты

тулҡынландырырлыҡ, хатта ҡайһы берҙә бөтә кешелектең рухына хуш килерлек әҫәрҙәр тыуҙыра аласаҡ.

Социаль-иҡтисади, мәҙәни үҫеш арҡаһында халыҡтың аңы, теләк-ынтылыштары һәм талаптары һәр саҡ үҫә, үҙгәрә бара. Шуға бәйле рәүештә ошо процесты сағылдырыусы әҙәбиәттең халыҡсанлыҡ һыҙаттары ла тарихи йәһәттән үҙгәрә, яңы сифаттар менән байый, ә ҡайһылары элекке йөҙөн юғалта бара. Әйтәйек, тормошто мәғрифәтселек идеялары күҙлегенән яҡтыртҡан М. Аҡмулла шиғриәтенең халыҡсанлығын билдәләүсе үҙенсәлектәр менән М. Кәрим шиғриәтенең халыҡсанлығын күрһәтеүсе һыҙаттар тап килеп тора тип булмай. Улар күпкә байыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ.

Ләкин ошондай үҫеш-үҙгәрештәргә ҡарамаҫтан, әҙәбиәттәге халыҡсанлыҡтың ҡайһы бер төп һәм дөйөм һыҙаттарын билдәләргә лә мөмкин. Шуларҙың береһе булып әҙәби әҫәрҙәрҙә *халыҡ массаһы өсөн мөһим һәм ҡыҙыҡлы проблемаларҙы, хәл-ваҡиғаларҙы һәм күренештәрҙе яҡтыртыу* тора. Халыҡсанлыҡ һүрәтләү объектына, нимә тасуирлауға, ниндәй проблемаларҙы һәм идеяларҙы яҡтыртыуға һис тә битараф ҡала алмай. Мәҫәлән, М. Аҡмулла менән М. Өмөтбаев үҙҙәренең шиғырҙарында туған халҡының аң-белемен, мәҙәниәтен үҫтереү, әхлағын камиллаштырыу кеүек заманы өсөн бик мөһим булған проблемаларҙы күтәрә. Шуның менән улар халыҡтың уяныуына, алға китешенә булышлыҡ итә.

Ләкин әһәмиәтле мәсьәләләрҙе күтәреү, мөһим һәм ҡыҙыҡлы, фәһемле һәм ғибрәтле тормош күренештәрен, хәл-ваҡиғаларҙы сағылдырыу менән генә әҫәр ысын халыҡсан булып китмәй әле. Яҙыусының уларҙы асылдарына ярашлы образлы фекерләү ярҙамында мөмкин тиклем боҙмайынса, уҡыусыны ышандырырлыҡ дәрәҫләгәндә, *үҙ осороноң алдынғы идеялары юғарылығынан тороп, халыҡтың мәнфәғәттәрен, уй-хыялдарын һәм теләк-ынтылыштарын, ил һәм кешелек яҙмышын күҙ уңында тотоп яҡтыртыуы ла кәрәк.* Быныһы инде – халыҡсанлыҡтың йәнә бер мөһим һыҙаты. Әйтәйек, Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-и Йософ» дастаны һигеҙ быуат буйына халыҡ күңелендә һаҡлана килә. Бының сәбәбе унда ғибрәтле тормош күренештәренең, мөхәббәт темаһының юғары художестволы кимәлдә сағылдырылыуында ғына түгел, бәлки уларҙың иң элек халыҡтың ғәҙел хаким, бәхетле тормош, ата менән ул араһындағы кешелекле мөнәсәбәттең, саф мөхәббәттең, гуманлылыҡтың илаһи көсө тураһындағы уй-ҡараштары, өмөт-хыялдары күҙлегенән яҡтыртылыуында.

Әҙәбиәттә шундай хәлдәр ҙә булырға мөмкин: әҫәр замандың көнүҙәк проблемаларын да күтәргән, мөһим һәм ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғаларҙы, тормош күренештәрен дә сағылдырған, үҙ

осороноң алдынғы идеялары менән дә һуғарылған кеүек, әммә шуға ҡарамаҫтан, ул уҡыусыны арбамай, уның күңел донъяһына тәьҫир итмәй. Яҙыусының иң яҡшы, иң матур уй-теләге тормошҡа ашһын, ысын мәғәнәһендә халыҡҡа хеҙмәт итһен өсөн, уның үҙ әҫәрендә тормош күренештәрен, хәл-ваҡиғаларҙы оҫта ойоштора, образдарҙы сағыу бирә, фекер-ҡараштарҙы уҡыусыға образлы һәм аңлайышлы тел аша еткерә белеү һәләтенә эйә булыуы ла кәрәк. Шунһыҙ уның әҫәре, ниндәй тәрән йөкмәткеле булмаһын, уҡыусының зиһенен, күңелен тулыһынса биләй, уны һоҡландыра, тулҡынландыра һәм илһамландыра алмай. Тимәк, әҙәби әҫәр йөкмәткеһе менән генә түгел, *формаһы менән дә киң халыҡ массаһына аңлайышлы, күңелгә ятышлы, ылыҡтырғыс, эстетик зауыҡ тәрбиәләрлек,* ҡыҫҡаһы, *юғары художестволы* булырға тейеш. Халыҡсанлыҡтың йәнә бер мөһим һыҙаты бына ошонда. Халыҡсанлыҡ примитивлыҡты, түбән эстетик зауыҡҡа ярашыуҙы үҙ итмәй. Ул юғары сәнғәтлелеккә, художестволы камиллыҡҡа, гүзәллеккә ирешеүҙе күҙҙә тота. Ошондай сифатҡа эйә әҫәр зиһенгә мәшәҡәтһеҙ килеп инә, айырыла алмай мауығып уҡыла, бөтә күңелде биләп ала.

Әҙәбиәт үҙенең ижтимағи миссияһын ысын мәғәнәһендә үтәй алһын, халыҡсанлыҡ сифаттарын тулыһынса асып һалһын өсөн, уның халыҡҡа, ә халыҡтың уға бермә-бер яҡынайыуы ла кәрәк. Бының мөһим шарты булып *киң халыҡ массаһының тейешле аң-белемгә һәм мәҙәниәткә эйә булыуы* тора. Был мәсьәләнең нисегерәк хәл ителеүе ижтимағи ҡоролоштоң үҙенсәлектәренә, йәмғиәттең социаль-иҡтисади үҫеш кимәленә бәйләнгән. Ни генә тимә, халыҡтың аң-белемен үҫтереү, мәҙәниәтен күтәреү өсөн тейешле шарттар булмаған йәмғиәттә әҙәбиәттең киң халыҡ массаһы араһында мөмкинлеге барыбер сикләнгән. Бына шуға ла халыҡсан әҫәрҙәрҙең гүзәл өлгөләрен биргән Александр Пушкин үҙе тураһындағы хәбәрҙең «бөтә бөйөк Русь буйлап үтәсәге» хаҡында бары хыял ғына иткән. «Йөҙ миллионлы ер эшкәртеүсе халыҡтың адвокаты» Лев Толстойҙың әҫәрҙәре иһә сит илдәрҙә түгел, хатта Рәсәйҙең үҙендә юҡ дәрәжәһендәге аҙсылыҡҡа билдәле булған. С. Юлаев, М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, М. Ғафури, Ш. Бабич кеүек халыҡсан шағирҙарҙың ижад емештәрен дә үҙ заманында халыҡтың бөтә социаль ҡатлам вәкилдәре лә берҙәй кинәнеп уҡыу һәм үҙләштереү мөмкинлегенә эйә булмаған. Һөҙөмтәлә, бындай ижтимағи шарттарҙа бөйөк әҙиптәрҙең ижад емештәре, халыҡсан була тороп та, үҙҙәренең миссияһын тейешле кимәлдә үтәй, халыҡтың һәм йәмғиәттең прогресына тулы ҡанлы хеҙмәт итә, йәғни ысын халыҡсанлыҡ сифаттарын тулыһынса күрһәтә һәм файҙалана алмаған.

Бары ғәҙеллек, тиң хоҡуҡлылыҡ, шәхес ирке һәм хоҡуғы, шәхес ихтыяжы, милләт азатлығы принциптары беренсе планда

торған, иҡтисад үҫешкән йәмғиәттә генә әҙәбиәтте халыҡҡа, халыҡты әҙәбиәткә яҡынайтыу бурысын тормошҡа ашырыу өсөн тейешле шарттар тыуа.

Үҙҙәренең йөкмәткеһе һәм формаһы менән халыҡсан булған әҫәрҙәр халыҡ араһында киң тарала алыуҙары арҡаһында ижтимағи функцияларын мөмкин тиклем тулы ҡанлы, эффектив үтәүҙәре йәһәтенән дә халыҡсанға әүерелә, ысын мәғәнәһендә халыҡтың рухи-мәҙәни байлығының айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнә.

**Әҙәби мираҫ**

Үткәнһеҙ бөгөнгө, бөгөнгөһөҙ киләсәк юҡ. Был тормоштоң үҫеш ҡануны. Һәр быуын үҙенән алда килгән быуын тыуҙырған матди һәм рухи байлыҡтар менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалһа йәки, киреһенсә, уларҙы бөтөнләй инҡар итһә, тормошта алға китеш булмаҫ ине. Үткәнгә таяныу, уның ҡаҙаныштарын һәм традицияларын үҙләштереү һәм камиллаштырыу, улар ерлегендә яңыны тыуҙырыу – бөтә төр үҫештең тәүшарты.

Художестволы әҙәбиәттә лә ул шулай. Фәҡәт быуындан быуынға күсә һәм байытыла, камиллаштырыла килеү арҡаһында ғына һүҙ сәнғәте бөгөнгө кимәлгә күтәрелә алған. Бында үткән дәүерҙәрҙә ижад ителгән әҫәрҙәрҙе, йәғни әҙәби мираҫты, дөрөҫ баһалау һәм файҙаланыу мәсьәләһе мөһим әһәмиәткә эйә.

Беҙҙең әҙәбиәтебеҙ рухи мираҫтың тап ана шул халыҡтың аң-фекере, мораль йөҙө, эстетик тойғолары камиллашыуына, йәмғиәттең алға китеүенә булышлыҡ иткән өлгөләренә һәм традицияларына таянып формалашты, үҫте һәм үҫә. Үткән замандарҙан тороп ҡалған әҙәби ҡомартҡыларҙы дөрөҫ файҙаланыу өсөн ике төп фекерҙе күҙ уңынан ысҡындырмау мөһим. *Беренсенән, рухи мираҫтың яңы йәмғиәтте, уның мәҙәниәтен төҙөү һәм үҫтереү өсөн дә әһәмиәткә эйә булыуын таныу. Икенсенән, уның ҡомартҡыларын баһалағанда, тарихилыҡ принцибынан сығып эш итеү, йәғни уларҙы ҡасан, ниндәй шарттарҙа ижад ителеүҙәрен күҙ уңында тотоп өйрәнеү һәм баһалау, шул уҡ ваҡытта уларға, бөгөнгө көн талаптарын да иҫтән сығармай, тәнҡит күҙлегенән ҡарау.*

Әҙәби ҡомартҡыларҙың әһәмиәте нимәлә? Беренсенән, улар беҙҙе үткән замандарҙа булған һәм бынан һуң бер ҡасан да элек нисек булған шул килеш ҡабатланмаясаҡ ижтимағи мөнәсәбәттәр, йәмғиәт ҡоролоштары, тарихи хәл-ваҡиғалар, тормош һәм тәбиғәт күренештәре менән таныштыра, беҙгә ата-бабаларыбыҙҙың теге йәки был осорҙағы тормош-көнкүреше, донъяға ҡарашы, эстетик зауығы һәм художестволы фекерләү кимәле, ғөрөф-ғәҙәттәре, теләк-ынтылыштары хаҡында мәғлүмәттәр бирә, ҡыҫҡаһы, үткәнде танып белергә ярҙам итә.

Әҙәби мираҫтың икенсе бер әһәмиәте шуның менән билдәләнә: унда дөйөм кешелеккә хас булған, уны быуаттар буйына уйландыра, борсой һәм ҡыуандыра килгән идеялар, төшөнсәләр сағылыш таба. Улар үҙҙәренең төп мәғәнәһен, тәбиғәтен бер ваҡытта ла юймайҙар. Мәҫәлән, мөхәббәтте, дуҫлыҡты, батырлыҡты, кешелеклелекте данлау йәки, киреһенсә, яуызлыҡты, ҡомһоҙлоҡто, ҡурҡаҡлыҡты тәнҡитләү әҙәбиәттә элек тә урын алған, хәҙер ҙә бар. Тик кешеләрҙең был идея-төшөнсәләрҙең асылына төшөнөүе, уларға мөнәсәбәте һәм талабы ғына йәмғиәттең үҫешенә бәйле рәүештә үҙгәрә, төрлө осорҙа төрлөсә була барған. Әйтәйек, XIII–XVI быуаттарҙа йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың һәм бөгөнгө замандаштарыбыҙҙың Тыуған ил хаҡындағы уй-тойғолары араһына тигеҙлек билдәһе ҡуйыуы ситен. Әммә Тыуған ил төшөнсәһе һәр кеше өсөн элек тә, хәҙер ҙә изге булған һәм буласаҡ. Ул һәр саҡ төп мәғәнә асылы үҙгәрмәҫ тотороҡло төшөнсә булып ҡала. Үҙендә бөтә кешелек өсөн уртаҡ булған тап бына ошондай тотороҡло төшөнсәләрҙе, идеяларҙы сағылдырыуы һәм һаҡлауы менән әҙәби мираҫ бөгөнгө көндә лә мөһим әхлаҡи һәм эстетик тәрбиә сығанағы булып тора. Унда яҡтыртылған тормоштоң ыңғай яҡтары, тәбиғәттең гүзәл күренештәре, кешегә ихтирам менән һуғарылған гуманлы идеялар, геройҙарҙың күңел сафлығы, юғары әхлаҡ сифаттары беҙҙе һоҡландыра, тулҡынландыра, әхлаҡи камиллыҡҡа әйҙәй, матурлыҡты күрә һәм баһалай белергә өйрәтә. Шул уҡ ваҡытта унда тәнҡитләнгән яуызлыҡ, мәкерлек, ҡомһоҙлоҡ кеүек тиҫкәре тормош күренештәре беҙҙе нәфрәтләндерә, күңелдәребеҙҙә ерәнеү тойғоһо уята.

Башҡорт халҡының һүҙ сәнғәте мираҫы шаҡтай ҙур. Ул уның быуаттар буйына йәнәш үҫкән ***өс*** формаһынан – ***ауыҙ-тел ижадынан,*** икенсе төрлө әйткәндә, фольклорҙан, ***ауыҙ-тел әҙәбиәтенән,*** йәғни йырауҙар һәм сәсәндәр ижадынан һәм ***яҙма әҙәбиәттән*** ғибәрәт. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең ижади һәләтен күбеһенсә һүҙ сәнғәтенең тәүге ике формаһында күрһәткән. Улар тәрән йөкмәткеле, юғары художестволы иҫ киткес бай фольклор әҫәрҙәре ижад итеп ҡалдырған, исемдәре һәм ижад емештәре тарихта ҡалырлыҡ сәсәндәрен тыуҙырған. Уларҙың ижад емештәрендә, фольклор әҫәрҙәрендә башлыса ябай халыҡтың уй-хыялдары, теләк-ынтылыштары, үҙ заманының алдынғы идеялары сағылыш тапҡан. Бындай халыҡсан-демократик рухлы әҫәрҙәрҙең барлыҡҡа килеүендә сәсәндәр бик ҙур роль уйнаған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың ҡайһы берҙәренең, нигеҙҙә, ижадтары профессиональ юғарылыҡҡа еткәндәренең генә, исемдәре һәм әҫәрҙәре изгелекле халыҡ күңеле йәки ҡағыҙ биттәре аша беҙҙең көндәргә килеп еткән. Ерәнсә, Ҡобағош,

Ҡарас, Байыҡ, Мәхмүт, Буранбай-Йәркәй, Ишмөхәммәт, Ҡонҡас, Баһауи, Хәмит, Ғәбит кеүек сәсәндәр ана шундайҙарҙан.

Фольклорҙан, ауыҙ-тел әҙәбиәтенән айырмалы рәүештә, башҡорт яҙма әҙәбиәте ҡаршылыҡлы юлдар менән аҡрын үҫкән. Ни генә тимә, яҙма культура донъяһы күп йәһәттән юғары ҡатлам вәкилдәренең, дин әһелдәренең ҡулы аҫтында булған. Шуға ла уның үҫеш торошо һәм йүнәлеше, йөкмәткеһенең ниндәйерәк характерҙа булыуы уларҙың эшмәкәрлегенә, фекер-ҡараштарына, теләк-маҡсаттарына ныҡ бәйләнгән. Һөҙөмтәлә, яҙма әҙәбиәттә дини мотивтар, юғары социаль ҡатламдарҙың тормошо, уй-фекерҙәре, теләк-ынтылыштары киң сағылыш тапҡан. Унда нигеҙендә кешеләргә яҡшылыҡ теләү, уларҙың тормошон яҡшыртырға ынтылыу ятҡан гуманистик идеялар балҡып-балҡып ҡына ҡалған. Мәҫәлән, XIII быуат шағиры Ҡол Ғәлиҙең эскерһеҙ мөхәббәтте, күңел сафлығын, йәмғиәттәге ғәҙеллекте, тигеҙлекте һәм кешелеклелекте данлаған, яуызлыҡты тәнҡитләгән эпик ҡоласлы «Ҡисса-и Йософ» («Йософ вә Зөләйха») поэмаһы йәки дастаны – шуның бер асыҡ миҫалы.

Башҡорт яҙма әҙәбиәте урта быуаттарҙа ҙур ҡаршылыҡтар аша аҡрынлап халыҡ тормошона яҡыная барған. Унда ысынбарлыҡҡа айыҡ ҡараш менән һуғарылған халыҡсан-демократик идеялар, социаль мотивтар, реалистик һүрәтләү алымдары көндән-көн киңерәк урын алған. Башҡорт халҡы үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы осорҙа уның тормошон һәм яҙмышын шаҡтай киң һәм дөрөҫ сағылдырған шәжәрәләр, батшаларға, төрлө түрәләргә адресланған ялыу-үтенес хаттары, атап әйткәндә, 1755 йылғы ихтилал етәксеһе Батырша Ғәлиевтең йөкмәткеһе һәм формаһы менән повесть характерын алып киткән күләмле хаты ише тарихи-әҙәби ҡомартҡылар күпләп барлыҡҡа килгән. Яҙма әҙәбиәттең XII–XIII быуаттар сиктәрендә Ҡол Ғәли, XIV быуатта Сәиф Сараи, XVIII быуатта Салауат Юлаев, XIX быуатта Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ризаитдин Фәхретдинов, XX быуат башында Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Дауыт Юлтый, Афзал Таһиров, Сәйфи Ҡудаш, Сафуан Яҡшығолов, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Закир Һаҙи, Ғәбделрәүеф Ниязбаев кеүек алдынғы ҡарашлы шағирҙары, прозаиктары һәм драматургтары күтәрелеп сыҡҡан. Үҙҙәренең әҫәрҙәрендә улар заманының ҡатмарлы тормошон, алдынғы ҡараштарын, халыҡ яҙмышын, уның уй-ынтылыштарын образлы сағылдырғандар. Әҙәбиәтебеҙҙең тарихи үткәнен байҡағанда, беҙ иң беренсе сиратта үҙ заманында ла, хәҙер ҙә йәмғиәттең алға китешенә, кешеләрҙең аң-белеме, рухи донъяһы үҫешенә булышлыҡ иткән ана шундай әҫәрҙәрҙе өйрәнеүҙе күҙ уңында тоторға тейешбеҙ.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Нимә ул сәнғәт? 2. Ни өсөн художестволы әҙәбиәтте тормош дәреслеге һәм кеше тураһындағы ғилем тигәндәр? 3. Художестволы әҙәбиәттең фәндән айырмаһы нимәлә? 4. Художестволы образ һәм образлылыҡ төшөнсәләрен нисек аңлайһығыҙ? 5. Ни өсөн художестволы әҙәбиәтте һүҙ сәнғәте тип йөрөтәләр? Уның төп үҙенсәлектәре нимәнән тора? Сәнғәттең башҡа төрҙәренән художестволы әҙәбиәттең төп айырмаһы нимәлә? 6. Әҙәбиәттең ижтимағи әһәмиәте ниҙә? 7. Художестволы әҙәбиәттең халыҡсанлығын нисек аңлайһығыҙ? 8. Яҙыусының һәр әҫәре халыҡсан буламы, халыҡсанлыҡҡа өлгәшеү уға нисек бирелә? 9. Әҙәбиәттең халыҡсанлығы менән синфилыҡ араһында ниндәй бәйләнеш бар? Уның әҙемтәләре хаҡында фекер алышығыҙ. 10. Художестволы әҙәбиәттәге халыҡсанлыҡтың төп дөйөм һыҙаттары тураһында һөйләгеҙ. 11. Нимә ул әҙәби мираҫ? Әҙәби мираҫҡа дөрөҫ ҡараш ниҙән тора? Әҙәби ҡомартҡыларҙың әһәмиәте нимәлә?

# ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

Беҙ барыбыҙ ҙа сабый саҡтан халыҡ ижады йоғонтоһон кисереп үҫәбеҙ. Сәңгелдәктә ятҡан саҡтарыбыҙҙа уҡ әсәйҙәребеҙ беҙгә бишек йырҙарын йырлай. Әҙ генә үҫә төшкәс, олораҡтар әкиәттәр һөйләй; хәреф таный башлағас, уларҙы үҙебеҙ уҡыйбыҙ, йә булмаһа, әкиәттәр, легенда-риүәйәттәр, эпостар буйынса эшләнгән йәнһүрәттәр ҡарайбыҙ. Мәктәпкә барғас, халыҡ ижады әҫәрҙәрен дәрестә өйрәнәбеҙ. Бишенсе – һигеҙенсе кластарҙа һеҙ башҡорт халыҡ ижады жанрҙарының айырыуса киң таралған өлгөләре менән таныша килдегеҙ. Ә быйыл, фольклорҙы һүҙ сәнғәтенең бер мөһим тармағы булараҡ тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырыу өсөн, уның төркөмдәрен, төрҙәрен һәм жанрҙарын яңынан бер юлы иҫкә төшөрәсәкбеҙ.

Халыҡ ижадының киң һәм тар мәғәнәләре бар. Борон-борондан халыҡ араһында, үҙҙәренең төп эшмәкәрлектәренән тыш, һәүәҫкәр ижад менән шөғөлләнгән үҙешмәкәр һөнәр эйәләре күп булған. Берәүҙәр үҙҙәренең оҫта ҡулы менән дан алған: йәшәгән йортоноң тәҙрә йөҙлөктәрен, кәрнизен, ҡыйығын, ҡапҡаһын, рәшәткәләрен күҙҙең яуын алырҙай итеп семәрләп ҡуйған; төҫлө металдарҙан йәки аҫыл таштарҙан гүзәл заттар өсөн биҙәүестәр яһаған; ағастан һандыҡ, ултырғыс, шкаф кеүек йорт йыһаздарын һис кемдекенә оҡшамағанса һоҡланғыс итеп эшләп ултыртҡан; кейем-һалымды ҡурсаҡтай килешле итеп теккән; сигеү-нағышлау эштәрен күңел биреп, күҙ нурҙарын йәлләмәй башҡарған.

Икенселәре һүрәт төшөрөргә әүәҫ булған, төрлө материалдарҙан кеше һындары, һәйкәлдәр эшләй белгән; үҙәкте өҙөрлөк моңло итеп көй сығара алған; өҙә баҫып һынсыл итеп бейегән; һоҡланғыс тауышы менән тыңлаусыларҙы хайран ҡалдырған; халыҡты йыр-бейеүгә, нәфис һүҙ һөйләүгә ойоштора белгән, сәхнәләрҙә тетрәткес йә уйын-көлкөлө тамашалар – театрҙар ҡуйған. Ошо һөнәрҙәрҙең тәүге төркөмө – «халыҡтың матди ижады», ә икенсеһе «сәнғәт ижады» тип аталған. Уларҙың икеһе

лә рухи-эстетик йөкмәткеһе менән кешеләрҙә ысын күңелдән һоҡланыу тойғоһо, ҡыуанысლы кисерештәр уятҡан.

Халыҡтың сәнғәт өлкәһенә ҡараған ижадындағы һөнәрҙәр араһында һүҙ сәнғәте айырыуса мөһим урын биләй. Мәктәптә халыҡ ижады тураһында һүҙ йөрөткәндә, беҙ, беренсе сиратта, тап ошо ауыҙ-тел ижадын, икенсе төрлө әйтһәк – фольклорҙы күҙ уңында тотабыҙ. Сөнки ул бөтә халыҡтарҙа ла юғарыла телгә алынған башҡа төр үҙешмәкәр һөнәрҙәргә ҡарағанда киңерәк таралған; профессиональ һүҙ сәнғәтенең – яҙма әҙәбиәттең һәм авторлы ауыҙ-тел әҙәбиәтенең (йыраууҙар, сәсәндәр ижадының) нигеҙе, шишмә башы булып торған.

Бик боронғо дәүерҙә, әле яҙма барлыҡҡа килмәгән замандарҙа, хикмәтле, кинәйәле һүҙ оҫталығы тәбиғәттән бирелгән берәй кеше шиғри һүҙ әйтһә йәки уны моңға һалып көйләп тә бирһә, әгәр ул башҡаларҙың да күңеленә ятышлы була ҡалһа, шунда уҡ отоп алып таратҡандар. Телдән телгә йөрөй торғас, әҙ-әҙләп булһа ла үҙгәрештәргә дусар ителгән, шымартыла барған. Күпмелер ваҡыттан һуң тәү башлап сығарыусыһының исеме бөтөнләй онотолған, уның әйткән һүҙҙәре, сығарған көйө күмәк кешенең ижад емеше рәүешен алып, халыҡтыҡына әйләнеп киткән. Шулай итеп, телдән сығарылып, коллектив ижадҡа әүерелеп, халыҡтың уй-ҡараштарын сағылдырған һәм телдән телгә таралып йөрөгән әҫәрҙәр «халыҡтың ауыҙ-тел ижады», йәғни «фольклор» тип атала.

Һүҙ сәнғәтенә ҡараған халыҡ ижады ике ҙур төркөмгә бүленә: йола фольклоры һәм йоланан тыш фольклор. Тәүгеһе – халыҡтың бик борондан килгән милли һыҙатлы ғөрөф-ғәҙәттәренә, диненә, йәшәү рәүешенә бәйле ижад. Икенсеһе – ябай ғына итеп әйткәндә, шулай уҡ элекке замандарҙан бирле быуындан быуынға күсеп, йәшәп килгән халыҡ әҙәбиәте. Ул да, яҙма әҙәбиәттәге кеүек үк, әҫәрҙәренең күләменә, йөкмәткеһенә һәм формаһына ҡарап эпик, лирик, драматик төрҙәргә бүленә. Быларҙан тыш, икенсе төркөмгә халыҡтың афористик һүҙ оҫталығына – телмәр хикмәттәренә ҡараған ижад һәм балалар ижады ла инә. Башҡорттарҙа фольклорҙың драматик төрө ныҡлап үҫешмәгән, ә балалар ижады әлегә тейешле кимәлдә өйрәнелмәгән.

### Йола фольклоры

Йола фольклоры, һис һүҙһеҙ, халыҡ йолалары менән бергә тыуған. Ә улар бик борондан, кешеләр донъяны танып белә башлағандан уҡ барлыҡҡа килә башлаған. Башҡорт халҡы йолаларға бик бай. Үрҙә әйтелгәнсә, йолалар тормоштоң төрлө өлкәләренә үтеп ингән. Шуға ҡарап, йола шиғриәте лә төрҙәргә, жанрҙарға бүленә. Халыҡ ижадының был тармағы – синкретик йөкмәткеле; икенсе төрлө әйткәндә – ул саф һүҙ сәнғәте генә түгел, уны йоланың

үҙенән айырып алып ҡына ҡарап булмай. Тимәк, йола шиғриәте беҙгә йолаларҙың үҙҙәре тураһында ла бай мәғлүмәт бирә.

Башҡорт халҡының борондан йәшәп килгән, фольклорсы ғалимдар тарафынан яҙып алынған, өйрәнелгән йолалары өс ҙур өлкәгә ҡарай: хөрәфәттәр; тәбиғәт йолалары һәм байрамдар; ғаилә, көнкүреш, туй йолалары. Уларҙа һүҙ сәнғәте сифатында ҡатнашҡан шиғри телмәр төрлө нисбәттә урын ала. Әйтәйек, хөрәфәттәрҙең серле заттарға ышаныу, тәбиғәттең шифалары, дауалары кеүек төркөмдәренә ингән йолаларҙа шиғри текстар бөтөнләй юҡ; мал-тыуарҙы имләү, күк есемдәренә бәйле юрау кеүектәрендә бик әҙ генә осрай, ә инде им-томдар, арбауҙар, теләк-һынамыштар, ырым-юрауҙар, алғыш-ҡарғыштар төркөмдәрендә ҙур ғына урын биләй. Был күренештең сәбәбе яп-ябай. Ауыҙ-тел һүҙ сәнғәтенең башында борон баҡсылар торған. Улар им-томсо, табип, күрәҙәсе, йырсы, көй сығарыусы, һүҙ оҫтаһы кеүек төрлө һөнәргә эйә булған. Бигерәк тә һүҙ ҡөҙрәтен, уның кешеләргә тәьҫир итеү көсөн оҫта һәм йыш файҙаланғандар. Йәнһеҙ әйберҙәргә (тәбиғәт, күк есемдәренә) йәки ысынбарлыҡта булмаған заттарға (аждаһа, ен, пәрей, һыу инәһенә) ҡарата уны ҡулланыуҙың кәрәге теймәгән, ә им-том, арбау, дауалау, кемдәрҙелер йыуатыу, күңелен күтәреп ебәреү, яңылыш аҙымдан ҡурсалап алып ҡалыу өсөн бик ярап ҡалған. Мәҫәлән, нимәнәндер ҡурҡҡан балаға ҡот ҡойоуҙа әйтелгән шиғри телмәрҙе алайыҡ:

Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом!
Илдән осһаң, илдән кил,
Эттән осһаң, эттән кил,
Малдан осһаң, малдан кил,
Ҡоштан осһаң, ҡоштан кил,
Һыуҙан осһаң, һыуҙан кил,
Кешенән осһаң, кешенән кил!

Был юлдарҙы тыңлаған бала, ҡоттоң килеренә ышанып, үҙен ышаныслыраҡ, ҡыйыуыраҡ тота башлай.

Икенсе һәм өсөнсө өлкәләргә ҡараған йолалар туранан-тура кешенең тормош-көнкүрешенә ҡайтып ҡала. Тәбиғәт, йыл миҙгелдәренә бәйле байрамдар, йыйындар, хеҙмәт, кәсеп, яу ҡайтарыу йолалары, төрлө өмәләр, шулай уҡ кеше ғүмеренең өс ваҡиғаһына – бала тыуыу, өйләнеү, һуңғы юлға оҙатыуға ҡағылышлы йолалар, йыр-бейеү, күңел асыу, таҡмаҡ әйтешеү, сеңләү, һыҡтау кеүек төрлөсә йөкмәткеле шиғри һүҙ менән бергә үткәрелә. Йола фольклорының иң ҙур өлөшө ошондай саралар арҡаһында тыуған. Бигерәк тә туй йолалары йыр-таҡмаҡҡа, әйтешкә бай. Ҡыҙ күҙләүҙән, яусы ебәреүҙән, кәләш әйттереүҙән

башлап, Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә үҙ йолалары буйынса бер нисәшәр көн дауам иткән туйҙарҙың һәр бер эпизодына тиклем (туй ҡаршылау, ҡоҙа төшөү, ҡыҙ йәшереү, кейәү күреү, йыуаса таратыу, туй табыны һ. б.) йырҙар сығарылған. Бына табын йырҙарынан бер миҫал:

Туҫтаҡҡайым ғына төбө алтын,
Төбө алтын да түгел, сите алтын.
Ошо ғына торған кейәүемдең
Бер-бер һүҙкәйҙәре мең алтын.

**Эпос**

Йоланан тыш, фольклорҙың эпик төрө (эпос), яҙма әҙәбиәттәгесә, хәл-ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе һөйләп биреүгә ҡорола. Башҡорт халыҡ ижадында уның төп жанрҙары – ҡобайырҙар, иртәктәр (эпостар), әкиәттәр, легендалар, риүәйәттәр, көләмәстәр. Шиғри формала ижад ителһә лә, бәйеттәрҙең дә бер өлөшө эпик төргә ҡарай.

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, «эпос» һүҙен ике урында йәйә эсендә бирҙек. Был термин әҙәбиәт ғилемендә һәм фольклористикала ике мәғәнәлә йөрөй. Киңерәк мәғәнәлә әҙәби һәм фольклор әҫәрҙәре төрөн аңлата: эпос, лирика, драма. Икенсе, тарыраҡ мәғәнәһендә – шул эпик төрҙөң «эпос» тип исемләнгән бер жанры. Бөгөнгө көндә фольклорсы ғалимдар жанр мәғәнәһендәге эпостың хронологик-тематик принцип буйынса түбәндәге йүнәлештәрен билдәләй:

1. Боронғо ырыу-ҡәбилә дәүерен сағылдырған, мифологияға нигеҙләнгән йәки мифик уйҙырма элементтары менән һуғарылған эпостар. Бында «Урал батыр», «Аҡбуҙат» героик ҡобайырҙары, шулай уҡ ошо дәүерҙең социаль-көнкүрешенә, ғаилә тормошона бәйле «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡара юрға», «Ҡуңырбуға», «Аҡһаҡ ҡола» кеүек әҫәрҙәр инә.

2. Урта быуаттарҙа халҡыбыҙҙың монголдар яуынан алдағы тормош-көнкүрешен, күрше халыҡтар менән мөнәсәбәттәрен, ырыу-ара һәм ғаилә хәлдәрен яҡтыртҡан эпостар: «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Күсәк бей» һ. б.

3. Монгол яуы һәм унан һуңғы феодаль үҫеш осоро тарихи-героик һәм социаль-көнкүреш поэмалары: «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Ек Мәргән», «Буҙйегет» һ. б.

4. Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң башҡорт ихтилалдарына арналған героик эпостар: «Юлай менән Салауат», «Ҡарас менән Ҡараһаҡал», «Байыҡ Айҙар сәсән» һ. б.

Фольклористикала «эпик дәүер» тигән төшөнсә бар. Ул эпостар ижад ителгән дәүерҙе аңлата. Уның оҙонлоғо төрлө халыҡтарҙа төрлөсә булыуы мөмкин. Башҡорт халыҡ ижадында эпик дәүер, күреүебеҙсә, бик боронғо замандарҙан алып XVIII быуат

аҙағына тиклем һуҙыла. Беҙ эпостарға бай булыуыбыҙ менән ғорурлана алабыҙ. Улар онотолмаған, халыҡ хәтерендә быуаттар буйы йәшәп килгән, сөнки ошо эпик әҫәрҙәрҙе ижад иткән мәшһүр һүҙ оҫталарыбыҙ кешелектең бер ҡасан да иҫкермәй торған мәңгелек проблемаларын күтәреп сыҡҡан: йәшәү һәм үлем, яҡты донъяла йәшәү мәғәнәһе, мөхәббәт, ата-әсә һәм балалар мөнәсәбәте, кешелектең әхлаҡ ҡағиҙәләре һ. б. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең эпостарыбыҙҙа башҡорттарға, уларҙың йәшәү рәүешенә хас һыҙаттар ярылып ята. Беренсе сиратта изге төйәгебеҙ Урал, ожмахтай тәбиғәтебеҙ – урман-тауҙарыбыҙ, далаларыбыҙ, йылға-күлдәребеҙ, кейектәребеҙ, яугир ир-егеттең айырылмаҫ юлдашы ат, малтыуарҙар образы сағылдырылған, башҡорттарҙың үҙҙәренә генә хас тормош-көнкүреш һыҙаттары һынландырылған. Эпостарҙың телмәре, бер яҡтан, халыҡтың йәнле һөйләү теле менән аңлайышлы, ябай итеп бирелгән; икенсе яҡтан, ул сағыу һүрәтләү сараларына, айырым юлдары мәҡәл-әйтемдәргә торошло тәрән, кинәйәле мәғәнәле фекерҙәргә, поэтик образлылыҡҡа ифрат бай. Уларҙың ошо сифаттары халыҡ ижадының бүтән жанрҙарына, яҙма әҙәбиәттең барлыҡ төрҙәренә йоғонто яһаған.

**Ҡобайыр**

Ҡобайырҙың да, эпос кеүек үк, ике мәғәнәһе бар. Буталмаҫ өсөн, уларҙы асыҡлап үтәйек. Әгәр эпос әҙәби төр ҙә, жанр мәғәнәһен дә аңлатһа, ҡобайырҙың ике мәғәнәһе лә тик жанрға ғына ҡағыла. Беренсе мәғәнәһен үрҙә күреп үттек: эпос жанрының бер төркөмөн ошо исем менән йөрөтәләр. Бынан тыш, ысын мәғәнәһендә ҡобайыр тип аталған үҙ аллы жанр ҙа бар. Эпос төшөнсәһендәге ҡобайыр, нигеҙҙә, хәл-ваҡиғаларға ҡоролһа, саф ҡобайыр жанры авторҙың – йырауҙың йә сәсәндең халыҡҡа әйтер һүҙен – мөрәжәғәтен, фекерҙәрен, уй-кисерештәрен, хистәрен, данлауын, фашлауын тәшкил итә.

Ҡобайыр – халыҡтың яратҡан, инанып тыңлаған жанры, тормошто фәлсәфәүи танып белеү кодексы, тиһәк тә ярай. Ҡобайырҙарҙың барлыҡ репертуары ла профессиональ ижадсы – йырау йәки сәсән тарафынан сығарылған. Заманында уларҙың конкрет авторҙары булған, тик исемдәре беҙҙең көндәргә килеп етмәгән. Был жанр, әйтеш кеүек үк, туранан-тура халыҡ, тыңлаусы алдында тыуа. Уны һәр кем, хатта урта ҡул һүҙ оҫтаһы ла сығара алмай. Авторҙың заманға, уның ҡатмарлы ағышына, хәл-ваҡиғаларына, халыҡтың көнитмешенә, шәхестәрҙең яуҙарҙағы батырлыҡтарына, эш-ҡылыҡтарына баһа бирерлек, аҡыл өйрәтерлек данлы исеме, абруйы булған һүҙ оҫтаһы ғына халыҡҡа төбәп өндәшергә үҙен хаҡлы һанай алған. Шулай булмаһа, тыңлаусы уны ҡабул итмәй, һүҙенә ҡолаҡ һалмай. Был жанрҙың тематикаһы көнүҙәк, заманы менән тығыҙ бәйле;

даирәһе киң, инде бына бөгөн осона сығып ҡуймаһаң, янып барғандарынан алып мәңгелектәренә тиклемде үҙ эсенә ала. Ҡобайырҙа, эпостағы кеүек үк, мәңгелеге лә бөгөнгө: һүҙ үҙ заманының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, әхлаҡ-этик нормалары, тормош-көнкүреш тәртиптәре, уларға тоғролоҡ ҡағиҙәләре хаҡында бара. Ошоларҙы иҫәпкә алып, ҡобайырҙарҙы өс ҙур төркөмгә бүлеп йөрөтәләр.

Тыуған ил һәм батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар изге төйәгебеҙ Урал, уның гүзәл тәбиғәте һәм уларҙы сит баҫҡынсыларҙан һаҡлау мәсьәләләре менән бәйле. Бындай әҫәрҙәр борондан башлап һәр дәүерҙә сығарыла килгән. «Сура батыр», «Сүкем батыр», «Баязит батыр», «Аҡшам батыр», «Түлгән батыр», «Салауат батыр», «Ай, Уралым, Уралым», «Иҙел ер», «Урал тигән илем бар», «Уралып ятҡан Уралда» тип исемләнгән ҡобайырҙар ошо төркөмгә инә. Тәүгеләре, йөкмәткеләренә ҡарағанда, монгол яуы, нуғай урҙаһы замандарында уҡ сығарылған. «Салауат батыр» – ҡобайыр жанры ижад ителгән иң һуңғы дәүер емеше. Ҡасан ижад ителһәләр ҙә, батырҙар образы ҡобайырҙарҙа уртаҡ сифаттары менән кәүҙәләнә. Мәҫәлән:

Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине, –

тигән юлдар XVI быуатта Күсем хан яуына ҡаршы торған Сүкем батырҙан алып Салауатҡа тиклем тағы ла бер нисә әҫәрҙә ҡабатлана. Бындай ҡабатлауҙар эпостарҙа, ҡобайырҙарҙа йыш осрай, уларҙы бер йырауҙың йәки сәсәндең сығармаһынан икенсеһенең күсереп алыуы тип аңларға ярамай. Ғалимдар төрлө әҫәрҙәрҙәге ошондай ҡабатлауҙарҙы «дөйөм, уртаҡ урындар», «поэтик клишелар» тип атай. Танылған һүҙ оҫталары араһындағы тәртип буйынса, борондан формалашҡан ошо уртаҡ ҡалыптарҙы уларҙың һәр ҡайһыһы ҡулланыу хоҡуғына эйә булған.

«Сура батыр», «Аҡшам батыр», «Түлгән батыр» ҡобайырҙары беренсе затта сығарылған, йәғни батырҙарҙың үҙҙәренең исеменән әйтелә. Был күренеш тә – тәбиғи. Боронғо замандарҙа хәрби юлбашсылар йыш ҡына дошмандың башлығына шиғри һүҙ менән ҡаршы торған; йә булмаһа, хәл иткес алыш алдынан ике яҡтың яугир һүҙ оҫталарын көрәштергән. Ҡайһы яҡ оҫтаһы ҡаршыһындағы ир-атты һүҙ менән еңеп түбәнһетә – шул яҡ, ҡағиҙә булараҡ, яуҙа ла еңеп сыҡҡан. Үҙҙәренең исеменән ҡобайыр әйткән әлеге батырҙар ҙа дошманға ҡаршы көрәш сәме менән яна. Түлгән батыр үҙенә:

Яйыҡ ҡайҙа, яй ҡайҙа,
Йәйелеп ятҡан мал ҡайҙа?..

Шуны юллап барамын, ау,
Дошмандан үс аламын, –

тигән бурыс ҡуйһа, Аҡшам батыр шундай уҡ бурысты үтәргә халҡына вәғәҙә бирә:

Яуҙан илемә даным ҡайтыр,
Елеп менгән атым ҡайтыр.
Дошмандарым боҫоп ятыр,
Атым минең Аҡшам батыр.

Был төркөмдәге ҡобайырҙарҙың Тыуған илгә арналғандары, беренсе сиратта, Уралдың һәм Иҙел, Яйыҡ ерҙәренең тереклеккә бай тәбиғәтен һоҡланып, ғорурланып тасуирлай, уңған кешеләрен – уларға тормош биргән ата-әсәне («Атам кейәү булған ер, әсәм килен булған ер...»), һылыу ҡыҙҙарын, батыр ирҙәрен данлай; ошо батырҙарҙы илде дошмандан һаҡларға саҡыра:

Аҡбуҙаттай ат менеп,
Ыласындай тиҙ елеп,
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Кәрәк әйберен юлға алып,
Ил-йорт менән хушлашып,
Яуға ҡаршы яу сабыр
Батыр-батыр ирҙәр бар.

Йыйындарҙа, байрамдарҙа йәки башҡа төрлө сәбәптәр менән халыҡ күпләп йыйылған урындарҙа абруйлы һүҙ оҫталары, тормош-көнкүрешкә бәйләп, әҙәп-әхлаҡ, тәрбиә мәсьәләләрен күтәреп сыҡҡан. Улар ата-әсәләргә, йәштәргә төбәп, халҡыбыҙҙың быуаттар буйы йәшәп килгән күркәм сифаттарын ҡәҙерләп һаҡларға, киләһе быуындарға еткерергә саҡырған. Сәсәндәрҙең кәңәш биреүгә, нәсихәткә ҡоролған ошондай сығармаларын дидактик ҡобайырҙар тип атайҙар. Беҙҙең көндәргә килеп еткән дидактик ҡобайырҙар репертуары бик бай; күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» китаптарына индерелгәндәре лә ете тиҫтәнән ашыу тексты тәшкил итә. Уларҙың «Ай, Уралтау, Уралтау», «Ишет быны ҡартыңдан», «Бейек тауҙың үлгәне», «Был донъяла тиңе юҡ» тип аталғандары һәм «Йырау һүҙе» тигән шәлкемгә ингәндәре урта быуаттарҙа сығарылған; айырым өҙөктәре Һабрау йырауҙың, Ерәнсә сәсәндең әҫәрҙәрендәге юлдарға тап килә. Күрәһең, уларҙы тәү башлап ошо әҙиптәр ижад иткәндер ҙә, ваҡыттар үтеү менән, әкренләп халыҡ ижады репертуарына күскәндәрҙер. Был ҡобайырҙарҙа, өгөт-нәсихәт менән бергә, Тыуған ил, уны дошмандан һаҡлау мәсьәләләре ҡуҙғатыла, башҡорт ерҙәренә ҡыҙыҡҡан сит хандарға буйһонмаҫҡа саҡырыла, Уралды һаҡларға әҙер торған батырҙар өлгө итеп ҡуйыла:

Шоңҡар һөйгән һунарсы
Ҡош сөйҙөрмәй сыҙармы?
Ирмен тигән ир-егет
Ат уйнатмай тынырмы?
Урал тигән ере бар,
Күҙ нурындай иле бар,
Батыр башын эйерме?

Дидактик төркөмгә ҡараған ҡобайырҙарҙың ҡалғандары ла эпос дәүеренән уҙмай, йәғни иң аҙаҡҡылары XVIII быуат тирәһендә сығарылған. Уларҙа әҙәп-әхлаҡҡа, тәрбиә биреүгә ҡағылышлы күп ҡырлы өлкәләр солғап алынған. Сәсән һүҙе тыңлаусы зиһененә үтемлерәк инеп ултырһын, хәтеренә ғүмерлеккә уйылып ҡалһын өсөн ҡапма-ҡаршы мәғәнәле образдар, күренештәр, фекерҙәр йыш ҡына йәнәш ҡуйып бирелгән. Репертуар мул булғанға, бындай йәнәшәлектәр ҙә бик күп: яҡшылыҡ менән яманлыҡ, яҡшы азамат менән кире азамат, бай – ярлы, егет – ҡыҙ, дуҫ – дошман, аҡыллы – иҫәр, һөнәрле – булдыҡһыҙ, уңған ҡатын – һәлкәү ҡатын, дан – хурлыҡ, батырлыҡ – ҡурҡаҡлыҡ, ил даны – ир даны, арғымаҡ – ҡолон, дөйә – һарыҡ, ҡояш – болот, көн – төн, йәй – ҡыш, ут – һыу һ. б. Күренеп тора, һүҙ оҫталары ҡапма-ҡаршылыҡты төрлө өлкәләрҙән тапҡан. Кешеләр ҙә, тәбиғәт күренештәре лә, хайуандар донъяһы ла, ситләтелгән (абстракт) төшөнсәләр ҙә авторҙарҙың иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Шулай ҙа, бөтә репертуарҙы күҙ уңында тотҡанда, кешеләргә ҡағылышлылары мулыраҡ урын алған. Ҡалғандары ла, кинәйәле мәғәнә һалынып, кеше булмышын тулыраҡ асыуға хеҙмәт итә. Түбәндәге өҙөктәр – бының сағыу миҫалы:

Арғымаҡтың яҡшыһы
Аҙ утлар ҙа күп юшар,
Ир-егеттең яҡшыһы
Аҙ һөйләр ҙә күп эшләр.
...Ололарҙы ололау –
Яҡшылыҡтың билдәһе,
Кеселәрҙе кеселәү –
Кешелектең билдәһе.

Йыраү, сәсән кеүек һүҙ оҫталары халыҡ араһында абруйлы аҡыл эйәһе булараҡ та танылыу тапҡан. Улар йыш ҡына ил етәкселәренә, хәрби юлбашсыларға, ырыу башлыҡтарына кәңәштәр бирер булған. Башлыҡ исемен йөрөткән вазифалы уҙамандар киҫкен мәлдәрҙә, аҡыллы кәңәштәргә ҡытлыҡ кисергән ваҡыттарҙа һүҙ оҫтаһын үҙҙәренең йортонда тотҡан, уның һүҙенә ҡолаҡ һалып идара иткән. Ил башлығы йортонда йәшәгән

һүҙ оҫтаһы хужаһының ихтыярынан азат булған, уға кәңәш биргәндә, халыҡ массалары мәнфәғәттәренән сығып эш иткән. Аҡыл эйәһе – ул философ, шуға күрә сәсәндәр репертуарында фәлсәфәүи ҡобайырҙар ҙа бар. «Бер тигәс тә ни яман?», «Ил тигәндең кеме юҡ», «Ил ҡәҙере – ир ҡәҙере», «Был донъяла тиңлек юҡ» кеүек әҫәрҙәр ошо тематик төркөмдө тәшкил итә. Тәүгеһе әйтеш формаһына ҡоролған, шул ҡалыпты файҙаланып, йәш быуынды әйтеш, ҡобайыр әйтергә өйрәтеү өсөн уңайлы булған. Бында теләһә ниндәй ирекле темаға мөрәжәғәт итергә мөмкин. Ысынлап та, заманында өс вариантта яҙып алынған был ҡобайырҙың тематикаһы бик киң: үрҙә ҡаралған төркөмдәрҙәге кеүек, Тыуған ил, уны дошмандан һаҡлау кеүек мәсьәләләрҙән башлап, халыҡ тормошоноң төрлө өлкәләренә иғтибар йүнәлтә. Был ҡобайырҙа һорауҙарға бирелгән яуаптар һандарҙың тәүге өнө менән оҡшаш яңғыраштылыҡты талап иткәнгә күрә, йәнәш килгән фекерҙәр бер-береһенә бөтөнләй бәйле булмаҫҡа, төрлө өлкәгә ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән:

– Бер тигәс тә ни яман?
– Беҙҙең өсөн бей яман.
– Ике тигәс тә ни яман?
– Илһеҙ ҡалған ир яман.
– Өс тигәс тә ни яман?
– Өлгөһөҙ бескән тун яман…

Аҙаҡҡы ике юлына иғтибар итһәк, сәсәндең ябай ғына һүҙҙәр менән ғәжәп тәрән мәғәнәле фекер әйткәнен, һәр эшкә тотонғанда алдан уйлап, еренә еткереп башҡарырға кәңәш биреүен күрәбеҙ. Фәлсәфәүи ҡобайырҙарҙа ошоға оҡшаш хикмәтле юлдар ифрат күп осрай. «Ил тигәндең кеме юҡ» ҡобайыры – Байыҡ Айҙар сәсәндең Салауатҡа әйткән телмәренән алынған өҙөк. Сәсәндәр ижадынан халыҡ күңеленә айырыуса ятышлы юлдар шулай фольклор репертуарына инеп киткән осраҡтар ҙа була. «Ил ҡәҙере – ир ҡәҙере», «Был донъяла тиңлек юҡ» әҫәрҙәре социаль-көнкүреш мәсьәләләре хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Һүҙ оҫталары бында күберәк төрлө ҡатлам, төрлө йәштәге, төрлө һөнәр өлкәһендәге кешеләр хаҡында һүҙ алып бара.

Тинтәк аҡыл – ямандыр:
Ил ҡәҙерен белмәҫ.
Тинтәк ҡатын – ямандыр:
Ир ҡәҙерен белмәҫ.
Күсеп-ҡунып йөрөмәгән
Ер ҡәҙерен белмәҫ;
Ҡунһа, күсә белмәгән
Йорт ҡәҙерен белмәҫ.

**Әкиәттәр**

Халыҡ ижадының эпик төрөнә ҡараған эпос һәм ҡобайыр жанрҙарында шиғри телмәрҙең өҫтөнлөк иткәнен күрҙек. Ошо уҡ төрҙөң башҡа жанрҙары – әкиәт, легенда, риүәйәт, көләмәс – сәсмә телмәр, йәки проза формаһында ижад ителә. Эпик проза, үҙ сиратында, әкиәт прозаһына һәм әкиәттән тыш прозаға бүленә.

Әкиәт – башҡорт халыҡ ижадының иң боронғо һәм иң киң таралған жанрҙарының береһе. Эпосты, ҡобайырҙы халыҡҡа профессиональ һүҙ оҫталары ғына еткерә алһа, әкиәт – ябайыраҡ жанр. Уны һүҙмә-һүҙ яттан хәтерҙә ҡалдырыу, башҡаларға шул килеш түкмәй-сәсмәй еткереү мотлаҡ түгел; йөкмәткеһен белһәң, үҙ һүҙҙәрең менән һөйләп бирә алаһың. Шуға күрә әкиәткә коллектив ижад үҙенсәлектәре ныҡыраҡ хас, ул телдән телгә тиҙерәк тарала, үҙгәрештәргә еңелерәк дусар була. Бер үк сюжеттың бер нисә вариантҡа тармаҡланыуы йәки, киреһенсә, ике йәки бер нисә сюжеттың ҡушылып китеүе мөмкин. Әкиәттең иң тәү башлап сығарған кешеһен билдәләп булмай. Борондан йәшәп килгән жанр булараҡ, әкиәт халыҡтың шул замандарҙағы аң кимәлен, йәшәү рәүешен, донъяны танып белеү үҫешен сағылдыра. Улар ошо жанрҙың тематикаһында бик асыҡ урын тапҡан. Башҡорт халыҡ әкиәттәрен фольклорҙы өйрәнеүсе ғалимдар дүрт ҙур тематик төркөмгә бүлә: 1) батырҙар тураһындағы әкиәттәр; 2) тылсымлы әкиәттәр; 3) хайуандар тураһындағы әкиәттәр; 4) тормош-көнкүреш әкиәттәре.

Рус ғалимдары А. Г. Бессонов, Н. К. Дмитриев, В. М. Жирмунский башҡорттарҙың батырҙар тураһындағы әкиәттәренең сюжетында, поэтик үҙенсәлектәрендә, геройҙарының эш-хәрәкәтендә һәм булмышында героик эпостар менән яҡын оҡшашлыҡтар барлығын күрәләр. Әкиәтте әкиәт иткән төп үҙенсәлектәр – унда хәл-ваҡиғалар барған урындарҙың, геройҙар хәрәкәт иткән ваҡыттың билдәле булмауы. Әгәр «Аҡбуҙат» эпосында Мәсем хан һәм ул йәшәгән дәүерҙе күҙ алдына килтерә алһаҡ, хәҙерге Бөрйән районындағы Тарауыл аҡланын, Йылҡысыҡҡан күлде осратһаҡ, «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да ысынбарлыҡтағы бер төркөм тарихи шәхестәрҙе күрһәк, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең береһендә лә быларҙы таба алмайбыҙ. Әкиәт батырҙарының донъяһы ер өҫтөндәге әҙәм аяғы баҫмаған, ябай кеше үтә алмаҫлыҡ ҡаршылыҡлы текә тауҙар, ҡара урмандар, төпһөҙ даръялар ғына түгел, зәңгәр күк тә, ер аҫты ла булырға мөмкин. Улар ошо донъяға тотҡарлыҡһыҙ үтеп инеп, ҡаршылыҡтарҙы төрлө юлдар табып еңеп сыға: сәмреғошҡа ултырып күккә менә, Һыуһылыуға эйәреп һыу аҫты батшалығына төшә, ер өҫтөндәге тотҡарлыҡтар ҙа батырҙарға бер ни тормай. «Алп батыр» әкиәтенең геройы яҡты донъяға, ташты

ярып, уның эсенән килеп сыға. «Яңғыҙаҡ батыр» әкиәтендә ҡош һымаҡ осоп килгән ғәскәрҙе Яңғыҙаҡ һауала ҡаршылап, яңғыҙы ҡыйрата; икенсе юлы һыу аҫтынан һөжүм иткән дошманды, йәйенгә әүерелеп йөҙөп барып, тар-мар итә. Батырҙарҙың көс-ғәйрәте, буй-һыны ғәҙәттәгенән ҡырҡа айырыла. Мәҫәлән: «Егет бик килбәтле, үҙе бик мөһабәт, ҙур кәүҙәле икән. Бармаҡтары беләктәй, ти, уның. Беләктәре бүрәнәләй, аяҡтары кәмәләй, яурыны яландай киң, кәүҙәһе имәндәй ныҡ», – тип һүрәтләнә Алп батыр.

Әлеге тематик төркөмдәр араһында тылсымлы әкиәттәр иң ҙур өлөштө тәшкил итә. «Тылсым» һүҙе тәбиғи булмаған, ысынбарлыҡҡа тап килмәгән мөғжизәле үҙенсәлек, төрлө хәүеф-хәтәрҙән һаҡлау көсө булған серле үҙенсәлек мәғәнәһен аңлата. Тылсымлы уйҙырма, әлбиттә, билдәле кимәлдә бөтә төр әкиәттәрҙә лә сағылыш таба. Ә тылсымлы әкиәттәрҙә ул барыһынан да күберәк урын ала, ваҡиғаларҙың киҫкен мәлдәрендә хәл иткес роль уйнай. Бындай төр әҫәрҙәрҙә ысынбарлыҡта булмаған ғәҙәттән тыш бәһлеүән, көслө геройҙар, аждаһа, дейеү, убырлы ҡарсыҡ, мәскәй әбей кеүек образдар йыш осрай; йәнлектәр кешесә һөйләшә, толпар ат ҡош кеүек оса, көҙгө киләсәкте күрһәтә, тараҡ әҙәм үткеһеҙ урманға әүерелә. Улар йыш ҡына ыңғай геройға ярҙамға килә, дошмандарға ҡаршылыҡ тыуҙыра. Башҡорт халыҡ ижады репертуарындағы тылсымлы әкиәттәр саф тылсымлы, тылсымлы-героик һәм тылсымлы-мажаралы тип аталған төркөмсәләргә бүленә. Уларҙың өсөһөндә лә изгелек менән яуызлыҡ көрәшә. Саф тылсымлы әкиәт геройҙары түбән ҡатламдан юғары ҡатламға күтәрелеүгә өлгәшә, әммә улар ваҡиғалар үҫешендә пассивлыҡ күрһәтеп, тылсым эйәләре ярҙамында ғына еңеп сығалар («Һонтай егете», «Сәфәр»). Тылсымлы-героик әкиәт геройҙары үҙ маҡсаттарына ирешеү өсөн башлыса тылсымға таяналар («Алтынҡойроҡ-көмөшьял», «Таҙ батыр»). Тылсымлы-мажаралы әкиәттәрҙең үҙәгенә зиһен, аҡыл менән ҡоралланған герой ҡуйыла һәм уларға героик һәм мажаралы йөкмәтке хас була. Герой көтөлмәгән ҡаршылыҡтарға осрай, уларҙы аҡыл, зиһен, хәйлә менән еңеп сыға («Әбйәлил», «Һаламбай», «Ҡарт менән дейеү», «Хәйләкәр»).

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә йәнлектәр, ҡоштар, ҡайһы бер осраҡта – балыҡтар кешеләргә хас сифаттарға эйә була: кешеләр кеүек уйлай беләләр, һөйләшәләр, бәхәсләшәләр, үҙ-ара конфликтҡа инәләр. Был төркөмсәгә ҡараған әкиәттәрҙең иң боронғолары тәүтормош кешеләренең ҡатмарлы донъя серҙәренә төшөнөргә, йәнлектәрҙе ҡулға эйәләштерергә тырышыу һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан. Ә һуңыраҡ инде кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ситләтелгән рәүештә биреү өсөн аллегория хеҙмәтен үтәгәндәр.

Башҡорттарҙың ожмах кеүек матур тәбиғәтле изге төйәге Урал борон-борондан төрлө йәнлектәргә, ҡош-ҡорттарға ифрат бай булған. Был яҡтарҙа йәшәгән халыҡ уларҙы өҙлөкһөҙ күҙәтеп, һәр ҡайһыһының холоҡ-фиғелен һәйбәт белгән. Өйрәтеүгә еңел бирелеүсән йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы халыҡ ҡулға эйәләштергән, улар йорт хайуандары, ҡош-ҡорттары булып киткәндәр. Кешеләр йорт-ҡураға зыян килтерерҙәй йыртҡыстарға, шулай уҡ ите ашарға, тиреһе эшкәртергә яраҡлы йәнлектәргә һунарға йөрөгән. Һунарсылыҡ башҡорттарҙың, һөнәрселек, малсылыҡ, игенселек, балыҡсылыҡ, умартасылыҡ кеүек үк, төп кәсептәренең береһе булған. Шуға ла Уралда үрсегән йәнлектәр башҡорт халыҡ ижадының төрлө жанрҙарында аллегорик образдар сифатында бик күп осрай. Улар эпостарҙа, ҡобайырҙарҙа, легенда-риүәйәттәрҙә, йырҙарҙа айырыуса йыш телгә алына. Ә әкиәт жанрында ҙур бер тематик төркөмдө тәшкил итә. Һәр бер йәнлек ниндәй ҙә булһа социаль төркөм вәкилен йә айырым кешенең характер һыҙатын кәүҙәләндерә. Төлкө – зирәк, ләкин мәкерле, хәйләкәр, башҡалар иҫәбенә йәшәргә тырышыусы йән эйәһе («Етем төлкө», «Балтасы төлкө», «Төлкө менән әтәс»); ҡуян – тырыш, эшсән, етеҙ, әммә ҡурҡаҡ, баҙнатһыҙ һәм бер ҡатлы («Ҡуян менән терпе»); айыу – тупаҫ, аңра («Төлкө менән айыу», «Ҡарт айыу менән төлкө», «Ас айыу, төлкө, егет»); бүре – яуыз, ҡомһоҙ («Бүре менән кәзә», «Һемәйгән бүре»). Көҙән, бурһыҡ, ишәк, эт, бесәй, терпе, бөркөт, ҡаҙ, әтәс, тауыҡ һ. б. йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың да әкиәттә төп тәғәйенләнеше бар. Һирәкләп булһа ла был традициянан ситләшеүҙәр ҙә осрап ҡуя. Мәҫәлән, башҡа бер йәнлек тә булдыра алмағанды ҡуян яңғыҙы башҡарып сыға («Ҡуян менән арыҫлан»).

Тормош-көнкүреш әкиәттәре объектив ысынбарлыҡты, кешеләрҙең йәмғиәттәге ҡатмарлы көнитмешен, үҙ-ара бәйләнешен социаль ҡатламдар, айырым характерҙар мөнәсәбәтен сағылдырыу рәүешендә бирә. Уларға йыш ҡына юмористик йәки сатирик пафос хас була. Ҡайһы саҡта әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙың барған урыны, ваҡыты теүәл күрһәтелә, ер-һыу атамалары, хатта айырым исемдәр телгә алына. Бындай осраҡта әкиәттәр легенда-риүәйәттәргә оҡшап китә («Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», «Ерәнсә батыр», «Әғзәм»). Жанр формаһы буйынса башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен ғалимдар хәл-ваҡиғаларҙы объектив хикәйәләүсе новеллистик, юмористик-сатирик һәм ғибрәтле әкиәттәргә бүлеп ҡарай. Ә тематикаға килгәндә, был төркөмгә ҡараған әкиәттәр ысынбарлыҡтың үҙе кеүек үк ҡатмарлы һәм күп яҡлы, шуға күрә тематик төркөмсәләргә лә бай. Бына шуларҙың айырыуса киң таралғандары:

– Зирәк кешеләр, аҡыл эйәләре, аҡыллы кәңәш тураһындағы әкиәттәр («Лоҡман Хәким», «Аҡыллы ҡарт менән ахмаҡ батша», «Ҡурайсы», «Өс ауыҙ һүҙ», «Уңғанлыҡ»).

– Мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо («Фәҡир кейәү», «Батша һайлау», «Балҡан таҙ»).

– Үтә үҙ һүҙлеләр тураһында («Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә», «Аҡыллы кейәү»).

– Нахаҡҡа рәнйетелеүселәр тураһында («Ғәжәп исемдәр», «Хажи ҡыҙы», «Яуыз ҡарт»).

– Мәкерле кире геройлы («Мәскәй», «Кеше һүҙе кеше үлтерә», «Ғәни сауҙагәр менән вәзир»).

– Ҡыйыу ҡыҙҙар менән ҡараҡтар тураһында («Ен ҡараҡтары», «Ҡырҡ ҡараҡ менән ҡыҙ», «Хәтирә»).

Бәләкәйҙән донъяны тиҙерәк танып белергә ынтылған зирәк балалар йыш ҡына ата-әсәләренә йәки олораҡ туғандарына әкиәт һөйләүҙе һорап мөрәжәғәт итә. Ҡайһы саҡта, өлкәндәрҙең ваҡыты булмаған осраҡта, улар, шаяртып ҡотолоу өсөн, «борон-борон заманда...» тип йәки бүтән төрлө традицион алым менән башлап, әкиәттәге хәл-ваҡиғаларға инмәйенсә, берәй ҡалыплашҡан һүҙ менән тиҙ генә тамамлап ҡуя. Мәҫәлән: «Борон-борон заманда йәшәгән, ти, ташсы. Ул өй һалған таштан, һөйләйемме баштан?» Башҡорт халыҡ ижадында бындай башланыштар байтаҡ йыйылып киткән. Уларҙы әкиәт тип атап булмаһа ла, шартлы рәүештә тормош-көнкүреш әкиәттәренә индереп, «ымһындырыҡтар» йәки «ымһындырғыс әкиәттәр» тип йөрөтәләр.

«Башҡорт халыҡ ижады»ның 18 томдан торған 2-се баҫмаһында (1970–1985 йылдар) әкиәттәр биш китапты тәшкил итә. Улар төрлө ваҡытта төрлө кешеләрҙән (фәнни тел менән әйткәндә, информаторҙарҙан) яҙып алынған. Информаторҙың һөйләү оҫталығына ҡарап, әкиәттәр телмәре, стиле, һүрәтләү саралары яғынан үҙ-ара бер аҙ айырылырға мөмкин. Шулай ҙа уларҙың дүрт төркөмөнә лә борон-борондан формалаша килгән уртаҡ поэтик үҙенсәлектәр, традициялар хас. Мәҫәлән, әкиәттең үҙенә генә хас төҙөлөшө, башланышы, тамамланышы, хәл-ваҡиғаларҙың йәки күренештәрҙең өсәр тапҡыр ҡабатланышы бар. Башланыштың ҡыҫҡараҡ йә оҙонораҡ варианттары була. Йор һүҙле, зирәк хәтерле һөйләүсе, оҙон вариантын ҡулланып, тыңлаусылар иғтибарын тәүҙән үк йәлеп итеп алып китә: «Борон-борон заманда, кәзә командир, өйрәк үрәтник, күркә дисәтник, бүре бағауыл, ҡарға ҡарауыл, һайыҫҡан һанат, турғай һалдат, әтәс әфисер, төлкө яусы, йылан ҡамсы булып торғанда, йәшәгән, ти, әбей менән бабай...» Ҡабатланыштарҙа көсөргәнеш көсәйгәндән-көсәйә; тамамланыштың да ҡыҫҡаһына, оҙонона әҙер ҡалыптар формалашҡан. «Һаман да шулай имен-һау,

бәхетле йәшәп яталар, ти»; «әкиәтем ары, үҙем бире, ҡалғанын һиңә туғарҙым» – былары ҡыҫҡа тамамланыш. Ә оҙоно, мәҫәлән: «Туғыҙ көн туй иттеләр, ун көн уйын ҡорҙолар. Һый-хөрмәт ҙур булды, ашау-эсеү мул булды. Берәүгә етте, берәүгә етмәне; берәү туйҙы, берәү ас ҡалды…»

**Риүәйәттәр, легендалар**

Халыҡ прозаһының әкиәткә ҡарамаған, киң таралған жанры – риүәйәттәр һәм легендалар. Халыҡ телендә уларҙы «тарих» тип тә йөрөткәндәр, фольклористикала һирәк булһа ла «тарихи проза» тигән термин ҡулланыла. Был жанр әкиәттән реаль нигеҙе, билдәле кимәлдә ысынбарлыҡҡа таяныуы менән айырылып тора. Тормошта ҡасандыр булып үткән хәлдәрҙе хәтерҙә һаҡларға тырышып, халыҡ уларҙы киләһе быуындарға һөйләгән. Телдән телгә күсеп йөрөй торғас, айырым текстар үҙгәрештәргә дусар булған, хатта мифик йәки уйҙырма элементтар ҙа килеп ингән. Барыбер легенда-риүәйәттәрҙең башланғысын, төп нигеҙен ысынбарлыҡтағы берәй ваҡиға йә күренеш тәшкил иткән.

Башҡорттар үҙҙәренең йәшәү рәүеше, үткәне менән элек-электән ҡыҙыҡһынып, бер-береһенә еткерә барған. Шуға бәйле рәүештә, риүәйәттәр, легендалар ҙа бик борондан ижад ителгән. Уларҙың боронғолоҡ кимәлен яҙма сығанаҡтарға теркәлеп ҡалған мәғлүмәттәр аша белергә мөмкин. Мәҫәлән, 922 йылда башҡорттар менән осрашып һөйләшкән ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан яҙмаларында халҡыбыҙҙың торнаны изгеләштереүгә бәйле легендаһы әллә ҡасан булған хәл һымаҡ итеп бирелә. XV–XVIII быуаттарҙа төҙөлгән юрматы, ҡарағай-ҡыпсаҡ, ҡара табын һәм башҡа ырыуҙар шәжәрәләрендә тағы ла элегерәк булған ваҡиғаларға бәйле легенда-риүәйәттәр сюжеттары индерелгән.

«Риүәйәт» һәм «легенда» төшөнсәләрен йәнәш ҡуйып, бер жанрға индереп һүҙ алып барһаҡ та, уларҙы бер-береһенән айырып торған билгеләр бар. Риүәйәттәр реаль ысынбарлыҡҡа нығыраҡ яҡын. Улар ваҡыт яғынан сағыштырмаса һуңыраҡ булып үткән хәлдәр, күренештәр тураһында һөйләй, бында әҙәм ышанмаҫлыҡ хәбәрҙәргә юл ҡуйылмай. Ә легенда иһә бик борон булып үткән, сығанаҡтар менән бер нисек тә тикшереп булмаған мәғлүмәттәрҙе еткерә; улары ла, халыҡтың боронғо уй-ҡараштарына ярашлы, уйҙырмалар, мифик элементтар менән биҙәлгән булыуы мөмкин. Әйтәйек, Бейеш батыр, Йүркә Юныс, Ғәҙебәк Насир кеүек шәхестәргә арналған риүәйәттәр, тулыһынса документаль дөрөҫлөккә дәғүә итмәһә лә, ысынбарлыҡта була торған дөрөҫлөктән аша уҙмай, бынан ике-өс быуат элек булған хәлдәрҙе мөмкин тиклем ысын, ғәҙәти итеп бирергә тырыша. Ә «Ай менән Зөһрә» легендаһында үгәй әсәһе тишек һауытҡа төндә һыу

тултырырға ҡушҡан Зөһрә исемле ҡыҙҙы Айҙың йәлләп үҙенә алыуы, әлбиттә, ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

Был жанрҙы әкиәттән айырған тағы ла бер яғы – поэтик образлылыҡҡа, кинәйәлеккә, һүрәтләү сараларына артыҡ иғтибар бирелмәүендә. Хатта легенда-риүәйәттәрҙең жанр тәбиғәте шуны талап итә, тиһәк тә була. Сөнки уларҙа факттар, хәл-ваҡиғалар яңы мәғлүмәт һымаҡ итеп, артыҡ оҙонға һуҙмай һөйләп бирелә, текстың художество биҙәлеше хаҡында бигүк хәстәрлек күрелмәй. Бер сюжетҡа йәки бер нисә хәл-ваҡиғаға ҡоролған легенда-риүәйәттәрҙә лә мәғлүмәт биреү өҫтөнлөк итә. Эпос, ҡобайыр, йырҙарҙағы, хатта әкиәттәге тотороҡлолоҡ һаҡланмай; бер үк легенданы, риүәйәтте төрлө кеше, үҙенең һүҙ байлығына, телмәр үҫеше кимәленә ҡарап, тыңлаусыға төрлөсә еткерә. Ошо сәбәп арҡаһында уларҙың варианттары ла йышыраҡ осрауы ихтимал. Мәҫәлән, Әлшәй районындағы Ҡыпсаҡ-Асҡар, Бүздәк районындағы Ҡаңны-Төркәй ауылдары тарихының, Салауат Юлаевтың тотолоуының, Ҡаһым түрә яҙмышының бер нисәшәр варианты бар.

Кешелектең донъя менән ҡыҙыҡһыныу даирәһе үтә киң булған кеүек, риүәйәттәр һәм легендаларҙың тематик төркөмдәре лә бай. Башҡорт халыҡ ижадындағы был жанр репертуары түбәндәге төркөмдәргә бүленә.

1. Боронғо ырым-ышаныуҙарға нигеҙләнгән легендалар күк есемдәре, тәбиғәт күренештәре, үҫемлектәр һәм йәнлектәр, тәбиғәттең төрлө өлкәләрендәге «хужалар», өй, һыу эйәләре һәм башҡа серле көстәр, мөғжизәләр донъяһына ҡарай. Улар тәүтормош уҡ булмаһа ла, унан бер аҙ һуңғыраҡ дәүер кешеләренең аң кимәлен сағылдыра. Был төркөмдә риүәйәттәр юҡ дәрәжәһендә, текстарҙың барыһы ла, нигеҙҙә – легендалар. «Етегән йондоҙ – ете ҡыҙ» легендаһын алайыҡ. Элек берәүҙең барыһы ла матур һәм батыр ете ҡыҙы булған. Бер саҡ улар тауға сыҡҡанда, арттарынан дейеү батшаһы баҫтырған. Ҡыҙҙар, тау башына менеп етеп, берәм-берәм күккә ашҡандар ҙа Етегән йондоҙ булып киткәндәр, имеш. Йәки «Ҡарлуғастың ҡойроғо ниңә асалы?» тигән легендала, ҡайһы йән эйәһенең ҡаны иң тәмлеһе, серәкәй ни өсөн безелдәп оса, ҡарлуғастың ҡойроғо ни өсөн асалы, тигән һорауҙарға яуап бирелә. Быларҙың барыһы ла, әлбиттә, ысынбарлыҡтан алыҫ, әммә шул заман кешеләре өсөн – үҙенә күрә мәғлүмәт.

2. Башҡорттарҙың килеп сығышы, ырыу, аймаҡ, ара атамаларына ҡағылышлы төркөмдә легендалар ҙа, риүәйәттәр ҙә бар. Легендалар «башҡорт» һүҙенең, башҡорттарҙың, айырым ырыу исемдәренең килеп сығышы тураһындағы текстарға күберәк ҡағыла. Бында уйҙырмаларға урын етерлек. Легендала күтәрелгән мәсьәләләр йыш ҡына бүре, айыу, ат, үгеҙ

кеүек хайуандарға, шайтан, шүрәле, бире һымаҡ мифик заттарға бәйләп аңлатыла. «Башҡорт» һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан?» тигән легендала башҡорттарҙы Урал яҡтарына баш бүре эйәртеп алып килеүе һүрәтләнә. Шайтан-көҙәй ырыуының таралыуына бер зирәк ҡарттың, шайтанды алдап, уның йәш бисәһенә өйләнеп, үрсеп китеүе сәбәпсе, имеш. Ырыу, аймаҡ, аралар тураһында һуңыраҡ сығарылғандары реаль ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ, улары – риүәйәттәр. «Биресбаштар араһы» риүәйәте буйынса, ҡаҙаҡтар менән бәрелештә башы ете урындан ҡаты яраланып та иҫән ҡалған башҡорт батырының нәҫелдәре шулай тип йөрөтөлә икән. («Биресбаш» – ҡаҙаҡса «биреспәш» һүҙенән «бирешмәҫ» мәғәнәһендә.)

Ауыл тарихтарын да ошо төркөмгә индерергә мөмкин. Башҡортостандағы һәр ауылдың үҙ тарихы бар. Тик уларҙың күбеһе яҙып алып, өйрәнеүҙе көтә. Яҙып алынғандары «Башҡорт халыҡ ижады» томдарының «Легендалар һәм риүәйәттәр» китабына индерелгән.

3. Топонимик (ер-һыу атамаларына бәйле) легендалар, риүәйәттәр халыҡ ижады репертуарында айырыуса киң таралған. Заманында атаҡлы шағирыбыҙ Ш. Бабич «Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур», тигәндәй, тыуған яғыбыҙ тәбиғәттең иҫтәлекле урындарына ифрат бай, уларҙың ата-бабаларыбыҙ биргән исемдәре лә күп. Был атамалар ер-һыуҙың тәбиғи йә географик үҙенсәлектәрен, уларға бәйле кеше яҙмыштарын, эреле-ваҡлы ваҡиғаларҙы, йәнлектәр, ҡоштар, малтыуарҙы иҫәпкә алып бирелгән. «Мүсектау», «Алпамыша ҡәбере», «Һанайһары менән Шайтанһары» «Ике Инйәрҙең бәхәсе» кеүектәре легенда үҙенсәлектәренә эйә, ә риүәйәттәр был төркөмдә күпселекте тәшкил итә. Фатима исемле ҡыҙ юғалған йылҡы өйөрөн ҡараҡтарҙан йәшереп алып ҡайтып, атаһына тапшырған урын «Батмағош туғайы» тип атала, сөнки уны атаһы: «Һай, Фатима, ҡошһоң да инде», – тип, шатланып ҡаршы алған, ти. Аҡкашҡа ҡушаматлы, Аҡын исемле ғәйрәтле батыр дошманды аяуһыҙ ҡырып, үҙе лә яуҙа һәләк булып ҡалған урынды «Аҡын» («Аҡкашҡа») тауы тип йөрөтәләр. Башына таҡыя кейеп баҫып торған һымаҡ тауға «Таҡыя сусаҡ» тип исем биргәндәр.

4. Тарихи риүәйәттәр тәғәйен рәүештә тарихи ваҡиғалар һәм тарихи шәхестәр тураһында һүҙ алып бара. Жанрҙың үҙе үк «тарих», «тарихи» проза тип аталыуын телгә алғайныҡ. Шулай булғас, илебеҙҙең тарихи үткәне, халҡыбыҙ хәтерендә уйылып ҡалған күренекле хәл-ваҡиғалар, арҙаҡлы шәхестәр тураһында һөйләгән риүәйәттәрҙең айырым төркөм тәшкил итеүе һис тә ғәжәп түгел. Ошондай йөкмәткеле текстар ике йүнәлешкә бүленә: Тыуған илде сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлау һәм ил

эсендәге социаль тигеҙһеҙлек, милли һәм синфи иҙеү, уларға ҡаршы көрәш мәсьәләләре.

Массалар араһында таралған һәм яҙып алынған риүәйәттәр халыҡтың тарихи хәтер күләмен ап-асыҡ күҙ алдына баҫтыра. Монголдар яуынан алда ғәрәп илселәренең башҡорттар араһында ислам динен индерә башлаған дәүерҙән алып XX быуат аҙағында Мифтахетдин Аҡмулланың ауылдан ауылға аң-белем таратып йөрөгән заманына тиклемге ваҡытты үҙ эсенә ала улар. 1773–1775 йылдарҙағы Емельян Пугачёв ихтилалы, 1812 йылғы Ватан һуғышы, башҡорт ерҙәрен тартып алыуға бәйле хәлдәр, XIX быуат ҡасҡындары тураһындағы риүәйәттәр айырым циклдарҙы тәшкил итә. Шулай уҡ Бошман-Ҡыпсаҡ, Аҡай, Сураш, Бүгәс, Салауат, Юлай, Ҡаранай, Бейеш батырҙар, Ҡаһым түрә, Ерәнсә, Ҡарас, Байыҡ, Мәхмүт, Буранбай сәсәндәр халыҡ хәтеренә ныҡ һеңеп ҡалған.

5. Тормош-көнкүреш риүәйәттәре башҡорттарҙың көндәлек тормошо – донъя көтөү, хужалыҡ эштәрен алып барыу, ғаилә мөнәсәбәттәре, мөхәббәт, туй яһау, байрамдар үткәреү, йәшәү һәм үлем күренештәрен үҙ эсенә ала. Был өлкәгә ҡағылышлы, телдән телгә еткерерлек фәһемле хәл-ваҡиғалар тормош-көнкүрештә аҙым һайын тыуып торорға мөмкин, әммә уларҙың халыҡты тетрәтерҙәй, уның хәтер тарихында ҡалырҙай иң ғибрәтлеләре генә быуындан быуынға тапшырылып, риүәйәткә әйләнеп китә. Тормош-көнкүреш риүәйәттәре араһында ҡатын-ҡыҙҙың фажиғәле яҙмышы, мәргән һунарсылар, зирәк шәхестәр, кешеләрҙе ҡапыл ябырылған бәлә-ҡазаларҙан ҡотҡарыусылар, Уралдағы ҡаҙылма байлыҡ ятҡылыҡтарын табыу тураһындағы сюжеттар күберәк осрай.

Риүәйәттәр һәм легендалар кешелектең донъяны танып белеүгә ынтылышын сағылдыра, улар яҙма әҙәбиәттәге эпик прозаның – хикәйә, повесть, романдарҙың үҫешенә ҙур йоғонто яһай.

**Көләмәстәр**

Ҡыҫҡа ғына күләмле, бер генә күренешкә нигеҙләнгән, кинәйәле мәғәнәле, көтөлмәгәнсә тамамланған, уҡыусыны йәки тыңлаусыны мотлаҡ көлдөргән, һис юғында, йылмайыу уятҡан сатирик йә юмористик йөкмәткеле әҫәрҙе «көләмәс» тип атайбыҙ. Был жанр төрлө халыҡтарҙа киң таралған, төрлөсә исем менән (мәҙәк, латифа, әңгәмә, анекдот һ. б.) атап йөрөтөлә. Көнсығыш халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, айырым кеше исеменән йәки уға бәйләп таратылған көләмәстәр йыш осрай. Мәҫәлән, Ерәнсә, Алдар, Хужа Насретдин көләмәстәре. Аҙаҡҡыһын ҡайһы бер халыҡтарҙа Мулла Насретдин тип тә йөрөтәләр.

Халыҡ тормошонда ғибрәт алырлыҡ, көлкөлө ситуация табырлыҡ, тәнҡитләрлек, әсе көлөрлөк күренештәр, хәл-ваҡиғалар

төрлө өлкәләрҙә осрап тора. Шуға күрә көләмәстәрҙең тематикаһы ла ифрат бай; һанай китһәң, халыҡ ижадының башҡа бөтә жанрҙары мөрәжәғәт иткән тематик йүнәлештәрҙең барыһын да үҙ эсенә алыр ине. Өҫтәүенә, улар халыҡтың милли үҙенсәлеген дә сағылдыра. Был үҙенсәлектәр көләмәстең йөкмәткеһендә лә, формаһында ла урын табып, бүтән милләт вәкиле өсөн ҡыҙыҡ булмаҫҡа, хатта бөтөнләй аңлашылмаҫҡа мөмкин. Мәҫәлән, түбәндәге көләмәс тик Башҡортостан ерендә генә тыуа алған.

Бер маҡтансыҡтан:
– Ағай, ҡайҙа китеп бараһың? – тип һорағандар.
– Уфаға! – тип эре генә ҡысҡырып яуаплаған теге.
Бер аҙ ваҡыттан һуң ул, аҡсаһы бөтөп, арып, хәлдән тайып ҡайтып килә икән.
– Ҡайҙан киләһең? – тип һорайҙар бынан.
– Өфөнән дә… – тигән теге, ишетелер-ишетелмәҫ кенә тауыш менән.

Бына формаға ҡағылышлы, йәғни башҡорт телендәге синонимдарҙы уйнатыуға ҡоролған көләмәскә миҫал.

Хужа Насретдин, кәзә һатырға тип, баҙарға барған. Бер ҡарт килгән дә:
– Кәзәң күпме тора? – тип һораған.
– Кәзә иртәнән бирле тора, – тигән Хужа.

Әкиәттәге йәки яҙма әҙәбиәттең мәҫәл жанрындағы кеүек, көләмәстәрҙә кеше урынына йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр, хатта предметтар ҡатнашҡан осраҡтар күп.

Ҡуян ашханаға барған. Компот, бәлеш алған да, аҡса түләргә киткән. Килһә, бәлеше юҡ, ти.
– Кем минең бәлеште ашаны? Кемдең мороно ҡысый? – тип асыуланып ҡысҡырған ҡуян. Шул саҡ бүре:
– Мин ашаным. Шунан, йә, ни тиерһең? – тигәс, ҡуян:
– Ниңә компотын да эсмәнең? – тигән, ҡалтыранып ҡына.

**Йырҙар**

Бала саҡта беҙ йырҙарҙы әкиәткә ҡарағанда ла алдараҡ ишетәбеҙ. Әле иҫ белмәгән саҡтарыбыҙҙа уҡ әсәйҙәребеҙ беҙгә бишек йырҙары йырлай; телебеҙ асылыр-асылмаҫтан, үҙебеҙ йырлай башлайбыҙ. Шул ваҡыттан алып йыр-моң беҙҙең ғүмерлек юлдашыбыҙ булып ҡала.

Йыр – халыҡ ижадының бәләкәй лирик жанры. Башҡорт халыҡ йырҙары һүҙе, көйө, йыш ҡына – легендаһы, йәғни ижад ителеү тарихы менән бергә йәшәй. Уны халыҡ араһына таратыуға, күпме ваҡыт йәшәүенә башҡарыусылары ла ҙур йоғонто яһай. Һүҙ сәнғәте жанры булараҡ, беҙҙе беренсе сиратта йырҙың һүҙҙәре ҡыҙыҡһындыра. Башҡорт халыҡ йырҙарының оҙон һәм ҡыҫҡа варианттары бар. Моңон да күҙ уңында тотоп, халыҡ

телендә уларҙы йыш ҡына «оҙон көй», «ҡыҫҡа көй» тип йөрөтәләр. Икеһе лә, ҡағиҙә булараҡ, дүртәр юллыҡ строфаны тәшкил итә. Оҙон көйҙөң үлсәме 10–9-ар, ҡыҫҡа көйҙөкө 8–7-шәр ижектән тора. Ҡыҫҡа көйҙөң «таҡмаҡ» тигән исеме лә бар. Ғәҙәттә, йырҙарҙа һәр строфа (куплет) үҙ аллы йөкмәткегә эйә. Хатта айырым ваҡиғаға, шәхескә ҡарата сығарылған йырҙарҙың да лирик сюжеты, йәғни уй-кисерештәр үҫеше һаҡланмай, строфалар мәғәнә яғынан бер-береһенә бәйләнмәгән була. Уның ҡарауы, строфа эсендә йәнәшәлек ҡулланыу киң таралған. Дүрт юллыҡтың тәүге ике юлы тәбиғәт күренешенме, йәнлектәр донъяһынмы, хәрәкәттеме һүрәтләһә, өсөнсө-дүртенсе юлдар ошо йәнәшәлеккә мәғәнә яғынан ауаздаш булған төп фекерҙе белдерә. Мәҫәлән:

Ирәндеккәй тауҙың көн битенән
Бер күгәрсен йөрөй ем тапмай.
Өйгә лә генә инәм, тышҡа сығам,
Янған йөрәккәйем йәм тапмай.

«Ғайса» йырындағы был дүрт юллыҡта лирик геройҙың йәм таба алмай яфаланыуы ем таба алмаған күгәрсен хәленә оҡшаш. Йәнәшәлектәр йырҙың айырым строфала бирелгән мәғәнәһен көсәйтеп, хис өҫтәп ебәрә.

Йырҙың һүҙҙәре ябай, төҙөк, ритмик яҡтан ҡолаҡҡа ятышлы, матур яңғырашлы, тәрән хисле була. Уларҙы көйгә һалыуы, йырлауы, хәтерҙә ҡалдырыуы еңел. Һүҙе менән көйө тап килеп торған, тәрән мәғәнәле, моңло йыр халыҡ араһына тиҙерәк тарала, оҙағыраҡ йәшәй.

Тематикаһы буйынса йырҙар әкиәттәргә, легенда-риүәйәттәргә яҡынса тап килә. Был аңлашыла: хеҙмәтсән массалар араһына тәрән үтеп ингән, ижад итеүҙә халыҡтың үҙе әүҙем ҡатнашҡан жанрҙар уның тормош-көнкүрешенең, уй-ҡараштарының уртаҡ өлкәләрен сағылдыра.

Тарихи йырҙар тыуған илебеҙҙең боронғо үткәненә, 1773–1775 йылдарҙағы Емельян Пугачёв ихтилалына һәм Салауат Юлаевҡа, 1812 йылғы Ватан һуғышына, кантон башлыҡтарына, ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы сыҡҡан ҡасҡындарға, әрме хеҙмәтенә һәм хәрби походтарға арнап сығарылған. Был төркөмдәге йырҙарҙың иң билдәлеһе, әлбиттә, – «Урал». Халыҡ араһында уны башҡорт халҡының гимны тип тә атайҙар. Сығарылыу ваҡыты теүәл генә билдәле түгел. Һәр хәлдә, ул – боронғо йырҙарыбыҙҙың береһе, тыуған еребеҙҙе быуаттар буйы дошманға бирмәй, күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған ата-бабаларыбыҙҙы данлай. Уның варианттары тиҫтәгә яҡын, ә тәүге вариантындағы түбәндәге юлдар бөтәбеҙгә лә таныш:

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –
Ата-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Тарихи йырҙарҙың тарихи шәхестәргә арналғандары күп кенә. Шулар араһында Салауат Юлаев айырым урынды биләй, иң ҙур күләмде тәшкил итә. Бынан тыш, Салауаттың атаһы Юлай, Байыҡ сәсән, Бүгәсәү (Пугачёв), Ҡаһым түрә, Кутузов, Бейеш батыр, Ғәҙебәк Насир, Илсе Ғайса кеүек күренекле шәхестәргә ҡарата йырҙар сығарылған.

Тормош-көнкүреш йырҙары халыҡ тормошоноң көндәлек күренештәренә мөрәжәғәт итә, тарихи йырҙар менән сағыштырғанда ябайыраҡ, вағыраҡ мәсьәләләрҙе күтәрә. Уларҙың солғап алған өлкәһе бик киң; йыр сығарыусы ғәҙәти тормоштоң аҙым һайын осрап торған хәл-ваҡиғалары, күренештәре менән хисләнеп, башҡалар менән уртаҡлашыу өсөн ижадҡа рухланырға мөмкин. Шулай ҙа ғалимдарыбыҙ тормош-көнкүреш йырҙарының иң киң таралған тематик төркөмсәләрен дә күрһәтеп бирә. Улар – ер-һыу һәм мал-тыуар, социаль тигеҙһеҙлек, үткән ғүмер, ҡайғы-хәсрәт, донъяның фанилығы, туғанлыҡ, берҙәмлек хаҡындағы йырҙар һәм мәжлес йырҙары. Тыуған ергә бәйлеләре тәбиғәт культы, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр йоғонтоһонда боронғораҡ замандарҙа уҡ сығарылған («Сыңрау торна», «Кәкүк»). Ожмах кеүек гүзәл тәбиғәт ҡосағында үҫкән ата-бабаларыбыҙ Урал менән бергә Ағиҙел, Дим, Ашҡаҙар, Төйәләҫ кеүек йылғаларын, күлдәрен, тауҙарын, урмандарын, иркен далаларын данлап йырлаған:

Ағиҙелкәй ҡайҙа, ай, туғайҙа,
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа?
Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, һауаһы
Йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа.

Тыуған ер һәм мал-тыуар тураһындағы йырҙар егет данына, социаль тигеҙһеҙлек мәсьәләләренә барып тоташа. Мал-тыуарҙан иң күп телгә алынғаны, әлбиттә, ат; ә ул – ир-егеттең ғүмерлек юлдашы. «Ир-егеткәй менән ат башы» илен дә дошмандан һаҡлай, ғаиләһе етеш йәшәһен өсөн мөлкәтен дә таба:

Аҡбуҙ ғына атым, ай, юрғалыр,
Аяҡтары таймай атламай.
Ниәтләнеп, егет атҡа менһә,
Ниәтенә етмәй туҡтамай.

Үткән ғүмер, донъя фанилығы, ҡайғы-хәсрәт һ. б. артабанғы төркөмсәләр ҙә тәүгеләре менән тығыҙ бәйләнештә тыуған. Уларҙа халыҡтың тормошҡа фәлсәфәүи ҡарашы асыҡ сағыла,

дөйөм кешелектең уй-ҡараштары яңғырай. Берҙәмлек, туғанлыҡ мотивтары мәжлес йырҙарына барып тоташа. Мәжлестәрҙә, ғәҙәттә, кешеләрҙең күңелдәре күтәренке була, байрам уйын-көлкө менән үтә. Унда яңғыраған йырҙар киләсәккә өмөт менән ҡарау, күңел асыу, шаянлыҡ тойғоларын сағылдыра.

Мөхәббәт йырҙары бер-береһенә ғашиҡ булған парҙар, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр йәки фажиғәле яҙмышы һәм шаян йырҙар төркөмсәләренә бүленә. Һөйөү хисен бөтә кешеләр ҙә кисерә; ул йыш ҡына башҡа төрлө хистәрҙән байтаҡҡа көслөрәк, ғазаплыраҡ, шул уҡ ваҡытта яратышҡан йәштәрҙең һөйөү шатлығы ла, ғазабы ла, ғәҙәттә, бик оҡшаш була. Мөхәббәт йырҙарының халыҡ араһында айырыуса киң таралыуы, йөкмәткеләре буйынса үҙ-ара яҡынлығы, оҡшашлығы ла шуның менән аңлатыла. Ҡайһы бер йырҙарҙа егет үҙенең яратҡан ҡыҙын исеме менән атай, сөнки йырҙы уның үҙенә генә арнап сығара; өҫтәүенә, һөйгән йәренең исеме башҡа бөтә исемдәргә ҡарағанда иң матуры, иң ҡәҙерлеһе һымаҡ тойола. Яратҡан ҡыҙының буй-һыны, портреты ла һоҡланғыс, фәрештәгә, илаһи затҡа сағыштырыла:

Әсәләрҙән ҡыҙҙар күп тыуа ла,
Күсбикәләй кем һуң була ала?

...Күп тә генә йөрөп күпте күрҙем,
Һин матурһың, Сәлимә, донъяла.

Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙар XX быуат башына тиклем сығарылған. Ул заманда социаль тигеҙһеҙлек, боронғо йолалар арҡаһында йәп-йәш ҡыҙҙарҙы, яратҡан егеттәренән айырып, үҙҙәренән өлкән бай кешеләргә биреү йәки малға һатып ебәреү осраҡтары йыш булып торған. Ошондай хәлдәр арҡаһында тыуған «Таштуғай», «Зөлхизә», «Зәлифәкәй», «Мәҙинәкәй», «Зөлхәбирә» кеүек йырҙарҙы йә әсе яҙмышҡа дусар ителгән ҡыҙҙың үҙе, йә яратҡан егете, йә уны йәлләгән берәй туғаны сығарған.

Ҡыҙҙарҙың шәхси фажиғәһенә ҡарата сығарылған йырҙар ҙа бар. Берәүҙең яҡын кешеһе һыуға батып үлгән, йә бүтән бәхетһеҙлек арҡаһында һәләк булған, йә иленән айырылып, ҡайта алмай интеккән кеүек хәлдәр бер шәлкем йырҙарҙы тыуҙырған («Ашҡаҙар», «Ғилмияза», «Кәмәлеккәй», «Ете ҡыҙ» һ. б.).

Заман ауырлыҡтарына бирешмәй, алға өмөт менән ҡараған шаян йырҙар мөхәббәт, ғаилә даирәһенә лә килеп ингән. Улар егет менән ҡыҙға йә берәй ғаилә ағзаһына арнала, кемдеңдер етешһеҙлегенән еңелсә йәки әсе көлә. Бындай йырҙарҙың геройҙары – кәләш ала алмай йөрөгән булдыҡһыҙ егет («Яҙғы мәлкәй»), маҡтансыҡ ҡыҙ («Ғәрифәкәй», «Хәкимә»), уңмаған

килен («Игеҙәк»), уңышһыҙ һайланған кәләш («Миңлебикә»). Был төркөмгә ингән йырҙарҙың ике кеше (йырсы) әйтешенә ҡоролғандары ла йыш осрай.

**Бәйет**

Бәйет – фольклор менән яҙма әҙәбиәт араһында торған жанр. Фольклорсы ғалим М. Сәғитов: «Ауыҙ-тел ижадының эпик төрөнә ҡараған был жанр фольклор һәм яҙма поэзияның байтаҡ һыҙаттарын, поэтик традицияларын үҙенә берләштереүе менән бик үҙенсәлекле», – тип яҙҙы. Башҡорт фольклорында һәм яҙма әҙәбиәттә бәйет XVII–XIX быуаттарҙа ныҡлап урын ала. Ә тамырҙары тағы ла боронғораҡ. Мәҫәлән, Зәки Вәлиди «Саҡ-Суҡ» («Саҡ менән Суҡ») бәйете өсөнсө быуатта Ҡытай сигендә йәшәгән төрки ҡәбиләләре алыҫта ҡалған ҡәрҙәшен һағынып йырлаған «Аһ, анай» тигән йырға бик ауаздаш булғанын билдәләй. Үҙ-ара ыҙғышҡан ике бала, әсәләре ҡарғағас, ике ҡошҡа әүерелеп осоп китеп, мәңгегә айырылышыуы тураһындағы «Саҡ-Суҡ»ҡа оҡшаш текстарҙы – мифик ҡараштар нигеҙендә тыуған халыҡ ижады сюжеттарын донъяның төрлө мөйөштәрендә осратырға мөмкин. Был жанрҙың термины ла боронғо. «Бәйет» һүҙенең Көнсығыш филологияһындағы төп мәғәнәһе – иң бәләкәй шиғри берәмек, ике юллыҡ. Жанр мәғәнәһендәге атама ла ошо терминдан килеп сыҡҡан булырға тейеш. Жанр булараҡ, бәйеттең төп билгеләре түбәндәгесә:

1) халыҡ тормошондағы мөһим социаль, тарихи ваҡиғаларҙы, көнкүрештәге фәһемле һәм ғибрәтле хәлдәрҙе, берәй әһәмиәтле, фажиғәле ваҡиғаны, айырым кешенең башынан үткәндәре, көтөлмәгән хәлдәр арҡаһында бәхетһеҙлеккә юлығыуы, һәләк булыуы кеүек осраҡтарҙы сағылдыра;

2) индивидуаль һәм коллектив ижад башланғысына ҡарай;

3) яҙмала ла, телдән дә тарала;

4) профессиональ ижадсы исеменә дәғүә итмәгән, әммә ҙур тормош тәжрибәһе туплап өлгөргән уҡымышлы кеше тарафынан сығарыла.

Бәйет, тимәк, шиғри телмәр менән ижад ителһә лә, һүҙ сәнғәтенең эпик төрөнөң бер жанры булып формалашҡан. Ә «Башҡорт халыҡ ижады» томдарының «Бәйеттәр» китаптарына ингән текстар араһында хәл-ваҡиғалар сюжетына ҡоролмаған «лирик» бәйеттәр ҙә күп кенә. Тимәк, бәйет жанры сиктәре ныҡлап билдәләнһә лә, уға ҡараған текстарҙы һайлап алыуҙа аныҡлыҡ индерелеп бөтмәгән әле.

Тематик билге буйынса бәйеттәр мифологик («Саҡ менән Суҡ»), социаль-тарихи («Кинйәкәй бәйете», «Онотмабыҙ Салауатты», «Француз яуы бәйете», «Ағас бәйете», «Перепись бәйете»), социаль-көнкүреш («Сәй бәйете», «Ғәйшә бәйете», «Аҫрау ҡыҙ бәйете», «Ҡартлыҡ бәйете»), тарихи шәхестәр тураһындағы («Кутуз бәйете», «Буранбай бәйете», «Аҡмулла

бәйете», «Мәрхүм Туҡаев бәйете») һәм дини йөкмәткеле («Мөхәммәт салауаты», «Диуани Ҡотдос», «Әжәл бәйете») төркөмдәргә бүленә.

**Афористик жанрҙар**

Афористик жанрҙар бер нисә йәки бер генә һөйләмдән, йыш ҡына тик һүҙбәйләнештәрҙән генә торған ҡыҫҡа, тәрән мәғәнәле, ритмик яҡтан камил ижад төрөн тәшкил итә. Башҡорт халыҡ ижадында уларға тапҡыр һүҙҙәр, мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар ҡарай.

Телмәрҙең сағыштырыу, эпитет, метафора кеүек сағыу һүрәтләү сараларына таянған, фекерҙе ап-асыҡ, аңлайышлы, үтемле итеп биргән, уның тәьҫир көсөн арттырған, экспрессив мәғәнәгә эйә булған һүҙбәйләнеш йәки һөйләм тапҡыр һүҙ тип йөрөтөлә. Уны йыш ҡына бер йә ике һүҙҙән торған синоним менән алмаштырып була. Мәҫәлән: ауыҙын асһа, үпкәһе күренә (ярлы кеше); алма беш, ауыҙыма төш (ялҡау кеше); балтаһы һыуға төшөү (күңелһеҙләнеү); төп башына ултыртыу (алдау).

Мәҡәлдәр – халыҡтың борондан туплана килгән тормош тәжрибәһен, аҡылын, ижтимағи, фәлсәфәүи һәм әхлаҡи ҡараштарын сағылдырған тәрән мәғәнәле, ритмик яҡтан төҙөк, хикмәтле фекерҙәр тупламаһы. Ул һәр саҡ бөхәсһеҙ дөрөҫлөктө сағылдыра, тамамланған фекерҙе тәшкил итә. Мәҫәлән, әйткән һүҙ – атҡан уҡ; ни сәсһәң, шуны урырһың; әсә күңеле балала, бала күңеле далала һ. б. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре боронғо латин, немец, венгр, рус һәм Көнсығыш халыҡтарының мәҡәлдәре менән уртаҡ, йыш ҡына һүҙмә-һүҙ тиерлек тап килә. Беҙҙә хеҙмәткә, ижтимағи тормошҡа, төрлө һөнәр өлкәләренә, йола, ғаилә, туғанлыҡ мөнәсәбәттәренә, әхлаҡ-әҙәп, аң-белем, ғүмер, яҙмыш мәсьәләләренә ҡараған мәҡәлдәр айырыуса киң таралған.

Әйтемде башҡорт халыҡ ижадына ғына хас күренеш тип атарға була. Уның килеп сығыуын ғалимдар сәсәндәр ижады менән бәйләй. Һүҙ оҫталары ҡобайырҙарындағы өгөт-нәсихәткә, аҡыл, кәңәш биреүгә ҡоролған, һәр юлы тапҡыр һүҙгә, мәҡәлгә торошло өҙөктәр халыҡ араһына таралып, үҙ аллы әйтемдәргә әйләнеп киткән, тигән фараз йәшәй. Уның ысынбарлыҡҡа тап килеүе бик мөмкин, сөнки тәрән мәғәнәле, кинәйәле йөкмәткеле фекерҙәр теҙмәһен йырау, сәсән кеүек арҙаҡлы һүҙ оҫталары ғына сығара алған. Ә күләме яғынан ҙур булмаған, ҡолаҡҡа ятышлы, күңелгә хуш килгән шиғри юлдар теҙмәһенең халыҡ араһында тиҙ генә таралып китеүе, халыҡ ижады жанрына әйләнеүе һис тә ғәжәп түгел. Әйтемде күҙ алдына килтереүе еп-еңел. Ул йөкмәткеһе, төҙөлөшө, ритмик яңғырашы буйынса оҡшаш булған бер нисә мәҡәл теҙмәһен тәшкил итә. Мәҫәлән:

Яҡшы әҙәм билдәһе –
Асыу менән үсе юҡ.

Яман әҙәм билдәһе –
Асыу менән үсе күп.
Яҡшы әҙәм билдәһе –
Күп тыңлар ҙа бер һөйләр.
Яман әҙәм билдәһе –
Бер тыңлар ҙа күп һөйләр.

Тематикаһы буйынса әйтемдәр Тыуған ил, батырҙар тураһындағы ижтимағи йөкмәткеле һәм тормош-көнкүреш тәжрибәһен сағылдырған төркөмдәргә бүленә.

Йомаҡтың атамаһы «уй йомоу» һүҙенән килеп сыҡҡанлығы күренеп тора. Йомаҡ әйтешкәндә, берәй предметтың, күренештең йәки хәрәкәттең үҙен табыу өсөн уның төп билгеләре, усҡа йомоп, йәшереп ҡуйған һымаҡ, уға оҡшаш икенсе билгеләр менән бирелә. Кеше, үҙенең зирәклеген эшкә егеп, әлеге йәшерен билгеләр буйынса йомаҡтың яуабын табырға тейеш. Мәҫәлән, аҡ кейемен кейгән, йәшел суғын элгән (ҡайын); һыу өҫтөндә һары май (томбойоҡ); аҡ ашъяулыҡ таптым, ер өҫтөнә яптым (ҡар яуыу).

Йомаҡтар беҙҙе уратып алған донъяны, йән эйәләрен, конкрет предметтарҙы, күренештәрҙе образлы итеп күҙ алдына баҫтырыуға, сағыу һүрәтләү саралары ярҙамында биреүгә ҡоролған; шуға күрә уларҙы уйлап сығарыусыларҙың да, яуаптарын табыусыларҙың да образлы фекерләүен, зирәклеген талап итә.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Халыҡ ижадының киң һәм тар мәғәнәләрен аңлатығыҙ. 2. Халыҡтың ауыҙ-тел ижадының сәнғәт ижадындағы урынын асыҡлағыҙ. 3. Фольклорҙың билдәләмәһен хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. 4. Фольклор ниндәй төркөмдәргә һәм төрҙәргә бүленә? 5. «Эпос» һүҙенең ниндәй мәғәнәләре бар? 6. Жанр булараҡ, эпостар ниндәй төркөмдәргә бүленә? 7. Эпик осорға аңлатма бирегеҙ. 8. Ҡобайырҙың ике мәғәнәһен асыҡлағыҙ. 9. Нимә ул «дөйөм урын», «поэтик клише»? 10. Батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙың ҡайһы берҙәренең беренсе заттан ижад ителеүе нимә менән аңлатыла? 11. Дидактик һәм фәлсәфәүи ҡобайырҙарҙың уртаҡ һәм айырмалы һыҙаттарын табығыҙ. 12. Әкиәттең, шиғри формала ижад ителгән эпосҡа һәм ҡобайырға сағыштырғанда, төп жанр үҙенсәлектәре нимәлә? 13. Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең поэтикаһына иғтибар итегеҙ. 14. Тылсымлы, тылсымлы-героик һәм тылсымлы-мажаралы әкиәттәр бер-береһенән нимәһе менән айырыла? 15. Хайуандар тураһындағы әкиәттәргә һәм тормош-көнкүреш әкиәттәренә характеристика бирегеҙ. 16. Легенда һәм риүәйәттәрҙе «әкиәттән тыш проза» тип йөрөтәләр. Ни өсөн шулай тип аталғанын, был жанрҙың әкиәттән айырған билгеләрен әйтеп бирегеҙ. 17. Риүәйәт менән легенданың ҡайһыһы боронғораҡ? Уларҙы тағы ла ниндәй үҙенсәлектәр айыра? 18. Легенда-риүәйәттәрҙең, йыр-бәйеттәрҙең тематик

төркөмдәрен үҙ-ара сағыштырып ҡарағыҙ. Улар араһындағы уртаҡлыҡтарҙың сәбәптәрен аңлатығыҙ. 19. Башҡорт халыҡ ижадының афористик төрөнә ниндәй жанрҙар ҡарай? 20. Афористик жанрҙарҙың ҡайһыһы тик башҡорт һүҙ сәнғәтенә генә хас?

## «УРАЛ БАТЫР»

«Урал батыр» – донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡылары араһында иң күренекле урындарҙың береһен биләгән әҫәр. Башҡортостан мәктәптәрендә уның тураһында ишетмәгән бала юҡтыр: йыл һайын «Урал батыр» эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең республика конкурсы үткәрелә, унда биш-алты йәшлек балаларҙан алып ун беренсе класҡа тиклемге уҡыусылар ҡатнаша. Шуларҙан һәр йылда ярышҡа кәм тигәндә егермегә яҡын йәш сәсән әҫәрҙе тулыһынса ятлап килә.

«Урал батыр» бик боронғо замандарҙа телдән ижад ителеп, быуындан быуынға сәсәндәр тарафынан тапшырыла килгән. Ул тиҫтәләгән башҡорт эпостары араһында иң ҙур күләмлеләренең береһе – 4500-ҙән ашыу шиғри һәм 20-гә яҡын сәсмә юлды тәшкил итә. 1910 йылда Мөхәмәтша Буранғолов исемле егерме ике йәшлек сәсән был эпосты хәҙерге Баймаҡ районының Иҙрис һәм Бәләкәй Этҡол ауылдарында йәшәгән сәсәндәр Ғәбит Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып ала. Аҙаҡ ул, ошондай баһалап бөткөһөҙ ҡомартҡыға юлыҡҡанын аңлап, ҡыуанысынан сәсәндәргә үҙенең менеп йөрөгән атын бүләк итеп китә.

Ҡобайыр үлсәмендәге был эпостың теле халҡыбыҙҙың һәм боронғо һүҙ оҫталарының йәнле һөйләү теленә ҡоролған, шуға күрә лә ул ябай, аңлайышлы, ятлауға еңел. Әммә ошо ябай тел менән беҙҙең заман кешеләре өсөн бик үк таныш булмаған ҡатмарлы, тиҙ генә һүтеп сыҡҡыһыҙ кинәйәле мәғәнәле, тәрән фәлсәфәле күренештәр, хәл-ваҡиғалар, образдар кәүҙәләндерелгән. «Урал батыр»ҙа бер нисә оло дәүерҙе үҙ эсенә алған бик оҙайлы ваҡыт сағылдырылған. Бындай әҫәрҙе бер генә быуын кешеһе сығара алмай, уны ижад итеүҙә бер нисә быуын һүҙ оҫталары ҡатнашҡан. Шуғалыр ҙа эпостың бер нисә ҡатламдан тороуын күреп була.

«Урал батыр»ҙың йөкмәткеһе, ысынлап та, ниндәй геройҙарҙың, образдарҙың ҡатнашыуына, ҡайһы ваҡыт тураһында һүҙ барыуына ҡарап, кәм тигәндә өс ҙур ҡатламды тәшкил итә.

Беренсеһендә, «борон-борон заманда, кеше-маҙар килмәгән, килеп аяҡ баҫмаған, ул тирәлә ҡоро ер барлығын һис кем белмәгән» ваҡытта, дүрт яғын диңгеҙ уратып алған бер ерҙә Йәнбирҙе менән Йәнбикә генә йәшәгән. Тора-бара уларҙың Шүлгән һәм Урал исемле ике улы тыуған. Улар бүтән кешеләрҙе

күрмәй, дүртәү генә көн иткән. Был дәүерҙең бик боронғо икәнлеген әҫәрҙәге күп кенә эпизодтарҙан, күренештәрҙән аңлап була. Мәҫәлән, Йәнбирҙенең ғаиләһе тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө һымаҡ тереклек иткән: хәҙерге кешеләр һымаҡ йорт һалып донъя көтмәгән; ут яғыуҙы, ашарға бешереүҙе, ҡорал тотоуҙы кәрәк тип тапмаған; йәнлектәрҙе ҡулға эйәләштермәгән, ә ҡырағай ҡош-ҡорт менән һөйләшеп, бергә көн күргән: арыҫлан менеп, шоңҡар менән һунар иткән, балыҡты уларға суртан тотоп, ҡанды һөлөк һурып биргән. Улар хатта ауырыуҙың, үлемдең барлығын да белмәгән.

Ваҡыттар үтеү менән, был ғаиләнең аңына, тормошона үҙгәрештәр инә башлай. Ир менән ҡатын улдарына ҡан эсеүҙе тыя. Ер йөҙөндә тереклек итеүселәр араһында үлем барлығын белеп, уның менән ҡыҙыҡһыналар, үлемдең сәбәптәрен эҙләйҙәр, был хаҡта ҡоштарҙан һорап ҡарайҙар. Дейеү-батша ерендә Йәншишмә барлығын, уның һыуын эскән кеше мәңге үлмәй йәшәй ала икәнлеген ишетәләр. Бер көн дүртәүләп һунарҙан бүтән ҡоштар менән бергә аҡҡош та тотоп алып ҡайталар. Ул ҡоштар батшаһы Самрауҙың аҡҡош ҡиәфәтенә ингән Һомай исемле ҡыҙы булған икән. Һомай Йәншишмәгә юлды белгән. Шүлгән Һомай ҡошто ашау яғында, Урал уны ҡотҡарыу яғында булып бәхәсләшкән арала, өс аҡҡош килеп, Һомайҙы күтәреп алып китә. Йәнбирҙе улдарына ҡоштар осҡан яҡҡа эйәреп барып, Йәншишмәне табырға, әгәр юлда үлем осраһа, уның башын ҡырҡып алып ҡайтырға ҡуша. Урал менән Шүлгәнгә юлда бер ҡарт тап булып, юл өйрәтә. Һулға китһәң, йәнлектәр бер-береһенә яҡшылыҡ ҡылып, рәхәт көн күргән ил бар. Уң яҡтағыһы – барыһы «ҡайғы-этлек күреүсе, ҡанлы йәшен түгеүсе Ҡатил батша иле» икән. Малайҙар шыбаға тотоша. Һулға китеү Уралға сыҡһа ла, Шүлгән, талашып, был юлды үҙенә һайлай; Урал уң яҡҡа китә.

Урал менән Шүлгәндең ошо илдәрҙә булыуы, яңынан ҡабат-ҡабат осрашыуҙары – икенсе ҡатлам. Ул эпоста иң оҙайлы дәүерҙе үҙ эсенә ала. Ваҡыттың нисек үткәнен күҙ алдына килтереү өсөн бер генә эпизодты алып ҡарайыҡ. Урал дейеүҙәр менән аҙаҡҡы тапҡыр һуғыша башлағанда яңы тыуған балалар алыш тамамланыуға ат менерҙәй ир булған.

Был өлөштә Урал батырҙың изге эштәре, яуыз көстәргә – дейеүҙәргә, аждаһаларға, ен-пәрейҙәргә ҡаршы, хатта дошмандар яғына сыҡҡан үҙенең бер туған ағаһы Шүлгәнгә ҡаршы көрәше, йән эйәләрен күп бәләләрҙән ҡотҡарыуы ентекле тасуирлана. Һөҙөмтәлә, Урал батырҙың дошмандары тамам еңелә, үлгән дейеүҙәрҙең, аждаһаларҙың һөйәктәренән тау барлыҡҡа килгән, уны хәҙер Ямантау тип йөрөтәләр икән. Донъяға үлем килте-

рерҙәй барлыҡ яуыз көстәрҙе ҡыйратҡас, Урал батыр кешеләрҙе мәңге үлемһеҙ итеү өсөн Йәншишмәнең бөтә һыуын, һоҫоп алып, уларға бирмәк була. Ошо ваҡытта уға ҡасандыр Йәншишмә һыуын эсеп, үлә алмай интегеп йөрөгән бер ҡарт осрап: «Мәңге ҡалам тимәгеҙ, Йәншишмәнән эсмәгеҙ», – тип кәңәш бирә. Быны ишеткән Урал, халыҡты эйәртеп, Йәншишмә янына бара ла, һыуын уртлап, тирә-яҡҡа бөркә. Тере һыуға «тау-урмандар йәшәреп, мәңге үлмәҫ төҫ» ала, кешеләр шатлана; бөтә тирә-яҡ, «дошман күҙен ҡыҙҙырып», балҡып торор ергә әйләнә. Шүлгән, көнләшеп, дейеү-йыландарҙы йыя ла, кешеләргә һыу бирмәҫкә, юлға сыҡҡан ирҙәрҙе, һыуға барған ҡыҙҙарҙы аңдып ятып, йоторға ҡуша. Кешеләр был хаҡта Уралға зарланып һөйләп бирә. Ул Шүлгән күленә барып, һыуын дейеүҙәре менән бергә һурып йота. Эскә тулған дейеүҙәр «берәм-берәм Уралдың йөрәк-бауырын» телеп бөтә. Урал батыр яралы көйө кешеләргә һуңғы васыятын әйтә лә ятып үлә.

Икенсе ҡатламда тормоштоң тағы ла алғараҡ китешен күрһәткән күренештәр, хәл-ваҡиғалар өҫтәлә. Әйтәйек, быға тиклем һис кемгә баш бирмәй, ер тырнап үкереп йөрөгән тауҙай үгеҙ кешегә хеҙмәт итә, Урал батыр «ерҙә тоҡом йәймәгән» Аҡбуҙатты үҙенә эйәләштереп, арыҫлан урынына менеп йөрөй, ҡулына ҡорал (тылсымлы таяҡ, булат ҡылыс) ала, уның янында кешеләр күренә башлай, Шүлгән менән үҙенең дә улдары тыуа. Дөрөҫ, уларҙың әсәләре – яртылаш мифик заттар: Иҙелдең әсәһе – ҡош-тар батшаһы Самрауҙың ҡыҙы Һомай; Яйыҡтыҡы – кешеләрҙе ҡорбан итер Ҡатил батша ҡыҙы; Нөгөштөкө – дейеү батша Әзрәҡәлә ҡоллоҡта булған Гөлостан. Ә Шүлгән улы Һаҡмарҙың әсәһе – Самрауҙың айҙан тыуған ҡыҙы Айһылыу.

Урал батыр донъя ҡуйғандан һуңғы хәл-ваҡиғалар өсөнсө ҡатлам дәүерен тәшкил итә. Уның төп геройҙары – Урал менән Шүлгәндең улдары, Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең ейәндәре Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар. Әлбиттә, Уралдың кәләше Һомай ҙа был осор ваҡиғаларында актив ҡатнаша. Уның ҡылған эштәрен халҡыбыҙҙың артабанғы күркәм йолаларының шишмә башы, еребеҙҙә йәмле, матур тормош урынлашыуҙың башлап ебәрелеүе тип әйтергә мөмкин.

Һомай, Уралдың һәләк булғанын ишеткәс, ҡош тунын кейеп, осоп килеп етә. Уның менән хушлашыу телмәрендә, «һиндәй батыр таба алмам» тип, ситтәр күҙ атмаһын өсөн, башҡаса ҡыҙ ҡиәфәтендә йөрөмәҫкә, ҡош тунын һалмаҫҡа ҡарар итә лә, Уралды тауға күмгәндән һуң, кире осоп китә. Вәғәҙә иткәненсә, артабан аҡҡош ҡиәфәтендә йәшәй, ошо ҡош тыуын үрсетә. Башҡорттарҙа аҡҡошто изге ҡошҡа һанау, уның итен ашауҙы тыйыу йолаһы шунан ҡалған, тиҙәр.

Байтаҡ йылдар уҙғас, Урал батырын һағынып, Һомай Уралға тағы әйләнеп ҡайта. Был юлы үҙе менән ҡош-корттарҙы, кешеләрҙе эйәртеп килтерә. Уралға Ҡатил батшаның үгеҙе лә, Аҡбуҙат та, тоҡомдарын үрсетеп, үҙҙәре менән алып килә. Данлы Урал буйында йән эйәләре, кешеләр үрсеп, күбәйеп китә, хатта уларға эсәр һыу етмәй башлай. Шул ваҡытта Иҙел, Һомайҙың кәңәше буйынса атаһының булат ҡылысын алып, бейек тауҙы яра саба. Унан ағып киткән һыуҙы Иҙел тип атағандар. Иҙелдән күрмәксе, уның өс туғаны ла, булат ҡылыс менән алмашлап сабып, тағы өс йылға ағыҙып ебәргән. Уларын Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар тип атағандар.

Күренеүенсә, эпостың өс ҡатламында ла мифик заттар, мифологик элементтар ҙур урын биләй, улар «Урал батыр»ҙың мифик дәүер эпостары заманында тыуғанлығын дәлилләй. Боронғолоғо яғынан уны ғалимдар шумер тигән халыҡ мифологияһының бынан биш мең йылдар самаһы элек ижад ителгән «Гильгамыш» эпосына, яҡуттарҙың «Олонхо» әҫәренә тиңләйҙәр. «Урал батыр»ҙы шулай уҡ боронғо гректарҙың Ясон тураһындағы сюжеттар циклы менән дә сағыштырырға мөмкин. Был ҡомартҡыларҙың өсөһөндә лә башҡорт эпосы менән ғәжәп ауаздаш уртаҡлыҡтар бар. Әйтәйек, «Олонхо»ның геройҙары – Йәнбирҙе менән Йәнбикә кеүек үк, кешелек йәмғиәтенең барлыҡҡа килеү дәүере вәкилдәре, улар үҙҙәренең ҡайҙан килеп сыҡҡанын да белмәй; әҫәр үҙе шулай уҡ хәл-ваҡиғаларҙың өс ҡатламын тәшкил итә. Ә Гильгамыш, Уралға оҡшап, бик ҙур кәүҙәле, көслө батыр булып үҫә. Ул да үлемһеҙлек тураһында уйлана, уны эҙләп сығып китә. Ясонға ҡот осҡос ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам иткән Медея исемле ҡыҙ Уралға Аҡбуҙат менән булат ҡылыс бүләк иткән Һомайҙы хәтерләтә. Тағы ла бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Шулай ҙа ошо боронғо эпик ҡомартҡылар араһынан бары тик «Урал батыр» ғына айырым кешенең үлемһеҙлегенә ҡарағанда барлыҡ кешелектең, ер йөҙөндәге тәбиғәттең, тереклектең үлемһеҙлеге мөһимерәк тигән тәрән хәҡиҡәтте, гуманистик фекерҙе асып бирә алған.

Үрҙә телгә алынған боронғо донъя эпостарынан айырмалы рәүештә, Урал батыр образы, уның аң даирәһе үҫештә сағылдырылған. Тәүҙә ул үлемде конкрет йән эйәһе һымаҡ күҙ алдына баҫтыра. Уны эҙләп тапһаң, үлем хәтлем үлемдең үҙен үлтереп була тип уйлай. Хатта Урал менән Шүлгәндең атаһы Йәнбирҙе лә шул уҡ ҡараштa. Балаларын Йәншишмәне эҙләргә оҙатҡанда, «әгәр юлда үлем осраһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға» ҡуша. Кеше-маҙар килеп аяҡ баҫмаған бер урында йәшәгән Урал оҙайлы сәфәрендә бик күп нәмәләрҙе үҙе күреп төшөнә, уның донъяға ҡарашы киңәйгәндән-киңәйә бара. Һомай менән яңынан осрашҡас, уға:

Үҙем йәп-йәш булһам да,
Биш ил барын белдем мин:
Береһендә үҙем тыуҙым,
Икеһен йөрөп күрҙем,
Ҡалған тағы икәүһен
Күрергә тип сыҡтым мин, –

ти.

Дейеү, болан, йылан, үгеҙ кеүек ҡырағай йәнлектәрҙән тыш, был донъяла кешеләр ҙә барлығын белә, уларҙың тигеҙһеҙ йәшәгәнен күрә: «Ҡайҙа ғына барһаң да, кемде генә күрһәң дә, береһе үҙен баш, тиә, икенсеһе баш эйә, көслө көсһөҙҙө ейә, теләгәнсә ҡан ҡоя». Иң мөһиме – эпос аҙағында Урал батыр үлемдең тәбиғәтенә төшөнә. Быға күп замандарҙан бирле үлә алмай йөрөгән, күбәләктәй йәне, бер йотомдай ҡаны ҡалған ҡартты осратыуы хәл иткес йоғонто яһай. Яуыз көстәрҙе еңгәс, Урал халыҡты йыйҙыртып, бергәләп Йәншишмәгә юл тотҡанда, күҙгә күренмәҫ үлемдән кешеләрҙе ҡотҡарыр өсөн уның һыуын һоҫоп алып, бар кешегә бирергә ниәтләнә. Әлеге ҡартты тыңлағас, тетрәнеп, был уйынан кире ҡайта. Йәғни айырым йән эйәләренең үлемһеҙ була алмағанын, бары тик ер йөҙөндәге тереклектең генә мәңгелек икәнен аңлай.

«Урал батыр» һымаҡ боронғо замандарҙа ижад ителгән эпостарҙың береһендә лә төп геройҙар быңдай юғары фәлсәфәүи фекергә килә алмаған. Уларҙың һәр ҡайһыһының маҡсаттары башҡасараҡ. Боронғо дәүерҙә үк Урал батырҙы ошондай үҫеш юғарылығына күтәреп кәүҙәләндерә алған, бөйөк фекер ҡаҙанышына ирешкән тәрән зиһенле эпос ижадсылары, икенсе төрлө әйткәндә, ошондай эпосты тыуҙырған халҡыбыҙ менән ысын мәғәнәһендә ғорурлана алабыҙ.

«Урал батыр» хәҙерге ваҡытта рус, инглиз, немец, төрөк, француз телдәренә тәржемә ителгән. Ул Башҡортостандың ете мөғжизәһенең береһе булып иҫәпләнә.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Эпостың телмәренә, шиғри төҙөлөшөнә, ритмикаһына иғтибар итегеҙ, дидактик һәм фәлсәфәүи ҡобайырҙар менән сағыштырып ҡарағыҙ. 2. «Урал батыр» нисә өлөштән тора, улар ниндәй принцип буйынса бүленгән? 3. Был әҫәрҙең боронғолоғон ниндәй билгеләре буйынса белеп була? 4. «Урал батыр» башҡа халыҡтарҙың боронғо эпостарынан нимәһе менән айырыла? 5. Эпосты «Башҡорт халыҡ ижады» томдарынан йәки айырым баҫмаларынан тулыһынса уҡығыҙ. 6. Алтынсы класта өйрәнгән «Урал батыр» әкиәте менән сағыштырып, эпос һәм әкиәт жанры үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп, был ике әҫәрҙең уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын билдәләгеҙ.

## «ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ»

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» тарихи-героик эпостар төркөмөнә ҡарай. «Тарихи» тигән төшөнсәгә ҡағылышлы әҫәрҙәр билдәле бер тарихи дәүерҙе йәки ваҡытты күҙ уңында тота, шул ваҡыттағы ниндәйҙер конкрет урында барған хәл-ваҡиғаларҙы сағылдыра, ҡатнашҡан геройҙарының күбеһе шул ваҡытта ысынбарлыҡта йәшәгән кешеләр, тарихи шәхестәр булып тора. Был эпоста ла шулай: XIV быуат аҙағында – XV быуат башында башлыса Башҡортостан ерендә булып үткән дәһшәтле хәл-ваҡиғалар урын алған. Әҫәрҙең төп геройҙары Иҙеүкәй, Мораҙым, Туҡтамыш, Һабрау йырау һәм башҡалар – шул дәүерҙең тарихи шәхестәре. Шулай ҙа эпос – һүҙ сәнғәте әҫәре; саф тарихи яҙмаларҙан айырыла. Һүҙ сәнғәте әҫәренең үҙенең законлыҡтары бар. Унда эреле-ваҡлы тарихи ваҡиғаларҙың иң мөһимдәре, әҫәрҙең идея-проблематикаһы өсөн иң кәрәклеләре генә һайлап алына, уларға кинәйәле мәғәнә һалыныуы мөмкин. Геройҙар ыңғай һәм кире, төп һәм икенсе дәрәжәләге төркөмдәргә бүленә, дөйөмләштерелгән һәм конкрет һыҙаттары менән бирелә. Шуларҙың барыһына авторҙың (халыҡ ижадында – авторҙарҙың, халыҡтың) мөнәсәбәте белдерелә, баһаһы бирелә. Әлбиттә, ижадсыларҙың оҫталығына, тәжрибәһенә ҡарап, бындай художестволылыҡ кимәле әҫәрҙәрҙә төрлөсә булыуы мөмкин.

Автор тигәндәй, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы төрки халыҡтары, бигерәк тә башҡорттар, ҡаҙаҡтар, нуғайҙар, ҡарағалпаҡтар араһында киң таралған. Башҡорттарҙа ғына ла уның ун бишләп варианты билдәле. Ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ ғалимдары был эпосты тотошлай Һабрау сәсән ижад иткән тип раҫлайҙар. Ысынлап та, донъя халыҡтары һүҙ сәнғәтендә авторҙары төҫмөрләнгән ҙур күләмле эпик әҫәрҙәр бик һирәк булһа ла осрап ҡуя. Байыҡ Айҙар сәсән ижадын өйрәнгәндә «Юлай менән Салауат» эпосына ҡағылышлы ошондай хәлде күҙәткәйнек. Дөрөҫ, был әҫәрҙә сағылдырылған хәл-ваҡиғаларҙың аҙаҡҡы өлөшө Байыҡ сәсән йәшәгән ваҡыт сиктәренән сығып китә, эпос ике ҡатламлы форма ала. Ә йөҙ йылдан ашыу ғүмер кисергән Һабрау «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да сағылдырылған дәүерҙе тотош үҙ күҙҙәре менән күргән. Заманының иң абруйлы һәм тәжрибәле һүҙ оҫтаһы булараҡ, ошо дәүерҙе ҙур эпик ҡоласлы әҫәрҙә сағылдыра алырлыҡ мөмкинлеге булған. Эпос киң таралған тарафтарҙа – ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай, башҡорт ерҙәрендә йырау күп йөрөгән. Ә әҫәрҙең ошо халыҡтар араһында таралған төрлө варианттарына килгәндә, Һабрау уны, импровизатор булараҡ, ҡайҙа аяҡ баҫһа, шул ер халҡының зауығына яраҡлаштырып, үҙгәртеберәк һөйләүе ихтимал. Өҫтәүенә, әлбиттә, һәр халыҡтың унан һуңғы һүҙ оҫталары ла тырышлыҡ һалып, үҙ ерлегенә яҡынайтыуға өлөш индермәй ҡалмағандыр.

Әҫәрҙә Һабрауҙың үҙенең образы мул ғына урын алған. Башҡа образдарҙың барыһынан да ул бер мөһим үҙенсәлеге менән айырылып тора. Бүтәндәр хәл-ваҡиғаларҙың эсендә ҡайнай, бербереһе менән конфликтҡа инә, алыштарға сыға, еңеүҙәр яулай, уңышһыҙлыҡтарға дусар ителә, һәләк була. Һабрау уларҙың һәммәһен тыштан күҙәтә, геройҙарға үҙенең аҡыллы кәңәштәрен еткерә, хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә төплө баһаһын бирә. Уның монологтары йыш ҡына образдарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре, хәл-ваҡиғалар менән аралашып килә. Былар барыһы ла яҙма әҙәбиәттәге автор һүҙҙәрен, лирик сигенеүҙәрҙе хәтерләтә. Ошоларҙы иҫәпкә алғанда, Урта Азия ғалимдарының фекеренә иғтибар итмәү мөмкин түгел.

Һабрау йырауҙың был эпосты ижад итеүгә мөнәсәбәте булһа, ул, тимәк, ошо әҫәрҙәге ваҡиғалар ысынбарлыҡта булып ятҡан ваҡытта уҡ сығарылған тигән һүҙ. Нуғайҙар XX быуат аҙағында эпостың 600 йыллығын билдәләне. Башҡортостан ерендә лә Туҡтамыш хан менән Аҡһаҡ Тимерҙең «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да һүрәтләнгән үлемесле алыштары тап XIV быуат аҙағына – 1392 һәм 1395 йылдарға тура килә.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым»дың башҡорт эпостары репертуарындағы иң тулы версияһы шиғри һәм сәсмә телмәр аралашып килгән ете меңләп юлдан тора. Сәсмә өлөшө, «Урал батыр»ҙағы кеүек үк, бик аҙ ғына күләмде тәшкил итә. Эпостың был версияһын М. Буранғолов 1910 йылда 1762 йылғы ҡулъяҙма текстан яҙып алған.

Әҫәрҙең ҡыҫҡаса йөкмәткеһе түбәндәгесә.

Был дәүерҙә Алтын Урҙа менән Туҡтамыш тигән хан идара итә. Ул Уралдағы башҡорт ерҙәренә ҡул һуҙа. Башҡорт ырыуҙары Туҡтамышҡа буйһонорға теләмәй, ҡаршылыҡ күрһәтә. Иҙеүкәй исемле ғәҙел һәм ҡурҡыу белмәҫ батыр, ҡыпсаҡ, тамъян, ҡатай, табын, юрматы ырыуҙарын бергә туплап, яһаҡ түләмәү, үҙ аллы иректә йәшәү өсөн Алтын Урҙа ханына ҡаршы көрәш алып бара. Туҡтамышҡа «баш эйеп, үҙенә ҙур бейлек алған» Шәғәле тигән аҡһаҡал башҡорттарға хан фарманын килтерә. Фарманға ярашлы, биш ырыуҙан биш батыр, тағы ике данлы һунарсы хан һарайына барып хеҙмәт итергә тейеш. Өҫтәүенә:

Бөтә Урал – Алтайҙа
Данлы йырсы, ҡарт сәсән –
Һабрау тигән уҙаман,
Фарманыма буйһоноп,
Урҙам маҡтап йырлаһын, –

тигән талап ҡуйыла. Биш ырыу халҡы уйлашҡан саҡта, Һабрау уртаға сығып үҙенең һүҙен әйтә. Уның күләмле, кинәйәле

телмәрендә: «Ханға ҡулың бирһәң, уның ҡоло булырһың», – тигән мәғәнә ята. Һабрауҙы тыңлағандан һуң, Иҙеүкәй батыр хан йортона барыуҙан баш тарта. Йырау менән тағы бер ҡат кәңәшләшкәс, янына батырҙар туплап, Алтын Урҙа яғын алған Шәғәле, Дәмми, Ыршаҡ бейҙәргә ҡаршы сыға. Быларҙы ишеткән Туҡтамыш, Уралдан ҡолдар алмаҫҡа шарт ҡуйып, Иҙеүкәйҙе үҙенең һарайына саҡырта. Килһә, хан янындағы ҙур бей итеп ҡуйырға вәғәҙә бирә. Батыр, оҙаҡ уйлағандан һуң, хандың йомшаҡ яҡтарын өйрәнеү, «яман, яҡшының барын үҙ күҙенән үткәреп», һарай серҙәрен белеү өсөн Туҡтамыш янына бара. Ул бында алданыраҡ килгән башҡорт бейҙәренең хан һүҙенән сыҡмай, ул ҡушҡанса эшләп, илде талап йөрөүҙәрен күрә. Өҫтәүенә, Ҡара диңгеҙ буйынан килеп, баш бейлеккә өмөт итеп, хан ҡыҙы Ынйыны алырға ҡыҙыҡҡан Сәләхи Иҙеүкәйҙе тарһына, уға аяҡ салырға тырыша. Туҡтамыш, уның һүҙенә ҡарамай, Иҙеүкәйҙе баш бей итеп ҡуя. Башҡорт батыры һарайҙа ғәҙел хөкөмсө булып таныла, уның абруйы артҡандан-арта. Ат сабыштарында, уҡ атыштарҙа, бүтән төрлө ярыштарҙа берәүгә лә ал бирмәй. Уға Ынйы ғашиҡ була, һунарға бергә сығып йөрөйҙәр. Сәләхи, көнләшеп, Иҙеүкәй менән Туҡтамышты ыҙғыштырыр өсөн төрлө юлдар эҙләй. Иҙеүкәйгә Ғәнәкә исемле ҡыҙ ғашиҡ була, егет тә уны ярата. Унан тыуған улы менән бергә Ғәнәкәне Иҙеүкәй Урал яҡтарына оҙата. Туҡтамыш, Сәләхиҙең ҡотҡоһона бирелеп, Иҙеүкәй Ынйыны ла алып ҡасыр тип, уны юҡ итергә уйлай. Быны һиҙеп ҡалған батыр үҙе үк тыуған яғына ҡаса. Хан, Иҙеүкәй Уралда көс туплап, яу менән килер тип ҡурҡып, ярандарына уның артынан сабырға, ҡыуып етеп, кире борорға ҡуша. Эҙләп киткән сапҡындар «Яйыҡ үтеп, Иҙелдең аръяғында, ҡаяла» Иҙеүкәйҙе осрата. Әммә уның янына Янбай тигәне генә барып, һөйләшергә батырсылыҡ итә. Ул күпме өгөтләп ҡараһа ла, Иҙеүкәй ризалашмай; иленә ҡайтып, Урал буйында ханға яһаҡ йыйғандарҙың барыһын да илдән ҡыуҙыра.

Артабан ул Туҡтамышҡа ҡаршы яу асыу өсөн ярҙам һорау теләге менән Урта Азия яғына, Сатмыр ханға (Аҡһаҡ Тимергә) барырға була. Юлда Ҡабардин хан урлап алып киткән Фирҙәүес исемле ҡыҙҙы Ҡалмыҡ иле эсендә ҡотҡара. Ул Сатмыр хандың ҡыҙы булып сыға. Иҙеүкәй Фирҙәүесте атаһына илтеп тапшыра. Быының өсөн:

Ҡыҙы ҡайтҡас, Сатмыр хан
Илен йыйып, туй яһап,
Иҙеүкәйҙе данлаған.
Ҡыҙын биреп тағы ла,
Бары эшкә баш итеп,
Уны вәзир яһаған.

Туҡтамыш менән дошман булған Сатмыр хан Иҙеүкәйгә ғәскәр бирә.

Иҙеүкәйҙең Ғәнәкәне Уралға ҡайтарыуынан алып был ваҡытҡа тиклем күп йылдар үтеп өлгөрә. Дәһшәтле замандың буталсыҡ шарттарында уларҙың улы Мораҙым атаһын да, әсәһен дә белмәй, башҡорттар араһында Нуретдин тигән исем менән атаһы кеүек үк батыр яугир булып үҫә. Иҙеүкәй Туҡтамышҡа ҡаршы яуға сыҡҡанда, улы, киреһенсә, Туҡтамыш яҡлы булып, Сатмыр хан ғәскәренә ҡаршы көрәшә. Шулай итеп, ата менән ул, бер-береһен белмәйенсә, ҡапма-ҡаршы яҡта һуғышалар. Ҡаты алыш барғанда, ата менән ул йөҙгә-йөҙ осрашып, үҙ-ара ҡылыс күтәрешер хәлгә етә. Шул саҡта уларҙы Мораҙым менән бергә яуға сыҡҡан Ғәнәкә күреп ҡала.

Иҙеүкәйгә «Улың!» тип,
Мораҙымға «Атаң!» тип,
«Ҡан-ҡарымта эҙләргә
Арағыҙҙа яу юҡ», – тип,
Ике араға ташланған.

Ата менән ул икәү-ара аңлашҡас, Мораҙымдың бар яуы Иҙеүкәйгә ҡушыла, улар Туҡтамышҡа бергәләп ҡаршы сығып, хандың башына етеп ҡуялар.

Шулай ҙа, Туҡтамыш ярандарының мәкерлектәре арҡаһында, Иҙеүкәй менән Мораҙымдың аралары бер аҙ боҙолоп тора. Икәүләп Уралға ҡайтҡас ҡына улар тулыһынса аңлашып ҡуялар, артабан төрлө яуҙарҙа бергәләп һуғышалар. Иҙеүкәй ҡаты яраланған аҙаҡҡы алышта, ул йән бирер алдынан, Мораҙым килеп өлгөрә. Батыр улына атаһы «һуңғы ҡат текләп ҡарап, аҙаҡҡы һүҙен» әйтә, уға Урал батырҙан ҡалған ҡылысын тапшыра:

Урал батырҙың улы,
Яра сабып Ирәмәлде,
Иҙел һыуын ағыҙған
Бик боронғо ҡылыс был.

Иҙеүкәй йән биргәс, уның алдан әйткән васыяты буйынса, Мораҙым атаһын аҡ нарға (дөйәгә) һалып, уның артынан эйәрә. Нар, бик күп юл үтеп, Нарыҫтауҙың бер түбәһенә (Башҡортостандың хәҙерге Миәкә районы еренә) килеп туҡтай. Мораҙым Иҙеүкәйҙе ошонда ерләгәс, хәҙерге Баймаҡ районы яҡтарында, «Төйәләҫ һыуы буйында оҙаҡ ваҡыт йәшәгән».

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының дәреслеккә индерелгән М. Буранғолов варианты бына шулай тамамлана. Күрәһегеҙ, был версияла Иҙеүкәй менән Мораҙымдың тыуған төйәге –

Башҡортостан. Әҫәрҙә Уралдағы ер-һыу атамалары йыш осрай. Бигерәк тә, «Урал батыр» эпосындағы Урал менән Шүлгәндең балалары Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар ҡылыс менән ҡаяны ватып, ағыҙып ебәргән ошо исемдәге йылғалар, ҡыпсаҡ, табын, ҡатай, тамъян, юрматы, мең һ. б. башҡорт ырыуҙары ҡабат-ҡабат телгә алына. Эпосҡа Урал батырҙың исеме, уның үлер алдынан халыҡҡа васыят әйтеүенә оҡшаш эпизод, Урал батыр ҡылысының быуындан быуынға аманат итеп тапшырыла килеүе кеүек күренештәр «Иҙеүкәй менән Мораҙым»ды ижад итеүсе һүҙ оҫталарының «Урал батыр»ҙы ла бик һәйбәт белеүе тураһында һөйләй.

Алда әйткәнебеҙсә, тарихи хәл-ваҡиғаларға мөрәжәғәт итһә лә, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы, художестволы ижад емеше булараҡ, уйҙырмаларҙан азат түгел. Ысынбарлыҡта сығышы менән монголдар яуы ваҡытына Яйыҡ буйында тороп ҡалған Манғыт ырыуы кешеһе Идеге (Иҙеүкәй) үлемесле яуҙар ваҡытында Уралды, Башҡортостан ерен күп тапаған. Ошо хәлде оҫта файҙаланып, мәшһүр сәсәндәребеҙ уны эпостың башҡорт версияларының ыңғай геройы дәрәжәһенә күтәргән. Әйтергә кәрәк, башҡа төрки халыҡтарында «Идеге», «Идиге», «Едигей» һәм башҡа исемдәр менән таралған эпостарҙың геройы ла – нигеҙҙә, ыңғай һыҙаттарға бай булған ҡыйыу, батыр, оло ихтыярлы ир-егет. Шулай ҙа, эпостың башҡорт версияларында ул хакимлыҡ, тәхет өсөн түгел, ә үҙ халҡының тыуған төйәге һәм рухи азатлығы өсөн көрәшеүсе шәхес итеп кәүҙәләндерелә. «Иҙеүкәй менән Мораҙым»дың быуаттар буйы телдән телгә күсеп, борондан уҡ яҙмаларға теркәлеп һаҡланыуының да төп сәбәбе, бәлки, шундалыр.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Башҡорт эпостарының тематик төркөмдәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» шуларҙың ҡайһыһына ҡарай? 2. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» китабын (Өфө, 1994) йәки башҡа сығанаҡтарҙы табып, эпосты тулыһынса уҡығыҙ. 3. Класс менән әҫәрҙәге беренсе пландағы геройҙарҙы бүлешеп алып, һәр ҡайһыһы буйынса бәләкәй генә сығыштар әҙерләгеҙ. 4. Һабрау образына иғтибар итегеҙ. Тексҡа таянып, уның авторлыҡ мәсьәләһенә ҡарата әңгәмә ҡороғоҙ, дәлилдәр табырға тырышығыҙ. 5. Эпостың башҡа версиялары тағы ла ҡайһы халыҡтарҙа таралғанлығын асыҡлағыҙ. Ни өсөн тап уларҙа икәнлеген нигеҙләгеҙ. 6. Һеҙ бынан алда «Урал батыр» эпосы менән тулыһынса танышҡайнығыҙ. «Иҙеүкәй менән Мораҙым»дан уға бәйле урындарҙы табығыҙ. 7. Башҡортостан картаһынан (интернеттан) Миәкә районындағы Нарыҫтауҙың ҡайҙа икәнен табығыҙ.

# АУЫҘ-ТЕЛ ӘҘӘБИӘТЕ

Һүҙ сәнғәте системаһында, фольклор һәм яҙма әҙәбиәттән тыш, ауыҙ-тел әҙәбиәте тигән ижади йүнәлеш бар. Ауыҙ-тел әҙәбиәте – профессиональ һүҙ оҫталары тарафынан телдән сығарылып, тексын үҙгәртмәйенсә телдән таратылған һәм авторҙың үҙенең конкрет уй-ҡараштары, эстетик идеалдары, индивидуаль стиле, һүрәтләү саралары сағылыш тапҡан ижад емеше. Тимәк, ауыҙ-тел әҙәбиәтенең авторы була. Күпселек осраҡта ауыҙ-тел әҙәбиәте шиғри формала тыуа, шуға күрә оҙайлы ваҡыт телдән телгә, быуындан быуынға үҙгәрешһеҙ күсеп йөрөй. Уның авторының исеме лә тиҙ генә онотолоп бармай.

Ауыҙ-тел әҙәбиәте ер йөҙөнөң төрлө ҡитғаларында боронғо замандарҙан бирле йәшәп килә. Ул, асылда, күпселек әҙәбиәттәр үҫешендә яҙма барлыҡҡа килгәнгә тиклемге бер этапты тәшкил итә, айырым шарттарҙа яҙманың бөтә социаль ҡатламдарға үтеп инеп бөтөүенә тиклем дауам итә.

Боронғо Һиндостанда, мәҫәлән, халыҡ легендалары, хәрби ҡаһарманлыҡтар темаһына йырлаусыларҙы, урындағы хакимдарҙың сығышын, ғаилә тарихтарын белеп, халыҡҡа еткереүселәрҙе бхарата тип атағандар. Боронғо Грецияның аэдтары байрамдарҙа, дини тантаналарҙа ата-бабаларҙың эштәре хаҡында йырлаған, улар инаныулы ихтирам менән файҙаланған; юлбаҫарҙар уларға ҡул күтәрергә баҙнат итмәгән, каруанда аэдтың булыуы юлсыларҙы бәлә-ҡазанан ҡотҡарып алып ҡалған. Уларҙың ҙур күләмле әҫәрҙәрен рапсодтар яттан һөйләп, халыҡҡа таратҡан. Ирландияла беҙҙең эраға тиклемге IV–III быуаттарҙа профессиональ йырсылар, ниндәй ҡатламға хеҙмәт итеүҙәренә ҡарап, төркөмдәргә бүленгән: друидтар, филидтар, бардтар. Улар барыһы ла үҙ тыңлаусылары алдында телдән сығыш яһаған. Друид күрәҙәсе, им-томсо, табип, бағымсы ролен башҡарған, ул хәрби хеҙмәттән азат ителгән, ил эсендә хөрмәт ҡаҙанған, халыҡ йыйылған урындарҙа йәмәғәтселектең иң алдында король менән

йәнәш барған. Урта быуаттарҙағы Суданда (Африка) хәрби батырлыҡтарҙы данлаусы гриот, Бургундияла һуғышсыларҙы йырлап дәртләндереүсе кантор, Францияла – мосафир йырсы жонглёр, трувер, Германияла – дружина йырсыһы шпоп, берәҙәк шпильман, боронғо руста, Болгарияла – скоморох, Скандинавияла тул, лаулая, скальд, трубадур исемдәре киң билдәле булған.

Авторлы ауыҙ-тел шиғриәте төрки телле халыҡтар әҙәбиәтендә айырыуса ҙур урын тотҡан. Ул боронғо дәүерҙәрҙән алып XX быуат урталарына тиклем яҙма әҙәбиәт менән йәнәш йәшәгән. Яҙма әҙәбиәт ғәрәп, фарсы, яҙма төрки телдәрен яҡшы белгән ҙур уҡымышлы кешеләргә тәғәйенләнһә, ауыҙ-тел әҙәбиәте хеҙмәтсән халыҡ массаларының ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән. Төрки халыҡтарында ла һүҙ оҫталарының үҙ исемдәре бар. Төрөктәрҙә, әзербайжандарҙа – аҙан, ашуғ, яҡуттарҙа – олонхосут, төрөкмәндәрҙә, үзбәктәрҙә – бахшы, нуғайҙарҙа – кедай, ҡырғыҙҙарҙа – манассы, ҡаҙаҡтарҙа – йырау, аҡын һ. б. Башҡорттарҙың «Урал батыр» эпосы ижад ителгән дәүерҙәге иң боронғо ауыҙ-тел ижадсылары һынсы тип аталған. Артабанғы быуындарҙа баҡсы, йырау тигән исемдәр менән йөрөтөлгән. Ә инде тиҫтәгә яҡын быуат самаһы улар беҙҙә сәсән тигән мәшһүр исем менән билдәле.

Башҡортостан ерлегендә йырауҙар һәм сәсәндәр эпос, әйтеш, ҡобайыр, йыр жанрҙарында һәр саҡ халыҡ массалары талаптарын ҡәнәғәтләндерерлек мөһим темаларҙы күтәреп сыҡҡан. Ниндәй генә өлкәгә мөрәжәғәт итмәһен, улар замандың көнүҙәк проблемалары менән янған, алдағы хәлдәр өсөн дә борсолған; ижад емештәре донъя тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙарға, заманға һәм замандаштарына баһа биреүгә, раҫлауға, өндәүгә, саҡырыуға ҡоролған.

Башҡорттарҙа борон-борондан ыҙан, тәбиғәт, тормош-көнкүреш, хеҙмәт-кәсеп, байрам йолалары менән бергә яу-көрәш ғөрөфғәҙәттәре лә йәшәп килгән. Әйтәйек, яу алдынан бер-береңә өндәшеү – оран һалыу, ҡаршы яҡ дошман менән әйтешеү, ҡоралға үтенес белдереү, алыш шартын билдәләү, дошманға һабаҡ биреү, еңеп ҡайтҡас – ҡалҡан төйөү, ҡылыс һындырыу. Уларҙың ҡайһылары шиғри һүҙ ҡатнашлығында тормошҡа ашырылған. Батырлыҡ, мәргәнлек менән бергә, яуҙа һүҙ көсө, тел ярҙамы ла ҡулланылған. Яу шарттарының ғәҙәттән тыш-лығын, көсөргәнешлеген иҫәпкә алғанда, һүҙ көсөнөң ҡәҙере тыныс ваҡыттағыға ҡарағанда нығыраҡ баһаланған. Һуғыштың характерын, төрлө мәлдәрен сағылдырған йолалар, бигерәк тә уларҙың үлсәмле телмәр менән әйтелгәндәре, һуңыраҡ яугирҙарҙың үҙҙәре араһынан махсус һүҙ оҫталарын тыуҙырып, ҙурыраҡ күләмле героик йөкмәткеле эпик әҫәрҙәрҙең ижад ителеүенә этәргес яһаған. Сөнки донъя ауыҙ-тел әҙәбиәтендә иң киң

таралған, борондан күтәрелә килгән мөһим мәсьәләләрҙең береһе – яу темаһы тирәһенә барып тоташа. Батырлыктарҙы данлаусы һүҙ оҫталары, ғәҙәттә, яугирҙарҙың үҙ араһынан сыҡҡан.

Яу-көрәш тематикаһы йырауҙар, сәсәндәр ижадында өс йүнәлешкә бүленә. Беренсеһе – батырҙарҙы, батырлыкты, хәрби юлбашсыларҙы данлау. Унан ҡала, дошманға мөрәжәғәт, уны фашлау, мыҫҡыллау. Өсөнсөһө – тыуған тупраҡты илбаҫарҙарҙан һаҡлау. Артабан күрербеҙ, Аҡмырҙа менән Ҡобағош әйтешендә был мәсьәләләрҙең өсөһө лә бик асыҡ сағылыш тапҡан.

Тәүге йүнәлешенән айырым бер тематика үҫеп сыға. Ул хәрби юлбашсыларҙан, батырҙарҙан бигерәк, хакимдарға ҡағыла. Ил, ырыу башлығына мөрәжәғәт, уны данлау йә ҡурсалау – ауыҙ-тел әҙәбиәтендә шулай уҡ борондан килгән, киң таралған күренеш. Халыҡ массалары борон-борондан донъя именлеген, ил-йорт ҡеүәтен уның башында торған кешенең аҡылында, булдыҡлылығында, изге күңеллелегендә күргән; һүҙ оҫтаһы уға йоғонто яһарға, ошо сифаттарын үҫтереп, өҫкә сығарырға тырышҡан. Йәғни уның хакимға мөрәжәғәте үҙ-ара шәхси мөнәсәбәткә түгел, ә, хәрби шарттарҙағы кеүек үк, ил, халыҡ яҙмышын ҡайғыртыуға ҡоролған. Хакимға йырсы халыҡ массаларының уй-ҡараштарын еткергән; шуларға ҡушып, үҙенең фекер-теләктәрен дә белдергән, уға кәңәшсе, ярҙамсы ролен үтәгән. Бының өсөн һүҙ менән эш итеүсе аҡыл эйәһенә юлбашсының кешелек һыҙаттарын, ыңғай, тиҫкәре яҡтарын, йомшаҡлыҡтарын белергә кәрәк булған. Һүҙ оҫтаһы уның үҙен генә өйрәнеп ҡалмаған, сығышын – ата-бабаларын, шәжәрәһен дә асыҡлаған. Йәмәғәтселек һүҙенә ҡолаҡ һалыр юлбашсы ошондай ярҙамсыһының ҡәҙерен белгән: һүҙ оҫтаһының аҡыллы кәңәшенә мохтажлыҡ кисергәндә, уға үҙе үк ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән, йыш ҡына үҙ янында, һарайында тотҡан. Һүҙ оҫтаһы ҡайһы саҡта ырыу юлбашсыһына ҡарағанда ҙурыраҡ хакимлыҡ менән файҙаланған, сөнки ул үҙенең кәңәштәрендә рухдәрт менән эш иткән; уның фекерҙәре закон көсөнә эйә булған. Шуға күрә батша, хан йортонда йәшәгән һүҙ оҫталарын сикләнгәнлектә, халыҡтан айырылғанлыҡта ғәйепләргә ашығырға ярамай. Хаким йөҙөндә ауыҙ-тел һүҙ оҫталары ил, халыҡ яҙмышын күргән.

Улар шулай уҡ халыҡтың үҙенә мөрәжәғәт иткән. Хеҙмәтсән массалар менән һөйләшеү йырауҙар, сәсәндәр ижадының үҙәк урынын биләй. Был ҙур тематик йүнәлеш тә, үҙ сиратында, йәнә бер нисә төркөмгә бүленә. Улар халыҡ массаларына асылда ике юл – фәлсәфә һәм өгөт-нәсихәт, кәңәш аша еткерелә. Күтәрелгән мәсьәләләрҙең барыһы ла бер епкә теҙелгән мәрйен бөртөктәрендәй бәйле. Бына, мәҫәлән, мунсаҡҡа иң алдан башлап

индерелгән мәрйен – Тыуған ил, уның ожмахтай хозур тәбиғәте. Шуға бәйләп – илдең именлеге хаҡында фәлсәфә. Ә именлекте һаҡлар өсөн батыр йөрәкле аҫыл ир-егеттәр кәрәк. Батырҙарға бәйләп, тарихҡа ҡараш ташлана: кемдәребеҙ бар ине, үткәндәге ҡайһы ир арыҫландарыбыҙ, ниндәй хәлдәребеҙ менән ғорурлана алабыҙ? Дошмандан ҡурсаланған имен илдә ниндәй кешеләр йәшәргә тейеш – бынығы, әлбиттә, әҙәп-әхлаҡ мәрйене. Имен тормошто алып барыусы ил тотҡаһы – арҙаҡлы шәхестәр. Быларҙың барыһы ла халыҡҡа тәғәйенләнгән.

Йырау һәм сәсәндәр ижадының төп асылы, тематик йүнәлештәре бына шуларҙан ғибәрәт, хәҙер уларҙың үҙҙәренә айырым-айырым туҡталайыҡ.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Ауыҙ-тел әҙәбиәтен халыҡ ижады менән бутамаҫ өсөн уның ниндәй билгеләрен хәтерҙә ҡалдырырға кәрәк? 2. Ауыҙ-тел әҙәбиәте донъяның ҡайһы төбәктәрендә таралған? 3. Төрки телле халыҡтарҙа һәм башҡорттарҙа улар ниндәй исемдәр менән аталған? 4. Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтенең төп тематик йүнәлештәренә иғтибар итегеҙ.

## XIV–XVI БЫУАТТАР ЙЫРАУҘАРЫ

XIV–XVI быуаттарҙа йәшәгән Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыйыз йырауҙар ижады башҡорттар, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар һәм шул дәүерҙә йәшәгән нуғайҙар өсөн уртаҡ һанала. Был һүҙ оҫталарының береһе лә хәҙерге Башҡортостан ерендә тыумаған, шулай ҙа уларҙың һәр ҡайһыһы бөтә Урта Азияны, Урал–Волга буйын гиҙеп йөрөгән, халыҡтары менән аралашҡан, башҡорт ерҙәрен дә әҙ тапамаған. Йырауҙар импровизацияларында беҙҙең яҡтарҙағы ер-һыу атамалары йыш осрай, әҫәрҙәре Башҡортостанда күп таралған, заманында халыҡ уларҙы яттан белгән, киләһе быуындарға еткергән. Йырауҙар күпселек осраҡта башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай һәм башҡа төрки телле халыҡтарҙы берҙәй борсоған мәсьәләләргә мөрәжәғәт иткән, ауыҙ-тел һүҙ сәнғәтендә уларҙың уртаҡ талаптарын ҡәнәғәтләндергән.

### Һабрау йырау

Башҡортостанда ғына түгел, исеме һәм ижады таралған күрше төрки халыҡтарының барыһында ла Һабрау башҡа йырауҙар араһында алғараҡ ҡуйыла. Был легендар һүҙ оҫтаһының йәшәгән йылдары XIV быуатҡа – XV быуат баштарына тура килә. Исеме төрки халыҡтары хәтеренә тәрән уйылып ҡалыу самаһына ҡарағанда, уның ижады ла оҙайлы ғүмеренә торошло булған.

XIV–XVI быуаттар йырауҙары араһында Һабрау исеменең бер башҡа юғарыраҡ тороуының ябай ғына сәбәптәре бар. Шуларҙың береһе – йырау образының «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосына инеп китеүендә. Эпос ҡасан, ҡайһы тарафтарға тарала – легендар йырау исеме лә шунда бергә эйәреп йөрөй. Ә «Иҙеүкәй менән Мораҙым» – төрки телле халыҡтарҙың уртаҡ эпосы. Ул төрлө варианттарҙа телдән телгә күсеп, алыҫ яҡтарға таралған.

Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтендә Һабрауҙың әҫәрҙәре XX быуаттың 70-се йылдарына тиклем үҙ авторлығы менән билдәле түгел ине. Йырауҙар ижадын беренселәрҙән булып өйрәнеүсе Ғ. Хөсәйенов тәү башлап: «Һабрау йырау исеменә ҡараған тулғау һәм ҡобайырҙың милли версияларын сағыштырып, төрлө варианттарын юллап табып, тәүге уртаҡ текстарын ҡайтарырға ла мөмкин», – тигән фекер әйтте. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосына Һабрау үҙенең образын да индереп ебәргән.

Был эпос – үҙ заманының дәһшәтле ваҡиғаларын, геройҙары прототиптарын күреп белгән, үҙе шулар араһында ҡатнашҡан кеше тарафынан ижад ителгән әҫәр. Шуға күрә Һабрауҙың ундағы телмәрҙәрен ысынлап та үҙенеке тип өйрәнә алабыҙ. Эпоста улар – бөтәһе бишәү.

Беренсе телмәрҙә иң тәүҙә Уралтауҙың тышҡы картинаһы бирелә. «Олатайға, әсәйгә» төйәк булған тыуған ер фонында – «борон, борон, борондан» йәшәгән башҡорт ырыуҙары, аҡһаҡалдары, бейҙәре, ҡош-ҡорто, ир-азаматтары, ҡыҙҡыҙҡыны, ҡурайы... Тик быларҙың бөтәһе лә, әйтерһең, артта, үткән заманда булған һымаҡ итеп әйтә:

Батырын атта уйнатып,
Уяһында үҫкән ҡурайын
Егетенән уйнатып,
Ҡырғын күргән иленең
Моңон-зарын һыҡтатып,
Һылыуынан йырлатып,
Төйәк булған тау ине.

Артабан Һабрау үҙ тыңлаусыларын хәүефле уйланыуҙарға дусар итә: эйе, Уралың – торғаны бер ожмах; ләкин ереңә ҡыҙыҡҡан сит ханға ҡул бирһәң, ул һинеке түгел – ошо ожмахтай төбәгеңдәге байлыҡтың барыһы ошо ханға булыр.

Икенсе телмәрҙә әйтелгәнсә, ил именлеген ҡайғыртып йөрөгән йәш Иҙеүкәй, ханға яһаҡ йыйырға тигән фарман илде ҡужғытҡан саҡта, кәңәш һорап Һабрауға килә. Йырау, йәш батырҙың зирәклеген һынап ҡарар өсөн, уға йомаҡ әйтә. Иҙеүкәй һынатмай. Боронғо батырҙарҙың һүҙ оҫтаһы ла, аҡыл эйәһе лә

булғанлығы билдәле; хәрби етәксегә сәсәнлек сифаты дошманы өсөн генә түгел, үҙ ғәскәре өсөн дә кәрәк. Юғиһә бихисап яугирҙы нисек тыңлатаһың? Шул сифат Иҙеүкәйҙә лә һаҡланған. Егет йомаҡтарға дөрөҫ яуап бирә. Был телмәрҙе Һабрау йырау менән Иҙеүкәй батырҙың икеһенең әйтеше тип ҡарарға мөмкин.

«Әй, ҡартыңмын...» тип башланған өсөнсө телмәр, йөкмәткеһенә ҡарағанда, йырау ғүмеренең бик тә олпат йәшендә сығарылған. Төрки халыҡтарында борондан килгән матур йола буйынса, оло кешенең үҙе лә, әйтер һүҙе лә хөрмәтле. Был телмәр халыҡҡа еткерелгәндә, Һабрау, бәлки, үҙ замандаштарының күпселегенән өлкәнерәк булғандыр; шуны күҙ уңында тотоп, замандаштарын иҫкәртеү рәүешендәрәк өндәшкәндер. Төп һүҙ йырауҙың оҙаҡ йәшәүе, үҙ ғүмерендә күп хандарҙы күреүе хаҡында бара. Ул бер төркөмгә йәки бер халыҡҡа ғына түгел, ә халыҡтарға тәғәйенләнгән. Ошо «Әй, ҡартыңмын...»дың үҙендә генә лә күршеләш төркиҙәрҙең һәр ҡайһыһы өсөн тәғәйен мөрәжәғәт бар һымаҡ. Телмәрҙең төрлө варианттарын сағыштырып ҡараһаң, һәр халыҡтың үҙ төбәгендә идара иткән хакимдар атала, улар араһында хан булмаған юғары даирә кешеләре лә бар. Башҡорт версияһында Сыңғыҙ, Абылай, Ҡара хандар менән бергә Аҡҡөлөмбәт, Ҡараҡөлөмбәт мырҙа, Бабсаҡ һәм Күсәктең исеме телгә алына. Төрлө тарафтарҙы бер итеп ил гиҙеп йөрөгән йырау, ҡайһы төбәктә сығыш яһаһа, шул илдең хакимын күреп белеп, исемен атап әйтеүе ихтимал. Телмәрендә бер юлы ун бер хакимды үҙенә ҡаратып тыңлатҡанын белдергән юлдар ҙа бар:

Иҙелдең ҡибла яғында,
Хандың алтын һарайында,
Ун бер батша бар булды.
Ун бер батша алдында
Ҡумыҙ алып, һүҙ һөйләп,
Толғау әйткән бабаңмын.

Дүртенсе телмәр баштан алып аҙағына тиклем Урал тураһында ғына. Ата-бабаларыбыҙ төбәгенә гимн тип тә атап булыр ине уны. Әммә ҡатмарлы, хәүефле гимн. Уралды сит-яттарҙан һаҡлауға саҡырған мөрәжәғәт тә, фәлсәфәүи уйланыуҙар ҙа, тарихты иҫкә төшөрөү ҙә, дидактика ла бар унда. Уралды һылыу ҡыҙындай яратҡан батырҙан башлап, бөтәһе лә һөйә: кейеге лә, үҫемлеге лә, «Уралым!» тип ҡайтҡан Ҡуңыр буға быҙауы ла!

Уралда тыуған баланың
Теле сыға башлағас,
«Әсә» тигән һүҙҙән һуң,
Икенсеһе – «Уралтау»!

Илде туфандай ҡаплаған дейеү-пәрейҙәр заманында йәшәгән, «Аҡбуҙ толпарын менеп», дошманына ҡаршы барған Урал батыр иҫкә төшөрөлә. Данлы Уралтауҙа уның эҙҙәре ҡалған, киң Уралыбыҙҙы «ете ырыуҙың бары» төйәк иткән. Йырау Урал батырҙың исемен тиккә генә Уралтауға бәйләп ҡуҙғатмай. Артабан ул Уралдың үткәнен һәм бөгөнгөһөн сағыштыра. Йырауҙың әйтер һүҙе ап-асыҡ: элек уны батырҙар күҙ ҡараһы кеүек һаҡлай ине, ә бөгөн ҡайҙа һуң улар?

Бишенсе телмәрҙә «тулған айҙың моңло булғаны – битен монар алғаны» мотивы үҙәккә ҡуйыла. «Ир-егеттең үлгәне – илен дошман алғаны» фекерен биреү өсөн тәбиғәттән әллә күпме ассоциатив йәнәшәлек килтерелә. Ил – батырһыҙ, батыр илһеҙ булырға тейеш түгел, тигән уй үткәрелә.

**Асан Ҡайғы**

Асан Ҡайғы йырау XIV–XV быуаттарҙа йәшәгән, сама менән 1361–1370 йылдар тирәһендә тыуған. Риүәйәттәр буйынса, атаһының исеме Сабит, ҡушаматы Саяшты булған, йырау үҙе йөҙ йылдан ашыу ғүмер кисергән. Саяшты – бөркөт һунары менән етәкселек итеүсе кеше, тигән һүҙ. Асан бик йәшләй үк күп яҡлы һөнәр эйәһе булып танылған: думбырала оҫта уйнаған, көй, өләң сығарған. Атаһынан күрмәкселер, мәргән ата белеүе менән дан алған – кәрәк икән, ҡоралайҙың күҙенә атып тейҙергән. Башҡорттар, ҡаҙаҡтар араһында йөрөгән «Ғайса улы Әмәт» исемле яҙма ҡомартҡының бер вариантында, Асан Ҡайғы Ағиҙел буйында йәшәгән, тип әйтелә. Әлбиттә, атаҡлы һүҙ оҫтаһы булараҡ, ул бер урында ғына төпләнеп ҡалмаған. Төрлө сығанаҡтарға таянып әйткәндә, Ағиҙел буйында, хәҙерге Аҡтүбә яҡтарында, боронғо Сарай, Ҡарағалпаҡ ерҙәрендә уның аяҡ эҙҙәре ҡалған. Ғалимдар Асан Ҡайғыны Сыңғыҙ хандың замандашы һәм хәрби етәкселәренең береһе Майҡы бейҙең алтынсы быуын нәҫеле тип билдәләй. Ә Майҡы бейҙең исеме менән башҡорттарҙың табын, тырнаҡлы ырыуҙары шәжәрәләре башланып китә.

Асан Ҡайғы сығармаларында өс тематик төркөм күҙәтелә: Йәнебәк ханға төбәп әйткән шиғри мөрәжәғәттәре; тормош-көнкүреш хаҡында фәлсәфәүи уйланыуҙар, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре буйынса халыҡҡа өгөт-нәсихәт.

Мөрәжәғәттәрендә йырау үҙен Йәнебәк хандан бер башҡа өҫтөнөрәк тота, уға әйтер һүҙе ҡәтғи, «тауышы» уҫал. Хан менән тәүәккәл һөйләшеүенең хикмәте – үҙенең артында халыҡ көсөн тойоуында. Яңғыҙы түгел, халыҡ исеменән өндәшә ул. Идара итеүҙең дөйөм һәм конкрет тормошҡа ашыра торған мәсьәләләрен ҡуҙғатып, хакимға аныҡ дәғүәләрен белдерә:

Урынһыҙ килгән һалымдан
Хазинаңды тултырҙың
Алтын менән көмөшкә...

Йырауҙың асыҡтан-асыҡ өгөт-нәсихәткә, дидактикаға ҡоролған импровизациялары автор шәхесенең ижтимағи тормоштағы дәрәжәһен билдәләй. Хакимдарға тураһын әйтеп була, ә халыҡтың үҙенә кәңәш биреү еңелдән түгел. Бының өсөн бөтә илдә абруй ҡаҙанырға, хеҙмәтсән массаларҙың һиңә ҡарап тороуын, һүҙеңә мохтажлыҡ кисереүен тойорға кәрәк. Аҡылы булған кеше шундай шарттарҙан тыш өгөт-нәсихәткә тотонмаясаҡ. Ә йырау исемен йөрөткән кеше – аҡыл эйәһе. Уның «Атанан алтау тыуҙыҡ, тип...», «Иҙел бул да, Яйыҡ бул...» тип башланған дидактик әҫәрҙәре тормош-көнкүреш, ғаилә мәсьәләләренә ҡағыла:

Атанан алтау тыуҙыҡ, тип,
Ашҡынып яуап атмағыҙ.
Һөйгәнем аҫыл, арыу, тип,
Хаҡ сығарып ятмағыҙ.
Атамдың аты күптер, тип,
Атты башҡа тартмағыҙ...

Асан Ҡайғы импровизацияларында фәлсәфә иң үҙәктә тора, ижадының төп асылын билдәләй. Заманында уны ғалимдар «дала философы» тип атаған. Йырауҙың фәлсәфәүи уйланыуҙар өлкәһе киң. Ул тереклек итеүҙең көндәлек ығы-зығылары менән түгел, ә тормоштоң оло, юғары төшөнсәләре менән эш итә: ил, халыҡ, хаким, ер, йәшәйеш, дуҫ-дошман, яҡшылыҡ-яманлыҡ, ир-егет, дан-шөһрәт...

Аҡыллының билгеһе –
Үткән эште ҡыумаһа.
Ямандарҙың билгеһе –
Яуға ҡаршы тормаһа,
Залимдарҙың билгеһе –
Ярлының малын урлаһа.

Уның ижады моңһоу фәлсәфә менән һуғарылған. Йырау ниҙелер эҙләй, көтә, борсола. Риүәйәт буйынса, бер заман Асан, атҡа атланып, яҡшы ерҙәр эҙләп сығып китә. Тапҡан төбәктәренең бөтәһен дә оҡшата: мал-тыуар көтөр өсөн һәр ҡайһыһы үҙенсә уңайлы. Әммә йырау ҡәнәғәт түгел. Төрлө яҡлап ҡулай булған, «һыуы – һөт, яры – бал, ҡаймаҡ» кеүек үҙәнде эҙләй. Ни бары хыялында ғына таба. Тик ысынбарлыҡта ундай ер булмағанына ҡайғыра, хафалана. Асандың «Ҡайғы» тигән ҡушаматы ла шунан килеп сыҡҡан икән...

Асан Ҡайғының ижадында географик төбәктәр, ер-һыу атамалары бик аҙ күрһәтелгән. Улары ла Башҡортостан ерҙәре менән генә бәйле: Уйыл, Иҙел, Яйыҡ. Был атамаларҙы ул һоҡланып та, моңһоуланып та иҫкә ала («Күлдең һыуын яманлап, Иҙел

ҡайҙан табырһың?»). Йырау ғүмер буйы хыялында йөрөткән ер ошолор, бәлки? Юғиһә уның ижадында түбәндәге юлдар тыумаҫ ине:

Иҙел булһа – илең бар,
Илең булһа – ерең бар,
Ил бар ерҙә өнөң бар,
Ил бар ерҙә көнөң бар...

**Ҡаҙтуған**

Ҡаҙтуған Һөйөнөс улының тормош юлы ла, ижады ла бик аҙ билдәле. Ул XV быуат урталарында Волганың түбән яғында, Аҡтүбәнән көнбайышта ятҡан Ҡыҙыл Яр тигән ерҙә тыуған, ҡара ҡыпсаҡ ырыуынан. Ата-бабалары батыр булған. Тарихи сығанаҡтарҙа Ҡаҙтуған үҙе лә «батыр» һәм «шағир» тип иҫкә алына; риүәйәттәр буйынса ла көрәшсе, яугир, батыр, йырау булараҡ танылған. Кәүҙәһенең тәпәшлеге арҡаһында «ҡарға буйлы» тип йөрөткәндәр икән, йәнәһе. Ғалимдар Ҡаҙтуғандың Аҡтүбә һәм Бузан йылғалары буйында йәшәгән төрки ҡәбиләләренең ырыу башлығы булыуы, XV быуаттың икенсе яртыһында ырыуы менән бергә тыуған яҡтарынан ситкә китеп, ҡаҙаҡ ханлығы эсенә инеүе тураһында яҙа. Тыуған, үлгән йылдары билдәһеҙ.

Беҙҙең көндәргә Ҡаҙтуғандың өс кенә импровизацияһы килеп еткән. Улар XIX быуат башынан бирле төрлө баҫмаларҙа донъя күргән. Әммә ошо өс кенә әҫәр буйынса ла йыраудың ижади йөҙөн, индивидуаль үҙенсәлеген ярайһы уҡ төҫмөрләргә була. Иң алда күҙгә ташланғаны – Ҡаҙтуғандың «мин»лек тойғоһо, кешелек, авторлыҡ бәҫе. Был бик тәбиғи. Ғәскәр башлығы, ырыу юлбашсыһы үҙенең ижтимағи тормошта тотҡан урынын бик һәйбәт аңлап, шуны ижадында ла сағылдырған. Уны етәксе рухлы итеп тәрбиәләүҙә ата-әсәһенең дә роле барлығын онотмай йырау: ғорурланып, хөрмәтләп, иң мөһиме, тыуған ер менән бергә ҡушып телгә ала:

Ялан да ялан, ялан йорт,
Аҡыл урҙам ҡунған йорт,
Атам беҙҙең Һөйөнөс
Кейәү булып барған йорт,
Әсәйебеҙ Буҙтуған
Килен булып төшкән йорт.

Юмор ҡатыш бәҫлек тойғоһо менән үҙен дә шунда ҡыҫтырып ебәрә:

Ҡарғалай бынау Ҡаҙтуған
Батыр булып тыуған йорт.

Ҡаҙтуғандың билдәһеҙ күләмдәге ижадынан әлеге өс шиғыр уның үҙенең өс һыҙатын матур итеп һынландырып бирә. Берәһе

ни бары 17 генә юлда йыраузың – йыраулыҡ, яугирҙың – яугирлыҡ, юлбашсының юлбашсылыҡ сифаттарын аса; ошо өс сифатты бергә туплаған кешенең портретына, ҡиәфәтенә тиклем тасуирлап бирелә. Ә йырау булараҡ, һүҙе арбау дәрәжәһендә тылсымлы, ярһыу аттарҙы сабып барған еренән тотоп туҡтатыр, бөтә урҙаны үҙ ҡулында тотор көскә эйә. Ғөмүмән, үҙ замандаштары араһынан һис кемгә оҡшамаған, үҙенә башҡа айырылып торған кеше ул.

Икенсе шиғыры – яугирлыҡ хаҡында. Йырау яу атрибуттарын ғына һайлап алып, шуларға аңлатма бирә: дошман ҡанын көйҙөргән ҡылыс, арыу белмәҫ ат («арғымаҡтың балаһы арыған һайын тиң юртыр»); илен һаҡларға әҙер торған ғәйрәтле ир-егет («Азамат ирҙең балаһы ябыҡҡанын белдермәҫ, ямандар мәҙәк ҡылыр тип»).

Ә яугир ни өсөн ҡулына ҡорал ала? Әлбиттә, тыуған тупраҡҡа дошман аяғы баҫыу ҡурҡынысы тыуғанда. Үҙ илен батырҙан да нығыраҡ яратҡан кеше юҡтыр, бәлки. Яугир һәм йырау исеме менән дан алған Ҡаҙтуғандың өсөнсө әҫәре тыуған ерҙең хозур тәбиғәтен тасуирлай. Ифрат та беҙҙең Урал, Иҙел яҡтарына оҡшаған уның тыуған төбәге. Ҡаҙтуған был яҡтарҙы үҙ күҙҙәре менән күргәнме, әллә уның шиғри тауышы беҙҙең тарафтарға ла килеп ишетелеп, башҡорт ҡобайырҙары моңона ҡушылып киткәнме:

Ябағалы йәш тайлаҡ
Ярҙай аҙау булған ер,
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йәйелеп мең ҡуй булған ер.

**Шалғыйыз йырау**

Шалғыйыз Теләнес улы XV–XVI быуаттарҙа йәшәгән. 1465 йылда Яйыҡтың һул яҡ ерендә тыуған. Атаһы – дала феодалы, әсәһе Яйыҡ аръяғы урҙаһы хакимы Муса бейҙең ҡыҙы булған. Шалғыйыз сабый сағынан уҡ үкһеҙ етем ҡалып, әсәһе яғынан өләсәһе ҡулында – Муса бей ғаиләһендә тәрбиәләнә. Бейҙең балалары уны яратмай. Шуға ҡарамаҫтан, Шалғыйыз алғыр батыр булып үҫә. XV быуаттың 80-се йылдарына арҙаҡлы яугир һәм данлыҡлы йырау булараҡ дан ала. Шул ваҡыттарҙа Нуғай урҙаһы башлығы Тимер бейҙең яҡындары иҫәбендә була. Хәрби походтарҙа ҡатнашып, йә Тимерҙең үҙе һәм яҡындары менән бергә йөрөп, байтаҡ ерҙәрҙе күрә, Ҡырым, Төньяҡ Кавказ, Дон яҡтарына аяҡ баҫа. Ул 1560 йылдар тирәһендә донъя ҡуя.

Шалғыйыздың хәҙерге көндәргә килеп еткән әҙәби мираҫы XIX быуаттың икенсе яртыһынан алып матбуғатта донъя күрә килә, XX быуат башында рус теленә тәржемә ителгән. Башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай халыҡтары араһында таралған

ошо импровизацияларын өс төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин: 1) Тимер бейгә әйткән мөрәжәғәттәре; 2) фәлсәфәүи йөкмәткеле лирик сығармалары; 3) әйтешкә тартым «Ир Шобан» әҫәре.

Тимер бейгә төбәп әйтелгән ике импровизацияһының тәүгеһендә Шалғыйыз уның кәмселектәрен үҙенә туп-тура әйтеп бирә, аҡыллы кәңәштәрен дә еткерә. Мөрәжәғәттең стиле үҙенсәлекле: йырау, әйтерһең, ике ҡыллы думбырала уйнап, фекерҙәрен баштан аҙаҡҡаса ике тауышлы моң менән бирә. Береһе – туранан-тура әйтер һүҙе, икенсеһе – уға эйәреп, дала тәбиғәте күренештәренең сағылышы. Был ҡылдар моңо ифрат тигеҙ һәм бергә яңғырай. Шалғыйыз үҙе генә түгел, уның тыңлаусыһы ла дала тәбиғәте «телен» тулыһынса аңлап, шул телдә аралаша алыуы һиҙелеп ҡала:

Киң арҡала һырт һуҡмаҡ,
Төндә йөрөр төлкө үтер.
Яманға сереңде ҡушып һүҙ әйтмә,
Күп эсендә көлкө итер.

Йырау Тимер бейгә мәҡәл-әйтемдәргә торошло тапҡыр, кинәйәле тел менән кәңәштәр бирә: «иҫән саҡта малың бир ҙә батыр йый»; «дошманыңдан бер һаҡлан, ил эсендә айҡашып уйнап йөрөгән дуҫтарыңдан мең һаҡлан»; «яманға сереңде ҡушып һүҙ әйтмә, күп эсендә көлкө итер...»

Икенсе мөрәжәғәт Тимер бейҙең хажға китергә әҙерләнеү уңайы менән әйтелгән. Шалғыйыз уны оҙайлы сәфәргә сыҡмаҫҡа саҡыра, сөнки хужаһыҙ йортта тәртипһеҙлектәр тыуыу ҡурҡынысы бар. Бында йырау бейҙең бары тик ыңғай яҡтарын ғына асып һала: ата-бабаларының лайыҡлы улы, халыҡты ҡурсалаусы ғәҙел, уҡымышлы, аҡыллы хаким. Бей осоп барған аҡҡоштоң еҙ ҡанатын һындырған, ҡуяндың ҡуш ҡолағын тондорған бөркөткә тиңләнә. Шалғыйыздың ошо телмәрен ишеткәндән һуң, хан үҙенең сәфәрен кисектерә. Был ике әҫәрҙә хакимдың да, йыраүҙың үҙенең дә төп сифаттары төрлө яҡлап асыла. Тимер – бер ҡараһаң, кәңәштәргә ҡолаҡ һалмай хаталанған үҙ һүҙле еңмеш; икенсе ҡараһаң, бөтә ил халҡы күҙ терәп торған булдыҡлы хужа. Шалғыйыз – тоғро хеҙмәтсе лә, йәберҙе ғәфү итә алмаусы ғорур шәхес тә.

Шалғыйыздың яугирлығы уның дала лирикаһына һиҙелерлек эҙҙәрен һалған. Бөтә импровизациялары дала тәбиғәте моңо менән һуғарылған. Күп кенә текстар авторҙың хәрби походтар кешеһе икәнлеген күрһәтеп тора: эйәрле ат, үткер ҡылыс, мәргән уҡ, ҡорос дүңгәләкле күлдәк, көмөш торҡа (шлем), дошманды еңер батыр образдары шиғырҙарға кинәйәле мәғәнә һала. Уның шиғриәтендә беренсе планда – яҡшылыҡ һәм яманлыҡ төшөнсәһе. Йырау фекеренсә, был донъяла уларҙың икеһе лә тулып ята.

Яҡшы ла килер был күпкә,
Яман да килер был күпкә, –

ти ул. Башыңа бәлә төшмәһен тиһәң, айыра белергә кәрәк, яман дуҫың һине бөтә донъяға рисуай итер.

Шалғыйыз лирикаһында туғанлыҡ мөнәсәбәттәренең нескәлектәрен сағылдырған импровизациялар үҙҙәре бер төркөмдө тәшкил итә. Улар ҙа яҡшылыҡ – яманлыҡ, дуҫ – дошман төшөнсәләре менән тығыҙ бәйләнештә бирелә. Авторҙың ҡәтғи раҫлауынса, яҡын туғаның һиңә рухташ икән – дуҫ, уртаҡ рухлы булмаһа – дошман.

Яйыңды белгән ҡәрендәш –
Ул ҡәрендәш һәм юлдаш.
Яйыңды белмәҫ ҡәрендәш –
Үҙе дошман, үҙе хас.

Уның туғанлыҡҡа арналған шиғри юлдары – үҙе ҙур бер фәлсәфә. Йүнһеҙ туғаныңа ышанһаң, дошманға ышаныу менән бер – ҡасан да булһа хыянат итәсәк. Ә ышаныслы туған был тормошта бик тә кәрәк. Кереше ныҡ тартылған йәйә менән ҡайын уҡты ла сәпкә мәргән тейҙереп булған кеүек, яныңда ағай-энең барҙа «бил быуарҙан һаҙ кисһәң» дә, батмай, имен сығырһың.

Шалғыйыз ижадының иң төп ҡаҙаныштарының береһе – «Ир Шобан» әҫәре. Алтын Урҙаның Ир Шобан исемле батыры үҙенең юлдаштары менән Ҡабарҙы (икенсе бер сығанаҡта – ҡалмыҡтар) еренә үтеп инеп, Биғазы тигән кешенең йылҡы көтөүен әйҙәп алып китә. Малдарҙың хужаһы, бер төркөм ярҙамсылар алып, уларҙың артынан ҡыуа төшә. Төркөмдәр осрашҡас, Ир Шобан менән Биғазы араһында һөйләшеү була. Ир Шобан тирәяҡҡа дандары таралған батырҙарҙың исемдәрен атап ҡына ҡалмай, һәр ҡайһыһының батырлыҡ сифаттарын һанап бирә. Был һүҙҙәрҙе ишеткән Биғазы, ундай батырҙарға ҡаршы тороп булмаҫ тип, кире ҡайтыу яғын ҡарай. Ә ысынында иһә Ир Шобандың төркөмөндә бөтөнләй икенсе кешеләр була. Күренеүенсә, бында еңеү – һүҙ оҫталары яғында.

Башҡортостан ерендә Шалғыйыздың байтаҡ шиғри әҫәрҙәре таралып йөрөй. 1976 йылда Шишмә районының Ар ауылында уның ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙма дәфтәре табыла. Шуларҙы иҫәпкә алғанда, йырауҙың бөтә ижадында башҡорт халыҡ ҡобайырҙары, сәсәндәр импровизациялары менән бик яҡын ауаздашлыҡ күҙәтелә.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә Һабрау йырау образы сағылдырылған ниндәй әҫәрҙәрҙе беләһегеҙ? 2. Һабрау үҙенең Уралға арналған

телмәрҙәрендә ҡайһы мәсьәләләргә айырыуса ныҡ иғтибар итә? 3. Башҡорт халыҡ ҡобайырҙарындағы һәм Һабрау телмәрҙәрендәге уртаҡлыҡтарҙы табығыҙ. 4. Йәнебәк ханға тәғәйенләнгән мөрәжәғәттәре буйынса Асан Ҡайғы шәхесенә ҡылыҡһырлама бирегеҙ. 5. Асан Ҡайғы фәлсәфәһендә ниндәй мәсьәләләргә төп урын бирелә? 6. Ҡаҙтуғандың өс сығармаһындағы образдарҙы асыҡлағыҙ, улар араһындағы бәйләнеште табығыҙ. 7. Тимер бейгә арналған сығармаларында һәм лирикаһында Шалғыйыз йырауҙың ниндәй сифаттары асыла?

## XVI–XVIII БЫУАТТАР СӘСӘНДӘРЕ

### Ерәнсә сәсән

Уның тормош юлы хаҡындағы мәғлүмәттәр бүтән йырау, сәсәндәрҙекенә ҡарағанда наҡыҫыраҡ: хатта үҙенә күрә йомаҡлы серлелек менән солғап алынған. Тыуған йылына ҡағылышлы фараздар ғына ла XI–XVIII быуаттар эсен байҡай. Уның йәшәгән ваҡыты, тыуған ере, тормош юлы тирәһендәге серлелектең бер сәбәбе – үҙенең йор һүҙлелегендә, көләмәс жанрына бәйлелегендә. Көләмәсте, билдәле булыуынса, һәр кем эләктереп ала, үҙенсә үҙгәртеп һөйләй. Ҡасандыр сәсәндең үҙ ауыҙынан ишеткәндәрҙе халыҡ хәтере аҙаҡ уның исеме менән бергә теләһә ҡайһы ваҡытҡа, теләһә ниндәй кешегә алып барып ялғап ҡуйыуы ихтимал. Ерәнсә сәсәндең ижад офоғо киң булған, көләмәс менән генә сикләнмәгән. Беҙҙең көндәргәсә һаҡланған ике импровизацияһынан сығып та, уның абруйлы, арҙаҡлы һүҙ оҫтаһы булғанлығын төҫмөрләргә мөмкин.

Тәүгеһе – ҡаҙаҡ ханы Абулхайырға ҡобайыр формаһында әйтелгән мөрәжәғәт. Был ҡобайыр Абулхайыр хандың Аҡмәмбәт тархан менән килешеп, башҡорт ерҙәрен тартып алырға ниәтләнеүе айҡанлы сығарылған.

Төрки халыҡтары тарихында Абулхайыр исемен йөрөткән хандар икәү булған. Тәүгеһе, үзбәктеке, XV быуатта (1412–1468) йәшәгән. Икенсеһе (1693–1748) – ҡаҙаҡтың Бәләкәй жузы ханы. Ерәнсә тап ошоноһо менән һөйләшә (тимәк, үҙе лә ошо дәүерҙә йәшәгән); етмәһә, уның телмәрендә үзбәк Абулхайыры хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатыла. Сәсәндең афористик жанрҙа ғына түгел, шиғри импровизация өлкәһендә лә ифрат оло талант эйәһе икәнлеген күрһәтә ул. Телмәр авторҙың яҡты аҡылына, әҙмә-әҙлекле уйлау оҫталығына ҡоролған нәфис фекерҙәр теҙмәһенән тора. Иң тәүге юлдарҙан уҡ Ерәнсәнең йырауҙар ижадын бөтә нескәлектәренә тиклем белгәнлеге күренә, сәсән улар лексиконында ғына осраған һүҙҙәр менән эш итә. Мәҫәлән, йырауҙар «донъя», «йәмғиәт», «халыҡ» төшөнсәләре урынына «күп» тигәнде йыш ҡуллана. Ошо һүҙҙе сәсән «сүп» менән йәнәш ҡуйып уйнатып, Абулхайырға халыҡ фекеренең дәһшәтлелеген асып бирә:

Мин әйтмәйем, күп әйтә, әү,
Күп – сүп түгел, шул әйтә, әү,
...Күп тигәнем халыҡ булыр, әү,
Тотҡан юлы хаҡ булыр.

Ерәнсә үҙе шул «күп»тең айырылғыһыҙ өлөшө, уның һүҙен еткереүсе, шуға күрә лә хан, бейҙәрҙең яратмаған кешеһе икәнлеген белдерә. Шуға өҫтәп, ул хандың иҫенә төшөрә: үткәнгә әйләнеп ҡараһаң, «күп»тең дә, аҙҙың да барыр ере бер... Ер йөҙөнә хандар килеп-китеп торған, ти Ерәнсә. «Абулхайыр» тигәне лә һин генә түгел, борон тағы берәү булған. XV быуаттағы шул Абулхайырҙан башлап, ул бер нисә ханды телгә ала; исемдәрен һанап ҡына сикләнмәй, ә тарихты («шәжәрәү»ҙе) бик һәйбәт белгәнлеген күрһәтеп, Ибраһим, Күсем, Абылайҙарҙың һәр ҡайһыһының идара итеүе хаҡында әҙме-күпме мәғлүмәт килтерә – ул мәғлүмәттәр тарихи ысынбарлыҡтан һис тә айырылмай. «Донъяла мин – бер» тип йөрөгән ошо хандар хәҙер ҡайҙа? Һәммәһенең барыр ере бер:

Бары ла гүргә һөрөлгән, әү,
Кәфенгә сырмап төрөлгән.

«Сүп» һүҙенә сәсән ике мәғәнә һалған. Контекстағы тура мәғәнәһе – был донъянан китеүселәр. Ә юл араһындағы йәшерен мәғәнәһе – китеүселәр араһындағы «сүптәр» – ғәҙелһеҙ, булдыҡһыҙ бәғзе хан кеүек әшәке, сүп әҙәмдәр. Сит ергә килеп, мал, ҡан таптырған әҙәмгә халыҡтың асыуы ҡайнап, сигенән ашҡан, шуға күрә «күп» «сүп»тең барыр ерен тиҙләтеүе лә ихтимал, тип киҫәтә сәсән. Һөҙөмтәлә, хан үҙенең яуыз ниәтенән баш тартырға мәжбүр була.

Ерәнсә исеменә бәйле икенсе импровизация ҡыҫҡа ғына, был әҫәр – ҡобайырҙарҙағы «Бейек тауҙың үлгәне...» мотивының бер варианты. Асылда, ауыҙ-тел һүҙ оҫталары ижадындағы борондан килгән уртаҡ ҡалыпты, «дөйөм урынды» файҙаланыу күренеше. «Дөйөм урындар» ауыҙ-тел әҙәбиәтендә тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле әҫәрҙәрҙә ҡулланыла. Ошонан сығып, Ерәнсә сәсән ижадында традицион ҡобайыр үлсәмендәге фәлсәфәүи йөкмәткеле, ҙур күләмле импровизациялар айырым урынды биләгән, тик беҙҙең көндәргә тулыһынса килеп етмәгән, тигән һығымта яһарға була.

Был ике импровизация – йырауҙар, сәсәндәр репертуарындағы борондан үҙәк урында торған жанрҙар эсенә ингән юғары кимәлдәге профессиональ ижад емештәре.

Алда әйткәнебеҙсә, һүҙ сәнғәте тарихында Ерәнсә афорист буларак күберәк билдәле. Афористик жанрҙар халыҡ араһында бик тиҙ тарала. Сатирик, юмористик, йөкмәткеле телмәре, йор һүҙлелеге арҡаһында Ерәнсәнең үҙ образы көләмәстәргә, леген-

даларға, хатта әкиәттәргә инеп киткән. Аҙаҡҡыһы инде – ауыҙ-тел әҙәбиәтендә ысын мәғәнәһендә ҡабатланмаҫ күренеш.

**Ҡобағош менән Аҡмырҙа сәсәндәр**

Уларҙың йәшәгән ваҡыты XV быуат аҙағына – XVI быуаттың беренсе яртыһына тап килә. Ҡаҙтуған, Шалғыйыз йыраүҙар кеүек, Ҡобағош һүҙ оҫталығы һөнәрен ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлеге менән берләштерә алған: Башҡортостанда үҙ заманының иң абруйлы шәхестәренең береһе булған. М. Буранғолов XX быуат башында яҙып алған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Ҡараҡөлөмбәт менән Бикбау – Ҡобағоштоң замандаштары. Улар икеһе лә тарихи шәхестәр. XVI быуат башында Ҡазандан ебәрелгән Ҡараҡөлөмбәт тигән нуғай мырҙаһы үҙәк Башҡортостан ерҙәренә дәғүә итә. Бикбау бейҙең исеме ҡыпсаҡ, бөрйән, үҫәргән, тамъян ырыуҙарының айырым-айырым һәм уртаҡ шәжәрәләрендә телгә алына. Дим буйҙарын, Торатау тирәһен биләгән Ҡобағош бей, Ҡараҡөлөмбәт менән яулаша торғас, ҡатай, күбәләк ырыуҙары башҡорттары яғына ҡасып китергә мәжбүр була. Уның Айбағыш һәм Көнбағыш тигән улдары үҫеп, үҫәргән ырыуын ҡыйрата башлай. Үҫәргәндәрҙең Ҡараҡөлөмбәткә буйһонған башлығы Бикбау бей Ҡобағошҡа килешеү тәҡдим итә. Ике яҡтың шарты буйынса, килешеү йыйында үтергә, үҫәргән ырыуының бер сәсәне Ҡобағош менән әйтешергә тейеш була. Хәлдең үтә көсөргәнешле икәнен иҫәпкә алып, Ҡобағош Бикбауға тағы бер шарт ҡуя: «Халыҡ һинән дә, минән дә ҡурҡмаһын, беребеҙҙе үлем көткәнен дә белһен. Минең улдарымдың береһе һинең күкрәккә, һинең улың минең күкрәккә хәнйәрҙәрен терәп торһон». Үҫәргәндәр үҙҙәренең сәсәндәре араһынан иң маһирын – Аҡмырҙаны һайлап, уға фатиха бирә.

Ҡобағош та, Аҡмырҙа ла, йыраүҙар кеүек үк, үҙҙәренең әйтешендә тыуған ер тәбиғәтенең төрлө күренештәрен, йәнлектәр, үҫемлектәр донъяһын, ер-һыу төбәктәрен традицион мәғәнәләргә, символдарға әүерелдереп, шулар ярҙамында йәшерен телмәр, «йомарланған» һүҙ менән төп фекерҙәрен әйтеп бирә. Был ике сәсән ауыҙ-тел шиғриәтенең кинәйәле мәғәнәле символик телен ифрат һәйбәт белгән, юғиһә бер-береһен аңламаҫтар ине.

Әйтеште Аҡмырҙа башлай, кинәйәле образдар менән Ҡобағошҡа дүрт йомаҡ бирә.

Беренсе йомаҡ. Һунарсы «күҙен ҡарға суҡыған, йөҙәп йөнө екегән, ҡанаты һыныҡ, башы юҡ» хәлендәге бер ҡошто атып ала; «ябалаҡтан йөн алып», ҡошто уға бирә; «ҡара төндә айһайлап, игәрҙәрен өҫкөтөп», бер арыҫланды тота, уға ин киртә. Был нимәне аңлата? Сәсәндәр телен белмәгән кеше уның яуабын таба алмаҫ ине. Ә Ҡобағош шунда уҡ әйтеп бирә: һунарсы – бей; имгәнгән ҡош – бөлгән ил; ябалаҡ – хан; игәрҙәр – яһаҡсылар; арыҫлан – асыуынан ярһыған ил. Һунарсының ҡош атып

алыуы – бейҙең үҙ илен сит хандан тапатыуы, мал-тыуарын талатыуы; ҡошто ябалаҡҡа биреп йөн алыуы – илен ханға һатып, «йөндәй осор юҡ дан» алыуы; игәрҙәрҙе өҫкөтөү – яһаҡсыларҙың илде аямай талауына юл ҡуйыу, ил асыуын арыҫлан ярһыуы хәленә еткереү. Әгәр Аҡмырҙа Ҡобағоштоң яуабына риза булмаһа, бәлки, артабанғы телмәрен уны кире ҡағыу йүнәлешендә дауам итер ине. Ә ул киләһе өс йомаҡты тәүгеһенең яуабындағы фекерҙәрҙе тағы ла тәрәнәйтә төшөү ниәтендә бирә.

Икенсе йомаҡтың асылы:

Яманға ҡаршы тулҡынған,
Яҡшыға ҡарап урғылған,
Диңгеҙҙән дә ятыулы,
Уралдан да артыулы…

Өсөнсөһөнөкө:

Булаттан үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай яу һуйыр…
Хандан ҡурҡмаҫ бар микән,
Бейҙән өркмәҫ бар микән?

Дүртенсеһенеке:

Толпар менеп ил күргән
Хандан ғәййәр кем булыр,
Бейҙән тайяр кем булыр?

Быларға Ҡобағоштоң яуаптары: ил зары, сәсән, батыр.

Ҡобағош ул яуаптарҙың һәр ҡайһыһын йыйындағы халыҡ ишетеп, күңеленә һеңдереп ҡалырлыҡ итеп тасуирлап, сәсән менән батырҙың күркәм сифаттарын теҙеп һүрәтләп бирә.

Аҡмырҙа менән Ҡобағоштоң әйтеше илдә килеп тыуған хәлде, ил зарын, сәсән вазифаһын, яугир егет бурысын, «минминлекле» хан һәм уның көйөнә бейергә әҙер торған бейҙең кемлеген халыҡҡа бергәләп, бер-береһен өҫтәп, тулыландырып асып биреүгә ҡоролған. Әйтеш тамамланғас та, Бикбау менән Ҡобағоштоң улдарының ҡулындағы хәнйәрҙәр ҡындарына тығыла. Тимәк, ике арҙаҡлы сәсән уртаҡ фекергә килә. Уларҙың әйтешенән һуң ырыуҙар араһында быға саҡлы йәшәп килгән көсөргәнеш һүрелеү яғына ыңғайлай. Быға саҡлы башҡорт ырыуҙарын бер-береһенә ҡаршы ҡотортоусы – ситтән ебәрелгән Ҡарағөлөмбәт икәнлеге асыҡлана. Ике ырыу халҡы Ҡобағош яғын алғас, Ҡарағөлөмбәт ҡасып китергә мәжбүр булған. Шунан һуң Бикбау Ҡобағошҡа яҡынайған; аҙаҡ бүтән бейҙәр менән бергә Аҡ батша янына һөйләшергә барған.

**Ҡарас** Йәшәгән ваҡыты XVII быуаттың икенсе яртыһы – XVIII быуаттың беренсе яртыһы тирәһенә тап килгән Ҡарас сәсәндең беҙҙең көндәрҙә ике әҫәре билдәле. Береһе – ҡаҙаҡ батыры Аҡша менән әйтеше, икенсеһе – 1738–1740 йылдарҙағы ихтилал юлбашсыһы Ҡараһаҡалға әйткәне. Аҡша батыр менән әйтешкән саҡта Ҡарас әле бик йәш булған. Был әҫәр үҙ заманында уҡ тиерлек ҡағыҙға күсерелеп, ҡулдан ҡулға йөрөй, уны 1925 йылда Ғ. Вилданов «Башҡорт аймағы» журналында баҫтырып сығара. «Хәҙерге... Науруз ауылы башҡорттарының төп аталары Айбағыш, Көнбағыш исемле ике туған булған, – тиелә был баҫмала. – Айбағыштан Килдеш исемле атҡыс – мәргән тыуып, заманында тиңһеҙ булған. Көнбағыштың улы Ҡушкилденән Ҡарас исемендә бер улан ҡалған». Атаһынан йәп-йәш көйөнә етем ҡалған Ҡарас Килдеш ағаһы менән бергә үҫкән, «йәштән батырлыҡ, атҡыслыҡ исемен алып, һәр ваҡыт Килдеш батыр менән бергә яу ҡайтарып, яу сабып йөрөгән. Боронғо киң тормошта атҡыстар йыйылышып майҙан тотҡанда, Килдеш менән Ҡарастан алда һис кем булмаған». XVIII быуаттың беренсе яртыһына ҡағылышлы документтарҙа Килдеш сәсәндең исеме осрай. Айбағыш менән Көнбағыш та беҙгә таныш: Ҡобағоштоң улдары. Тимәк, Ҡобағоштоң улы Көнбағыш, уның улы Ҡушкилде, уның улы Ҡарас булып сыға.

Берҙән-бер көн йөҙләп ҡаҙаҡ башҡорттарҙың Яйыҡ буйында, хәҙерге Учалы районындағы Науруз ауылы яны туғайында йөрөгән йылҡы көтөүен ҡыуып алып китергә ниәтләй. Быны ишеткән Ҡарас, утыҙлап һыбайлы эйәртеп, ҡаҙаҡтарҙың эҙенән төшә. Барып еткәс, яңғыҙы барымтасыларҙың башлығы Аҡша батыр алдына сығып, уның менән һөйләшә.

Ҡарастың әйтештәге телмәре өс өлөштән тора. Тәүгеһендә башҡорт сәсәне дошманын үҙенең данлыҡлы исеме менән таныштыра; «Ҡарасҡа ҡул һуҙғандай нindәй ирһең?» – тип аптырай. Телмәрендә үҙен дошманынан күпкә өҫтөн ҡуя, алышта уны хур итәсәгенә шикләнмәй:

Атыңды әйт, был донъянан юйырмын мин,
Уғымды ҡыҙыл ҡанға буярмын мин.
Илеңдә аша торған батыр булһаң,
Хур итмәй, тәрбиәләп ҡуйырмын мин.

Аҡшаның да батырлыҡ даны үҙ иленә, күрше ҡалмыҡтарға, ҡаҙаҡ ханы йортона таралған. Ҡарастан ул байтаҡҡа оло, тәжрибәле, һалҡын ҡанлы. Йәш батырҙың «саяндай саға һөйләгән» әсе теленән хәтере ҡалып бармай, «уттай геүләп янған» егетте һыуындырырға тырыша, кире ҡайтып китергә өгөтләй:

Ҡан түкмәй, балам, тарта бир
Ҡыҙыулап килгән юлыңдан,
Татымай үлем яҙаһын.
Батырға кергән күп малды
Йөҙ ҡораллы ҡаҙаҡтан
Яңғыҙың ҡалай алаһың?

Әлбиттә, һәр ҡайһыһы үҙ бәҫен белгән ике батыр осрашҡас, уларҙың бәрелеше – ҡотолғоһоҙ. Йола буйынса, барымтасыларҙы ҡыуа төшкән кеше алышта тәүге уҡты атыу хоҡуғына эйә. Урын һайлап, алышҡа әҙерләнәләр. Йәш батыр, ярһыуы ни хәтлем ташып торһа ла, үҙенең еңеренә һис кенә икеләнмәһә лә, ҡан ҡойошһоҙ айырылышыу юлын эҙләй. «Тәүҙә мин уның ҡалъянындағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым: мәргәнлегемде күреп, бәлки, ҡан түкмәйенсә, малды именлек менән генә ҡалдырып китерҙәр», – тип хәл итә ул.

Икенсе телмәр ҡоралына, үҙенә теләк теләүгә ҡоролған. Яу-һунар ғөрөф-ғәҙәттәре заманынан ҡалған йола яугирға өҫтәлмә көс, мәргәнлек биргән, күрәһең.

Йылан башлы киң яным, тартҡан саҡта,
Шытырлап һынып китһәң – һиңә хурлыҡ!
Ҡуҙы яурын, ҡорос башаҡ, бәлдәгәндә,
Тайшайып, ҡырын китһәң – һиңә хурлыҡ!

Ҡарастың уғынан Аҡшаның ҡалъянындағы һаҙаҡтары туҙып, ян-яҡҡа осоп барып төшә. Ҡаҙаҡ батыры быға бик ғәжәпләнә, әммә алышты үҙ теләге менән туҡтатырға уйламай. Хәҙер сират уныҡы. Аҡша ла икенсе телмәрендә ҡоралына өндәшә. Әммә уның атып ебәргән уғы тоҫҡаған урынға теймәй, Ҡарас батыр уны осоп барғанда тотоп алып, ҡалъянына һала.

Сират тағы Ҡарасҡа еткәс, алда ниндәй хәл буласағы билдәле түгел тип, хөрмәт иткән батырының йәнен ҡыйырға мәжбүр була. Дошман еңелә, йылҡы көтөүе кире ҡайтарыла.

Өсөнсө телмәр Аҡшаның батырлығына арнала. Яугирҙар араһында борон-борондан лайыҡлы дошманыңды хөрмәтләү, ҡәҙерләп ерләү йолаһы ла йәшәп килгән. Ҡарас уныһын да еренә еткереп үтәй:

Бынан һуң һинән батыр күрмәҫ күҙем,
Урынлы, маҡтанһаң да, әйткән һүҙең;
Ут йөрәк арыҫландай Аҡша батыр,
Ҡуйайым тәрбиәләп мин дә үҙем.

«Ҡарас менән Ҡараһаҡал» легендаһында Ҡарастың һүҙҙәре сәсмә телмәр менән бирелгән. Был ваҡытҡа ул, данлыҡлы Ҡобағош, Ерәнсәләр кеүек үк, кинәйәле даими символик образ-

дар менән эш итеп, фекерен «йомарлап» бирә белеүсе атаҡлы сәсән дәрәжәһенә күтәрелгән. Ҡараһаҡал башҡорт ҡарттары, уҙамандары, аҡһаҡалдары менән батшаға ҡаршы яу күтәреү хаҡында кәңәшләшә. Халыҡ икеләнә, Ҡарастың һүҙен көтә. Ә ул ихтилалдың әлегә ваҡытһыҙ икәнен кинәйәле теле менән әйтеп бирә. Кәңәшкә йыйылғандарҙың күбеһе, шул иҫәптән Ҡараһаҡал да, уны аңламай, ризаһыҙлыҡ белдерә башлай. Төркөмдә сәсәндең үҙе кеүек үк зирәк табылып, Ҡарастың телен халыҡҡа аңлатып бирә. Бына бер нисә өлгө:

– Уралда ҡамсы һабына ҡырҡып алыр тал юҡ, ҡырҡа башлаһаң, ҡан сыға. (Урал урмандары яуҙарҙа аҡҡан халыҡ ҡаны менән һуғарылған.)

– Аттарҙың ҡолағына ин, ҡулбашына тамға һалынған. (Бөтә еребеҙ билдәле, ҡайҙа барһаҡ та тоторҙар.)

– Ағас башына ҡор ҡунмаған. (Шул уҡ яуҙан һуң ҡасып йөрөүселәр илгә ҡайтып бөтмәгән.)

– Ә һуң рус батшаһы һаҡаллымы икән? (Илар бала атаһының һаҡалы менән уйнар. Икенсе төрлө әйткәндә, ихтилал еңелер.)

Бындай кинәйәле образдарҙың, образлы фекерҙәрҙең һәр ҡайһыһы даими тотороҡло мәғәнәгә эйә булып, сәсәндәрҙең профессиональ ҡатламы араһында киң таралған, «йәшерен» телмәр системаһын тәшкил иткән. XVI–XVIII быуаттарҙа, тәүҙә ханлыҡтар ҡыҫымы, аҙаҡ Рәсәйҙең колониаль иҙеүе шарттарында арҙаҡлы һүҙ оҫталарының ошо «йәшерен» теле әйтештәрҙә үҙ-ара аралашыу, хандарға, хакимдарға мөрәжәғәт иткәндә хикмәтле һүҙҙәр менән юрамал уларҙың башын ҡаңғыртыу, кәмһетеү, йәш сәсәндәргә киләсәктәге ижади, ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлектәренә аманат-традиция ҡалдырыу өсөн хеҙмәт иткән.

**Байыҡ Айҙар**

Был мәшһүр сәсән тураһында халыҡ телендә легенда-риүәйәттәр һаҡланған. Шулай ҙа уның тормошона ҡағылышлы тулыраҡ мәғлүмәтте XX быуат башында М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән яҙып алған. Ә Ғәбит сәсәнгә – Ишмөхәмәт сәсән, Ишмөхәмәткә Байыҡтың үҙе менән яҡындан аралашҡан Буранбай-Йәркәй сәсән түкмәй-сәсмәй еткергән.

«Байыҡ сәсән Златоуст өйәҙе Мырҙалар олоҫо Мәхмүт ауылында (хәҙерге Салауат районы) 1710 йылдарҙа Байназар тархан ғаиләһендә тыуған, – тиелә ул яҙмала. – Үҙ һүҙлелеге арҡаһында атай йортонан иртә айырылып, үҙ алдына көн иткән. Юлай Аҙналин менән икеһе бер ихтилалда ҡатнашҡан. Аҙаҡ, эҙәрләүҙәрҙән ҡасып, ҡаҙаҡ араһына һыйынған. Күпмелер ваҡыттан һуң кире урап ҡайтҡан, сәсәнлек оҫталығы менән танылып, «Айҙар» тигән ҡушамат алған. XVIII быуаттағы ихтилалдарҙы күргән, 1812 йылғы Ватан һуғышына ир-егеттәрҙе оҙатҡан. Һуғыш бөткәс, еңеп ҡайтыусыларҙы данлап, йөҙ ҙә дүрт йәшлек сәсән «Байыҡ» көйөн уйнаған».

Байыҡтың 360-лап юлдан торған өс импровизацияһы билдәле. Улар сәсән тормошоноң һәм ижадының өс мөһим осорон күҙ алдына баҫтыра.

Беренсеһе 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышынан алдараҡ сығарылған. Ул ваҡытта Байыҡ Айҙар ҡаҙаҡ далаларына барып сыға, ҡаҙаҡ аҡыны Бохар (1668–1791) менән әйтештә ҡатнаша. Бохар Ҡалҡаман улы башҡорт сәсәненә «йомарланған» һүҙ менән йомаҡ әйтеп, ҡаҙаҡ ханы Абылайҙы маҡтарға ҡуша. Сәсән үҙенсә яуап бирә: «Һыуһаған йотом һыу тапмаҫ – дала тигәнең шул икән, бер ҡаҙанға ҡуш антын һалып бергә ҡайнатҡан – Абылай солтан хан икән». Йәғни сит дала Байыҡҡа тыуған ерен алмаштыра алмай, ғәҙелһеҙ Абылай хан да маҡтауға лайыҡ түгел.

Икенсе импровизацияһы – Салауат Юлаевҡа мөрәжәғәте. Берҙән-бер көндө сәсән Юлай старшинаға барырға ҡарар итеп, юлға сыҡҡан. Юлда һунарға сыҡҡан Салауатҡа тап булған. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, Салауат үҙен танытып, юлсының кем булыуын һораған. Байыҡ йәш батырға ҡобайыр әйтә, унда үтә мөһим мәсьәләләр ҡуҙғатыла: илдең тарихи үткәне, батырҙар даны иҫкә алына, заманға тапҡыр социаль-тарихи характеристика бирелә, Салауатты изге яуға рухландырыусы һүҙҙәр әйтелә.

Үҙ ғүмерендә күпте күрергә өлгөргән тәжрибәле ҡарт, аҡыл эйәһе ошо оло һөйләшеү өсөн Салауатты юҡҡа ғына һайламаған. Буласаҡ батыр һәм шағирҙың тәбиғи һәләтлектәрен Байыҡ Айҙар, күрәһең, алдан уҡ шәйләгән һәм яңылышмаған. Уның һүҙҙәрен ишеткәс, «Салауат та аңлаған. Байыҡ ҡартты үҙе менән бергә алып ҡайтып киткән. Юлай менән өсәүһе һөйләшеп, һүҙ үткәндәрен саҡырып, бергә кәңәш төйнәшеп, яу башларға булғандар».

Байыҡтың өсөнсө импровизацияһының сығарылыуы 1812 йылғы Ватан һуғышы башланған ваҡытҡа ҡарай. Францияның Рәсәйгә һуғыш башлауы тураһында хәбәр ишетелгәс, ил ҡарттары «Иҙел түбәһе Көнгәктә» йыйын йыйған, унда 102 йәшлек Байыҡ сәсән дә килгән. Быҕаса икеләнеп, һүҙ әйтергә ҡыймай ултырған халыҡты сәсән французларға ҡаршы яуға күтәрелергә саҡыра. Ватандаштарына ул ата-бабаларҙың рус халҡы менән илде сит баҫҡынсыларҙан бергәләп һаҡларға һөйләшкән антын иҫкә төшөрә:

> Туғанға биргән аҡ антты
> Менер аттай көт, тигән.

Уның ошо әҫәрҙәге «ике туған талашыр, атҡа менһә ярашыр» тигән һүҙҙәре бик ҙур мәғәнә ала: ил эсендә ара-тирә тыуып торған ҡаршылыҡтар, тышҡы дошманға ҡаршы бергәләп көрәшеү менән сағыштырғанда, ваҡ мәсьәлә, тип әйтергә теләй сәсән.

Байыҡ Айҙар импровизацияларында йырауҙар, сәсәндәр ижадының төп поэтик үҙенсәлектәре сағылыш тапҡан. Өс телмәр ҙә образлы фекер, художестволы дөйөмләштереүгә илтеүсе кинәйә менән һуғарылған. Шул уҡ ваҡытта һәр бер һүҙ үҙенең тура мәғәнәһен дә юғалтмаған. Строфалар афоризмдарға торошло тапҡыр фекерҙәр теҙмәһенән торһа ла, һөйләмдәр төҙөлөшө ябай, халыҡсан; юлдар йыш ҡына ҡабатланып килә, рифмалар бер үк йәки үтә яҡын яңғырашлы һүҙҙәргә – моноримдарға ҡоролған. Бындай поэтик төҙөлөш импровизаторлыҡ сәнғәтенең юғары баҫҡысына күтәрелгән һүҙ оҫталары өсөн генә хас.

1920 йылда М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән «Юлай менән Салауат» эпосын яҙып ала. Был әҫәр ике ҡатламдан тора. Тәүгеһендә Аҙналы менән Юлайҙың түрәлектәре – олоҫ старшинаһы вазифаһын башҡарыуҙары, заводсыларға ҡаршы көрәшеүҙәре тураһында һүҙ бара. Был ҡатламдағы шиғри телмәр фәлсәфәүи һәм дидактик ҡобайырҙар стиленә ярашлы. Ил яҙмышында киҫкен хәл килеп тыуған мәлдә, Юлай үҙенең халыҡты яуға өндәп мөрәжәғәт иткән телмәрендә тарихты иҫкә төшөрөп, данлы улдарын Урал батырҙан алып Ҡараһаҡалға тиклем һанап сығып, замандаштарын хаҡлыҡ өсөн көрәшкә сәмләндерә. Ошондай мөрәжәғәт алымы менән генә түгел, поэтик саралары, тапҡыр образдары, традицион һүрәтләү саралары, үлсәме менән тәүге ҡатлам Байыҡ Айҙар ҡобайырҙары, бигерәк тә уның Салауатҡа әйткән телмәре менән ауаздаш.

Икенсе ҡатлам тотошлай Салауаттың үҙенә генә арнала. Уның йәш сағы, мөхәббәте, уй-ҡараштары формалашыуы төп урын биләй, Салауат менән Юлайҙың Пугачёв яуына ҡушылыу шарттары тасуирлана. Аталы-уллы пугачёвсыларҙың артабанғы яҙмышы иң аҙаҡ бер нисә юл менән генә әйтелә. Был ҡатламда М. Буранғоловтың Ғәбит сәсәндән яҙып алған легенда-риүәйәттәренең төп мотивтары ныҡлы урын алған, Салауаттың яугирлыҡ һәм шағирлыҡ һыҙаттары асыҡ сағылдырылған. Әҫәрҙең телмәре, һүрәтләү саралары бында беренсе ҡатламдан айырылыбыраҡ тора; хәл-ваҡиғалар прозаға тартым шиғри хикәйәләү аша бирелә.

Был ике ҡатламды сағыштырып, эпостың ижад ителеүенә ҡарата шундай фараз яһарға мөмкин. Тәү башлап ул XVIII быуатта уҡ шул замандың тере шаһиты Байыҡ Айҙар тарафынан сығарылһа, икенсе ҡатламды Байыҡ сәсәндең ижадын беҙҙең заманға еткереүсе шәкерттәре Буранбай-Йәркәй – Ишмөхәмәт – Ғәбит – Мөхәмәтша Буранғоловтар дауам итеп, тамамлап ҡуйған булырға тейеш.

Байыҡ Айҙар *йырҙар* ҙа сығарған. Әммә улар, жанрҙың массалар араһында етеҙ таралыуы арҡаһында, бик тиҙ халыҡлашып киткән; ярайһы ғына үҙгәрештәргә лә дусар булған.

Һәр хәлдә, йырҙарҙа индивидуаллек билгеләре анык һаҡланмаған. Әгәр атамаларында авторҙың исеме ҡалмаһа («Байыҡ», «Әхмәт Байыҡ», «Байыҡ сәсән йыры», «Байыҡ Айҙар йыры»), уныҡы икәнлеген билдәләүе ауыр булыр ине. Байыҡ сәсәндең күп кенә йырҙары, исеменән айырылып, бөгөнгө көндә фольклор репертуарында йөрөп ята.

**Мәхмүт**

Мәхмүт сәсән Байыҡ Айҙарҙың шәкерте булған. XVIII быуатта йәшәгән, Ҡараһаҡал менән Батырша болалары ваҡытында сәсәнлек даны халыҡ араһына таралып өлгөргән. Ул бер ваҡытта ла шиғри һүҙен тура мәғәнәлә ҡулланмаған, ә йомоп, кинәйәләп әйткән. Тимәк, XIV–XVIII быуаттар профессиональ ауыҙ-тел ижадсылары үҙләштергән оҫталыҡ дәрәжәһенә күтәрелеп еткән тигән һүҙ. Мәхмүт сәсән тураһындағы мәғлүмәттәрҙе М. Буранғолов 1912 йылда хәҙерге Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында Миңлемырҙа Сәйетовтан яҙып алған. «Бер байҙың ике ҡыҙы, Мәхмүт исемле бер улы булған. Ул «Әүеш күле» йәйләүендә тыуған, «Яу күле» йәйләүендә үҫкән», – тиелә был яҙмала. Атаһы бай һәм ҡомһоҙ кеше булған, «хатта, көтөүсе ялларға мал ҡыҙғанып, йылҡыһын улынан, һыйыр, һарыҡтарын ҡыҙҙарынан көттөргән». Әҙерләнгән ихтилал өсөн аттарын бирергә йәлләп, бөтөн мал-тыуарын ҡаҙаҡ далаларына ҡыуып алып китә. Буласаҡ сәсән атаһы артынан эйәреүҙән баш тарта, тыуған илендә ҡалып, ихтилалда ҡатнаша. Бай балаһы булһа ла, йәштән көтөүселәр менән аралашҡанға күрә, Мәхмүт телгә оҫта, ҡурай уйнауға, әкиәт һөйләүгә маһир булған. Йәйен йәйәү, ҡышын саңғы менән йөрөгән. Шуға күрә уға «Йәйәүле Мәхмүт» тигән ҡушамат биргәндәр.

Мәхмүттең әҙәби мираҫы ни бары 60-лап юл самаһы. Атаһы ҡаҙаҡ далаларынан әйләнеп ҡайтҡас, ихтилалда ҡатнашмағанлығын иҫәпкә алыптыр инде, уны старшина итеп тәғәйенләп ҡуялар. Ошо шатлыҡлы ваҡиға айҡанлы ул ҙур йыйын йыя; ҡурайсылар, йырсылар, сәсәндәр ҡатнаша. Йыйындағы ҡунаҡтарға мөрәжәғәт итеп, Мәхмүт тә үҙенең импровизацияһын – ике шиғри йомағын әйтә. Уға яуап табылмаған, тапҡандары ҡурҡып әйтмәгән. Шунан һуң сәсән үҙе яуап бирергә мәжбүр булған. Был – башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтендә һорауын да, яуабын да автор үҙе импровизациялаған берҙән-бер осраҡ.

Тәүге йомаҡ һаран, ҡомһоҙ бейҙең булмышын тасуирлап бирә. Бей йөҙөндә атаһын күҙ уңында тотоп, Мәхмүт уны «ҡурғаштан да тосораҡ», «ҡараңғы төндән дөмөрәк» тип атай. Атаһы йортондағы үҙенең тормошон тар итек эсендәге аяҡ менән сағыштыра:

Аяғын ҡыҫҡанға – итектән дә,
Бикләнгәнгә ситлектән дә
Бүтән тарлыҡ бар микән?

Икенсе бер йомаҡта бейҙең шул ҡомһоҙлоғо, мәрхәмәтһеҙлеге фонында һәр ата-әсәнең балаға ҡарата тиңһеҙ һөйөүе хаҡында һүҙ ҡуҙғатыла:

Ата, әсә – балаһын,
Бала – әсә, атаһын,
Бере лә һылыуын һайламаҫ,
Һөйөр, һүнмәҫ, ташламаҫ.

Мәжлескә йыйылған халыҡҡа ул аҙаҡҡы йомағының кәкүккә һәм атаһына ҡағылмауын әйтеп һала. Шул рәүешле, атаһы менән бәхәстең объектив ерлеген асып бирә. Тәү ҡарамаҡҡа ике яҡын кешенең үҙ-ара ғына ыҙғышы һымаҡ күренһә лә, асылда Мәхмүттең һүҙе сәсәндәр ижадына хас ҙур социаль мәғәнә ала. Әйтеш формаһын хәтерләткән ошо бәләкәй генә мираҫы аша ла сәсәндең үҙ ваҡытында илгә танылған һүҙ оҫтаһы булғанлығын күрергә мөмкин.

Башҡорт музыкаль фольклорының хәҙерге репертуарында «Йәйәүле Мәхмүт» тигән йыр ҙа бар, уның авторлығы Мәхмүт сәсәнгә ҡайтарып ҡалдырыла. Тимәк, Байыҡ Айҙарҙан күрмәксе, ул да йыр жанрына мөрәжәғәт итер булған.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Ерәнсә сәсәндең ижады һәм үҙенең образы башҡорт халыҡ ижадының ниндәй жанрҙары менән бәйле? 2. Ерәнсәнең Абулхайыр ханға әйткән ҡобайырын табып, иғтибар менән уҡығыҙ. Дәреслектәге текстҡа таянып, был ҡобайырҙың кинәйәле мәғәнәләрен асығыҙ. 3. Ҡобағош шәхесендә бейлек һәм сәсәнлек сифаттарының берлеге нимә тураһында һөйләй? 4. Ни өсөн Ҡобағош Аҡмырҙаның йомаҡтарының дауамын тиҙ генә таба алған? Ҡобағош сәсән образы башҡорт әҙәбиәтенең ҡайһы әҫәрҙәрендә сағылдырылған? 5. Ҡарас сәсән ҡайһы яҡлап Ҡобағош сәсән тоҡомонан икәнен аңлатып бирегеҙ. 6. Ҡарас сәсән менән Аҡша батыр бер-береһен ихтирам итеүен уларҙың әйтешенә таянып иҫбатлағыҙ. 7. Ҡарас сәсәндең Ҡараһаҡалға мөрәжәғәте уның сәсән булараҡ ниндәй сифаттарын аса? 8. Байыҡ сәсән ниндәй жанрҙарҙа ижад иткән? 9. Байыҡтың өс әҫәрен – әйтешен һәм ҡобайырҙарын үҙ-ара сағыштырып ҡарағыҙ. Уның ижадындағы идея-тематиканың үҫә, киңәйә барыуын нисек нигеҙләр инегеҙ? 10. «Юлай менән Салауат» эпосын «Урал батыр» менән сағыштырып, һәр ҡайһыһында дәүерҙәр ҡатламдары бирелешенә иғтибар итегеҙ. 11. Мәхмүттең ике йомағы буйынса уның сәсәнлек оҫталығы кимәлен билдәләгеҙ.

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ

## (1754–1800)

1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының арҙаҡлы юлбашсыһы, үҙ дәүеренең ижтимағи аңын сағылдырыусы аҡыл эйәһе, башҡорт халҡының милли геройы сәсән-шағир Салауат Юлаевтың ижады XVIII быуат башҡорт әҙәби мираҫында үҙенә башҡа бер урынды алып тора.

**Тормошо һәм юлбашсылыҡ эшмәкәрлеге**

Салауат Юлаев 1754 йылда Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙәй олоҫо Тәкәй ауылында (хәҙер – Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) тыуған. Уның атаһы – Шайтан-Көҙәй йорто старшинаһы Юлай Аҙналин 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына тиклемге башҡорт ихтилалдарында ҡатнаша, Рәсәй мәнфәғәттәрен яҡлап, хәрби походтарҙа башҡорт командалары менән етәкселек итә. 1756 –1763 йылдарҙа Пруссия һуғышында, 1771 йылда Польша походында була, яуҙағы батырлығы өсөн миҙал менән бүләкләнә. Уның абруйлы исеме тирә-яҡта билдәле була. XVIII быуаттың 70-се йылдарында Санкт-Петербургтан Уралға һәм Себергә сәйәхәт ҡылған академик П. С. Паллас Шайтан-Көҙәй йортона һуғылып, Юлайҙың өйөндә ҡунып киткән. Күп йыллыҡ хәрби походтар, старшина вазифаһын башҡарғанда юғары хакимлыҡ органдары менән даими аралашыу, күренекле ғалимдар менән осрашыуҙар Юлай Аҙналиндың ил эсендәге хәлдәрҙе яҡындан белеп тороуына ярҙам итә. Былар Салауаттың аң үҫешендә лә эҙһеҙ ҡалмай. Салауат уҡырға-яҙырға тәүҙә әсәһенән өйрәнә, аҙаҡ яҡын-тирәләге ҙурыраҡ мәҙрәсәләрҙең береһендә белем ала. Уның ҡулъяҙмаларына, имзаларына ҡарап та, тиҙ яҙыу ҡеүәһен үҙләштергән ҙур уҡымышлы кеше булғанлығын күрергә мөмкин. «Салауат Юлаев» романының авторы С. Злобин бер документаль очеркында егеттең үҫмер сағын шулай һүрәтләй: «Ун өс йәшендә ул матур кәүҙәле егет булып өлгөрә, сабып барышлай ат өҫтөндә аяҡ

үрә баҫып, түбәтәйен һикертеп кире тотоп ала алған, уҡ кеүек осоп килешләй эйәрҙән ергә эйелеп, юл ситендәге сәскәне тамыры менән йолҡоп сығарған, аты менән төлкөнө ҡыуып етеп, ҡамсыһы менән үлтерә һуҡҡан». 1771 йылдың декабрендә, Польша походына сығыр алдынан, Юлай Аҙналин үҙенең урынына 18 йәше лә тулмаған улын старшина итеп ҡалдыра. Олоҫ менән идара иткәндә, Салауаттың эшмәкәрлеге атаһыныҡынан бер ҙә ҡалышмаған. Ул урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеү менән генә сикләнмәй, юғары хакимиәт органдарына ла хәбәрҙәр ебәрә.

1773 йылдың сентябрендә Яйыҡ буйында Емельян Пугачёв етәкселегендәге ихтилал күтәрелгәс, Екатерина Икенсенең башҡорт старшиналарына ебәргән манифесына ярашлы, Юлай Аҙналин үҙенең олоҫонан батша ғәскәрҙәренә ярҙамға 80 һыбайлынан торған отряд әҙерләп, уны Салауат етәкселегендә Стәрлетамаҡҡа ебәрә. Башҡортостандың бөтә яҡтарынан йыйылған меңдән ашыу кеше Стәрлетамаҡтан Ырымбурға барышлай ноябрь башында Бикҡол ауылы янында тулыһынса тиерлек баш күтәреүселәр яғына сыға. Салауат Ырымбур эргәһендәге Берда биҫтәһендә Пугачёв менән осраша, үҙенең отряды менән губерна үҙәген ҡамауҙа ҡатнаша. Күп тә үтмәй, уға полковник дәрәжәһе бирелә. Тиҙҙән ул Себер даруғаһы башҡорттарын ихтилалға йәлеп итеү өсөн тыуған яғына ебәрелә. 1773 йылдың аҙағына тиклем Салауат 10 мең кешенән торған ғәскәр йыйып өлгөрә. Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе этабында (1774 йылдың март аҙағына саҡлы), ихтилалдың төп көстәре Ырымбур менән Өфөнө ҡамап торған ваҡытта, йәш хәрби юлбашсы, Пугачёв ҡушыуы буйынса, төньяҡта И. С. Кузнецов һәм И. Н. Белобородов менән бергә үҙ аллы хәрәкәт итеп, Красноуфимск ҡәлғәһен (ике тапҡыр) ала, Көнгөр ҡалаһын дүрт аҙна самаһы ҡамап тора, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ихтилалды киң йәйелдереп ебәрә.

1774 йылдың апрель – июнь айҙарында Салауат тау-урманлы төбәктәрҙә һуғыша. Апрелдә Эҫем, Йүрүҙән, Ҡатау заводтарын ала. Артабан уға Рәсәй үҙәгенән ихтилалды баҫтырыу өсөн махсус ебәрелгән подполковник И. И. Михельсондың регуляр ғәскәре менән бер нисә тапҡыр бәрелешергә тура килә. Михельсон был осорҙа үҙенең төп маҡсатына – Салауатты тулыһынса тар-мар итеүгә һәм Пугачёвҡа ҡарай йүнәлеүгә ирешә алмай. Салауат иһә үҙ бурысын үтәй: Михельсон ғәскәрен Пугачёв яғына үткәрмәй.

Салауат Юлаев 1773 йылдың 2 июнендә Үрге Ҡыйғы ауылы янында 3000 кешенән торған һыбайлыһы менән Пугачёв ғәскәренә килеп ҡушыла. Ихтилал етәксеһе үҙ армияһының иң йәш полковнигына бригадир (бригада генералы) дәрәжәһен бирә. Салауат Үрге Ҡыйғылағы осрашыуҙан һуң Бөрөнө алып, Осаға һөжүм итеүҙә ҡатнашып, Пугачёвҡа Ҡазан яғына юл асыуҙа ярҙамлаша.

Крәҫтиәндәр һуғышының өсөнсө этабында Салауат Башҡортостан ерендә тулыһынса үҙ аллы хәрәкәт итә. Дошман ғәскәрҙәренең тығыҙ уратып алыуына ҡарамаҫтан, башҡорт ерҙәрен колонизациялауға ҡаршы көрәш ялҡыны ҡабат көсәйеп китә. Август – октябрь айҙарында Салауат, үҙенең ятраҡан тактикаһын – тау-урман араһынан ҡапыл килеп сығып һөжүм итеү алымын ҡулланып, урындан урынға күсеп һуғыша. Өфөнө алыуға ынтылыш яһай, Йәлдәк крепосы янында хәрәкәт итә, Оса крепосына, Көнгөр ҡалаһына һөжүм ҡыла, Юлай Аҙналин менән бергә Ҡатау заводын ҡамап тота. 1774 йылдың сентябрендә Пугачёв ҡулға алынып, ҡайһы бер старшиналар ҡабат хөкүмәт ғәскәрҙәре яғына сығып, уларға булышлыҡ итә башлағас ҡына, 25 ноябрҙә, ни бары дүрт кенә иптәше менән ҡалған Салауатты эҙәрләп килгән отряд уны әсирлеккә эләктерә. Батша офицерының юғарыға ебәргән рапортынан күренеүенсә, башҡорт батыры еңелеп барған осраҡта ла төшөнкөлөккә бирелмәгән; алдан уйлап, иптәштәре менән бергә «урманда йәшеренеп, ғәскәрҙәр яҡынайғанын ишетә ҡалһа, туп-тура урман һәм тауҙар аша ҡырғыҙҙарға (ҡаҙаҡтарға) китергә» йыйынған.

Тотолғандан һуң, Салауатты Өфөгә килтереп, атаһы менән икеһенең аяҡ-ҡулдарын бығаулап (Юлай Аҙналин да ихтилалда актив ҡатнаша), ныҡлы ҡарауыл оҙатыуында Ҡазанға килтерәләр. Ундағы тикшеренеүҙәр тейешле һөҙөмтә бирмәгәс, 1775 йылдың 25 февралендә Мәскәүҙә Сенаттың Йәшерен экспедицияһында һорау алалар. Пугачёв полководецы үҙенең ысын уй-ҡараштарын суд органдарына белгертмәй, ҡылған эштәренең күбеһен әйтмәй, яуҙаш иптәштәренең береһе хаҡында ла зыянлы мәғлүмәт бирмәй. Сенаттың Йәшерен экспедицияһы аталы-уллы пугачёвсыларҙың «ғәйебен» асыҡлай алмай, артабан тикшереү өсөн кире Ырымбур губернаһына ебәрә. Тикшереү оҙаҡҡа һуҙыла. Ни бары 1775 йылдың 15 июлендә Ырымбур губерна канцелярияһы Юлай менән Салауаттың эше буйынса хөкөм сығара. Шуға ярашлы рәүештә, июль–август айҙарында уларҙы үҙҙәре көрәшеп үткән урындарҙа 175-әр тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырып, танауҙарын ҡырҡып, ҡыҙҙырылған металл менән биттәренә тамға һалып, 2 октябрҙә Рогервик ҡәлғәһенә ғүмерлек каторгаға ебәрәләр. Салауат Юлаев ошонда 1800 йылдың 26 сентябрендә вафат була.

**Поэтик ижады**

Салауат ауыҙ-тел әҙәбиәте вәкилдәренә борондан хас булған яугирлыҡ һәм әҙиплек сифаттарын үҙ булмышында туплаған. Шулай ҙа уның ижады XVI–XVIII быуаттар сәсәндәренекенән айырылыбыраҡ тора; ул ауыҙ-тел һәм яҙма әҙәбиәт традицияларына берҙәй таянып, үҙ әҫәрҙәрен импровизация юлы менән дә, ҡағыҙға яҙып та ижад иткән.

Шағирҙың яҙма рәүештә сығарған шиғырҙары ҡулъяҙмаларҙа һаҡланған, ҡулдан ҡулға күсереп таратылған. Шундай яҙмаларҙың береһе XIX быуаттың икенсе яртыһында Р. Г. Игнатьев ҡулына юлыҡҡан. Ул һигеҙ текст һайлап алып, үҙенең 1875 йылда баҫмаға әҙерләгән «Башкир Салават Юлаев, пугачёвский бригадир, певец и импровизатор» исемле очеркына индергән. «Башҡортса дөрөҫ текстан ситләшмәҫ өсөн, беҙ уларҙы рифмалы шиғыр менән бирергә баҙнат итмәнек», – тип иҫкәртә уҡыусыларҙы Р. Г. Игнатьев. Рус теленә тәржемә уның һорауы буйынса 1868 йылда Дәүләтшин тигән кеше тарафынан эшләнгән. Игнатьев тапҡан сығанаҡҡа шул уҡ ваҡыттарҙа яҙыусы Ф. Д. Нефёдов та мөрәжәғәт итә, ундағы биш тексты «Движение башкир перед пугачёвским бунтом; Салават – башкирский батыр» тигән хеҙмәтендә файҙаланып, Мәскәүҙә сыҡҡан «Русское богатство» журналында 1880 йылда баҫтыра. Уларҙың дүртәүһе Игнатьев һайлап алғандарға тап килә. Ә Игнатьев сығарған шиғырҙарҙың етәүһе аҙаҡ «Уралым», «Тыуған илем», «Яу», «Уҡ», «Егеткә», «Тирмәмдә» («Һандуғас»), «Зөләйха» исемдәре менән башҡорт, рус һәм башҡа халыҡтар телдәрендә күп тапҡырҙар донъя күрҙе.

Яугир-шағирҙың телдән телгә таралған импровизациялары иһә XX быуаттың 70-се йылдарында ғына төрлө сығанаҡтарҙан йыйылып, тәртипкә килтерелеп, текстологик яҡтан өйрәнелеп, ғилми әйләнешкә индерелде; аҙағыраҡ уның һуңғы йылдарҙа донъя күргән китаптарында ҡулъяҙма шиғырҙары менән бергә баҫтырып сығарылды. Улар башҡорт ауыҙ-тел шиғриәтенең төп жанрҙарында ижад ителгән: «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» ҡобайыры, һөйгән ҡыҙы Зөләйха менән әйтеше (йыйынтыҡтарҙа Зөләйханың яуап телмәрҙәре бирелмәгән), «Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып...», «Йүрүҙән, һин беҙҙең туған йылға...», «Сәстәреңдең толом сулпылары...», «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...», «Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай...» тип башланған йырҙары һәм тағы һәр ҡайһыһы үҙ аллы йөкмәткеле дүртәр юллыҡ 19 йыр.

Беҙгә Салауаттың каторгаға оҙатылғанға тиклемге поэтик мираҫы ғына билдәле. Тимәк, уның ижади биографияһы 5–6 йыл менән генә сикләнә. Шуға ҡарамаҫтан, шағирҙың художестволы фекерләү ҡеүәһе үҫешен, әҫәрҙәренең ижад ителеү эҙмә-эҙлелеген, идея-тематик яҡтан үҙгәреш тәртибен асыҡ күҙ алдына баҫтырып була.

Салауатты шиғриәткә тәү башлап мөхәббәт тойғолары алып килә, уның беренсе әҫәрҙәре ҡатын-ҡыҙ гүзәллегенә һоҡланыу һөҙөмтәһендә тыуа. «Зөләйха» шиғырын, Зөләйха менән әйтешен, «Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып...» йырын уның иң тәүге ижад емештәре тип ҡарарға мөмкин: бында үҫмер егеттең тәү ҡат

ғашиҡ булған ҡыйыуһыҙ, саф уй-тойғолары сағылдырыла. «Зөләйха»ның тәүге өлөшө ҡатын-ҡыҙҙың сибәрлеген, буй-һынын һоҡланып тасуирлай:

Ер хуры һин йәки ожмах шәүләһе,
Һындарың, гүйә, фәрештә кәүҙәһе.

Әйтергә кәрәк, мөхәббәт темаһы Салауат шиғриәтенең тәүге этабына ғына ҡайтып ҡалмай, ә артабан ғаиләһенә, балаларына арналған әҫәрҙәрендә дауам ителә. «Ҡәҙерле лә ғаиләм, һөйгән йәрҙәр...» шиғыры, Миңлеяза ҡыҙына, Зөләйхаға арналған дүртәр юллыҡ йырҙары инде байтаҡҡа һуңыраҡ, Крәҫтиәндәр һуғышы дәүерендә йәки Салауаттың иректәге һуңғы көндәрендә, сығарылған.

Күп тә үтмәй, шағирҙың мөхәббәт хистәре киңерәк өлкәгә – тыуған ер тәбиғәтенә күсә, тауышы ла юғарыраҡ граждандлыҡ тойғоһо менән яңғырай башлай («Уралым», «Тыуған илем», «Тирмәмдә», «Уҡ», «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...»). Йәш авторҙың пейзаж лирикаһы үҙенең башланғысы менән фольклорға һәм сәсәндәр ижады традицияларына яҡын. Башҡорт сәсәндәре сығарған героик эпостарҙағы, ҡобайырҙарҙағы Уралға дан йырлау традицияларын артабан дауам иттереп, Салауат тыуған ил тәбиғәтенә, Уралға маҡтау һүҙҙәре аша үҙенең күңелен, граждандлыҡ тауышын, патриотик тойғоларын, фәлсәфәүи ҡараштарын асып һала:

Ай, Уралым, Уралым,
Һылыу ҙа һылыу Уралым!
Һүҙем бөтһә лә телемдә,
Йырым бөтмәне, Уралым!
Маҡтап ҡурай уйнаһам,
Бөтмәй ҙә торған көй булыр.
Данлап йырым йырлаһам,
Бөтмәй ҙә торған йыр булыр.

Сәсән телле шағир пейзаж күренештәре менән генә сикләнеп ҡалмай, үҙенең һоҡланыу һәм ғорурланыу хистәрен йәнле өлкәгә күсерә. Уға төнгө тынлыҡта һайраған һандуғас тауышы, ҡанатына уҡ тейгән гонаһһыҙ ҡарлуғас ғүмере ғәзиз. Был ҡошсоҡтоң ғәзиз ғүмере – автор өсөн туған тәбиғәт, тимәк, тыуған ил ғәзизлеге. Тәбиғәткә дан йырлау аша Салауат үҙенең тыуған иленә, халҡына мөхәббәтен асып һалды, рух ireклеген күтәреп сыҡты.

Крәҫтиәндәр һуғышының арҙаҡлы юлбашсыһы дәрәжәһенә ирешкән шәхестең поэтик ижадында төп урынды хаҡлы рәүештә ҡаһарманлыҡ лирикаһы биләй («Яу», «Егеткә», «Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға...», «Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай...», «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...»). Ҡасандыр

һылыу ҡыҙ алдында юғалып, «телһеҙ» ҡалған лирик герой уҡыусы алдына яу шарттарында өр-яңы сифатта килеп баҫа. Уға ҡаһарманлыҡ рухы тәү башлап урта быуаттарҙағы ҡулъяҙма әҫәрҙәр геройҙарының тәүәккәл эштәре йоғонтоһонда килә. «Яу» шиғырында уларҙың исемдәре (Ғәли, Сәми, Абуталип, Нариман) телгә алына, авторҙың идеалы – реаль көстән бигерәк, тылсымлы дәһшәт менән еңеүгә ирешкән батырҙар образы. Артабан иһә батырлыҡ төшөнсәһе шағир аңында конкретыраҡ төҫ ала, лирик геройҙың ҡайһы бер һыҙаттары автор шәхесенең үҙендәге сифаттар менән яҡыная. «Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай...» йырында «ыласындай төҫлө батырҙар ҙа бер төшмәһә аттан, бер төшә» тип, яңғыҙ һуғышсының ғәйрәте сикһеҙ түгеллеген таныһа, «Йүрүҙән, һин беҙҙең туған йылға...» әҫәрендә батырҙы батыр иткән, көрәште еңеүгә килтерерҙәй төп көстөң халыҡ икәнлеге аңлашыла.

Ҡаһарманлыҡ поэзияһына ҡараған текстар араһынан күләме, йөкмәткеһе, билдәлелеге менән «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» ҡобайыры айырылып тора. Йәш батырҙың хәрби етәкселек һәләте, тормош тәжрибәһе арта барған һайын, поэтик оҫталығы ла камиллаша. Хәҙер инде уның лирик геройы авторҙың эске донъяһын тулыһынса сағылдыра, батыр һуғышсы һәм талантлы сәсән булараҡ ижтимағи ролен аныҡ билдәләй. Салауат үҙенең сәсәнлек бурысын яуҙағы ысын батырлыҡ һәм халыҡ мәнфәғәттәре талабынан сығып баһалай:

Батырмын, тип кем әйтмәй, –  
Яу килгәндә йүне юҡ;  
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй, –  
Дау килгәндә өнө юҡ.

Дүртәр юллыҡ йырҙары Салауат ижадының һуңғы осорона ҡарай. Быны уларҙың йөкмәткеһенән еңел төҫмөрләй алабыҙ: Башҡортостан ерендә Крәҫтиәндәр һуғышының һүрелә башлаған сағынан алып каторгаға оҙатылғанға тиклемге осорҙа уның башынан үткән уйланыуҙары, кисерештәре сағылдырыла. Һәр дүрт юллыҡ конкрет ваҡиға йәки тетрәткес тәьҫир нигеҙендә үҙ аллы ижад ителгән, һәр ҡайһыһы тамамланған йөкмәткеле айырым әҫәрҙе тәшкил итә. Уларҙы бер циклға берләштергән дөйөм һыҙаттар ҙа табыла. Берҙән, бөтәһе лә 10–9 ижекле халыҡ йырҙары үлсәменә ҡоролған; өҫтәүенә, йөкмәткеләрендә ваҡиға һәм уй-фекерҙең аныҡ бер объектҡа бәйлелеге ярылып ята. Был – үрҙә күреүебеҙсә, ауыҙ-тел әҙәбиәтендәге мөһим үҙенсәлектәрҙең береһе. Тәү ҡарамаҡҡа авторҙың фәҡәт шәхси кисерештәре – һағышлы уйланыуҙары, хәтерләүҙәре, хаталарын иҫкә төшөрөп өҙгөләнеүҙәре өҫтөнлөк иткән һымаҡ: «Алмаған да завод, ай, ҡалманы, ала алманым Оло Ҡыштауҙы»; «Зөләйханы

үпмәй киткән булдым, әллә ниңә, юлым уңмай, тип»; «Эҫем буйҡайҙарын баяр баҫты, йөрәккәйем шуға ла зар-һағыш». Ысынында иһә шағир тыуған ер һәм халыҡ иңенә төшкән ҡайғы-хәсрәтте күңеленә яҡын алып, үҙен шуларҙың айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп тоя.

Салауат таянған поэтик традициялар халыҡ ижадына, боронғо һәм урта быуаттарҙағы төрки яҙма һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте традицияларына барып тоташа. Уның ҡаһарманлыҡ тәбиғәте хаҡындағы «Батырмын, тип кем әйтмәй...» тигән юлдар менән башланған уй-фекерҙәренә үтә лә ауаздаш юлдарҙы Урал батырҙың телмәрендә таба алабыҙ:

Халыҡтың ҡанлы үлеме
Халыҡҡа ҡул һалғанда,
Үлем менән яу асыр
Батыр ҡарап торормо?

Беҙҙең көндәргә башлыса сәсәндәр хәтере аша килеп еткән мәшһүр эпос, күрәһең, Салауатты ла урап үтмәгән, уның героик йөкмәткеһе яугир-шағирға таныш булған. Салауат шиғриәтендә шулай уҡ «Ҡорҡот Ата китабы»ндағы ҡаһарманлыҡ рухы менән һуғарылған фекерҙәргә ифрат оҡшаш һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр осрай. Мәҫәлән, Салауатта:

1. Мин киткәнгә, илап ҡайғырмағыҙ,
Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла.
2. Ҡарсыға үтмәҫ урмандан
Ыласын үтә таң менән.
3. Ыласындан да бейек оса торған
Ҡош батшаһы – ҡыйғыр бөркөт бар.

«Ҡорҡот Ата китабы»нда:

1. Бәк-батырҙар иҫән булһын, уларҙан ир балалар тыуыр.

2. Бейек ҡаялар башында бөркөт оя ҡора; ҡоштар батшаһы бөркөт ҡөҙрәтле бөйөк Аллаға яҡын оса.

«Бүгәсәүгә ҡушылып...» ҡобайырындағы «Ялт-йолт иткән ябалаҡ...» тип башланған уртаҡ «клише» Шалғыйыҙдан алып унан һуңғы йырауҙар һәм сәсәндәр импровизацияларында иркен ҡулланылған. «Яу» шиғырында (Р. Г. Игнатьевтың «Башкир Салават Юлаев, пугачёвский бригадир, певец и импровизатор» (1893) мәҡәләһендә баҫылған вариантында) телгә алынған Ғәли, Сәми, Абуталип, Нариман – урта быуаттарҙағы дөйөм төрки дини-дидактик дастандар геройҙары. Былар бөтәһе лә герой-шағир ижадына юҡҡа ғына килеп инмәгән. Автор ул әҫәрҙәр менән таныш булған, улар тәьҫирендә ижадҡа рухланған.

Салауат Юлаев шиғырҙарының айырым өлгөләре 200 томлыҡ «Бөтә донъя әҙәбиәте» серияһына индерелгән.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Емельян Пугачёв етәкселегендәге ихтилал ваҡытында Салауат Юлаев үткән юлдарҙы, ул һуғышҡан һәм алған нығытмаларҙы, ҡалаларҙы асыҡлап, дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ. 2. Интернеттан, белешмә баҫмаларҙан Юлай Аҙналиндың ихтилалда ҡатнашыуы тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр табығыҙ. 3. Салауат Юлаевтың ижады үҙенә тиклемге сәсәндәрҙекенән ниндәй үҙенсәлектәре менән айырыла? 4. Салауат Юлаев шиғриәтенең жанрҙарын билдәләгеҙ, төп тематик йүнәлештәрен асыҡлағыҙ.

## ХАЛЫҠ ИЖАДЫНДА ҺӘМ ӘҘӘБИӘТТӘ САЛАУАТ ЮЛАЕВ ОБРАЗЫ

Императрица Екатерина Икенсе 1775 йылдың 17 март манифесы менән Емельян Пугачёв етәкселегендәге ихтилалды һәм уның күренекле юлбашсыларының исемен «мәңгелек онотоуға» дусар итергә тырышһа ла, милли геройыбыҙҙы халыҡ хәтеренән юйып ташлай алманы. Салауат Юлаевтың шәхесе, эшмәкәрлеге, шиғриәте әҙәбиәттә, башҡорт фольклорында, сәнғәтендә яҡты эҙ ҡалдырҙы. Уның импровизацияларын киләһе быуындар өсөн ҡәҙерләп һаҡлаған сәсәндәр, тәбиғәте менән ижад кешеләре булараҡ, үҙҙәре лә батыр тураһында ҡобайырҙар, йырҙар сығарҙы; ваҡыт Крәҫтиәндәр һуғышы дәүеренән алыҫлашҡан һайын, Салауат образы ошо ижадсылар күңелендә, тарихи шарттарға ҡарап, үҙгәрә, дөйөмләшә барҙы.

Милли герой образы, беренсе сиратта, сәсәндәр күңеленә айырыуса яҡын жанрҙа – ҡобайырҙа тыуа. Ҡобайыр – ауыҙтел һүҙ сәнғәтенең мөһим һәм үҙенсәлекле бите. Ул һәр ваҡыт халыҡ тормошоноң етди мәсьәләләрен, ижтимағи һәм социаль проблемаларын ҡуҙғата. Шуға ла сәсәндәр тарафынан Салауат йөҙөндә айырым шәхес эшмәкәрлеген ил, халыҡ яҙмышы кимәленә күтәреп баһалау тигән һүҙ ине ул. Беҙҙең көндәргәсә һаҡланған берҙән-бер генә текста ил батырының шәхси һыҙаттары ла, ижтимағи роле лә ҡобайырға ғына хас йор һүҙ менән тапҡыр билдәләнә:

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып өндәгәндә
Тауыштары көр ине.
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине,
...Дошман менән алышҡанда,
Ил эсендә бер ине...

Салауат тураһында бөгөнгө көндә билдәле йырҙарҙың иң күбеһе XX быуат эсендә яҙып алынған. XVIII–XIX быуаттарҙа ҡағыҙға төшөрөлгән текстар ҙа бар. Иң боронғо текст 1785 йылда, Салауат үҙе иҫән саҡта уҡ, яҙып алынған. Ә ижад ителеү ваҡыты, әлбиттә, унан да иртәрәк. 12 куплеттан торған текст эсендә Салауат үҙе сығарған дүрт юллыҡтар ҙа бар. Тимәк, улар халыҡ телендәге йырҙар менән шул дәүерҙә үк аралаша башлаған. Батырға арналған куплеттарҙы уны яҡшы белгән, хатта бергә һуғышҡан кеше сығарғанға оҡшай. Был йырҙарҙа тыуған иленән ситкә һөрөлгән батырҙы йәлләп ҡайғырыу мотивы күберәк урын биләй.

Салауатҡа арнап XIX быуатта ижад ителгән йырҙар А. Н. Максимов, Р. Г. Игнатьев, С. Г. Рыбаков һәм И. Покровский кеүек ғалимдар ҡулынан үткән. Был текстарҙа, бер яҡтан, батырҙың эске күңелен сағылдырған лирик мотивтар һаҡланһа, икенсе яҡтан, уның ҡаһарманлығы данлана. Йырҙарҙың ошо ике йүнәлештәгеһе лә Салауатҡа тәрән мөхәббәт менән һуғарылған, яратып башҡарылған. Уларҙы Башҡортостан менән ҡыҙыҡһыныусы рус ғалимдары һәм яҙыусылары ла һоҡланып тыңлаған. Яҙыусы Ф. Д. Нефёдов бер башҡорт ямщигының Салауатҡа арналған ҡаһарман рухлы йырын тыңлағандан һуң: «Миңә ул йыр ҡалдырған тәьҫир шундай көслө һәм тәрән ине, хатта бер нисә сәғәт үтеп, Златоуст заводында аттарҙы алмаштырып, артабан рус ямщигы менән киткәс тә, Салауат тураһындағы йыр ҡолағымда туҡтауһыҙ зыңлап торҙо һәм боласы герой-шағир образы күҙ алдымда булды», – тип яҙып ҡалдырған.

Милли батырыбыҙ тураһында һәр быуын үҙенең йырын сығарған йәки иҫкеләренең иң һәйбәттәрен ҡалдыра килгән. Улар, ваҡыт рухына ҡарап, яңынан-яңы төҫ ала барған. XIX быуат аҙағына табан башҡорт тарихи йырҙарында лирик элемент көсәйә; шуға ярашлы, Салауатҡа арнап сығарылған йырҙарҙа эске кисереш тойғолары менән һуғарылған юлдар йышыраҡ осрай:

Салауат булған баһадирҙың
Атҡынайы ҡайтты, үҙе юҡ.
...Салауат булған, һай, баһадир
Һөйөнәлер, изге төш күреп.

XX быуат эсендә яҙып алынған йырҙар Салауат йөҙөндә хәрби юлбашсының күп яҡлы, дөйөмләштерелгән образын бирә, шул уҡ ваҡытта батырҙың үҙенә генә хас сифаттары менән биҙәп, тәрән лиризм һәм ярайһы уҡ аныҡ фәлсәфә менән һүрәтләй. Салауат күп халыҡтарҙы етәкләгән аҡыл эйәһе булараҡ та сағылдырыла:

Салауат ҡылысын ҡулға алды,
Халайыҡтар яуға ҡуҙғалды.
Салауаттың яҙған фарманы
Дошман йөрәгенә ҡуҙ һалды.

Башҡорт тарихи йырҙарында йыш ҡына Емельян Пугачёв менән Салауаттың исемдәре бергә телгә алына.

Бүгәсәү менән Салауат
Күп халыҡтарға баш икән.
...Бүгәсәү ҙә менән, ай, Салауат –
Әрәсәйҙең аҫыл егете.

Салауат тураһындағы легендалар һәм риүәйәттәр башлыса 1917 йылдан һуң яҙып алынған. Милли батырыбыҙ тарихи һәм топонимик легенда-риүәйәттәрҙә күберәк сағылдырылған. Салауат репертуары бай һәм күп төрлө, уны, үҙ сиратында, айырым төркөмсәләргә бүлергә мөмкин: 1) батырҙың тормош юлы һәм эшмәкәрлеге; 2) буй-һыны, йөҙө, ҡиәфәте; 3) туғантыумасалары, нәҫелдәре, ғаиләһе; 4) әйберҙәре; 5) уға бәйле ер-һыу атамалары һ. б. Улар таралышы яғынан бер-береһенән ҡалышмай, батыр образы төрлө яҡлап кәүҙәләнә: халыҡ ижадындағы тулы портреты асыла; көрәшсе, юлбашсы һәм шағирлыҡ сифаттары сағылдырыла. Был жанрҙа батырҙың шәхси һыҙаттары мул гиперболик буяуҙар менән бирелгән. Айырыуса уның физик көсөн, ғәйрәтен мифик батырға хас итеп һүрәтләгән легендалар йыш осрай. Бәһлеүән шәхес ярҙамында еңеүгә ынтылыу халыҡтың борондан, героик эпостар, дастандар заманынан, килгән изге хыялы булһа, икенсе яҡтан, тәбиғәт Салауатҡа ысынлап та мул физик көс биргән.

Киләһе быуындарға Салауаттың портреты ҡалмағас, телдән телгә күскән хәтирәләр уның буй-һынын йәнле ҡыҙыҡһыныу менән күҙ алдына баҫтырырға тырыша. Текстарҙа легендар батыр һис шикһеҙ матур: «...Салауаттың кәүҙәһе ҙур түгел, урта буйлы бер кеше була... Төҫө уның ҡара ғына булған. Салауат Юлаевтың күҙҙәре ҙур, ҡап-ҡара, сикә һаҡалы бик нескә булған».

Легенда-риүәйәттәрҙең иң ҙур өлөшө Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын һәм Пугачёв бригадирының шул осорҙағы эшмәкәрлеген сағылдыра. Ихтилалдың башланыуы, Салауаттың Пугачёвҡа барып ҡушылыуы, ғәскәр йыйыуы, төрлө халыҡтар менән етәкселек итеүе, яуҙарҙа еңеүгә өлгәшеүҙәре – бөтәһе лә бер нисә вариантта ҡабатлана. Уның шәхесендәге реаль һыҙаттарҙы аныҡлыраҡ күреп, юлбашсы һәм полководец сифаттарына күберәк урын биргән текстар ҙа, геройға тылсымлы көс өҫтәп, бер үҙен тиңһеҙ дошманға ҡаршы ҡуйғандары ла бар.

Салауаттың тотолоуы тураһында һөйләгән варианттар бигерәк тә киң таралған. Халыҡ үҙ батырын дошман ҡулына һис тә биргеһе килмәй: уның әсирлеккә эләгеүендә үкенесле яңылышлыҡ – йә уғы атылып бөтөүе, йә саңғыһы һыныуы, йә башҡа берәй мәғәнәһеҙ осраҡ сәбәпсе тип ҡарай.

Милли батырыбыҙҙы шағир-сәсән итеп кәүҙәләндергән риүәйәттәр ифрат ҡыҙыҡлы яҡтары менән характерлана. М. Бураңғолов яҙып алған бер хәтирәлә: «Салауат бик йәштән үк йырсылар йырлаған, ҡарттар әкиәт һөйләгән ерҙә аралашҡан, уларҙың өйөндә ҡунған. Шул арҡала әсәләренән күберәк шелтә алыр булған», – тип әйтелә. Халыҡ телендә, бигерәк тә батырҙың тыуған яҡтарында таралған риәүәйәттәр уның үҫмер сағында тәбиғәттең төрлө төбәктәренә арнап шиғырҙар сығарыуы хаҡында һөйләй. Бына шулар араһынан хәҙерге Салауат районында яҙып алынғандарының береһе: «Салауат йыр, бәйет сығарып, ҡағыҙға яҙып, халыҡ уҡыһын тип, һыбай йөрөгәндә ергә ташлап китер булған. Ҡайҙа барһа, шунда халыҡ араһында ла ташлап йөрөгән. Беҙҙең Ялтыраҡкүлде үткәндә лә ташлап киткән». Салауаттың әсәһе лә сәсән һүҙле кеше булған, улын яуға оҙатҡанда, икәүләп йыр әйтешкәндәр.

Салауат исеменә бәйле бәйеттәр ҙә бар. Әммә улар халыҡ араһында таралыуы буйынса йыр һәм легендаларҙан күпкә ҡайтышыраҡ. Йыш ҡына батырға ҡарата ҡайнар мөхәббәт хисе менән сығарылған өйрәнсек авторҙарҙың шиғри әҫәрҙәрен тәшкил итәләр. Шулай ҙа ошо шәхси тойғолар шәлкемен бергә йыйып ҡараһаң, герой-шағирҙың дөйөмләштерелгән образын күҙ алдына баҫтырырға ынтылыш яһалғанын күрәһең. Бындай әҫәрҙәргә «...трагик һәм оптимистик мотивтарҙың бергә ҡушылыуы хас: бер яҡтан, геройҙың фажиғәһе һәм халыҡтың уны йәлләп әрнеүе, ҡайғырыуы; икенсе яҡтан, кешеләрҙең Салауат башлаған көрәште дауам итергә әҙерлеге, дөрөҫлөктөң тантана итеүенә ышаныуы хас», тип яҙа ғалимдар.

Дөйөм алғанда, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәре – ҡобайырҙар, йырҙар, легенда-риүәйәттәр, бәйеттәр милли батырҙың халыҡ аңындағы образын асып бирҙе, шағир һәм юлбашсы шәхесе аша үҙенең дә колониаль һәм социаль иҙеүгә тәрән ҡаршылығын белдерҙе, азатлыҡ өсөн көрәш идеяларын яҡланы.

Яҙма әҙәбиәткә килгәндә, Салауат Юлаев шәхесен төрлө осор ғалимдары, әҙиптәре ҡыҙыҡһыныу менән XVIII быуат аҙаҡтарынан, милли геройыбыҙҙың әле иҫән сағынан башлап, тарихи хеҙмәттәрҙә лә, нәфис әҙәбиәттә лә сағылдырҙы. Тәү тапҡыр уның исеме 1784 йылда Германияның Галле ҡалаһында сыҡҡан «Яңы тарих һәм география» тигән йыйынтыҡта телгә алына. Ошо уҡ әҫәр 1799 йылда Парижда француз телендә лә донъя күрә. Рәсәйҙә пугачёвсыларҙың исемен телгә алыу ҡәтғи

тыйылыуға ҡарамаҫтан, Салауат тураһында беренсе булып бөйөк рус шағиры А. С. Пушкин 1834 йылда үҙенең «Пугачёв тарихы» тигән китабында яҙа, уны Крәҫтиәндәр һуғышының күп һанлы етәкселәре араһынан Е. И. Пугачёв, И. Н. Зарубин-Чика, А. Г. Соколов (Хлопуша) кеүек иң ҙур полководецтар рәтенә ҡуйып, айырып күрһәтә. XIX быуатта һәм XX быуат баштарында тарихсылар, крайҙы өйрәнеүселәр Н. Дубровин, А. Дмитриев-Мамонов, Н. Фирсов, П. Юдин, В. Витевский, Р. Игнатьев милли геройыбыҙҙың хәрби эшмәкәрлегенә баһа бирҙе, яҙыусылар В. Данилевский, Е. Салиас-де-Турнемир, Д. Мамин-Сибиряк, Ф. Нефёдов нәфис әҫәрҙәрҙә уның героик образын сағылдырҙы.

Башҡорт шиғриәтендә Салауат Юлаев образы XX быуат башынан күренә башланы. Ш. Бабичтың 1918 йылда баҫылып сыҡҡан «Салауат батыр» шиғыры уға арналған иң тәүге әҫәр булды. 20–40-сы йылдарҙа ижад ителгән Батыр Вәлид, Әбүс, Хәниф Кәрим, Хәким Ғиләжев, Ҡадир Даян шиғырҙарында, Маҡсуд Сөндөклөнөң «Салауат» поэмаһында, Ш. Бабич кеүек үк, уның исеме менән ғорурланыу, батырлығы тураһында абстракт һүҙ йөрөтөү, тыуып үҫкән ерен маҡтап һүрәтләү мотивтары сағылды. Герой-шағирҙың рухи донъяһын, уның булмышының бөйөклөгөн, юлбашсылыҡ эшмәкәрлеген философик дөйөмләштереүгә ынтылыш 50–70-се йылдарҙа асыҡ күренә. Р. Ниғмәти, К. Кинйәбулатова, А. Игебаев, М. Ғәли, З. Биишева, Х. Ғиләжев, Р. Бикбаев, Р. Назаровтар Салауат шәхесенең бөгөнгө заман менән бәйләнеше тураһында уйлана, Я. Ҡолмой легендар геройҙың тәүәккәллек, ихтилал идеяларына тоғролоҡ һәм шағирлыҡ сифаттарын күрә, Ғ. Рамазанов һәйкәл булып Өфөгә әйләнеп ҡайтҡан Салауат һынының бөйөклөгөн һыҙыҡ өҫтөнә ала. Н. Нәжми менән Ә. Атнабаев иһә герой-шағирҙың ҡылған эшмәкәрлегенә хәҙерге заман күҙлегенән философик дөйөмләштереү яһай:

Батшаларҙан да юғары
Тора Иҙел ярҙарында...

*(Н. Нәжми)*

Шағир тиклем шағир яуға сыҡҡас,
Бер ҙә юҡҡа ҡылыс болғамаҫ.

*(Ә. Атнабаев)*

Ғ. Әмириҙең «Салауат аманаты» ошо фекерҙәрҙе дауам итеп, нығытып ҡуйыусы уңышлы ғына бер ҙур күләмле поэтик әҫәр булды.

XX быуат аҙағы һәм XXI быуат башы шиғриәтендә герой-шағир образы күптәрҙе илһамлы ижадҡа рухландырҙы. Улар

башҡорт шиғриәтенең бөгөнгө юғарылығынан тороп, Салауат шәхесе – тарих – заман тирәһендә философик уйланыуҙар яһап, тос поэтик фекерҙәр әйтергә ынтылды. Ҡ. Аралбаев «Батыр яраһы» поэмаһында Салауаттың яҙмышын ил яҙмышына тиңләп, уның яраһын ил яраһына бәрәбәр итеп бирә. Ғ. Шафиҡов «Йүрүҙән» поэмаһында батыр тураһында йылғаның матур тәбиғәте фонында лирик-философик планда уйлана. Ф. Туғыҙбаева «Яуап көнө» әҫәрендә Салауат образын уның замандашы һәм дошманы Ҡолой Балтасов менән йәнәш ҡуйып аса. Өфөлә Салауат Юлаевҡа мөһабәт һәйкәл ҡуйылыуы Г. Юнысова, Р. Шәкүр, И. Кинйәбулатов, С. Әлибаев, Ғ. Дәүләди, Ф. Күзбәков, Р. Әхмәҙиев, Д. Булгакова, Р. Хәйриҙәрҙе шиғри шәлкемдәр һәм шиғырҙар яҙыуға рухландырҙы. Аҫылғужа, Т. Ғәниева, Т. Дәүләтбирҙина, Р. Солтангәрәева, Р. Әхтәри шиғырҙары Салауат каторгала булған эстондар еренә арналды.

Башҡорт батырының данлы исеме рус шағирҙары Д. Бедныйҙы, М. Львовты, М. Дудинды, В. Сорокинды, сыуаштарҙан Яков Ухсай менән М. Юхманы, ҡаҙаҡ Сырбай Мәуленовты, татар Хәсән Туфанды, яҡут Савва Тарасовты һәм башҡа милләттәрҙең күренекле әҙиптәрен ижадҡа рухландырҙы.

П р о з а л а Салауат Юлаев хаҡындағы тәүге хикәйәне Хәбир Әбдрәшитов тигән автор XX быуаттың 20-се йылдарында «Сәсән» журналында баҫтырҙы, әммә милли геройыбыҙға арналған романдар, нигеҙҙә, һуңғы йылдарҙа яҙылды (М. Иҙелбаев. «Юлай улы Салауат», А. Баһуманов. «Салауаттың йәше», Я. Хамматов. «Салауат»). Рус яҙыусылары ижадында ул байтаҡҡа алдараҡ күренә башланы. С. Злобиндың «Салауат Юлаев» романы совет әҙәбиәтендә күренекле әҫәр булараҡ танылды һәм оҙаҡ йылдар буйы уҡыусыларҙың ихтыяжын билдәле дәрәжәлә ҡәнәғәтләндереп килде. Ошо роман нигеҙендәге сценарий буйынса Башҡортостан сәнғәте тарихында тәүге нәфис фильм ҡуйылды. В. Шишков менән Е. Фёдоров 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын эсенә алған «Емельян Пугачёв» һәм «Таш бүлкәт» романдарында Салауат шәхесен ихтилалдың иң ҙур юлбашсылары рәтенә ҡуйып һүрәтләне. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Н. Рыбак, Е. Ярославский, К. Симонов, И. Эренбург үҙҙәренең ялҡынлы публицистик сығыштарында халыҡты изге яуға рухландырыу өсөн башҡорт батырының исемен телгә алдылар.

Д р а м а т у р г и я л а Салауат Юлаев образын тыуҙырыуҙың үҙ тарихы бар. Ул башҡорт театры тарихы менән тығыҙ бәйләнгән. Салауат тураһында тәүге драма әҫәрен Ф. Сөләймәнов яҙа. Ул 1919 йылдан башлап Башҡорт дәүләт драма театрында ҡуйыла. Аҙағыраҡ С. Мирасов, ошо пьесаны файҙаланып, «Салауат батыр» исемле яңы драма өҫтөндә эшләй. Был әҫәр

1924 йылда Мәскәүҙә китап булып баҫылып сыға. Милли геройыбыҙҙы башҡорт сәхнәһенә тәүгеләрҙән булып сығарыу ҡаҙанышы менән бергә, ике автор ҙа етди генә кәмселектәрҙән ҡотола алмаған, тарихи дөрөҫлөккә тап килеп етмәгән хаталар ебәргән.

Башҡортостан хөкүмәте һәм йәмәғәтселек теләге буйынса Салауат тураһында яңы драманы Д. Юлтый ижад итә. Тәүге премьераһы («Салауат») 1926 йылда була. 1927 йылда драма «Пугачёв менән Салауат» исеме менән Мәскәүҙә күрһәтелә. 1927–1935 йылдарҙа матбуғат биттәрендә әленән-әле сыҡҡылап торған тәнҡит мәҡәләләренә ҡарағанда, Дауыт Юлтый драмаһы, нигеҙҙә, ыңғай баһалана. Ул 1935 йылға тиклем сәхнәнән төшмәй, Башҡорт дәүләт театрында ғына ла 150 тапҡыр күрһәтелә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был әҫәрҙең тексы беҙҙең көндәргәсә һаҡланмаған.

30-сы йылдарҙа Б. Бикбай Ғ. Сәләм менән берлектә «Салауат» драмаһын яҙа. Аҙаҡ уны драматик поэма итеп үҙгәртә, ә 40-сы йылдарҙа яңынан төҙәтеп, операға либретто яҙа. Баязит Бикбай Салауат образын диалектик үҫештә бирергә ынтылған. Йәш геройҙың донъяға ҡарашы асылғандан-асыла, халыҡ бәхете өсөн көрәш саралары тураһындағы уйҙары киңәйгәндән-киңәйә бара. Геройҙың поэтик рухлы эске донъяһы ярайһы уҡ сағыу асылған. Композитор Заһир Исмәғилев ошо либретто буйынса «Салауат Юлаев» операһын ижад итә. Ул бөгөн дә театр репертуарында йәшәп килә.

70-се йылдарҙа М. Кәримдең «Салауат» трагедияһы донъя күрҙе. Автор Салауат образын драматургияла тәүге тапҡыр яугир һәм шағир итеп күҙ алдына баҫтыра. Тамашасы бөтә әҫәрҙе герой һәм шағир образы яҫылығынан ҡабул итә, шағир Салауат менән бөгөнгө көн араһындағы рухи яҡынлыҡты күрә.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Салауат Юлаев образының ҡобайыр, йыр, легенда һәм риүәйәт жанрҙарында һынландырыу үҙенсәлектәрен сағыштырып, уртаҡ һәм айырмалы яҡтарына иғтибар итеп, ҙур булмаған сығыштар әҙерләгеҙ. Үҙ-ара бүлешеп алып, һәр жанрға айырым сығыш төҙөп, аҙаҡ бергәләп сағыштырып ҡарарға мөмкин. 2. Байыҡ Айҙар сәсәнгә арналған теманан «Юлай менән Салауат» эпосын иҫкә төшөрөп, милли батыр образын эпос жанрында сағылдырыу мөмкинлектәренә иғтибар итегеҙ. 3. Салауат тураһындағы халыҡ йырҙарының уның үҙ ижадына бәйлелеген нисек аңлатырһығыҙ? 4. Яҙма әҙәбиәттең ҡайһы жанрында Салауат образы айырыуса киң урын алған? Ни өсөн?

# БАШҠОРТОСТАНДА БОРОНҒО ҺӘМ УРТА БЫУАТТАРҘАҒЫ ҠУЛЪЯҘМА ӘҘӘБИӘТ

Башҡорттар борондан яҙмалы халыҡ булған. Уның яҙма мәҙәниәте үҫешенең тиҫтәләгән быуатты үҙ эсенә алған тарихы бар. Ә үҙенең тел байлығын яҙыуҙа сағылдыра алыуы халыҡтың донъяға ҡарашы, интеллектуаль-мәҙәни кимәле, шул иҫәптән художестволы-эстетик (образлы) фекерләүе үҫешенең иң сағыу күрһәткестәренең береһе булып тора. Башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары, X быуат уртаһында ғәрәп алфавитын ҡабул иткәнгә тиклем, бер нисә быуат буйына рун графикаһы – шына яҙыуы менән файҙаланғандар. Ул, бөтәһенән элек, үҙ заманында ил-ҡор таянысы һәм даны булған шәхестәр иҫтәлеген оҙаҡ һаҡларлыҡ әйберҙәргә – ташҡа, металға, ағасҡа, һөйәккә яҙыу еңелерәк булһын өсөн уйлап сығарылған булырға тейеш. Әлбиттә, бындай ҡаты әйберҙәргә шундай уҡ төрлө ҡаты ҡорал-инструменттар ярҙамында ауырлыҡ менән ырып яҙып, ҙур-ҙур күләмле әҫәрҙәр тыуҙырыу мөмкин булмаған. V–X быуаттарҙа рун алфавиты менән яҙылған боронғо төрки яҙмалары араһында VI–VIII быуаттар арауығында төҙөлөп юҡҡа сыҡҡан Беренсе һәм Икенсе Төрки ҡағанаттарының тарихын *художестволы сағылдырған* Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмалары иң күләмлеләре һанала. Тарихи характерҙағы был шиғри текстар Монголиялағы Орхон йылғаһы үҙәнендәге ҡая ташҡа яҙылған. Шуныһы мөһим: уларҙағы күп кенә күренештәрҙең, мотивтарҙың, жанр формаларының башҡорт һыҡтауҙарында, сеңләүҙәрендә, бәйеттәрендә, айырыуса «Урал батыр», «Аҡбуҙат» кеүек героик ҡобайырҙарында әҙмә-әҙлекле сағылыш табыуҙары, ауаздаш булыуҙары, әллә күпме һүҙҙәрҙең, йәнәш тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияға бирелмәй ҡулланылышы формаларының бөгөнгө башҡорт әҙәби телендә йә һөйләштәрендә элек нисек булһа, шул килеш ҡулланылыуҙары (мәҫәлән, әҙәби телдә: *йыр, кеше, бай, баш, кейек, ат, ҡанат, кәкүк, ябалаҡ, балыҡ, йәйләү, йәйәү, ҡая, ҡот, тырнаҡ, ҡолаҡ, алты, егерме, етмеш* һ. б.; һөйләштәрҙә:

*анта, пынта, килте, төнтә, бирте, танҡа* һ. б.), башҡорт ырыу-ара тамғаларының рун хәрефтәренә оҡшап тороуҙары ата-бабаларыбыҙҙың борондан уҡ төрки рухи донъяһының уртаһында ҡайнап йәшәүҙәре һәм яҙыуҙа рун алфавитын ҡулланыуҙары тураһында һөйләй. Быны Башҡортостандың Саҡмағош районы Иҫке Ҡалмаш ауылы эргәһендә, Ҡалмаш йылғаһы буйында һаҡланған ҡәбер ташындағы, составында башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең ҙур бер өлөшө йәшәгән Болғар дәүләте ерҙәрендә табылған һауыт-һабаларҙағы руник текстар ҙа раҫлай. Улар Урал – Волга төбәгендә X быуатта ислам дине менән бергә ғәрәп яҙыуы таралыу тапҡанға тиклем шына яҙыуҙың киң ҡулланылышта булыуы хаҡында һөйләй. Ҡайһы бер төрки халыҡтарында был яҙыу бер ни тиклем үҙгәрештәр менән хатта XII быуатҡа тиклем файҙаланылған. Ата-бабаларыбыҙ иһә X быуаттан алып 1928 йылға тиклем, йәғни мең йыл буйына, яҙма мәҙәниәтен ғәрәп графикаһында үҫтергән.

Борон мөһим күренгән уй-фекерҙәр, хис-тойғолар һәм теләктәр ташҡа, ағасҡа, һөйәккә, металл әйберҙәргә генә түгел, туҙға, тирегә лә яҙылған булған. Ҡағыҙ уйлап тапҡас ҡына, аҡ ҡағыҙға яҙа башлағандар. Ул халыҡтарҙың рухи-мәҙәни үҫешенә ныҡ этәргес биргән. Башҡортостанда йылдың дүрт миҙгеле лә үҙҙәрен ныҡ тойҙорткан ҡаты климат, ил баҫҡынсылары менән һуғыштар, төйәкләнгән урындарҙы ҡалдырып китергә мәжбүр булыуҙар, төрлө ханлыҡтар аҫтында иҙелеп йәшәүҙәр, азатлыҡ өсөн барған бихисап ихтилалдар шарттарында борон ташҡа, металға, ағасҡа, туҙға, тирегә яҙылған ҡомартҡылар ҡыйратылып, ватылып, яндырылып, таланып, юғалып әрәм-шәрәм булып бөткәндәр. Халыҡ араһында әле лә йөрөгән йырҙарҙағы «тарих яҙыр инем ташына», «йырҙар яҙыр инем Урал ҡаяһына», «ташҡайҙарҙы соҡоп яҙҙым ҡарғыш» кеүек шиғри юлдар, «туҙға яҙмағанды һөйләмә» тигән фраза – ата-бабаларыбыҙҙың таш, туҙ кеүек әйберҙәргә яҙып йөрөгән замандарҙан ҡалған һүҙҙәр ул. Рус тарихсыһы Р. Г. Игнатьев XIX быуаттың аҙаҡтарында әле Урал аръяғы башҡорттары араһында тирегә яҙылған яҙмалар күргәнлеген әйтә.

Борон ҡағыҙға ҡулдан яҙылған китаптар бик күп булған, ләкин төрлө яуҙар, янғындар, ихтилалдар ваҡытында уларҙың күбеһе таралып, туҙҙырылып, яндырылып юҡҡа сыҡҡан. Иҫән ҡалғандары ла күп ваҡыттар уҙыуҙан яҙыуы тоноҡланып, ҡағыҙы туҙып, әкренләп әрәм була килгән. Ана шундай сәбәптәр арҡаһында ҡулъяҙма китаптарҙың күбеһе беҙҙең көндәргә килеп етмәгән. Уларҙың ҡайһы берҙәренең күсермәләренең күсермәләре генә һаҡланып ҡалған. Боронғо тарихи Башҡортостан, йәғни башҡорт иле менән бәйле бындай ҡулъяҙма китаптар

хәҙер Өфөлә, Санкт-Петерургта, Ҡазанда, хатта Франция, Англия, Голландия, Германия кеүек илдәрҙәге ғилми китапханаларҙа һәм архивтарҙа һаҡлана. Был рухи байлыҡ тарих, философия, география, тел ғилеме һәм башҡа фән өлкәләренә, айырыуса дингә һәм әҙәбиәткә бәйле ҡулъяҙма китаптарҙан тора. Уларҙың күбеһе элек мәҙрәсәләрҙә дәреслек, уҡыу китабы булып ҡулланылған. Ҡулъяҙма китаптар халыҡ араһында ҡулдан ҡулға күсеп, уҡымышлы кешеләр тарафынан күсереп алынып йөрөтөлгән.

**Китап күсереүселәр**

Ҡулъяҙма китап – быуындан быуынға, быуаттарҙан быуаттарға күсереп яҙыла килгән рухи-мәҙәни мираҫ. Ҡулдан яҙылған китапты, баҫма китап кеүек, бер юлы йөҙәр, меңәр дана әҙерләп булмай. Уның нөсхәһе бары бер данала барлыҡҡа килә. Әҫәрен йә ғилми хеҙмәтен ҡулдан яҙып тыуҙырған авторҙарҙың ижад емештәре күсереп яҙыуҙар арҡаһында ғына халыҡ араһында таралған.

Рухи эҙләнеү емештәрен ҡулдан яҙыу юлы менән барлыҡҡа килтергән замандарҙа ҡулъяҙма китаптарҙы күсереп таратыу үҙе бер үтә мөһим һөнәргә әүерелгән. Китап күсереү – бик ваҡ, оҙайлы һәм мәшәҡәтле эш булған. Ҡайһы бер ҡалын китаптарҙы айҙар буйына күсергәндәр. Китап күсереү эшендә үҙен ныҡ танытҡан, тирә-йүндә киң билдәлелек алған кешеләр ҙә булған. Уларҙы *хаттат,* хәҙергесә әйткәндә, *матур яҙыу оҫтаһы*, йәғни *каллиграф* тип йөрөткәндәр.

Күп ҡулъяҙма китаптар – матур каллиграфия менән яҙылыуы, семәрләп биҙәлеүе, бөхтәләп төпләнеүе менән үҙе бер һөнәр эше, сәнғәт күренеше. Шуға күрә боронғо ҡулъяҙма китаптар ҡиммәт баһаланғандар һәм бик ҡәҙерләп һаҡланғандар. Яҡшы итеп эшләнгән ҡайһы бер ҡалын китаптар ул замандарҙа ат хаҡы бәрәбәренә йөрөгән. Тик уның менән китап күсереүселәр үҙҙәре түгел, уны күсертеү эшен ҡулына алған байҙар, төрлө сауҙагәрҙәр табыш иткән. Был хәл-күренеште, мәҫәлән, Силәбе өлкәһендәге Әлмән тигән башҡорт ауылында тыуып үҫкән, йәш сағында Дағстан яғында уҡып, каллиграфия һөнәренә өйрәнеп ҡайтҡан һәм бөтә ғүмерен китап күсереп, ғилем таратыу эшенә арнаған Ғәбделнасир исемле күренекле хаттаттың ғүмеренең аҙағында, 1840 йылда, күсергән китаптарының береһендә яҙып ҡалдырғандары бик асыҡ дәлилләй: «Бөтә яҙған китабым ике йөҙ егерме өс том булды. Егерме йәшемдән китап яҙа башлағайным, хәҙер туҡһан биш йәшемә ирештем, һаман да күҙлек кеймәйем. *Сыра яндырып яҙҙым.* Хәҙер шәм тигән бер нәмә донъяға сыҡһа ла, *берәй кис яндырыр-*

*лыҡ шәм алырлыҡ та аҡсам юҡ»* (курсив беҙҙеке. – *Ғ. Ҡ.*). Иҫ киткес оло хеҙмәт һәм ни тиклем аянысл хәл был. Хеҙмәтенең ололоғо һәм мөһимлеге шунда: ул күсергән ике йөҙ томдан ашыу ҡулъяҙма китап мәҙрәсәләрҙә һәм мәктәптәрҙә ғәрәп, иҫке төрки телдәре һәм әҙәбиәттәре, дин һәм логика дәрестәрендә дәреслек булып уҡытылған, халыҡтың донъяға ҡарашы, логик һәм образлы фекерләүе үҫешенә булышлыҡ иткән. Аянысл хәле – уның шул тиклем оҫта булып та, иҫ киткес мөһим ҙур эштәр башҡарып та, күпме мохтажлыҡ кисереп йәшәүендә. Эшенә бөтә күңеле менән бирелгән был китап күсереү оҫтаһы үҙ һөнәре менән кәсеп итмәгән, халыҡҡа мөмкин тиклем күберәк аңбелем нурҙарын таратыуҙы беренсе планға ҡуйған. Бындай гуманистик ҡарашлы, халыҡсан рухлы китап күсереүселәр ул замандарҙа шаҡтай күп булған. Хәҙерге ваҡытта табылған ҡулъяҙма китаптар араһында тиҫтәләгән китаптар күсергән хаттаттарҙың тулы бер күсермәләр йыйылмалары – коллекциялары осрауы ана шул хаҡта һөйләй. Ҡулъяҙма байлығыбыҙҙың бер ни тиклем өлөшө булһа ла беҙҙең көндәргә килеп етеүе өсөн беҙ ошондай патриотик рухлы китап күсереү оҫталарына бурыслыбыҙ.

Ҡулъяҙма сығанаҡтарҙы күсереп яҙыусылар уларҙы юҡ-юҡта мөхәррирләп, уларҙың теге йәки был урындарына үҙҙәренсә төҙәтмәләр индергеләп ебәргәндәр. Бындай үҙгәртеүҙәр ҡайһы берҙә заказсының теләге һәм талабы буйынса эшләнгән. Һөҙөмтәлә, яҙма ҡомартҡының авторын ғына түгел, барлыҡҡа килеү ваҡытын, төп нөсхәһен билдәләүҙә лә ҙур ауырлыҡтар килеп сыға. Уларҙы хәл итеү менән филология фәненең *текстология һәм палеография* тигән тармаҡтары шөғөлләнә. ***Текстология*** *ҡулъяҙма ҡомартҡыларҙың төрлө редакцияларының телен, уларҙың яҙылыу урынын һәм ваҡытын, текстың автор идеяларына, уй-фекерҙәренә тап килеү-килмәүен асыҡларға булышлыҡ итә.* Текстологтарҙың фәнни терминологияһында бер йәиһә бер нисә әҫәрҙең ҡулдан яҙылған тексын күҙ уңында тотҡан *«ҡулъяҙма»*, күсереп яҙылған әҫәр исемлеген күҙ уңында тотҡан *«исемлек»*, ҡомартҡыны аңлы рәүештә эшкәртеүҙе, уға ниндәй ҙә булһа үҙгәрештәр индереүҙе иҫәпкә алған *«редакция»* тигән төшөнсәләр йәшәй. ***Палеография*** *хәрефтәрҙең яҙылышы, ҡулдан яҙыу (почерк) үҙенсәлектәре, яҙыу материалының характеры, ҡағыҙҙағы һыу билдәләре, биҙәктәр һәм башҡалар буйынса ҡулъяҙманың барлыҡҡа килеү ваҡытын һәм уның менән эш итеүсе күсереп яҙыусыларҙың һанын асыҡларға мөмкинлек бирә.*

**Боронғо һәм урта быуаттарҙағы башҡорт әҙәбиәтенең үҙенсәлектәре**

Боронғо ҡулъяҙма китаптарҙың беҙҙең көндәргәсә килеп еткәндәренең бөтәһе лә ғәрәп графикаһында яҙылған ижад емештәренән ғибәрәт. Уларҙың күп өлөшөн ырыу-ҡәбилә, халыҡ тарихын, төрлө тарихи хәл-ваҡиғаларҙы сағылдырған, айырыуса дини тәғлимәттәрҙе, ҡағиҙәләрҙе һәм йолаларҙы тормошҡа ашырыу маҡсатына хеҙмәт итеүгә йүнәлтелгән функциональ характерҙағы сығанаҡтар тәшкил итә. Шуға ла, заманының дини идеологияһына бәйле рәүештә, уларҙың байтағында дини мотивтар өҫтөнлөк алып тора. Бындай сығанаҡтар мәктәп, мәҙрәсәләрҙә уҡыу әсбабы рәүешендә, халыҡҡа өгөт-нәсихәт уҡыу, вәғәз әйтеү маҡсатында киң ҡулланылған. Уларҙың күбеһенең авторҙары билдәһеҙ, аноним, сөнки дини, мораль күҙлектән ижад емешенә исем-фамилияңды яҙыу әллә ни хупланып барылмаған, үҙеңде башҡаларҙан айырып күрһәтергә тырышыу һаналған. Әҙәбиәт донъяһындағы анонимлыҡ яҙыусының мөмкин тиклем традицион булырға тырышыуына – билдәле бер жанр тексын барлыҡҡа килтереүҙең нормаға әүерелгән, ҡалыплашҡан ҡағиҙәләрен һәм сара-алымдарын тайпылышһыҙ үтәргә ынтылыуына ла бәйләнгән.

Боронғо ҡулъяҙма китаптарҙың шаҡтай ҙур өлөшө әҙәби әҫәрҙәрҙән тора. Улар төҙөлөштәре йәһәтенән дә, жанр формалары менән дә төрлө-төрлө. Араларында үҙе бер ҡалын китаптан торғаны йәки бер нисә әҫәрҙе берләштергән йыйынтыҡтар рәүешендә төҙөлгәндәре бар. Йоҡа ғына дәфтәр йәки бер нисә бит ҡағыҙ формаһында йөрөгәндәре лә осрай. Жанр йәһәтенән улар саф шиғри формала йә теҙмә менән сәсмә өлөштәрҙең аралашып килеүе рәүешендә ижад ителгән күләмле дастан һәм ҡисса, башлыса сәсмә формала яҙылған ҙур булмаған хикәйәт, хикәйә, сәйәхәтнамә кеүек эпик һәм робағи, ғәзәл, хикмәт, мәҙхиә, мәрҫиә ише лирик характерҙағы жанрҙарҙан ғибәрәт. Уларҙың сафын уйҙырмалылыҡҡа үтә юл ҡуймаған, ырыу-ҡәбиләләрҙең, халыҡтың күп быуатлыҡ тормош юлын тарихи-документаль дөрөҫлөгөндә сағылдырырға ынтылған ярым тарихи, ярым әҙәби тәбиғәтле тәуарих һәм шәжәрә, художестволы публицистика йүнәлешендәге сәйәхәтнамә, хажнамә һәм хат жанрҙары ла тулыландыра.

Ҡулъяҙма әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеләре лә күп төрлө. Уларҙың араһында донъяға, ысынбарлыҡҡа күп нәмәләрҙе аллалаштырып ҡарау аша баҡҡан мәжүсилек дине, бигерәк тә ислам тәғлимәте, мосолмансылыҡ рухы, суфыйсылыҡ мотивтары менән һуғарылғандары өҫтөнлөк итә. Был әҫәрҙәрҙең бик ҙур өлөшө башҡорт ерлегендә тыуыуға ҡарағанда, ислам дине ныҡ таралған Көнсығыш илдәренән килеп ингән. Халыҡ араһында

пәйғәмбәрҙәр, ислам диненең бөйөклөгөн иҫбатлау, уны таратыу өсөн көрәшеүсе сәхәбәләр һәм батырҙар, изге заттар, уларҙың ғибрәтле һәм фәһемле тормош юлдары, мажаралар аша тормошҡа ашырылған изге эштәре хаҡындағы ҡиссалар, хикәйәттәр һәм хикәйәләр киң таралыу тапҡан. Әҙәби әҫәрҙәр араһында тормошҡа яҡынырaҡ булғандары, ысынбарлыҡты реаль сағылдырғандары ла шаҡтай урын алып тора. Уларҙа, тәбиғи, донъяуи мотивтар төп урынды биләй.

Бында шуны иҫәпкә алырға һәм ныҡ иҫтә тоторға кәрәк: заманының ижтимағи ҡоролошона, хөкөм һөргән социаль-иҡтисади һәм сәйәси шарттарына бәйле рәүештә боронғо һәм урта быуаттарҙағы әҙәбиәт үҙ осороноң диненән, этикаһынан, ғиле-менән һис айырылғыһыҙ үҫкән һәм йәшәгән. Бына шуға күрә лә, ул тормошто, уның уртаһында ҡайнаған кешене бөтә асыҡлығында, ҡатмарлылығында һәм ҡаршылығында сағылдырыуға ҡарағанда, күберәк үҙ дәүеренең дини, этик, фәлсәфәүи һәм ғилми ҡараштарын сәсмә, айырыуса теҙмә формаларҙа йәнле һәм үтемлерәк итеп еткерергә тырыша. Ил-ҡор тарихы, ундағы мөһим ваҡиғалар, донъя хәлдәре, дин, әхлаҡ мәсьәләләре хаҡында мәғлүмәт бирергә, өгөт-нәсихәт күндерергә ынтыла. Шунлыҡтан был оҙайлы дәүерҙәге әҙәбиәт ярым дини һәм ярым донъяуи, дидактик характер ала. Ул бынан күп быуаттар элек йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың донъяға ҡарашын, рухи-мәҙәни кимәлен, шул замандың идеологияһын күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Уның ҡомартҡылары менән танышыу беҙгә бер ни тиклем ваҡытҡа ғына булһа ла уй менән әллә ҡасанғы осорҙарға күсергә, был донъяны күптән ҡалдырған ата-бабаларыбыҙ менән әңгәмәләшергә, ә иң мөһиме: тарихыбыҙҙы белергә һәм аңларға булышлыҡ итә. Кеше үҙ нәҫел тамырҙарын мотлаҡ белергә тейеш. Улар ни тиклем ҡеүәтлерәк, үткәнгә тәрәнерәк киткән булһа, кеше үҙен тормошта шул тиклем көслөрәк тоя, рухлыраҡ була.

Ҡулъяҙма әҫәрҙәрҙең йөкмәтке һәм форма үҙенсәлектәре, жанр тәбиғәте бөтәһенән дә элек уларҙың ниндәй ижтимағи-тарихи, социаль-иҡтисади һәм сәйәси шарттарҙа тыуыуына бәйле. Бик боронғо осорҙарҙа башҡорт ырыуҙары үҙ бейҙәре, ырыу етәкселәре аҫтында, башлыса, күсмә тормошта тырым-тырағай йәшәгән саҡта ниндәй ҙә булһа юғары идея-художестволы ҡулъяҙма әҫәрҙәр тыуҙыра алмаған. Бындай әҫәрҙәрҙең барлыҡҡа килеүе өсөн шарттар, патриархаль-ырыу тәртиптәре тарҡалып, феодализм йәмғиәте формалашҡан һәм үҫкән, ултыраҡ тормош тәртиптәре хөкөм һөргән дәүерҙә – XI–XVIII быуаттарҙа ғына тыуа башлаған. Был дәүергә тиклем үк башҡорт халыҡ ижадында, айырыуса эпостарҙа ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереү, ныҡлап ултыраҡ тормошҡа күсеп, берҙәм халыҡ

булып ойошоу идеяһы киң сағылыш тапҡан. IX–X быуаттарҙа был идеяны тормошҡа ашырыу тенденцияһы көсәйгәндән-көсәйә барған. X быуат баштарына башҡорттарҙың Уралдың ике яғында – Тоболдан Волгағаса арауыҡта ныҡлап ерләшеүе һөҙөмтәһендә Боронғо Башҡортостан территорияһы тамам асыҡланып етә. X–XIII быуаттарҙа көнбайыш башҡорттарының ҙур өлөшө Волга буйында сәскә атҡан, мәҙәниәте ныҡ үҫкән Болғар дәүләте составында йәшәй башлай. Тап ошо осорҙа иҡтисади, мәҙәни тормошо, яҙма мәҙәниәте үҫешкән был дәүләттә әйле башҡорттары араһынан сыҡҡан Ҡол Ғәли үҙенең үлемһеҙ «Йософ вә Зөләйха» әҫәрен ижад итә лә инде. Башҡорттарҙың артабан халыҡ булараҡ формалашыуы, үҙ дәүләтселеген булдырыу, үҙаллылығын һаҡлап ҡалыу өсөн көрәшеүе процесында яҙма әҙәбиәттә, ауыҙ-тел әҙәбиәте (йырау һәм сәсәндәр ижады) һәм фольклор менән бер рәттән, патриотизм, граждандлыҡ, тарихи дөрөҫлөк, милли ерлек һәм колорит һыҙаттары асыҡ төҫмөрләнә бара.

**«Йософ вә Зөләйха»**

Болғар осоронан алып быуаттар һуҙымында Урал – Волга төбәгендә киң популярлыҡ яулаған шиғыр менән яҙылған был ҙур күләмле эпик поэма, йәғни дастан, халыҡ араһында «Ҡисса-и Йософ», «Йософ китабы», «Йософ – Зөләйха тарихы», «Йософ ғәлиәссәләм китабы» тип тә атап йөрөтөлгән.

«Йософ вә Зөләйха» дастаны XIII быуат баштарында ижад ителгән һәм ҡулъяҙма көйө башҡорттар һәм татарҙар араһында бик киң таралған. Әҫәрҙең аҙағында уның 1233 йылда яҙылып бөткәнлеге һәм авторының Ҡол Ғәли исемле шағир икәнлеге әйтелә. Поэманың күсермә варианттары араһында уның яҙылыу ваҡыты итеп 1212 йыл күрһәтелгән осраҡтар ҙа бар. Һәр хәлдә, был киң ҡоласлы шиғри әҫәр ошо йылдар араһында ижад ителгән, 1233 йылда һуңғы нөктәһе ҡуйылып, тулыһынса уҡыусы хөкөмөнә тапшырылған. Ҡайһы бер ғалимдарҙың әйле ырыуы башҡорттарының шәжәрәһенә һәм әҫәрҙәге айырым мәғлүмәттәргә таянып фаразлауҙарына ҡарағанда, Ҡол Ғәли яҡынса 1174 йылда тыуған, атаһы Мирхажи хәҙрәт Болғар дәүләтендә дин эштәрен атҡара башлағас, башланғыс белемде шул илдә алған, артабан ғүмеренең 45 йылын Урта Азия яҡтарында уҙғарған: белемен камиллаштырған, мәҙрәсәләрҙә мөдәррис, йәғни өлкән уҡытыусы булып эшләгән. Ғүмеренең аҙаҡтарында ул Болғар иленә, Зәй йылғаһы буйына, әйләнеп ҡайтҡан, башҡорт ырыуҙары биләрҙәр нигеҙләгән һәм йәшәгән Биләр ҡалаһында 1248 йыл тирәһендә вафат булған. Шағир 1195–1260 йылдар араһында йәшәгән тигән фараз да бар. Уның хаҡында башҡа мәғлүмәттәр юҡ. Әммә поэмаһының йөкмәткеһенән һәм художество эшләнешенән сығып ҡарағанда, Ҡол

Ғәлиҙе бер ниндәй икеләнеүһеҙ заманының ҙур уҡымышлыһы һәм талантлы шағиры тип атарға мөмкин. Тикмәгә генә уның әҫәре һигеҙ быуат буйына башҡорт һәм татар халыҡтары араһында быуындан быуынға рухи аманат итеп тапшырыла килмәгән, уның йоғонтоһонда ҡәрҙәш төрки халыҡтары әҙәбиәттәрендә Йософ менән Зөләйханың илаһи мөхәббәтенә арналған тиҫтәләгән әҫәр ижад ителмәгән.

Эпик ҡоласлы «Йософ вә Зөләйха» дастан-поэмаһы – беҙҙең эраға тиклемге ассирия-вавилон мифологияһынан юлланған боронғо легендаларға, «Ҡөрьән» сүрәһенә, ғәрәп һәм фарсы әҙәби сығанаҡтарына нигеҙләнеп яҙылған әҫәр. Йософ тураһындағы сюжет быуаттар һуҙымында донъя мәҙәниәтенең уртаҡ хазинаһына әүерелгән. Шуның ерлегендә Ҡол Ғәли төрки халыҡтары араһынан тәү башлап дастан ижад иткән. Уның сюжет һыҙығы – хәл-ваҡиғалар ағышы Көнсығыш дастандарында традицион күренешкә әүерелеп бөткән алымдан – төп геройҙың төш күреүенән башланып китә. Яҡуп пәйғәмбәрҙең йөҙө изге фәрештәләй нур һипкән иҫ киткес матур ун бер йәшлек иң яратҡан улы Йософ төш күрә. Атаһы был төштө юрап, уның киләсәктә бөтә Көнсығышта һәм Көнбайышта танылыу алыр хаким булып китәсәге хаҡында әйтә. Был хаҡта белеп ҡалған көнсөл ағалары уны күрә алмайынса ҡойоға ташлап китәләр, унан ялға туҡтаған сауҙа каруаны хеҙмәтсеһенең һыу алырға төшөрөлгән биҙрәһенә эләгеп сығып, үлемдән осраҡлы ғына ҡотолоп ҡалғас, каруан башлығына ҡол итеп һатып ебәрәләр. Әҫәрҙең төп сюжет һыҙыҡтарын Йософтоң ошонан һуң башынан үткән төрлө хәлдәр, мажаралар, батша ҡатыны Зөләйханың уға булған ҡайнар мөхәббәтенә бәйле ваҡиғалар тәшкил итә. Уларҙың экспозицияһы шулай уҡ төп персонаждарҙың төш күреүҙәренән башлана. Мөхәббәт темаһына бәйле ваҡиғалар әҫәрҙең айырыуса мажаралы һәм ғибрәтле сюжет һыҙығын тәшкил итә. Көнбайыштағы ҡеүәтле бер дәүләт батшаһының бик яратҡан, үтә лә гүзәл Зөләйха исемле ҡыҙы төшөндә бер нисә тапҡыр Йософто күреп, уға мөкиббән китеп ғашиҡ була, көнө-төнө уны уйлап, йоҡоһонан һәм ашауынан яҙа. Атаһы менән бергә бындай ҙа матур, аҡыллы һәм көслө егеттең Мысыр батшаһы ғына булыуы ихтимал тигән фекергә килеп, ул ашҡынып-дәртләнеп был илгә юллана. Унда уның өмөт-хыялдары селпәрәмә килә: Ҡәнзәфәр батша ул төшөндә ғашиҡ булған егет булмай сыға. «Яҙмыштан уҙмыш юҡтыр инде», – тип, уға тормошҡа сыҡһа ла, Зөләйха үҙендә ҡыҙ сафлығын, мөхәббәтенә тоғролоғон һаҡлап ҡалырлыҡ ихтыяр көсө таба. Көндәрҙән бер көн батша һәр саҡ моңһоу йөрөгән ҡатынына Мысыр сауҙагәренә ағалары һатып ебәргән, илаһи матурлығы хаҡында бөтә халыҡ һөйләгән Йософ ҡолдо дәүләт ҡаҙнаһындағы барлыҡ алтын-көмөштәр иҫәбенә һатып

алып бүләк итә. Зөләйха уға үҙенең һөйөүен әйтеп бирә. Әммә Йософ, үҙенең бөтөнләй түбән зат – ҡол булыуына, Алланан тартыныуына, үҙен «беҙҙең улыбыҙ булһын», тип иғлан иткән батшаға – ҡиәмәтлек атаһына хыянат итә алмауына һылтанып, күңелендә шул тиклем дә матур Зөләйхаға ҡарата һөйөү хистәре тоҡанып китһә лә, уның мөхәббәтен кире ҡаға. Бындай көтөлмәгән хәлдән мөхәббәт тойғоларын кинәт нәфрәткә әүерелдергән Зөләйха һөйгәнен зинданға ташлата һәм был яман аҙымы өсөн тейешле язаһын ала: ҡырҡ йыл буйына мөхәббәтенә тоғролоҡ һаҡлаған килеш һикәлтәле тормош юлын, ауыр һынауҙарҙы үткәндән һуң ғына һөйгәне менән ҡауышыуға, бәхетле ғаилә ҡороуға өлгәшә.

Шулай ҙа поэмала иң үҙәк проблемалар булып мөхәббәткә һәм нәфрәткә бәйле мәсьәләләр түгел, ә хаким менән халыҡ, ата менән бала мөнәсәбәттәре тора. Улар әҫәрҙең сюжеты нигеҙенә һалынған кешелек мөнәсәбәттәренең иң әһәмиәтлеһе, хәл иткесе. Шағирҙың фекеренсә, халыҡ рәхәт, ил имен йәшәһен өсөн дәүләт менән идара итеүсе кешенең, тормош ауырлыҡтарын елкәһендә татып, ҡаршылыҡтарын үҙ көсө һәм тырышлығы менән еңеп, хис-тойғоларына баш булып, түбәндән күтәрелеүе шарт. Шундай хаким ғына ил-ҡор мәнфәғәтен үҙенекенән өҫтөн ҡуясаҡ, ғәҙел, кешелекле һәм хәстәрлекле буласаҡ. Әҫәрҙә Йософ йөҙөндә тап шундай хаким образы һынландырыла ла инде. Тормоштоң иң төпкөлөнә ташланған, ҡол, зиндан тотҡоно хәленә төшөрөлгән Йософ үҙенең тырышлығы, зирәклеге, кәрәк мәлендә хатта һөйөү тойғоһон ауыҙлыҡлай алыуы менән Мысыр батшаһы дәрәжәһенә күтәрелә. Ул көнө-төнө ил, халыҡ яҙмышын ҡайғыртып йәшәй, аслыҡ йылдарҙа Мысыр халҡына ғына түгел, күрше илдәрҙәге, ағалары йәшәгән ерҙәрҙәге халыҡтарға ла ярҙам итә, хәстәрлекле, мәрхәмәтле, аҡыллы хаким булыуы менән тирә-йүндә танылыу ала, ҙур ихтирам яулай. Уның изге эштәре үҙенә лә яҡшылыҡ булып әйләнеп ҡайта: күңелендә уға булған һөйөү хистәрен саф килеш һаҡлаған Зөләйханы осратып, бәхетле ғаилә ҡора, матур-матур балалар тәрбиәләй, үҙенең яратҡан атаһын таба, туғандарын осрата. Ағалары уға ни тиклем яуызлыҡ ҡылһалар ҙа, ҡол итеп һатып ебәрһәләр ҙә, аҡыллы, мәрхәмәтле Йософ батша уларҙы ғәфү итә. Идеаль геройы аша шағир ғәҙеллеккә, миһырбанлылыҡҡа нигеҙләнгән бәхетле, тигеҙ йәмғиәт идеяһын сағылдыра, ә иң мөһиме, уға халыҡсан яңғыраш бирә, хаким кешенең, ил башлығының түбәндән күтәрелеүен яҡлай. Был Йософтоң хәйерсе ҡиәфәтендәге ярлы ғына кешене үҙенең вәзире итеүе эпизодында ла асыҡ күренә.

Дастанда ата менән улдың бер-береһенә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәтен, оло һөйөүен сағылдырған хәл-ваҡиғалар һәм күренештәр уның төп идея-эстетик әһәмиәтен билдәләгән иң эмоцио-

наль, иң драматик сюжет һыҙығын тәшкил итә. Бала йәнле Яҡуп балалары өсөн барын эшләргә һәм кисерергә әҙер хәстәрлекле, сабыр атай булып күҙ алдына баҫа. Яратҡан улын юғалтҡас, ул ҡайғы-хәсрәттән һәм күп илауҙан күреү һәләтен юғалта, етмеш йыл буйына улы менән осрашыу минуттарын зарығып көтә. Яҡуптың балаларынан яҙған, уларҙы эҙләп йөрөгән инә бүре менән һөйләшеүе, Мысыр яҡтарынан Йософ күлдәгенең еҫен алып килгән елгә өндәшеүе уның улына булған яратыу тойғоһоноң ни тиклем тәрән һәм көслө булыуын күрһәткән иң хисле, иң тәьҫирле күренештәрҙе тәшкил итә. Бала сағында ошондай мөхәббәтле, ихтирамлы, хәстәрлекле мөнәсәбәттәр мөхитендә тәрбиәләнгән Йософ та атаһы һөйөүенә һөйөү менән яуап ҡайтарырға, уның хаҡы өсөн йәнен бирергә әҙер торған изге күңелле тоғро ул булып күҙ алдына баҫа. Ата хаҡы өсөн ул көнсөллөктөң, әшәкелектең аръяғына сыҡҡан ағаларының яуызлыҡтарын да ғәфү итә. Поэмалағы Яҡуп менән Йософтоң эмоциональ һәм драматик ситуацияларҙа яҡтыртылған үҙ-ара мөнәсәбәте – ата менән баланың бер-береһенә ҡарата тәрән ихтирамының, оло һөйөүенең һәм тоғролоғоноң идеаль дәрәжәһендәге сағылышы ул.

Шулай итеп, үҙ дастан-поэмаһында Ҡол Ғәли саф мөхәббәткә дан йырлай, зирәклекте, сабырлыҡты, уңғанлыҡты маҡтай. Йософ образында ул кешенең тышҡы һәм эске матурлығын, тоғролоҡ, ғәҙеллек, мәрхәмәтлелек һәм тырышлыҡ сифаттарын символлаштырһа, Яҡуп йөҙөндә тиңдәшһеҙ ата мөхәббәте, тәрән ҡайғы-хәсрәт, сабырлыҡ һәм сикһеҙ оптимизм, ә Зөләйха образында көслө дәрт-тойғо, ҡаҡшамаҫ ихтыяр, тоғролоҡ һәм сабырлыҡ сифаттарын сағылдыра. Шағир йәмғиәттә тиңлек, ғәҙеллек, матурлыҡ тантана итеүен теләй, яуыз, ҡомһоҙ, көнсөл әҙәмдәрҙе ҡаты шелтәләй һәм хөкөм итә. Көнсөллөктө һәм яласы булыуҙы ул кешеләге иң әшәке сифаттар тип иҫәпләй. Улар арҡаһында әллә күпме кеше яҙмыштары емерелеүе, бик һәләтле, гүзәл тәбиғәтле кешеләрҙең оло маҡсаттарын, изге эштәрен тормошҡа ашырыуҙан мәхрүм ителеүе, йәмғиәт өсөн ҙур юғалтыуҙар килеүе бар. Ә бына аҡыл, күңел сафлығы, ғәҙеллек, оло йәнлелек кешене күркәм итә, кешеләргә эшләгән яҡшылыҡ һәм изгелек бер ваҡытта онотолмай, ти шағир әҫәренең төп фекер ағышында. Ана шундай тормошсан, гуманистик идея-тематик йөкмәтке «Йософ вә Зөләйха» дастанын оҙон ғүмерле һәм халыҡтың быуаттар буйы иң яратып уҡыған әҫәре итеп танытҡан да инде.

Ҡол Ғәлиҙең «Йософ вә Зөләйха» дастаны боронғо төрки әҙәби телендә яҙылған. Унда боронғо төрки һүҙҙәр менән бергә ғәрәп, фарсы һүҙҙәре лә күп кенә, халыҡ ижадына яҡын тасуирлау сараларын да йыш осратырға мөмкин. Халыҡ был поэманы быуындан быуынға күсереп ала килеп, уны уҡыу, тыңлау, яттан

көйләп башҡарыу менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмаған, «Йософ – Зөләйха» сюжетына үҙе лә легендалар, йырҙар сығарған, уны хатта әкиәт рәүешендә һөйләгән. «Йософ вә Зөләйха» революцияға тиклемге осорҙа иң ныҡ таралған һәм уҡылған әҫәр булған.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Боронғо һәм урта быуаттарҙа башҡорттар яҙма мәҙәниәтен ниндәй алфавиттар ҡулланып тыуҙырған һәм үҫтергән? 2. Борон ғилми хеҙмәттәр, әҙәби әҫәрҙәр ни өсөн ҡулъяҙма китаптар рәүешендә барлыҡҡа килгәндәр һәм таралғандар, бында хаттаттар ниндәй роль уйнаған, улар тураһында ниндәй мәғлүмәттәр беләһегеҙ? Борон әҙәби әҫәрҙәрҙең ҡулъяҙма рәүештә барлыҡҡа килеүенең ижтимағи-тарихи һәм социаль-иҡтисади сәбәптәре хаҡында фекер алышығыҙ. 3. Боронғо әҙәби ҡомартҡыларҙы өйрәнеүҙең ауырлығы нимәлә? Уларҙы өйрәнеү менән ниндәй фән тармаҡтары шөғөлләнә? 4. «Йософ вә Зөләйха» әҫәренең авторы кем, уның хаҡында ниндәй мәғлүмәттәр беләһегеҙ? 5. Поэманың сюжетын һәм идея-тематик йөкмәткеһен ҡыҫҡаса һөйләп бирегеҙ. 6. Йософ, Яҡуп һәм Зөләйха образдары аша Ҡол Ғәли кешенең халыҡ һәм ил яҙмышына йоғонто яһарҙай ниндәй сифаттары тураһында һүҙ алып бара? 7. «Йософ вә Зөләйха» әҫәренең әһәмиәте ниндәй?

## ДАСТАНСЫЛЫҠ ТРАДИЦИЯЛАРЫ

### Урта быуаттарҙа Башҡортостанда тарихи-мәҙәни шарттар

XIII быуат башында Башҡортостан ере, болғар, ҡыпсаҡ, буртас, мордва тигән халыҡтар йәшәгән ерҙәр менән бергә, тотошлай монголдар ҡыҫымына эләгә. Ошо ваҡыттан алып 200 йыл самаһы башҡорт ерҙәре Алтын Урҙа дәүләтенә буйһона. XIV быуат урталарында Алтын Урҙа Евразиялағы иң ҙур дәүләттәрҙең береһенә әйләнә. Уның көньяҡ сиге Иранға, төньяғы Башҡортостан һәм Волга Болғарияһына барып тоташһа, көнсығышта Обь, Иртыш йылғалары бассейндарынан алып көнбайышҡа Дунай ярҙарына тиклем һуҙыла. Монголдар үҙҙәре был дәүләттә буйһондоролған халыҡ менән сағыштырғанда аҙсылыҡты тәшкил иткән. Шуға ла Алтын Урҙа хакимлығындағы халыҡтар монголдар йоғонтоһона тулыһынса бирелмәгән. Был йәһәттән төрки сығышлы ҡыпсаҡ ҡәбиләләре бигерәк тә айырылып торған. Хәҙерге заманда, белеүебеҙсә, ҡыпсаҡ тигән халыҡ юҡ. Алтын Урҙа ханлығынан һуң ул тарҡалған һәм бөгөн айырым төрки халыҡтарының – ҡаҙаҡ, башҡорт, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, алтай, ҡырым татарҙарының ырыу исемдәрендә генә тороп ҡалған. Боронғо

башҡорт ҡыпсаҡтарының ырыу төркөмдәре (ҡара ҡыпсаҡ, гәрәй ҡыпсаҡ, сәнкем ҡыпсаҡ, бошман ҡыпсаҡ һ. б.) үҙҙәренең килеп сығышы менән Алтын Урҙалағы этник процестарға бәйле, улар шул дәүерҙәге ҡыпсаҡтарҙың нәҫелдәрен тәшкил итә.

Башҡорт ырыуҙары XIII–XIV быуаттарҙа ҡыпсаҡтар менән генә түгел, монголдарға буйһоноп йәшәгән рустар, болғарҙар, сыуаштар һәм башҡа халыҡтар менән дә аралаша, улар менән уртаҡ яҙмыш кисерә. Монголдар хакимлығы шул халыҡтар менән бергә башҡорттарҙың да сәйәси һәм социаль үҫешенә, Алтын Урҙа осорондағы мәҙәниәтенә һиҙелерлек йоғонто яһай. Тап ошо дәүерҙә башҡорт әҙәбиәтендә бер нисә йүнәлеш барлыҡҡа килә. Башҡорттоң йәнле һөйләү телендә халыҡтың көнүҙәк мәсьәләләрен күтәргән демократик элементлы ауыҙ-тел әҙәбиәте – йырауҙар, сәсәндәр ижады үҫешен дауам итә; уның традицияларында саф башҡорт ерлегенә ҡараған иң тәүге үҙ аллы ҡулъяҙма әҫәрҙәр күренә башлай («Һуңғы һартай» хикәйәте, шәжәрәләр, тәуарихтар, сәйәхәтнамәләр һ. б.). Икенсе яҡтан, дөйөм төрки әҙәбиәте артабан үҫә, уның классик эпик традициялары нығына бара. Фирҙәүси, Низами, Сәғҙи кеүек авторҙарҙың классик Көнсығыш шиғриәте йоғонтоһонда донъяуи гуманистик йөкмәткеле дастандар ижад ителә, шулай уҡ суфыйсылыҡ менән бәйле дини-дидактик әҫәрҙәр ҙә тарала. Башҡортостанда уларҙың барыһы ла уҡылған, күсереп таратылған, урындағы халыҡҡа рухи аҙыҡ булып хеҙмәт иткән.

XIV быуаттың икенсе яртыһында һәм аҙаҡтарында Алтын Урҙа ерендә бер нисә дастан ижад ителә. Улар урта быуаттар төрки-ҡыпсаҡ әҙәбиәте тарихында айырым урынды биләрлек атаҡлы ҡомартҡылар: Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин» (1341–1342), Харәзмиҙең «Мөхәббәтнамә» (1353–1354), Хөсәм Кәтибтең «Жөмжөмә Солтан» (1369–1370), Сәиф Сараиҙың «Гөлстан бит-төрки» (1391–1392) әҫәрҙәре. Был дастандар Алтын Урҙа дәүләтенең төрлө төбәктәрендә тыуа, хәҙерге ваҡыттағы айырым ғына бер халыҡтың әҙәби ҡомартҡылары тип ҡарап булмай: ғалимдар уларҙы замандың үҙ мәҙәниәте, үҙ әҙәби теле шарттарында ижад ителгән Урал – Волга буйындағы һәм Урта Азиялағы дөйөм төрки әҙәби фондына индерә.

Алтын Урҙа осоро дастандарында ғәрәп, фарсы әҙәбиәтенең, монгол яуынан алдараҡ ижад ителгән саф төрки яҙма ҡомартҡыларының да эҙҙәре асыҡ күренә – «Ҡоман мәжмүғәһе», «Ҡотаҙғу белек», «Диуану лөғәт әт-төрк» әҫәрҙәрендәге һүҙбәйләнештәр осрай, Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-и Йософ»ондағы геройҙарҙың исемдәре телгә алына. Төрки халыҡтарының ауыҙ-тел ижадында борондан бөгөнгө көндәргәсә һаҡланып килгән тотороҡло әйтемдәр, мәҡәлдәр, идеоматик берәмектәр, образлы сағыштырыуҙар ҙа был ҡомартҡыларҙа юлдан юлға сәселеп ята.

Был дастандарға мөһим бер уртаҡ үҙенсәлек – элегерәк кемдер фарсы йәки ғәрәп телендә тәү башлап ижад иткән әҫәр менән рухланып, шуның сюжетын файҙаланып, төрки теленә ирекле ижади тәржемә нигеҙендә яңы әҫәр ижад итеү хас. Мәҫәлән, Сәиф Сараи, фарсы-тажик классигы Сәғҙиҙең «Гөлстан» поэмаһына таянып, «Гөлстан бит-төрки» әҫәрен тыуҙырған; Хөсәм Кәтиб «Жөмжөмә Солтан»ды XIII быуат иран шағиры Фәритетдин Ғаттар эшкәрткән легендаға мөрәжәғәт итеп яҙған; Ҡотб та заманында Фирҙәүси һәм Низами күтәреп сыҡҡан таныш сюжетты һайлаған. Ғалимдар был әҫәрҙәрҙең һәр ҡайһыһын үҙ аллы әҫәр тип ҡарау яғында. Сөнки яңы заман, яңы ерлектәге автор үҙ телендә был ижади эшкә яңы балҡыш бирә, уртаҡ сюжетҡа нигеҙләнеп, дөйөм кешелек мәсьәләләренә мөрәжәғәт итә, бығаса әйтелмәгән проблемаларҙы күтәреп сыға.

**Ҡотб. «Хөсрәү вә Ширин»**

Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин» поэмаһы – урта быуаттарҙа дастансылыҡ традицияларын уңышлы дауам иткән, шул дәүерҙең художестволы фекерен сағылдырған һәм хәҙерге көндә күп кенә төрки халыҡтарының уртаҡ әҙәби ҡомартҡыһына әүерелгән поэтик әҫәрҙәрҙең иң күләмлеһе.

Ҡотб үҙ заманының уҡымышлы кешеһе булған; ғәрәп, фарсы һәм төрки телдәрен, әҙәбиәтен яҡшы белгән. «Хөсрәү вә Ширин» дастаны 1340–1342 йылдарҙа ижад ителгән. Беҙҙең көндәргә килеп еткән берҙән-бер данаһы хәҙерге ваҡытта Францияның Милли китапханаһында һаҡлана. Варшавала, Ташкентта, Ҡазанда дастандың тулы баҫмалары донъя күрҙе.

Алда әйтелгәнсә, Ҡотб уны XII быуат әзербайжан шағиры Низамиҙың фарсы телендәге ошондай уҡ исемле әҫәренә нигеҙләнеп яҙған. Сюжеты Низами дастаны менән яҡынса тап килһә лә, Ҡотб уның айырым урындарын өҫтәп йәки бер аҙ ҡыҫҡартып, йыйнаҡлап, үҙ заманына ярашлы өр-яңы әҫәр килтереп сығарған. «Низами балынан хәлүә бешерҙем», – тип сағыштыра автор. Бал менән хәлүә ике төрлө ризыҡ булған кеүек, былар ҙа ике үҙ аллы ижад емеше. Фарсы телендәге дастан 7000 бәйеттән (йәғни ике юллыҡтан) торһа, Ҡотб әҫәре иһә 11–11 ижекле 4700 бәйетте тәшкил итә.

Дастандың төп геройы – Хөсрәү. Ул Һомруз тигән батшаның улы. Батша ғәҙеллек яҡлы кеше була, Хөсрәүҙе лә шулай тәрбиәләй. Егет изгелекте һәм яманлыҡты айыра белеп, ғилемле кеше булып үҫә. Күрше батшалыҡтағы Ширин исемле иҫ киткес матур ҡыҙға ғашиҡ була. Ширин дә уны ярата, тик Хөсрәүҙең холҡондағы ҡайһы бер етешһеҙлектәр арҡаһында улар оҙаҡ ваҡыт бергә була алмайҙар. Һомруз донъя ҡуйғас, егет тәхеткә ултыра. Атаһы кеүек үк ғәҙеллек менән идара итә. Фәрхәд исемле баһадир кәүҙәле ташсы егеттең Ширингә күҙе төшә, уның ҡайнар

һөйөүе хаҡында һүҙ тирә-яҡҡа тарала. Был хәбәр Хөсрәүгә лә ишетелә. Батша ташсы егетте үҙ янына саҡыртып, Шириндән баш тартһын өсөн, күп байлыҡ вәғәҙә итә, әммә Фәрхәд уларға әйләнеп тә ҡарамай. Фәрхәдтең Ширингә булған мөхәббәте Хөсрәүҙе таң ҡалдыра. Уның рухи көсөнән ҡурҡып, Хөсрәү был егеттән ҡотолоу яғын ҡарай, Фәрхәдкә әҙәм көсө етмәҫлек шарт ҡуя: ҡаялы тауҙы ярып, юл һалырға ҡуша һәм, был эш үтәлгән хәлдә, үҙе Шириндән баш тартырға вәғәҙә итә, сөнки уны Фәрхәд башҡарып сыға алмаясаҡ тип өмөтләнә. Фәрхәдтең эшен ҡарарға тирә-яҡтан йыйылған кешеләр менән Ширин дә килә. Быны ишетеп, Хөсрәү ҡурҡыуға төшә. Етмәһә, Фәрхәд үҙ эшенең осона сығырға яҡынлаша. Батша уға «Ширин үлде» тигән ялған хәбәр еткертеп, ҙур мәкерлек эшләй: Фәрхәд алдауға ышана һәм, һағышын күтәрә алмай, үҙен үҙе үлтерә. Хөсрәү менән Ширин өйләнешеп, донъя көтә башлай. Хөсрәүҙең ғәҙел батшалыҡ итеүендә Шириндең роле ғәйәт ҙур була. Ләкин уларҙың оло ғазаптар һәм хаталар аша яулап алған бәхете оҙаҡҡа бармай. Хөсрәүгә йәшлек хаталары, Фәрхәдкә ҡарата ҡылған мәкерлеге өсөн яуап бирергә тура килә. Уның икенсе ҡатындан тыуған Шеруя исемле улы, атаһының Ширин менән ҡала ситенә китеп, ваҡытлыса йәшәп тороуынан файҙаланып, тәхетте ҡулына эләктерә һәм Хөсрәүҙе бығауларға ҡуша, аҙаҡ уны үлтерттерә. Атаһынан ҡотолғас, Шеруя Ширинде үҙенә кейәүгә сығырға димләй башлай. Ширин риза булған ҡиәфәт менән Хөсрәүҙе хөрмәтләп ерләргә әҙерләттерә лә аҙаҡҡы мәлдә, үҙенең күкрәгенә хәнйәр ҡаҙап, һөйгәненең кәүҙәһе алдында йән бирә.

Ҡотб дастанында үҙ ерлегенә һәм заманына яраҡлы яңы уй-фекерҙәр, проблемалар үҙенсә сағылдырылған. Бының өсөн автор Алтын Урҙа дәүләтенә хас әхлаҡи талаптарға, ғөрөф-ғәҙәттәргә, көнкүреш мәсьәләләренә, төрки халыҡтарының тормошона мөрәжәғәт итә. Уларҙың күбеһе урта быуаттарҙағы башҡорттар тормошо өсөн дә уртаҡ. Тәхет һарайҙары урынына йыш ҡына күсмә төрки халыҡтар торлағы – тирмәләр, сатырҙар ҡуллана. Аш-һыу мәжлесе, һауыт-һаба, ашамлыҡ исемдәре, кейем-һалым тотошлай урындағыға яраҡлаштырылған. Ҡотб дастанының геройҙары кейек ауларға һунар ҡоштары менән сыға. Шулай уҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, «Хөсрәү вә Ширин»-дәге ҡыҙҙар кеүек үк, һыбай бик оҫта йөрөгән, йыш ҡына ирҙәр менән һунарға барған, бәйгеләрҙә сапҡан, улар менән ярышып, алдынғылыҡты яулаған.

Әҫәрҙең үҙәгендә – мөхәббәт темаһы. Өс геройҙың кисерештәре аша мөхәббәттең өс типик һыҙаты күрһәтелә. Хөсрәүҙең Ширингә булған мөнәсәбәтендә хис һәм теләк саманан тыш ташып, йыш ҡына аҡылды ҡаплап китә. Шуға ла Хөсрәү, үҙе Ширинде ятһа ла, ҡыҙыулыҡ менән хаталар яһап ҡуя, үҙенең генә бәхетен

тотҡарлыҡлап ҡалмай, бүтәндәргә лә бәхетһеҙлеккә, үлемесле фажиғәгә дусар итә.

Шириндең мөхәббәте Хөсрәүҙекенән күпкә хислерәк, ҡайнарыраҡ булһа ла, ул аҡыл менән эш итә. Иң ғазаплы саҡтарында ла, хистәренең иң ташҡан мәлендә лә ҡыҙ үҙенең намыҫын һаҡлап алып ҡала, ысын мөхәббәте Хөсрәүҙе дөрөҫ юлға баҫтырырға ярҙам итә.

Идеаль мөхәббәттең ыңғай һыҙаттары Фәрхәд образына бәйле рәүештә асыла. Унда аҡыл да, хис тә бер тигеҙ һәм юғары кимәлдә – вәғәҙә ителгән алтын-көмөштәргә ҡарағанда ла юғарыраҡ. Фәрхәдтең мөхәббәте, яуапһыҙ булыуға ҡарамаҫтан, юғары рух һәм илһамлы хеҙмәт сығанағы. Ширинде тиңдәшһеҙ һәм ҡайнар тойғо менән яратыуы арҡаһында ғына ябай ташсы егет әҙәм көсө етмәҫлек эште башҡарып сыға – бер үҙе тау ярып юл һала һәм кешеләргә изгелек, шатлыҡ өләшә.

Ошо мәңгелек тема тирәһенә бүтән проблемалар берләштерелгән. Кешелеклелек, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ мәсьәләләре, хеҙмәтте һәм һөнәрлелекте маҡтау, хакимдарҙы ғәҙел идара итергә саҡырыу һәм авторҙың тағы ла байтаҡ әхлаҡи һәм фәлсәфәүи ҡараштары, гуманистик принциптары ошо мөхәббәт фонында асып һалына. Ҡотб, ғөмүмән, кешенең кешелек дәрәжәһе тураһында һүҙ алып бара.

«Хөсрәү вә Ширин» поэмаһы традицион поэтиканың тасуирлау сараларына ғәжәп бай. Художестволылыҡ, образлылыҡ, кинәйәле һүрәтләү, сюжеттың төп элементтары, тура телмәр, ҡапма-ҡаршы ҡуйып һүрәтләү, метафоралар һәм сағыштырыуҙар һ. б. саралар – барыһы ла әҫәрҙә иркен файҙаланылған. Персонаждар телендә лә мәҡәл-әйтемгә торошло тапҡыр юлдарҙың ынйы кеүек һибелеп ятыуында осорҙоң ауыҙ-тел әҙәбиәте вәкилдәре – йырауҙар ижадының йоғонтоһо күренә.

Артабан төрки халыҡтары әҙәбиәтендә «Хөсрәү вә Ширин» әҫәренә ҡырҡтан артыҡ нәзирә яҙыла. Уның ярһыу, оптимистик рухы, нескә лиризмы, Ҡотбтың ғорур, дәрәжәле хикәйәләү тоны, художество саралары XIV быуат аҙағындағы башҡорт яҙма ҡомартҡыһы «Һуңғы һартай»ҙа асыҡ күҙәтелә. Былар башҡорт яҙма ҡомартҡыларының дөйөм төрки әҙәбиәте менән бер рухта, хатта үтә яҡын художество кимәлендә булыуы хаҡында һөйләй.

**Харәзми. «Мөхәббәтнамә»**

Был дастан 1353 йылда Харәзми ҡушаматлы автор тарафынан Һырдаръя йылғаһы буйында яҙылған. Авторҙың тыуған һәм үлгән йылдары билдәле түгел.

Харәзми уҡымышлылығы яғынан Ҡотбтан бер ҙә ҡалышмаған, әҫәрҙәрен төрки һәм фарсы телдәрендә ижад итә алған. Ул үҙ дәүере әҙәбиәтен яҡшы белгән: әҫәрҙәрендә Фирҙәүси, Ни-

зами, Ҡол Ғәли, Ҡотб дастандарының геройҙары Рөстәмде, Йософто, Хөсрәү менән Ширинде, Мәжнүн менән Ләйләне телгә ала.

«Мөхәббәтнамә» XIV быуат төрки дастандарынан бер аҙ айырылыбыраҡ тора; ул хәл-ваҡиғалар сюжетына түгел, ә авторҙың күңел кисерештәренә ҡоролған. Әҫәр ғашиҡ булған лирик геройҙың һөйгәненә әйтергә теләгән ун бер хаты рәүешендә ижад ителгән. Бер үк сәбәп менән тыуған тойғолар йыш ҡына оҡшаш булған кеүек, хаттарҙың йөкмәткеләре лә ауаздаш. Беренсе – дүртенсе хаттарҙа лирик герой үтә ҡыйыуһыҙ: һылыу ҡыҙға йәне-тәне менән ғашиҡ булһа ла, уның матурлығына өнһөҙ һоҡланып, үҙ алдына өҙгөләнә. Ҡыҙ уға буй етмәҫлек юғары, ә егеттең үҙенең хыялдары тормошҡа ашҡыһыҙ булып күренә. Бишенсе – һигеҙенсе хаттарҙа ул һөйгәненә һүҙ ҡушырға, унан иғтибар һәм яғымлылыҡ көтөргә баҙнат итә. Ҡыҙҙың илаһи буй-һынына ғына түгел, күңел матурлығына, белеменә һоҡлана; тимәк, уның менән яҡындан таныша, осрашыу мәлдәрен һағынып хәтерләй. Туғыҙынсы хаттан күренеүенсә, ғашиҡ егет үҙен тәүәккәллерәк тота, уға хәҙер ҡыҙ бөтөнләй хыял етмәҫлек кеше булып тойолмай. Унынсы хат мөхәббәт ғазабының тағы бер яғын асып һала. Һоҡланыу, инаныу юлдары араһында ҡыҙҙың хыянатынан әсенеү кисерештәрен аңлатҡан һүҙҙәр осраштыра. Был хыянаттың нимәнән ғибәрәт икәнлеге әйтелмәгән; бәлки, ул ҡыҙҙың икенсе берәүгә күҙ һирпеп алыуынан ғына торалыр, бәлки, алдашыуҙыр. Әммә егет, көнләшеп, өмөтһөҙлөккә бирелә, хатта һөйгәненән ваз кисергә әҙер.

Авторҙың тәүге ниәте буйынса, «Мөхәббәтнамә» ун хаттан торорға тейеш була. Әммә һөйгәне менән аралары ҡабат яҡшырғас, ул инде ҡыуанысля уй-тойғоларын үҙендә генә һаҡлап ҡала алмай, уҡыусыларға еткерергә ашыҡҡан. Ысынлап та, аҙаҡҡы, ун беренсе хат юлдарынан аңлашылыуынса, егет инде ҡыҙҙың күңелен тамам яулап алып, уға мәңгелек тоғролоҡ, оло һөйөү вәғәҙә итә, үҙе лә уның наҙлы мөнәсәбәтенән ләззәтләнә.

Лирик йөкмәткеле был поэмала автор образы үҙәктә тора. Тәүге биттәрҙән иң һуңғы бәйеткә тиклем уның уй-ҡараштары, кәйефе, холҡо, бөтә булмышы асыҡ сағыла. Һәр бер хат йәки ғәзәл аҙағында ул, ҡағиҙә рәүешендә, үҙенең исемен телгә алып, ғашиҡ булған кешенең автор үҙе икәнен асыҡтан-асыҡ төшөндөрөп бирә. Икенсе төрлө әйткәндә, лирик герой һәм шағир образдарын тигеҙләштереп ҡуя кеүек. Ләкин дастанда беренсе заттан әйтелгәндәрҙең бөтәһен дә автор һүҙенә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ. Шағир бында фәҡәт үҙенең генә шәхси кисерештәрен һөйләп биреүҙе түгел, ә бүтәндәрҙең күңелен туҡландырыуҙы – әҙәби әҫәр яҙыуҙы маҡсат итеп ҡуйған. Ғәжәп оҫта төҙөлгән композиция, төрлө яҡлап асылған гүзәл ҡыҙ, ғашиҡ егет образдары поэманың художестволылығын байыта.

Шулай булғас, беренсе заттан һүҙ алып барған герой образы ла дөйөмләштерелмәй ҡалмаған, унда, һис шикһеҙ, лирик герой элементы ла бар.

«Гәүһәр ҡәҙерен һуҡыр белмәҫ, әй, йән», – тигән тапҡыр юлдар менән шағир лирик геройҙың ысын мөхәббәттең ҡәҙерен белгән, оло һөйөүгә һәләтле кеше икәнлеген раҫлай. Гүзәл ҡыҙ уның өсөн сәскә булһа, шиғри күңелле ғашиҡ егет – сәскә янында һайраған һандуғас.

Харәзмиҙең ғашиҡ егете үҙенең күңел торошо менән ҡайһы бер мәлдәрҙә Салауат Юлаевтың мөхәббәт поэзияһындағы лирик геройға оҡшап китә. Улар икеһе лә һөйгән йәрҙәре алдында ҡаушап, телдәре зәғифләнеп ҡала; елде серҙәш итеп, унан хәбәр көтәләр йә үҙ сәләмдәрен ел аша әйтеп ебәрәләр; ҡыҙҙың эске һәм тышҡы матурлығын күк есемдәренә, хур ҡыҙҙарына тиңләйҙәр.

Харәзмиҙең «Мөхәббәтнамә» дастанын ғашиҡтарҙың күңел тәбиғәтен сағылдырыусы поэтик энциклопедия менән сағыштырырға мөмкин. Әкиәттәрҙә айҙы ватып яһалған йондоҙҙар шикелле, төрки телле халыҡтар әҙәбиәтенең мөхәббәт шиғриәте «Мөхәббәтнамә»нең айырым киҫәктәрен, бәйеттәрен, юлдарын һәм образлы сағыштырыуҙарын ҡабатлай. Күк көмбәҙендә әлеге йондоҙҙар бер тигеҙ һибелгән кеүек, «Мөхәббәтнамә» әҫәренең саткылары ла төрки халыҡтары әҙәбиәтенең мөхәббәт шиғриәтендә тигеҙ таралған. Башҡорт әҙәбиәтендә был әҫәрҙең йоғонтоһо XVII–XVIII быуаттар ҡулъяҙма әҫәрҙәренән алып бөгөнгө көн мөхәббәт шиғриәтенә тиклем ап-асыҡ күренә.

**Хөсәм Кәтиб. «Жөмжөмә солтан»**

XIV быуат төрки-ҡыпсаҡ дастандарынан Урал һәм Волга буйы халыҡтары араһында сағыштырмаса киңерәк таралғаны – «Жөмжөмә солтан». Уның авторы һәм яҙылыу датаһы тураһында текстың аҙағында ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт бирелгән: был әҫәрҙе 1369 йылда Хөсәм Кәтиб яҙған. Әҙиптең тыуған, үлгән йылдары билдәле түгел. «Жөмжөмә солтан» үҙ заманында Урал – Волга буйында ярайһы уҡ киң таралған. 1977 йылда Башҡортостандың Әбйәлил районы Ишбулды ауылында һәм 1980 йылда Туймазы районының Егетәк ауылында дастандың яңы күсермәләре табылды.

«Жөмжөмә солтан» – шиғри телмәр менән ижад ителгән эпик йөкмәткеле поэма. Уның сюжеты мөхәббәт темаһын үҙәккә ҡуйған бүтән дастандарҙан айырылыбыраҡ тора. Әҫәр фәлсәфәүи йөкмәткеле инеш менән башлана. Автор, «донъя мәңгелек» тигәндәрҙең һүҙен инҡар итеп, әҫәренең төп өлөшөндә кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән уның фанилығын раҫлай.

Төп өлөштә бәйән ителгәнсә, Ғайса пәйғәмбәр мосафирлыҡ ҡылып, сәхрәлә йөрөп, бер һыуҙың ярына барып сыға һәм унда таш янында әҙәм башы ятҡанын күреп ҡала. Ғазраилға

мөрәжәғәт итеп, уны терелтергә бойора. Теләге ҡабул булғас, әҙәм башынан тере сағында кем булыуын, нисек йәшәүен һораша. Баш бөтәһен дә ентекләп һөйләп бирә. Жөмжөмә исемле солтан булған икән ул. Бер көн, тәхетендә мәжлес ҡороп, күңел асҡан мәлдә, һарайы янына бер фәҡир килә һәм ҡабул итеүен һорай. Солтан уның менән һөйләшергә ваҡыт тапмай. Фәҡиргә ҡаты бәрелеп, күңелен ҡыйып, ишек төбөнән кире бороп ебәрәләр. Шунан һуң күп тә үтмәй, Жөмжөмә ҡапыл хәлһеҙләнеп, аяҡтан йығыла. Эргәһенә фәрештәләр килеп, ҡылған эштәрен яҙа. Аҙаҡ тамуҡҡа илтәләр. Баш үҙенең унда ниҙәр күреүен тасуирлап бирә. Ете тамуҡтың һәр береһен һүрәтләп сыға. «Йәһәннәм» тип аталған етенсе тамуҡҡа эләккәндәр язаның иң ҡатыһына дусар ителә. Быныһында Жөмжөмә кемдәрҙең нисек язаланыуын ғәжәпкә ҡалып күҙәтә. Фәҡирҙең хәтерен ҡалдырырҙай бер генә ҡырын эше өсөн уның үҙен дә ошонда язалайҙар. Күпмелер интектереп, баш хәленә генә ҡалдырғас, тере саҡта ҡылған яҡшылыҡтарын иҫәпкә алып, был донъяға килтереп һалалар. Ошо урында әлеге таш янында ул етмеш йыл ята. Ғайса унан: «Ниндәй үтенесең бар?» – тип һорай. Жөмжөмә тере килеш ҡалдырыуын үтенә. Пәйғәмбәр доға ҡылып, солтандың теләген үтәй ҙә, үҙ юлына китеп бара. Ә солтан бер тау тишегенә барып, уға рәхмәт йөҙөнән тағы етмеш йыл ғибәҙәт ҡыла.

Хөсәм Кәтиб дастаны донъя әҙәбиәтендә киң таралған ике сюжеттың ҡушылмаһына яҡын. Береһе – Көнсығыш илдәрендә, Европа әҙәбиәтендә боронғо дәүерҙән үк киң таралған теге донъяға сәйәхәт тураһындағы әҫәрҙәр. Иң билдәлеләре – боронғо Греция әҙибе Гомерҙың «Одиссея»һы һәм XIII–XIV быуаттар Италия шағиры Дантеның «Илаһи комедия»һы. Икенсеһе – киҫелгән баштың телгә килеп, тере персонаж сифатында ҡатнашыуы. Көнсығыш халыҡтары әҙәбиәтендә ундай әҫәрҙәр шулай уҡ боронғо һәм урта быуаттар заманынан уҡ күренә килгән. Бигерәк тә Урал – Волга буйында Киҫекбаш тураһындағы дастан киң таралған. Башҡортостан һәм Татарстан ерҙәрендә ул поэма ҡулдан ҡулға күсерелеп, йөҙәр йылдар буйы уҡылған. Хөсәм Кәтиб дастаны «Киҫекбаш» сюжетының кәмендә яртылашын үҙ эсенә алған, тиһәк тә хата булмаҫ. Ике поэмала ла кеше башы пәйғәмбәр менән осраша, тере саҡта нисек бәхетле йәшәүен, бәлә килгәс, ниндәй михнәттәр, мажаралар кисереүен һөйләп бирә. Аҙаҡ пәйғәмбәрҙең («Киҫекбаш»та – пәйғәмбәр ебәргән Ғәли батырҙың) изге күңеллелеге арҡаһында Ғазраил башты элекке хәленә ҡайтара – уға кәүҙә биреп, кеше итә.

«Жөмжөмә солтан» XII быуат Иран шағиры Фәритетдин Ғаттарҙың «Жөмжөмәнамә» поэмаһына ла яҡын. Ләкин был әҫәрҙәр үҙ-ара нисек кенә ауаздаш булмаһын, Хөсәм Кәтиб дастанының идея-тематик йүнәлеше, поэтик саралары үҙ заманына –

Алтын Урҙа дәүләте осорона бәйле үҙенсәлекле әҫәр икәнлеген күрһәтеп тора. Инеш өлөштә автор тарихи шәхестәр рәтендә Сыңғыҙ ханды, бүтән бөйөк кешеләрҙе, әҙәби образдарҙың исемдәрен иҫкә ала. Ҡайһы бер кешеләрҙең үҙ байлығына кинәнеп, изгелек, мәрхәмәтлек төшөнсәләрен онотоуын фашлай. Жөмжөмә солтан кисергән михнәттәрҙең сәбәбе лә ябай халыҡтың хәленә иғтибарһыҙлығынан килеп сыҡҡан тип күрһәтелә. Жөмжөмәнең мажаралы яҙмышы миҫалында автор кешенең тупаҫлығына, шәфҡәтһеҙлегенә, рәхимһеҙлегенә ҡаршы сыға. Был мәсьәләне ул, бер ҡараһаң, дәүләт һәм йәмғиәт мәнфәғәттәренән ситтә, тар һәм шәхси планда күтәргән кеүек. Ә инде авторҙың байлыҡ-ниғмәткә күмелгән ҡатламды ябай халыҡҡа ҡаршы ҡуйыуы барыбер социаль мәсьәләләргә килеп бәйләнә.

Урал – Волга буйында киң таралған был әҫәрҙең башҡорт әҙәбиәтенә яҡынлыҡ эҙҙәрен еңел табырға мөмкин. Салауат Юлаев «Яу» шиғырында «Киҫекбаш» дастанындағы Ғәли батыр исемен телгә ала, Ш. Бабичтың «Ғазазил»ында Иблистең тамуҡта язаланыуы, йәки ергә төшкәс, күктә үҙенең кем булып йөрөгәнен хәтерләүе Хөсәм Кәтиб дастаны йоғонтоһо хаҡында һөйләй. Кеше башына йән өрөп, тел асҡысы биреп персонаж яһаған, йәки үҙ геройҙарын теге донъяға – тамуҡҡа йә ожмахҡа ебәреп алған әҫәрҙәр хәҙерге заманда ла яҙыла. Әйтәйек, С. Ҡудаш, Т. Арслан, М. Ғәли шиғриәтендә баштың мажараларына ҡоролған сюжетлы шиғырҙар бар.

**Сәиф Сараи. «Гөлстан бит-төрки»**

Сәиф Сараи ижады XIV быуаттың аҙаҡтарына тура килә. Уның хәҙерге көнгә килеп еткән әҫәрҙәре, алдағы авторҙарҙың бөгөнгә билдәле булған берәр генә поэмаларынан айырмалы рәүештә, ярайһы уҡ ишлерәк: «Гөлстан бит-төрки» һәм «Сөһәйел вә Гөлдерсен» дастандары, тиҫтәнән ашыу ғәзәл, робағи, ике юллыҡтары, үҙ заманындағы төрки шағирҙарының парсаларына яуаптары тәшкил итә. Сәиф Сараиҙың тормош юлы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе уның үҙ әҫәрҙәренән генә табырға мөмкин. Әҙип 1321 йылда Алтын Урҙаның «Ҡамышлы йорт»онда тыуған. Иҙел буйындағы Ҡамышлы ауылдарының береһе булырға тейеш, тип фараз итә ғалимдар. Үҙенең яҙыуына ҡарағанда, ярлы ҡатламдан сыҡҡан. Йәш ваҡытында белемгә һыуһап, тыуған еренән сығып китә. Алтын Урҙаның ғилем һәм мәҙәниәт үҙәгенә – Һарай ҡалаһына килеп йәшәп, шағир исемен ала. Бында күпмелер торғас, үҙ теләгенән тыш тыуған-үҫкән яҡтарын ташлап, Мысырға китә. Зирәк аҡыллы шағир алыҫ ерҙә юғалып ҡалмай, белемен артабан камиллаштыра, Мысырҙа солтан һарайы канцелярияһында эшләй. Юғары ғилемле

замандаштары, күренекле әҙиптәр менән аралаша. Сәиф Сараи 1396 йылда 75 йәшендә донъя ҡуя.

Шағирҙың «Гөлстан бит-төрки» менән «Сөһәйел вә Гөлдерсен» дастандары ғүмеренең һуңғы йылдарында – 70–74 йәштәрендә яҙыла. Беҙ уларҙың тәүгеһе тураһында ғына һүҙ йөрөтәбеҙ. Был әҫәрҙең әлегә билдәле булған берҙән-бер күсермәһе, авторҙың ғәзәлдәре, робағиҙары, мәснәүиҙәре, ике юллыҡ шиғырҙары менән бергә, Голландияла Лейден университеты китапханаһында һаҡлана. Хәҙерге ваҡытта Урта Азия һәм Урал – Волга буйы ҡалаларында бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡты.

«Гөлстан бит-төрки» дастанын Сараи XIII быуаттың бөйөк фарсы шағиры Сәғҙи Ширазиҙың «Гөлстан» поэмаһына эйәреп яҙа. «Гөлстан бит-төрки» һигеҙ бүлеккә төркөмләнгән сәсмә телмәрле күп һанлы үҙ аллы сюжеттарҙан тора. Уларҙың һәр береһенең аҙағында шул сюжеттарға ауаздаш йөкмәткеле шиғырҙар урынлаштырылған.

Беренсе бүлек хакимдар тормошона арнала. Автор ҡыҫҡа ғына күләмле, йыйнаҡ, тапҡыр йөкмәткеле парсалар, шиғырҙар менән батшаларҙың халыҡҡа һәм вәзирҙәргә мөнәсәбәтен сағылдыра. Сараи фекеренсә, ил менән идара итеүсе кеше мотлаҡ оло аҡыл эйәһе булырға, халыҡҡа изгелек, мәрхәмәт күрһәтергә, ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә торған мәлдәрҙә аҡһаҡалдар һүҙенә ҡолаҡ һалырға тейеш. Уның аңлауынса, батшалар иң тәүҙә халыҡ массаларының мәнфәғәтен ҡайғыртырға бурыслы. Әҫәрҙә шундай шиғри юлдар бар:

> Кем золом оҙатһа, солтан булырмы? – Булмаҫ!
> Ҡуйҙарға бүре һәр саҡ чабан булырмы? – Булмаҫ!

Фәҡирҙәр тормошон сағылдырған икенсе бүлектә әҙәмдәрҙең байға, ярлыға бүленеше, тигеҙлеге-тигеҙһеҙлеге мәсьәләләре фәлсәфәүи уйланыуҙар, образлы сағыштырыуҙар аша бирелә. Роза сәскәһе менән үлән икеһе бер баҡсала үҫкән кеүек, бөтәбеҙ ҙә ошо илдең балалары, ти автор. Ул һүҙ уйнатыуҙар, кинәйәләр ярҙамында уҡыусы иғтибарын ябай хеҙмәт кешеһенең күңел байлығы тирәһенә туплап, фәҡирҙең генә түгел, бөтә кешелектең аҡылы һәм нәфсеһе тураһында һүҙ йөрөтә. Ер йөҙөндә аҡыл менән нәфсене бәхәсләштерер күп осраҡтар тыуып торор, шул мәлдәрҙә аҡыл нисбәте өҫтөнөрәк булған кеше генә еңеп сығыр, ти ул.

Бәндәләрҙе фани донъяла сабырлыҡҡа өндәү фәлсәфәһе өсөнсө бүлектә үҙенә бер тәғлимәт төҫөн ала. Кемдәр яҙмыш биргәнгә ҡәнәғәт түгел йәки сабырһыҙлыҡ күрһәтә, улар бәләгә тарый, һәләкәткә осрай – шунан сығып, Сараи төрлө ҡатлам

вәкилдәренең ҡәнәғәтһеҙлек кимәлдәрен тасуирлай. Уларҙың нәфсеһе лә төрлөсә: берәүгә Ҡытай, Рум, Һиндостан, Йемен яҡтарында сауҙа итеп байыған тиңһеҙ мөлкәт кәрәк; икенсеһе үҙенә бер мәлгә солтандың күләгәһе төшөп ҡалыуын да ҙур бәхет, ти.

Дүртенсе бүлек өндәшмәүҙең файҙаһына арнала. Сараи ҡасан һөйләшергә, ҡасан өндәшмәй ҡалырға, яман менән бәхәсләшмәҫкә, күп һүҙ менән кешене ялҡытмаҫҡа, бер әйткәнде ҡырҡ тапҡыр ҡабатламаҫҡа, кеше һөйләгәндә бүлдермәҫкә кәрәклеге тураһында фәһемле кәңәштәр бирә; дуҫтарҙың маҡтауын да айыҡ аҡыл менән ҡабул итергә саҡыра, ҡайһы саҡта хатта тура әйткән дошман һүҙен дуҫыңдың урынһыҙ маҡтауынан артығыраҡ күреү хәйерлерәк икәнлеген иҫкәртә.

Бишенсе бүлектәге йәшлек төшөнсәһе шағир өсөн матурлыҡ һәм мөхәббәт мәғәнәһе менән бер. Автор фекеренсә, мөхәббәт тойғоһон кисереүҙең дә ике осо бар. Һөйөү утында янған кешенең күңелен ярата белмәгән бәндә бер ҡасан да аңлай алмай. Сараи мөхәббәт ғазабын яралы тәндәге тоҙ менән, ә һөйөү тойғоһон татый белмәүҙе шул тоҙҙо ҡулда тотоп тороу менән сағыштыра. Ул йәш кешенең тышҡы матурлығынан бигерәк, күңел матурлығына һоҡлана.

Алтынсы бүлектә ҡартлыҡ хәлһеҙлеккә тиңләнә. Йәш егет үлергә ятҡан йөҙйәшәр ҡарттан ниҙәр кисереүе хаҡында һорағас, уныһы: «Теш һурҙырыуҙы ла кеше ауыр кисерә, шулай булғас, йәнде тәндән һурып алған хәлемде күҙ алдына үҙең килтер», – тип яуап бирә. Был сюжетта әҙиптең йәшәү һәм үлем хаҡында уйланыуы, бәндәләрҙең фани донъяла йәшәп ҡалырға ынтылыуы сағылдырыла.

Тәрбиә мәсьәләләрен эсенә алған етенсе бүлектә аҡыл, һөнәр, хеҙмәт, ата-әсәгә мөнәсәбәт, йомартлыҡ, һаранлыҡ мәсьәләләре ҡуҙғатыла. Сәиф Сараиҙың әхлаҡи ҡараштары башҡорт халҡының быуаттар буйы формалашҡан тәрбиәүи талаптарына тап килә, аң-белем, хеҙмәт, ижтимағи тормош, көнкүреш өлкәләрендәге башҡорт мәҡәлдәренең һәм әйтемдәренең йөкмәткеһенә ауаздаш яңғырай. Һөнәрҙе ул һыуы ташып торған шишмәгә сағыштыра, алтын-көмөштән юғары ҡуя. Тәрбиәнең тәьҫирлелек саралары тураһындағы уй-ҡараштарын шағир бер аҙ ҡабартыңҡырап бирә. Беренсенән, әҙип уйынса, үҙ аңында әсә һөтө менән һалынған ыңғай ынтылышы булмаған кешене, күпме көс түкһәң дә, тәрбиәләп булмай, ти. Икенсенән, тәрбиәлә ҡәтғилек кәрәклеген раҫлай. Әҙ генә теҙгенде бушата төшһәң, тәрбиәләнеүселәр, иркенлек һиҙеп, төп бурыстарына һалҡын ҡарай башлай. Уҡытыусы ғына түгел, ата-әсә лә үҙ балаһына ҡәтғи булырға тейеш. Юғиһә, улы тыуыу ҡыуанысынан бөтә илде һыйлаған, аҙаҡ шул улының енәйәте арҡаһында төрмәгә эләккән бер бәндә шикелле, үҙ балаңдан михнәттәр күрерһең, тип киҫәтә.

Һигеҙенсе бүлек бүтәндәренән айырылыбыраҡ тора. Бындағы фекерҙәр сюжеттарға ҡоролмаған, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғибрәтле кәңәш, өгөт-нәсихәт рәүешендә туранан-тура әйтеп бирелгән. Алдағы бүлектәргә йомғаҡ рәүешен үтәй.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Алтын Урҙа хакимлығы шарттарында Ҡыпсаҡ дәүләте һәм ҡыпсаҡ теле ниндәй хәлдә була? 2. Урта быуаттарҙағы башҡорт-ҡыпсаҡ бәйләнештәренә иғтибар итегеҙ. Улар ниндәй өлкәләргә ҡағылған? 3. Башҡорт һүҙ сәнғәтенең был дәүерҙәге әҙәби йүнәлештәренә иғтибар итегеҙ. 4. Боронғо һәм урта быуаттар Көнсығыш әҙәбиәтендә һәм башҡорт халыҡ ижадында егет һәм ҡыҙ исеме менән аталған әҫәрҙәр бар, улар йыш ҡына үҙ-ара тап килә. Белешмә сығанаҡтарҙан (интернеттан, энциклопедияларҙан, «Башҡорт халыҡ ижады» томдарынан) шуларҙы эҙләп ҡарағыҙ, кем күберәк табыр – үҙ-ара ярыш ойоштороғоҙ. 5. «Хөсрәү вә Ширин», «Фәрхәд һәм Ширин» әҫәрҙәре тураһында быраса ниҙәр ишеткәнегеҙ булды – бергәләп уртаҡлашығыҙ, авторҙарына иғтибар итегеҙ. 6. Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин» дастаны тураһында дәреслектә яҙылғандарға таянып, әҫәрҙә сағылдырылған донъяның башҡорттар тормошо менән уртаҡлыҡтарын барлағыҙ. 7. Харәзмиҙең «Мөхәббәтнамә» әҫәре буйынса авторҙың үҙе хаҡында ниндәй мәғлүмәттәр табырға була? 8. Был әҫәрҙәге ғашиҡ егет образының мөхәббәт кисерештәрен үҙегеҙҙең күңел донъяғыҙ менән сағыштырып ҡарағыҙ. 9. Хөсәм Кәтибтең «Жөмжөмә Солтан» әҫәрендә әйтергә теләгән төп фекерен асыҡлағыҙ. 10. Сәиф Сараиҙың «Гөлстан биттөрки» дастаны бүлектәрендә ҡуҙғатылған мәсьәләләрҙе башҡорт фольклорының эпос, ҡобайыр, әкиәт, легенда, риүәйәт, йыр, бәйет һәм башҡа жанрҙарындағы тематик төркөмдәр менән сағыштырып, уртаҡлыҡтар табығыҙ; уларҙың сәбәптәрен аңлатығыҙ.

## XVI–XVIII БЫУАТТАР ҠУЛЪЯҘМА ШИҒРИӘТЕ

**Ҡулъяҙма аноним шиғриәт**

XVI–XVIII быуаттарҙа башҡорттар араһында ҡулъяҙма шиғриәт киң тарала. Урта быуаттар традицияларындағы ғәрәп, фарсы һәм дөйөм төрки телдәрендәге бәләкәй күләмле шиғри текстарҙан тыш, саф башҡорт ерлегендә тыуған, урындағы халыҡтың ихтыяждарына һәм зауығына иҫәпләнгән әҫәрҙәр ижад ителә.

Ғәрәп графикаһында типографиялар барлыҡҡа килгәнсе, аҙаҡ – күнегелгән ғәҙәт буйынсалыр инде, шиғри әҫәрҙәр халыҡ араһында әүҙем рәүештә ҡулдан күсереп таратылған, ҡулдан ҡулға йөрөтөп уҡылған. Иң тәүҙә уның йөкмәткеһе, эстетик ҡиммәте менән ҡыҙыҡһынған уҡыусы йыш ҡына авторына

иғтибар итеп тормаған, тексттың үҙен генә күсереп алған. Шуға күрә төрлө сығанаҡтарҙа һаҡланған XVI–XVIII быуаттар ҡулъяҙма шиғриәтенең байтаҡ өлөшө беҙҙең көндәргә авторҙарҙың исемдәре теркәлмәйенсә килеп еткән. Улар араһына өйрәнсек, һәүәҫкәр авторҙарҙыҡы ла, ысын мәғәнәһендә профессиональ һүҙ оҫталары сығарғандары ла осрай. Бөтәһе бергә аноним шиғриәт тип исемләнеп йөрөй.

XVI–XVIII быуаттар аноним шиғриәтенең бөгөнгө көндә республикалағы үҙәк һәм ғилми китапханаларҙың ҡулъяҙмалар бүлегендә, ғилми учреждениеларҙа, юғары уҡыу йорттарында һәм архивтарҙа һаҡлана. Башҡортостанда таралған аноним шиғырҙарҙың үҙ ерлегенә хас үҙенсәлектәре бар. Заманында поэтик ижад, әҙәби текстарҙы уҡыу һәм күсереп яҙыу менән шиғриәткә ғашиҡ булған, халыҡ әйтмешләй, «китап ене ҡағылған» кешеләр шөғөлләнгән. Поэтик образлылығы, төҙөлөшө, ритмикаһы менән уларҙың шиғриәте классик Көнсығыш ҡомартҡыларынан һис тә ҡалышмаған. Тематикаһы яғынан аноним әҫәрҙәрҙе дүрт төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин: дидактик лирика, фәлсәфәүи уйланыуҙар, мөхәббәт лирикаһы һәм тыуған төбәккә арналған шиғырҙар.

Дидактик шиғырҙар, нигеҙҙә, әхлаҡи-этик мәсьәләләрҙе күтәреп сыға («Аҡыл ағасы», Уңдырышлылыҡ», «Хөкөм», «Кешенән үрнәк ал», «Ғибрәтнамә» һ. б.). Төп йөкмәткеһе – өгөтнәсихәт, аҡыл өйрәтеү. Уҡыусыға кәңәш биргәндә, автор Көнсығыш шиғриәтенә, дини-дидактик дастандарға таяна. Уларҙа йәмғиәттең дөрөҫ булмаған тәртиптәренә, тормош ғәҙелһеҙлектәренән ризаһыҙлыҡ билгеләре сағылып ҡала.

Донъяуи аноним шиғриәттең иң ҙур өлөшөн мөхәббәт лирикаһы тәшкил итә («Ханым», «Фатима», «Керпегең уҡтыр», «Кисә – көндөҙ», «Билең нескә», «Күрһәм, ҡыуанырмын», «Ай, йәнем, фиҙа йәнем...», «Аҡҡошҡа аттым, теймәне» һ. б.). Был мәңгелек темаға арналған әҫәрҙәрҙең ҡулъяҙмала киң таралыуы тәбиғи. Уларҙың күбеһе ҡатын-ҡыҙҙың буй-һынын, тышҡы матурлығын тасуирлауға ҡайтып ҡала; кәүҙәһе – һомғол ағасҡа, йөҙө – ай-ҡояшҡа, тештәре – гәүһәргә, теле һандуғас һайрауына тиңләнгән сағыштырыуҙар йыш осрай:

Ләбе ләғел, теле – былбыл,
Теше ынйы, сәсе – сөмбөл...

Егет кеше һөйгәненең нурлы йөҙөн бер күреүгә тилмерә, мәңге бергә булырға хыяллана йәки юғалтыу ҡайғыһынан ғазаплана:

Һөйгәнемдән айырылғансы,
Тыумаһамсы әсәнән.

Ғашиҡ авторҙар урта быуаттарҙағы мөхәббәт дастандары менән яҡшы таныш булған, үҙҙәренең хәлен уларҙың геройҙары яҙмышы менән сағыштырып ҡуялар:

Гүйә, Мәжнүн булдым инде,
Шөйлә кем аҡылым шашып.

Аноним шиғырҙар араһында тыуған төбәккә арналғандары ла бар, ләкин улар сәсәндәр ижадындағы илһөйәрлек, илде дошмандан һаҡлау рухы менән һуғарылған ҡобайырҙарҙан айырылып тора. Уларҙа ниндәйҙер ғиллә менән тыуған ерҙәренән, туғандарынан айырылып, сит яҡтарға барып сыҡҡан лирик геройҙың һағыныу ғазаптары өҫтөнлөк итә («Йыраҡ киттем, илем ҡалды», «Ғәриптең ҡимməте юҡ», «Сәләм хат», «Ҡазан да Тубыл араһы» һ. б.). Был төркөм әҫәрҙәрҙең авторҙары үҙҙәрен сит ерҙә артыҡ, кәмһетелгән, онотолған кешеләр итеп тоя. Алыҫта ҡалған тыуған төбәк уларға – ожмах, ә килеп эләккән ерҙәре – үрмәләп сыға алмаҫлыҡ баҙ кеүек. Лирик геройҙың ғазаплы хистәре тулыһынса шәхси кисерештәргә ҡайтып ҡала, ул үҙен «ғәрип» тип атарға мәжбүр:

Уйлап-уйлап уйым бөтмәй,
Күҙҙәремдән йәшем кипмәй,
Ғәзиз баштан ҡайғы китмәй,
Мин Хоҙайҙың бер ғәрибе.

Берәй каруанға эләгеп ситкә сығып, аҙаҡ яңғыҙ ҡайтыу мөмкин булмаған заман шарттарында ошондай тематик йүнәлешле циклдың барлыҡҡа килеүе ғәжәп түгел.

Дәүерҙең аноним шиғриәте төҙөлөшө менән күп төрлө строфаларға, һиҙгер ритмикаға, робағи, ғәзәл, ҡасида тибындағы рифмаларға таяна. Текстарында башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары, урындағы тормош-көнкүреш әйберҙәре исемдәре, географик атамалар осрай, башҡорт халыҡ йырҙары мотивтары файҙаланған урындар ҙа күренеп ҡала.

**Мәүлә Ҡолой**

XVI–XVIII быуаттарҙағы исемдәре билдәле шағирҙарҙың иң күренекле вәкилдәренең береһе – Мәүлә Ҡолой. Ул XVII быуатта йәшәгән. Донъяға килгән, үлгән ваҡыттары теүәл билдәле түгел. Шағирҙың йөҙгә яҡын хикмәте һәм ике поэмаһы билдәле. Ысын исеме – Байрамғәли Ҡолоев, ә Муллағол һәм Мәүлә Ҡолой – ҡушаматтары. Шағирҙың ижады XX быуат башынан алып башҡорт һәм татар ғалимдары тарафынан ентекле өйрәнелә, табылған әҫәрҙәре лә ҡабат-ҡабат баҫыла.

Мәүлә Ҡолой – үҙенең шиғриәтендә суфыйсылыҡ идеяларына төп урын биргән башҡорт-татар әҙәбиәтенең тәүге вәкиле. Ул

суфыйсылыҡ тәғлимәтен үҫтереүгә лә күп көс һалған ғалим-философ. Шағир нәфсе һәм күңел (аҡыл) төшөнсәләренең нисбәте, ҡапма-ҡаршылығы тураһындағы уйланыуҙарға ҙур урын бирә. Шуларға бәйләп, боронғо Һиндостандан алып мәшһүр Аҡмуллағаса һуҙылған, хатта бөгөнгө башҡорт шиғриәтендә лә сағылыш тапҡан донъя нигеҙенең дүрт элементтан тороу (ут, һыу, һауа, тупраҡ; тән, йән, күңел, йөрәк) төшөнсәһе Мәүлә Ҡолой ижадында артабан үҫтерелә, донъяуи күренештәргә бәйләп киңәйтелә, тәрәнәйтелә. Уныңса, күңел – илаһи яҡ, нәфсе – донъяуи яҡ. Кеше илаһилыҡҡа – рухи сафлыҡҡа, күңел паклығына ынтылырға тейеш. Шағир ижадында күңелгә һәм нәфсегә бәйле фәлсәфә күп төрлө һәм күп яҡлы: кеше аҡылы, йәшәү мәғәнәһе, донъя матурлығы, бала саҡ, ата-әсә һәм бала мөнәсәбәте, туған-тыумасалыҡ, йәшәү һәм үлем һ. б. төшөнсәләрҙе үҙ эсенә ала. Бына, мәҫәлән, ата-әсә һәм бала мөнәсәбәтенә ҡағылышлы юлдар:

Ҡыҙ-уғландар рәүшан торор яҡты нурҙан,
Ата-әсә ләззәтлелер шәкәр-балдан.

Мәүлә Ҡолой ижадында был донъяуи фекерҙәр, күренештәр йыш ҡына суфыйсылыҡ ҡараштары менән тығыҙ бәйләнештә, берлектә бирелә, кинәйәлек, поэтик образ ролен үтәй. Мәҫәлән: яҙ менән ҡыш – йәшәү һәм ҡартлыҡ, үлем; донъяуи мөхәббәт – Аллаға мөхәббәт. Уның ижадындағы ғалим һәм ғилемлек хаҡындағы шиғри юлдар ҙа бик фәһемле. Наҙан кеше ер ҡортона, ҡуңыҙға сағыштырыла; ә ғилемле кеше – кешелекле, ярҙамсыл, уның ғилем таратыу менән шөғөлләнеүе суфыйҙың үҙ тәғлимәтен таратыуға ауаздаш.

Боронғо һәм урта быуаттарҙағы Көнсығыш суфыйсылығы сафлыҡ, кешелеклелек, рухи юғарылыҡ мәсьәләләрен беренсе рәткә ҡуйҙы, шуның менән бергә кеше, фани донъя ҡиммәттәрен дә юғары күтәрҙе. Мәүлә Ҡолой ошо боронғоно һәм үҙ дәүерен артабанғы Урал – Волга буйы әҙәбиәте менән тоташтырыусы арҙаҡлы әҙип, XVII быуат шиғриәтенең сағыу вәкиле булды.

**Ғәбдерәхим Утыҙ Имәни**

XVIII быуат әҙәбиәтендә юғары баһаға лайыҡ шәхес – шағир һәм ғалим Ғәбдерәхим Утыҙ Имәни (Ғәбдерәхим Усман). 1752 йылда Ҡазан губернаһының Яңы Ҡадый ауылында тыуған, 1835 йылда донъя ҡуйған. Ҡарғалы мәҙрәсәһен тамамлаған. Ун йыл самаһы Урта Азияла, Афғанстанда өҫтәлмә белем ала, уҡытыусылыҡ менән шөғөлләнә. 1798 йылдан алып ғүмеренең аҙағынаса Башҡортостандың хәҙерге Дәүләкән районындағы Мерәҫ ауылында йәшәй. Ошо төбәк башҡорто, кантон башлығы Лоҡман Ибраһимов уны ҡиәмәтлек уллыҡҡа алып, рәсми рәүештә

теркәтеп ҡуя. Утыҙ Имәни Стәрлебаш мәҙрәсәһендә йыш була, шәкерттәр менән аралаша, дәрестәр бирә, уҡыу йорто хужаларына үҙенең кәңәштәре менән ярҙам итә.

Утыҙ Имәниҙең әҙәби һәм ғилми мираҫы XVIII быуат әҙәбиәтендә ҙур урын биләй. Ғалим булараҡ, гуманитар өлкәнең төрлө тармаҡтарына ҡағылған ғилми хеҙмәттәренең күпселеге фарсы телендә яҙылған; шуға күрә бөгөнгө көндә ентекле өйрәнелмәгән. Ә шиғриәте – төрки телендә. Төп тематик йүнәлеше – халыҡты аң-белемгә саҡырыу. Ғилемде ул донъялағы бар нәмәләрҙән дә өҫтөн һанай. Йәмғиәттәге етешһеҙлектәр, тормоштағы ғәҙелһеҙлектәр, тигеҙһеҙлектәр наҙанлыҡтан килә, ғилем менән донъяны яҡшы яҡҡа үҙгәртеп була, тип һанаған ул:

Әүәл килде ғилем, һуңынан – ғәмәл,<br>Ғилемһеҙ наҙан кеше булыр әҙәл.

Ул шулай уҡ йәмғиәттең ыңғай һәм тиҫкәре күренештәренә, ҡапма-ҡаршылыҡтарына иғтибар итә; кешенең аҡылын, ижади көсөн данлай, халыҡты илгә тоғро хеҙмәт итергә, намыҫлылыҡҡа, ғәҙеллеккә саҡыра; ҡомһоҙлоҡто, ялҡаулыҡты, аңралыҡты фашлай. Ҡайһы бер юғары дин әһелдәренең халыҡты алдауын, хәйләләшеүен, мутлашыуын тәнҡитләй. Уларға тел тейҙергәне өсөн, нахаҡ яла арҡаһында, Аҡмулла кеүек, төрмәлә лә ултырып сыға.

Утыҙ Имәни ижады Көнсығыш дөйөм төрки шиғриәтенең иң аҫыл традицияларын дауам итте, үҙ сиратында, артабанғы башҡорт һүҙ сәнғәтенә йоғонто яһаны. Уның әҫәрҙәренең айырым өлгөләре, данлыҡлы замандашы Салауат Юлаев шиғырҙары кеүек үк, XX быуаттың икенсе яртыһында 200 томлыҡ «Бөтә донъя әҙәбиәте китапханаһы» серияһында донъя күрҙе.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Аноним шиғриәт беҙҙең көндәргә ниндәй юлдар менән килеп еткән? 2. Аноним шиғырҙарҙың тематик йүнәлештәрен билдәләгеҙ. 3. Авторҙары билдәһеҙ шиғырҙар авторлы шиғриәткә ниндәй һыҙаттары менән яҡын, ниндәй айырмалыҡтары бар? 4. Мәүлә Ҡолой шиғриәтенең асылын аңлау өсөн «суфыйсылыҡ» тигән төшөнсәне белергә кәрәк. Белешмә сығанаҡтарға мөрәжәғәт итеп, уның нимә аңлатҡанын үҙләштерегеҙ. 5. Мәүлә Ҡолой ижадында донъяуи һәм суфыйсылыҡ идеяларының бергә үрелеп килеүенә иғтибар итегеҙ. 6. Утыҙ Имәни ижадын өйрәнә башлар алдынан, класс менән төркөмдәргә бүленеп, уның тураһында өҫтәлмә материалдар табып, ҡыҫҡа ғына сығыштар әҙерләп килегеҙ. Һәр төркөмдән берәр кеше сығыш яһаһын. 7. Утыҙ Имәни тормошоноң Башҡортостанға ҡағылышлы яҡтарына арналған сығышҡа иғтибар итегеҙ. 8. Утыҙ Имәни шиғриәтенең иң төп йүнәлеше ниндәй өлкәгә ҡағыла?

## XVI–XVIII БЫУАТТАР ПРОЗАҺЫ

XVI–XVIII быуаттарҙан алып башҡорт яҙма әҙәбиәтенең милли үҙенсәлек һыҙаттары көсәйә башлай, үҙенә генә хас шағирҙары, Мәүлә Ҡолой, Ғәбдерәхим Утыҙ Имәни, Тажетдин Ялсығолов, Батырша Әлиев, Салауат Юлаев кеүек ижади шәхестәре ҡалҡып сыға. Авторҙары билдәһеҙ йәки конкрет ижадсылары менән бәйле шиғриәттә боронғо көнсығыш жанрҙары өҫтөнлөк итә; прозала синкретик йөкмәткеле, йәғни бер үк текст әҙәби әҫәр ҙә булған, шуға өҫтәп, башҡа төрлө вазифа ла үтәй алған яҙмалар – шәжәрәләр, тарихнамәләр, сәйәхәтнамәләр, эпистоляр публицистика тарала. XIV–XIX быуаттар яҙма ҡомартҡылары элеккесә – ғәрәп яҙмаһында төрки телендә ижад ителә, уларҙы махсус китап күсереүселәр күпләп таратыу хәстәрлеген күрә. Урал – Волга буйында ғәрәп шрифындағы тәүге типографиялар XVIII быуат аҙағында – XIX быуат башында ғына барлыҡҡа килә.

**«Һуңғы һартай»**

Был бүлекте XVI–XVIII быуаттар сиктәренән байтаҡҡа алдараҡ ижад ителгән әҫәрҙән башларға тура килә. Эш шунда, төрки телле яҙма әҙәбиәттә саф башҡорт ерлегенә хас үҙенсәлекле һыҙаттар XIV быуат аҙаҡтарынан уҡ күренә башлай. Башҡорт кешеләре ижад иткән шиғри әҫәрҙәрҙә боронғо көнсығыш жанрҙары өҫтөнлөк итә; прозала әҙәби ҡиммәткә эйә булған яҙмалар – шәжәрәләр, тарихнамәләр, сәйәхәтнамәләр, эпистоляр публицистика тарала. Башҡорттар араһында дөйөм төрки дәүерендәге дастандар традицияларын дауам иткән эпик сюжетлы әҫәрҙәр ҙә барлыҡҡа килә.

Шуларҙың береһе – саф башҡорт әҙәбиәтенең шишмә башындағы мәшһүр ҡомартҡы – «Һуңғы һартай». Ул XIV быуат аҙағында ижад ителгән. 1935 йылда археолог, крайҙы өйрәнеүсе М. И. Касьянов рус теленә тәржемә итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, төрки телендәге тексы беҙҙең көндәргә килеп етмәгән. 1962 йылда ҡабат башҡортсаға ҡайтарыла.

Әҫәр үҙе сығарылған йылдарҙа Башҡортостан ерендә булып үткән дәһшәтле яуҙарҙы, урындағы халыҡты оло фажиғәләргә килтергән хәл-ваҡиғаларҙы сағылдыра. Ә уларҙы һөйләүсе – шул дәүерҙә булып ятҡан хәлдәрҙең актив ҡатнашсыһы Ялыҡ Бурнаҡ улы. Әҫәр үҙәгендә башҡорт ырыуҙарының, шул иҫәптән һарт ырыуының Аҡһаҡ Тимер яуына ҡаршы тороуы, башҡорттарҙың үҙ ерҙәрен һаҡлап ҡырылыуы. Был фажиғәләр XIV быуаттың 90-сы йылдары эсендә була. Әҫәрҙең авторы – күпте күргән тәжрибәле яугир, ҡөҙрәтле, ихтыярлы ырыу башлығы, арҙаҡлы һүҙ оҫтаһы. Һүҙ оҫтаһы булараҡ, дөйөм төрки дастандары авторҙарының да, абыздарҙың да, сәсәндәрҙең дә төп һыҙаттарын үҙендә бергә туплай уҡымышлы, абруйлы аҡыл эйәһе. Ул үҙенә тиклемге тарихи шәхестәрҙең кемлеген, донъяла ниндәй эҙ

ҡалдырғанлығын белә, һәр ҡайһыһына үҙенең ҡарашы бар. Ә абруйлы замандаштары араһынан күбеһен үҙе күреп аралаша, бәғзеләре менән бәхәскә инә. Белемде үҙебеҙҙең төбәктә генә түгел, ә Урта Азия яҡтарында алғанға оҡшай – телмәрендә: «Сәрсәк оҫталары ҡылыс һабына ҡуйған аҡыҡ таштар һымаҡ, йондоҙҙар яна», – тигән һүҙҙәр бар. Сәрсәк – хәҙерге Үзбәкстандың баш ҡалаһы Ташкентҡа яҡын ятҡан боронғо Чирчик ҡалаһы. Тимәк, шул яҡтарҙа булған, Сәрсәк оҫталарын үҙ күҙҙәре менән күргән. Ғази мәсетенең ишеге яҡтауҙарына көмөш менән яҙылған Ҡөрьән һүҙҙәрен дә тиккә генә телгә алмай – ҙур дини мәғлүмәтле булған, күрәһең. Аҡһаҡ Тимер яуы ябырыласағы хаҡында хәбәр ишеткәс, Хөсәйенбәк әүлиә зыяратына ғибәҙәт ҡылырға бара, исламдың юғары әһеле Ҡадир әл-Исламға мөрәжәғәт итә. Хәрби эш, ғәскәр етәкләү, һуғыш тәртиптәрен энәһенән ебенә тиклем белә: башҡорттарҙың борондан килгән яугирлыҡ сифаттарын уның әҫәре аша һәйбәт күҙ алдына баҫтыра алаһың. Халҡыбыҙҙың яу-көрәш йолаларын да онотмаған – дошманға һынған уҡ, үле сысҡан ебәреү, яу алдынан тылсымлы һүҙ әйтеү кеүек ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ҡуллана.

Ялыҡ Бурнаҡ улы – йыраузар, сәсәндәр кеүек үк, тыңдаушыһеҙ һүҙ оҫталарының береһе. Текстан уның ялҡынлы оратор ҙа, талантлы ижадсы ла икәнлеге күренә. «Һуңғы һартай» тәүҙә телдән шиғри формала әйтелеп, шунан ғына яҙмаға теркәлгән телмәргә оҡшай. Автор туранан-тура тыңлаусыға мөрәжәғәт итә. Ошо мөрәжәғәт стиле текстың башынан аҙағына тиклем һаҡланып килә. Әҫәр тулыһынса өндәшеү һүҙҙәре менән сыбарланған: «Мин бөтә булғанды *һөйләп бирергә* телемде мәжбүр итермен», «бөтәгеҙ ҙә *тыңлағыҙ*!», «һеҙгә балаларым хаҡында *һөйләйем*» һ. б. Ялыҡ бей телмәре төрки һәм ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән еңелсә генә биҙәлгән йәнле һөйләү телендә сығарылған. Уны рус теленә тәржемә иткән М. Касьянов, әҫәрҙең мәғәнәһен боҙмаҫ өсөн, күп кенә һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, ер-һыу атамаларын, хатта ҡайһы бер һөйләмдәрҙе башҡортса көйө ҡалдырған: *тамға, яу, башлыҡ, ҡарағат, арҡан, Сейәле Түбә, Ябыҡ Ҡарағай һырты, йә Хоҙай, хур ҡыҙы, аҫыл таш, тыңлағыҙ барығыҙ ҙа, минең бер нәмәм дә юҡ* һ. б. Йыраузар һәм сәсәндәр үҙҙәренең төп әйтер һүҙҙәрен тәбиғәт күренештәренә йәнәш ҡуйып теҙгән кеүек, Ялыҡ бей телмәрендә лә ошондай сағыштырыуҙар ынйылай һибелеп ята: «күҙҙәре уның ямғырға сыланған сөм ҡара ҡарағат төҫлө ине»; «яралы бөркөт кеүек ҡыйыу»; «йылға буйында үҫкән йәш күрәнде күргәнегеҙ бармы?.. Бына шуның кеүек ине минең Сәрмәсәнем...»

Әҫәрҙә боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларына ауаздаш «тауыштар» ҙа ишетелеп ҡала. Әйтәйек, IX быуатта сығарылған «Күрәҙәлек китабы»ның һәр өлөшө аҙағында ҡабатланған

«был – яҡшы», «был – яман» кеүек һүҙҙәр Ялыҡ бей дастанына «был яҡшы», «яҡшы эшләнем», «был да яҡшы», «яҡшы булды», «булһын шулай» рәүешендә килеп ингән. Күләме яғынан ҙур булмаһа ла, «Һуңғы һартай» – башҡорт һүҙ сәнғәте тарихында ифрат мөһим урын биләгән әҫәр. Уны бөтә яҡлап боронғо рус әҙәбиәте ҡомартҡыһы «Слово о полку Игореве» менән сағыштырып булыр ине. Һүрәтләү сараларының сағыулығы, фекерҙәренең кинәйәлеге яғынан, бәлки, ул ниндәйҙер кимәлдә өҫтөнөрәктер ҙә.

Был ҡомартҡыла беҙ шулай уҡ башҡорт яҙма әҙәбиәтендә артабан урын аласаҡ шәжәрә һәм публицистика элементтарын да күрәбеҙ. Шәжәрәләр кеүек үк, ул да – ырыу башлығы тарафынан сығарылған, ырыу тарихы хаҡындағы яҙма. Башлыҡтың кәмендә дүрт быуынының исеме бирелгән – Ташҡай, уның улы Бурнаҡ, Бурнаҡтың улы Ялыҡ, Ялыҡтың улдары Ҡармасан менән Сәрмәсән. Шәжәрә авторҙары, ғәҙәттә, үҙ быуынына, үҙҙәре күреп белгәндәргә күберәк туҡтала. Бында ла – Ялыҡ бей быуыны хәл-ваҡиғалары.

Тәү ҡарамаҡҡа, автор үҙенең шәхси тормошо, балалары, ғаиләһе, ырыу көнкүреше хаҡында ғына һүҙ алып бара һымаҡ. Ләкин ул быларҙың бөтәһен дә уҡыусыға үҙ заманы кешеләрен борсоған иң мөһим мәсьәләләрҙе еткереү өсөн һөйләй. Ә улар түбәндәге юлдарға ҡайтып ҡала: «Беҙ үҙ урмандарыбыҙҙы, үҙ далаларыбыҙҙы һаҡлау өсөн яуға сыҡтыҡ. Беҙ ҡол булырға теләмәй инек».

**Шәжәрәләр**

XV–XIX быуаттар башҡорт яҙма әҙәбиәтендә шәжәрәләр айырым бер урынды биләй. Әлбиттә, улар саф әҙәби ҡомартҡы түгел. Күберәген тарихҡа мөнәсәбәтле яҙма булараҡ, бүтән халыҡтарҙа ла киң билдәле. Летопись, хроника, хәл-ваҡиғалар китабы рәүешендә славяндарҙа, Көнбайыш Европала, Скандинавияла осрай. Төрки халыҡтарында айырыуса киң таралған. Әлегәсә табылған башҡорт шәжәрәләренең иң боронғолары XV–XVI быуаттар тирәһенә ҡарай, ә улар таянған традициялар фарсы, ғәрәп, монгол, төрки халыҡтарының ырыу яҙмаларына барып тоташа. Ырыу тарихы менән ҡыҙыҡһыныу, уны мотлаҡ белеү ынтылышы беҙҙә бик борондан килә. Күренекле ғалим Р. Ғ. Кузеев әйтеүенсә, «башҡорт ырыуҙарында шәжәрәнең булыуы, тамға, ҡош, ағас кеүек ырыу атрибуттары һымаҡ уҡ, мәжбүри һаналған».

Иң тәүге шәжәрәләр телдән сығарылған. Төрки халыҡтарының ауыҙ-тел һүҙ оҫталары тиңдәшһеҙ шәжәрә белгестәре булып һаналған. Ырыу тарихының телдән сығарылыуы һәм йәшәүе заманында улар был мөһим эштән ситтә тороп ҡала алмаған. Быуындан быуынға халыҡ хәтерендә йәшәргә тейешле ошо изге мәғлүмәттәрҙе һүҙ оҫталары шиғри ҡобайыр формаһына яҡын телмәр менән көйләп башҡарған. Шиғри шәжәрә еңел ятлап

алынған һәм киләсәк быуындарға үҙгәрешһеҙ тиерлек тапшырылған. Өҫтәүенә, ырыу тарихы тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан автор уның башлығын иғтибарҙан ситтә ҡалдыра алмай. Элеккеләрен дә, бөгөнгөһөн дә телгә ала – баһа бирә, данлай, кәңәштәрен әйтә, үҙе уның сығышын (шәжәрәһен) яҡшы белә.

Шәжәрәләр ҡағыҙға теркәлеп, Башҡортостан шарттарында ырыуҙың аҫаба ер биләүселеккә хоҡуғын раҫлаусы документ вазифаһын алғас, шиғыр менән ижад ителеүҙән туҡтай. Ырыу тарихын яҙыу, күсереү, өҫтәлмәләр индереү, бигерәк тә һаҡлау эше күпселек осраҡта уның башлығы ҡулына күсә. Хәҙерге ваҡытта билдәле булған 200-ҙән ашыу яҙма шәжәрәнең икеһе генә теҙмә телмәрҙә һаҡланған: ҡара табын һәм үҫәргән ырыуҙары тарихы яҙмаларының берәр варианты.

Үҫәргән ырыуы шәжәрәһенең һуңғы быуыны вәкиле XVIII быуат аҙаҡтарында йәшәгән. Был шәжәрә боронғо дәүерҙән – Әҙәмдән, ырыуға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Мөйтән бейҙән, уның Сыңғыҙ хан менән аралашыу ваҡиғаларынан башлана. Мөйтән бейҙең батырлығы, буй-һыны, мөлкәте, ырыуҙы имен тотоуы, Сыңғыҙ хан менән һөйләшә белеүе ентекле сағылдырыла. Ул, яугир һәм хаким булмышы менән бергә, йырсы һәм һүҙ оҫтаһы ла икән:

Көйлә тиһә, көйләгән,
Һөйлә тиһә, һөйләгән, –

тиҙәр уның хаҡында.

Шәжәрәнең башынан аҙағынаса Мөйтәндең нәҫелдәре – үҫәргән ырыуы башында торған шәхестәр хаҡында һүҙ бара, уларҙың ыңғай һәм тиҫкәре һыҙаттарына шәхсиләштерелгән баһа бирелә.

Сәсмә шәжәрәләрҙә лә ауыҙ-тел әҙәбиәтенең, фольклорҙың эҙҙәре асыҡ һаҡланған. Ҡайһы бер текстар эсенән «һөйкәлмә ваҡиға» рәүешендә урын алған эпос сюжеттары осрай. Ҡыпсаҡ ырыуы ҡарағай-ҡыпсаҡ шәжәрәһендә «Күсәк бей» эпосының ҡыҫҡаса йөкмәткеһенә юлығабыҙ. Фольклор варианттарындағы кеүек үк, бында ла һүҙ ике ырыу башлыҡтарының ыҙғышы хаҡында бара. Әммә әҫәрҙең сюжеты шәжәрәлә ысын булған хәл кеүек бирелә, конкрет ер-һыу атамалары телгә алына (Алағуян үре, Шүлгән мәмерйәһе, Баҙал тауы, Ағиҙел йылғаһы, Тарағы яланы һ. б.). Эпостың үҙендә осраған мифик элементтар бында бөтөнләй юҡ. Шуға күрә ул, фольклор әҫәренән бигерәк, художестволы-документаль хикәйәгә тартым.

Юрматы ырыуы шәжәрәһе мифик аждаһа образына бәйле хәл-ваҡиғаларҙан башлана: «Аҙаҡ ул ерҙә аждаһа йылан пәйҙә булды. Бер нисә көнләк ерҙән ятыр ине. Быға күп йылдар үтте, уның менән һуғыш ҡылдылар. Күп халыҡ һәләк булды. Шунан һуң ул йылан ғәйеп булды. Халыҡ аманда ҡалды».

Ҡобайырҙар, йырҙар, легенда-риүәйәттәр, бәйеттәр, мәҡәл-әйтемдәр шәжәрәләрҙең боронғораҡ текстарында ла, XIX быуат – XX быуат башы тирәһендә яҙылғандарында ла мул ғына урын алған. Ырыу яҙмаларының күбеһе, ғөмүмән, реаль ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәгән уйҙырманан башланыусан. Шәжәрә авторҙары, үҙҙәренең сығышын ниндәй ҙә булһа атаҡлы шәхескә килтереп бәйләр өсөн, ата-бабаларының генеалогияһын йә Сыңғыҙ ханға, йә легендар аҡыл эйәһе Лоҡман Хәкимгә, йә ҡыпсаҡ батыры Бошман бейгә илтеп тоташтыра. XV–XVIII быуаттарҙағы бүтән сәсмә әҫәрҙәрҙән шәжәрәләр ошондай уйҙырмаларға бай булыуы менән айырыла.

Ҡара табын ырыуына ҡараған ҙур булмаған бер шәжәрә ҡыҫҡа, аныҡ тел менән башҡорттарҙың Ҡазан ханлығы менән мөнәсәбәтенең айырым үҙенсәлектәрен һүрәтләй. Соҡор ауылы эргәһендәге Сырған күле буйында сәпкә уҡ атышында бәхәсләшеп, башҡорттар Чуртмаҡ тигән ханды үлтереп, Рус дәүләтенә ҡушылырға хәл итәләр. Легендаға оҡшаш был бәләкәй сюжеттың үҙенә күрә ваҡиғалар үҫеше, кульминацияһы һәм сиселеше бар. Бында ла ҡасандыр ысынбарлыҡта булған ваҡиғаларҙың сағылыш табыуы бик ихтимал. Шәжәрә үҙ заманында әҙип ҡулынан үткән – уны XIX быуатта билдәле шағир Ғәли Соҡорой күсереп яҙған.

Әйле ырыуының бер шәжәрәһе XVIII быуат яҙыусыһы Тажетдин Ялсығолов ҡәләменә ҡарай. Унда ошо уҡ авторҙың «Тарихнамә-и Булғар» исемле икенсе бер әҫәренең тәьҫире һиҙелеп ҡала. Ырыу быуындары хаҡында хикәйәләү легенда һәм риүәйәттәр менән үрелеп килә. Шәжәрәлә автор образы айырым урында тора. Ул боронғо ата-бабалар тормошон тасуирлағанда ла, үҙ дәүерендәге хәлдәргә күскәндә лә актив ҡатнаша. Әйтәйек, үткәндәрҙе хикәйәләү өсөн авторҙың бүтән кешеләр менән һөйләшеүе оҫта бирелә.

«...Тыныш улының ырыуын «алтмыш ҡолаҡ Әйлеһе» тинеләр. Инде Ҡоштаймаҫ улының ырыуын «ҡомый Әйлеһе» тинеләр. Мин быларҙың мәғәнәләренә Әстрхан йортонда йөрөгәнемдә төшөндөм. Ҡобан йортона барҙым, бер ҡартта ҡунаҡ булдым. Һораны: "Ни ерҙәге ырыуҙанһың?" – тине. Мин әйттем: "Болғар башҡортомон", – тинем. Ҡарт әйтте: "Ҡайһы ырыуҙан һин?" Мин әйттем: "Әйле ырыуымын", – тинем. "Алтмыш ҡолаҡмы һин, йә ҡомыймы", – тине. Мин әйттем: "Белмәйем, әммә атамдан ишеткәйнем, Әйле ырыуымын", – тинем. Ҡарт әйтте: "Тынышданмы һин, йә Ҡоштаймасданмы һин?" Мин әйттем: "Тыныштан мин". Ҡарт әйтте: "Белмәһәң, әйтеп бирәйем, – тине, – бабаң Сәйҙәш ауға сыҡмыш, утыҙ болан атмыш. Уның ҡолаҡтарын урлап, бабаң Тыныш бешермеш. Шул йәһәттән бабаңа «алтмыш ҡолаҡ Әйлеһе» тиерҙәр. Йәнә

Ҡоштаймаҫ бабаң Сәйҙәш менән ауға сыҡҡандарында, дүрт ҡондоҙ үлтермеш. Аның берәүһен урлап, Ҡоштаймаҫ ҡомға күммеш. Шуның өсөн «ҡомый Әйлеһе» булмышлар". Мин был ҡарттың зирәклегенә мең афариндар уҡыным».

Ялан бөрйән ырыуы шәжәрәһе художестволылыҡ яғынан айырыуса иғтибарға лайыҡ. Өс быуын вәкиле тарафынан яҙылып, 150 йыл самаһы ваҡытты үҙ эсенә алған был шәжәрә авторҙарының һәр береһе заманына күрә ҙур ғилемгә эйә булған. Әҫәрҙең беренсе өлөшөн яҙыусы Ғабдулла Ғаббасов (1680–1765) ун йыл самаһы ҡаҙаҡтар араһында уҡытыусылыҡ иткән. Уның улы Зәйнәғәбдин дә (1727–1807), мәҙрәсә тамамлағас, балалар уҡытҡан, имам булып торған. Зәйнәғәбдиндең улы Исҡужа (1757– ? ) Стәрлебаш мәҙрәсәһендә төрки теленән дәрес биргән.

Ғабдулланың тексы XVII быуат аҙағындағы – XVIII быуат башындағы хәл-ваҡиғаларға ҡайтып ҡала. Үҙенең тормошо тураһында һөйләгәндә автор Башҡортостандың шул дәүеренә хас һыҙаттарына ла ҡағыла – күрше ырыуҙарҙың мал артҡаһындағы ыҙғыштарын, батша һалдаттары күрһәткән башбаштаҡлыҡтан урындағы халыҡтың ризаһыҙлығын, башҡорттарҙың ер эҙләп урындан урынға күсеп йөрөүҙәрен һүрәтләй.

Артабан шәжәрәне Зәйнәғәбдин дауам итә. Аңлайышлы, ябай тел менән ул XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы хәлдәрҙе эҙмәэҙлекле һәм образлы итеп һөйләп бирә. Шул уҡ күсенеүҙәр, тәбиғәт стихияһы артҡаһында килеп сыҡҡан бәлә-ҡазалар телгә алына, рудник асылыуы һәм уның ерле халыҡ тормошона йоғонтоһо, Стәрлебаш мәҙрәсәһенең Башҡортостанда ҙур мәғариф үҙәгенә әүерелеүе күҙ алдына баҫтырыла.

Шәжәрәнең Исҡужа тарафынан яҙылған һуңғы өлөшө шәхси характерҙараҡ; йөкмәткеһе менән XIX быуат башына ҡарай.

Халыҡ яҙмышына һиҙелерлек йоғонто яһаған йәки яһаясаҡ эре ваҡиғалар шәжәрәләргә лә үтеп ингән. Башҡортостандың Рус дәүләте менән килешеү төҙөү өсөн һөйләшеүҙәр алып барыу, илселәр ебәреү ваҡиғалары күп кенә ырыу яҙмаларында теркәлгән.

Бүтән төр яҙмаларға сағыштырғанда, шәжәрәләрҙә авторлыҡ мәсьәләһе бик үҙенсәлекле. Бер уйлаһаң, кем ҡулына ҡаурый алып, аҡ ҡағыҙ битенә хәрефтәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр теҙгән, шул кеше автор булырға тейеш. Ләкин шәжәрәнең донъяға тыуыу ваҡыты башҡа теләһә ҡайһы яҙма текстҡа ҡарағанда күпкә оҙонораҡ, айырым осраҡтарҙа ул бер нисә йөҙ йылды, ырыу кешеләренең тиҫтәләгән быуынын үҙ эсенә ала. Йәғни бер шәжәрәгә әллә нисәмә быуын вәкиле ҡул тейҙерә. Шуға күрә авторлыҡ йәһәтенән төрлө шәжәрәләр осрай: бер генә кеше тарафынан яҙылғандары ла, бер нисә кеше ҡатнашып, һәр ҡайһыһы үҙе йәшәгән дәүерҙе, үҙ быуыны тарихын төрлө яҡлап тәрән, ҡыҙыҡлы итеп сағылдырғаны ла, төрлө быуын авторҙары ҡатнашып,

тәүгеләренең исемдәре төшөрөп ҡалдырылғандары ла, авторҙары бөтөнләй билдәле булмаған шәжәрәләр ҙә осрай.

Шәжәрәләрҙең теле, эпос теле кеүек, ябай, аңлайышлы; афоризмдар һәм фразеологизмдар менән биҙәлгән урындары күп. Шәжәрә миҫалында XVI–XIX быуаттар прозаһына рус һүҙҙәренең инә башлауын күрергә мөмкин. Мәҫәлән, уларҙа административ бүленешкә (кантон, волость), вазифаларға (императрица, кенәз, старшина), хәрби чинға, хәрби көнкүреш әйберҙәренә (есаул, офицер, мундир), эш ҡағыҙҙарына (указ, грамота, мисәт, номер) бәйле һүҙҙәр йыш ҡына осрай. Былдай үҙләштерелгән һүҙҙәр шәжәрә һәм яҙма әҙәбиәт телен халыҡсанлыҡҡа яҡынайта.

Артабанғы быуындар һүҙ оҫталары шәжәрәгә хас художество ҡиммәттәрҙең иң матур өлгөләрен үҙләштерергә тырышҡан. Был күренеш хәҙерге заман әҙәбиәтендә лә сағылыш таба. Б. Бикбайҙың «Аҡселән ташҡанда» романы, Ә. Вахитовтың «Шәжәрә» хикәйәһе, Й. Солтановтың «Минең шәжәрәм» поэмаһы, Х. Ғиләжевтең «Минең ырыуым» шиғырҙар йыйынтығы, Р. Бикбаевтың «Автобиография» әҫәре – шәжәрә традицияларына мөрәжәғәт итеүҙең сағыу өлгөләре.

**Тәуарихтар һәм тарихнамәләр. Тажетдин Ялсығолов**

Урта быуаттарҙа башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып берләшеүгә ынтылышы шәжәрә менән бергә ырыуҙар берлеге яҙмышына, хатта тотош башҡорттар тарихына ҡарата йәнле ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Шул арҡала һүҙ сәнғәтендә тәуарих һәм тарихнамә жанрҙары барлыҡҡа килә. Боронғо һәм урта быуаттар фарсы, ғәрәп телдәрендәге тарих яҙмалары традицияларында «Башҡорт тарихы», «Үҫәргән тарихы», «Сыңғыҙнамә дәфтәре», Х. Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғария», Т. Ялсығоловтың «Тарихнамә-и Болғар» әҫәрҙәре ижад ителә.

*«Сыңғыҙнамә дәфтәре»* – башҡорт ерлегендәге тәуарих жанрының иң сағыу өлгөһө. Ул – XVI быуат аҙағына – XVII быуат башына ҡараған, башҡорт халыҡ ижадына, сәсәндәр импровизацияларына, ғәрәп, фарсы, дөйөм төрки һәм башҡорт яҙма ҡомартҡылары мотивтарына таянған ҡатмарлы төҙөлөшлө, үҙенсәлекле тематикалы әҙәби-тарихи әҫәр. Инештән һәм алты бүлектән тора. Сынғыҙ хан образы шуларҙың тәүге бүлегендә генә һынландырыла. Хәл-ваҡиғалар Көньяҡ Уралда – Башҡортостан ерендә бара. Аланғу исемле ҡатын ир бала таба, уға Сыңғыҙ тип исем ҡушалар. Көнләшкән ағаларының яуыз ниәтенән ҡурсалап, әсәһе Сыңғыҙҙың яңғыҙын тәбиғәт ҡосағында йәшәргә оҙата. Башҡорт ырыуҙары башлыҡтары Майҡы, Мөйтән, Тамъян, Юрматы, Ҡалдар, Урҙас, Ҡыпсаҡ, Ҡатай бейҙәр Аланғунан рөхсәт һорап, Сыңғыҙҙы эҙләп табалар; уны

хан тәхетенә ултыртыр өсөн, арба эшләп, ошо арбаға үҙҙәре егелеп алып ҡайталар. Майҡы бей, аяғы ауыртыуға һылтанып, буласаҡ хан менән бер арбала ултырып ҡайта. Сыңғыҙ аҙаҡ рәхмәт йөҙөнән башҡорттарға ырыу атрибуттары (тамға, оран, ағас һ. б.) таратып бирә. Күренеп тора, ярым әҙәби әҫәр булараҡ, бында ысынбарлыҡҡа тап килмәгән, әммә үҙ заманы уҡыусыларының ихтыяждарын ҡәнәғәтләндергән уйҙырмаларға мул урын бүленгән. Әйтәйек, Сыңғыҙҙың Башҡортостан тәбиғәте ҡосағында йәшеренеп ятыуы – үҙе үк уйҙырма.

Икенсе бүлек Аҡһаҡ Тимер образын үҙәккә ҡуя. Уның хаҡында ла, Сыңғыҙ кеүек үк, донъяға килгән сағынан уҡ һүҙ алып барыла. Сыңғыҙ хан улы Жадай (Сығатай) яман төш күрә. Баҡсылар уның төшөн «үлемең Тарағай атлы кешенең тыуасаҡ балаһынан булыр», тип юрай. Жадай был ҡатынды таптырып, балаһы тыумаҫ борон уҡ үлтерергә бойороҡ бирә. Ҡатын үлә, әммә ғәрип балаһы тыуып өлгөрә. Уға Аҡһаҡ Тимер тигән ҡушамат тағыла. Бүлектә уның бала сағы, үҫмер ваҡыты, юлбаҫарҙар башлығы булып йөрөүе, Жадайҙы ҡулға төшөрөп, үлтереүе һәм уның урынына тәхеткә ултырыуы, күп илдәрҙе яулап алыуы хикәйәләнә.

«Ғайса улы Әмәт» тип исемләнгән өсөнсө бүлектә Йәнебәк хандың идара итеүе, уның ҡыҙына өйләнгән Әмәттең яҙмышы тураһында һүҙ бара.

Артабанғы өс бүлеге башҡорт ырыуҙары тарихын сағылдыра.

«Сыңғыҙнамә дәфтәре» башҡорттарҙың йәнле һөйләү теленә бай булған тарихи хикәйәт стиле менән яҙылған. Унда шиғри һәм сәсмә телмәр тығыҙ аралашып килә, төп геройҙары – тарихи шәхестәр. Урал – Волга буйында, Башҡортостан ерендә уның ҡулъяҙмалары киң таралған. Шуларҙың береһе 1822 йылда Ҡазанда баҫылып сыға.

Тарихнамә жанрының күркәм өлгөһө – Тажетдин Ялсығоловтың «Тарихнамә-и Болғар» китабы. Т. Ялсығолов, үҙенең яҙыуы буйынса, әйле ырыуы башҡорто; атаһы Ялсығол заманының уҡымышлы кешеһе булған, хажға йөрөгән, шул сәйәхәттәренең береһендә үҙе менән бергә үҫмер улын да эйәрткән. Тажетдин Көнсығыш илдәрендә тиҫтә ярым йыл самаһы белем алған; ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы үҙләштергән, ошо телдәрҙәге китаптарға төркисә аңлатма яҙыу менән шөғөлләнгән, үҙе лә әҫәрҙәр яҙған. Иң күренекле хеҙмәттәре – «Тарихнамә-и Болғар» менән «Рисәлә-и Ғәзизә» китаптары. «Рисәлә-и Ғәзизә» – XVII быуат Урта Азия суфыйы Аллаярҙың «Ҫөбәт әл-ғажизин» китабына аңлатма. Урта Азия төрки телендә яҙылған китаптың икешәр юллыҡ өҙөктәренә Урал – Волга буйы телендә биргән аңлатмалары Ялсығоловтың үҙенең фекерҙәре менән

үрелеп бара. Һөҙөмтәлә, уның авторлығында үҙенең ҡыҙы Ғәзизә хөрмәтенә аталған яңы китап килеп сыҡҡан. «Рисәлә-и Ғәзизә» – легенда-риүәйәттәр, хикәйәттәр, өгөт-нәсихәттәр менән биҙәлгән, суфыйсылыҡ идеялары менән һуғарылған әҫәр. Ул 1847 йылдан алып ҡабат-ҡабат баҫылып сыға, ҡулъяҙма килеш тә таралып йөрөй.

Ә бына «Тарихнамә-и Болғар» ике быуат самаһы ҡулъяҙмаларҙа ғына билдәле була; ни бары 1993 йылда ғына Өфөлә донъя күрә. Ул – донъяуи йөкмәткеле художестволы-этнографик әҫәр. Заманының ҡулъяҙма һәм баҫма сығанаҡтарына таянып, үҙе белгән мәғлүмәттәрҙе лә файҙаланып автор әйле ырыуының 85 быуындан торған теҙмәһен төҙөй. Әҫәрҙең композицияһы үҙенсәлекле: генеалогик таблица тарихи һәм фольклор сюжеттары менән аралашып килә. Мәҫәлән, Болғар хандары һәм башҡорт бейҙәре тарихын Айҙар хандың ҡыҙын ауырыуҙан дауалау хаҡындағы сағыштырмаса ентеклерәк һөйләү алмаштыра. Китапта шулай уҡ Рус дәүләтенең Ҡазанды буйһондороуы, Сәйет, Аҡай, Алдар етәкселегендәге башҡорт ихтилалдары, Емельян Пугачёв етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышы, әйле ырыуы тарихына бәйле XV–XVIII быуаттарҙағы эреле-ваҡлы ваҡиғалар телгә алына. Тарихи мәғлүмәттәр өҫтөнлөк итһә лә, был яҙма авторҙың стихиялы рәүештә әҙәби-художестволылыҡҡа ынтылышын күрһәтеп торған уйҙырмаларға бай. Т. Ялсыголов ижадын тотош күҙ уңында тотҡанда, ул XVIII–XIX быуаттар башҡорт суфыйсылығының типик вәкиле булараҡ сығыш яһай – әҫәрҙәрендә суфыйсылыҡ һәм донъяуи мәсьәләләр бергә үрелеп килә.

**Сәйәхәтнамәләр**

XVI–XVIII быуаттар прозаһының тағы бер үҙенсәлекле жанры – сәйәхәтнамә. Уның сығанаҡтары шулай уҡ урта быуаттар Көнсығыш яҙмаларына, Көнбайыш Европа ҡомарҡыларына, атап әйткәндә, Ибн-Фаҙландан башлап ғәрәп сәйәхәтселәренең башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттәренә, Марко Поло, Афанасий Никитин китаптары кеүек төрлө йүнәлештәге юлъяҙмаларына (хажнәмә, сәйәхәтнамә, юл очерктары) барып тоташа. Башҡорт прозаһында бөгөн билдәле булған иң боронғо сәйәхәтнамә 1703 йылға ҡарай. Ул – Мортаза Ғәли ибн Ҡотлоғош тигән дин әһеленең Мәккәгә барыу хаҡындағы хажнамәһе. Был яҙмала автор Яҡын Көнсығышҡа илткән юлдағы өс тиҫтәләп ҡаланы, бер нисә эре йылғаны телгә ала. 1751 йылда Ырымбурҙың Сәғит биҫтәһенән сауҙагәр Исмәғил Бикмөхәмәт улы Рус дәүләтенең сауҙа кешеһе сифатында дүрт иптәше менән Һиндостанға юллана. Уларҙың маршруты Урта Азия илдәре, Афғанстан, Иран, Сәғүд Ғәрәбстаны, Сирия, Төркиә аша үтә. Сәйәхәт барышында Исмәғилдең юлдаштары берәм-берәм һәләк булып ҡала, ә үҙе

тыуған яҡтарына 30 йылдан һуң ғына әйләнеп ҡайта. Ошоларҙың барыһын да ул үҙенең «Исмәғил аға сәйәхәте» исемле яҙмаһында хисле, аңлайышлы тел менән сағылдыра. Сәйәхәтнамә 1862 йылдан алып Ҡазанда һәм Өфөлә бер нисә тапҡыр баҫылып сыға.

XVIII быуатта тағы ла ике авторҙың юлъяҙмалары был жанрҙың артабанғы үҫешенә билдәле өлөш индерә. Тәүгеһе – 1783 йылда хаж ҡылыу ниәте менән Яҡын Көнсығыш илдәренә сәфәр тотҡан Мөхәмәт Әмин Ғүмәр улы. Уның юлы Сәғүд Ғәрәбстанына Кавказ, Төркиә, Египет аша үтә, ә сәйәхәтнамәһе үҙенең күргәндәрен дини-уйҙырма ҡатыш һүрәтләүе менән айырылып тора. Икенсе автор – билдәле лексикограф һәм тәржемәсе Миндияр Биксурин – 1780 йылда Рәсәй экспедицияһы составында Ырымбурҙан Бохараға ойошторолған походта ҡатнаша, юл ыңғайында көндәлек яҙмалар алып бара. Көндәлегенең беренсе өлөшөндә авторҙың Бохараға барышлай алған тәьҫирҙәре һәм мәғлүмәттәре тупланған: ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай халыҡтарының тормош-көнкүреше, юлда осраған ауылдар һәм йәйләүҙәр, географик шарттар, йылға-күлдәр, тауҙар, яландар тасуирланған. Икенсе өлөшө Бохараға һәм уның иҫтәлекле урындарына арнала. М. Биксуриндың юлъяҙмалары башҡорт ерлегендә лә, Урта Азия халыҡтары араһында ла йәнле ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, XX быуаттың икенсе яртыһында баҫылып сыға.

Сәйәхәтнамәләр XIX быуатта Р. Фәхретдинов, Ғ. Соҡоройҙар ижадында дауам ителә.

**Эпистоляр публицистика**

Һүҙ сәнғәтендә хат, наказ, мөрәжәғәт, өндәмә рәүешендә образлы телмәр менән кинәйәле, тәрән мәғәнә һалынған йөкмәткеле художестволы әҫәр кимәлендә ижад ителгән яҙмаларҙы эпостоляр әҙәбиәт тип йөрөтәләр. Башҡорттарҙа хат традицияһы XVI быуаттан уҡ килә – ил әһәмиәтендәге мәсьәләләрҙе күтәреп, Рәсәй дәүләте хакимдарына хәбәрҙәр ебәреү Иван Грозный заманынан уҡ башлана. Уның үҙенең башҡорттарға биргән грамота һәм ярлыҡтарын урындағы халыҡ ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итә, был яҙмаларҙың йөкмәткеһен шәжәрәләрҙә сағылдыра, батшаның үҙенә рәхмәт хаттары яҙа. 1671 йылда мең ырыуы башҡорттарының батша Алексей Михайловичҡа тәғәйенләнгән хаты шулай уҡ социаль йөкмәткеһе, яҙылыу формаһы менән шәжәрәләрҙе бик ныҡ хәтерләтә. XVIII быуатта Башҡортостанды колонизациялауҙың көсәйеүе, иҡтисади һәм социаль ҡаршылыҡтарҙың тәрәнәйеүе, крәҫтиәндәр һуғыштары, ил күләмендәге төрлө эре ваҡиғалар халыҡтың ижтимағи аңы үҫешенә көслө йоғонто яһай, эпистоляр яҙмаларға ла үҙ эҙен һала. 1706 йылда башҡорттар үҙҙәренең иҡтисади хәленә, колониаль иҙеүгә зарланып, Петр Беренсегә мөрәжәғәт итә. 1728 йылда Өфө өйәҙе

кешеләре, яһаҡ йыйыусыларҙың ҡыҫымына түҙмәй, Петр Икенсегә хат ебәрә. Рәсәйҙең 1767 йылғы Закондар проекты төҙөү комиссияһы депутаттары Баҙарғол Юнаев менән Туҡтамыш Ишбулатов Петербургка урындағы халыҡтың талаптарынан төҙөлгән наказ оҙата. Унарлаған пункттан торған был наказда Башҡортостан тарихына ҡағылышлы ваҡиғалар – Рус дәүләте менән килешеү төҙөү, сит ил походтарында ҡатнашыу, шулай уҡ көнкүрешкә, иҡтисадҡа, рухи мәҙәниәткә бәйле мөһим мәсьәләләр күтәрелә. 1793 йылда башҡорттар Екатерина Икенсегә тағы бер хат менән мөрәжәғәт итә. Уныһы халыҡты ил сиген һаҡлау буйынса хәрби хеҙмәткә йәлеп итеүҙәге ғәҙелһеҙлектәр тураһында һөйләй.

Ошо уҡ һыҙаттар замандың тағы ла бер талай ҡулъяҙмаларында – халыҡтың үҙ-ара яҙышҡан хаттарында, ғаризаларында, рапорттарында, ихтилалдар документтарында һәм башҡа шуның кеүек текстарҙа сағыла. Уларҙың йөкмәткеһе заман һулышына үтә яҡын тора, XVIII быуаттағы башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен, иҡтисади һәм социаль мөнәсәбәттәрен, синфи ҡаршылыҡтарҙы, халыҡтың эстетик ҡараштарын бик һәйбәт асып бирә. Ошо эш ҡағыҙҙарын төҙөүҙә ҡатнашҡан йәки үҙҙәре яҙған кешеләр араһында әҙиптәрҙе, замандың күренекле шәхестәрен осратабыҙ. Әйтәйек, Кәлсер-Табын олоҫонан Килдеш сәсән Агиев менән Теләү волосынан Йәммәт сәсән, 1737–1739 йылдарҙағы ихтилал етәкселәре Аҡай, Килмәк, Йосоп, Абдулла батырҙарҙы азат итеүҙә булышыуҙы һорап, Өфөгә хат яҙыуҙа ҡатнашалар; ер һатыу тураһындағы ҡағыҙҙарҙың береһендә Илкәй-Мең волосынан Ҡараҡай сәсән Һөйөндөковтың ҡултамғаһы бар. Сәсән-шағир Салауат Юлаевтың, башлыса, Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда яҙылған указдары, бойороҡтары, өгөтнамәләре, хаттары эпистоляр публицистикала айырым урынды биләй. Шулай уҡ Юлай Аҙналин, Кинйә Арыҫланов, Бәхтиәр Ҡанҡаев, Ҡәнзәфәр Усаев кеүек шәхестәрҙең – Пугачёв яуында хәрби етәкселәр сифатында ҡатнашҡан башҡорттарҙың һәр береһенең тиҫтәгә яҡын йәки унан да күберәк ҡулъяҙмалары һаҡланған. Улар Крәҫтиәндәр һуғышының төп идеологияһы менән бер йүнәлештәләр – ғәҙелһеҙлеккә, башҡорт ерҙәрен аяуһыҙ талауға, урындағы ғәҙелһеҙ түрәләрҙең башбаштаҡлығына ҡаршы көрәш формаһын алалар.

Ошондай хаттар араһынан 1755 йылғы ихтилал етәксеһе Батырша Әлиевтең императрица Елизавета Петровнаға тәғәйенләнгән яҙмаһы – әҙәби ҡиммәткә эйә булырҙай, дәүер әҙәбиәте тарихында лайыҡлы урын алырлыҡ мөһим эпистоляр ҡомартҡы.

Батырша үҙ заманының ғәйәт уҡымышлы һәм абруйлы кешеһе булған. Ул Башҡортостандың Себер даруғаһы Ҡарыш

ауылында тыуған. Дәүеренең ҙур уҡыу йорттарында ун йыл самаһы белем алғандан һуң, төрлө ауылдарҙа 12 йыл муллалыҡ итә, мәҙрәсә тотоп, шәкерттәр уҡыта. Ихтилалға әҙерлек барышында Башҡортостанды арҡыры-буй йөрөп сығып, халыҡты актив ойошторусы булараҡ сығыш яһай, уларҙы колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшкә саҡырып, өндәмә менән мөрәжәғәт итә. Ихтилал баҫтырылғас, бер йыл буйы йәшеренеп йөрөгәндән һуң, тотола һәм 1762 йылда Шлиссельбург крепосынан ҡасырға маташҡан сағында үлтерелә.

Батырша һәм уның ҙур күләмле хаты (варианттары менән 100 бит самаһы) тарихи әҙәбиәттә киң билдәле. Эҙәрләүҙәрҙән ҡасып йөрөгән ваҡытында Батырша Рәсәй батшаһын үҙ күҙҙәре менән күреп, уға Башҡортостандағы хәлдәрҙе һөйләп бирергә хыял йөрөтә. Ҡулға алынғас, тикшереүҙәр барышында үҙен императрица менән осраштырыуҙарын һорай. Тотҡонға, Елизавета Петровнаның уны ҡабул итеп ултырырға ваҡыты юҡ, әйтер һүҙҙәреңде яҙып бир, тапшырырбыҙ, тип әйтәләр. Батырша яҙыуын яҙа, әммә уның хаты императрицаға тапшырылмай.

Яҙмаһында ул тәүҙә башҡорттарҙа ризаһыҙлыҡ тыуҙырған, ихтилалға килтереп еткергән сәбәптәрҙе берәмләп һанап бирә, баш күтәреүселәрҙең һәм уларҙың етәкселәренең ниндәй дәрәжәлә ғәйепле йә ғәйепһеҙ икәнен күрһәтергә тырыша. Хаттың башынан аҙағынаса авторҙың урындағы хакимлыҡ вәкилдәренә, эре феодалдарға һәм императрицаға булған ҡараштары айырыуса ҡабарынҡы итеп бирелә. Халыҡты түҙемдән сығарған сәбәптәр араһында ул яһаҡҡа һәм тоҙға бәйле мәсьәләләрҙе иң мөһимдәренән береһе итеп күрһәтә. XVI быуат урталарында Башҡортостандың Рус дәүләте менән төҙөгән килешеүенә ярашлы, үҙ ерҙәренә аҫабалыҡты (үҙ аллы хужа булыуҙы) һаҡлап алып ҡалған башҡорттар Мәскәүгә йәнлек тиреһе, бал кеүек ҡиммәтле әйберҙәр менән яһаҡ түләп торған. 1755 йылғы ихтилал алдынан Рәсәй хөкүмәте ошо яһаҡ түләүҙе юҡҡа сығара; тимәк, аҫабалыҡ хоҡуғын юғалтыу ҡурҡынысы тыуа. Бынан тыш, тарихи Башҡортостан ерендә тоҙ ятҡылыҡтары күп булған. Башҡорттар элек иркен рәүештә ошо ятҡылыҡтарға барып, тоҙҙо үҙҙәре ҡайнатып алып ҡайтҡан. Ошо уҡ ваҡытта хакимлыҡ органдары урындағы халыҡты ятҡылыҡтарҙы файҙаланыуҙы тыйып, тоҙҙо кибеттәрҙән һатып алырға мәжбүр итә. Был хәл халыҡ өсөн яһаҡ түләүгә ҡарағанда алты тапҡырға ҡиммәткәрәк төшә. Өҫтәүенә, быуаттар буйына ислам диненә табынған башҡорттарҙы көсләп суҡындырырға тырышыу ҙа ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Батырша ошоларҙы күҙ уңында тотоп, ситтән килеп хужа булып алған хакимлыҡ вәкилдәре, законһыҙлыҡтар менән эш итеп, халыҡты түҙеп торғоһоҙ хәлгә еткерҙеләр, тип яҙа. Урындағы түрәләрҙең сиктән тыш

башбаштаҡлыҡтарын ул бер-бер артлы сағыу эпизодтар килтереп тасуирлай: «Ҡәлғәләрҙәге түрәләрҙең яуызлыҡтары сиктән ашты. Һәр ауылдан ғәҙел хөкөм һәм ғәҙеллек эҙләп ҡәлғәләргә бармаҡсы халыҡтарҙың өмөттәре юҡҡа сыҡты. Мәҫәлән, Өфөлә һәм Силәбелә түрәлектә торған ике кенәз ваҡытында улар янына барған дәғүәселәр һәм ғәйепләнеүселәр бәғзеһе ун һумға, бәғзеһе утыҙ һумға, бәғзеһе илле һумға зыян күрҙеләр. Көндә бөтәр эште айға, айҙа бөтәр эште йылға һуҙҙылар, мал алыу өсөн. Вә һәм урындарҙағы бәғзе старшиналар иҫәпһеҙ яуызлыҡтар менән халыҡтарҙың малын йыйып, йә иҫерткестәр эсереп, йә әҙәмдәрҙе ҡылыс менән сабып, ошоға оҡшаш хәтһеҙ яфалар ҡылдылар. Әммә хөкөм сығарған ваҡытта хөкөм эйәләре ул яуыздарҙың үҙҙәренә хөкөм йөрөтмәнеләр». Батырша халыҡтың батшаға ниндәйҙер өмөт менән ҡарап, уның ҡөҙрәтенә ышанып йәшәгән дәүерендә уға ситләтеп булһа ла тел тейҙерергә баҙнат итә: «Йортобоҙ эсендә бер бәрәстең аяғы һынғанын күрһәк, уны бәйләйбеҙ. Шуның кеүек, беҙ ҙә падишаһыбыҙ ҡулы аҫтындабыҙ. Әгәр хәҡиҡәт падишаһлыҡ тикшереүе менән тикшерелһә, күҙе етмәҫ булыр инеме?» – ти ул.

Батыршаның хаты бөгөнгө көндә тарихсылар, философтар, тел белгестәре өсөн берҙәй дәрәжәлә ҡиммәтле сығанаҡ хеҙмәтен үтәй. Шулай ҙа, әҙәби ҡомартҡы булараҡ, өҫтөнлөгө ҙурыраҡ. Художестволы сәсмә әҫәргә хас билдәләр – киң-киң диалогтар ҡулланыла, геройҙарға портрет характеристикаһы бирелә, әҫәрҙең идея-проблематикаһы менән үрелеп килгән легендалар, фразеологик әйтемдәр осрай, авторҙың үҙенә генә хас хикәйәләү стиле бар. Башҡорттарҙың йәшәү рәүеше, ғөрөф-ғәҙәттәре, уй-хыялдары тураһындағы фекерҙәрен ул, конкрет хәл-ваҡиғаларҙың тере картиналарында һынландырып, эпик хикәйәләү аша бирә. Юғарыла килтерелгәнсә, батша ҡөҙрәтен крәҫтиәндең үҙ ихатаһында хужалыҡ итеүе менән сағыштырыуына оҡшаш образлы фекерләүҙе һәр биттән тиерлек табырға була. Әлеге Яныш старшинаны ул, мәҫәлән, төлкө менән тиңләй: «Һеҙҙең хәлегеҙ хәйләһе бөткән, хәлһеҙләнгән төлкөгә оҡшаш. Артынан эт еткәс, ҡойроғон йә уңға, йә һулға һалыр...» Әҫәрҙә картиналы ярҙамсы эпизодтар һәм лирик сигенеүҙәр күп, бөтә текст фекерҙең баштан-аяҡ эҙмә-эҙлелеге һәм аныҡ итеп әйтеп бирелеүе менән айырылып тора.

Хат Батыршаның замандаштарына билдәле булмаған. Әммә халыҡ уның авторын – аҡыллы һәм уҡымышлы шәхесте быуаттар буйы хәтерләгән, уның хаҡында йырҙар, легендалар һәм риүәйәттәр сығарған. 1973 йылда Башҡортостандың Балтас районы Юғары Ҡарыш ауылында яҙып алынған бер риүәйәттә Батыршаның уй-ҡараштары, Яныш старшина менән ыҙғышы,

ҡайһы бер биографик фактттары уның императрицаға яҙған хатындағы мәғлүмәттәргә ғәжәп рәүештә тура килә.

Эпистоляр яҙмалар ысынбарлыҡтағы хәл-ваҡиғаларҙы документаллеккә яҡын итеп һүрәтләүҙәре менән ҡиммәт. Шуның менән улар публицистик әҫәрҙәрҙе хәтерләтә, ошо жанрға хас һыҙаттарҙы үҙ эсенә ала – ышандырыусан һәм саҡырыусан пафос, эмоциональ тойғо менән һуғарылған.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. XIV быуат аҙағында Башҡортостанда булып ятҡан тарихи хәл-ваҡиғалар тураһында белгәндәрегеҙҙе күмәкләп иҫкә төшөрөгөҙ. 2. «Һуңғы һартай» әҫәрен уҡып, ошо тарихи хәл-ваҡиғалар сағылдырылған урындарын эҙләп табығыҙ. 3. Тексҡа таянып, Ялыҡ бейгә, Ҡармасан менән Сәрмәсәнгә, башҡа персонаждарға ҡылыҡһырлама бирегеҙ. 4. Төп геройҙың сәсәндәргә хас һүҙ оҫталығы сифаттарын асыҡлағыҙ. 5. Әҫәрҙең төп идея-проблематикаһын билдәләгеҙ. 6. Шәжәрәләр донъяның ниндәй төбәктәрендә таралыу тапҡан? 7. Уларҙы ни өсөн «әҙәби-тарихи ҡомартҡы» тип атайбыҙ? 8. Тәүҙә телдән сығарылған шәжәрәләр аҙаҡ ни өсөн ҡағыҙға теркәлә башлаған? 9. Әҙәби үҙенсәлектәргә эйә булған шәжәрәләрҙе атағыҙ, уларҙың художество үҙенсәлектәрен баһалағыҙ. 10. «Синкретик әҙәбиәт» тигән төшөнсәнең мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ. 11. Класс менән өс төркөмгә бүленеп, «Сыңғыҙнамә дәфтәре»нең өс бүлегендәге синкретиклыҡ сифаттарын билдәләгеҙ. 12. XVIII быуаттағы сәйәхәтнамәләр авторҙарын атағыҙ. Уларҙың яҙмаларын хәҙерге әҙәбиәттәге ошо жанр үҙенсәлектәре менән сағыштырығыҙ. 13. Эпистоляр публицистиканың хәҙерге әҙәбиәттәге традицияларын юллап ҡарағыҙ. 14. Батырша хатының әҙәби әҫәргә хас билгеләрен барлағыҙ.

# XIX БЫУАТТА БАШҠОРТОСТАНДА ЯҘМА ҺӘМ БАҪМА ӘҘӘБИӘТ

## XIX БЫУАТТЫҢ БЕРЕНСЕ ЯРТЫҺЫНДА ИЖТИМАҒИ ТОРМОШ ҺӘМ МӘҘӘНИ-ӘҘӘБИ ХӘРӘКӘТ

XIX быуаттың беренсе яртыһы – Рәсәйҙең ижтимағи тормошонда үҙенә бер һынылыш осоро, ҙур тарихи ваҡиғаларға бай осор. Тап ошо осорҙа илдә феодаль ҡоролош тарҡала, уның ерлегендә капиталистик мөнәсәбәттәр формалаша башлай. Һөҙөмтәлә халыҡтарҙың үҙ-ара иҡтисади һәм рухи-мәҙәни бәйләнеше әүҙемләшә бара. 1812–1814 йылдарҙа булып үткән Ватан һуғышы һәм 1825 йылдағы декабристар ихтилалы кеүек тарихи ваҡиғалар был процесҡа тағы ла ныҒыраҡ этәргес бирә. Илдә барған ошондай ижтимағи үҙгәрештәр, тарихи ваҡиғалар һәм хәрәкәттәр тәьҫирендә рус әҙәбиәтендә халыҡсан-демократик идеяларҙы алға һөргән, революцион-демократик ҡараштарҙы хуплаған А. С. Пушкин, Н. В. Гоголь, А. И. Герцен, В. Г. Белинский кеүек алдынғы яҙыусылар күтәрелеп сыға.

Рәсәй тарихындағы был ҙур үҙгәрештәр һәм ваҡиғалар Башҡортостандағы ижтимағи тормошҡа һәм йәмәғәтселек фекере үҫешенә лә йоғонто яһамай ҡалманы. 1812–1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында утыҙға яҡын полк менән ҡатнашҡан, уртаҡ Тыуған ил азатлығы өсөн көрәштең изгелеген, ватансылыҡ тойғоһон яу яландарында раҫлаған башҡорт халҡы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, илдә башланған социаль-иҡтисади үҙгәрештәр, сауҙа, баҙар мөнәсәбәттәре донъяһына тиҙ генә инеп китә алманы, сөнки был процестан ул яһалма рәүештә изоляцияланды. 1798 йылда батша хөкүмәте тарафынан башҡорт илендә кантондарға бүлеп идара итеү режимы индерелде һәм башҡорт халҡы хәрби казак ҡатламына күсерелде. Хәрби тәртиптәр ҡыҫаһына индерелгән халыҡ үҙ эшен аса, сауҙа менән шөғөлләнә, завод-фабрикаларға эшкә китә алмаған, элеккесә феодаль тәртиптәр шарттарында көн күрергә мәжбүр булған. Өҫтәүенә, бөтә хәрби кәрәк-яраҡты тәьмин итеү, сығымдарҙы ҡаплау уға йөкмәтелгән.

Батша хөкүмәте башҡорт халҡын идеологик яҡтан эшкәртеүгә, зиһенен дини өйрәтмәләр менән томалауға ла ҙур иғтибар бүлгән. Тап башҡорт иленең үҙәге Өфөлә Екатерина Икенсе 1789 йылда үҙенең указы менән бөтә Рәсәй мосолмандарының дини идаралығын – Диниә назаратын астырған. Ул башҡорт, татар халыҡтарының рухи-мәҙәни тормошон, бигерәк тә мәғариф өлкәһен, ныҡлы контролгә алған, дини ҡараштарҙы пропагандалау эшен киң йәйелдергән.

Ошондай киҫкен ижтимағи шарттар башҡорт мәҙәниәте һәм әҙәбиәтенең һәүетемсә үҫешен тотҡарланы, йәмғәтселек фекере һәм әҙәбиәт үҫешендә ике ҡапма-ҡаршы йүнәлештең барлыҡҡа килеүен билдәләне. Беренсеһе – заман талабына йөҙ борған, йәмғиәттең алға китешенә булышлыҡ иткән фекер-ҡараштарға ориентация тотҡан, халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлаған *халыҡсан-демократик* йүнәлеш. Икенсеһе – иҫкелеккә йәбешеп ятҡан, халыҡта күп йәһәттән хаким кластар мәнфәғәтенә яуап биргән тәҡүәлек, барына риза булып йәшәү сифаттары тәрбиәләүсе суфыйсылыҡ тәғлимәтен алға һөргән *дини-мистик* характерҙағы йүнәлеш.

### Халыҡсан-демократик ижад йүнәлеше

Был йүнәлеш бигерәк тә әҙәби процеста әле һаман көслө ижад формалары булып ҡала биргән фольклорҙа һәм ауыҙ-тел әҙәбиәтендә, йәғни сәсәндәр ижадында асыҡ сағылды. Тарихи йырҙарҙа һәм легендаларҙа, фольклор менән яҙма әҙәбиәт урталығында торған бәйеттәрҙә башҡорт ысынбарлығы, халыҡ яҙмышы бөтә дөрөҫлөгөндә сағылыш тапты. Мәҫәлән, «Һыр», «Аҡмәсет», «Уйыл», «Әрме» тигән йырҙарҙа бер туҡтауһыҙ хәрби походтарҙа ҡатнашыуҙың, ил сиктәрен һаҡлауҙың башҡорт халҡы елкәһенә ауыр йөк булып ятыуы, мәғәнәһеҙ ҡан ҡойоштарға, ҙур ҡорбандарға килтереүе асыҡ күрһәтелде. Быңдай әҫәрҙәр менән бер рәттән халыҡтың башҡорт ерҙәрен аяуһыҙ талауға, батша чиновниктарының, урындағы түрәләрҙең башбаштаҡлыҡтарына ҡаршы протест ауаздары, нәфрәт тойғоһо, тәнҡит рухы менән һуғарылған ижад емештәре лә барлыҡҡа килде («Башҡорт ере», «Рәзәрение», «Ҡолой кантон», «Түрәкәй» йырҙары, «Тәфтиләү бәйете», «Буранбай бәйете», «Себер бәйете» һ. б.). Ә бына 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһындағы «Йәнтүрә», «Ҡаһым түрә», «Абдрахман Аҡйегет» кеүек тарихи легендаларҙа, «Француз көйө», «Любизар», «Эскадрон» һымаҡ тарихи йырҙарҙа халыҡтың ризаһыҙлыҡ, нәфрәт тойғолары ватансылыҡ, рус һәм башҡа халыҡтар менән яу яланында сынығҡан дуҫлыҡ, туғанлыҡ, батырлыҡ тойғоларын бар ҡеүәтенә яңғыратыу менән алмашынды.

Французлдарҙы ҡыуҙыҡ беҙ, үҙ иленә һөрҙөк беҙ,
Французлдарҙы еңгәндә, ер һелкетеп йөрөнөк беҙ.
Был бәйетте яҙған саҡта ҡәләмдәр ҡамыш ине,
Өйгә инһәң, тышҡа сыҡһаң, шатлыҡлы тауыш ине, –

тип ғорурлыҡ, һөйөнөс хистәре менән тамамлана, мәҫәлән, «Рус-француз һуғышы бәйете».

Бындай әҫәрҙәрҙең бөтәһенә лә сағыу милли үҙенсәлек, милли колорит хас. Уларҙың барлыҡҡа килеүенә ерлек әҙерләүҙә ауыҙтел әҙәбиәте вәкилдәренең – сәсәндәрҙең роле ҙур булды. Халыҡсан идеялар был осорҙа Байыҡ Айҙар, Буранбай Ҡотосов, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев кеүек сәсәндәрҙең ижад емештәрендә киң сағылыш тапты. Ватан һуғышы йылдарында Байыҡ сәсән, йырҙар менән бер рәттән, тәрән философик фекер, патриотизм, уртаҡ ватан – Рәсәйҙе ҡурсалау тойғоһо, юғары граждандлыҡ рухы менән һуғарылған иң яҡшы ҡобайырын тыуҙырҙы («Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны»).

Байыҡ Айҙарҙан айырмалы рәүештә, Буранбай менән Ишмөхәмәт сәсәндәр йыр жанрына ғына мөрәжәғәт иттеләр. Буранбай сәсән йырҙарының («Ялан Йәркәй», «Буранбай», «Бөҙрә тал», «Сәлимәкәй» һ. б.) йөкмәткеһен социаль тигеҙһеҙлектәр һәм ғәҙелһеҙлектәр хаҡындағы уйҙар, тыуған еренән, яҡындарынан, һөйгәненән айырылырға мәжбүр ителгән кешенең яралы яҙмышы, драматик күңел кисерештәре тәшкил итә. Ишмөхәмәт сәсәндең «Бүҙекәй кантон», «Әйүкә», «Юлтый ҡараҡ», «Саңлы үҙәк» кеүек йырҙарында ла йәшәп килгән тәртиптәрҙән риза булмау, социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы протест ауаздары яңғырай. Шуның менән бергә тормош матурлығы, йәшәү мәғәнәһе хаҡындағы фәлсәфәүи юҫыҡлы уйҙар ҙа сағылыш таба.

Буранбай, Ишмөхәмәт сәсәндәр ижадында урын алған мотивтар, айырыуса халыҡтың социаль-колониаль иҙеүгә ҡаршы протесы, был осорҙа яҙма поэзияла сағыла башлай. Өфө олоҫоноң Иҫәкәй ауылынан (Башҡортостандың хәҙерге Ишембай районына ҡарай) сыҡҡан, Маҡар рус-башҡорт училищеһында белем алған Мөхәмәтулла Дауытов тарафынан ҡобайыр шиғыры менән ижад ителгән «Кинйәкәй бәйете» шуға асыҡ миҫал. Әҫәрҙә Тәлтем Юрматы башҡорттарының аяныслы яҙмышы миҫалында башҡорт ерҙәренең вәхшиҙәрсә таланыуына ҡаршы XVIII–XIX быуаттар сиктәрендәге халыҡ көрәшенең ҡанға батырып баҫтырылыуына бәйле фажиғәле ваҡиғалар һүрәтләнә. «Ҡылыс илә сабылған, мылтыҡ илә атылған», ҡаны «Егән һыуы булып аҡҡан», ауылдары яндырылып, йортһоҙ, ерһеҙ ҡалған халыҡтың асыу-нәфрәте әҫәрҙә иҙеүселәрҙән алынасаҡ үс, ҡон ҡайтарырҙай батыр егеттәрҙең үҫеп сығасағына өмөт булып ишетелә:

Килһә ине Йәмәлкә,
Күрһә ине Кинйәкәй,
Ҡайтһа ине Салауат –
Ил батыры арыҫлан,
Түҙмәҫ ине был хәлгә.
Ҡылысын алып ҡынынан,
Уғын ослап, сайғаҡлап,
Аҡ толпарға атланып,

Һөрән һалып Уралға,
Йыйып егет-еләнде,
Арыҫландай ирҙәрҙе,
Ташҡын төҫлө яу булып,
Азат итеп ҡышлауҙы,
Ҡыуыр ине йоттарҙы,
Миҫле ҡара ҡорттарҙы!

**Мәғрифәт усаҡтары һәм айырым донъяуи күренештәр**

XVIII быуаттың тәүге йылдарынан алып Башҡортостанда мәктәп һәм мәҙрәсәләр селтәре сағыштырмаса йылдам үҫә, сәнәғәт һәм хәрби һөнәр буйынса уҡыу йорттары – тау сәнәғәте һәм башланғыс гарнизон мәктәптәре, ғәскәри училищелар асыла башлаған. XIX быуаттың урталарына мәҙрәсәләрҙең һаны 1,5 тапҡырға артҡан. Ырымбур губернаһында ғына ла улар 600-гә барып еткән. Башҡорт, татар мәғарифы һәм мәҙәниәте тарихында Ырымбур губернаһындағы Ҡарғалы, Өфө губернаһындағы Стәрлетамаҡ, Һөйөндөк, Таҙлар, Борай, Ашҡаҙар-Балыҡлы, Балыҡлыкүл кеүек мәҙрәсәләр ҙурыраҡ эҙ ҡалдырған. Стәрлебаш мәҙрәсәһе иһә бөтә Рәсәйгә билдәле булған. XVIII быуаттың 20-се йылдарынан уҡ эшләй башлаған был мәҙрәсә XIX быуаттың урталарынан башлап, аталы-уллы Харис һәм Харрас Биктимеровтар мөдәррислек иткән осорҙа, бигерәк тә билдәлелек алған. Унда, дини предметтарҙан тыш, донъяуи фәндәрҙе, рус теле һәм әҙәбиәтен дә уҡытыуға ныҡ иғтибар бирелгән. Был предметтарҙы уҡытыу өсөн айырым мөғәллим тотолған, шәкерттәр өсөн русса гәзит-журнал алдырылған. Был мәҙрәсәгә барлыҡ Урал – Волга буйы төбәктәренән, ҡаҙаҡ далаларынан, хатта Урта Азиянан, Төньяҡ Кавказдан, Яҡын Көнсығыштан килеп уҡығандар. Тикмәгә генә заманында уны академик В. В. Бартольд: «Рәсәйҙәге мосолман фәненең йәнле үҙәктәренең береһе», – тип атамаған.

Былдай мәҙрәсәләр башҡорт халҡының рухи тормошонда ярайһы эҙ ҡалдырған. Уларҙа заманының танылыу яулаған шағирҙары һәм ғалим-педагогтары Ә. Ҡарғалы, Һ. Салихов, Ш. Зәки, Ғ. Соҡорой уҡыған йә эшләгән. Улар араһында Рәсәйҙәге халыҡсан-демократик фекер тәьҫирен аҙмы-күпме кисергән, дини фанатизмға ҡаршы сыҡҡан Х. Жданов, мәғрифәтселек идеяларына йөҙ борған атаҡлы шағир Аҡмулла ла бар.

Был осорҙа башҡорт халҡының аң-белемен, мәҙәниәтен үҫтереүҙә 1825 йылда Ырымбурҙа асылған Неплюев хәрби училищеһының роле айырыуса ҙур булған. Унда йыл да 12 йәшлек башҡа милләт балалары менән бер рәттән 30 башҡорт үҫмере лә уҡырға алынған. Улар унан, 8 йыл буйына башлыса донъяуи предметтарҙы үҙләштереп, офицер булып сыҡҡандар. Уларҙың

күбеһе хәрби карьераны һайлағандар. Араларында башҡорт ижади интеллигенцияһы сафын тулыландырған М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксурин, И. Батыршин, М. Өмөтбаев, Ә. Диваев кеүек мәғрифәтсе ғалим-әҙиптәр ҙә бар.

Башҡорт рухи-мәҙәни тормошоноң йәнләнә барыуында 1804 йылда асылған Ҡазан университетының да әһәмиәте ҙур. 1832 йылдан башлап унда башҡорт йәштәренә һәр йыл 20 урын бүленгән. Уны тамамлаусылар араһында фән кандидаты дәрәжәһе алып сыҡҡан филолог С. Күкләшев, философ С. Тоҡомбәтов, доктор дәрәжәһенә лайыҡ булған медик Ә. Әбдиев кеүек шәхестәр ҙә бар.

Ҡазан университеты үҙ эргәһендә эшләгән типографияның эшмәкәрлек йүнәлеше менән дә башҡорт мәҙәниәте һәм әҙәбиәте үҫешенә этәргес биргән. Быны күҙаллау өсөн тап ошо типографияла «Ҡисса-и Йософ», «Ләтаифе (көләмәстәр) Хужа Насретдин», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» кеүек халыҡсан әҫәрҙәрҙең донъя күреүен әйтеп үтеү ҙә етә.

**Әҙәби бәйләнештәр**

XIX быуаттың беренсе яртыһы башҡорт әҙәбиәтендә халыҡсан-демократик йүнәлештең нығына башлауында алдынғы рус мәҙәниәте һәм әҙәбиәтенең роле ҙур. Әлбиттә, бында тәрән тамырлы Көнсығыш әҙәбиәтенән юлланған ыңғай традицияларҙың да әһәмиәте ҙур булды. Был осорҙа әҙәбиәт майҙанына килгән ижадсыларыбыҙ, үҙҙәрен борсоған һорауҙарға яуап эҙләп, урындағы фольклор әҫәрҙәренән тыш, Көнсығыш классик шиғриәтенең Фирҙәүси, Хафиз, Руми, Рудаки, Хәйәм, Сәғҙи, Науаи кеүек күренекле вәкилдәренең ижад емештәренә лә мөрәжәғәт иттеләр. Шулай ҙа был осорҙа башҡорт зыялыларының рус мәҙәни-әҙәби мөхитенә һәм, киреһенсә, рус әҙиптәренең башҡорт ысынбарлығына йөҙ бороуы быҒаса булмағанса көсәйҙе. Бында бөтәһенән дә элек бөйөк А. С. Пушкиндың (1799–1837) эшмәкәрлеген күрһәтергә кәрәк. Башҡортостан тарихын, башҡорт халҡы образын киңерәк яҡтыртыу тап унан башлана. 1833 йылдың көҙөндә Ырымбур крайына яһаған сәфәре һөҙөмтәһендә яҙылған «Капитан ҡыҙы» повесында ул рус яҙыусылары араһында беренселәрҙән булып башҡорт халҡына асыҡтан-асыҡ теләктәшлек күрһәтә. Бер нисә ихтилалда ҡатнашҡан, әсиргә эләгеп, язалауҙар барышында теле ҡырҡылған ҡарт образы аша автор сәйәси хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителгән, теленән яҙҙырылған, әммә үҙ азатлығы һәм бәхете өсөн һаман да көрәшен дауам иттергән ирек һөйөүсе, иҙеүселәренә баш эймәҫ, ҡурҡыу белмәҫ ғорур башҡорт халҡының иҫтә ҡалырлыҡ дөйөмләштерелгән образын тыуҙыра.

А. С. Пушкиндың гуманистик идеялары артабан С. Аксаков, В. Даль, М. Михайлов, А. Толстой, В. Зефиров, В. Юматов,

В. Лоссиевский, И. Казанцев кеүек яҙыусыларҙың һәм крайҙы өйрәнеүселәрҙең ижад емештәрендә үҫтерелде. Бында XIX быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбурға һөргөнгә ебәрелгән Александр Алябьевтың, батша хөкүмәте тарафынан Салауат Юлаевтың исемен дә телгә алыу тыйылған бер мәлдә, уға ҡағылышлы йырҙың көйөн эшкәртеп баҫтырып сығарғанлығын, күренекле ғалим-яҙыусы Владимир Далдең башҡорт, рус, ҡаҙаҡ халыҡтарының тормошонан повестар, хикәйәләр ижад иткәнлеген, башҡорттарҙың «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән эпосын яҙып алып, «Башкирская русалка» исеме аҫтында рус уҡыусыларына еткергәнлеген әйтеү ҙә етә. Ә бына Алексей Толстойҙың, башҡорт һәм ҡаҙаҡ далаларына сәйәхәтенән һуң, «Ҡырғыҙ далаһында ике көн» тигән очеркында, Иван Грозный заманына арналған «Князь Серебряный» тигән тарихи повесында башҡорттарҙың Волганың көнсығышынан уҡ башланған ҙур территорияла борондан уҡ йәшәгән киң күңелле, башҡа халыҡтар менән һыйышып көн иткән, эшһөйәр, музыкаль тәбиғәтле халыҡ булыуы хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙе осратабыҙ.

Башҡортостан һәм башҡорттар хаҡында объектив төшөнсә булдырыуҙа, уларҙың тормошон дөрөҫ яҡтыртыуҙа Сергей Аксаков менән Петр Кудряшевтың роле айырыуса ҙур. Башҡортостанды, уның хозур тәбиғәтен «Приветствую тебя, страна благословенна! Страна обилия и всех земных богатств!» тип данлап йырлаған С. Аксаков башҡорттарға оло ихтирам менән ҡараған. Ошо саф күңелле, эшһөйәр, ҡунаҡсыл халыҡтың ерҙәре аяуһыҙ таланыуына борсолоуҙарын асыҡтан-асыҡ белдергән. «Ғаилә хроникаһы», «Багров ейәненең балалыҡ йылдары» һәм «Иҫтәлектәр» тигән автобиографик трилогияһында рус дворяндарының, чиновниктарҙың нисек итеп «бер һыйлау» хаҡына йәки «ике-өс һимеҙ һарыҡҡа» башҡорттарҙың ҙур-ҙур ерҙәрен ҡулға төшөрөүҙәрен, ә үҙҙәрен ауыл-ауылдары менән ҡыуып ебәреүҙәрен ғәжәп бер реалистик көс менән күрһәтеп биргән. Шул уҡ ваҡытта ул рустар менән башҡорттар араһындағы дуҫлыҡты, уларҙың бер-береһенең телен, йолаларын үҙләштереп, аралашып йәшәүҙәрен ҡайнар яҡлаған.

Ырымбурҙа йәшәгән, башҡорттар менән ныҡ аралашҡан декабрист-шағир һәм прозаик П. Кудряшев башҡорт фольклоры өлгөләрен, бигерәк тә Ватан һуғышына арналған хәрби-патриотик йырҙарҙы яратып йыйған һәм руссаға тәржемә итеп баҫтырған, уларҙың өлгөһөндә үҙе лә шиғырҙар яҙған. Шағир башҡорт халҡы тарихындағы һынылышлы моменттарға айырыуса иғтибар итә, Башҡортостандың Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуын юғары баһалай, рус һәм башҡорттоң тәрән тамырлы дуҫлығы, башҡорт халҡының Рәсәйгә ҡарата булған патриотизмы, героизмы хаҡында илһамланып яҙа. Шул уҡ

ваҡытта үҙенең «Әбдрәш» тигән повесында царизмдың халыҡтарҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу сәйәсәтен ҡаты тәнҡитләй. «Абдрахман» һәм «Исхаҡ» тигән повестарында, күп һанлы мәҡәләләрендә башҡорттарҙың тарихи үткәнен, тормош-көнкүрешен, матур рухи донъяһын, ғөрөф-ғәҙәттәрен сағыу яҡтырта. Ә инде «Пугачёв» поэмаһында рус яҙыусылары араһында тәүгеләрҙән булып башҡорттарҙың 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында азатлыҡ өсөн иң әүҙем, иң фиҙаҡәр көрәшкән халыҡ булғанлығын күрһәтеп бирә. Декабрист-әҙип был ҡаһарман рухлы халыҡтың икеләтә иҙеү аҫтында йәшәүе менән һис тә килешә алмай, уның ҡасан да булһа был аяныс хәлдән сығасағына ышаныс менән ҡарай.

**Мәғрифәтселек башланғыстары**

Был осорҙа башҡорт уҡымышлылары араһында, алдынғы рус мәҙәниәте һәм әҙәбиәтенең халыҡсан-демократик традицияларына йөҙ бороп, уның өлгөһөндә туған халҡының рухи тормошон заманса үҫтереү, уны уҡымышлы, мәҙәниле итеү хәстәрлеге менән янған, мәғрифәтселек идеяларына юл ярған Мартиниан Иванов (1812 – ? ), Сәлихйән Күкләшев (1811–1863), Мирсалих Биксурин (1819–1903) кеүек ғалим-әҙиптәр күренә башланы. Улар уҡыу-уҡытыу системаһын заманса үҙгәртеп ҡормай, ғәрәп, фарсы, боронғо төрки һүҙҙәре менән үтә сыбарланған, киң халыҡ массаһына аңлайышһыҙ булған иҫке яҙма әҙәби тел төркиҙе реформаламай, халыҡтың һөйләү теленә яҡынайтмай, уға аңлайышлы булған телдә яҙылған, еңел уҡымлы әҫәрҙәр һәм хеҙмәттәр тыуҙырмай тороп, уның тормошон алға ебәреү, мәҙәниәтте һәм әҙәбиәтте тейешенсә үҫтереү ауыр буласаҡ тигән ҡараштa торҙолар. Был фекерҙе башлап 1842 йылда М. Иванов үҙенең «Татар грамматикаһы» менән «Татар хрестоматияһы» тигән китаптарында сағылдырҙы. Артабан уны С. Күкләшев «Диуан хикәйәте татар» («Татар хикәйәттәре йыйынтығы», 1859), М. Биксурин «Башланғыс ҡулланма» (1859, 1869) тигән китаптарында үҫтерҙе. Иҫке яҙма әҙәби тел төркиҙе халыҡтың һөйләү теленә яҡынайтыуҙың нигеҙен улар уның фольклоры телендә күрҙеләр. Фольклорға улар халыҡты ағартыу, юғары әхлаҡ сифаттары һәм эстетик зауыҡ тәрбиәләү сығанағы булараҡ та ҡаранылар. Шуға ла китаптарында иң элек әҙәплелекте, аңбелемде, тапҡырлыҡты, һөнәрҙе, ғәҙеллекте, кешелеклелекте, тыуған ерҙе, тәбиғәтте һөйөүҙе данлаған, насар күренештәрҙе фашлаған әкиәттәрҙе, хикәйәттәрҙе, йырҙарҙы, йомаҡтарҙы, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе күпләп урынлаштырҙылар. Шуныһы мөһим: уларҙы ғалим-әҙиптәр тел-стиль үҙенсәлектәрен һаҡлаған килеш бирергә тырыштылар. Был йәһәттән М. Биксуриндың эшмәкәрлеге бигерәк тә айырылып торҙо. «Батыр батшаның әкиәте», «Өс туған» тигән әкиәттәрҙе ғәрәпсә шрифт менән

башҡорт телендә баҫтырып, ул башҡорт мәҙәниәте тарихында халыҡтың һөйләү теле нигеҙендә милли яҙма әҙәби телде барлыҡҡа килтерергә ынтылыштың тәүге өлгөләрен бирҙе.

Был ғалим-әҙиптәр мәҙәни-әҙәби бәйләнештәрҙе үҫтереүҙә халыҡтың донъяға ҡарашын, рухи донъяһын байытыуҙың мөһим сығанағын күрҙе. Шуға ла улар туған халҡы араһында Көнсығыш һәм Көнбайыш, айырыуса рус әҙәбиәтенең ябай тел һәм реалистик алым менән яҙылған әҫәрҙәрен тәржемә аша пропагандалауға ла ҙур иғтибар бүлде. Уларҙың араһында мәрхәмәтһеҙ, һаран хакимдарҙы, байҙарҙы фашлаған һәм, киреһенсә, ғәҙелдәрен, аҡыллыларын маҡтаған, кешенең ыңғай әхлаҡ сифаттарын, гуманлылығын, тапҡырлығын, зирәклеген данлаған хикәйәләр һәм хикәйәттәр, бөйөк Фирҙәүсиҙең «Шаһнамә» эпопеяһының гуманизм идеяларын данлаған өҙөктәр бар. Руссанан тәржемәләп баҫтырған прозаик В. Панаевтың крепостной крәҫтиәндәрҙең ауыр тормошон, аң-белем һәм тәрбиә ала алмағанлыҡтары арҡаһында драматик яҙмышҡа дусар булыуҙарын сағылдырған «Иван Костин» (1829) повесы, әхлаҡ темаһына арналған хикәйәләрҙең, И. Крылов, И. Хемницер, И. Дмитриев кеүек шағирҙарҙың наҙанлыҡты, тарҡаулыҡты, ғәмһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте, ялҡаулыҡты һәм башҡа насар күренештәрҙе тәнҡитләгән мәҫәлдәрҙең бөтәһе лә *мәғрифәтселек реализмы принциптары менән яҙылған* ижад емештәренән ғибәрәт.

Ғөмүмән, М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксуриндарҙың ғилми-әҙәби эшмәкәрлектәре үҙҙәренең идея-эстетик асылы менән мәғрифәтсел характерҙа булды. Улар башҡорт йәмғиәтендә мәғрифәтселектең артабан да ижтимағи-эстетик фекер йүнәлеше булараҡ ныҡлап үҫеп китеүе өсөн мөһим ерлекте тәшкил итте.

**Суфый шағирҙар**

XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорт рухи-мәҙәни тормошонда күҙәтелгән халыҡсан-демократик идеялар еңел генә үҫмәне. Хәрби ҡатламға күсерелгән халыҡтың иҫ киткес ауыр шарттарҙа көн күреүе, төп йәшәү сығанағы булған ерҙәренең аяуһыҙ таланыуы башҡорт йәмғиәтендә төшөнкөлөк тойғоларының, дини-мистик ҡараштарҙың ерлеген нығытты, суфыйсылыҡ идеялары әҙәбиәттә киң сағылыш тапты, уларҙы йырлаусы әллә күпме шағирҙар күтәрелеп сыҡты. Тажетдин Ялсығолов (1767–1838), Әбелмәних Ҡарғалы (1782–1833), Һибәтулла Салихов (1794–1867), Шәмсетдин Зәки (1822–1865), Ғәли Соҡорой (1826–1889) кеүек суфый шағирҙарҙың ижад емештәре хатта бөтә Урал – Волга төбәгендә танылыу алды.

Суфыйсылыҡ шиғриәтенең тарихы оҙон, ул урта быуаттарҙа уҡ башланған. Суфыйсылыҡтың йөкмәткеһен *аскетлыҡ* – үҙеңде кешегә хас бөтә ихтыяждарҙан, теләк-ынтылыштарҙан, барлыҡ ләззәттәрҙән тыйыу һәм *мистиклыҡ* – тәбиғи булмаған нәмәләргә ышаныу тәшкил итә. Ошондай ҡараштан сығып эш

иткән шағирҙар, тормоштағы ғәҙелһеҙлектәрҙе, кире күренештәрҙе күрһәләр ҙә, уларҙан нисек арыныу юлдарын үҙҙәре лә күрә, аңлай, халыҡҡа ла төшөндөрөп бирә алманылар. Бөтәһен дә кешенең эске донъяһына, әхлағына ҡайтарып ҡалдырҙылар. Һөҙөмтәлә, уны күңел донъяһын «хуш холоҡ менән биҙәргә», был ғәҙелһеҙ, яман донъя эштәренә һәм хәстәрлектәренә күңел бирмәҫкә, барына ҡәнәғәт булып, фәҡәт Аллаға «рухи яҡынайыу», үҙеңде мәңгелек теге донъяға китергә әҙерләү уйы менән генә йәшәргә өндәүҙәр улар ижадының иң характерлы һыҙаты булды. Шиғыры беҙҙең көндәргә ҡулъяҙмала килеп еткән аноним (исем-шәрифе билдәһеҙ) автор үҙенең уй-тойғоларын бына нисегерәк белдерә:

Ағар һыу кеүектер ғүмерҙең ҡарары,
Иҫер елдик егетлек рузи кары (дәүере).
Ағар һыуға, иҫер елгә таянма,
Был фани (үтә, бөтә торған) донъялыр – ҡанға буянма.

Бынылы тәҡүәлеккә, күңел паклығына ынтылған лирик геройҙың ер өҫтөндә яңғыраған ауазы булһа, уны тәьҫирлерәк булһын өсөн ер аҫтынан, теге донъянан тороп яңғыратҡан осраҡтар ҙа булған. Был йәһәттән **Һ. Салиховтың** ижади эҙләнеүҙәре үҙенсәлекле. Үҙенең «Мөнәжәт», «Нисә яһил...», бигерәк тә «Тәндә йәнем...» тигән әҫәрҙәрендә ул аскетлыҡты яҡлай, был фани донъяны «алтын-көмөш малы менән» кешене алдандырыусы яуызлыҡ һәм яманлыҡ сығанағы итеп кенә һүрәтләй. Аллегория алымын уңышлы ҡулланып, шағир ҡәберҙә ятҡан лирик геройҙың наҙанлығы арҡаһында, Алла ҡушҡандарын тотмауына, тәнгә йәндең бер генә мәлгә килеүенә, ысын тормоштоң фәҡәт мәңгелек теге донъяла булыуына ваҡытында төшөнмәүенә, тәнен «гел бал да май менән» иркәләп, наҙлап тотоуына, аслы-туҡлы йөрөмәүенә, күңелен пакламауына ныҡ ҡайғырыуын, былай булғас, Алла ғәфү итмәҫ, башым тамуҡтан сыҡмаҫ инде, тип зар илауын һүрәтләй.

«Тәндә йәнем...» әҫәре теге донъялағы «бәхетле тормош» тураһында хыялланып ғүмер иткән кешеләрҙең күңелдәренә хуш килгән. Шәкерттәр уны мәҙрәсәләрҙә гимн кеүек көйләп башҡарыр булғандар.

Заманында суфый шағир **Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорҙиҙың** 1847 йылда Петербургта айырым китап булып баҫылып сыҡҡан «Рисәлә-и Ғәзизә» («Ғәзизә китабы») тигән йыйынтығы ла бик популяр булған. Ул 1796 йылда Урта Азия шағиры Аллаяр суфыйҙың «Ҫөбәт әл-ғажизин» («Көсһеҙлөктөң ныҡлығы») тигән китабына аңлатмалы тәржемә яһау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән, мәҙрәсәләрҙә уҡыу китабы булып ҡулланылған.

Уны Т. Ялсығолов үҙенең ҡыҙы Ғәзизәгә арнаған. Унда Алла берҙән-бер һәм сикһеҙ ҡөҙрәт эйәһе, ә кеше ғүмере буйына уның ярҙамына мохтаж ҡол, ул йәшәгән был донъя бер ҙә ысын, мәңгелек донъя түгел, ә ваҡытлы бер күренеш кенә, ысын тормош кешеләр үлгәндән терелеп йәшәйәсәк мәңгелек теге донъяла була тигән идея уҙғарылған. Йыйынтыҡта шағирҙың Аллаяр суфый әҫәрҙәрендә ҡыҙыл еп итеп уҙғарылған, ысын кәсә күп тапалған балсыҡтан яһалған кеүек, Аллаға яҡынайырға, үҙен мәңгелек теге донъяға әҙерләргә тырышҡан ысын ир ҙә башҡаларҙан иҙелеүгә, рәнйетелеүгә риза булып йәшәү һөҙөмтәһендә формалаша тигән фекергә теләктәшлек белдереүе ярылып ята.

**Ә. Ҡарғалының** 1845 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Тәржемә-и хажи Әбелмәних әл-бистәүи әс-Сәғиди» («Сәғит биҫтәһе хажийы Әбелмәних тәржемәләре») тигән китабындағы әҫәрҙәрҙә лә, **Ш. Зәкиҙең** үҙ заманында халыҡ араһында ҡулъяҙмала таралған, өлөшләтә генә баҫылған шиғырҙарында ла («Бәндәи – әһле сафа» – «Алла ҡолдары – сафлыҡ эйәһе», «Борадәр, ғоррә улма был йыһанә» – «Ағай-эне, алданма был донъяға», «Тағәт (буйһоноу) нуры эҙләрем», «Бән ошал ҡаҙебләрә инанмаҫмын» – «Мин ошо алдандырғыс нәмәләргә инанмаҫмын» һ. б.) донъяның фанилығы, күңелде гонаһтарҙан арындырыу, тормош ауырлыҡтарына зарланмайынса, барына ҡәнәғәт, михнәт-ғазаптарға риза булып, сабыр йәшәү һәм үҙеңде мәңгелек тормошҡа әҙерләү кәрәклеге тураһындағы уй-фекерҙәр төп урынды алып тора.

Шулай ҙа был осорҙа йәшәгән башҡорт яҙыусыларының күбеһе аҙаҡҡа ҡәҙәр эҙмә-эҙле суфый булмаған. Мәҫәлән, Һ. Салихов үҙенең төп ижад емеше булған «Мәжмәғ әл-адаб» («Әҙәпкә өйрәтеү йыйынтығы», Ҡазан, 1856) китабында дини нәсихәтсе булыуын ситкә ҡуйып, дөрөҫ һәм тәрән фекерле һүҙҙәр һөйләй, көндәлек тормош өсөн файҙалы кәңәштәр бирә; йәмғиәттәге тиҫкәре күренештәрҙе, шул ижтимағи тормоштоң фәҡир кеше теңкәһенә тейгән яман яҡтарын ғәҙел һәм ҡыйыу шелтәләй ҙә, «биреп ришүәт һимертәләр әмирҙе» һәм «замана хакимы оҡшар йыланға» тип, халыҡ йәнен ҡыйыр түрәләрҙе ғәжәп дөрөҫ һәм ҙур ҡыйыулыҡ менән кәүҙәләндерә. Түбәндәге кескәй өҙөктә, мәҫәлән, ғәскәри кантонлыҡ системаһы тыуҙырған ришүәтсе кантон башлығы образының иң характерлы һыҙаттары тасуир ителгән:

…Түрәләрҙән берәү килһә иленә,
Саҡыртыр ҡылыс бәйләтеп биләңә.
Ҡаршыһында тотор үргә ҡаратып,
Эшләргә бойорор, хөкөмөн таратып.
Уның хөкөмөн еткермәй еренә
Мөмкин түгел ҡаршы килеү беренә.

Быға миҫалдар бик күп, ни итербеҙ?
Ҡайһыһын ғына һөйләп бөтөрбөҙ?
Бер эштә ҡаршылыҡ итһәң уларға,
Юлығырһың бөтмәҫ бәләләргә.
Эйе, улар хөкөмө еңә шулай,
Беҙҙе мал-мөлкәттән бөлдөрә шулай.

Шағир ижадындағы ошо шаҡтай үткер тәнҡитле ҡаршты иҫтә тотоп, башҡорт мәғрифәтсе ғалим-әҙибе М. Өмөтбаев менән крайҙы өйрәнеүсе М. В. Лоссиевский уның башҡорт ғәскәре башлыҡтарына, башҡа түрәләргә ҡарата тәнҡит рухлы күп кенә әҫәрҙәр яҙған сатирик шағир булыуын әйтеп үтәләр.

Шул рәүешле, тормоштан бөтөнләй үк айырылмау, йәмғиәттәге ғәҙелһеҙ хәлдәрҙе күреп борсолоу айырым шағирҙарҙы суфизм ситлегенә бикләнмәүгә, билдәле бер дәрәжәлә халыҡҡа хеҙмәт итеүгә килтергән. Был хәл дә әҙәбиәттә халыҡсан-демократик йүнәлештең үҫешенә күпмелер кимәлдә булышлыҡ итмәй ҡалманы.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. XIX быуаттың беренсе яртыһында Рәсәйҙәге һәм Башҡортостандағы ижтимағи тормош, башҡорт йәмғиәтендәге мәҙәни-әҙәби хәрәкәт тураһында һөйләгеҙ. Әҙәбиәттә ике ҡапма-ҡаршы йүнәлештең барлыҡҡа килеүе сәбәптәрен асыҡлағыҙ, һәр ҡайһыһына характеристика бирегеҙ. 2. Халыҡсан-демократик йүнәлеш айырыуса һүҙ сәнғәтенең ҡайһы формаларында асыҡ сағылған? 3. Был осорҙа мәғариф эшенең башҡорт йәмғиәтендәге торошо һәм уның әҙәби процесҡа йоғонтоһо хаҡында һөйләгеҙ. 4. XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорт мәҙәни-әҙәби тормошоноң йәнләнеүендә рус әҙәбиәте ниндәй роль уйнаған? Алдынғы ҡарашлы рус әҙиптәренең ижадында Башҡортостан һәм башҡорт халҡының тормошо нисегерәк яҡтыртылған? 5. Был осор башҡорт мәҙәни-әҙәби тормошонда мәғрифәтселек идеяларына башлап юл ярған ғалим-әҙиптәрҙең эшмәкәрлектәренә характеристика бирегеҙ. 6. Дини-мистик йүнәлештәге башҡорт шиғриәте вәкилдәре ижадында ниндәй идеялар сағылыш тапҡан?

## «ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ»

XVIII быуаттың аҙағында – XIX быуаттың тәүге яртыһында яҙма мәҙәниәттең роле күтәрелә, китап баҫыу эше йәнләнә барған шарттарҙа халыҡ ижадының алдынғы традициялары нигеҙендә ҡобайырҙар сюжетына ҡоролған яҙма әҫәрҙәр ижад ителә башлай. Улар был осорҙа әҙәбиәттә күҙгә күренеп айырымлана барған *халыҡсан-демократик* һәм *дини-мистик (суфыйсы-*

*лыҡ)* йүнәлештәрҙең тәүгеһе баҙыҡланыуына ҙур этәргес бирә. Ошондай әҫәрҙәрҙең иң күләмлеһе – «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ҡиссаһы. Ул башҡорт халыҡ ижадында киң таралған ошо исемдәге эпик сюжетҡа нигеҙләнеп, уны тулыландырып, үҫтереп яҙылған.

**Әҫәрҙең яҙылыуы һәм авторлығы**

Рәсәйҙә капиталистик мөнәсәбәттәр формалаша һәм нығына башлаған осорҙа Башҡортостандың бай тәбиғәт байлыҡтарын, файҙалы ҡаҙылмаларын нығыраҡ үҙләштереү ниәтенән уларҙы өйрәнеү әүҙемләшеү менән бер рәттән, рус зыялыларының урындағы халыҡтың тарихы, донъяға ҡарашы, йәшәү рәүеше, рухи донъяһы, ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре менән ҡыҙыҡһыныуы көсәйә төшә. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ҡобайырының рус теленә тәржемә ителеп баҫтырылып сығарылыуы шуның ҙур әһәмиәткә эйә булған бер күрһәткесе. Рус һәм Европа ғалим-әҙиптәренең төрки телле халыҡтарҙың эпостарын ныҡлап өйрәнә һәм пропагандалай башлауҙары тап ошо башҡорт ҡобайырынан башлана. Ул 1812 йылда Ҡазан университеты типографияһында «Куз-Курпяч, башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года» тигән баш аҫтында донъя күрә. Уны тәржемәләп баҫтырып сығарған Тимофей Беляев «Тәржемәсенән» тигән инеш һүҙендә: «Башҡорттар араһында йәшәп, миңә *улар телендә «Ҡуҙыйкүрпәс, башҡорт повесы» исемле бер ҡулъяҙманы уҡырға тура килде.* Уның күп кенә йырҙарын элек тә ҡурайсыларҙан ишеткәнем бар ине. Исеменең яңылығы, фекер һәм һүҙҙәрҙәге үҙенә бер төрлөлөк, унда бирелгән башҡорт йолаларының, бөтәһенән дә бигерәк ҡылыҡтарының ябайлығы һәм уларҙағы эскерһеҙлек мине бик мауыҡтырҙы һәм был хикәйәтте рус теленә тәржемә итергә мәжбүр итте», – тип яҙа. Артабан ул әҫәрҙең «фекерләү һәм һынландырыуҙың үҙенә бер төрлөлөгө» менән айырылып торған ҡурайсы-сәсән тарафынан «йырҙарҙан һәм телдән телгә йөрөгән легенда-риүәйәттәрҙән йыйылған» булыуын һәм шиғри арнау менән оҙатылыуын, авторҙың «шағир-тарихсы ла» булыуын күрһәтеп үтә. Баҫманың «Ҡушымта» бүлегендә Беляев ҡурайсы-сәсәнде йәнә телгә ала. «Ҡурайсы тарафынан йыйылған ҡулъяҙма – башҡорт хикәйәте ошоноң менән тамам», – тип күрһәтә ул һәм әҫәрҙең 2-се киҫәген тәржемә итә башлауын белдерә. Был киҫәктең матбуғатҡа сығыуы билдәле түгел.

Әммә бында шуныһы асыҡ: Т. Беляев тәржемәһендә донъя күргән «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» саф фольклор әҫәре түгел, бәлки халыҡ араһында ошо исемдә таралған сюжетҡа нигеҙләнеп тыуған *индивидуаль ижад емеше, фольклор менән яҙма әҙәбиәт традициялары синтезлашыуы күренеше.*

Ул фольклор варианттарының бөтәһенән дә айырылыбыраҡ тора. Был әҫәрҙең йөкмәткеһендә лә, формаһында ла, хатта унда бәйәнләнгән хәл-ваҡиғалар барған осорҙар бирелеше сиктәрендә лә һәм шул осорҙарға бәйле тыуған проблемалар даирәһендә лә күренә. Мәҫәлән, фольклор варианттарында хикәйәләнгән хәл-ваҡиғаларҙың татар-монгол яулап алыуҙарына тиклемге XI–XIII быуаттың беренсе сиреге осорҙарына ҡайтып ҡалыуы төҫмөрләнһә, баҫма «башҡорт повесы»нда улар XIX быуат башына тиклем барып етә. Боронғо сюжетҡа ҡурайсы-сәсән киләсәктә буласаҡ рәүешендә башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы осорҙарҙа «төркөм-төркөм булып, сафтарға теҙелеп», Рәсәйҙең «дошмандарына ҡаршы» яуға барасаҡтары, данлы эштәре өсөн «бөйөк батша тарафынан наградланасаҡтары, үҙ йәйләүҙәренә ҡайтып уның державаһы аҫтында бәхетле йәшәйәсәктәре», 1805 йылдағы Аустерлиц, 1807 йылдағы Тильзит һуғыштарында батырҙарса ҡатнашасаҡтары күренештәрен өҫтәй. Әҫәрендә башҡорт-рус, башҡорт-ҡаҙаҡ мөнәсәбәттәре проблемаларына ла мөрәжәғәт итеп, ул ырыу-ара татыулыҡ, берҙәмлек темаһын халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты йырлау юғарылығынаса күтәрә.

Уҡымышлы ҡурайсы-сәсән, «шағир-тарихсы» халыҡ араһында таралған сюжетты шулай үҙенсә эшкәрткән, уға яңы деталдәр, образдар, мотивтар өҫтәгән. Ҡыҫҡаһы, башҡорт халҡы тарихының, тормош-көнкүрешенең һәм рухи-мәҙәни донъяһының үҙенсәлекле яҡтарын киң сағылдырған *героик-романтик характерҙағы яңы **яҙма** әҫәр* ижад иткән. Быны Т. Беляевтың үҙ тәржемәһе тексында, үҙенең ҡулъяҙма әҫәр менән эш иткәнлегенә ишара яһап, «төп нөсхәлә яҙылған», «был урын төп нөсхәлә шиғыр менән тасуирланған», «ҡулъяҙма башҡорт повесы ошоноң менән тамам» ише аңлатма һүҙҙәр яҙғылап барыуы ла, «тәржемәне төп нөсхә кеүек эшләй алдыммы икән», тип борсолоп яҙыуы ла дәлилләп тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул ҡиссаны яҙған ҡурайсы хаҡында мәғлүмәт бирмәй.

**Әҫәрҙең башҡа халыҡтарҙағы варианттары**

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» төрки телле халыҡтарҙың күптәре араһында киң таралған эпик әҫәр булыуы менән характерлы. Башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙә уның 40-ҡа яҡын варианты яҙып алынған. Был сюжеттың башҡа туғандаш халыҡтарҙың (ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, алтай, уйғыр, Бараба татарҙары һ. б.) ижад ерлегендә лә урын алыуы билдәле. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының Тимофей Беляев руссаға тәржемә итеп донъяға сығарған версияһы иң тәүге баҫма һанала. Был хикәйәттең ҡаҙаҡса версияһы 1870 йылда «Козу Корпеш» исемендә академик В. В. Радлов тарафынан баҫтырыла. 1833 йылда Ырымбур крайына сәйәхәтендә

А. С. Пушкиндың был әҫәр менән ныҡлап ҡыҙыҡһыныуы, ҡыҫҡаса вариантын үҙ яҙмаларына теркәүе, китабының берәй данаһын ҡулына төшөрөү тураһында хыялланыуы билдәле. Уның хаҡында академик В. Радловтан башҡа П. Кудряшев, В. Даль, И. Березин, И. Ильминский һәм башҡа ғалим-әҙиптәр үҙ фекерҙәрен әйтә. Мәҫәлән, XIX быуатта уҡ Л. Потанин уны ер йөҙөндәге иң ҡиммәтле *әҙәби ҡомартҡы* тип иҫәпләһә, совет осоро ғалимы Л. Климович башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, Башҡортостан тәбиғәтен сағыу яҡтыртҡан *«тәүге художестволы әҫәрҙәрҙең береһе»* тип билдәләй.

Эпостың алда әйтелгән халыҡтарҙың йәнле теленән төрлө осорҙа яҙып алынған варианттары менән башҡорт версияһы араһында дөйөм һәм оҡшаш күренештәр ҙә, айырмалыҡтар ҙа бар.

Әҫәрҙең төрлө версиялары өсөн дә уртаҡ булған күренеште ҡарап үтәйек. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың тыуғас та, хатта тыумаҫ борон уҡ (ҡаҙаҡ варианттарында) аталары тарафынан алдан никахландырып ҡуйыу ваҡиғаһынан башланып китеүе бер үк төрлө. Шулай уҡ, Ҡарабай үлгәндән һуң, Сарыбайҙың үҙ вәғәҙәһендә тормай, ҡыҙын икенсе кешегә бирергә йыйыныуы башҡа версияларҙа ла урын ала. Ә бына хикәйәттең тамамланыуында айырма бар. Ҡаҙаҡ версиялары Ҡуҙыйкүрпәстең үлтерелеүе, ә уның артынса ырыу йолаларына баш эймәҫ ғорур Маянһылыуҙың үҙен үҙе һәләк итеүе менән тамамлана. Бындай тамамланыш хикәйәттең ҡайһы бер башҡорт варианттарында ла күҙәтелә. Башҡорт ҡурайсыһы тыуҙырған Беляев баҫмаһындағы версияла иһә Ҡуҙыйкүрпәс һәр төрлө ҡаршылыҡтарҙы ҡыйыулыҡ һәм сабырлыҡ менән еңеп сығып, үҙ маҡсатына ирешә – Маянһылыу менән бергә була.

**Ҡиссаның сюжеты, идея-тематик йөкмәткеһе**

Әҫәрҙең сюжеты шунан ғибәрәт: Иртыш йылғаһы башланған ерҙә, ырыуҙаштарын үҙ тирәһенә туплап, ишле мал аҫрап, һунарға йөрөп, Ҡарабай тигән абруйлы башҡорт батыры йәшәгән. Берҙән-бер көндө ул һунарҙа бығаса был тирәлә күренмәгән ҡот осҡос арыҫланды үлтерә, даны башҡорт, ҡаҙаҡ ырыуҙары араһында тарала. Яҡын дуҫы булып киткән ҡаҙаҡ батыры Сарыбайҙы ул бер һунарҙа юлбарыҫ теше-тырнағынан алып ҡалғас, Сарыбай яңы тыуған ҡыҙы Маянһылыуҙы уның берҙән-бер улы Ҡуҙыйкүрпәскә кәләш итеп бирергә ант итә. Әммә ул, Ҡарабайҙың улы Ҡуҙыйкүрпәс менән бергә ырыуҙаштарының мал-тыуарына зыян килтергән, мосолмандарҙы күрә алмаған ағалы-энеле дейеүҙәрҙе үлтереүен, үҙе лә шунда йән биреүен ишетеү менән, дуҫына биргән вәғәҙәһенә хыянат итә: ҡыҙын хан улы Айҡараға бирергә килешә, әҙ яҙҙырыу ниәте менән хатта хан менән һүҙ ҡуйышҡан урынға –

Амударъя тамағы тирәһенә күсенеп китә. Ҡуҙыйкүрпәскә йәрәшелеп тә, бер тапҡыр ҙа күрмәгән Маянһылыуҙы шәфҡәтле әүлиә ҡарттың кәңәшен, Мәскәй әбейҙең: «Мөхәммәттең ярҙамына таян. *Намыҫлы бул, дөрөҫ уйла, гәҙел эшлә,* шул ваҡытта ғына бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңеп, үҙеңә әйттерелгән Маянһылыуыңды алырһың. *Ғәҙеллек һәр ваҡыт яуызлыҡты еңә*», – тип әйткән юл теләктәрен теүәл үтәүе арҡаһында, әллә күпме мажаралар аша үтеп булһа ла, табырға яҙа. Үҙенең ҡыйыулығы, гәҙел, намыҫлы эш-ҡылығы менән ул яман холоҡло, таш йөрәкле Сарыбайҙың да, уның улы Барлыбайҙың да, кейәүе булырға тейешле хандың да ихтирамын яулай, уларҙың фатихаһын алып, һөйгәне Маянһылыу менән ҡауыша.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың башҡорт ҡурайсыһы яҙған версияһында ырыу-ҡәбиләләрҙе дуҫлаштырыу, берләштереү идеяһы баштан аҙаҡҡаса ярылып ята. Башта был идея башҡорт батыры Ҡарабайҙың бөтә эш-ҡылыҡтары йөҙөндә яҡтыртылһа, артабан ырыуҙа уны алмаштырған улы көрәшендә һәм эштәрендә сағылыш таба. Ҡуҙыйкүрпәстең бөтә эше ырыуҙарҙы берләштереү, дуҫлыҡты, берҙәмлекте тарҡатыуға юл ҡуймау маҡсатына йүнәлдерелгән. Унда халыҡ хыял иткән батырлыҡ, халыҡ күрергә теләгән яҡшылыҡ, ғәҙеллек, халыҡ һоҡланған матурлыҡ сифаттары тупланған.

Намыҫлылыҡ, ғәҙеллек, ярҙамсыллыҡ, батырлыҡтың һәр ваҡыт яуызлыҡты еңеүе лә әҫәрҙең идея йөкмәткеһен асыуҙа билдәле урын тота. Ҡуҙыйкүрпәс ошо сифаттары менән Маянһылыуға булған саф мөхәббәтенә лә тоғро булып ҡала. Теләһә ниндәй ҡаршылыҡтар ҙа, яуыз көстәр ҙә Ҡуҙыйкүрпәсте Маянһылыуға булған саф мөхәббәтенән сигендерә алмай. Батыр ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыға, уның хыялы тантана итә. Бында тормошто һөйөү һәм уны раҫлау идеяһы ла сағыла.

Эпостың башҡорт ҡурайсыһы тарафынан тыуҙырылған версияһында ырыуҙар берекмәһенең артабанғы яҙмышы хаҡында бик мөһим эпизод бар. Унда халыҡтың алға, киләсәккә, етеш һәм имен тормошҡа ынтылыу идеяһы асыҡ сағылыш тапҡан. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың улдары, ейәндәре киләсәктә бер халыҡ булып ойошасаҡ ете башҡорт ырыуының башында тороусылар итеп хыял ителә: «Был – һинең буласаҡ ҡатының Маянһылыуҙан тыуасаҡ Барлыбай батыр, – тип аңлата Мәскәй ҡарсыҡ, Ҡуҙыйкүрпәскә серле таҡтанан уның ҡан-ҡәрҙәштәренең берҙәмлектә үтәсәк матур киләсәген күрһәтеп. – Ул, атаһы менән олатаһына оҡшап, шундай уҡ олпат ир буласаҡ. Уның артында баҫып торған тимер күлдәкле ете улыңа ҡара, улар: Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Бошман, Ҡара-Ҡыпсаҡ, Түңгәүер тип аталырҙар. Уларҙан башҡорттарҙың ете ырыуы барлыҡҡа килер, ул ырыуҙарҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәренең ана

шул башлыҡтары исеме менән йөрөтөләр. Ҡара, ана, уларҙың ырыуҙары ҡайһылай ишәйгән».

Башҡорт ырыуҙарының «яҡшы хан» хаҡындағы хыялы Айҡараның атаһы образы аша ла бирелә. Аҡһаҡал хандың изгелекле, йомарт, ғәҙел, яҡшыны ямандан айыра һәм уны юғары баһалай белә торған сифаттары, Ҡуҙыйкүрпәстең уға оло хөрмәт менән ҡарауы әҫәрҙә айырыуса бер йылылыҡ менән тасуирланған. Баҫҡынсылар менән бәрелештә яраланған хандың ярҙамһыҙ ятҡанын күргәс, Ҡуҙыйкүрпәстең күңелендә ҡайнар йәш эркелә. Ул тиҙ генә яралағы ҡатҡан ҡанды йыуып, шифалы үлән ябып, уны үҙ янында булған иң ҡәҙерле нәмә – Маянһылыу йәшереп бүләк иткән ҡулъяулыҡ менән бәйләй һалып ҡуя. «Ятҡан кеше өсөн ҡәҙерле нәмә лә йәл түгел... Маянһылыу ҙа, хан да икеһе ике яҡтан уның йөрәген ҡаратҡан», – тиелә әҫәрҙә был турала.

Аҡһаҡал хандың рәхмәт һүҙендә, ҡарун һәм тәкәббер Сарыбайҙың, ниһайәт, килеп Ҡуҙыйкүрпәстең ҡыйыу батыр булыуын таныуында, Маянһылыуҙы уға бирергә ризалыҡ биреүендә, асылда, халыҡтың ил-ҡор берҙәмлеге өсөн көрәшеүсе батырға ҡарата мөнәсәбәте, баһаһы сағыла. Тап Ҡуҙыйкүрпәс кеүек кешеләрҙең ҡыйыулығы, тырышлығы, ғәҙеллеге арҡаһында ырыу батырҙары мәңгегә дуҫлашып китә, ырыуҙар берлегенә ныҡлы нигеҙ һалына. Ҡисса батырлыҡты данлау идеяһы менән көслө лә. Унда батырҙың ҡылған эше – илбаҫарлыҡ менән дан алыу, ил-ҡорҙо талап мал йыйыу түгел, ә халыҡҡа тоғро хеҙмәт итеү, изгелек күрһәтеү, еңеллек килтереү, тигән фекер ҡыҙыл еп булып үтә. Биш йөҙ йыл ғүмер иткән Мәскәй ҡарсыҡ та Ҡарабай менән Ҡуҙыйкүрпәстең ҡылған эштәренә, ҡаһарманлығына таң ҡала: «Килер быуын, һеҙҙең икегеҙҙе лә уҙаманға һанап, данығыҙҙы оҙаҡ йылдарға һаҡлар. Ҡурайсылар һеҙҙең маҡтаулы эшегеҙҙе йырлап-көйләп ырыуҙан ырыуға еткерерҙәр, халыҡ уларҙы ярыштыра-ярыштыра шатланып тыңлар. Аҡһаҡалдарҙың һеҙҙең хаҡта һөкланып һөйләгән һүҙҙәре һис ваҡытта тынмаҫ... Нәҫелдән нәҫелгә ҡалырлыҡ яҡшылыҡ менән уҙғарылған ғүмер бына шулай була ул, улым».

**Әҫәрҙә ата-бабаларыбыҙҙың ижтимағи-эстетик идеалы сағылышы**

Ҡиссала һүрәтләнгән ыңғай геройҙар йөҙөндә, айырыуса Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙа, әле бер бөтөн халыҡ булып ойошмаған ырыу кешеләренең тоғро ҡаһарманлыҡ тураһындағы идеалы менән бергә ижтимағи-эстетик ҡарашы ла сағылған. Уның йөкмәткеһен уларҙың мул, имен, күркәм тормош, гүзәл һәм саф мөхәббәт, оло батырлыҡ хаҡындағы уй-ҡараштары, матур йәшәү хаҡындағы хыялдары тәшкил итә. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың аңынса, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу тап шундай матур

тормошта, кешеләр һәм ырыуҙар араһында дуҫлыҡ тантана иткән шарттарҙа бәхетле йәшәүгә ирешәләр. Ырыуҙар татыулығы, дуҫлығы проблемаһы ла ул заман кешеләренең ана шул ижтимағи камиллыҡҡа, гүзәллеккә ынтылыштарына һәм хыялдарына бәйле рәүештә сағылдырыла.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу – үҙ заманы өсөн кешеләргә бөтә яҡлап үрнәк булырлыҡ идеаль заттар. Уларҙың үҙҙәре лә, уй-тойғолары ла гүзәл һәм һоҡланғыс. Бар эштәре, ынтылыштары һәм маҡсаттары мөхәббәттә тоғролоҡ һаҡлау, тормошта ғәҙеллек һәм хаҡлыҡ булдырыу, көрәштә батырлыҡ күрһәтеү менән бәйле. Әҫәрҙә Ҡуҙыйкүрпәс, батырлыҡтан тыш, халыҡтың ғәҙеллек, ысын дуҫлыҡ һәм саф мөхәббәт тураһындағы идеалын йөрөткән герой булараҡ һынландырыла. Ул ата-әсәһе, дуҫиштәре, ырыуҙаштары алдындағы бурыс тойғоһона, мөхәббәтенә тоғро була белгән аҡыллы, ғәҙел, намыҫлы, саф күңелле, ҡыйыу йөрәкле, маҡсатҡа ынтылышлы егет булыуы менән күңелде арбай. Ә бына Маянһылыу торғаны бер гүзәллек, камиллыҡ өлгөһө булыуы менән һоҡландыра. Эш башы уның матур йөҙлө, гүзәл һынлы булыуында ғына түгел, ә саф күңелле, сабыр холоҡло, нескә хисле, итәғәтле, кешелекле, аҡыллы зат булыуында. Ҡурайсы сәсән геройҙарының был сифаттарын эске бер ғорурлыҡ, һоҡланыу тойғоһо менән кинәнеп китеп, ентекләп тасуирлай. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу – әхлаҡи камиллыҡтың, ҡаһарманлыҡтың, мөхәббәттең илаһи бөйөклөгөн һәм гүзәллеген символлаштырыусы идеаль геройҙар ул. Уларҙың матур, яҡты образдарына һоҡланмау бөгөн дә мөмкин түгел.

**Әҫәрҙең жанры, композицияһы, художество үҙенсәлектәре**

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың жанр-стиль тәбиғәте бер генә юҫыҡлы түгел. Унда халыҡ ауыҙ-тел ижадының ҡобайыр, әкиәт, мажаралы хикәйәт, хатта көләмәс жанрҙарына хас үҙенсәлектәре, хикәйәләү стилдәре синтезлашып китә. Идея-тематик йөкмәткеһе, художестволы эшләнеше, композицион-структур төҙөлөшө йәһәтенән уны дастанға яҡын торған ***ҡисса*** (ғәрәпсә – *ваҡиға, хикәйә*) жанрына, йәғни мөхәббәт темаһына ғына арналмаған, тарихи-героик йөкмәткеле, бер нисә герой яҙмышын үҙ эсенә алған, ярайһы ҡатмарлы мажаралы, сюжетлы сәсмә йә теҙмә формалағы эпик әҫәрҙәр рәтенә индерергә мөмкин.

Әҫәрҙә сәсмә текст йыш ҡына, халыҡ эпостарындағы кеүек, ҡобайыр шиғыры менән аралашып килә, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, йәшәү рәүешен сағылдырған ҡунаҡ ҡаршылау, аш-һыу әҙерләү, ат сабыштырыу, ҡурай, йыр, көрәш, уҡ атыу, бау тартыу ярыштарын үткәреү, һунарға йөрөү һәм башҡа этнографик күренештәр ентекле тасуирлана, мәрхүмде ерләү,

уны иҫкә алыу йолаларын яҡтыртыуға ҙур иғтибар бүленә. Икенсе яҡтан, унда шәжәрә, тәуарих жанрҙарына хас элементтар, башҡорттарҙың тарихына бәйле күренештәр, ислам диненең тәьҫире арҡаһында килеп ингән эпизодтар шаҡтай урын ала. Автор эпоста һүрәтләнгән XI–XIII быуаттарҙағы ваҡиғаларға ҡарата мөнәсәбәттә «киләсәк» булып торған, үҙе йәшәгән һәм унан алдағы замандың ҡайһы бер мөһим тарихи ваҡиғаларын килтереп ялғай, осорҙар һәм быуындар араһына «күпер» һала. «Ҡурайсының бүләге» («Приношение курайчи») тигән шиғри арнауҙан башланып киткән бөгөнгөнән үткәнгә һәм, киреһенсә, үткәндән киләсәккә күҙ ташлау рәүешендәге халыҡ эпостарына хас булмаған был оригиналь композицион сара – *композицион эллипс* ярҙамында ул әҫәрҙең төп идея йөкмәткеһен билдәләүсе ырыу-ҡәбиләләр, халыҡтар дуҫлығы өсөн көрәш, киләсәккә, етеш һәм имен тормошҡа ынтылыу, ғәҙел хакимдарҙы данлау, батырлыҡты, ғәҙеллекте, кешелеклелекте һәм ярҙамсыллыҡты хөрмәтләү идеяларын тағы ла сағыуыраҡ яҡтыртыуға өлгәшә. Әҫәрҙең финалы ла, башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтары араһында йөрөгән версияларҙан айырмалы рәүештә, оптимистик рухта, халыҡтың батырлыҡ, намыҫлылыҡ һәм ысын мөхәббәт хаҡындағы идеалын кәүҙәләндергән геройҙарҙың – Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың бәхетле ҡауышыуын һүрәтләү менән тамамлана. Төп геройҙың мөхәббәте, бәхетле тормош өсөн көрәше, бөтә эш-ҡылыҡтары халыҡтың әхлаҡи-этик ҡарашының иң юғары талаптарынан сығып баһалана. Үҙендең бәхетең өсөн генә түгел, ә халыҡ, ил именлеге өсөн дә йәнеңде аямау, батырлыҡ, ғәҙеллек, намыҫлылыҡ, баҫалҡылыҡ, кешелеклелек, хис-тойғолар сафлығы – бына улар әҫәрҙә үҙәккә ҡуйылған, төрлө эпизодтарҙа, образ-деталдәрҙә, геройҙарҙың эш-ҡылыҡтарында бер туҡтауһыҙ баҫым яһап яҡтыртылған кешеләрҙең ысын йөҙөн күрһәтер иң юғары әхлаҡи сифаттар.

Әҫәрҙә ҡурайсы-сәсәндең мәҙрәсә аша үткән, дин тәьҫирен кисергән, дини-авантюр әҙәбиәттән хәбәрҙар кеше булғанлығы ла, шуның әҫәр йөкмәткеһенә, тел-стиль үҙенсәлектәренә йоғонто яһағанлығы ла һиҙелә. Күп кенә осраҡта әҫәр геройҙары фәҡәт Ҡөрьән өйрәтмәләренә, Мөхәммәт пәйғәмбәр тәғлимәттәренә таянып эш иткән изге әүлиә ҡарттың кәңәше һәм ярҙамы менән үҙ маҡсаттарына өлгәшә.

Дини шауҡымдың эҙе бигерәк тә Мәскәй образының бирелешендә күренә. Ул үҙенең бөтә эштәрен Алланың, уның ерҙәге илсеһе олуғ пәйғәмбәр Мөхәммәттең ҡушыуы буйынса башҡара. Мосолман мифологияһында, ғәҙәттә, яуыз сихырсы ролендә йөрөгән Мәскәй шул уҡ ваҡытта ҡурайсы-сәсән әҫәрендә «үҙ белемен изгелеккә файҙаланыусы» яғымлы, шәфҡәтле һәм аҡыллы әбей итеп һынландырыла. Ул башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең

берҙәмлеге идеяһын яҡлай, уларҙың үҙ иректәре менән Рус дәүләтенә ҡушылыуын хуплай, Ҡарабай һәм уның улы Ҡуҙыйкүрпәс кеүек халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәшеүсе оло йөрәкле, киң күңелле кешеләрҙе данлай һәм, киреһенсә, эскерле, шәфҡәтһеҙ, ялған дан менән ҡуҡрайып йөрөүсе, барымтаны кәсепкә әйләндереүсе бәндәләрҙе шелтәләй. Халыҡтың азатлыҡ хәрәкәтен баһалауҙа Мәскәй кинәттән әҫәрҙең дөйөм рухына яуап бирмәгән монархистик позицияға күсеп китһә лә, башҡорт «балаларын башлап йөрөүсе» Ҡараһаҡал, Аҡай, Килмәк, Батырша һәм, батша хөкүмәтенең ҡәтғи тыйыуы сәбәпле исемен әйтмәһә лә, Салауатты аҡыллы, булдыҡлы, ҡурҡыу белмәҫ батырҙар тип нарыҡлай. Ҡурайсы сәсәндең симпатияһы «аҡылдары, батырлыҡтары менән айырылып торған» ошо ил ағалары яғында.

Ғөмүмән, ҡурайсы-сәсән ҡиссаһында, халыҡ араһында таралған сюжеттарҙан айырмалы рәүештә, геройҙарҙы индивидуаллэштереп ҡылыҡһырлауға, уларҙың портреттарын тасуирлауға, эске донъяларын яҡтыртыуға ярайһы иғтибар ителә. Улар ҡыуаналар, дәртләнәләр, нәфрәтләнәләр, ярһыйҙар, икеләнәләр, көйөнәләр, һағышланалар. Ихтирамлы һәм иғтибарлы күңел кисерештәре, икеләнеүҙәр, уйланыуҙар һәм һағышланыуҙар ата һәм ул, әсә һәм ул мөнәсәбәттәрен һүрәтләгән урындарҙа нескә сағылыш тапһа, кешеләр араһындағы ҡаршылыҡлы мөнәсәбәттәр, тормоштоң һәм тәбиғәттең ҡапылда аңлап булмаҫ сәйер күренештәре хаҡында фәлсәфәүи уйҙарға бирелеү, ҡомһоҙлоҡҡа, тәкәбберлеккә, хыянатҡа, алдашыуға нәфрәтләнеп, хатта көлөп ҡарау Сарыбайҙың эш-ҡылыҡтарына бәйле эпизодтарҙа киң яҡтыртыла.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ҡиссаһы Тыуған илебеҙ халыҡтарының эпик ҡомартҡылары араһында башҡорт халҡының элекке замандағы аңын, мәҙәниәтен, художестволы фекерләү оҫталығын сағыу күрһәткән юғары кимәлдәге гүзәл ижад емеше булып тора.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәтенең ҡисса итеп яҙылыу һәм донъя күреү тарихы, башҡа халыҡтарҙағы версиялары хаҡында һөйләгеҙ. Уның сюжетында ҡайһы дәүер тормошо сағылдырылған? Уны һүрәтләүсе билдәләрҙе табығыҙ. 2. Әҫәрҙең идея-тематик даирәһен, төп идеяларын асыҡлағыҙ. 3. Хикәйәттә һүрәтләнгән образдарҙы ҡылыҡһырлағыҙ. Кешеләрҙең донъяны аңлауын, уларҙың ғәзеллек һәм батырлыҡ тураһындағы уйҙарын, изгелек һәм яуызлыҡ хаҡындағы ҡараштарын, ижтимағи-эстетик идеалын кәүҙәләндереүҙә әҫәрҙең ҡайһы геройы ниндәй роль уйнаған? 4. Ҡуҙыйкүрпәс менән

Маянһылыу һеҙгә нindәй яҡтары менән оҡшай? 5. Халыҡтың батырлыҡ, намыҫлылыҡ һәм ысын мөхәббәт хаҡындағы юғары идеалы кәүҙәләнешен һөйләп бирегеҙ. 6. Әҫәрҙең жанрын, композицион төҙөлөшөн, художество үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ.

## «ЗӨҺРӘ МЕНӘН АЛДАР»

**Жанры**

Башҡорт халыҡ эпосы сюжеттарын файҙаланып яҙылған киң билдәле иң ҙур проза әҫәрҙәренең береһе – «Зөһрә менән Алдар». Үҙенең ярайһы ғына ҡатмарлы сюжет һыҙығы, хәл-ваҡиғаларҙы киң генә тасуирлауы менән ул «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ҡиссаһынан бер ни тиклем айырылып тора. Унда төп сюжет һыҙығы ярҙамсы сюжет һыҙыҡтары менән тармаҡланып китә, төп сюжет эсендә эске сюжеттар барлыҡҡа килә. Хикәйәләү стиле лә деталләп һүрәтләү, киң тасуирлау рәүешен ала. Геройҙарҙы психологик планда һүрәтләү шаҡтай көслө. Композицияһы ла ҡатмарлы ғына. Ул 56 бүлексәгә бүленә. Әҙәби әҫәрҙәрҙәге кеүек, инеш һүҙе, бағышлауы бар. Уны руссаға ауҙарған тәржемәсе ауыр аңлайышлы һүҙҙәргә аңлатмалар бирә бара.

Әҫәр үҙ заманында донъя күрмәгән, ҡулъяҙма көйө ятып ҡалған. Ул бары XX быуаттың 60-сы йылдарында Санкт-Петербургтағы М. Салтыков-Щедрин исемендәге китапхананың һирәк осрай торған китаптар һәм ҡулъяҙмалар бүлегендә табыла. Уның тәүге битенә «Мои вечера. Сказки башкирские» тип яҙып ҡуйылған. «Мои вечера» – «минең кисәләрем» тигәне әҫәрҙең исемен аңлатһа ла, «сказки башкирские» тигәне уның жанрына тап килмәй. Әҫәрҙең «кисәләргә» (бүлексәләргә) бүленеше бик шартлы, һәр бүлексә мәғәнәүи йәһәттән тамамланған сюжет һыҙығын тәшкил итмәй. Бүлексәләр хәл-ваҡиғалар барышын, бер кистә күпме һөйләй алыуға ҡарап, «Мең дә бер кисә» тигән атаҡлы ғәрәп әкиәттәре серияһына оҡшатып бүленгән, ахырыһы. Әҫәрҙә әкиәт стиленә тартым урындар, һүрәтләү сара-алымдары, фантастика элементтары, әкиәт мотивтары осраштырғылап ҡуйһа ла, ул әкиәттәр йыйылмаһы түгел. Ул башҡорт халыҡ эпостарына яҡын ҡатмарлы сюжетлы һәм композициялы, хәл-ваҡиғаларҙы иркенләп хикәйәләгән, күренештәрҙе ентекле тасуирлаған *тарихи-этнографик характерҙағы* ***повесть-ҡиссаға*** тартым.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «Зөһрә менән Алдар»ҙың ҡулъяҙмаһы тулы килеш һаҡланмаған. Уның халыҡ араһында таралған варианттары юҡ. Ул, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» повесть-ҡиссаһы кеүек үк, руссанан башҡортсаға халыҡ шағиры Рәми

Ғарипов тарафынан ҡайтарылып, «Зөһрә менән Алдар» тигән баш аҫтында 1973 йылда «Башҡорт халыҡ ижады» томдарының эпосҡа арналған китабында тәү тапҡыр донъя күрә.

**Ике әҫәр араһындағы уртаҡ яҡтар**

«Башҡорт повесы» «Ҡуҙыйкүрпәс» менән «Зөһрә менән Алдар» ҡиссаһы араһында байтаҡ уртаҡ яҡтарҙы күрергә мөмкин. Уларҙың икеһе лә башҡорт халыҡ ижады сюжеттарына нигеҙләнеп ижад ителгән, әҙәбиләштерелгән яҙма әҫәрҙәр. Уларҙағы идея-тематик йөкмәтке, образдар системаһы, композицион төҙөлөш, һәрәтләү сара-алымдары уртаҡлығы күҙгә бәрелеп тора. Асылда улар бер-береһен тулыландырған ике үҙ аллы ҡиссанан торған *дилогияны* хасил итә. Ике әҫәр ҙә ырыу-ҡәбиләләр берҙәмлеге, халыҡтар дуҫлығы, мөхәббәт темаларын яҡтырта. Төп геройҙарҙы, ҡатын-ҡыҙ образдарын һүрәтләүҙә лә әллә ни айырма юҡ. Ҡуҙыйкүрпәс менән Ҡарабай ҙа, Зөһрә менән Алдар ҙа үҙ бәхеттәре, ҡан-ҡәрҙәштәренең яҡты яҙмышы өсөн сая көрәшеүсе, юғары әхлаҡлы геройҙар итеп бирелә. Ҡиссаларҙың сюжет һыҙығында ла уртаҡлыҡ бар: ҡаһармандар үҙҙәренең һөйгән ҡыҙын, буласаҡ кәләшен эҙләп юлға сығалар, оҙаҡ сәйәхәт ҡылалар, төрлө ҡаршылыҡтарға, мажараларға осрайҙар. Ниһайәт, табышалар, ҡауышалар. Ике әҫәрҙә лә төп геройҙарға оҡшаш, уларҙың яҡын ярҙамсылары, тоғро юлдаштары булған бүтән ҡаһармандар бар. Ике әҫәрҙең яҙыу стилендә лә, һүрәтләү алымдарында ла уртаҡлыҡтар, типә-тиң килеүҙәр күп. Шуға уларҙы бер кеше яҙғандыр тигән фараздар йәшәй. Ҡисса-повестарҙың авторы Тимофей Беляевтыр тигән ҡараштағы тороусылар ҙа бар.

**Авторлыҡ мәсьәләһе**

Ошонда урынлы һорау тыуа: әҫәрҙәрҙе ижад итеүсе булғас, нишләп Т. Беляев, «башҡорт повесы» «Ҡуҙыйкүрпәс»те баҫтырып сығарғанда, үҙен тәржемәсе итеп кенә күрһәтте, хатта «Тәржемәсенән» (бер ҙә «Авторҙан» тип түгел) тигән баш һүҙ яҙҙы икән? Шулай булғас, 1768 йылда Ырымбур губернаһы Ташлы ауылында тыуған, алпауыт Н. Тимашевтың йорт крепостнойы булып хеҙмәт иткән Тимофей Савельевич Беляев «бер башҡорт ҡурайсыһы тарафынан яҙылған» ҡисса-повесты хужаһының һорауы буйынса руссаға тәржемә итеп баҫтырып сығарыусы ғына булып сыға. Әҫәрҙең аҙағында биргән «Ҡушымта» өлөшөндә ул уның икенсе киҫәген тәржемә итә башлауы тураһында ла әйткән. «Зөһрә менән Алдар» ҡиссаһының шул тәржемә әҫәр булыуы бик мөмкин. Уның бер стилдә, бер манерала яҙылыуы шуны раҫлай. Был ҡиссаларҙағы ҡайһы бер мәғлүмәттәр ҙә уларҙың бер осорҙа бер үк кеше тарафынан ижад ителеүҙәре тураһында һөйләй. Русса тәржемә текстарының стиле лә, һүҙ байлығы ла, аңлатма өсөн алынған башҡорт һүҙҙәре лә, аңлатмаларҙың бирелеш манераһы

ла әҫәрҙәрҙең шулай уҡ бер үк кеше тарафынан тәржемәләнеүҙәрен иҫбатлай.

Әҫәрҙәрҙең икеһе лә рус түрәләренә бағышланған. «Ҡуҙыйкүрпәс» повесы Өфө провинциаль канцелярияһы прокуроры, алпауыт Николай Тимашевҡа арналған булһа, икенсеһе Ырымбур хәрби губернаторы Николай Бахметевҡа бағышланған. Т. Беляев тарафынан яҙылған был бағышлау һүҙендә, ниһайәт, башҡорт повестарын тыуҙырыусының исеме ике тапҡыр телгә алына: *Ҡонҡас* ҡурайсы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул уның тормош юлына, ижадына ҡағылышлы бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирмәй. «Ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерлем Николай Николаевич, яңғыҙлыҡ емештәре булған был «кисәләр»емде мин һиңә арнайым. *Ҡонҡас* та, мин дә һүҙ оҫтаһы түгел, шулай булғас, беҙҙән ни... көтмәк кәрәк», – тип үҙен дә, әҫәрҙең авторын да түрә алдында кесерәйтеберәк, түбәнерәк күрһәтеп яҙа тәржемәсе. Быға ул шиғыр юлдарын да өҫтәй:

Юҡ, ҡайлус та (һөйләүсе лә) үрмәй бында шәреҡ дастанын,
Юҡ, Шәһрәзада ла йоҡлатмай үҙ солтанын:
Тик хужаһы менән бер күңелдән яратҡас.
...Үҙен һөйгән башҡорт гәбен һиңә тип *Ҡонҡас*
Бүләк итә, – юҡтан һүҙ булһын өсөн түгел,
Ә уларға һинең киң булған өсөн күңел.

Бында «Мең дә бер кисә» ғәрәп әкиәттәренең төп геройы Шәһрәзада ла юҡҡа ғына телгә алынмай. Ҡиссаның авторы ла бит уны «Мең дә бер кисә»ләгесә кисәләргә бүлеп бирә. Был күренеш һәм ике әҫәрҙә лә легенда, әкиәт, шәжәрә, тәуарих кеүек жанрҙарға хас сара-алымдарҙың ҡулланылыуы, төрлө тарихи-документаль факттарҙың, тарихи шәхестәр исемдәренең телгә алыныуы, ә «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа инде йыш ҡына 11–11(12), 12–12(13) ижекле шиғри текстарҙың, ҡобайыр ҡалыбындағы поэтик юлдарҙың, йырҙарҙың килтерелеүе Ҡонҡастың Көнсығыш һәм урындағы һүҙ сәнғәтенән, тарихтан киң мәғлүмәтле ҙур ижадсы булыуы тураһында һөйләй.

**Сюжеты**

Ҡиссаның тарихи ерлеге урта быуаттарға барып тоташа. Унда башҡорттарҙың Болғар дәүләте заманындағы, XI–XIII быуаттарҙағы, тормош-көнкүреше һүрәтләнә. Быны Болғар иле сәйәхәтселәре менән бәйләнештәр, Болғар дәүләте тураһындағы мәғлүмәттәр үҙҙәре үк һөйләп тора. Унда ырыу-ҡәбиләләр берҙәмлеге, халыҡтар дуҫлығы идеяһы киңерәк планда яҡтыртыла. Был уның сюжетынан да асыҡ төҫмөрләнә.

Әҫәрҙең сюжет ептәре үҙенсәлекле *прологтан* башланып китә. Унда ете ырыу башҡорттары араһында хөкөм һөргән тәртиптәр, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, халыҡ педагогикаһы, хаким һәм халыҡ, ата һәм ул мөнәсәбәттәре хаҡындағы ташҡа яҙылмаған

ҡанундар бәйәнләнә. Артабан автор ҡартайған көнөндә ҡатыны, өс улы үлеп, япа-яңғыҙ ҡалған Аллабирҙе атлы арҙаҡлы батырҙың күргәндәрен, дуҫ-иштәренең яңы ғаилә ҡорорға өгөтләүҙәренә күнеп, дуҫы Йылҡыбай менән «йәше менән дә, эше менән дә» уға иш булырҙай, Ирәндек буйында йәшәгән «намыҫлы, ... күркәм холоҡло, уттай уңған тол ҡатын» Зөһрә йәйләүенә килеп етеүҙәрен хикәйәләргә тотона. Уҙамандар уға ниәттәрен әйткәс, ҡатын риҙалығын бирергә ашыға һалып бармай. Ашһыу табыны артында ғорур ғына ҡиәфәттә уларға үҙенең һәм ата-әсәһенең башынан кисергәндәре, йәйрәп ятҡан тау-урманлы һәм иркен далалы ерҙәрҙә йәшәгән ырыуҙаштарының тормошо хаҡында һөйләй. Һуңынан Аллабирҙенең ниндәйерәк уҙаман булыуын һынап ҡарау өсөн шартын да ҡуйырға була. Ошонда әҫәрҙең сюжет һыҙығы Зөһрәнең, уның ата-әсәһенең, яҡындарының, буласаҡ тормош иптәштәренең, дошмандарының яҙмыштарына бәйле рәүештә биш-алтыға тармаҡланып китә.

Ҡулъяҙманың беҙҙең көндәргә килеп еткән өлөшөндә төп сюжет һыҙығын урман башҡорттарының мәрҙәсе – һоҡланғыс батыры Зөһрә менән ялан башҡорттары батыры Алдарҙың ғаилә ҡороуҙарына һәм тормоштарына бәйле ваҡиғалар тәшкил итә. Үҙен һоратыусыларға ла, атаһына ла: «Уҡ атышта, көрәштә, аттан тартышта мине еңгән егет кенә ирем булыр», – тип шарт ҡуйған ҡыҙ үҙенең ҡөҙрәтле көскә эйә күрәҙәсе иленән имен-аман ҡайтыуы хөрмәтенә атаһы ойошторған йыйында Зөһрә ялан яҡтарынан уны эҙләп килеп сыҡҡан Алдар батырҙың алыштарҙа үҙе менән типә-тиң булыуын күрә һәм уға тормошҡа сығырға риза була. Төп сюжет һыҙығы йәш батырҙарҙың Алдар йәйләүенә ҡайтып етеүҙәре менән өҙөлә. Зөһрәнең Аллабирҙе менән уның дуҫы Йылҡыбайға һөйләгәндәренән генә йәштәрҙең бәхетле йәшәүе, улдары тыуыуы, ләкин тиҙҙән уның ғәйеп булыуы, Алдар батырҙың үлеүе, Зөһрәнең ун биш йыл яңғыҙ йәшәүе беленә. Ҡатындың: «Яҙмыштан уҙмыш юҡ... Хикәйәтемде һөйләп, һеҙ мин ҡушыр бер йомошто үтәгәс, Аллабирҙене ҡунаҡ тип тә атамам», – тип ысҡындырыуы, уларға «һабы фирүзә таштар менән биҙәлгән ҡылысын» күрһәтеүе, кереше ныҡ тартылғанмы-юҡмы икәнлеген тикшертеп ҡарау һылтауы менән әҙернә йәйәһен тотороуы был йомоштоң ниндәйерәк буласағы, уның үтәләсәге һәм тол батырбикәнең Аллабирҙегә кейәүгә сығасағы хаҡында һөйләй.

**Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе, төп геройҙары**

«Зөһрә менән Алдар»ҙың идея-тематик йөкмәткеһен тиң мөхәббәт, бәхетле ғаилә, ил-ҡор именлеге һәм берҙәмлеге өсөн көрәш мәсьәләләре тәшкил итә. Унда һүҙ Һаҡмарҙан алып Ағиҙел, Кама буйҙарына тиклемге киң территорияла йәшәгән башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең ғаилә

ҡороу ярҙамында туғанлашыуы һәм берләшеүе хаҡында бара. Ырыу-ҡәбиләләр берҙәмлеген нығытыу, халыҡтар дуҫлығын үҫтереү идеяһы уның бөтә сюжет һыҙыҡтары буйынса ҡыҙыл еп булып үтә. Төп геройҙың халыҡ мәнфәғәтен үҙенең шәхси мәнфәғәттәренән өҫтөн ҡуйып, Зөһрәне кәләше итергә уйлаған, ҡан көҫәгән Муйнаҡ бей менән ярашыуы эпизодының entekле һүрәтләнеүе әҫәрҙә мөхәббәт темаһының яҡтыртылышы фонында ырыу-ҡәбиләләр берҙәмлеге, халыҡтар һәм илдәр татыулығы идеяларының киң сағылыш табыуын, үҙәкләшеп китеүен асыҡ дәлилләй. Төп геройҙарҙың мөхәббәт тойғоларына бәйле сюжет һыҙығы, асылда, унда дуҫлыҡ, ил-ҡор именлеге өсөн көрәш темаларын яҡтыртыуҙың үҙенсәлекле ерлеге, әҙәби фоны ролен үтәй.

Зөһрә менән Алдарҙы халыҡ күрергә теләгән идеаль заттар тип атарға мөмкин. Был геройҙар йөҙөндә халыҡ үҙенең аҡыл ҡеүәһен, төп уй-ниәттәрен, хыялдарын, өмөттәрен сағылдырырға, батыр улдары һәм ҡыҙҙары ниндәй булырға тейешлеген күрһәтергә теләй. Шундай ҡыйыу, аҡыллы, ҙур йөрәкле ул-ҡыҙҙар ғына ырыу-ара берлектәрҙе нығытырға, туғанлыҡты көсәйтергә, бер тамырҙаш итергә мөмкин.

Алдар – батыр, сабыр, аҡыллы һәм намыҫлы, әҙәпле ир-егет. Уға, маҡтанырға хаҡы булһа ла, маһайыу, мин-минлек кеүек ҡылыҡтар бөтөнләй ят.

Зөһрә иһә үҙенең көс-ҡеүәте, батырлығы, өлгөлө холоҡ-ҡылығы, әҙәплелеге, инсафлылығы менән Алдарҙы ла уҙып китә. Уның йөҙөндә башҡорттарҙа боронғо замандарҙан уҡ, хатта уларҙың араһында ислам дине тарала башлағас та, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҙур хоҡуҡҡа һәм иреккә эйә булғанлығы, ил-ҡор, халыҡ яҙмышын хәл итеүҙә ир-егеттәр менән берҙәй ҡатнашҡанлығы күренә. Зөһрә боронғо амазонкаларҙан һис тә кәм түгел. Уның физик камиллығын, йөҙ-һын матурлығын эске матурлығы – күңел байлығы, аҡылы, изге уй-тойғолары биҙәй. Килмәгән ере, етешмәгән ҡылығы юҡ былдай матурҙарға һәм батырҙарға ни етә?! Ауыр замандарҙа, ҡырыҫ шарттарҙа улар үҙҙәрен дә яҡлай, халҡын да ҡурсалай алалар. Алдар батырҙай улдары, Зөһрә матурҙай ҡыҙҙары менән халҡы ла батыр һәм матур, бөйөк һәм һиммәтле булып танылалыр. Ошо изге уй-фекерҙәрен һәм хыялдарын үткәрә лә инде халыҡ шундай күркәм образдар аша. Улар, асылда, халыҡтың ил азаматы, ил-ҡор башлығы, ысын ҡатын-ҡыҙ, ил әсәһе хаҡындағы идеалын символлаштыра.

**Реаллек һәм фантастика**

Үҙенең йөкмәткеһе, тарихи ерлеге менән был ҡисса реаль нигеҙле. Унда башҡорт халҡының Болғар дәүләте осорондағы тормош-көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары тормоштағыса һүрәтләнә. Мәҫәлән, әҫәрҙә этнографик күренештәр бөгөнгө уҡыусы ла үҙен

шул осорҙағы бәйге-ярыштар, аш-һыу әҙерләү, ҡунаҡ һыйлау һәм башҡа байрам саралары эсендә ҡайнап йөрөгәндәй хис итерлек итеп, юғары художестволы маһирлыҡ менән реалистик планда йәнле һәм ентекле яҡтыртыла. Әҫәрҙә ырыу-ҡәбилә, халыҡ тарихын яҡтыртҡан шәжәрә, тәуарих кеүек жанрҙар традицияларының, конкрет тарихи факттарҙың сағылыш табыуы ла уның реаль ерлеген, милли-тарихи колоритын көсәйтә.

Шул уҡ ваҡытта боронғо замандарға хас мифик, фантастик ҡараштар ҙа был әҫәрҙә ярайһы сағыла. Әкиәттәрҙән, шул уҡ эпостарҙан, легендаларҙан килгән мифик заттар – ен-пәрейҙәр, дейеү-аждаһалар күренеп-күренеп ҡала, реаль физик көстәргә тылсымлы ҡеүәттәр килеп ялғана. Тормош күренештәре әкиәт образдары, әкиәт тылсымдары менән аралаша. Әүлиәләр, сихырсылар шулай уҡ әкиәт донъяһынан. Әммә нисек кенә булмаһын, тормоштағы төрлө ауырлыҡтарға һәм яуызлыҡтарға ҡаршы көрәштә ҡисса геройҙары бөтәһенән дә элек үҙҙәренең тәбиғи көстәре, таһыллыҡтары, тапҡырлыҡтары менән еңеп сыҡҡан ер улы, ер ҡыҙы булараҡ күҙ алдына баҫа. Мифик көстәргә, дин, тылсым эйәләренә килгәндә, улар әҫәрҙәрҙең төп идея-йөкмәткеһен асыуҙа ярҙамсы функцияны ғына үтәйҙәр. Улар реаль тормоштағы изгелек менән яуызлыҡтың үлемесле алышын киҫкенерәк һәм тәьҫирлерәк яҡтыртыуға, тылсым ярҙамында хәл-ваҡиғалар ағышын тиҙләтеүгә, төп геройҙарҙың ҡаһармանлыҡ сифаттарын, яҡшылыҡ һәм ғәҙеллек, берҙәмлек һәм именлек өсөн көрәштәре бөйөклөгөн һәм, әлбиттә, халыҡтың батырлыҡ һәм матурлыҡ хаҡындағы идеалын сағыуыраҡ һүрәтләүгә булышлыҡ итәләр.

**Художестволы үҙенсәлектәре**

«Зөһрә менән Алдар» эпик киңлеге, композиция, сюжет ҡатмарлылығы, күп геройлылығы, һүрәтләү сара-алымдарының байлығы менән иғтибарҙы биләй. Хикәйәләү йыш ҡына лирик йәки тарихи экскурстар, иркенләп алып барылған әңгәмәләр, диалогтар, күренештәрҙе ентекле тасуирлауҙар менән сиратлаша. Тәбиғи сюжет ағышына мажаралы, тылсымлы әкиәт элементтары, фантастик тамашалар килеп инә. Былар халыҡ романына тартым ҡисса-повестың стиль төрлөлөгөн, төрлө тасуири саралар байлығын, поэтикаһының эпик сифаттарын билдәләй, уның яҙма әҙәбиәткә хас һыҙаттарын таныта.

Әҫәрҙә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡуйылған геройҙарҙы индивидуалләштереп һүрәтләүгә, уларға портрет ҡына түгел, психологик характеристика биреүгә ярайһы иғтибар ителә. Улар уйланалар, нәфрәтләнәләр, шомланалар, икеләнәләр, көйөнәләр, мөхәббәт тойғоларын төрлөсә белдерәләр.

Һәр төркөмдө ҡылыҡһырлауҙа автор үҙ һүрәтләү манераһын, үҙ стилен тапҡан. Ыңғай геройҙар хаҡында ул рухланып-

дәртләнеп китеп, күтәренке стилдә ниндәйҙер бер ғорурлыҡ тойғоһо менән кинәнеп һөйләй, уларҙы сағыу буяуҙар менән һүрәтләй. Бындай осраҡта геройҙар әҫәргә оптимистик рух, героик-романтик аһәң бирә. Ә бына ҡара буяуҙар, гротеск, литота, гипербола, аллегория ише саралар ярҙамында һүрәтләнгән кире геройҙар, дейеү-пәрейҙәр, йыртҡыс хайуандар донъяһы уҡыусыла шомланыу, ытырғаныу, кире ҡағыу тойғоһо уята, әҫәрҙәрҙә бер төрлө хәүефле, көсөргәнешле драматик атмосфера барлыҡҡа килтерә.

Ваҡиғаларҙың бер ҡаһармандың, күберәген Зөһрәнең, үҙ башынан үткәндәрен һөйләүе рәүешендә яҡтыртылыуы ҡиссала хикәйәләү, халыҡса матур итеп һөйләү стилен көсәйтә. Унда һүҙ оҫталарының әкиәтен дә, хикәйәтен дә ниндәй матур, шыма, тәьҫирле һәм үтемле итеп һөйләгәнлеге ярылып ята. Шул йәһәттән ҡиссаның фольклор әҫәрҙәренә яҡынлығы һаҡлана.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Ни өсөн «Зөһрә менән Алдар» әҫәрен халыҡ романына тартым ҡисса-повесть тип атарға мөмкин? Шуның төп сифаттарын әйтеп бирегеҙ. 2. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» һәм «Зөһрә менән Алдар» ҡиссаларының уртаҡ яҡтарын атап сығығыҙ. Үҙегеҙ тағы ниндәй оҡшаш яҡтарын күрәһегеҙ? Был ике әҫәр фольклор әҫәрҙәренән ни яҡтары менән айырыла? 3. Әҫәрҙең авторы хаҡындағы фараздарҙы асыҡлағыҙ. Уларҙың ҡайһыһы дөрөҫлөккә тап килә тип уйлайһығыҙ? 4. Әҫәрҙә башҡорт халҡының ҡайһы замандағы тормошо һәм яҙмышы яҡтыртыла? Уның сюжетын һөйләп бирегеҙ. 5. Ҡиссаның идея-тематик даирәһен асыҡлағыҙ. Төп геройҙарға характеристика бирегеҙ. Һеҙгә уларҙың ҡайһыһы нығыраҡ оҡшай һәм ни өсөн? 6. «Зөһрә менән Алдар»ҙың художестволы үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ. Уны табып, тулыһынса уҡып сығығыҙ.

## «БУҘЙЕГЕТ»

XIX быуаттың тәүге яртыһында фольклор һәм яҙма әҙәбиәт традициялары синтезлашыуы ерлегендә барлыҡҡа килгән әҫәрҙәр араһында «Буҙйегет» тигән романтик рухлы күләмле дастан-поэма ***яҙма сығанаҡты*** *ауыҙ-тел ижады поэтикаһы юҫығында ижади эшкәртеү һөҙөмтәһендә тыуған әҫәр булыуы менән айырылыбыраҡ тора.*

**Жанры, яҙылыу тарихы**

Үҙенең композицион ҡоролошо, мажаралы сюжеты, ғибрәтле трагик йөкмәткеһе, образдарҙы һүрәтләү, уларҙың уй-тойғоларын сағылдырыу алымдары, тел-стиль үҙенсәлектәре менән «Буҙйегет» әҫәре Көнсығыш әҙәбиәтендә киң таралған ***дастан*** жанрына тарта. Ул ҡобайыр шиғырына ҡоролған әйтеш, һамаҡ, сеңләү, һыҡтау, «йәр-йәр» әйтеү, мөнәжәт жанрҙары формаларында

ижад ителгән. Унда мәҡәл һәм әйтемдәр, төп геройҙарҙы яҡтыртыуҙа эпос жанрына хас алымдар, хәл-ваҡиғаларҙы бәйәнләгән урындарҙа яҙма шиғриәттә таралған 11-әр һәм 12-шәр ижекле шиғыр ҡалыптары киң ҡулланылған.

Көнсығыш, шул иҫәптән башҡорт, татар әҙәбиәттәрендә киң таралған «Ҡисса-и Йософ» («Йософ вә Зөләйха»), «Хөсрәү вә Ширин», «Ләйлә вә Мәжнүн», «Таһир – Зөһрә» дастан-поэмалары традицияларында ижад ителгән дастан-поэманың авторы үҙе хаҡында мәғлүмәт ҡалдырмаған. Әҫәренең бары бер нисә урында «Ҡолсолоҡ ҡыл, Баһауи!», «Вай, бисара Баһауи», «Баһауиҙың башында ҡайһыһы бар, шуның өсөн был йырҙы табып алған» тип, исемен генә атап үтә. Сәсмә формала яҙылған инеш өлөштә ул әҫәрен 1842 йылда Өфөлә фарсы телендәге китапҡа нигеҙләнеп сәсмә ҡисса формаһында яҙыуы, аҙаҡ шәкерттәренең үтенесе буйынса көйләп уҡырлыҡ шиғри әҫәр итеп эшкәртеүе хаҡында әйтә. Дастан-поэма тиҙ арала башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, нуғай һәм башҡа төрки халыҡтары араһында популярлыҡ ҡаҙана. Был халыҡтарҙа уның ярым легенда, ярым әҙәби әҫәр рәүешендә йөрөгән варианттары барлыҡҡа килә. Революцияға тиклем уларҙың бер нисә баҫмаһы донъя күрә.

**Сюжеты**

«Буҙйегет»тең сюжеты урта быуаттарҙа Урал – Волга буйҙарында фарсы телендә йөрөгән «Мәжмәғ әл-хикәйәт» («Хикәйәттәр йыйынтығы») китабындағы төшөндә күреп ғашиҡ булған ҡыҙын дуҫы менән бергә эҙләргә сыҡҡан батша улының мажараларын һүрәтләгән унынсы хикәйәтенә бик яҡын.

«Буҙйегет» дастаны ла «ҡыҙ эҙләү», «бәхетле мөхәббәт һәм ғаилә өсөн көрәшеү» мотивтарына ҡоролған. Уның сюжеты, урта быуаттар дастандарындағы кеүек, традицион. Һәр сюжет һыҙығы, йәғни хәл-ваҡиғалар ағышы геройҙарҙың төш күреүҙәренән башлана. Хан улы Буҙйегет менән Рум батшаһының ҡыҙы Ҡарасәс дүрт йыл рәттән бер-береһен төштәрендә күреп, ғишыҡ утында яналар. Ниһайәт, егет дуҫы Кәмин менән төрлө мажаралар, михнәт-ҡаршылыҡтар аша үтеп, дүрт йыл тигәндә ҡыҙҙы килеп таба. Әммә батша ҡыҙын ете ят ерҙән килгән ниндәйҙер бер «һуҡбайға» бирергә теләмәй. Уны күрше батшаның «алтын-көмөш пулы (мөлкәте, байлығы)» күп булған Зәйтүн исемле улына йәрәшә, унан Буҙйегетте юҡ итеүен үтенә. Мөхәббәттең илаһи көсөнән, һөйгәне менән ҡауышыу уйынан илһамланған егет «ҡаты бауыр» батшаның тормошҡа ашырып булмаҫтай шарттарын үтәһә лә, хатта дуҫы ярҙамында уның һәм көндәше Зәйтүндең ҙур ғәскәрен ҡыйратһа ла, хаким үҙ һүҙендә ҡаты тора. Ҡарасәс һыҡтай-һыҡтай күпме ялбармаһын, уның әмере буйынса Буҙйегетте дарға аҫып үлтерәләр. Мөхәббәтенә тоғро ҡыҙ һөйгәненең рухына гүзәл төрбә – мавзолей һалдыра

һәм, унда бикләнеп, үҙенә хәнйәр ҡаҙай. Дуҫлыҡҡа тоғролоҡ һаҡлаған Кәмин дә төрбәлә үҙенә ҡул һала. Яуыз батша аҙаҡ Буҙйегеттең юғары ҡатламдан сыҡҡан кеше, буласаҡ хан икәнлеген белгәс, бик үкенә. Тик бер нисек тә төҙәтеп булмаҫлыҡ эштәр ҡылынған инде. Үткәнде кире ҡайтарып булмай шул.

**Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе, төп геройҙары**

Бына ошо рәүешле трагик пафос менән һуғарылған дастан-поэманың уҡыусыны үҙенә тартыу көсө уның мажаралы сюжетҡа ҡоролоуына ғына бәйле түгел. Мәсьәләнең төп асылы әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен тәшкил иткән саф мөхәббәт өсөн көрәштең феодаль йәмғиәттә хөкөм һөргән ғәҙелһеҙлектәр, иҫке йола-ҡанундар, кешеләрҙең хоҡуҡһыҙлығы һәм йәберләнеүе шарттарында барыуында. Яуызлыҡҡа, деспотлыҡҡа ҡаршы күтәрелгән, мөхәббәттәренә тоғро ҡалған ике йәштең үлеме ана шул феодаль тәртиптәргә, иҫке ҡанундарға ҡаршы киҫкен протестың бер сағылышы булып тора ла инде. Был бер булһа, икенсенән, геройҙарҙың үҙ тойғоларынан сигенмәй, ҡалыплашып бөткән иҫке ҡанун-тәртиптәр алдында баш эймәй был фани донъянан китеүе оло һәм саф мөхәббәттең теләһә ниндәй яуызлыҡтарҙан, хатта үлемдең үҙенән көслөрәк һәм юғарыраҡ рухи азатлыҡ сығанағы булыуын күрһәтә. Әҫәрҙә мөхәббәт темаһы кешенең ғүмере, йәшәү мәғәнәһе, әхлаҡ йөҙө, донъяның фанилығы, үлем хаҡындағы тәрән уйланыуҙар менән үрелеп китә. Уларға ата һәм ул, быуындар бәйләнеше проблемаһы килеп ҡушыла. Һөҙөмтәлә, мөхәббәт кешенең рухи донъяһы асылын, тормошто аңлауы кимәлен билдәләүсе төп бер күрһәткескә, әҫәр иһә әхлаҡи-этик һәм фәлсәфәүи поэтик трактатҡа әүерелеп киткәндәй була. Дастан-поэманың үҙенә ылыҡтырыу көсө, халыҡсанлығы тап ошо моменттар менән билдәләнә лә инде.

Әйтергә кәрәк, Баһауи яҙма әҙәбиәттәге ябай ғына традицион сюжетты яңы идеялар, әхлаҡи-этик фекерҙәр, халыҡ йолалары һәм педагогикаһы элементтары менән байытып, фольклор формаһына оҫта итеп һала алған. Әҫәрҙең төп геройы Буҙйегет күҙ алдына, эпос батырҙары кеүек үк, үҙ бәхете өсөн әүҙем көрәшеүсе көслө һәм аҡыллы, ҡыйыу һәм ғәҙел, намыҫлы һәм кешелексән кеше булып килеп баҫа. Был образ халыҡтың кеше бәхете, шәхес азатлығы өсөн тигеҙһеҙлеккә, яуызлыҡҡа һәм деспотлыҡҡа ҡаршы көрәш хаҡындағы уй-хыялын, идеалын сағылдыра. Ул мәкерле шаһтан, батша улы Зәйтүндән, уларҙың ҡуштандарынан һәм йөҙәрләгән яугирҙарынан физик яҡтан ғына түгел, рухи йәһәттән дә өҫтөн һәм көслө итеп һүрәтләнә.

Фольклорҙағыса эпик башланғыс Ҡарасәс образын тыуҙырыуҙа ла үҙен һиҙҙертә. Ул эске бер йылылыҡ менән һүрәтләнә, Буҙйегеткә ҡарағанда ла тәүәккәллерәк, көслө ихтыярлы, етеҙ

һәм әүҙем натура булараҡ күҙ алдына баҫтырыла. Ҡыйыу ҡыҙ бөтә халыҡ алдында атаһына – батша һынлы батшаға: «Кейәү ҡылған Зәйтүндең, һыртын алтын ҡылһаң да, эсен гәүһәр ҡылһаң да, ...башымды алһаң да, зинданға мең ай һалһаң да», – тип, үҙ мөхәббәтенән бер ҡасан да баш тартмаясағын еткерә, байлыҡ, дан-шөһрәт артынан ҡыуғаны, «таш бауыр» булғаны өсөн уға:

Ғаҡылһыҙға һүҙ әйтһәң,
Күкрәгенә ҡунмаҫтыр.
Рәхимһеҙгә һүҙ әйтһәң,
Ни әйтһәң дә булмаҫтыр, –

тип нәфрәтен белдерә, уны рәхимһеҙлектә, ҡанһыҙлыҡта, наҙанлыҡта ғәйепләй.

Ҡарасәс образы аша автор халыҡтың саф һәм бәхетле мөхәббәт, ҡатын-ҡыҙ азатлығы тураһындағы хыялын, хөкөм һөргән феодаль тәртиптәргә, реакцион йола-ҡанундарға, социаль тигеҙһеҙлектәргә, ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы протесын һәм, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ матурлығы хаҡындағы идеалын сағылдыра.

**Художество үҙенсәлектәре**

Тормош ҡаршылыҡтарына, халыҡҡа йөҙ тотоу, уның теләк-ынтылыштарын һәм уй-хыялын сағылдырырға ынтылыу дастан-поэманың халыҡсан йөкмәткеһен, художестволы эшләнешенең фольклорса ябайлығын билдәләй. Юҡҡа ғына Баһауи, ижади эҙләнеүҙәренең маҡсатын билдәләп, ошондай юлдарҙы яҙмаған:

Яҙҙым мин моңло күңелем асылһын тип,
Һәр ергә бер йыр-һүҙем сәселһен тип.
Донъяла төрлө-төрлө әҙәм булыр,
Ҡайғылы әҙәм күңеле баҫылһын тип.

Үҙенең төп миссияһын шулай халыҡтың аһ-зарын баҫыуҙа, күңелен күтәреүҙә күргән шағир-сәсән әҫәрендә геройҙарының кисерештәрен, уй-фекерҙәрен, күңел донъяһын яҡтыртыуға ныҡ иғтибар итә. Һөҙөмтәлә, улар күҙ алдына үҙҙәрен үҙҙәре психологик ҡылыҡһырлаған, күп яҡлап асып һалған образдар булараҡ килеп баҫа. Уларҙың үҙ-ара әйтештәренә, монолог-һамаҡтарына һәм һыҡтауҙарына, йырҙарына килеп ингән йөрәк түренән сыҡҡан ялҡынлы һүҙҙәре, уй-фекерҙәре, хис-тойғолары гаммаһы әҫәрҙе лиризм, эмоциональ биҙәктәр менән байыта, уға тормошсан ҡайнарлыҡ, фәлсәфәүи тәрәнлек, заманса яңғыраш һәм конкретлыҡ бирә, уның идея-проблематик, мәғәнәүи сиктәрен киңәйтә. Бында төп геройҙарҙан башҡа Буҙйегеттең дуҫы, әсәһе, Ҡарасәстең эхирәттәре һәм әҫәргә финал өлөштә килеп ингән аҡыл эйәһе, йырсы аҡһаҡал образдарының да роле шаҡтай ҙур. Уларҙың телмәренә афористик әйтемдәр, мәҡәлгә

тартым һөйләмдәр, тапҡыр йәнәшәлектәр һәм сағыштырыуҙар, тормошсан күҙәтеүҙәр һәм дөйөмләштереүҙәр хас. Бөтә был үҙенсәлектәр дастан-поэманың заманса яңғырашын, халыҡсан-демократик һулышын, сәнғәтсә тәьҫирлелеген көсәйтә.

XIX быуаттың тәүге яртыһында башҡорт әҙәбиәте донъяһында фольклор һәм яҙма әҙәбиәт традициялары синтезлашыуы ерлегендә барлыҡҡа килгән «Буҙйегет» дастан-поэмаһы, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар», «Кинйәкәй бәйете» кеүек әҫәрҙәр менән бер рәттән, әҙәбиәттең иҫкесә художество-эстетик фекерләүҙән, дини-мистик ҡараштар йоғонтоһонан арына барыуына, халыҡсан-демократик йүнәлештә үҫеүенә ярайһы йоғонто яһаны.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. «Буҙйегет» әҫәренең барлыҡҡа килеү тарихын, жанр тәбиғәтен асыҡлағыҙ. Ул ниндәй мотивтарға ҡоролған? 2. Дастан-поэманың сюжетын һөйләп бирегеҙ. Уның фажиғәле тамамланыуы нилектән тип уйлайһығыҙ? 3. Әҫәрҙә ниндәй тема һәм идеялар сағылыш таба? 4. Дастандың үҙенә ылыҡтырыр сифаты, халыҡсанлығы, демократик рухы нимәләрҙә күренә? 5. Төп геройҙарҙы ҡылыҡһырлағыҙ. Улар һеҙгә ниндәй яҡтары менән оҡшай? 6. Баһауи үҙенең ижад миссияһын нимәлә күргән? Поэманың художество үҙенсәлектәрен асыҡлағыҙ.

## XIX БЫУАТТЫҢ ИКЕНСЕ ЯРТЫҺЫНДА ИЖТИМАҒИ ТОРМОШ, МӘҘӘНИӘТ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ

XIX быуаттың икенсе яртыһында Рәсәйҙә иҫке феодаль мөнәсәбәттәр менән яңы капиталистик етештереү көстәре араһындағы ҡаршылыҡ киҫкенләште, 1861 йылда батшаның указы менән крәҫтиәндәргә дворяндарҙың ҡоло һымаҡ ҡараған крепостной тәртиптәр юҡҡа сығарылды. Илдең ижтимағи-сәйәси тормошонда ҙур үҙгәрештәр, буржуаз реформалар башланды.

Был реформалар Башҡортостан шарттарында үҙенсәлекле төҫ алды. XIX быуаттың 50-се йылдары аҙағында башҡорттар әле хәрби казак хәлендә ине. Башҡортостандағы бындай хәрби-феодаль хәл Рәсәйҙәге яңы йүнәлешле ижтимағи шарттар менән ярашмай башлай. Хөкүмәт 60 йыл самаһы ғәскәри хәлдә йәшәгән башҡорттарҙы яңынан крәҫтиән тормошона күсереүҙе планлаштыра. 1863 йылдың 14 майында Александр II раҫлаған положение буйынса Башҡортостанда кантондар һаны тәүҙә 28-ҙән 11-гә ҡәҙәр ҡыҫҡартыла, ә ике йылдан һуң бөтөнләй бөтөрөлә, өйәҙҙәр генә ҡала һәм 808 ауыл, 130 олоҫ йәмғиәте төҙөлә.

Башҡортостанда идара итеүҙә кантондар системаһының бөтөрөлөүе, башҡорттарҙың хәрбиҙән граждանлыҡ хәленә күсерелеүе прогрессив күренеш ине. Был реформа бөтөн бер халыҡты үҙ ирке бөтөнләй булмаған һалдат хәлендә йәшәүҙән ҡотҡара, уға игенселек һәм башҡа кәсептәр менән ысынлап шөғөлләнергә, үҙ хужалығын хәлдән килгәнсә үҫтереүгә мөмкинлек бирә. Элек ситкә китеп йөрөү, дөйөм саралар, йыйындар уҙғарыу ҡәтғи тыйылған башҡорттарға завод-фабрикаларҙа, рудниктарҙа эшләргә, ҡалаларҙа йәшәргә, бергәләп традицион милли байрамдарын, йыйындарын уҙғарырға ирек ҡуйыла. Ә былар бөтәһе лә төбәктә капиталистик мөнәсәбәттәрҙе, халыҡтарҙың үҙ-ара аралашыуҙарын, мәҙәниәттәрен үҫтереү өсөн кәрәкле тәүге шарттар була.

Башҡортостанда капитализмдың үҫеше иң ауыр шарттарҙа крайҙы колонизациялау, халыҡты талау, уны тамам бөлдөрөү менән тормошҡа ашырыла барҙы. 1869 йылда ер тураһында яңы закон сыҡҡас, башҡорт ерҙәре быға саҡлы күрелмәгән масштабта талана. 70-се йылдар башынан быуат аҙағына тиклем урындағы халыҡтан 2,5 миллион дисәтинәгә яҡын ер тартып алына, 3 миллиондан артығы ҡуртымға бирелә.

Был осор башҡорт мәҙәни-әҙәби тормошонда *халыҡсан-демократик* һәм *дини-мистик* йүнәлештәрҙең үҙ-ара бәрелеше бермә-бер көсәйә, аныҡ тенденциялар төҫөн ала бара. Бер яҡта – йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе ҡабул итмәгән, быуаттар һуҙымында ҡалыплашҡан тәртиптәрҙе, рухи тормош күренештәрен үҙгәрешһеҙ ҡалдырыуҙы яҡлаған *ҡәҙимселәр,* икенсе яҡта – тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә буржуаз яңылыҡтарҙы, европаса йәшәүҙе, рухи-мәҙәни үҫеште яҡлаған *йәдитселәр*. Реформалаштырыу позицияһында торған йәдитселәрҙең идеялары йәмғиәттең киң ҡатламында хуплау таба.

**Мәғарифтағы, мәҙәниәттәге үҫеш-үҙгәрештәр**

XIX быуаттың икенсе яртыһында үҙгәрештәр башҡорт мәғариф өлкәһендә киңерәк ҡолас ала. 1897 йылда Өфө губернаһы башҡорттары араһында грамоталылыҡ 18,3 процентҡа етә. Башҡорт ауылдарында күпләп яңы мәктәптәр һәм мәҙрәсәләр асыла. 1894 йылда Башҡортостанда уларҙың һаны 986-ға барып етә. 1900 йылға инде бер мәктәптәр генә лә 1200 булып китә. Крайҙы өйрәнеүсе С. Г. Рыбаков менән М. В. Лоссиевскийҙың билдәләп үтеүҙәренсә, XIX быуат аҙағына ҡарай мәктәп, мәҙрәсә булмаған бер генә башҡорт, татар ауылы ла ҡалмай. XIX быуат аҙағында башҡорт һәм татар ир балаларының 79 проценты, ҡыҙ балаларының 51 проценты төрлө кимәлдәге уҡыу йорттарында белем ала. Грамоталылыҡтың сифаты ла хәҙер уның тормош талаптарына яҡыная төшөүе менән айырыла. Бында йәдитселәр хәрәкәтенең әүҙемләшә

барыуы ҙур роль уйнай. Йәдитселәр шәкерттәрҙе уҡыу-яҙыуға бер йылда өйрәтергә мөмкинлек биргән өн методына нигеҙләнгән уҡытыу системаһы өсөн сығыш яһайҙар, өс-биш йылда саҡ уҡырға һәм яҙырға өйрәткән хәрефтәрҙе ҡушып уҡытыу алымын киҫкен тәнҡитләйҙәр. Һөҙөмтәлә, төбәктә схоластик уҡыу-уҡытыу һәм тәрбиә системаһының нигеҙе ныҡ ҡаҡшай. Мәҙрәсәләрҙә дингә бәйле предметтар менән бер рәттән донъяуи фәндәр, хатта рус теле һәм әҙәбиәте ныҡлап уҡытыла башлай. 90-сы йылдарҙа инде Ырымбурҙа «Хөсәйениә» (1896), Троицкиҙа «Рәсүлиә» (1896), Өфөлә «Ғосмания» (1897) исемле юғары типтағы йәдитсе мәҙрәсәләр асыла. Уларға башҡорт, татар ғына түгел, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һәм башҡа төрки халыҡтары вәкилдәре лә күпләп уҡырға килә. Беренсе рус революцияһы алдынан бер Өфө губернаһындағы ғына ла мәктәп, мәҙрәсәләрҙең 15 проценты яңы типтағы уҡыу йорттарына әүерелә.

XIX быуат урталарынан башлап крайҙа рус-башҡорт һәм рус мәктәптәре, рус кластары ла асыла башлай. Быуат аҙағына Өфө губернаһында 96 рус-башҡорт мәктәбе, мәҙрәсә һәм мәктәптәр эргәһендә 20 рус класы эшләгән була. Башҡорт йәмғиәтендәге рус теленә, мәҙәниәтенә иғтибарҙың артыуына үҙе шаһит булған күренекле рус ғалимы С. Г. Рыбаков тикмәгә генә: «Белергә тырышыу башҡорттарҙың бөтә йәштәгеләре өсөн дә хас сифат, ә йәштәрҙә ул бигерәк тә рус мәктәптәрендә уҡығанда күренә. Бына ошо сифат арҡаһында һәм тенденциоз сикләнгәнлек булмағанлыҡтан, улар рус мәҙәниәтен еңел һәм милли ҡурҡыуһыҙ үҙләштерәләр»[1], – тип яҙмаған. Башҡорт балаларының русса нисегерәк уҡыуы хаҡында шул замандың тарихсыһы Н. Казанцев та ошондай мәғлүмәт ҡалдырған: «Хәҙерге ваҡытта башҡорт балалары күп кенә ҡалаларҙа башланғыс мәктәптәрҙә генә түгел, бәлки юғары уҡыу йорттарында ла ҙур уңыш менән русса уҡыйҙар, һәм уларҙың күбеһе зирәклек, тырышлыҡ, яҡшы әхлаҡ яғынан башҡалар алдында беренсе булып тора»[2].

Әйтергә кәрәк, халыҡты ағартыуға, мәҙәни тормошон үҫтереүгә ҙур өлөш индереүселәрҙең күбеһе ана шул рус йәки рус-башҡорт мәктәптәрендә, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыған йәиһә уҡытҡан уҡымышлылар булды. Мәҫәлән, Ырымбурҙағы кадет корпусында белем алған Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев – күренекле мәғрифәтсе әҙип һәм ғалим-энциклопедист. Әбүбәкер Диваев үҙе хеҙмәт иткән Урта Азия яҡтарында танылыу алған ҙур ғалим, профессор дәрәжәһенә ирешә. Петербургтағы юғары хәрби училищены тамамлаған Әбелғәзиз

[1] *Рыбаков С.* Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта. – СПб., 1897. – 37-се бит.

[2] *Казанцев Н.* Описание башкирцев. – СПб., 1866. – 22–23-сө биттәр.

Дәүләтшин Рәсәй армияһы Баш штабында эшләгән генерал дәрәжәһенә күтәрелә. Ҡазан университетында белем алған Х. Солтанғолов, М. Ҡотлобаев, И. Рәжәпов, Ә. Әбделғәлләмовтар башҡорт йәштәре Рәсәй һәм сит ил халыҡтарының мәҙәни тормошонда ғына түгел, ижтимағи-сәйәси тормошонда ла әүҙем ҡатнаша. Уны тамамлаған Ә. Ҡыуатов мәғрифәтселек идеяларын алға һөргән «Башҡорт халҡының ярлыланыу сәбәптәре» (1867) тигән публицистик хеҙмәтен яҙа. М. Биишев университет студенттарының 1887 йылдың декабрендә В. И. Ульянов (Ленин) етәкләгән сходкаһында ҡатнаша, бының өсөн университеттан ҡыуыла.

Крайҙа халыҡ мәғарифының үҫеш-үҙгәреше китапханаларҙың һәм китап магазиндарының артыуы, китаптың ҡалаларға ғына түгел, мәктәп-мәҙрәсәле, рус-башҡорт мәктәпле йә рус класлы ауылдарға ла йылдам үтеп инеүе, рус телендә булһа ла ваҡытлы матбуғаттың йәнләнеүе («Уфимские губернские ведомости», «Оренбургские губернские ведомости», «Вестник Уфимского земства», «Оренбургская газета», «Оренбургский край») 60-сы йылдарҙан башлап төрлө ғилми һәм ведомство учреждениеларының (Өфө һәм Ырымбур губерна статистика комитеттарының, Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлегенең, Ырымбур физика-медицина йәмғиәтенең, Ырымбур ғилми архив комиссияһының һ. б.) матбуғат органдары барлыҡҡа килеүе менән оҙатыла. Уларҙың биттәрендә Башҡортостандың тәбиғи байлыҡтары, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы, башҡорттарҙың тарихы, матди һәм рухи мәҙәниәте, теле, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, медицинаһы һәм башҡалар тураһында әллә күпме материалдар донъя күрә. Улар башҡорт халҡының ижтимағи фекере, мәҙәниәте үҫеүенә, яңылыҡҡа ынтылышы көсәйеүенә, рус-башҡорт мәҙәни бәйләнештәренең нығына төшөүенә булышлыҡ итмәй ҡалмай. Башҡорт зыялылары әсә телендә, бик тә булмаһа, башҡорттарға яҡшы аңлайышлы татар телендә ваҡытлы матбуғат булдырыу, китаптар баҫтырыу мәсьәләһен күтәреп сыға башлай. Уны Рәсәй йәмәғәтселеге алдында башлап бөтә етдилегендә М. Өмөтбаев ҡуя. Ләкин уның идеялары, конкрет тәҡдимдәре, татар зыялылары Ҡ. Насыри, Ғ. Ильяси, Ш. Әхмәровтарҙың ошондай уҡ идеялары һәм проекттары кире ҡағылған кеүек, иғтибарһыҙ ҡалдырыла.

Рәсәйҙәге реформанан һуңғы осорҙа Башҡортостандың ижтимағи-мәҙәни тормошонда йәнә бер яңылыҡ күҙәтелә: театр һәм музыка сәнғәте бығаса булмағанса әүҙем үҫеш юлына баҫа. 60 – 90-сы йылдарҙа крайҙың төрлө ҡалаларында рус һәм башҡа халыҡ тамашасылары менән бергә башҡорттарға ла А. Н. Островскийҙың «Төшөмлө урын», «Урман», «Йәшен», «Бүреләр һәм һарыҡтар», А. П. Чеховтың «Ваня ағай», «Аҡсар-

лаҡ», Софоклдың «Антигона», Ф. Шиллерҙың «Юлбаҫарҙар», Д. Н. Фонвизиндың «Белемһеҙ йәш кеше» («Недоросль»), М. Ю. Лермонтовтың «Маскарад», А. С. Грибоедовтың «Аҡыллылыҡ бәләһе» («Горе от ума»), Ж. Мольерҙың «Тартюф», В. Шекспирҙың «Отелло», «Гамлет», «Король Лир», И. С. Тургеневтың «Буйҙаҡ», А. Н. Островскийҙың иң популяр пьесаларын ҡарау бәхете тейә.

1890–1891 йылдарҙағы театр миҙгелендә Өфөлә 17 йәшлек Ф. И. Шаляпин тәү тапҡыр С. Монюшконың «Галька» операһында Стольников, Д. Вердиҙың «Трубадур» операһында Фернандо, А. Верстовскийҙың «Аскольд ҡәберлеге»ндә Неизвестный партияларын башҡарып танылыу ала.

**Әҙәби-мәҙәни бәйләнештәр**

XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостандың тәбиғәтен һәм иҡтисадын, башҡорт халҡының тарихын, тормош-көнкүрешен, этнографияһын, ауыҙ-тел ижадын, телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙә рус ғалимдарының һәм яҙыусыларының хеҙмәте ифрат ҙур булды. Ил өйрәнеүсе ғалим Руф Игнатьев бик күп башҡорт әкиәттәрен, йырҙарын, легендаларын яҙып ала һәм уларҙы 1875 йылда Петербургта айырым китап итеп баҫтырып сығара. Күренекле фольклорсы, музыкант-этнограф Сергей Рыбаков «Урал мосолмандарының музыкаһы һәм йыры» исемле китабына бик күп башҡорт йырҙарын ноталары менән баҫтыра, йырсылар, ҡурайсылар тураһында белешмәләр бирә. Ул «ниндәйҙер бер иркенлек һәм киңлек, ... нәфислек бөркөлөп торған... моңло, көслө тәьҫирле», «иҫ киткес төҙөклөк менән айырылып» торған йырҙар тыуҙырған башҡорт халҡын «күңеле менән ҙур шағир», ти. Башҡорт йыр-музыка сәнғәте өлгөләрен йыйып өйрәнеү, ноталарға һалыу, баҫтырып сығарыу эштәре менән Д. П. Никольский, А. А. Алябьев, И. А. Покровский, В. Проле һәм башҡа рус һәм сит ил фольклорсылары, этнографтары, композиторҙары шөғөлләнгән. П. И. Добротворский хатта «Һандуғас» тигән махсус очерк яҙған. Үҙенең геройы Әхмәт Рәхимҡоловтың төрлө ҡоштарға, хайуандарға оҡшатып тауыштар сығарыуына, бигерәк тә «тере, ысын һандуғас йырынан» айырмаҫлыҡ итеп йырлауына хайран ҡала публицист.

XIX быуаттың 70–90-сы йылдарында Р. Игнатьев, М. Лоссиевский, Ф. Нефёдов кеүек ил өйрәнеүселәр үҙҙәренең яҙмаларында Башҡортостандың тәбиғәтен, халыҡтың көнкүрешен сағылдырып ҡына ҡалмайҙар, бәлки башлап Салауат Юлаевтың тормош һәм ижад юлын тулы яҡтыртырға тырышалар (Р. Игнатьев. «Башҡорт Салауат Юлаев – Пугачёв бригадиры, йырсы һәм импровизатор»; Ф. Нефёдов. «Пугачёв болаһы алдынан башҡорттар хәрәкәте. Салауат, башҡорт батыры»; М. Лоссиевский. «Пугачёв бригадиры Салауат һәм Фариза»),

батыр һәм шағир тураһындағы халыҡ йырҙарын, легендаларҙы баҫтырып сығаралар.

Бөйөк рус яҙыусыһы Лев Толстой башҡорт йәйләүҙәренә өс-дүрт тапҡыр ҡымыҙ эсеп дауаланырға килә. Шул килеүҙәрендә башҡорт халҡын яратырға, яҡындан дуҫлашырға өлгөрә. Башҡорттар тормошонан «Ильяс», «Кешегә күпме ер кәрәк» тигән хикәйәләрендә башҡорт ерҙәрен талауҙа колонизаторҙар ҡулланған һәр төрлө махинацияларҙы аяуһыҙ фашлай.

Башҡорт ерҙәренең таланыуына, халыҡтың ас-яланғас ҡалдырылыуына протест тойғолары бигерәк тә М. Е. Салтыков-Щедриндың «Провинция кешеһенең Петербургтағы көндәлеге», «Сит илдә» тигән сатирик әҫәрҙәрендә, Н. В. Ремезовтың «Ҡырағай Башҡортостан тормошонан очерктар»ында, Г. И. Успенскийҙың «Ырымбурҙан Өфөгәсә» тигән юлъяҙмаһында, П. И. Добротворскийҙың «Башҡортостандың төпкөлөндә» тип аталған йыйынтығында асыҡ сағылды.

Уралда тыуып үҫкән, башҡорттарҙың рәхимһеҙ иҙелеүен, фәҡирлектәрен үҙ күҙҙәре менән күргән рус яҙыусыһы Д. Н. Мамин-Сибиряк «Уралдан Мәскәүгәсә» тигән публицистик әҫәрендә, «Икмәк», «Исемһеҙ», «Привалов миллиондары» романдарында, «Охониндың ҡаштары» повесында был аяныслы хәлдәрҙе айырыуса тетрәткес итеп һүрәтләне, башҡорт халҡына теләктәшлек белдерҙе, уның азатлығы өсөн көрәшкән Салауат Юлаев, Алдар батыр кеүек яугир ир-егеттәрен данланы, халыҡтың һүнмәҫ энергияһы, уның героик рухы тураһында һөйләне. Башҡорт ерҙәрен талаған колонизаторҙарҙы ул асыҡтан-асыҡ «йыртҡыстар» тип атаны.

Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тураһында Ф. Д. Нефёдов та бер нисә әҫәр һәм очерк яҙа. «Зигда» тигән хикәйәһендә ул тормош ауырлыҡтарына, дин ҡанундарына баш эймәгән, нимә эшләһә лә ҡулынан килгән бөтмөр, алсаҡ һәм ғорур тәбиғәтле, үҙ бәхете өсөн ҡыйыу көрәшкән көслө рухлы башҡорт ҡатын-ҡыҙының образын тыуҙырһа, «Башҡортостан тауҙарында һәм далаларында» тигән повесында инде башҡорт ерҙәрен вәхшиҙәрсә талау сәйәсәтенең кире яҡтары тураһында нәфрәтләнеп яҙа. Шул уҡ ваҡытта Уралда тау сәнәғәтен барлыҡҡа килтереүҙә һәм үҫтереүҙә урындағы халыҡтың ҙур роль уйнауы хаҡында эске бер күтәренкелек, ихласлыҡ менән бәйәнләй.

Был осорҙа Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тураһында А. П. Чехов, В. Г. Короленко, А. М. Фёдоров, Н. Г. Гарин-Михайловский, В. И. Немирович-Данченко, С. Г. Рыбаков, А. М. Горький, шулай уҡ Көнбайыш Европа әҙип-публицистары һәм ғалимдары яҙҙы. Мәҫәлән, «Уфимские губернские ведомости» (1903, 11, 12 июнь) гәзитендә Варшава гәзите «Слово»ның махсус

хәбәрсеһе И. А. Урсын «Боронғо Башҡортостанда» тигән юлъяҙмаһын баҫтырып сығара. Унда ул: «Ниндәй ҡыҙыҡһыныусан, ниндәй оригиналь, ниндәй үҙенсәлекле халыҡ – башҡорттар! Борон-борондан башҡорт яҙыу белгән», – тип һоҡланып яҙа. 1901 йылда башҡорт телен, фольклорын өйрәнеү маҡсатында Өфөгә килгән һәм башҡорт уҡымышлылары, айырыуса М. Өмөтбаев ярҙамында тикшеренеү эштәре йәйелдереп ебәргән Будапешт университеты профессоры Вильгельм (Вильмош) Проле иһә: «Башҡорттар шиғри һәм музыкаль йәһәттән бик талантлы (высокоталантливый) халыҡ. Уларҙың йырҙары күрше өлкәләрҙә бөтә ерҙә йырлана»[1], – тип билдәләй.

XIX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт, татар зыялылары үҙҙәре лә әҙәби, мәҙәни бәйләнештәрҙең үҫешенә тос өлөш индерә. Уларҙың тырышлыҡтары менән Фирҙәүси, Хәйәм, Низами, Сәғҙи, Руми, Хафиз, Жәми, Науаи кеүек күренекле шағирҙарҙың әҫәрҙәре уҡыусыларға айырым китап рәүешендә йә йыйынтыҡтар, дәреслектәр аша оригинал телендә лә, тәржемәлә лә еткереләләр. «Мең дә бер кисә», «Кәлилә вә Димнә», «Әбүғәлисина», «Тутыйнамә», «Сәйфелмөлөк» тигән әкиәттәр, мәҫәлдәр, хикәйәттәр йыйынтыҡтары һәм ҡиссалар ғәрәп, фарсы телдәренән тәржемәлә халыҡ араһында киң тарала.

Киң ҡатлам уҡыусылар тәржемәлә А. С. Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны», «Балыҡсы һәм балыҡ тураһында әкиәт», «Капитан ҡыҙы», М. Ю. Лермонтовтың «Ғашиҡ Ғәриб» («Мцыри»), Н. В. Гоголдең «Ревизор», «Өйләнеү» тигән әҫәрҙәре, Л. Н. Толстойҙың, К. Д. Ушинскийҙың хикәйәләре, И. А. Крыловтың мәҫәлдәре, Даниель Дефо, бер туған Якоб һәм Вильгельм Гримм, Ганс Андерсен кеүек инглиз, немец, дат әҙиптәренең әҫәрҙәре менән айырым китаптар йә хрестоматиялар аша таныша.

**Әҙәбиәттең үҫеш тенденциялары**

XIX быуаттың икенсе яртыһында Өфө һәм Ырымбур губерналарында мәғарифтың, башҡа мәҙәниәт тармаҡтарының, әҙәби-мәҙәни бәйләнештәрҙең ошолай йәнләнеүе башҡорт халҡының рухи үҫешенә ярайһы йоғонто яһаны, милли мәҙәниәттең артабан өлгөрәсәк емештәре өсөн тупраҡты ашланы. Улар башҡорттарға һәм Башҡортостандағы башҡа халыҡтарға социаль тормош хәлдәренә анығыраҡ ҡарарға, иҫкелеккә ҡаршы көрәшеү, халыҡтың аң-белемен, мәҙәниәтен үҫтереү аша уның матур тормошон тәьмин итеү идеяһына ышаныстарын арттырыуға ярҙам итте, уларҙа милли үҙаң, милли бөтөнлөк тойғоһо уяныуын тиҙләтте, майҙанға алдынғы ҡарашлы, милли рухлы

[1] Wilhelm Prole. Baschkirische // Keleti Szemle (Будапешт). 1905, № 6. – 13-сө бит.

яҙыусылар күтәрелеп сығыуын әҙерләште. Тап ошондай башҡорт һәм татар яҙыусылары үҙҙәренең әҫәрҙәрендә мәғрифәтселек идеяларын, рухи-мәҙәни тормошто заман талаптарына ярашлы үҙгәртеп ҡороу өсөн көрәшкән йәдитселәрҙе башлап ҡыйыу яҡлап сыҡтылар, иҫке тәртиптәргә йәбешеп ятҡан ҡәҙимселәрҙе аяуһыҙ тәнҡитләнеләр. Муса Аҡйегеттең «Хисаметдин мулла» тигән сатирик повесы (1886), Ғабдрахман Ильясиҙың «Бисара ҡыҙ» драмаһы (1887), Риза Фәхретдиновтың «Сәлимә» (1899) һәм «Әсмә» повестары (1903) схоластик уҡыу-уҡытыу системаһының кәмселектәрен, ҡәҙимселәрҙең реакцион асылын күрһәткән, ә ижтимағи тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә яңыса үҙгәртеп ҡороуҙар өсөн көрәшкән йәдитселәрҙең матур һөҙөмтәле эштәрен, ыңғай образдарын һүрәтләндергән әҫәрҙәрҙең иң күренеклеләре булды. Улар мәғрифәтселек идеологияһына нигеҙләнгән реалистик ижад методының әҙәбиәттә ныҡлы урын ала һәм уның төп үҫеш тенденцияһын билдәләй башлауын күрһәтте.

Ләкин был процесс еңел генә барманы. Уның сағыштырмаса аҡрын һәм ауырлыҡ менән барыуы һаман да әҙәбиәттең төп төрө булып ҡалған шиғриәттә бигерәк тә асыҡ күренде. Ноғман Йомрани, Хөснияр әл-Бөрө, Муллағол Диуана, Әхмәтвәли әл-Стәрле, Ғәбделхәлим Бәләбәй кеүек һаман иҫке традицияларға йәбешеп ятҡан, ислам ҡанундарын вәғәзләгән, суфыйсылыҡ идеяларын йырлаған һәүәҫкәр ижадсыларҙың әҫәрҙәрендә заман талаптарына ярашлы донъяуи мотивтар, реалистик тормош картиналары күренә, мәғрифәтселек идеялары сағыла башланы. Әбелхәйер әл-Стәрленең «Тәзкирәт әл-әхбаб» («Дуҫтарға иҫтәлек») әҫәре быға асыҡ миҫал. Унда шағир, ислам дине, иман мәсьәләләре менән бер рәттән, көндәлек тормош проблемалары – фәҡирҙәр менән байҙар араһындағы киҫкен социаль ҡаршылыҡтар, аң-белемдең тормоштағы әһәмиәте, кешеләге матур һәм насар сифаттарҙың уның һәм халыҡтың яҙмышында ниндәй роль уйнауы хаҡында уйлана, үҫә барған капиталистик йәмғиәттәге кире күренештәрҙе тәнҡитләй. Халыҡты талап, алдап мөлкәт туплаған байҙарҙы, сауҙагәрҙәрҙе ул ағыулы йыландар, арыҫлан, юлбарыҫ, ҡаплан кеүек йыртҡыс хайуандар менән сағыштыра. Үҙенең ошондай «дошмандар» араһында арыҡ аты менән ҡаяға менә алмауына зарланһа ла, Әбелхәйер был тормоштан йөҙ борорға йыйынмай, киләсәккә өмөт менән ҡарай, йәмғиәттәге яңырыу процесын – «ҡояш сығыуын», «мәғрифәт диңгеҙе ҡайнап тороуын» яҡшы һиҙемләй.

XIX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт әҙәбиәтенең мәғрифәтселек реализмы методына йөҙ бора барыуы әҙәбиәткә суфыйсылыҡ идеяларын йырлап килеп ингән Ғ. Соҡорой ижадында айырыуса асыҡ күренде. Ул аҡрынлап дини-мистик фекерләүҙән арына барып, заманының зыялы шәхестәрен,

мәғрифәт һәм мәҙәниәт үҙәктәрен, тыуған еренең матурлығын, ватаны Рәсәйҙең фәнни-техник прогресын, замандаштарының ғилем, мәғариф өлкәләрендәге ҡаҙаныштарын данлаған шиғырҙар, туған халҡының тарихын, тормош-көнкүрешен, социаль хәлен ярайһы объектив сағылдырған тәуарих һәм шәжәрәләр, публицистик әҫәрҙәр ижад итте.

М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев һәм Р. Фәхретдинов ҙур тарихи әһәмиәткә эйә булған мәғрифәтселек характерындағы идея-эстетик процестың иң күренекле вәкилдәре булды.

Башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихына Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев бөтәһенән дә элек рус һәм көнбайыш мәғарифын, ғилми фекерен, рухи-мәҙәни ҡаҙаныштарын туранан-тура үҙләштергән һәм, уларҙың өлгөләренә юҫыҡ тотоп, туған халҡына хеҙмәт итергә тырышҡан ғалим, шағир, публицист һәм тәржемәсе булып инде. Ул башҡорт әҙәбиәтенә тәү башлап милли-тарихи тематиканы алып килде, әҫәрҙәрендә башлап батша самодержавиеһының милли-колониаль сәйәсәтен асыҡтан-асыҡ фашланы. Һәр халыҡтың тормошо, мәҙәниәте алға китһен өсөн был хаҡта хәстәрлек күреүсе үҙ хөкүмәте, Карамзин, Пушкин кеүек ғалимдары һәм әҙиптәре булырға тейеш тигән фекерен ҡыйыу белдерҙе, ошо фекерен тормошҡа ашырыу йүнәлешендә арымай-талмай эшләне. XIX быуат башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихында юғары граждандлыҡ, тәрән патриотизм рухының, милли колориттың сағылышы тап уның күп яҡлы ижады йөҙөндә үҙенең юғары нөктәһенә етте.

Мифтахетдин Аҡмулла әҙәбиәткә улай туранан-тура рус һәм Көнбайыш мәҙәниәте тәьҫирендә килмәне. Ул халыҡты социаль тигеҙһеҙлек, торғонлоҡ донъяһынан алып сығырға, прогресҡа илтергә тейешле тип иҫәпләгән мәғрифәтселек идеяларын йырлауға, тормоштоң бөтә ауырлыҡтарын, ғәҙелһеҙлектәрен үҙ елкәһендә татып, туған башҡорт һәм Көнсығыш халыҡтарының быуаттар һуҙымында туплаған тормош тәжрибәһенә, аҡылына, матур идея-эстетик традицияларына таянып күтәрелде. Аҡмулланы шағир һәм сәсән булараҡ рухландырған, уны мосолманлыҡ иҫкелегенә ҡаршы ғәйрәтләндергән, туған халҡын уҡырға әйҙәп оран һалдырған ҡыйыу идея көсө, бөтәһенән дә элек, башҡорт һәм ҡаҙаҡ фольклорынан, ауыҙ-тел әҙәбиәтенән, Рудакилы, Фирҙәүсиле, Хәйәмле, Сәғҙиле, Науаилы Көнсығыштан, университетлы, Шиһабетдин Мәржәниле һәм Ҡәйүм Насырилы Ҡазандан килде. Әммә был әле шағир-сәсән Көнбайыштың рухи донъяһына бөтөнләй баҡмаған тигәнде аңлатмай. Бит ул юҡтан ғына халыҡҡа: «Урыҫса уҡып ҡына түгел, ... французса белгән яҡшы», – тип мөрәжәғәт итмәгән.

Ризаитдин Фәхретдинов иһә яңы капиталистик ҡоролош шарттарында эпик төрҙөң йәмғиәттә барған социаль-иҡтисади,

рухи-мәҙәни үҫеш-үҙгәрештәрҙең асылын художестволы анализлау һәм яҡтыртыу, халыҡ массаһына төплөрәк төшөндөрөп биреү мөмкинлектәре поэзияныҡына ҡарағанда киңерәк һәм тәрәнерәк булыуын иң яҡшы аңлаған әҙиптәрҙең береһе булды. Тап уның әүҙем ижади эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә проза башҡорт әҙәбиәтенең реалистик йүнәлештә үҫеүенә ныҡ этәргес биргән профессиональ юғарылыҡтағы төрөнә әүерелде. Уның кешене яҙмышынан уҙмышы булмаған бәндә (Алла ҡоло) итеп түгел, ә тәрбиә арҡаһында үҫә, камиллаша алған ижтимағи зат булараҡ һүрәтләгән, уны аң-белемле, һөнәрле, камил әхлаҡлы итеү аша бәхетле итергә, йәмғиәтте алға ебәрергә мөмкин тигән мәғрифәтсел ҡарашты киң яҡтыртҡан, төрлө яҡлап аңлатҡан повестары мәғрифәтселек реализмы йүнәлешендәге яңы тип башҡорт прозаһының формалашыуында хәл иткес роль уйнаны-лар. Прозаға яңы тип геройҙар, яңы идеялар һәм ысынбарлыҡты сағылдырыу принциптары ғына түгел, милли колорит сифаттары алып килеүҙәре, үҙ традицияларын тыуҙырыуҙары менән дә улар башҡорт әҙәбиәте тарихында өр-яңы һәм мөһим идея-эстетик күренештәр булдылар.

Р. Фәхретдинов драматургия өлкәһендә лә үҙ ҡәләмен һынап ҡараны, әммә тейешле уңыштарға өлгәшә алманы. Был осор башҡорт әҙәбиәтендә драматургия тулы ҡанлы әҙәби төр булып формалашып етмәне.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. XIX быуаттың беренсе яртыһы менән икенсе яртыһы башҡорт ижтимағи тормошо һәм мәҙәниәте араһында ниндәй үҙгәрештәр булған? 2. Мәғариф системаһындағы һәм мәҙәниәттәге үҫеш-үҙгәрештәр тураһында һөйләгеҙ. 3. Был осорҙағы башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең башҡа әҙәбиәттәр һәм мәҙәниәттәре менән бәйләнеше офоҡтарын асыҡлағыҙ. Рус яҙыусылары ижадында Башҡортостан һәм башҡорт халҡының яҙмышы нисегерәк сағылған? 4. XIX быуаттың икенсе яртыһы башҡорт әҙәбиәтенең төп үҫеш тенденцияларын асыҡлағыҙ.

# МИФТАХЕТДИН АҠМУЛЛА

## (1831 – 1895)

Мифтахетдин Аҡмулла – XIX быуаттың икенсе яртыһындағы яңы типтағы башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең иң күренекле вәкиле. Ул халыҡты ғилемгә, мәғрифәткә саҡырып, наҙан муллаларҙан, байҙарҙан көлөп, бик күп шиғырҙар яҙа. Уның мәғрифәтселек идеялары, фәлсәфәүи уйланыуҙар менән һуғарылған шиғырҙары башҡорттар араһында ғына түгел, ҡаҙаҡтар, татарҙар араһында ла яратып уҡыла, күптәрен халыҡ яттан белә.

## ТОРМОШ ЮЛЫ

**Бала һәм шәкерт сағы**

Мифтахетдин Аҡмулла 1831 йылдың 26 декабрендә Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙе Күл иле-Мең олоҫо (Башҡортостандың хәҙерге Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында тыуған. Уның атаһы Камалетдин үҙ ауылында мулла булып торһа ла, бик ишле ғаиләһе фәҡирлектә йәшәгән.

Мифтахетдин тәүге һабаҡтарҙы атаһынан ала, унан күрше олоҫтағы Мәнәүезтамаҡ һәм Әнәс ауылы мәҙрәсәләрендә уҡый. Һуңынан атаҡлы Стәрлебаш мәҙрәсәһенә килеп, шағир Шәмсетдин Зәкиҙең дәрестәрен тыңлай. Ләкин был мәҙрәсә лә уны ҡәнәғәтләндереп бөтмәй.

Фәҡирлектән артыҡ фән күрә алманыҡ,
Шәһәр сығып, алыҫ яҡҡа йөрөй алманыҡ,
Мәргәндәрҙе танырлыҡ хәлебеҙ бар,
Шул сәбәптән сабыр ҡылып тора алманыҡ, –

*(«Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе»)*

тип, Стәрлебаш мәҙрәсәһен ташлап китә. Башта ул Ырымбур яғында була, унан киләсәктә күренекле дин белгесе, ғалим-

педагог булып таныласаҡ Зәйнулла Рәсүлев менән бергә Троицк мәҙрәсәһендә уҡый. Улар ныҡ дуҫлашып китәләр, был дуҫлыҡҡа ғүмерҙәренең аҙағынаса тоғро ҡалалар. Аҡмулла йәй көндәрен ҡаҙаҡ далаларына китеп, ҡаҙаҡ балаларын уҡытып йөрөй, ҡыш көндәрен Троицкиҙа уҡыуын дауам итә. 1859 йылда мәҙрәсәне тамамлап, Өфөлә Бөтә Рәсәй мосолмандарының Дини идаралығында – Диниә назаратында муллалыҡҡа уңышлы имтихан тотоп, указлы мулла танытмаһы менән тыуған ауылына ҡайта. Ләкин уға атай йортонда төпләнергә насип булмай. Был ваҡытҡа уның әсәһе вафат булған була. Атаһы һәм үгәй әсәһе уны яҡты йөҙ менән ҡаршыламай. Күп йөрөп, төрлөһөн күреп, «мәргәндәрҙе танырлыҡ» хәлгә килгән уҡымышлы Аҡмулланы ла атай йорто, ундағы ҡыҫынҡы тормош һис хушһындырмай. Оҙаҡламай ул тыуған ауылын ташлап сығып китә.

**Халыҡтар араһында**

Аҡмулла башта тау башҡорттары араһында йөрөй. Балта оҫтаһы булып та көн күрә, ҡышын балалар уҡыта, һуңынан ҡаҙаҡ далаларына сығып китеп, бөтөнләй уҡытыусылыҡ эше менән шөғөлләнә. Халыҡты уҡырға, ғилемгә өндәп шиғырҙар сығара. Уҡымышлылығы, тура һүҙлелеге, сәсәнлеге өсөн халыҡ уны бик яратҡан. Тыуған яҡтарында Аҡмулла сәсән телле шағир булып танылған булһа, ҡаҙаҡтар араһында шунса мәргән, аҡын кеше булып дан ала. Ҡаҙаҡтар уны шул уҡымышлылығы, тура һүҙлелеге өсөн «Аҡмулла» тип атайҙар (Аҡмулла – ҡаҙаҡса *тура, гәҙел һүҙле аҡыллы кеше* тигән һүҙ). Ул исем аҙаҡтан Мифтахетдин Аҡмулланың шағирлыҡ исеме – псевдонимы булып китә. Тимәк, Аҡмулла исеме уға халыҡ тарафынан ҡушылған ҡәҙерле исем.

Тик Аҡмулланың тура, ғәҙел һүҙенән байҙар ғына ҡурҡыр булған. Аҡмулла ҡомһоҙ байҙарҙы, наҙан муллаларҙы күрә алмау ғына түгел, уларҙан рәхимһеҙ көлөп, шиғырҙар сығарған. Халыҡ уларҙы бик тиҙ отоп алған. Байҙар, әлбиттә, былдай баш бирмәҫ шағирҙан нисек тә үс алыу, уны халыҡтан айырыу өсөн төрлө әмәлдәр эҙләгән, төрлөсә эҙәрләгән.

Бер саҡ Троицкиҙан йөҙ саҡрым арыраҡ ҡаҙаҡ ауылында уҡытып йөрөгәнендә, Аҡмулла берәүҙең йыназаһында була. Шул ваҡыт Иҫәнгилде тигән бер ҡаҙаҡ байы Аҡмулланан көлмәк булып: «Беҙҙең ҡаҙаҡта «Үләнле ерҙә үгеҙ һимерә, үлемле ерҙә мулла һимерә» тигән мәҡәл бар. Ҡарағыҙсы ошо муллаға, ҡайһылай һимергән!» – ти. Аҡмулла аптырап ҡалмай, шунда уҡ яуап һүҙен дә әйтә: «Дөрөҫ әйтәһегеҙ, – ти ул, – үләнле ерҙә – үгеҙ, үлемле ерҙә – мулла, даулы ерҙә түрә һимерә. Сәхрәлә беҙҙең кеүек муллалар булмаһа, һеҙҙең кеүек яһилдарҙың башын эт кимерә!»

Шулай итеп, бай үҙе көлкөгә ҡала. Аҡмулланы еңерлек һүҙ таба алмай. Был бай ошонан һуң бик үсләшеп, «Аҡмулла – әрме

хеҙмәтенән ҡасып йөрөгән истәк (башҡорт)» тигән ялыу яҙып, уны төрмәгә ултыртыуға өлгәшә. Аҡланып сыҡҡансы Аҡмулла Троицкиҙа дүрт йыл төрмәлә ултыра. 1871 йылдың көҙөндә, үҙен аҡлауҙы юллап, Петербургка юллана, 1872 йылдың ҡышында унан аҡланып ҡайта. Хәҙер ул бөтөнләйгә тыуған яҡтарында төпләнеп ҡалырға уйлай. Әммә ата-әсәһенең иҫ киткес һалҡын ҡаршылауы шиғри хисле Аҡмулланы тетрәндерә. Был юлы тыуған ауылын бөтөнләйгә ташлап китә.

Тиҫтәгә яҡын йылдар ул Ҡустанай, Көксәтау, Аҡмулла, Петропавловск өйәҙҙәрендәге ҡаҙаҡтар араһында йәшәй, күп дуҫтар, фекерҙәштәр таба. Әммә уның күңеле һәр саҡ тыуған иленә, туған халҡына тартыла. Артабан бөтә аңлы ғүмерен башҡорт ауылдары һәм йәйләүҙәрен, ҡаҙаҡ далаларын гиҙеп, уҡытыусылыҡ итеп, шиғырҙары һәм импровизациялары менән халыҡҡа рухи нур-моң сәсеп, мәғрифәт өләшеп үткәрә. 90-сы йылдарҙа Урал буйы башҡорттары араһында йәшәй, Учалы башҡорттары менән ныҡ аралаша. Ошо йылдарҙа ул Өфөлә лә була. 1894 йыл Өфөгә килгәнендә күренекле башҡорт ғалим-әҙиптәре М. Өмөтбаев һәм Р. Фәхретдинов менән осраша. Үҙенең хөрмәтенә ойошторолған мәжлестә ул М. Өмөтбаев менән шиғыр әйтеше бәйгеһендә ҡатнаша. Өфөлә Аҡмулла киләсәктә Р. Фәхретдинов булышлығында үҙенең шиғырҙар йыйынтығын баҫтырып сығарырға ла һөйләшеп килешә. Ләкин 1895 йылдың 8 октябрендә ул, Троицкиҙан дуҫы Зәйнулла ишан бүләк иткән атта Златоустҡа килгән сағында, Мейәс ҡалаһынан алыҫ түгел урында байҙар яллаған кешеләр тарафынан үлтерелә.

М. Аҡмулланың тынғыһыҙ ғүмере, бөйөк рус шағирҙары А. Пушкин һәм М. Лермонтовтыҡы кеүек, бына шулай фажиғәле рәүештә өҙөлөп ҡала.

## ИЖАДЫ

**Сәсән һәм шағир**

Аҡмулла – сәсән телле шағир. Бөтә аңлы ғүмерен ил гиҙеп, халыҡ тормошоноң иң уртаһында ҡайнап, фольклор «һулышын» бер туҡтауһыҙ тойоп ижад иткән кеше булараҡ, ул башҡорттар араһында ҡобайыр ҡойған, башҡортса шиғыр әйткән, ҡаҙаҡтар араһында ҡаҙаҡса өләң сығарған. Башҡорттар уны сәсән телле шағир итеп һанаған, ҡаҙаҡтар аҡын итеп таныған. Был йәһәттән Аҡмулла – Ҡобағош, Байыҡ, Ерәнсә кеүек сәсәндәрҙең юлын ҡыуыусы һүҙ оҫтаһы. Икенсе яҡтан, ул мәҙрәсәләрҙә белем алып, балаларға һабаҡ биреүҙе төп һөнәренә әүерелдергән, шиғырҙарын ҡағыҙға яҙып та ижад иткән һәм ҡулъяҙма көйө һаҡлаған уҡымышлы кеше. Был яғы менән ул – яҙма әҙәбиәт вәкиле, шағир. Уның

ижадында шулай халыҡтың сәсәнлек һәм шағирлыҡ һәләте бергә ҡушылған.

Мифтахетдин Аҡмулла үҙе йөрөгән, йәшәгән ерҙәрҙә башҡорттоң да, ҡаҙаҡтың да, татар һәм башҡа халыҡтарҙың да михнәт сигеүен, байҙарҙың рәхимһеҙлеген, ҡомһоҙлоғон күреп йөрәге әрнегән, шул яҙмышты үҙе лә уртаҡлашҡан. Күңелендә тәүгеләренә теләктәшлек, икенселәренә нәфрәт хисе ҡайнаған. Ярлы-ябағаны яҡлап, уның көнкүреше əҙ генә булһа ла йүнәлмәҫме тип, уны тырыш булырға, ғилемгә ынтылырға саҡырып, хитаптары, мәктүптәре (шиғри мөрәжәғәттәре, шиғри хаттары) менән мөрәжәғәт иткән; байҙарҙы аҡылға ултыртмаҡ, йүнгә килтермәк булып, төртмә һүҙле сатирик шиғырҙары менән саҡҡан. Уның тапҡыр шиғырҙары ярлы-ябағаға – йыуаныс, байҙарға әсе һүҙ, киҫәтеү булып яңғыраған. Бай-түрәләр уның һүҙенән уттан ҡурҡҡан шикелле ҡурҡҡан. Үсләшеп, сәсән-шағирҙы төрмәгә лә ултыртып ҡарағандар, ләкин ғәйепһеҙгә рәнйетелеү кеүек иң ауыр хәл дә Аҡмулланың ялҡынлы рухын һүндерә алмаған. Киреһенсә, уның байҙарға, түрә-чиновниктарға булған асыуын, нәфрәтен бермә-бер арттырған ғына, шиғырҙарына тағы зәһәрерәк сатира саткыһын өҫтәгән.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Аҡмулланың тапҡыр шиғри мөрәжәғәттәренең, шиғри хаттарының, ҡобайырҙарының, парсаларының, шиғыр-монологтарының бөтәһе лә беҙҙең көндәргә килеп етмәгән. Үҙе иҫән саҡта уның Ҡазанда «Дамелла Шиһабетдин хәҙрәттең мәрҫиәһе» (1892) тигән бер генә китабы баҫылып сыҡҡан. Китап күренекле татар ғалимы Шиһабетдин Мәржәнигә бағышланған, уның үлеме айҡанлы мәрҫиә итеп баҫтырылған.

Бынан һуң Аҡмулланың китаптары 1904 һәм 1907 йылдарҙа Ҡазанда, 1935 йылда Алма-Атала донъя күрә. Шағир-сәсәндең иң тулы йыйынтығы уның тыуыуына 150 йыл тулған көндәрҙә 1981 йыл Өфөлә башҡорт telендә баҫылып сыға. Уның китаптары артабан рус, татар һәм ҡаҙаҡ телдәрендә лә донъя күрҙе.

**Аҡмулла шиғриәтендә мәғрифәтселек идеялары**

Бөтә ерҙә лә халыҡтарҙың берҙәй үк аяныс яҙмышҡа дусар булыуын күреп йөрәге әрнегән, бай-түрәләрҙең, мулла-монтағыйҙарҙың яуызлығын, ҡомһоҙлоғон күреп нәфрәте ҡайнаған һәм шул тойғоларын тапҡыр шиғыр юлдарына һалған шағир-сәсән был күренештәрҙең төп сәбәптәрен аңлау юғарылығына күтәрелә алмай. Ғәҙелһеҙлектәрҙең, яуызлыҡтарҙың сығанағын йәшәп килгән йәмғиәт тәртиптәренән бигерәк, кешенең үҙенән эҙләй, бөтәһен дә уның наҙанлығына, мәҙәниһеҙлегенә һәм әхлаҡһыҙлығына ҡайтарып ҡалдыра. Тормоштағы ғәҙелһеҙлек аҡылдың, мәғрифәттең наҙанлыҡ һәм яһиллыҡ өҫтөнән әле һаман тантана итә алмауынан килә, тип

ҡарай ул. Шуға ла нимә тураһында яҙһа ла шағир-сәсән һәр саҡ бөтәһен дә аң-белем, ғилем-һөнәр, әхлаҡ һәм мәҙәниәт мәсьәләләренә килтереп бәйләй.

Тап уның ижадында мәғрифәтселек идеялары иҫкелеккә, томаналыҡҡа, дини фанатизмға, яуызлыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән аныҡ бер программа төҫөн алды. Ул иң беренсе башлап аң-белемгә, һөнәргә эйә булыу юлы менән яҡтылыҡҡа, бәхеткә ирешеп була тигән ныҡлы фекергә килде һәм туған халҡына: «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» – тип мөрәжәғәт итте. Ошо исем менән йөрөгән әҫәрендә Аҡмулла ҡан-кәрҙәштәрен аң-белемгә, һөнәргә янып-талпынып өндәүсе агитатор ролендә сығыш яһай, хитап жанрының сағыу өлгөһөн тыуҙыра. Был хитап – башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең иң характерлы әҫәрҙәренең береһе. Бына нисегерәк яңғырай ундағы ҡайһы бер шиғри юлдар:

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк...

Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр...

Белемлелек – арыҫландан көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.

Шулай «ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң, ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр» тип, шағир-сәсән ғилем-һөнәр эштәрен маҡтап йырланы, Шиһабетдин Мәржәни кеүек ғилемле, мәғрифәтле ғалимдарҙы ололаны («Дамелла Шиһабетдин хәҙрәттең мәрҫиәһе»). Мосолман донъяһында дини фанатизмды, уҡыу-уҡытыуҙағы схоластиканы, реакцион руханиҙарҙы тәнҡитләп сыҡҡан, фән, мәғрифәт өлкәһендә билдәле бер прогрессив идеяларҙы алға һөргән ғалим Шиһабетдин Мәржәниҙе «ҡараңғыла фонарь ҡабыҙған», «хәҡиҡәт йылғаларын ағыҙған», «мөхәндистәр (инженерҙар) һиҙмәгән ерҙән ҡаҙып... татлы һыуҙы» сығарған, «хәҡиҡәт байрағын күтәреп барған көрәшселәр араһында был бер әмир», «мәғрифәтсе ирҙәрҙән былдай маһир», тип маҡтай, уны мәғрифәт шоңҡарына, толпарға, балҡып торған гәүһәргә тиңләп идеаллаштыра. Татар уҡымышлыһы Ҡурсауиҙы ла «үҙ ғасырында оло ғалим» тип күрә. Уның өсөн башҡорт уҡымышлыһы «хөрмәтле Ризаитдин дә (Фәхретдинов) – бер камил зат». Былдай ғалим заттарҙың шөһрәтенә, ғилеменә арҡыры төшкәндәрҙе йәки төшөнөп етмәгәндәрҙе яһилдар тип атай, ҡара төндәге ябалаҡтарға тиңләй, маҡтансыҡ, тәкәббер, көнсөл, алдаҡсы, ошаҡсы, ғәйбәтсе, ғәмһеҙ, белекһеҙ заттар тип шелтәләй.

М. Аҡмулла ижадында үҙәккә ҡуйылған икенсе бер проблема – ул әхлаҡи тәрбиә мәсьәләһе. Шағир-сәсән өсөн донъялағы иң ҡәҙерле, иң мөһим нәмә – кешенең күңел донъяһы, эшҡылыҡтары сафлығы. Белемдән тыш яҡшы холоҡ, әҙәплелек, аҡыллылыҡ ҡына кешене кеше итә, һәйбәт, бәхетле йәшәүгә илтә ала тип ҡарай ул. «Нәсихәттәр» шиғырында сағылдырған

Иң әүәл паклау кәрәк эстең керен,
Эстә тулып ятмаһын һаҫыҡ эрен.
Аһ, дәриға! Эс таҙарһын, эс таҙарһын!
Булмаһа, файҙа бирмәҫ ҡоро белем

тигән ҡараштан сығып, шағир кешенең кешелеген уның әҙәплелегенә һәм ихласлығына, сабырлығына һәм ғәҙеллегенә, дуҫлыҡҡа тоғролоғона һәм яҡшылығына, кеселеклегенә һәм кешелеклегенә лә ҡарап баһалай, ҡан-ҡәрҙәштәрен шул сифаттарға эйә булырға өндәй:

Кеше булмаҫ күңелен мутлыҡ баҫҡан.
Булмаһын арабыҙҙа хәрәмселлек...
Теләк шул: булһа булһын сын ихластан,
Эскән-ейгән таҙа булһын әүәл баштан.

*(«Теләк»)*

Дуҫ тигәнең тыштан матур, эстән насар булмаһын,
Донъяһы тар булһа булһын, күкрәге тар булмаһын.
Бар көнөндә дуҫ булып, тарлыҡта ташламаһын,
Йорто Болғар булһа булһын, йортто болғар булмаһын.

*(«Дуҫлыҡ»)*

«Тыш тәһәрәт алыу менән эш бөтмәйҙер, булмаһа сын тәһәрәт әүүәл эстән» тигән позицияла торған Аҡмулла үҙенең «Нәсихәттәр» шиғырында ысын кеше тураһындағы уй-ҡараштарын билдәле бер системаға һалып, дөйөмләштереп бирә. Унда ул һәр кеше эйә була алған һәм булырға тейешле *ысын мәғәнәһендәге тәрән, эске бер әхлаҡи сифаттар* – иман, күңел сафлығы, аҡыл, шөкөр, әҙәплелек, сабырлыҡ, ихласлыҡ тураһында һүҙ йөрөтә, кешеләрҙең бәхете, тигеҙ йәшәүе, кеше тәбиғәтенең ниндәй булыуынан килә тип уйлай. Шуға ла ул ҡан-ҡәрҙәштәрен тыштан ғына түгел, эстән дә матур, пак булырға саҡыра. Уның өсөн бигерәк тә ил-ҡор менән идара итеүсе түрәләрҙең, байҙарҙың, муллаларҙың әхлаҡи камиллығы мөһим, сөнки уларҙың тәрбиәһеҙ, намыҫһыҙ булыуы бөтә халыҡ, ил өсөн ҙур бәлә. Шағир-сәсән иман, әҙәп, намыҫ тигәнде бөтөнләй онотҡан, «ҡармағы... бармағында» ғына булған, «күңеле ҡара, ауыҙы ала, ирене ялаҡ» түрә-байҙарҙың һәм муллаларҙың ысын йөҙөн халыҡ алдында фаш итә.

Шул рәүешле, үҙ заманындағы күп кенә уҡымышлылар кеүек, Аҡмулла ла кешене яҡшы тормошҡа уны уҡытып ғилемле итеү, унда һәйбәт холоҡ, яҡшы әҙәп, әхлаҡ сифаттары тәрбиәләү аша ирештерергә мөмкин тип уйлай. Бар яһиллыҡтар, аламалыҡтар наҙанлыҡтан килә, тип, наҙан муллаларҙы, иҫкелеккә йәбешеп ятҡан төрлө хөрәфәтселәрҙе, реакцион дин әһелдәрен, ҡомһоҙ байҙарҙы тәнҡит утына тота. Кешенең күңел паклығы, гуманлылығы – уның өсөн донъялағы иң ҙур, иң ҡәҙерле хазина.

**Социаль мотивтарҙың сағылышы**

Аҡмулланың донъяға ҡарашында идеалистик фекерҙәр осраһа ла, ул – бөтә барлығы менән реалист шағир-сәсән. Төрлө тормош шарттарында, төрлө социаль ҡатлам вәкилдәре менән аралашып, уларҙың тормош-көнкүрештәрен күҙәтеп йәшәгән, өҫтәүенә, үҙе «фәҡирлектән артыҡ фән күрә алмаған» Аҡмулла йәмғиәттәге тигеҙһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте, социаль бүленеште асыҡ күрә. Уның «хаҡты өйрәтер аҡ күңеле» тулыһынса «ҡулы ҡыҫҡа юҡлыҡ менән, халыҡтың ҡарашында хур күренеп, ғүмере үтер бисара»лар яғында, йәғни иҙелеп йәшәгән ябай халыҡ яғында. «Ғәжәп! Һәр кем бай булһа, уға яҡшы дидар әйләр (йөҙ-сырай булыр). Фәҡир меҫкенгә пәруа (ҡайғыртыу) юҡ, хурлыҡ менән зар әйләр», ти ул.

Шағир тора-бара ана шул рәнйетелгән заттарҙы яҡлап, рәнйетеүсе залимдарҙы фашлап, ҡыйыуыраҡ һүҙ ҡуҙғата башлай. Алдап-талап кеше көсө менән байыған залимдарға, түрәләргә шундай әсе ҡылыҡһырлама бирә Аҡмулла:

Яҡын барһаң, тимерсе күрегеләй,
Ул һине керләүгә бар, паклауға юҡ.
Тейеп китһәң, ҡара май силәгендәй,
Ҡарайтып, датлауға (бысратыуға) бар, аҡлауға юҡ.

*(«Замана ғалимдарына»)*

Шағирҙың «һис берәүҙе күңеленә элмәҫ», хатта «Хоҙайын күңеленә алмаҫ», «ҡәнәғәт ҡапсығын сысҡан тишкән», «ҡарынын ит-май менән тултырған» иҙеүселәргә йүнәлтелгән ошондай «ыулы» нәфрәт һүҙҙәре уның шиғриәтенә айырыуса бер сатирик үткерлек һәм публицистик яңғыраш бирә. Быны уның әллә күпме әҫәрҙәре миҫалында күрергә мөмкин. Мәҫәлән, «Бәдбәхеткә һүҙең үтмәҫ» тигән шиғыр-монологында ул әйтер фекерен бына нисегерәк ярып һала:

Ғәрип (ярлы) булһаң, үҙең – йәмһеҙ, һүҙең – тәмһеҙ,
Ауыҙыңдан дөррә (ынйы), гәүһәр ағыҙһаң да.
Тирмәһенә кереп булмай, һыйып булмай, ...
Күпме һин һүҙҙең майын ағыҙһаң да.

Йәки уның «Тиһеңме?» тигән ҡобайырында әйтелгәнсә:

Ярлы булһаң, йән дуҫың
Күҙе күрер тиһеңме;
Күҙе күреп торһа ла,
Күңел бирер тиһеңме...
Малһыҙ булһаң, йән дуҫың
Һине һөйөр тиһеңме...
Ишектә торған ғәрибең
Иҫкә төшөр тиһеңме?! –

власть, байлыҡ ҡоло булған, ҡан-ҡәрҙәштәре яҙмышы хаҡында бер ултырып уйланмаған бындай бәндәләрҙе Аҡмулла ҡоҙғон, ярғанат, ҡара эт, бүреләр менән сағыштыра, ярлыларға, «бил һындырып, байҙарҙан һорай күрмә», «яманға ялынмағыҙ, малы бар, тип, әйткәндәр: ямандың күңеле тар, тип», «намыҫыңды ҡалдырма, малға ҡарап», тип, үҙҙәренең бәҫен төшөрмәҫкә, киләсәккә өмөт менән ҡарарға кәңәш бирә («Өмөт»).

Шағир халыҡҡа золомлоҡ ҡылыусыларҙы «ҡоларһығыҙ ахырҙа тәрән сайға», тип иҫкәртеүҙән дә тартынмай. Улай ғына ла түгел, «таш йөрәклек, аҡһөйәклек» бөтөп, иҙелеп йәшәүсе халыҡҡа шатлыҡ килеүен зарығып көтөүен ҡыйыу белдерә:

Йыһанда тоғролоҡ менән хаҡлыҡ
Һаман шулай иҙелерме, тапалырмы?
Ватылғас таш йөрәклек, аҡһөйәклек,
Фәҡир халыҡтар ҙа бер шатланырмы?!

*(«Булырмы?»)*

Аҡмулланың хаҡлыҡ, ғәҙеллек, паклыҡ өсөн сая көрәшкән ижадсы булыуы төрмәнән яҙған «Урыным – зиндан...» тигән шиғри хатында айырыуса асыҡ күренә. Унда ул төрмә тормошоноң ҡот осҡос картиналарын һүрәтләү аша йәмғиәттәге кире күренештәрҙе, ытырғаныс яҡтарҙы бөтә яланғаслығында асып һала, түрә-байҙарҙың үҙ уй-теләктәрен тормошҡа ашырыу өсөн ҡылған эштәренең ни тиклем яман, рухи донъяларының ни тиклем бысраҡ икәнлеген сағыу күрһәтеп бирә. Үҙе кеүек нахаҡҡа ғәйепләнгән, бушҡа рәнйетелгән тотҡондарҙы күреп, ул:

Ҡайһылары ун йыл ята, оҙаҡ ҡалған,
«Эш»тәре Петербурға оҙап ҡалған.
Һиммәтле ниндәй ирҙәр заиғ (әрәм) булып,
Аяғы кешән менән тоҙаҡланған, –

тип яҙа. Ана шул «аяғы кешән менән тоҙаҡланған» һиммәтле ирҙәр хаҡында уйланғанда, кешеләр араһындағы ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек, изгелек һәм яуызлыҡ хаҡында фекер йөрөтә, хаҡлыҡты ялғандан, яҡшыны ямандан айыра белеү хаҡында баш вата.

Әлбиттә, Аҡмулла үҙ заманының улы ине. Уның социаль фекерҙәре ни тиклем генә асыҡ яңғырамаһын, тура һүҙле булмаһын, ул тормоштағы социаль тигеҙһеҙлектәрҙе, ғәҙелһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙең ысын юлдарын күҙ алдына килтерә алманы. Алға китеүҙе, бәхеткә өлгәшеүҙе фәҡәт мәғариф-ағартыу юлында ғына күрҙе. Залимлыҡты, социаль тигеҙһеҙлекте тәнҡитләүе лә, нигеҙҙә, ошо күҙлектән алып барылды, фанатизмды, схоластиканы, дин әһелдәрен ҡаты шелтәләһә лә, диндең үҙенә тел тейҙермәне.

Аҙағыраҡ, заманаһына ҡарап, үҙенең ҡараштар кимәленең ниндәйлеген һиҙенгәндәй, Аҡмулла «замана ҡалай булһа, барыу шулай, сығайыҡ шул тарихтан аҙаштырған» тип тә яҙҙы. Тарихтың аҙаштырған юлдарынан сығыу сараларын үҙенсә мәғрифәтселек позицияһынан сығып эҙләне.

Әммә нисек кенә булмаһын, Аҡмулла башҡорт шиғриәтен реаль ысынбарлыҡҡа, халыҡ тормошона яҡынайтыуға ифрат ҙур өлөш индергән, халыҡсан-демократик йүнәлешкә күрелмәгәнсә киң ҡолас һәм ҡеүәт биргән, шуның менән яңы әҙәбиәткә ныҡлы нигеҙ һалышҡан ҙур ижадсы булды. Уның шағир булараҡ ҙурлығы реалистик мәғрифәтселек әҙәбиәтен ысын мәғәнәһендә халыҡсан һүҙ сәнғәте кимәленәсә күтәреүендә, поэтик сатираны үткер социаль йөкмәтке менән һуғарыуында, халыҡ ижады менән яҙма әҙәбиәттең иң яҡшы традицияларын үҙ шиғриәтендә гармоник берләштерә алыуында.

**Шиғриәтенең сығанаҡтары, жанр тәбиғәте, поэтик эшләнеше**

Мифтахетдин Аҡмулла – Көнсығыш фәлсәфәһен, эстетикаһын, классик әҙәбиәтен яҡшы үҙләштергән, ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы белгән шағир. Ул үҙе «ғүмеремде сарыф ҡылдым китап ҡарап», ти.

Киткәндәр ниндәй ирҙәр гәүһәр сәсеп,
Уларҙың эштәренең юлы асыҡ.
Ғәжәйеп ҡиммәт эҫәр ҡалдырғандар,
Хикмәттең мәхзәненән мисраҒ (тема) асып, –

*(«Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе»)*

тип яҙған сағында, ул татарҙың күренекле мәғрифәтсе ғалимы Ш. Мәржәниҙе генә түгел, бәлки хикмәтле «мәхзән» – хазиналар тыуҙырған Көнсығыш һәм Көнбайыш мәҙәниәте һәм әҙәбиәте вәкилдәрен дә күҙ уңында тотҡан.

Аҡмулла ижадының Көнсығыш мәҙәни мөхите менән тығыҙ бәйләнештә булыуын уның шиғырҙарында телгә алынған географик атамалар ҙа (Мысыр – хәҙерге Египет, Шам – хәҙерге Сирия, Һиндостан, Стамбул, Ҡаф тауы – Кавказ, Дағстан, Арал, Бағдад, Бохара һ. б.), әҙәбиәт, тарих һәм легендалар буйынса билдәле булған шәхестәрҙең исемдәре лә раҫлап тора.

Был исемдәрҙе шағир, башлыса, поэтик образдар рәүешендә ҡуллана. Әйтәйек, атаҡлы философ Әфләтүнде (Платонды), фекер эйәләре Сөләймән батшаны (Соломонды), Әл-Фарабиҙы, Лоҡман табипты ул ғалимлыҡ һәм зирәклек, Йософто – сабырлыҡ һәм оло йәнлелек, Фирғәүенде, Әбүжәһелде, Аҡһаҡ Тимерҙе яуызлыҡ һәм уҫаллыҡ символдары итеп бирә.

Мәғрифәтсе шағир үҙ ижадында Көнсығыш шиғриәтенең мәҫнәүи, мәҙхиә, мәрҫиә, робағи, хикмәт-парса, нәсихәт, шикәйәт кеүек жанр формаларын уңышлы ҡуллана. Шул ерлектә философик лириканың матур-матур өлгөләрен дә тыуҙыра. Был йәһәттән уның Көнсығыш философтарының дүрт элемент тураһындағы тәғлимәтенән сығып яҙылған ер, һыу, һауа, ут хаҡында парсалары айырыуса хикмәтле. Тәбиғәттә бөтә нәмә лә өҙлөкһөҙ хәрәкәттә, үҙгәрештә, ти шағир. Яҙын «гөрөлдәп, ... ташып», ҡышын «ҡатып», көҙөн «дерелдәп» ятҡан һыу ҙа «ҡай сағында... әкренләп» ҡорой. «Ҡай саҡ дауыл-ғәрәсәт, ... көслө буран» тыуҙырған ел дә бер килеп «аҡрын, яй булалыр», хатта бөтөнләй «тыналыр». Бөтә нәмәне юҡ итә алыусы «ут та, көл булып, ахырында юҡ булыр».

М. Аҡмулланың шиғри парсалары араһында кинәйәле фекерләү тәрәнлеге, фәлсәфәүи тапҡырлығы менән «Тупраҡ» әҫәре айырылып тора. Бына ул:

Нигеҙлерәк барынан да тупраҡ,
Төрлө затты тыуҙыралыр тупраҡ.
Тәбиғәттең үҙгәреше ҡырыйһыҙ –
Тупраҡҡа бары торор туҡрап.
Бына ошондай тәбиғәт төрҙәре
Бер-бер артлы тора бары үҙгәреп…

Шуның кеүек үк, кешелек йәмғиәте лә «һис туҡтамай үҙгәрәлер... теҙелешеп ҡыйын-рәхәт көндәре». Әммә тәбиғәттә бер туҡтауһыҙ барған үҫеш-үҙгәрештәр фонында кеше ғүмере – бер күҙ асып йомған ваҡыт арауығы ғына. Әҙәми заттың шул хәҡиҡәтте аңлауы, ҡыҫҡа ғына ғүмер юлын мөмкин тиклем мәғәнәле итеп уҙғарыуы бик мөһим. Бына ошондай философик ҡараш, һығымталарға барып ялғана Аҡмулланың мәғрифәтселек идеялары. Ул тәбиғәттәге гармонияны кешелек донъяһында ла күрергә теләй. Әҙәм балаларының алтындай ҡәҙерле ваҡыттарын, ҡыҫҡа ғына ғүмерҙәрен мәғәнәһеҙгә уҙғарыуҙарына, ҡараңғылыҡ, битарафлыҡ донъяһында йәшәп ятыуҙарына әсенә, уларҙы яҡтылыҡҡа, аң-белемгә, һөнәргә, әхлаҡи камиллыҡҡа өндәй. Тикмәгә генә шағир халыҡҡа: «Хәл етһә, төрлө фәнде күргән яҡшы, камилдар ҡатарына кергән яҡшы. Урыҫса уҡып ҡына түгел белмәк, хәл килһә, французса белгән яҡшы», – тип мөрәжәғәт итмәй.

Мифтахетдин Аҡмулла шиғриәтенең иң төп, иң баҙыҡ тамыры шулай ҙа тыуған поэтик тупраҡта, халыҡ ижадында. Уның шиғырҙарындағы тыуған ил-ер, халыҡ, ир-егетлек, батырлыҡ, намыҫлылыҡ, әҙәп, инсафлыҡ кеүек ғәзиз төшөнсәләр, изге тойғолар халыҡтың поэтик фекерләү рәүеше һәм образ-тасуирҙар системаһы менән бер туған. Шағир-сәсән башҡорт халыҡ ижадында киң таралған образдарға, тапҡыр һүҙҙәргә, мәҡәл, әйтемдәргә йыш мөрәжәғәт итә, үҙе лә улар менән ярыша алырлыҡ шиғри юлдар тыуҙыра. Бер нисә генә миҫал: «Батырҙы «батыр» тиҙәр – көсөн күргәс, оҫтаны «оҫта» тиҙәр – эшен күргәс», «Йүкәгә май яҡҡан менән ҡайыш булмаҫ», «Аҡсарлаҡ буяу менән тауис булмаҫ, күк тимер ҡайрау менән алмас булмаҫ», «Асыу бысаҡ булғанда, аҡыл – таяҡ», «Ун бәләнең туғыҙы телдән тыуыр, аҡылы бар әҙәмдәр телен тыйыр», «Әҙәми зат ни ҡылһа ла – үҙе өсөн, яманлыҡ ҡылһаң, ахыры бер сәсәрһең» һ. б.

Ғөмүмән, мәргәнлек, афоризм – Аҡмулла шиғриәтенең үткер сифаты ул.

Күк тимер ҡайрау менән алмас булмаҫ,
Күк ишәк ҡорҙаш булып, моңдаш булмаҫ.
Яман дуҫ – ҡара йылан тигән кеүек,
Йәр булып, юха йылан юлдаш булмаҫ...

*(«Урыным – зиндан»)*

Айғырҙан ябыу һалма, яллы икән тип,
Яманға ҡулың һонма, маллы икән тип,
Ҡарсығаның балаһы типмәй төшмәҫ,
Яҡшы ташлап китәме, ярлы икән тип?

*(«Моңло егет зарын әйтер...»)*

Бына шундай мәҡәл, әйтем, тапҡыр һүҙҙәрҙән ойошҡан тулы бер поэтик строфалар Аҡмулла шиғриәтендә күп осрай.

Башҡорт һүҙ сәнғәтенең боронғо жанры ҡобайыр ҙа шағир-сәсән күңеленә бик яҡын. «Нәсихәт», «Тиһеңме?», «Бәхет», «Билдәһеҙ!», «Аттың ниһен маҡтайһың?», «Йырау» кеүек әҫәрҙәрен ул тап ҡобайыр формаһында ижад иткән. Бына, мәҫәлән, «Бәхет» әҫәренән бер өҙөк:

Арғымағың яманлап,
Толпар ҡайҙан табырһың;
Тойғоноңдо (ҡарсығаңды) яманлап,
Шоңҡар ҡайҙан табырһың;
Эскән һыуың яманлап,
Йофар ҡайҙан табырһың;
Күлдең һыуын яманлап,
Иҙел ҡайҙан табырһың...

М. Аҡмулла үҙ ижадында боронғо сәсәндәрҙән, Салауат Юлаев һымаҡ яугир ижадсыларҙан уҡ килгән традицион мәктүп – шиғри хат, хитап – халыҡҡа туранан-тура поэтик мөрәжәғәт формаларын да, 8–7 ижекле ҡыҫҡа лирик йыр формаһын да яратып ҡуллана. Шуныһы хикмәтле, уның мәктүп һәм хитаптары тура һыҙыҡлы ғәҙәти өндәшеүҙәр менән башланып киткәндәй булһалар ҙа, уларға яланғас, ҡоро өгөт-нәсихәтселек хас түгел. Аҡмулла уй-фекерҙәрен төрлө поэтик саралар (сағыштырыу, метафора, йәнләндереү, гипербола, гротеск, эпитет, метонимия, архаизм, неологизм, антитеза, риторик һорау, риторик өндәшеү һ. б.) ярҙамында халыҡ күңелен биләп алырҙай тапҡырлыҡ һәм тасуирилыҡ менән бирергә ынтыла. Мәҫәлән, башҡорт фольклорында, сәсәндәр ижадында киң урын алған шоңҡар образы уның әҫәрҙәрендә яңылыҡҡа һәм яҡтылыҡҡа, ғилем бейеклектәренә ынтылыусы кеше символы булып килә. Һандуғас образы иһә, мөхәббәттән бигерәк, хөр һәм хикмәтле фекер әйтеүсе һүҙ оҫтаһы сәсәнде символлаштыра. Фольклорҙа киң ҡулланылған толпар, арғымаҡ, йондоҙ ҡашҡа, ыласын, бөркөт, арыҫлан, ай, ҡояш, йондоҙ, сулпан кеүек образдарға ла шағир-сәсән үҙенсә кинәйәле мәғәнә һала. Уларҙы йыш ҡына ҡоҙғонға, ҡарғаға, ҡарағошҡа, ишәккә, эткә, дуңғыҙға, төлкөгә, ҡорсаңғы тайға, байғош алашаға, аңра айыуға, һуҡыр ҡуйға һәм башҡаларға ҡаршы ҡуйып һүрәтләй. Ошондай һүрәтләү киңлеге һәм тасуирилыҡ уның әҫәрҙәрендә фекер тапҡырлығын, хәл-күренештәр ғибрәтлелеген, һүҙ үтемлелеген көсәйтә.

Аҡмулланың бөтә шиғриәте, асылда, ҡоро өгөт-нәсихәт, вәғәз һөйләүҙән азат булған, образлы һәм эмоциональ, халыҡсан дидактика менән һуғарылған. Хатта уның традицион шиғри нәсихәттәре лә үҙенсә, Аҡмулласа. Улар, асылда, формаһы менән генә традицион, йөкмәткеһе менән яңыса, мәғрифәтсә тапҡыр фекерле. Мәҫәлән:

Һауаланма атаңдың байлығына,
Ололанма йөҙөңдөң айлығына.
Атаңдың байлығы – төшкән ҡырау тик,
Йөҙөңдөң айлығы – ялған буяу тик.

*(«Һауаланма...»)*

Поэтик дидактика шулай йыш ҡына халыҡсан тәрән фекер, тапҡыр һүҙ рәүешен таба.

Аҡмулланың шиғриәтенә ритм-интонациялар, рифма, строфалар төрлөлөгө лә хас. Ул башҡорт шиғырының 7–7 ижекле ҡобайыр формаһын, һуҙынҡылар (ассонанс), тартынҡылар (аллитерация) яңғырашын, рифмалар системаһын, яҙма поэзиялағы 11–11 ижекле үлсәм, а-а-б-а тибында рифмалашыусы робағи, а-а, б-б, в-в тибындағы мәҫнәүи строфаһын билдәле бер

камиллыҡҡа еткерҙе, а-а, б-а, в-а тибындағы ғәзәл формаһы киң ҡулланылды («Жөда», «Әйләр», «Булмаған» һ. б.). Уның поэтикаһында дүрт юллыҡ, алты юллыҡ, һигеҙ юллыҡ строфалар системаһы нығынды. Юл башы (анафора), юл аҙағы (эпифора) яңғыраштары йыш тыуҙырылды. Уларға эске яңғыраштар ҡушылып, шиғырҙарҙың музыкаллеге һәм хәрәкәтсәнлеге тағы ла көсәйҙе. «Һыу» әҫәре – мәҫәлән, шуның бер генә миҫалы:

Һыу ағалыр, күперәлер гөрөлдәп,
Ҡыш – ҡаталыр, көҙ – яталыр дерелдәп.
Ҡай саҡ ташып, ҡай саҡ ашып ярынан,
Ҡай сағында һыуала әкренләп.

Ғөмүмән, Аҡмулла шиғриәтенең үҙ эске моңон, музыкаллеген айырым-асыҡ тойорға була. Уның байтаҡ шиғырҙары элек халыҡ араһында йыш ҡына көйләп әйтелер булған. Шағирҙың үҙенең дә нәсихәт рәүешендәге әҫәрҙәрен көйләп әйтеүе бик мөмкин.

Йыйып ҡына әйткәндә, Аҡмулла шиғриәте – үҙенсә поэтик хикмәтле лә, йыр-моңло ла, тапҡыр һүҙле лә ижад емеше. Автор үҙе, «һүҙ сығыр шағирҙарҙан хикмәт менән» тип һис ерле юҡҡа әйтмәй. Уның «һәр нәмәгә моң булып ғүмерем үтте» тигәненән халыҡ моңо, ил ғәме, йорт-ер хәстәре хаҡында һүҙ барыуын аңларға мөмкин. Эсендә ҡайғы-хәсрәт, моң тулып ятыр шағир ғына «тәрәндән әйләндереп һүҙ ҡуҙғатыр». Ул һүҙ шағир йөрәге аша үткәндә генә, ысын шиғырға әйләнеп, халҡы йөрәгенә инер ғәмле һүҙ булыр.

**Әҙәбиәт тарихындағы роле**

Аҡмулла – үҙе бер ҙур поэтик мәктәп барлыҡҡа килтергән шағир. XX быуат башында әҙәбиәткә аяҡ баҫҡан демократик башҡорт, татар яҙыусыларының күпселеге, Сәйфи Ҡудаш һүҙҙәре менән әйткәндә, үҙ эшмәкәрлектәрен «Аҡмулла туҡтаған ерҙән алып киттеләр». Ғабдулла Туҡай Аҡмулла ижадын юғары баһаланы, уның әҫәрҙәрен ижади күҙҙән кисерҙе. Мәжит Ғафури Аҡмулла шиғриәте йоғонтоһонда үҙ ижадын башлап, уның алдынғы поэтик традицияларын үҫтереп ебәрҙе. Дауыт Юлтый, Шәйехзада Бабич, Сәйфи Ҡудаш, Сафуан Яҡшығолов һәм башҡа йәш шағирҙар, сәсәндәр «Аҡмулла шиғырҙары менән аҙыҡланып» шиғриәт донъяһына килделәр.

Поэтик мәктәп тыуҙырған ҙур әҙиптәргә хас булғанса, Аҡмулла шиғриәте татар һәм ҡаҙаҡ әҙәбиәттәренә лә көслө йоғонто яһаны. Илгиҙәр Аҡмулланың ҡаҙаҡ далаларында ижад иткән әҫәрҙәренең күбеһе ҡаҙаҡ шиғриәте ерлегенә тоташҡан. Ҡаҙаҡ ғалимдары Аҡмулла шиғриәтендә Абай Ҡонанбаев, Ибрай Алтынсарин ижадтарына яҡын йәки уртаҡ мотивтарҙы табалар.

Аҡмулланың башҡорт әҙәбиәте тарихында тотҡан роле, бөтәһенән дә элек, Мартиниан Иванов, Сәлихйән Күкләшев, Мирсалих Биксурин кеүек башҡорт ғалим-әҙиптәренең ижадында бөрөләнгән мәғрифәтсел йүнәлештәге идеяларҙы билдәле бер системаға һалып үҫтерә һәм әҙәбиәттә төҙөк, бер бөтөн идеологик күренеш кимәлендә, тәрән халыҡсан-демократик рух менән һуғарып сағылдыра алыуында күренә. Ул башҡорт шиғриәтенең идея йөкмәткеһен, художестволы эшләнеш кимәлен ҙур бейеклеккә күтәреште, сатираға ысын мәғәнәһендә граждандлыҡ яңғырашын бирҙе. Башҡорт шиғриәтен ул милли һәм интернациональ һыҙаттар менән байыҡтырҙы. Шуға уның шиғырҙары үҙенән һуң килгән шағирҙарға ла ыңғай йоғонто яһаны, халыҡ араһында яратып уҡылды, уның күңеле түрендә мәңгелеккә урын алған рухи байлығына әүерелде.

Аҡмулла шиғырҙары йыйынтығының, уға арналған монографияларҙың бер нисә тапҡыр башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күреүе, фәнни-ғәмәли конференцияларҙың, «Аҡмулла уҡыуҙары»ның йыл да тиерлек уҙғарылып тороуы, Башҡорт педагогия университетына уның исеме бирелеүе, был вуз янында мөһабәт һәйкәле ҡуйылыуы, тыуған төйәге Миәкә районында музейы, уның исемендәге премияның булдырылыуы – халыҡтың уға булған оло һөйөүенең сағыу билдәләре.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. М. Аҡмулла шиғырҙарын иғтибар менән уҡығыҙ. «Инсафлыҡ» шиғырын фонохрестоматиянан тыңлағыҙ. 2. М. Аҡмулланың тормош юлы хаҡында һөйләгеҙ. Уның яҙмышы А. Пушкин менән М. Лермонтовтыҡына ҡайһы яғы менән оҡшаған? 3. Аҡмулла шиғырҙарының идея-тематикаһын асыҡлағыҙ. Ул нимәне яҡлай, нимәне кире ҡаға? Шуның менән шағир ниндәй идея үткәрә? 4. Шағир-сәсән әҫәрҙәрендә социаль мотивтар ниндәй позициянан яҡтыртыла? 5. Аҡмулланың поэтик оҫталығына, сатирик көсөнә хас төп сифаттарҙы әйтеп бирегеҙ. Сағыштырыуҙарға, поэтик афоризмдарға шиғырҙарынан миҫалдар килтерегеҙ. 6. Ни өсөн Аҡмулланы яҡтылыҡ йырсыһы тип йөрөтәләр? Уның әҙәбиәт тарихында тотҡан урынын билдәләгеҙ. 7. М. Аҡмулланың кластан тыш уҡылған шиғырҙары буйынса әңгәмә үткәрегеҙ.

# МӨХӘМӘТСӘЛИМ ӨМӨТБАЕВ

## (1841 – 1907)

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев – совет осорона тиклемгә башҡорт мәҙәниәте һәм әҙәбиәте тарихында мәңге юйылмаҫ эҙ ҡалдырған, үҙенең күп яҡлы ижади һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге менән Башҡортостанда феодаль иҫкелек ҡалдыҡтарына, схоластик уҡыу-уҡытыу һәм тәрбиә тәртиптәренә, ижтимағи торғонлоҡҡа һәм колониаль иҙеүгә ҡаршы йүнәлтелгән мәғрифәтселек хәрәкәтенең үҫешенә ифрат тос өлөш индергән үҙәк фигураларҙың береһе.

## ТОРМОШ ЮЛЫ

**Уҡыуы**

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев 1841 йылдың 21 авгусында (4 сентябрендә) Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙенең Йомран Табын олоҫона ҡараған Ибраһим ауылында (Башҡортостандың хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы) кантон башлығы ғаиләһендә тыуған. Атаһы Ишмөхәмәт ғүмерен хәрби хеҙмәткә арнаған, есаул (хәҙерге капитан) чинында отставкаға сыҡҡан. Ул үҙ заманының киң ҡарашлы, юғары мәҙәниәтле кешеһе булған: фән һәм әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынған, алдынғы ҡарашлы ижад кешеләре менән бәйләнеш тотҡан. Мөхәмәтсәлимдең әсәһе Бәлхизә лә уҡымышлы, Көнсығыш әҙәбиәтенән, башҡорт фольклорынан ярайһы ғына хәбәрҙар, шиғри хисле, йор күңелле ҡатын булған. Бына ошондай ата-әсәнән алған рухи тәрбиә үҫмер Мөхәмәтсәлимдең артабанғы яҙмышын, тормош юлын билдәләүҙә мөһим роль уйнаған. Тикмәгә генә ул һуңынан атаһын «ғәжәп һиммәтле бер аға», ә әсәһен «йөҙө шәмес (ҡояш), ҡәмәр (ай), йондоҙ» тип, ҙур ихтирам һәм тәрән һөйөү менән иҫкә алмаған.

Башланғыс белемде М. Өмөтбаев үҙ ауылында ала. 1852 йылда атаһы уны Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадет корпусына уҡырға бирә. Унда Мөхәмәтсәлим үҙен бары яҡшы яҡтан күрһәтә: кластан класҡа маҡтау ҡағыҙҙары менән күсә килә, бер нисә йыл эсендә рус, ғәрәп, фарсы, иҫке төрки телдәрен үҙләштерә, француз теле менән таныша. Уҡыу-уҡытыу прог-

раммаһы буйынса был телдәрҙә яҙылған ғилми хеҙмәттәр, әҙәби әҫәрҙәр менән танышыу бары тик юғары кластарҙа ҡаралған булһа ла, ул урта кластарҙа уҡ уларҙы үҙ аллы уҡыу кимәленә етә. Бында, корпуста Көнсығыш телдәрен уҡытҡан ике башҡорт мәғрифәтсе ғалим-әҙибенең – Сәлихйән Күкләшевтең, айырыуса өлкән уҡытыусы генерал Мирсалих Биксуриндың роле ҙур була. Мөхәмәтсәлим корпустан киткәс тә, үҙ хаттарында яҙғанса, «атаһы дәрәжәһендә» күреп яратҡан остазы менән ижади бәйләнеште өҙмәй.

Йәйге каникулға ҡайтҡанында атаһының, йөрөй ҙә алмаҫлыҡ хәлгә ҡалып, ныҡ ауырығанын күргән Мөхәмәтсәлим, атаәсәһе, туғандары менән кәңәшләшкәндән һуң, ғаилә һәм атаһы эше хәстәрлектәрен ваҡытлыса үҙ яуаплылығына алырға ҡарар итә. Ғаиләлә ныҡлы бер уртаҡ фекергә килгәндән һуң, 1860 йылда ул документтарын корпустан бөтөнләй ала. Унан киткәндә, «иптәштәре араһында хөрмәт ҡаҙанған» Мөхәмәтсәлимгә уҡыуҙа иң алдынғы һәм тәртипле кадеттарға бирелә торған махсус ҡылыҡһырлама менән «Зверинец» китабы бүләк ителә. Уның белеме һәм тәртибе иң юғары билдә – 12 балл менән баһалана.

**Хеҙмәте һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге**

Тыуған яғына ҡайтҡас, М. Өмөтбаев кантон идаралығының тәржемәсеһе сифатында башҡорт ғәскәренә хеҙмәткә тәғәйенләнә. 1863 йылда Башҡортостанда кантондар бөтөрөлгәс, ул Ҡырмыҫҡалы олоҫоноң крәҫтиәндәр эше буйынса мировой посреднигы писары[1] булып эшләй башлай. 1869 йылда ошо уҡ олоҫтоң старшинаһы итеп һайлана. Тап бына ошо вазифала эшләгән йылдарында М. Өмөтбаев туған халҡының ауыр тормошон аҙ ғына булһа ла яҡшыртыу өсөн көрәшә башлай. Ләкин тиҙҙән ул бары административ саралар менән сикләнгән тырышлыҡтарының тейешле һөҙөмтәләр бирмәүенә төшөнә. Халыҡҡа аң-белем биреү өлкәһендә эшләү аша уға күберәк файҙа килтерергә мөмкин тигән фекергә килеп, ул 1879 йылда үҙ теләге менән отставкаға сыға һәм Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһе янында асылған рус класында шәкерттәргә рус теле менән арифметиканан дәрес бирә башлай. Унда бер йыл да дүрт ай эшләгәндән һуң, рус, ғәрәп, фарсы һәм татар телдәрен үҙенең туған башҡорт теле һымаҡ белгән М. Өмөтбаев Өфөләге Диниә назаратына (идаралығына) тәржемәсе итеп эшкә саҡырыла. Бер үк ваҡытта ул окружной судта тәржемәсе, етем ир балалар өсөн асылған приютта

---

[1] *Мировой посредник писары* – 1861 йылғы реформа осоронда алпауыттар менән крәҫтиәндәр араһында тыуған бәхәстәрҙе хәл итеү, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен билдәләүсе ҡағыҙәләрҙе (устав грамоталарын) раҫлау өсөн дворяндар араһынан ҡуйылған вазифалы кеше янында төрлө яҙыу-һыҙыу эштәрен башҡарыусы.

уҡытыусы-тәрбиәсе булып эшләй. Өфөлә уға фәнни һәм әҙәби эшмәкәрлек өсөн ярайһы уҡ мөмкинлектәр асыла. Мәҫәлән, ул башҡорт шағирҙары М. Аҡмулла, С. Яҡшығолов, айырыуса ғалим һәм яҙыусы Р. Фәхретдинов, крайҙы өйрәнеүселәр Н. Гурвич һәм М. Лоссиевский менән тығыҙ ижади бәйләнешкә инә. Уның венгр ғалимы В. Пролеға һәм поляк журналисы И. Урсынға кәңәш-фекерҙәре менән ярҙам күрһәткәнлеге лә мәғлүм.

Туған халҡының тарихын, рухи байлығын өйрәнеү буйынса шаҡтай хеҙмәт күрһәтеп өлгөргән М. Өмөтбаев 1883 йылда Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлегенә ағза итеп һайлана һәм уның файҙаһына әүҙем эш алып бара. 1887–1889 йылдарҙа ул Эске эштәр министрлығы тарафынан төҙөлгән махсус комиссия составында Петербургта һәм Ҡырымда (Севастополь, Симферополь һәм Баҡсаһарай ҡалаларында) вакиф[1] эштәрен тикшереү һәм тәртипкә һалыу буйынса ҙур хеҙмәт күрһәтә.

Ошондай төрлө эштәргә күмелеүенә һәм һаулығы насар булыуға ҡарамаҫтан, М. Өмөтбаев йәмғиәт эштәренән дә ситләшмәй.

Земство гласныйы[2] һәм «ярлы мосолмандар» хаҡында хәстәрлек күреүсе Өфө йәмғиәтенең даими ағзаһы булараҡ, был ойошмаларҙа ябай халыҡ файҙаһына әүҙем эш алып бара. 1886 йылда Өфө ҡалаһының 300 йыллығын һәм 1899 йылда А. С. Пушкиндың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләп үтеү айҡанлы ойошторолған юбилей комиссияларында ла, 1891 йылда Өфө губернаһының земство управаһы[3] тарафынан башҡорттар араһында түләүһеҙ таратыу өсөн популяр брошюраларҙы яҙма төрки теленә тәржемә итеү буйынса төҙөлгән махсус комиссияла ла ул илһамланып эшләй. Шул уҡ ваҡытта М. Өмөтбаев туған халҡы араһында аҙнаһына бер тапҡыр 500 тираж менән генә булһа ла гәзит баҫтырып таратыу уйы менән яна. Ләкин уның был ниәтынтылышы батша хөкүмәтенең милли төбәктәрҙәге халыҡтарға ҡарата үткәргән колониаль сәйәсәте шарттарында тормошҡа ашмай ҡала.

**Ғүмеренең һуңғы йылдары**

1899 йылдың 21 авгусында М. Өмөтбаев, сәләмәтлеге ҡаҡшау сәбәпле, отставкаға сыға. Заманы өсөн ҙур вазифаларҙа 38 йыл буйына фиҙаҡәр эшләп, коллежский регистратор[4] (1884), коллежский

[1] *Вакиф* – йәмәғәтселек, халыҡ файҙаһына васыят ителгән мөлкәт.

[2] *Земство гласныйы* – 1864 йылдан башлап Рәсәйҙә һайлау юлы менән төҙөлгән урындағы үҙидара органы (земство йыйылышы йәки земство управаһы) ағзаһы.

[3] *Земство управаһы* – земствоның башҡарма органы. Уның рәйесе һәм 2–3 ағзаһы земство йыйылышында өс йылға бер тапҡыр һайлап ҡуйылған.

[4] *Коллежский регистратор* – Рәсәйҙәге иң бәләкәй 14-се класс гражданлыҡ чины. 1845 йылға тиклем был чин кешегә дворян, ә артабан инде бары почетлы граждан тип иҫәпләнергә хоҡуҡ биргән.

секретарь[1] (1889), титулярный советник[2] (1892) кеүек төрлө чиндарға күтәрелгән, күрһәткән хеҙмәттәре өсөн III дәрәжә Изге Станислав ордены, ике көмөш, бер бронза миҙал менән бүләкләнгән ғалим-әҙип, йәмәғәт эшмәкәре үҙенең биш кешелек ғаиләһе менән йылына ни бары 59 һум да 40 тин күләмендә бирелгән пенсияға ғына ҡарап ҡала. Артабан уға бик ауыр шарттарҙа йәшәргә һәм ижад итергә тура килә. Шуға ла ул йыллыҡ пенсияһын ике тапҡырға ғына булһа ла арттырыуҙы һорап, бер нисә тапҡыр губерна органдарына һәм аҙаҡ килеп «мәрхәмәтле» батшаның үҙенә мөрәжәғәт итә. 1906 йылдың декабрендә уға яҙған һуңғы үтенесендә ул: «Отставкаға сыҡҡандан бирле мин йәшәү сығанағын үҙемдең тәржемәләремде, проза һәм шиғри әҫәрҙәремде баҫтырыу юлы менән табам», – тип яҙа һәм һүҙен: «А. С. Пушкин әйткәнсә, мин ҡышын утынһыҙ, йәйен еңел арбаһыҙ шағир булып йәшәйем», – тип тамамлай. Әммә батша канцелярияһынан уға «үтенес ҡәнәғәтләндерелмәй ҡалдырылды» тигән яуап ҡына килә.

1907 йылдың 28 июнендә үҙенең бөтә ғүмерен һәм һәләтен халҡына хеҙмәт итеүгә арнаған әҙиптең йөрәге тибеүҙән туҡтай.

## ҒИЛМИ-АҒАРТЫУ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

М. Өмөтбаевтың ижади мираҫы күләме менән әллә ни ҙур булмаһа ла, йөкмәткеһе менән ғәжәп бай һәм күп яҡлы. Уның ярайһы ғына өлөшөн ғилми хеҙмәттәр тәшкил итә.

**Тарихсы**

Ғалим булараҡ М. Өмөтбаев үҙен бигерәк тә тарих һәм филология өлкәләрендә күрһәтә. Үҙ ваҡытында уҡ әле Ҡазанда сыҡҡан «Волжский вестник» гәзите (1898, 29 ноябрь) уның «Көнсығыш телдәре белгесе булыуы өҫтөнә... башҡорт халҡының тарихы буйынса киң белемгә эйә» булыуын билдәләй. Үҙенең тарихи-этнографик хеҙмәттәрендә М. Өмөтбаев, быға са ижад иткән башҡорт ғалим һәм яҙыусылары һымаҡ, дини легендаларға, халыҡ мифологияһына һуҡырҙарса эйәрмәй, бәлки реаль тормош факттарына, шул осор рус тарих фәне ҡаҙаныштарына, көнбайыш һәм көнсығыш тарихи сығанаҡтарына, башҡорт шәжәрәләренә һәм фольклоры ҡомартҡыларына таяна. Һөҙөмтәлә, ул туған халҡының боронғо дәүерҙән алып үҙе йәшәгән осорға тиклемге тарихын, матди һәм рухи мәҙәниәтен, хужалыҡ алып барыу формаларын, кәсеп-һөнәрҙәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен фәнни нигеҙҙә ярайһы уҡ төплө

---

[1] *Коллежский секретарь* – Рәсәйҙәге 10-сы класс гражданлыҡ чины. Уға лайыҡ булған кешеләр иң түбәнге етәксе вазифаларҙы биләгәндәр.

[2] *Титулярный советник* – Рәсәйҙәге 9-сы класс чины. 1845 йылдан башлап был чин кешегә дворянлыҡ хоҡуғы биргән.

һәм дөрөҫ яҡтыртыуға өлгәшә («Башҡорттар», «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» һ. б.). Ул уның тормошондағы һынылышлы һәм әһәмиәтле моменттарҙы өйрәнеүгә айырыуса иғтибар итә. Мәҫәлән, башҡорт ғалимдары араһынан беренсе булып Башҡортостандың Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуын иҫбатлай, уны ыңғай күренеш, башҡорт халҡы тарихындағы «аҡ көндәр» тип баһалай, рус-башҡорт хужалыҡ, мәҙәниәт һәм әҙәби бәйләнештәрен яҡлай. Шул уҡ ваҡытта дөрөҫлөккә тоғро ғалим был тарихи акттың кире яҡтарын, үҙе әйткәнсә, «ҡара көндәрен» дә ситләтеп үтмәй, батша колонизаторҙарының крайҙы аяуһыҙ талауын тәнҡитләй («Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре», «Кесе Табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран Табын ере» һ. б.).

**Әҙәбиәт белгесе һәм фольклорсы**

М. Өмөтбаев филология өлкәһендә күп яҡлы эштәр башҡара. Беренсе սиратта ул үҙен фольклорсы һәм әҙәбиәт белгесе итеп таныта. Борондан килгән йола буйынса «аҫаба башҡортҡа» халҡының тарихын, ырыуының шәжәрәһен генә түгел, ауыҙ-тел ижадын белеү ҙә, йондоҙҙарҙың серенә төшөнөп, шуның буйынса эш итеү ҙә мотлаҡ, ти М. Өмөтбаев. Үҙенең «Башҡорттар» (1876), «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» (1886) тигән хеҙмәттәрендә ул башҡорт әҙәбиәтенең үткәненә дөйөм күҙәтеү яһап, уның ике формала – телдән һәм яҙма рәүештә ижад ителеүен һәм йәшәүен күрһәтә, ныҡ үҫешкән фольклор менән бер ҡатарҙан яҙма әҙәби әҫәрҙәрҙең дә ярайһы уҡ таралған булыуын билдәләй. Уның раҫлауынса, уларҙың араһында Болғар дәүләте осоронда «талантлы шағир тарафынан төрки телендә шиғыр менән яҙылған» һәм «башҡорттар... ҡәнәғәтләнеп уҡыған... «Йософ вә Зөләйха», «Ҡисса-и Сәйфелмөлөк», «Таһир–Зөһрә» кеүек донъяуи йәки ярым дини характерҙағы әҫәрҙәр айырылып тора. Ғалим урта быуаттарҙа бындай әҫәрҙәрҙәге «нурҙар»ҙы илаһи, изге заттар, хәлифәләр һәм батшалар тураһындағы «фарсы һәм ғәрәп тәржемәләре, ... Мәккәгә йөрөй башлаған муллаларҙың», суфый шағирҙарҙың әҫәрҙәре ҡаплай башлауын да күрмәй ҡалмай. Уның хеҙмәттәрендә әҙәбиәттең лирика (поэзия) төрөнә, йыр һәм ҡобайыр жанрҙарына ҡыҫҡаса характеристика бирелә, Т. Ялсығолов, Ә. Ҡарғалы, Һ. Салихов, Х. Жданов кеүек шағирҙарҙың, сәсәндәрҙең, ғалим-педагогтарҙың тормошо һәм ижады хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр осрай. М. Аҡмулла хаҡындағы ҙур булмаған мәҡәләһендә ул уны, «мәшһүр шағир» тип, юғары баһалай, уның төрмәлә яҙған шиғырҙарын XIX быуат башҡорт шиғриәтенең иң яҡшы өлгөләре рәтенә ҡуя. Ғалим айырыуса башҡорт ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыйып өйрәнеүгә иғтибар итә. Уларҙа ул, бер яҡтан, халыҡтың ысын тарихын тыуҙырыу, икенсе яҡтан, уның күңел донъяһына йоғонто яһау,

уға аң-белем һәм әхлаҡи тәрбиә биреү сығанаҡтарын күрә. Баҫтырған ҡобайыр өҙөктәренең, легенда һәм риүәйәттәренең, мәҡәл һәм әйтемдәренең башлыса белемгә һәм һөнәргә эйә булыу, кешелеклелек һәм кеселеклелек, дуҫлыҡ һәм бер-береңә ярҙам итеү, батырлыҡ һәм Ватанға тоғролоҡ ише идеяларҙы сағылдырыуҙары – шуның асыҡ дәлиле.

Шуныһы мөһим: М. Өмөтбаев үҙендә туған халҡының рухи тормошона ҡағылышлы мәсьәләләрҙе лә сағылдырған тарихи-этнографик хеҙмәттәрен, фольклор материалдарын рус теленә тәржемә итеп тә баҫтыра. Шуның менән туған халҡының тарихына, тормош-көнкүрешенә һәм рухи мәҙәниәтенә киң йәмәғәтселектең иғтибарын йүнәлтергә тырыша. Шул уҡ ваҡытта ул башҡорттарҙы башҡа халыҡтарҙың тарихы, мәҙәниәте, фәнни-техник һәм әҙәби ҡаҙаныштары менән таныштырыуға ла ҙур әһәмиәт бирә. Был йәһәттән уның «Бөйөк шағир Александр Пушкин» тигән мәҡәләһе фәһемле. Унда автор Пушкинға милли сикләнгәнлектең бөтөнләй ят булыуын, уның әҫәрҙәренең Рәсәйҙең бөтә халыҡтарына ҡарата тәрән һөйөү һәм теләктәшлек менән һуғарылыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала, үҙ халҡын «беҙҙең телдәрҙе лә матурларлыҡ» был әҫәрҙәрҙе уҡырға һәм өйрәнергә саҡыра.

**Тел белгесе**

Ысын мәғәнәһендә демократ мәғрифәтсе булған М. Өмөтбаев тел ғилеме өлкәһендә лә ҙур эшмәкәрлек күрһәтә. Ул киң массаға аңлашылмаған, әммә һаман да фәнни һәм әҙәби ҡулланылышта булған, ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған «төрки» телен үҙгәртмәй тороп, туған халҡын төрлө фән нигеҙҙәре менән таныштырыу, аң-белемле итеү эшен яйға һалыу, уның мәҙәниәтен һәм әҙәбиәтен йылдамыраҡ үҫтереү мөмкин түгеллеген яҡшы аңлай. Шуға ла ғалим халыҡтың йәнле һөйләү теленә ауаздаш булған әҙәби тел барлыҡҡа килтереү өҫтөндә ең һыҙғанып эшләй. Остаздары С. Күкләшев, М. Биксурин, татар мәғрифәтселәре Х. Фәйезханов, Ҡ. Насыри традицияларын дауам иттереп, туған теленә гражданлыҡ хоҡуғы биреү өсөн көрәшә, шул юлда үҙен лексикограф, лексиколог, фонетист һәм грамматист булараҡ таныта. Ул халыҡтың һөйләү теленә ауаздаш, яҡын булырға тейешле яҙма әҙәби телдең фәнни терминологияһын булдырыуға күп көс һала. Ғәрәпсәнән алып йөрөтөлгән терминдар урынына ул, беренсе сиратта, әсә һәм Көнбайыш телдәренең, атап әйткәндә, рус, грек һәм латин телдәренең һүҙҙәрен файҙалана. Мәҫәлән, дүрт ғәмәлде белдерә торған ғәрәпсә *«жәмге»*, *«тәфриҡ»*, *«зарб»*, *«тәҡсим»* һүҙҙәре урынына ғалим *«йыйыу»*, *«алыу»*, *«күбәйтеү»*, *«бүлеү»* һүҙҙәрен терминлаштыра. Уның тел ғилеме һәм башҡа фән өлкәләренә ҡағылышлы хеҙмәттәрендә *тауышлы, ҡаты, йомшаҡ, тамаҡ хәрефтәр, бүлем (ижек), сифат, кинәйә*

*(алмаш), төшөм (килеш), күмәк (күплек), ялғыҙ (берлек), һан исемдәре, төп һүҙ (тамыр һүҙ), ҡушыйән һүҙ, һан, йыл, ай, көн, йондоҙ, ҡояш, телескоп, компас, гуманист, ориенталист, эпос, дума, өйәҙ, губерна* һәм башҡа терминдарҙы осратырға була. Уларҙың күбеһен ғалим беренсе тапҡыр ҡулланыуға индерә. Хәҙерге көндә был терминдарҙың бөтәһе лә тип әйтерлек башҡорт әҙәби теленең айырылғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил итә.

М. Өмөтбаевтың тел өлкәһендәге иң ҙур хеҙмәте – «Татар нәхүһенең мохтасары» (1901). Ул үҙенең төҙөлөшө һәм йөкмәткеһе менән бығаса донъя күргән татар грамматикаларынан ныҡ айырыла. Унда автор, ғәрәп һәм фарсы грамматикалары өлгөләренә эйәрмәйенсә, рус телселәренең хеҙмәттәренә юҫыҡ тота. Башҡорт һәм татар телдәренең үҙенсәлекле һыҙаттарын асып биреү маҡсаты менән уларҙың факттарын рус теле менән сағыштыра; туған теленең фонетикаһын тулыһынса сағылдыра алмаған ғәрәп алфавитына яңы хәрефтәр өҫтәй; дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен халыҡтың йәнле һөйләү теленә нигеҙләнеп эшләй. Былар бөтәһе лә М. Өмөтбаевтың халыҡ тормошона яҡын торған, алдынғы рус, Көнбайыш мәҙәниәтенә йөҙ борған демократик ҡарашлы ғалим булыуын күрһәтә. Асылда ул «башҡорт халҡы», «башҡорт лөғәте» тигән төшөнсәләрҙе үҙ хеҙмәттәрендә тәүләп киң ҡулланған, башҡорт теленең әҙәбиәт һәм фән теле була алыуын беренселәрҙән булып төплө иҫбатлап биргән ғалим һәм яҙыусы булды.

## ӘҘӘБИ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

XX быуатҡа ингәндә Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев шағир, публицист һәм тәржемәсе булараҡ та киң таныла. «Башҡорттарҙың Сәлим Өмөтбаев тигән 60 йәшлек үҙ шағиры бар, – тип яҙа «Уфимские губернские ведомости» гәзите (1903, 11 июнь). – Ул тулҡынландырғыс һәм көслө стилгә эйә. Пушкиндың «Баҡсаһарай»ын бик һәйбәт тәржемә итте; Ҡазанда ла, Ырымбурҙа ла, Уралда ла, Өфөлә лә киң билдәле». Бынан бер аҙ элек, 1898 йылдың 29 ноябрендә «Волжский вестник» гәзите иһә: «М. И. Өмөтбаев шиғырҙарынан бигерәк тә «Васыят һәм нәсихәт» тигәне уҡыусының иғтибарын тарта. Был шиғыр тәрән мәғәнәле, матур телле булыуы менән айырыла», – тип күрһәтә.

**М. Өмөтбаев шиғырҙарының үҙенсәлеге**

М. Өмөтбаев шиғриәткә, ғөмүмән, әҙәбиәткә беренсе сиратта аң-белем һәм әхлаҡи тәрбиә дәреслеге итеп ҡарай. Шуға ла уның «Нәсихәт», «Бәйет», «Васыят һәм нәсихәт» кеүек тәүге шиғырҙарында өгөт-нәсихәт өҫтөнлөк итә. Шағир, кешенең йәмғиәттәге урыны һәм дәрәжәһе байлыҡ менән түгел, ә башҡарған эше, белем һәм әхлаҡ кимәле менән билдәләнергә

тейеш тип, үҙ халҡын ғилемгә, юғары мәҙәниәткә һәм әхлаҡ сифаттарына эйә булырға өндәй. Был теләктәрҙе тормошҡа ашырыуҙа ул диндең, «мәрхәмәтле» батшаның һәм бай кешеләрҙең ярҙамдарына ла өмөт бағлай.

Ләкин М. Өмөтбаев шиғриәтенең төп асылын дингә һәм батшаға инаныу, миһырбанлы байҙарға өмөт бағлау тойғоһо менән сыбарланған шиғырҙары түгел, бәлки тыуған еренә һәм халҡына тәрән мөхәббәт, уны талаусыларға һәм йәберләүселәргә оло нәфрәт менән һуғарылған әҫәрҙәре билдәләй. Уларҙың төп геройы – халҡының шатлығын да, ҡайғыһын да уртаҡлашҡан кешелекле кеше, тыуған ерен ғәзиз йәнеләй күргән патриот граждан. Был шиғырҙарҙың мөһим үҙенсәлеге – башҡорт тематикаһына яҙылған булыуҙарында.

М. Өмөтбаев үҙен беренсе сиратта шағир-тарихсы, шағир-этнограф итеп күрһәтә. Шуға ла уның күпселек шиғырҙары («Үткән ғүмер – ҡалған хәтер», «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы», «Урмансы» һ. б.) уҡыусыла образлы уй, эстетик зауыҡ тыуҙырыуҙан бигерәк, уға белем, төрлө мәғлүмәт биреү хеҙмәтен үтәй. Уларҙа автор башҡорт халҡының тарихына, тормош-көнкүрешенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм йолаларына бәйле хәл-ваҡиғаларҙы йәки күренештәрҙе, билдәле бер шиғри ҡалыпҡа, рифмаға һалып, ябай ғына итеп теҙеп һөйләп бирә.

М. Өмөтбаевтың «Йомран иле», «Бында ерҙең ниғмәттәре», «Шикәйәт» шиғырҙарында инде образлы фекерләү, тасуири тел үҙен ярайһы уҡ һиҙҙертә. Шағир, уҡыусының аңына ғына түгел, күңеленә лә тәьҫир итерлек һүрәтләү сараларына мөрәжәғәт итеп, тыуған еренең матур тәбиғәтен эске бер йылылыҡ һәм ғорурлыҡ менән тасуирлай. Ләкин уның өсөн гүзәл Ағиҙел, «аҡ ҡалпаҡ» кеүек күлдәр, «ыласын уйнар яҫы болондар», мөһабәт ағаслыҡтар, «хуш еҫле шиңмәҫ гөлдәр» һоҡланыу предметтары ғына түгел, бәлки халыҡтың көн күреү сығанаҡтары ла. Шуға ла ул Башҡортостан тәбиғәтенең колонизаторҙар тарафынан вәхшиҙәрсә таланыуын күреп көйөнә, халҡының киләсәк яҙмышы өсөн борсола. Был тойғо бигерәк тә уның «Шикәйәт» шиғырында асыҡ сағыла:

Аяҡлы мал тамам бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстрханға уҙҙы.
Уның артынса осто ҡорт һәм әре,
Юҡ инде тау кеүек ағас тауары.

М. Өмөтбаевтың «Йомран иле» шиғырын, айырыуса «Шикәйәт» әҫәрен башҡорт мәғрифәтселегенең аҫабалар ерен аяуһыҙ талауға киҫкен ҡаршы сыҡҡан антиколониаль характерҙағы хәрәкәт булыуын иң сағыу күрһәткән тәүге әҫәрҙәр тиергә мөмкин.

**«Ҡайыш илә Йүкә» мәсәле**

«Йомран иле», «Шикәйәт» шиғырҙарында күтәрә биреп ҡуйған социаль мотивтарҙы М. Өмөтбаев «Ҡайыш илә Йүкә» мәсәлендә бергә йыйып үҫтерә, киҫкенләштерә төшә. Унда ул бай менән ярлының йәмғиәттәге социаль хәлен, бер-береһенә ҡаршы торған ике көс булыуын кинәйә менән бөтә дөрөҫлөгөндә асып һала. «Алтын-көмөшлө» һәм «майлы өсөн хөрмәт тапҡан» Ҡайыш Йүкәнең «ебәк таҫма кеүек гүзәл төҫө»нән, ҡылған эшенән – «күп ергә дәүләт сәсеүенән» көнләшә һәм, уның илен туҙҙырып ташламаҡсы булып, алышҡа сыға. Әммә Йүкә һис тә бирешмәй: хәле бөтә башланымы, күлгә төшә һалып, һыу эсә лә, көс алып сыға. «Дошман һыу эсеп тапты ҡеүәт» тип, Ҡайыш та һыуға инә һәм бөтөнләй эштән сыға: ебеп «һуҙылып китә», унда «май әҫәре ҡалмай». Бында шағир Йүкә образы аша хеҙмәт кешеһен, Ҡайыш аша бай ҡатлам вәкилен символлаштырһа, күл йөҙөндә халыҡ массаһын күҙ уңында тота. Әҫәрендә ул уҡыусыға хеҙмәт кешеләре иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкәндә көс-таяныста һәр саҡ халыҡтан таба, ә бына байҙар ярлыларға ҡаршы көрәшеү өсөн халыҡҡа ярҙам һорап баралар икән, ул саҡта байлыҡтарынан да ҡолаҡ ҡағыуҙары мөмкин тигән фекерҙе еткермәксе. Был фекер мәсәлдең моралендә тағы ла бер тапҡыр раҫлана:

Шифа тапһа берәү сиренә һыуҙан,
Зарар килер берәүгә шул дарыуҙан.
Ҡыйынһынһа берәүҙең барлығынан,
Ҡолаҡ ҡағыр шул көнсөл байлығынан.

Ошондай тәрән социаль мәғәнәгә эйә булған был мәҫәл башҡорт шиғриәтенең ике быуат сигендәге һәйбәт бер өлгөһө булып тора.

**Мөхәббәт лирикаһы**

М. Өмөтбаев шиғырҙарының бер өлөшө мөхәббәт һәм әхлаҡ темаларына яҙылған. Уның шиғриәтендә мөхәббәт – бөтәһенән дә элек кешенең әхлаҡ йөҙө күрһәткесе. Шағир өсөн «мөхәббәт» һәм «кешелеклелек» бер-береһенән айырылмаҫ төшөнсәләр. Уныҫса, мөхәббәт – ул иң беренсе сиратта һөйгәнең йөҙөндә хөрмәтләгән ысын кешене, тоғро дуҫты күреү тигән һүҙ. «Кемгә хәлем һөйләйем?», «Һағыныу», «Һағыныу хаты», «Минең ғишығым» шиғырҙарында автор мөхәббәттең кеше тормошон шатлыҡтары менән генә түгел, ғазаптары менән дә «биҙәүсе» бик ҡатмарлы хис-тойғолар күренеше булыуын күрһәтеп бирә. «Дуҫҡа» шиғырында ул ана шул ғазаптарға дусар булғандарҙы сабыр булырға, һөйгәндәренә таяныс, тоғро дуҫ булып ҡалырға өндәй.

Мөхәббәт тойғоларын тәрән, образлы итеп биреүе яғынан М. Өмөтбаевтың «Бер ҡалала гүзәл күрҙем» әҫәре айырылып тора. Жанр йәһәтенән уны бәләкәй лирик поэма тип иҫәпләргә

була. Унының лирик геройы бер ҡалала бик һылыу ҡыҙҙы осрата һәм уның йөрәгенә ғишыҡ уты һалып китә. Бер заман, яңынан юл төшөп, шул ҡаланан үтеп барғанда, «осҡа еккән аҡ ял туры» ҡапыл ҡыҙ йортона «ҡайырып керә». «Ҡунаҡ» бик уңайһыҙ хәлдә тороп ҡала: ҡыҙ уға ғашиҡ булыуын әйтеп һала. Лирик герой бик тәьҫирләнә, тәрән кисерештәргә бирелә, әммә, араларындағы йылдар айырмаһына һылтанып, ҡыҙға өҙөп кенә яуап ҡайтармай, өнһөҙ тороуҙан ары китмәй. Унда йөрәк ҡушыуына, хис-тойғоларға бирелеүгә ҡарағанда, аҡыл, әҙәплелек өҫтөнлөк итеңкерәй. Һуңынан ул яуапһыҙ ҡалған мөхәббәт ғазаптарынан «япраҡ кеүек һарғайған» ҡыҙҙан хәсрәтле хат ала.

Ғазаплы мөхәббәт кисерештәрен ошо рәүешле романтик та, драматик та планда бик сағыу һүрәтләгән был әҫәр уҡыусыны тулҡынландырыу, ныҡ ҡына уйландырыу көсөнә эйә. Шул яғы менән ул XVIII–XIX быуаттарҙағы башҡорт мөхәббәт лирикаһының иң яҡшы өлгөләре рәтендә тора.

Дөйөм алғанда, М. Өмөтбаевтың шиғырҙары йөкмәткеһе яғынан башҡорт халҡының ижтимағи тормошо менән ныҡ бәйләнгән. Теленең аңлайышлы булыу йәһәтенән дә Өмөтбаев үҙенә тиклем ижад иткән шағирҙарҙан өҫтөн тора. Ә бына поэтик эшләнеше, художестволылыҡҡа өлгәшеү кимәле буйынса ул уларҙан әллә ни айырылмай, хатта ҡайһы берҙәренән ҡалыша ла.

**М. Өмөтбаев – публицист**

Был өлкәлә лә ул үҙен туған халҡының тормошо һәм яҙмышы менән бөтә күңелен биреп ҡыҙыҡһынған патриот яҙыусы итеп күрһәтә. Үҙенең «Йәмғиәт тәртиптәре», «Халыҡ байыймы әллә ярлыланамы?», «Халыҡ мәғарифын юлға һалырға», «Өршәк күпере» кеүек мәҡәләләрендә, «Рәсәйҙәге «Первое товарищество» циркында» тигән фельетонында автор ҡыйыу рәүештә батша колонизаторҙарының, реакцион матбуғаттың һәм фәндең «башҡорттар тәбиғәте менән ялҡау һәм аҡыл эшенә һәләтһеҙ» тигән уйҙырмаларын, батшалыҡтың бәләкәй халыҡтарҙы йәберләү, уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу сәйәсәтен фашлай. Конкрет дәлилдәр менән ул башҡорт халҡының бөлгөнлөктә йәшәүе йәмғиәттә хөкөм һөргән «ғәфү иткеһеҙ тәртиптәргә» бәйле булыуын күрһәтеп бирә. Публицист был тәртиптәрҙе – батша хөкүмәтенең башҡорт ерҙәрен һатыу хаҡындағы закондарын, чиновниктарҙың бюрократизмын, иҫкелек ҡалдыҡтарын, байҙарҙың халыҡты талауҙағы хәйләкәр һәм рәхимһеҙ эштәрен нәфрәтләнеп тәнҡитләй. Үҙе үк әйткәнсә, ул ысын мәғәнәһендә «ғауамдың (ябай халыҡтың) ходатайы»на әүерелә.

Ләкин М. Өмөтбаев халыҡты бәхетле тормошҡа алып сығыу өсөн йәмғиәтте тамырынан үҙгәртеп ҡороу кәрәклеген аңлау

кимәленә күтәрелмәй. Ул айырым саралар күреү, реформалар үткәреү, халыҡты мәҙәниле, белемле итеү юлы менән уны фәҡирлек упҡынынан ҡотҡарырға мөмкин тип уйлай. Шуға ла мәғариф, фән һәм әҙәбиәт мәсьәләләренә ҙур иғтибар бүлә. Мәҡәләләрендә ул мәғариф эшен иң элек балаларҙы үҙ телдәрендә уҡытыуҙы яйға һалыуҙан, төрлө фәндәр буйынса дәреслектәрҙе һәм хеҙмәттәрҙе был осорҙа башҡорттар өсөн дә яҙма әҙәби тел ролен үтәй башлаған татар теленә тәржемә итеүҙән, ошо телдә гәзиттәр һәм төрлө уҡыу әсбаптары сығарыуҙан башларға кәрәк тигән тәҡдимдәр менән сыға.

Туған халҡының мәҙәни һәм белем кимәлен күтәреүҙең бер юлын М. Өмөтбаев рус халҡы менән дуҫлыҡты нығытыуҙа күрә. «Ватан һәм дәүләт ҡарашынан рус һаналғанлыҡтан», беҙ ҙә рус мәҙәниәтенә «яҡын мөнәсәбәтле булып торабыҙ» һәм уны «белмәк беҙгә тейештер», ти публицист. Ошо ҡараштан сығып, ул «Мәскәү хаҡында күңел мөһөрө», «Петербург хаҡында күңел мөһөрө», «Петербургта ғәжәйепхана нәүғе[1]» тигән юлъяҙмаларында, «Бөйөк шағир Александр Пушкин» мәҡәләһендә башҡорттарҙы алдынғы рус мәҙәниәте, фәне һәм әҙәбиәте менән таныштыра, был һәм башҡа алға киткән халыҡтарҙың ҡаҙаныштарын үҙләштерергә, замандан артҡа ҡалмаҫҡа саҡыра. Башҡорт мәҙәниәте тарихында ул тәүгеләрҙән булып Хафиз, Сәғҙи, Науаи, Шекспир, Гёте, Шиллер, Пушкин, Толстой кеүек генийҙар ижад иткән телдәрҙе өйрәнеү, уларҙың әҫәрҙәрен Рәсәй халыҡтары телдәренә тәржемә итеү мәсьәләһен көн үҙәгенә ҡуя.

М. Өмөтбаевтың публицистик әҫәрҙәре эстәлеге менән генә түгел, аңлайышлы итеп, ябай тел менән яҙылыуы йәһәтенән дә халыҡҡа яҡын. Улар башҡорт публицистикаһының халыҡсан-демократик йүнәлештә үҫеүенә көслө этәргес бирә.

**М. Өмөтбаев – тәржемәсе**

М. Өмөтбаев тәржемәне мәҙәниәт һәм әҙәбиәтте үҫтереүҙең мөһим сығанағы итеп иҫәпләй. «Бөйөк тәржемәсе шағирҙарҙың һәм яҙыусыларҙың кешелек донъяһына хеҙмәт итеүҙәре уларҙың әҫәрҙәре төрлө телдәргә тәржемә ителгәнлектән килә», – тип, ул, алда әйткәнебеҙсә, донъя әҙәбиәте классиктарының әҫәрҙәрен Рәсәйҙең бәләкәй халыҡтары телдәренә лә тәржемә итеү идеяһын күтәреп сыға. Үҙе үк уны тормошҡа ашырыу юлында ҙур хеҙмәт күрһәтә. Башҡорт тәржемә әҙәбиәте тарихында беренсе булып ул бөйөк Пушкиндың «Романс», «Наслаждение», «Делибаш» шиғырҙарын һәм «Бахчисарайский фонтан» поэмаһын татар теленә тәржемә итә.

---

[1] *Нәүғе* – төрө, тармағы.

А. С. Пушкин шиғырҙары – поэзияның камил өлгөләре. Уларҙы тәржемәләү өсөн шиғри оҫталыҡ ҡына аҙ. Уға ҡыйыулыҡ һәм тырышлыҡтың өҫтәлеүе, тәржемәсенең бөйөк шағир әҫәрҙәренең матурлығын ысынлап күрә, уларҙа сағылған уй-фекерҙәрҙе, хис-тойғоларҙы үҙ күңеле аша үткәрә алыуы кәрәк. Быны М. Өмөтбаев яҡшы аңлай. Ул шул осорҙа тәржемә өлкәһендә киң таралған нөсхә әҫәр менән үтә иркен эш итеү, уны урындағы халыҡтың психологияһына, тормош һәм образлы фекерләү тәжрибәһенә ярашлы рәүештә үҙгәртеү алымынан баш тарта. Үҙенең тәржемәләрендә Пушкин шиғырҙарына хас үҙенсәлектәрҙе мөмкин тиклем сағылдырырға тырыша.

М. Өмөтбаев борондан килгән башҡорт һәм Көнсығыш әҙәбиәттәре бәйләнеше традицияларын үҫтереүгә лә үҙ өлөшөн индерә. Мәҫәлән, ул ғәрәптәрҙең ер йөҙөндә киң билдәлелек алған «Мең дә бер кисә» китабынан «Торба, балаҫ һәм алма хикәйәте»н татар теленә тәржемә итә. Шул уҡ ваҡытта тәржемәсе рус, ә уның аша Рәсәйҙең башҡа халыҡтарын башҡорт һәм Көнсығыш халыҡтарының рухи байлығы менән таныштырыуҙы үҙенең изге бурысы һанай. Уның башҡорт, төрөк, ғәрәп, фарсы һүҙ сәнғәттәренең айырым өлгөләрен («Боронғо башҡорттарҙың өләңдәре[1] һәм йырҙары», «Өфө губернаһы мосолмандарының ырымдары, хөрәфәттәре, мәҡәл-әйтемдәре һәм хикмәтле һүҙҙәре» һ. б.), үҙенең ҡайһы бер публицистик мәҡәләләрен, «Шикәйәт» шиғырын рус теленә тәржемә итеүе – шуның асыҡ дәлиле.

Шул рәүешле, М. Өмөтбаев үҙ тәржемәләре менән башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество йәһәтенән байыуына, рус һәм башҡа халыҡтарҙың һүҙ сәнғәттәре менән бәйләнеше нығыуына ярайһы уҡ булышлыҡ итә.

**М. Өмөтбаев ижадының әһәмиәте**

М. Өмөтбаев XIX быуат әҙиптәренең барыһына ҡарағанда ла үҙ халҡына яҡын торҙо, уны мәғрифәт, бәхетле тормош юлына алып сығыу өсөн бар булмышын биреп хеҙмәт итте. Ул башҡорттарҙың һәр йәһәттән алға китеүен теләне. Кәмһетелгән, йәберһетелгән халҡы хаҡында киң йәмәғәтселектә дөрөҫ ҡараш булдырырға ынтылып, уның тарихындағы «аҡ һәм ҡара көндәрҙе» күрһәтте, әҙәбиәтен һәм телен өйрәнде, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыйып баҫтырҙы. Үҙенең шиғырҙарында һәм публицистик мәҡәләләрендә башҡорт ысынбарлығының көнүҙәк мәсьәләләренә мөрәжәғәт итте. Уға милли сикләнгәнлек бөтөнләй ят булды. Мәғрифәт нурҙары эҙләп, ул алдынғы рус, Көнбайыш Европа һәм Көнсығыш мәҙәниәтенә мөрәжәғәт итте,

---

[1] *Өләң* тип М. Өмөтбаев ҡобайыр жанрын атаған.

башҡорт халҡын уларҙың ҡаҙаныштары, төрлө фән нигеҙҙәре менән таныштырҙы. Үҙенең ошондай күп яҡлы ижади эшмәкәрлеге менән ул Башҡортостанда ижтимағи аңдың, фәнни фекерҙең һәм әҙәбиәттең үҫешенә тос өлөш индерҙе, башҡорт мәҙәниәте тарихында юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевты ниндәйерәк кеше итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Уның балалыҡ йылдары, ата-әсәһенә ҡарата булған мөнәсәбәте хаҡында һөйләгеҙ. 2. М. Өмөтбаевтың уҡыуға ҡарата булған ҡыҙыҡһыныуын күҙ алдына баҫтырығыҙ, фәнгә, әҙәбиәткә булған һөйөүен билдәләгеҙ. 3. М. Өмөтбаевтың ижади таланты үҫешендә Мирсалих Биксуриндың ролен асыҡлағыҙ. Хеҙмәте һәм ижтимағи эшмәкәрлеге тураһында һөйләгеҙ. 4. М. Өмөтбаев ниндәй фән өлкәләрендә эшләгән? Уның тарихсы, фольклорсы, әҙәбиәт һәм тел белгесе булараҡ ҡаҙаныштарын күрһәтегеҙ. 5. М. Өмөтбаевтың шиғриәткә ҡарашын асыҡлағыҙ. Шиғырҙарында ул ниндәй темаларға мөрәжәғәт иткән, ниндәйерәк идеяларҙы сағылдырған? 6. М. Өмөтбаев шиғырҙарының художестволы үҙенсәлектәрен күрһәтегеҙ. 7. Ғалим-әҙиптең публицистика өлкәһендәге эшмәкәрлегенең төп һыҙаттары хаҡында һөйләгеҙ. 8. М. Өмөтбаевтың тәржемәгә ҡарата мөнәсәбәтен асыҡлағыҙ, шул өлкәләге эшмәкәрлеген яҡтыртығыҙ. 9. М. Өмөтбаев ижадына хас иң мөһим үҙенсәлектәр нимәләрҙән тора һәм әҙәбиәт тарихында ниндәй урын ала?

# РИЗАИТДИН ФӘХРЕТДИНОВ

## (1859 – 1936)

Ризаитдин Фәхретдинов – үҙенең ижади эҙләнеүҙәрендә XIX быуат аҙағындағы – XX быуаттың тәүге сирегендәге башҡорт ижтимағи фекере, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте үҫешенең характерлы яҡтарын шаҡтай тулы сағылдырған киң ҡоласлы талант эйәһе. Был осорҙағы башҡорт мәҙәниәтенең, фәненең, әҙәбиәтенең һәм журналистикаһының үҫеш кимәлен уның ижади эшмәкәрлегенән тыш күҙ алдына килтереүе ҡыйын.

## ТОРМОШ ЮЛЫ

**Уҡыуы**

Ризаитдин Фәхретдинов 1859 йылдың 16 (иҫке стиль менән 4) ғинуарында Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙенә (Татарстандың хәҙерге Әлмәт районына) ҡараған Кисеүсат (икенсе исеме Юлдаш) тигән ауылда Фәхретдин исемле аҫаба башҡорт муллаһы ғаиләһендә донъяға килә. Уның бик ишле ғаиләһендә Ризаитдин һигеҙенсе бала булып үҫкән. Отҡор, сос малай 4–5 йәшендә әсәһе Мәһүбә абыстайҙан хәреф танырға, уҡырға өйрәнә. Башланғыс белемде тыуған ауылындағы мәҙрәсәлә атаһынан алғандан һуң, ул күрше Түбән Шилселе ауылының ҙур мәҙрәсәһендә уҡый. Унда 10 йылға яҡын, 20 йәшенә саҡлы, һуҙылған уҡыуының һуңғы йылдарында, үҙе яҙғанса, «бик һуңлап булһа ла», рус телен өйрәнә. Һәләтле, тырыш шәкерткә юғары кластарҙа уҡып йөрөгән көйө түбәнге кластарҙағы шәкерттәргә хәлфә сифатында дәрестәр биреүҙе ышанып тапшыралар. Уҡыу-уҡытыу эштәре менән бер рәттән Ризаитдин ең һыҙғанып ижад эшенә лә тотона. 1887–1889 йылдарҙа уның бер-бер артлы «Әт-төхфәт әл-әнисиә» («Яҡын дуҫтарға бүләк»), «Китабе әт-тәсриф. Ғилме сарыф» («Килеш менән үҙгәреш хаҡындағы китап. Морфология»), мираҫ бүлеү мәсьәләләре буйынса шәриғәт ҡанундарын популяр аңлатҡан «Китабе мөҡәддимә. Әт-тәхрир әл-мосфа...» («Мосолман юриспруденцияһына инеш китап»), йәмәғәтселектең иғтибарын тиҙ арала

үҙенә йәлеп иткән «Китабе әл-иғтибар» («Иғтибарға лайыҡ китап») исемле китаптары баҫылып сыға. Автор хаҡында ыңғай фекерҙәр әйтелә, уға ҙур өмөттәр бағлана башлай. Мәҫәлән, күренекле татар мәғрифәтсе ғалим-әҙибе Ш. Мәржәни: «Был егет өмөтлө», – тип белдерһә, атаҡлы башҡорт мәғрифәтсе шағиры М. Аҡмулла иһә: «Хөрмәтле Ризаитдин – бер камил зат», – тип яҙа.

**Хеҙмәте**

Мәҙрәсәне тамамлағандан һуң, 1889 йылдың яҙында Р. Фәхретдинов Өфөгә Диниә назаратына барып имтихан тапшыра һәм имам-хатип (мулла) һәм мөдәррис (мәҙрәсә уҡытыусыһы) дәрәжәһенә шәһәҙәтнамә (аттестат) алып ҡайта. Шул йылдың көҙөнә Минзәлә өйәҙендәге Илбәк тигән ауылға имам-хатип итеп эшкә ебәрелә. Унда ул мәҙрәсә асып, балалар уҡыта башлай.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында үҙен танытып өлгөргән ғилемле, алдынғы ҡарашлы тырыш мөдәрристе 1891 йылда Өфөләге Диниә назаратына ҡазый – шәриғәт ҡанундары буйынса хөкөм итеүсе (судья) вазифаһына эшкә саҡыралар. Губерна үҙәге булған ҡалала уға ғилми һәм әҙәби эшмәкәрлек өсөн киң мөмкинлектәр асыла. Өфөлә Р. Фәхретдинов әҙәби ижад эше менән шөғөлләнә, үҙенең иң күләмле биобиблиографик характерҙағы «Аҫар» тигән китаптар серияһын әҙерләй, әхлаҡи тәрбиә һәм педагогика мәсьәләләренә ҡағылышлы брошюраларын яҙа һәм баҫтырып сығара башлай. Уның исеме хәҙер бөтә Көнсығыш Рәсәйҙә киң билдәлелек ала.

Беренсе рус революцияһы йылдарында Р. Фәхретдинов, бер ниндәй икеләнеүһеҙ юғары руханилыҡ дәрәжәһенән баш тартып, дингә хеҙмәт итеүҙән донъяуи эшмәкәрлеккә табан боролош яһай. 1906 йылдың 20 майында Өфөнө ҡалдырып, Ырымбурҙа «Ваҡыт» гәзитенең икенсе мөхәррире, хәҙергесә әйткәндә, баш мөхәррир урынбаҫары вазифаһында эш башлай. Унда ул үҙен һәләтле ойоштороусы, талантлы журналист итеп таныта. Тиҙҙән ҡәләме үткерләнә барған журналисты яңы ойошторолған «Шура» журналына баш мөхәррир итеп саҡыралар. Ошо вазифала ул ун йыл буйына – 1908 йылдың башынан алып 1917 йылдың аҙағынаса эшләй. Был ваҡыт һуҙымында «Шура» Рәсәйҙәге төрки халыҡтары араһында киң популярлыҡ ҡаҙанған энциклопедик йөкмәткеле ижтимағи-сәйәси, фәнни-методик, әҙәби-публицистик баҫмаға әүерелә. Бында башҡорт һәм татар әҙиптәре М. Аҡмулла, М. Ғафури, Ш. Бабич, Дәрдмәнд (Закир Рәмиев), Ғ. Ибраһимов, Ш. Камал, М. Фәйзи әҫәрҙәренең башлап ошо журналда донъя күреүен, төрки телле уҡыусыларҙың тап уның аша М. Ломоносов, Д. Фонвизин, И. Крылов, А. Кантемир, Г. Державин, В. Жуковский, А. Грибоедов, Н. Гоголь, А. Пушкин, М. Лермонтов, А. Островский, И. Тургенев, Л. Толстой, А. Чехов, М. Горький кеүек бөйөк рус әҙиптәренең тормошо һәм ижад емештәре менән танышыуын әйтеп үтеү ҙә етә.

Ырымбурҙа Р. Фәхретдиновтың халыҡты ағартыуға, уның милли үҙаңын һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән ғилми-әҙәби һәм публицистик эшмәкәрлеге бермә-бер әүҙемләшә, «Аҫар»ын яҙыуын дауам итә. Был хәл иҫкелеккә йәбешеп ятҡан дин әһелдәренә, урындағы батша чиновниктарына һис тә оҡшамай. Уның өҫтөнән Диниә назаратына, полицияға, хатта Столыпинға доностар яҙыла. Тиҙҙән ул жандармдар күҙәтеүе аҫтына алына. 1911 йылдың 12 феврале төнөндә уның өйөндә тентеү үткәрелә һәм 20 йыл ғүмерен биреп туплаған китаптары, гәзит-журналдары, үҙенең донъя күргән ижад емештәре һәм баҫтырырға әҙерләнгән ҡулъяҙмалары алып кителә. Был материалдарҙың күбеһе аҙаҡ хужаһына кире ҡайтарып бирелмәй.

1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткәрелгән мосолмандарҙың Бөтә Рәсәй съезында яңынан ҡазый итеп һайланғас, өҫтәүенә, «Шура» журналы ябылғас, Р. Фәхретдинов 1918 йылда Өфөгә ҡайта. 1922 йылда уны Диниә назаратына мөфтөй итеп һайлайҙар. Ҡазыйлыҡ, мөфтөйлөк вазифаларын үтәүҙән тыш, ул ғилми-әҙәби эштәр менән шөғөлләнергә тырыша. Көнсығышты өйрәнеүсе абруйлы белгес буларак, 1925 йылда уны Ленинградҡа СССР Фәндәр академияһының 200 йыллыҡ юбилейы тантанаһына саҡыралар. Унда ул И. Крачковский, А. Самойлович кеүек академиктар, Һиндостандан, Швециянан, Венгриянан, ғәрәп илдәренән килгән ғалимдар менән яҡындан аралаша. Аҙаҡ уға ижад емештәрен Вена Фәндәр академияһына һатыуын һорап мөрәжәғәт тә итәләр. Ләкин ул намыҫы менән һатыу итмәй, аҙаҡҡаса туған халҡының, Ватанының тоғро патриоты булып ҡала. Ғалим-әҙип 1936 йылдың 12 апрелендә 77 йәшендә Өфөлә вафат була һәм мосолман зыяратына ерләнә.

## ҒИЛМИ-АҒАРТЫУ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Ризаитдин Фәхретдинов, эш вазифалары буйынса, дини эшмәкәр: имам-хатип, ҡазый, мөфтөй, үҙләштергән белеме менән дә дини тәғлимәт белгесе – теолог. Әммә шулай ҙа башҡорт фәне, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте өсөн ул иң беренсе сиратта тарихҡа, этнографияға, педагогикаға, әҙәбиәт ғилеменә ҡағылышлы хеҙмәттәр яҙған мәғрифәтсе ғалим-педагог.

**Р. Фәхретдинов – мәғрифәтсе-педагог, «Нәсихәттәр» серияһы**

20 йыл буйы мәҙрәсәлә уҡыған хәлфә, аҙаҡ бер ни тиклем мөдәррис булып эшләгән кеше буларак, Р. Фәхретдинов шул замандағы мәктәп-мәҙрәсәләрҙәге уҡыу-уҡытыу эштәре торошон яҡшы белә, мәғариф системаһын нисек яҡшыртыу тураһында күп уйлана. Был өлкәлә реформалар

үткәреү кәрәклеген ныҡ тоя, төрлө пландар ҡора. Үҙенең уй-теләктәрен һәм ҡараштарын ҡағыҙға ла төшөрә. Тәүге китаптарының береһе «Китабе әл-иғтибар»ҙа йәштәр, шәкерттәр өсөн кәрәк әҙәп-әхлаҡ, һөнәр һәм кәсеп, мәғариф һәм фән, дин һәм донъяуи тәртип-низамдар хаҡында мәғрифәтселек ҡараштары менән уртаҡлаша. Ә 1889 йыл яҙылған, цензура рөхсәт бирмәүе арҡаһында ҡулъяҙма хәлендә ҡалған китабында мәғрифәтсе-педагог ҙурыраҡ мәсьәләләр ҡуҙғата. Халыҡтың аң-белемен, мәҙәниәтен күтәреү өсөн ул мәктәп-мәҙрәсәләрҙә уҡыу-уҡытыу тәртиптәрен, алым-методтарын тамырынан үҙгәртергә, дини дәрестәр менән бергә донъяуи фәндәрҙе уҡытыуҙы индерергә, мәктәп-мәҙрәсәләр янында китапханалар асырға саҡыра, яңы дәреслектәр һәм ҡулланмалар баҫтырыу, хатта башҡорт һәм татар халыҡтары өсөн «бер ислам гәзите» сығарыу мәсьәләләрен күтәреп сыға. Был тәҡдимдәре менән Р. Фәхретдинов асылда мосолман мәғарифы өлкәһендә реформалар яһау программаһын ҡуя.

1900 йылда Өфөлә мосолман зыялыларының ҙур ғына кәңәшмәһе уҙғарыла. Унда яңы ысул, мәктәп-мәҙрәсәләр өсөн яңы программа проекты, орфография мәсьәләләре тикшерелә. Риза ҡазый, элек үҙе төҙөгән программаһындағы фекерҙәрен үҫтереп, реформа хаҡында сығыш яһай. Артабан ошо фекер-ҡараштары юҫығында бер-бер артлы китаптар яҙып баҫтыра.

Р. Фәхретдинов үҙенең мәғрифәтселек ҡараштарында беренсе урынға аң-белем менән йәнәш кешене төрлө йәһәттән тәрбиәләү мәсьәләһен ҡуя. Уның фекеренсә, кеше – тәрбиә емеше, тәрбиәһе ниндәй – кешеһе шундай. Уҡымышлы, тәрбиәле, эшсән, тырыш кешеләр күберәк булған һайын, йәмғиәт тормошо ла яҡшырасаҡ, әҙәп-әхлаҡ камиллашасаҡ, дин нығынасаҡ, мәҙәниәт, фән үҫәсәк, әҙәмдәр муллыҡҡа, бәхеткә тейенәсәк.

Тәрбиәнең башы – ғаиләлә, тәү тәрбиәселәр – ата менән әсә, тип, ул был хаҡта «Тәрбиәле ана» (1898), «Тәрбиәле ата» (1898), «Тәрбиәле бала» (1898), «Тәрбиәле ҡатын» (1898), «Шәкертлек әҙәбе» (1899) тигән педагогик юҫыҡтағы өгөт-нәсихәттәр серияһын барлыҡҡа килтерә. Был хеҙмәттәр мәктәп-мәҙрәсәләрҙә ҡулланма дәреслектәр урынына файҙаланыла. Уларҙың артынса Р. Фәхретдинов «Әҙәбе тәғлим» («Әҙәплелек тураһындағы тәғлимәт») (1902) тигән хеҙмәтен һәм ошо әҙәп-әхлаҡ хаҡындағы тәғлимәткә бәйле «Ғаилә» (1902), «Нәсихәт» (малайҙарға – 1903), «Нәсихәт II» (ҡыҙҙарға – 1903), «Нәсихәт III» (өлкәндәргә – 1903) тигән китаптар серияһын донъяға сығара. Уларҙа: *«Бөтмәй торған мираҫ – гүзәл тәрбиә биреү икәнен белегеҙ»,* – тип, ғалим-педагог балаларға, шәкерттәргә, оло кешеләргә үҙ-ара мөнәсәбәттәр, мөғәмәләләр, үҙеңде нисек тотоуҙар, нисек яҡшы холоҡло итеп тәрбиәләүҙәр хаҡында өгөт-нәсихәттәр бирә, үрнәк

алырлыҡ кешеләр һәм ваҡиғалар хаҡында һөйләй. Ғаиләләге һәм мәктәп-мәҙрәсәләрҙәге тәрбиәне ул физик, дини, әхлаҡи, аҡыл һәм хеҙмәт тәрбиәләренә бүлеп ҡарай. Айырыуса, *аң-белемде, әхлаҡты һәм хеҙмәтте* ул тәрбиә эшенең үҙәгенә ҡуя, унның умыртҡа бағанаһы итеп ҡарай. Унынса, тап ошо «өс таған»ға эйә булғанда ғына, кешеләрҙең хыял-ынтылыштары тормошҡа ашасаҡ, киләсәге бәхетле буласаҡ, йәмғиәт алға китәсәк. Шуныһы мөһим, был мәсьәләләрҙә мәғрифәтсе-педагог халыҡ, йәмғиәт мәнфәғәттәрен кешеләрҙең шәхси мәнфәғәттәренән өҫтөн ҡуя. Мәҫәлән, белем алыуҙың маҡсатын ул үҙенә ниндәйҙер дан-дәрәжә яулауҙа түгел, ә йәмғиәткә «файҙалы кеше булыуҙа» күрә, шунан сығып, ҡан-ҡәрҙәштәрен «һис бер ваҡыт ғилемгә тәкәбберлек күрһәтмәҫкә», «белем һәм тәрбиә юлында һис бер нәмә ҡыҙғанмаҫҡа», «китаптар, ... әҙәби әҫәрҙәр уҡып», күңел күҙҙәрен асырға, аҡылдарын арттырырға, белемдең «бөтмәй торған байлыҡ» икәнлеген һис кенә лә онотмаҫҡа саҡыра. Шул саҡта ғына арабыҙҙан «милләт өсөн олуғ шәриф (изгелек) эшләгән һәм бөйөк йәдкәр ҡалдырған» шәхестәр үҫеп сығасаҡ, ти ул һәм «һәр кешенең, ... һәр милләттең бәхетле булыуының төп сәбәбе белем» булыуын айырым-асыҡ һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ул ата-әсәләрҙе балаларының *«өҫ-баштарынан артығыраҡ* ***аҡылдарын»*** улар донъяға килгән көндән үк тәрбиәләй башларға, уларҙың халҡына, иленә файҙа килтерерҙәй фекерле, эҙләнеүсән шәхестәр – милләт аталары һәм әсәләре булып формалашыуҙарына нигеҙ һалырға саҡыра.

Р. Фәхретдинов шәхес формалаштырыуҙағы иң төп факторҙарҙың береһе булып әхлаҡи тәрбиә тора тип иҫәпләй, унынса, «яҡшылыҡ һәм әҙәп», «матур холоҡ», әхлаҡлылыҡ – кешенең асылы, йәмғиәттең именлеге күрһәткесе. Был күрһәткес ғаиләнән, ата-әсә һәм балаларҙың, туғандарҙың һәм дуҫ-иштәрҙең, ғөмүмән, кешеләрҙең үҙ-ара итәғәтле, ихлас мөнәсәбәттәренән, күркәм холоҡтарынан башлана. *«Холоҡтоң төҙөк булыуы – үҙе олуғ байлыҡтыр,* – тип яҙа мәғрифәтсе. – ... *Шәрәфлек (бәхетле булыу) – ғүзәл холоҡта һәм тәрбиәлә, әҙәптә һәм ғилемдәлер»*. Ғүзәл холоҡ, әҙәплелек кешене бөтә йәһәттән дә матур итә. Шул матурлыҡтың иң ҙур күрһәткесе – ата-әсәләргә, өлкәндәргә, милләткә һәм Тыуған илгә булған һөйөү һәм ихтирам. Мәҫәлән, Ватанға һәм милләткә ҡарата мөнәсәбәт хаҡында бына ниндәй фәһемле юлдарҙы яҙа ул: *«Күге аҫтында йәшәгән, һауаларын еҫкәгән, һыуын эскән, икмәген ашаған Ватанығыҙҙы нык һөйөгөҙ, унның исемен бөйөк итеү өсөн тырышығыҙ. Ватан – ... һәр кем алдында ғорурланырлыҡ хазина. Шуға күрә Ватан өсөн малығыҙҙы ҡыҙғанмағыҙ һәм көстәрегеҙҙе аямағыҙ. Ватан хаҡында быndай фиҙаҡәрлек күрһәтмәгән кеше унда йәшәргә лайыҡ түгел.*

*Ата-әсәгеҙҙе, яҡын ҡәрҙәштәрегеҙҙе нисек һөйһәгеҙ, милләтегеҙҙе лә шулай һөйөгөҙ. Милләтегеҙ өсөн хеҙмәт итеүҙе йәнегеҙ өсөн бәхет тип белегеҙ... Милләтегеҙгә белем һәм мәғрифәт таратығыҙ. Араларына дуҫлыҡ һәм мөхәббәт орлоҡтары сәсегеҙ».*

Хеҙмәт тәрбиәһе тураһында фекер йөрөткәндә инде, Р. Фәхретдинов беренсе планға һөнәр үҙләштереүҙе, тырышлыҡты ҡуя. Ул: *«Һис бер нәмәһе юҡ кеше фәҡир түгел, **һөнәре һәм тырышлығы** юҡ кеше фәҡирҙер»*, – тип иҫәпләй һәм замандаштарын үҙ ғәйрәт-көстәренә таянып, тырышлыҡ менән һөнәр үҙләштереп, үҙ ризыҡтарын табып йәшәргә өндәй. *«Һис кемгә күктән алтын яуғаны һәм ерҙә үлән үҫкән кеүек үҫеп торғаны юҡтыр,* – ти мәғрифәтсе. – ... *Эшһеҙ һәм хәрәкәтһеҙ тик ятмағыҙ... Бөгөн бөтәсәк эште иртәгәгә ҡалдырмағыҙ... Эштәрҙе кеше күрһен һәм маҡтаһын өсөн түгел, файҙаһы булһын өсөн эшләгеҙ. Файҙалы эш бөгөн булмаһа ла, бер ваҡыт күҙгә күренер һәм... баһаланыр».*

Р. Фәхретдиновтың төрлө быуын кешеләренә аң-белем, тәрбиә биреү мәсьәләләренә арналған хеҙмәттәре серияһы башҡорт мәғрифәтселек фекеренең үҫешендә үҙ заманында ҙур роль уйнай. Ундағы күп фекер-ҡараштар әле лә һис иҫкермәгән.

### «Аҫар» китаптар серияһы

Р. Фәхретдиновтың фәнгә ныҡлап тартылыуы «Аҫар» исемендәге китаптар серияһын яҙыуҙан һәм уларҙы бер-бер артлы баҫтырып сығарыуҙан башлана.

«Аҫар» – *үткәндең эҙе, тарихи иҫтәлек* тигән мәғәнәләге ғәрәп һүҙе «әҫәр»ҙең күплек формаһындағы ҡулланылышы, *үткәндең иҫтәлекле яҙма әҫәрҙәре* тигәнде аңлата. Шул мәғәнәгә ярашлы рәүештә, был яҙмалар серияһы халыҡтың элекке билдәле һәм күренекле шәхестәренең тормош юлы (биографияһы), хеҙмәттәре һәм әҫәрҙәре (библиографияһы) хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биргән *биобиблиографик белешмәләр* йыйынтығынан ғибәрәт. Мәғлүмәттәрҙе ғалим төрлө сығанаҡтарҙан, ҡулъяҙма һәм баҫма китаптарҙан, архив материалдарынан, уҡымышлылар һөйләүенән берәмтекләп туплай, уларҙы үҙ-ара сағыштырып, ентекле өйрәнә, шуның менән мәғлүмәттәрҙең тарихи дөрөҫлөккә тап килеүен тәьмин итергә тырыша.

Р. Фәхретдинов «Аҫар» серияһы алдына ҙур ғына бурыстар ҡуя: халыҡтың ижтимағи фекере, мәҙәниәте, ғилеме, әҙәбиәте үҫешенә булышлыҡ итеү. Быға бәйле рәүештә Р. Фәхретдинов шундай төплө һәм фәһемле фекерҙәрен әйтә: *«Әҙип һәм ғалимдары булмаған ҡәүем (халыҡ) – бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләрен онотҡан халыҡ – хәмиәтһеҙ (яҡлаусыһыҙ), әҙәбиәте булмаған милләт – рухһыҙ.* Ошоноң өсөн ҡәүемебеҙҙең (халҡыбыҙҙың) яҡшы танылған кешеләрен йыйып таныштырмаҡ өсөн ошо

китапты яҙырға ниәт иттем», – ти ул. Был белешмә китаптарҙың маҡсатын асыҡлап йәнә былай ти: «...Үткән ваҡытта дәүләтле кешеләребеҙ үҙҙәренең маңлай тирҙәре менән тапҡан дәүләттәрен нисек дин вә милләт юлына сарыф ҡылғандарын йәш быуынға күрһәтеү. Киләсәк заманда тарих менән шөғөлләнеүселәргә мәшһүр әҙәмдәребеҙҙең тәржемәи хәлен (биографияһын) яҙыу һәм йыйыуға бер ҡәҙәр булһа ла мәғлүмәт биреү. Аяҡ аҫтынан ғына килеп сыҡҡан бер халыҡ булмай, бәлки мәғәнәбеҙ һәм тарихыбыҙ мәғлүм вә ҡәҙерле бер милләт икәнлекте бәйән итеү (һөйләп биреү)».

«Аҫар» китаптар серияһының тәүгеһе 1900 йылда Ҡазанда, ҡалған ун дүрте 1901 –1908 йылдар эсендә Ырымбурҙа баҫылып сыға. Ҙур булмаған ун биш китаптан торған биобиблиографик характерҙағы был серия бик ҡалын ике томлыҡты тәшкил итә. Хеҙмәттең 1908 йылда баҫылған ун бишенсе киҫәгенән һуңғы өсөнсө һәм дүртенсе томдарҙы тәшкил итеүсе өлөштәре иһә ҡулъяҙма көйөнсә ятып ҡала. Бөтә был томдарҙа IX–XV быуаттарҙа Урал – Волга буйҙарында сәйәхәттә булған, башҡорттар, татарҙар хаҡында яҙған ғәрәп ғалимдары һәм сәйәхәтселәре, ошо һәм унан һуңғы осорҙарҙа Урал – Волга, Себер, Урта Азия төбәктәрендә йәшәп донъянан үткән үҙ заманының алты йөҙләгән күренекле мосолман уҡымышлылары – дин әһелдәре, мөдәрристәр, әҙиптәр, ғалимдар, абыздар, ил-ҡор етәкселәре, ғәскәр башлыҡтары, илселәр тураһында белешмә мәғлүмәттәр бирелә. Улар хронологик тәртиптә теҙелеп китә. Автор төрки халыҡтары, бигерәк тә башҡорттар менән татарҙар араһынан сыҡҡан күренекле шәхестәр хаҡында материалдар биреүгә лә ныҡ иғтибар итә. Уларҙың араһында исемдәре тарихҡа билдәле Яҡуп бине Ноғман, Ғәбденнасир Ҡурсауи, Тажетдин Ялсығолов, Шиһабетдин Мәржәни, Ҡәйүм Насыри, Хөсәйен Фәйезханов, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ғәли Соҡорой, Ғарифулла Кейеков кеүек ғалим-әҙиптәр, Абулхайыр хан, Батырша мулла, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Мөхәмәтйәр мөфтөй Солтанов, Алдар тархан Иҫәнгилдин, Исмәғил Бикмөхәмәтов кеүек дәүләт, дин һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, илселәр һәм сәйәхәтселәр бар.

Ғөмүмән, «Аҫар» китаптар серияһы хәҙерге ваҡытта Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихын, уның мәҙәниәте һәм әҙәбиәте тарихын яҙғанда, төрлө өлкәләрҙә һәм йүнәлештәрҙә эшләгән күренекле шәхестәрен өйрәнгәндә бик мөһим абруйлы сығанаҡ булып һанала.

**Р. Фәхретдинов – тарихсы**

Башҡорт халҡының рухи-мәҙәни тормошо тарихында Ризаитдин Фәхретдинов журналист, мәғрифәтсе-педагог һәм моралист, биограф һәм библиограф ҡына түгел, бәлки башҡа фән тармаҡтары менән дә тәрәндән ҡыҙыҡһынған һәм төплө хеҙмәттәр

яҙған энциклопедист булараҡ тәрән эҙ ҡалдыра. Ул иң элек Башҡортостанда тарих фәненең торошо менән ҡыҙыҡһына, уның һәм уға бәйле булған ғилем тармаҡтарының аҡрын үҫеүенә йәки бөтөнләй булмауына, бигерәк тә ҡан-ҡәрҙәштәренең уларҙы өйрәнеүгә вайымһыҙ ҡарауҙарына тәрән борсола. Үҙенең хеҙмәттәрендә ул халыҡтың, ил-ҡорҙоң тарихын мөмкин тиклем тулыраҡ күҙ алдына баҫтырырға булышлыҡ иткән этнография, археография, текстология, биобиблиография, фольклор, тел, әҙәбиәт мәсьәләләренә киң туҡтала. *Халыҡтың тарихын өйрәнеп, уға төшөндөрөп биреүҙә ғалим уны торғонлоҡ, томаналыҡ донъяһынан прогресс юлына алып сығыуҙың, уның* ***милли үҙаңын*** *үҫтереүҙең мөһим сығанағын күрә.* Тик бының өсөн тарих фәне, уныңса, *киң ҡатлам халыҡ тормошоноң төрлө яҡлап яҡтыртылған йылъяҙмаһы дәрәжәһенә күтәрелергә тейеш.* Ошо ҡараштан сығып, ул, мәҫәлән, башҡорт һәм татар халыҡтарының Болғар дәүләте осоронан алып XX быуат башына тиклемге тарихына, социаль-иҡтисади һәм рухи-мәҙәни тормошона ҡағылышлы урындағы фольклор һәм яҙма материалдарҙы, сит сығанаҡтарҙы йыйып өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлә.

Р. Фәхретдинов тарих менән «Ваҡыт» гәзитендә, айырыуса «Шура» журналында эшләгән йылдарында әүҙем шөғөлләнә. Өфөлә сағында уҡ донъяға сығарған «Мәшһүр ҡатындар» тигән брошюраһындағы традицияны дауам иттереп, ул «Мәшһүр ирҙәр» тигән китабын, «Ваҡыт» гәзитенең «Үҙ мәғишәтебеҙҙән (тормошобоҙҙан)» һәм «Сит ил мосолмандары мәғишәтенән», «Шура» журналының «Мәшһүр әҙәмдәр вә олуғ хәдәҫәләр ( ваҡиғалар)» тигән рубрикаларында йөҙәрләгән материалдарын яҙып баҫтыра. Был сығанаҡтар бөтә Урал – Волга төбәгендә тарихи фекер-ҡараштың, фәнни ориенталистиканың үҫешенә ифрат ҙур өлөш индерә. Быны күҙ алдына килтереү өсөн ғалимдың үҙ хеҙмәттәрендә ер йөҙөндәге мең ярымға яҡын күренекле шәхестәр хаҡында мәғлүмәттәр биреүен, уларҙың араһында Ибне Сина (Әбүғәлисина), Ибне Рөшд (Аверроэс), әл-Фараби, Аристотель, Сократ, Платон (Әфләтүн), Жан-Жак Руссо, Альфред Нобель, Петр I, Е. Пугачёв, М. Ломоносов кеүек бөйөк заттарҙың булыуын әйтеү ҙә етә. «Мәшһүр әҙәмдәр» серияһында ғалим ғәрәп сәйәхәтселәре, илселәре, ғалимдары һәм әҙиптәре Ибне Батутаға, Ибне Фаҙланға, Имам Ғазалиға, Ибне Рөшдкә, шағир Мәғәрригә, Ғәрәбшаһҡа, күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе һәм дин белгесе Зәйнулла Рәсүлевкә арналған китаптар ҙа яҙа.

Тарихсы-ғалим илдәр, донъя халҡы тарихы тураһында яҙыуҙан аҡрынлап Урал – Волга буйы төрки халыҡтары тарихы хаҡында яҙыуға күсә, башҡорт һәм татар халыҡтарының

күренекле шәхестәренең тормошо һәм эшмәкәрлеге менән нығыраҡ ҡыҙыҡһына. Уның Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихына ныҡлап мөрәжәғәт итеүе Өфөгә күсеп килгәс башлана. 1893 йылда ул Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев менән бергә «Ҡазан һәм башҡорттар» исемле мәҡәлә яҙа. Унда Ҡазан ханлығы, уның Иван Грозный тарафынан нисек яулап алыныуы, башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡушылыуы, Өфө ҡалаһының һалыныуы хаҡында һүҙ бара. Авторҙар башҡорттарҙың, үҙ иркен яҡлап, аҡ батшаларға ҡаршы баш күтәреүҙәре, уның Алдар, Күсем батыр, Юлай Аҙналин, Салауат Юлаев кеүек етәкселәре тураһында эске ғорурлыҡ менән яҙа.

Тарихи яҙмаларында Р. Фәхретдинов ҡулъяҙма ҡомартҡыларҙы йыйып өйрәнеү, текстологик эшкәртеү алымдары, китапханаларҙың бурыстары, Башҡортостанда йыр һәм музыканың торошо, боронғо башҡорт йырҙары һәм көйҙәренең, аш-һыуҙары һәм кейем-һалымдарының үҙенсәлектәре хаҡында ла фекер йөрөтә, мәктәп-мәҙрәсәләрҙең эшмәкәрлеген дә күҙ алдынан үткәрә.

Р. Фәхретдинов Волга буйы болғарҙарының тарихын өйрәнеү менән дә күп шөғөлләнә. Болғарҙарҙы ул башҡорт, татар, сыуаш халыҡтарының боронғо ата-бабалары тип ҡарай. «Шура» журналында «Төньяҡ Болғар дәүләте», «Болғарҙарҙың хөкүмәте вә диндәре, нәҫел вә телдәре, ҡалалары, пайтәхете булған Болғар ҡалаһы» исемле ҙур-ҙур мәҡәләләрен баҫтыра. Ошо нигеҙҙә һуңынан «Болғар вә Ҡазан төрөктәре» тигән китабын яҙа. Унда ул Волга буйы Болғар дәүләтенең тарихы, халҡының көнкүреше, хандары, ҡалалары, мәҙәниәте, мәғариф эштәре, мәктәп-мәҙрәсәләре хаҡында ентекле мәғлүмәт бирә. Был тарихты ул Алтын Урҙа, Рус дәүләтенә буйһоноу осорҙарына ялғап, Октябрь революцияһы йылдарынаса алып килә, башҡорт һәм татар халыҡтарының уртаҡ тарихы рәүешендә яҡтырта.

Р. Фәхретдинов башҡорт шәжәрәләренә, эпитафияларға (ҡәбер таштарындағы яҙыуҙарға) мөһим сығанаҡтар итеп ҡарай, башҡорт тарихын, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен өйрәнгәндә уларҙы киң файҙалана. Ул башҡорт шәжәрәләрен йыйып махсус өйрәнә, уларҙың айырым өлгөләрен «Шура» журналында баҫтырып сығара. Бер яҙмаһында ғалим быйндай тарихи сығанаҡтар һәм тарих хаҡында былай әйтә: «Иң башта белеүселәрҙән һорашып, ҡәбер таштарын вә йәки яҙыуҙарҙы уҡып, ҡай бер авторҙарҙан файҙаланып, берәм-берәм күренекле кешеләрҙең, ҡәбилә вә ырыуҙарҙың тарихтарын вә тәржемәи хәлдәрен (биографияларын) яҙалар. Ошоларҙан файҙаланып дөйөм тарихтар тәртип итеүлә һәм милләттәрҙең тарихтары майҙанға сыға».

Р. Фәхретдинов – киң ҡарашлы тарихсы. Уның ғилми тикшеренеү эштәре илдәр, халыҡтар тарихы, дөйөм тарих, дин, фән тарихтары, археология, этнография, археография, нумизматика һәм башҡа тарихи йүнәлештәрҙе иңләй. Ул киң мәғәнәһендә Көнсығыш белгесе – шәрҡиәт ғалимы ла. Дин, фәлсәфә, мәҙәниәт, география тарихсыһы ла.

**Тел һәм әҙәбиәт белгесе**

Р. Фәхретдиновтың ғилми эшмәкәрлегенең бер яҡты битен башҡорт халҡының милли яҙма әҙәби телен формалаштырыу проблемаһына бәйле фекерҙәре тәшкил итә. Ул, *һәр халыҡтың тормошҡа яраҡлы яҙма әҙәби теле үҙе аралашҡан һәм башҡа халыҡтарҙың һүҙҙәре иҫәбенә лә байый, үҫә барған үҙ теленә нигеҙләнергә тейеш*, тигән ҡараашта тора. Уны киң йәмәғәтселеккә еткереү өсөн «Шура» журналында «Тел ярышы» рубрикаһы аса, шундағы материалдарҙы аҙаҡ, 1910 йылда, Ырымбурҙа айырым китап итеп баҫтырып сығара. Уға яҙған баш һүҙендә ул: «*Үҙҙәренә махсус телдәре булмаған халыҡтар үҙ аллы милләт һаналмаҫтар... **Әсә телен һаҡламаҡ һәр кем өсөн мөҡәддәс бер вазифалыр***», – тип яҙа. Халыҡтың артта ҡалыуының бер сәбәбен ғалим «әсә телен хөрмәт итмәү»ҙә, уның сафлығын һаҡламауҙа, халыҡҡа аңлайышлы милли яҙма әҙәби телде барлыҡҡа килтермәүҙә һәм үҫтермәүҙә күрә.

Әҙәбиәт белгесе булараҡ, Р. Фәхретдинов башҡорт, татар яҙыусылары Утыҙ Имәни (Ғәбдерәхим Усманов), Һибәтулла Салихов, Әбелмәних Ҡарғалы, Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи, Шәмсетдин Зәки, Ғәли Соҡорой, Хәбибназар Үтәки-Стәрле, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Дәрдмәнд (Закир Рәмиев) кеүек әҙиптәр тураһында белешмә хеҙмәттәр яҙа, уларҙың ҡайһы берҙәренең нәҫел-нәсәп шәжәрәһен бирә, әҫәрҙәрен тәү башлап баҫтырып сығарыша.

Ғәрәп, фарсы, рус телдәрен яҡшы белгән ғалим ғәрәп, фарсы һәм рус әҙәбиәттәре классиктары Ғүмәр Хәйәм, Сәғҙи Ширази, Ғәлишир Науаи, Низами Ғәнжәүи, Хафиз Ширази, Мәғәрри, Мирза Фатали Ахундов, Мәхтүм Ҡолой, А. Пушкин, М. Лермонтов, Н. Гоголь, Л. Толстой, А. Чехов, М. Горький һәм башҡалар тураһында китаптар яҙа, мәҡәләләр баҫтыра. Жюль Верн, Иоганн Гёте кеүек Көнбайыш әҙиптәре хаҡында ла мәғлүмәттәр бирә.

Ғөмүмән, Р. Фәхретдинов күп ҡырлы хеҙмәттәре менән үҙен һәр халыҡтың иғтибарға лайыҡ тарихи үткәне, шәхестәре, рухи-мәҙәни традициялары булыуын яҡшы аңлаған, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты, уларҙың тарихына, милли бәҫенә, теленә, мәҙәниәтенә ҡарата ихтирамлы булыуҙы яҡлаған киң ҡарашлы гуманист ғалим һәм әҙип итеп танытты.

## ӘҘӘБИ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Ризаитдин Фәхретдинов үҙен бер ҡасан да яҙыусы итеп һанамаған, әҙәби ижад эшенә мәғрифәтселек ҡараштарын таратыу өсөн иң ҡулайлы бер сара итеп кенә ҡараған. Күрәһең, шуға ла әҫәрҙәрен псевдоним аҫтында баҫтырыуҙы хуп күргән. Ғилми-ағартыу, мәғрифәт эшен үҙенең төп шөғөлө итеп һанаған.

**«Сәлимә» повесы**

Был әҫәрҙе Р. Фәхретдинов 1899 йылда Ҡазанда «Сәлимә, йәки Ғиффәт» тигән исем менән «Ғафил бин Ғабдулла» тигән псевдоним аҫтында баҫтыра. Уның хаҡында үтә бер баҫалҡылыҡ менән: «Сәлимә»не мин үҙ ҡәүемебеҙ араһында хикәйәттәр вә романдар юлын асыу теләге менән тәртип итмәнем. Мин хикәйәт яҙыу вә романдар тәртип итеү юлы менән барыуҙы үҙемә мәсләк (йүнәлеш) итеп алған бер кеше лә түгелмен, – тип яҙа ул. – Үҙ ҡарашымда бик әһәмиәтле вә бик ғәли бер-ике төрлө мәғәнәүи вә рухани маҡсатым бар ине. Шул маҡсаттарымды еренә еткерергә сәбәп булмаҫмы тип, мин шул «Сәлимә», уның тиңдәше булған «Әсмә»не яҙҙым». Күренеүенсә, ғалимдың әҙәби әҫәр яҙыуға тотоноуының төп маҡсаты – үҙенең мәғрифәтселек ҡараштарын халыҡҡа үтемлерәк формала еткереп ҡарау.

«Сәлимә» әҫәре автор тарафынан *хикәйәт* тип билдәләнһә лә, шаҡтай бай йөкмәткеһе, композицион төҙөлөшө менән ***повесть*** жанрына ҡарай. Ул инештән, төп өлөштән һәм йомғаҡтан тора. Төп өлөш төрлө ҙурлыҡтағы 17 бүлектән ғибәрәт. Һәр береһенең үҙ исеме, үҙ идея йөкмәткеһе булған был бүлектәрҙең күпселек өлөшөн төп герой – Өфө губернаһының Бөрө өйәҙенә ҡараған Ҡуян ауылында тыуып үҫкән һәм Ҡазан мәҙрәсәләренең береһендә ун йыл уҡыған башҡорт егете тарафынан бәйән ителгән хәл-ваҡиғалар һәм күренештәр тәшкил итә. Ҡалғандары авторҙың урын-урыны менән һүҙгә ҡушылып китеүе һөҙөмтәһендә тыуған публицистик һәм лирик сигенеүҙәрҙән тора. Әҫәр шул осорҙа популяр булған сәйәхәтнамә формаһына ҡоролған. Уның идея-тематик йөкмәткеһе киң масштаблы түгел, сюжеты ла сағыштырмаса ябай, тармаҡланып-ишәйеп китмәй. Ул, нигеҙҙә, шәкерттең тормош юлындағы әллә ни ҙур булмаған ваҡыт арауығында – Ҡазандан алып Әстрхан ҡалаһынаса Волгала, аҙаҡ Каспий диңгеҙе аша Баҡыға саҡ сәйәхәте ваҡытында булып үткән хәл-ваҡиғаларҙы бәйәнләүҙән, уның уй-тойғоларын сағылдырыуҙан ғибәрәт. Бөтә был үҙенсәлектәр жанр йәһәтенән әҫәрҙең *повесть* булыуы тураһында һөйләй.

Повестың беренсе бүлексәһе «Ҡазан» тип атала. Әҫәрҙең төп геройы ғилем эстәп ун йыл ғүмерен уҙғарған Ҡазан ҡалаһы хаҡындағы белешмәләрҙән башланып китеүе бик тәбиғи. Уларға был ҡаланы ҡалдырып сәйәхәткә сығырға ниәтләгән шәкерттең

тыуған яғы, әсәһе хаҡындағы хәтирәләре килеп ялғана. «Әсә нәсихәте» тип аталған был икенсе бүлексәлә автор уҡыусыны улын уҡырға оҙатҡан әсәнең уға әйткән нәсихәттәре менән таныштыра. «...Инсан (кеше) булмаҡ өсөн ғилем илә күркәм холоҡ кәрәктер», – бына шул рухта нәсихәт бирә «Белемде Ҡытайҙа булһа ла эҙләгеҙ» тигән халыҡ әйтемен һәр саҡ иҫендә тотҡан әсә буласаҡ шәкерт улына.

**Шәкерт образы**

Повестың «Шәкертлек» бүлексәһенән аңлашылыуынса, әсә нәсихәтен алып киткән егет үҙен Ҡазан мәҙрәсәһенең иң алдынғы шәкерте итеп таныта. Уның «уҡыған дәрестәре күп, белгән нәмәләре сикһеҙ, күтәргән китаптары хисапһыҙ» була. Шәкерт инде ғилем диңгеҙен йөҙөп сыҡҡан, барыһына өлгәшкән кеүек. Әммә үҙендә ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек тә һиҙә ул. Дин ғилемендә халыҡҡа файҙа килтерерҙәй эштәр, аныҡ маҡсаттар әллә ни күренмәгәндәй, барыр юлы эҙһеҙ, алдағыһы билдәһеҙ һымаҡ тойола уға. Ул үҙенең мәҙрәсәлә алған белеменең үтә самалы булыуына, гимназия һәм университет кеүек белем усаҡтарында уҡыған төрлө милләт йәштәренән артта ҡалғанлығына төшөнә бара һәм «үҙ халҡыбыҙға... хеҙмәт итмәк, ... йәмғиәт хәлен ҡайғыртмаҡ милләт аталары»ның береһенә әүерелеү хаҡында етди уйлана башлай. Быға өлгәшеүҙең юлдарын ул донъяуи фәндәрҙе, киң таралған халыҡ-ара телдәрҙе, алға киткән халыҡтарҙың иҡтисади, фәнни-техник һәм рухи-мәҙәни ҡаҙаныштарын яҡшылап өйрәнеүҙә һәм көндәлек эшмәкәрлектә файҙаланыуҙа күрә. Шуға ла уның күңелендә белемен һынап ҡарау һәм байытыу өсөн Төркиә, Мысыр, Һиндостан, Ҡытай, Япония һәм башҡа илдәргә сәйәхәт итеү ниәте уяна. Башта ул Волга буйлап пароходта Һамарға, унан тимер юл арбаһында (поезда) Өфөгә тиклем сәфәр ҡылып, тыуған яғын, ата-әсәһе ҡәберҙәрен күреп китмәксе була. Ул «асыл ватаны»ндағы «йәйелеп ятҡан сәхрәләр, баҡсаларҙан зиннәтле урмандар, хуш еҫле ҡырҙар, иркен һауалар, йәшел үлән өҫтөндә һикерешеп йөрөгән хайуандар», уларҙан да бигерәк «һәр төрлө тәкәллеф (яһалмалыҡ, ҡыланыу) вә мода бәләһенән азат булған» ҡан-ҡәрҙәштәре менән осрашыу, «йәшел хәтфәләргә оҡшаған болондарҙа ултырып, оло ағас һауыттар менән ҡымыҙ эсеү, ... ҡурай тауыштарын, һандуғас һайрауҙарын тыңлау» минуттарын күҙ алдына килтереп, яҡты уйҙарға бирелә. Уның был уйҙары тыуған еренә дан йыры, гимн булып яңғырай. Шәкерт өсөн «Өфө сәхрәләре» әҫәрҙәрҙә данланған Ҡырым, Алжир, Италия, Швейцарияларға ҡарағанда ла гүзәлерәк, «мәҙехләргә тел ҡыҫҡа вә ҡәләмдәр ғажиз (көсһөҙ, зәғиф)» булған иң ҡәҙерле илаһи бер ерҙер.

Шәкерт пароход көткән ваҡытта оҙата килгән һабаҡташтары менән хушлашыу хөрмәтенә кескәй генә сәй мәжлесе ҡорола.

Бына шунда асыла ла инде уның тормош юлына инеү, мәғрифәткә хеҙмәт итеү программаһы. Шәкерт һабаҡташтары ҡаршыһында оҙон бер нотоҡ һөйләй. Шунда ул ир-егеттәр алдында торған ғаилә башлығы, атайлыҡ вазифаларына, йәмғиәтте алға ебәреү мәсьәләләренә төшөп китә, сауҙа, кәсеп, һөнәр эштәрен үҫтереү, байҙарҙың мәғрифәткә, мәҙәниәтебеҙгә ярҙам итергә тейешлектәре мәсьәләләренә, мосолман йәмғиәтендә осраған етешһеҙлектәргә туҡтала, уларҙы нисек бөтөрөү хаҡында уйлана. Ғәрәп, фарсынан тыш, рус, немец, француз, инглиз кеүек киң таралған телдәрҙе үҙләштереү аша Көнбайыш, Көнсығыш илдәре менән мәҙәни бәйләнештәрҙе, сауҙа, мәғрифәт, фән, нәшриәт эштәрен көсәйтеүҙе күҙ уңында тота ул.

Сәфәрендә шәкерт уй-фекерҙәренең дөрөҫ, борсолоуҙарының урынлы булыуын раҫлаусы төрлө хәл-күренештәргә тап була, халыҡ тормошо менән яҡынданыраҡ таныша, төрлө кешеләр менән осраша, үҙенең ғилем кимәлен һынай, белгән-белмәгәнен аңлай, байтаҡ фәһем ала. Уларҙың араһында уның бошонҡо уйҙарын таратып, күңелендәге өмөт саткыларын дөрләтеп ебәрерҙәй кешеләр ҙә була. Иран сауҙагәренең Мысырҙа университет тамамлаған Сәлимә исемле ҡыҙы үҙенең гүзәл сифаттары менән уны бөтөнләй хайран ҡалдыра.

**Сәлимә образы**

Сәлимә – уҡымышлы, юғары әхлаҡлы, бай күңелле ҡыҙ. Уның янында шәкерттең мәҙрәсәлә алған ғилеме, электр уты янында шәм яҡтыһы тоноҡланып ҡалғандай, үтә тоноғая. Күп телдәрҙе белеүе, донъя халыҡтары тарихынан һәм әҙәбиәтенән киң мәғлүмәтле булыуы, күңел сафлығы менән ҡыҙ егеттең күңел-зиһенен бөтөнләй биләп ала. Уның йөҙөндә ул үҙенең идеалын таба.

Сәлимә – Р. Фәхретдинов хыял иткән, күрергә теләгән «милләт әсәләре»нең береһе, идеаль герой, ғилемлелектең, әхлаҡлылыҡтың, сафлыҡтың юғары өлгөһө. Уның өсөн Сәлимә сафлыҡ, ғиффәтлек символы, Сәлимә һәм *ғиффәт (сафлыҡ)* – бер-береһенән айырылғыһыҙ тиң, синоним төшөнсәләр. Автор Сәлимәне маҡтапниҙәргә генә тиңләмәй: «Сәлимә туташ кеше ҡулына төшмәгән йәки асылмаған сәскә ине. Һөйкөмлө булғаны кеүек инсафлы вә әҙәпле ине». Сәлимә ни хәтле саф, намыҫлы булһа, шул саҡлы ғилемле һәм мәҙәниәтле лә. Сәлимә менән шәкерттең ислам, төрки тарихы, фәне, әҙәбиәте, фәлсәфәһе хаҡында, Фараби кеүек атаҡлы ғалимдары, Сәғҙи, Хафиз, Фирҙәүси кеүек бөйөк әҙиптәре тураһында әңгәмәләшеүҙәре ҡыҙҙың ғилем, зауыҡ кимәленең юғары булыуын асыҡ күрһәтә. Тик шуныһы, шундай өлгө булырҙай идеаль геройын автор үҙ милләте эсенән түгел, ә Иран ҡыҙҙары араһынан алған. Күрәһең, ундай геройҙы үҙ даирәһенән, башҡорт, татар ҡыҙҙары араһынан алыуҙы әле реаль тип тапмаған.

Шәкерт менән Сәлимә ауыҙынан автор кешенең бәхете өсөн саф әхлаҡи сифаттарға, тәрән аң-белемгә, юғары мәҙәниәткә эйә булыу тураһында әңгәмә алып бара. Улар исеменән шәхес һәм рух ирке, ҡатын-ҡыҙ азатлығы, ирекле мөхәббәт һәм никах, ғаилә, әхлаҡи камиллыҡ, дин, фән, уҡыу-уҡытыу мәсьәләләре хаҡында фекерҙәр әйтә. Сәлимәнең белемен күрһәтеү өсөн тарих, халыҡтар, илдәр, телдәр, диндәр буйынса Европа ғилеменә, француз, немец телдәрендәге китаптарға мөрәжәғәт иттертә, егетте хайран ҡалдырта. Ошо танышыу, әңгәмәләрҙән һуң шәкерт, әлбиттә, ныҡ уйланырға, үҙ белеменең самалы булыуынан оялырға мәжбүр. Мәҙрәсәлә үткән көндәрен ул ғәфләтлек, йәғни вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек эсендә бушҡа, заяға үткән ваҡыт тип һанай. Бынан прозаиктың үҙ повесын «Ғафил бин Ғабдулла» тигән псевдоним менән баҫтырыуының мәғәнәһе лә аңлашыла төшә. Ғәрәпсәнән тәржемәлә был псевдоним ғәмһеҙлек улы, Алла ҡоло мәғәнәһен бирә. Тимәк, шәкерт исеменән һөйләгән автор үҙен дә ғәфләтлек йоҡоһона тарыған Алла ҡоло тип һанай.

Повесть матур эпизод менән тамамлана. Шәкертте камил, саф тәбиғәтле Сәлимә ни тиклем һоҡландырһа, ҡыҙҙы ла егеттең бик итәғәтле, әҙәпле, кешелекле һәм кеселекле кеше булыуы үҙенә тарта. Уларҙың күңелдәрендә бер-береһенә ҡарата тыуған хөрмәт тойғоһо оло мөхәббәткә әүерелә. Тиҙҙән «ғилем диңгеҙе булған» бай күңелле, абруйлы ҡыҙ менән юғары әхлаҡлы егет бәхетле ғаилә ҡора. Уларҙың йөҙөндә автор ғаилә бәхете, милләттең алға китеүе һәм киләсәге кешеләрҙең донъяуи аң-белемгә, юғары мәҙәниәткә һәм әхлаҡ сифаттарына эйә булыуҙарына, заманса йәшәргә, алға киткән халыҡтар рәтенә баҫырға ынтылыуҙарына бәйләнгән тигән идеяларҙы алға һөрә. Уларҙы тормошҡа ашырыуҙы ул йәмғиәт алдында торған иң көнүҙәк проблемаларҙың береһе тип иҫәпләй.

**Әҫәрҙең теле һәм стиле**

«Сәлимә» повесының теле – ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған төрки яҙма теле. Шуға ла хәҙерге уҡыусыларға уны уҡыуы, күп кенә һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләренә тиҙ генә төшөнөүе лә ҡыйын. Бөгөнгө уҡыусы өсөн уларҙы хәҙерге әҙәби телебеҙгә әйләндереп бирергә тура килә.

Повестың стилендә әҙәби менән ғилми, публицистик стилдәр йыш ҡына аралашып китә. Хәл-ваҡиғаларға, тормош күренештәренә прозаик, башлыса, шәкерт күҙе менән баға, ул булып хисләнә, уйҙарға бирелә. Бындай осраҡтарҙа ул хикәйәләү, урыны-урыны менән тасуирлау сараларын, диалог һәм монолог алымдарын, халыҡтың хикмәтле һүҙҙәрен, мәҡәл-әйтемдәрен уңышлы ҡуллана. Быларҙың бөтәһе лә әҫәрҙең уҡымлы ғына әҙәби стилен барлыҡҡа килтерә. Мәҫәлән, ундағы башҡорт

йәйләүҙәрен, тәбиғәт күренештәрен, ғишыҡлыҡ хәлдәрен тасуирлаған тамашалар, бик халыҡсан, тәбиғи аҡҡан фәһемле әңгәмә-диалогтар, өгөт-нәсихәттәр, монологтар уҡыусыла юғары эстетик зауыҡ тыуҙыра. Шул уҡ ваҡытта автор үҙе лә урыны-урыны менән хикәйәләү ағышына ҡушылып киткеләй, публицистик һәм лирик сигенеүҙәр яһай, уҡыусыға үҙенең мәғрифәтселек ҡараштарын туранан-тура еткерә, тарих, йәмғиәт тормошо, иҡтисад һәм мәғариф буйынса мәғлүмәттәр бирә башлай. Һөҙөмтәлә, әҫәрҙә ғилми әңгәмә, публицистик өгөт-нәсихәт стилдәре, ундағы хикәйәләү һәм тасуирлау рәүешендәге өлөштәр менән тығыҙ бәйләнеп, әҙәби стилгә үрелеп, көйләнеп китә. Шулай автор аралаш хикәйәләү һәм тасуирлау, үҙ ҡараштарын белдереү һәм аңлатыу барышында уҡыусыға бер юлы аң-белемен дә, фәһемен дә эстетик зауыҡлы итеп еткерергә тырыша. Прозаиктың «Әсмә» повесына ла башлыса ошондай уҡ тел-стиль үҙенсәлектәре хас.

### «Әсмә» әҫәренең жанры

Тәүге повесының уҡыусы тарафынан йылы ҡабул ителеүен күреп илһамланған Р. Фәхретдинов күп тә үтмәй икенсе әҫәре «Әсмә, йәки Ғәмәл вә яза»ны яҙып бөтә. Ул 1903 йылда Ырымбурҙа айырым китап булып донъя күрә.

Был әҫәрендә лә яҙыусы тәүге повесында күтәрелгән йәш быуынға тейешле тәрбиә биреү, халыҡты наҙанлыҡтан һәм әхлаҡи кәмселектәрҙән арындырыу, ҡатын-ҡыҙҙарҙы «милләт әсәләре» кимәленә күтәреү өсөн көрәш проблемаларын үҙәккә ҡуя. Конфликттың нигеҙендә ятҡан иҫкелек менән яңылыҡ, яуызлыҡ менән яҡшылыҡ араһындағы көрәш тап ана шул проблемалар тирәһендә тыуа һәм бара.

«Әсмә, йәки Ғәмәл вә яза» әҫәре Р. Фәхретдиновтың тәүге ижад емешенә идея-проблематикаһы буйынса ғына түгел, композицион ҡоролошо, жанр тәбиғәте менән дә яҡын тора. Әгәр ҙә «Сәлимә, йәки Ғиффәт» повесының жанрын хикәйәт тип күрһәткән булһа, быныһыныҡын *хикәйә* тип нарыҡлай, үҙе үк уны «Сәлимә»нең «тиңдәше булған» әҫәр тип иҫәпләй. Әммә «Әсмә» үҙенең идея-художество тәбиғәте менән хикәйә жанры рамкаһына ғына һыймай. Яҙыусының тәүге ижад емешендәге һымаҡ, ул һәр ҡайһыһының үҙ атамалары булған ереле-ваҡлы бүлектәрҙән тора. Өс тиҫтәгә еткән был бүлектәрҙең һәр береһе үҙ аллы хикәйәне хәтерләтә. Һәр ҡайһыһының үҙ темаһы, проблемаһы, геройҙары бар. Әҫәрҙең ваҡыты-ваҡыты менән мажаралы, хатта фажиғәле төҫ алып киткән сюжет ағышы тура һыҙыҡлы ғына түгел. Автор уға әленән-әле үҙенсә ҡеүәтләрлек, яңы мәғәнә бирерлек өҫтәмә эпизодтарҙы, хәл-ваҡиғаларҙы бик оҫта килтереп индерә, сюжет ағышын кинәт теге йәки был йүнәлешкә бороп ебәрә, тармаҡландыра. Өҫтәүенә, йыш

ҡына хәл-ваҡиғалар, тормош күренештәре хаҡында объектив хикәйәләү ағышын өҙөп, уларға йәтеш кенә итеп үҙ баһаһын һәм аңлатмаһын биреүгә, лирик сигенеүҙәр яһауға төшөп киткеләй. Һөҙөмтәлә, яҙыусы үҙе атаған хикәйә жанры рамкаһынан күпкә ашҡан, шаҡтай ҡатмарлы композициялы, эпик ҡоласлы әҫәр барлыҡҡа килә. Новеллаға тартым күп һанлы бүлектәре, мажаралы сюжеты, ҡатмарлы композицион-структур ҡоролошо, эпик ҡоласы, образдар системаһы менән ул хатта роман жанрына тартыла төшә. Ләкин ундағы бүлектәрҙең төп герой Әсмәнең яҙмышына теге йәки был йәһәттән мөнәсәбәтле булып, үҙ-ара мәғәнәүи бәйләнештә тороуҙары, конфликттың төйөнләнеүе һәм сиселеүе процесының да асылда уның ғүмер юлындағы бер этапты яҡтыртыуға ғына бәйле булыуы был әҫәрҙең, роман булыуға ҡарағанда, ***повесть*** жанры сиктәренән ары китмәүе хаҡында һөйләй.

**Повестың сюжеты**

Ҙур ғына башҡорт ауылдарының береһендә Ғәббәс исемле кеше имам булып, мәҙрәсәлә йәдит ысулы менән яңыса уҡытып, Ғәйшә исемле ҡатыны, Әсмә исемле бер ҡыҙы менән татыу ғүмер кисерә. Ғәббәс мулланың халыҡ араһында абруйы ҙур, ҡатыны Ғәйшә лә егәрле, яҡшы холоҡло, итәғәтле абыстай булыуы менән башҡаларға өлгө. Уларҙың ҡыҙҙары матур, тәрбиәле булып үҫеп килә. Тирә-йүндә был ғаиләгә һоҡланмаған, уны үрнәк итмәгән әҙәм юҡ. Хатта ауылдың серегән байы Хикмәт хажи ҙа үҙенең бер ҡыҙын Ғәббәс муллаға биреп, уны кейәү итмәксе. Ләкин был ниәтен тормошҡа ашыра алмағас, ул ишан мөрите булып йөрөгән Муса исемле яһилды ҡотортоп, Ғәббәс муллаға ялған ялалар яҡтырып, башын төрмәгә тыҡтырмаҡсы була.

Бына шулай әҫәрҙең конфликты төйөнләнә, мораль йәһәттән бер-береһенә ҡаршы образдар системаһы формалаша башлай. Әммә автор конфликтты киҫкенләштермәй, уның логик үҫеше буйынса, Ғәббәс мулла, үҙенең ғәйебе юҡлығын иҫбатлап көрәшәһе урынға, еңел юл һайлай – тота ла хажға сығып китә. Артабан повеста Хикмәт хажи менән ишан мөрите Мусаның, Ғәббәс мулла менән уның ҡыҙы Әсмәнең яҙмыштары айырым-айырым яҡтыртыла. Сюжетта Көнбайыштың мажаралы (авантюр) әҫәрҙәренә хас көтөлмәгәнлек, осраҡлылыҡ, шартлылыҡ алымдары менән эш итеүҙәр һиҙелә башлай. Ғәббәс, көтмәгәндә, Алла юлы сәфәрендә ғәйеп була, үлгән тигән хәбәре килә. Йәбер-золомдан, ҡайғы-хәсрәттәрҙән ҡатыны Ғәйшә лә кинәт донъя ҡуя. Туғыҙ йәшлек Әсмә үкһеҙ етем ҡала. Татыу ғаилә шулай юҡҡа сыға. Ярай әле донъяла изгелекле кешеләр бөтмәгән – ауыл аҡһаҡалы Йософ бабай менән ҡарсығы Әсмәне тәрбиәгә ала. Әсмә артыҡ етемлек тоймай иркен генә йәшәп китә: әбей менән бабай ҡара наҙан булһалар ҙа, Әсмәне итәғәтле, эшһөйәр ҡыҙ итеп

тәрбиәләргә тырышалар. Кистәрен уға төрлө әкиәттәр, ҡиссалар һөйләп, төш тәғбирҙәрен юрап күңелен табалар, үҙенсә хыялын үҫтерәләр. Йософ бабай ғаиләһендә шулай күңел тыныслығы табып, матур ғына йәшәп ятҡан сағында Әсмәнең яҙмышы йәнә киҫкен үҙгәрә. Үҙен Ғәйшәнең әхирәте тип таныштырған Хәмиҙә исемле ҡатын уны, бер-ике айға ҡунаҡҡа тигән булып, үҙе менән бергә ҡалаға алып китә, тиҙҙән Йософ ҡартҡа уның тиф ауырыуынан үлеүен белдереп хат ебәрә. Ғәмәлдә иһә был алдаҡсы ҡарсыҡ Әсмәне «етем ҡыҙҙарҙы йыйып теләнселек иттерер вә улар йыйып килтермеш аҡсалар илә көн күрер» Зәйнүш абыстайға тапшыра. Ҡыйнай-ҡыйнай хәйер йыйҙырып, файҙаһын күргәндән һуң, абыстай матур булып үҫеп килгән Әсмәне, исемен Зәйнәпкә алмаштырып, фәхешхана тотоусыға һатып ебәрә. Ләкин ошондай фажиғәле яҙмышҡа дусар булған ҡыҙға ҡапыл бәхет ҡояшы йылмая. Балиғ булып етмәүе сәбәпле, фәхешханала ваҡытлыса хеҙмәтсе вазифаһын атҡарып йөрөгән сағында йығылып аяғын һындырып хәстәханаға эләккәс, уны бер изге күңелле ҡатын үҙе менән бергә ауылға алып китә. Улар әсә менән ҡыҙ кеүек йәшәй. Ҡалаға күсеп килеп, бер сауҙагәрҙә хеҙмәтсе булып эшләй башлағас та был ҡатын Зәйнәп-Әсмә тураһында хәстәрлек күрә: уны киң күңелле Сәлих бай тарафынан етем балалар өсөн асылған тәрбиәханаға урынлаштырыуға өлгәшә. Бары ошондай бәхетле осраҡ арҡаһында ғына тырыш ҡыҙ тиҙ арала белемен һәм әхлағын камиллаштыра барып, абруйлы мөғәллимә дәрәжәһенә күтәрелә, «милләт әсәһе» булып китә. Автор бының менән, йәштән үк тәрбиәле булған бала, ниндәй генә ауырлыҡтарға, төрлө һынауҙарға дусар булмаһын, үҙ сабырлығы, тырышлығы арҡаһында һәм изгелекле әҙәмдәр ярҙамында боҙолмай, кешелеген юғалтмай, тимәксе, буғай.

Повеста йәнә шуныһы иғтибарҙы биләй: автор кеше яҙмыштарын иң киҫкен хәлдәргә ҡуйып буталдырып, сюжет ептәрен сырмаландырып бөтә, мөхит-шарттарҙы йыш аралаштыра. Шаҡтай мажаралы сюжетҡа ҡоролған повеста көтөлмәгән шундай сәйер яңылыҡтар мәғлүм була: Зәйнәп мөғәллимә тигән ҡыҙ – тормош төбөнә ташланып, юҡҡа сыҡҡанға иҫәпләнгән Әсмә, ә ул кейәүгә сығырға ризалыҡ биргән Ғәли хәлфә ҡымыҙсы Йософ бабаһы ғаиләһендә йәшәгән сағында ҡыҙға ғишыҡ тотҡан шәкерт егет булып сыға. Бер килһә, бәхет килә икән ул: тәрбиәханалағы аҡ һаҡаллы Юныс хәҙрәт, баҡһаң, Әсмәнең бала сағында юғалып ҡалған, Ғәрәбстандан Сәлих байҙың өгөтүтенесе буйынса әйләнеп ҡайтҡан атаһы Ғәббәс мулла икән. Көтөлмәгән осрашыуҙар, табыштар. Әҫәренең финалындағы был күңелле эпизодтар аша яҙыусы уҡыусыға изге күңел, яҡшы ғәмәлдәр бер килеп шатлыҡ-бәхеттәрен бирмәй ҡалмай тигән идеяны еткермәксе.

**Повестағы образдар системаһы**

Повестағы образдар даирәһе тураһында һүҙ алып барғанда, шуны билдәләп үтергә кәрәк: был әҫәрендә Р. Фәхретдинов геройҙарын, «Сәлимә, йәки Ғиффәт» повесындағы һымаҡ, реаль тормошҡа бәйлелеге самалы булған, үҙе күрергә хыялланған «саф» әхлаҡи-этик ҡараштар һәм теләк-ынтылыштары донъяһында ғына кәүҙәләндереп ҡалмай, уларҙы уратып алған мөхитте, тормош-көнкүреш шарттарын һүрәтләүгә лә ҙур ғына урын бирә. Повесының төп идея-тематик канваһы булған *яңылыҡ менән иҫкелек, яҡшылыҡ менән яманлыҡ* көрәшен асып бирерҙәй конфликт төйөндәрен формалаштырғанда, ваҡиғалар үҫешен яҡтыртҡанда, яҙыусы геройҙарын шул осор башҡорт йәмғиәтендә хөкөм һөргән тәртиптәр, социаль мөхит менән шаҡтай тығыҙ бәйләнештә һүрәтләй. Әҫәрендә ыңғай һәм тиҫкәре персонаждарҙы ул, нигеҙҙә, шуға бәйле төркөмләй, уларға үҙенсә холоҡ-ҡылыҡ, индивидуаль характер билдәләре бирергә тырыша. Былар инде – тормош ысынбарлығына яҡын торған, реализм методы менән ижад ителгән яңы типтағы әҙәбиәттең һыҙаттары.

Повеста алдынғы ҡарашлы Ғәббәс мулла, уның итәғәтле ҡатыны Ғәйшә абыстай, ҡыҙҙары Әсмә, Ғәли хәлфә милләттең һиммәтле ата-әсәләре һәм ул-ҡыҙҙары, Сәлих бай милләттең таянырҙай хеҙмәтсеһе, Йософ менән Сәлим бабайҙар халыҡтың аҡһаҡалдары итеп алға баҫтырылһа, уларға ҡапма-ҡаршы әҙәмдәр – иҫке ҡарашлы наҙан һәм үтә динсел Хикмәт хажи, булдыҡһыҙ Бикбулат мулла, Муса мөрит, әшәке, әрәмтамаҡ Хәмиҙә ҡарсыҡ, аҙғын, яуыз Зәйнүш абыстайҙар «тәрәҡҡи (прогресс) тормоздары» рәүешендә һынландырыла. Шулар әҫәрҙең ыңғай һәм кире образдар системаһын хасил итә. Автор яҡшы менән яманды, тәрбиәле менән тәрбиәһеҙ әҙәмдәрҙе ҡапма-ҡаршы ҡуйып, төрлө ситуацияларҙы тормоштағыса йәнле итеп кәүҙәләндереп бирергә тырыша. Уның ҡайһы бер урында хәл-ваҡиғалар ағышына, геройҙар яҙмышына ҡыҫылып киткән һәм уларға өҫтәлмә характеристикалар йәки аңлатмалар биргән осраҡтар ҙа юҡ түгел. Ундай урында авторҙың симпатияһы йәки антипатияһы кемдәр яғында булыуы әллә ҡайҙан һиҙелеп тора. Шулай беҙ әҫәрҙә төрлө кешеләр, төрлө характерҙар менән осрашабыҙ. Тәүгеләренә һоҡланабыҙ, икенселәренә нәфрәтләнәбеҙ.

Повестың конфликты төйөнләнешендә һәм сиселешендә, ваҡиғалар ағышында төп ролде үтәүсе герой – Әсмә. Ул әҙиптең мәғрифәтселек ҡараштары юғарылығынан яҡтыртылған йәнә бер идеаль образы, үҙе үк әйткәнсә, «был рисәләнең (китаптың) иң беренсе баһадиры». Ысынлап та, Әсмә, ниндәй социаль мөхиткә эләкмәһен, ниндәй михнәттәр күрмәһен, ниндәй ауыр һынауҙар үтмәһен, һынып-һығылып төшмәй. Элекке һәйбәт тәрбиәһе, сабыр холҡо, сыҙамлығы менән бөтә ауырлыҡтарҙы,

яфа-ыҙаларҙы еңеп сыға. Аҙаҡтан үҙе төплө аң-белемле ысын тәрбиәсегә әйләнә, автор хыял иткән милләт әсәһе дәрәжәһенә күтәрелә.

Р. Фәхретдинов был әҫәрендә үҙенең «әхлаҡ ғилме» дәрестәрендә әйткән «ни сәсһәң, шуны урырһың», «әҙәм – мөхит вә тәрбиә емеше» тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен Әсмәнең ҡатмарлы яҙмышы аша ғибрәтле итеп тасуирлап бирә. Унынса, тормош үҙе, гүйә, – тәрбиәхана, тәрбиәселәре – кешеләр. Ә уларҙың араларында ниндәйҙәре генә юҡ. «Әҙәмде яҡшы вә яман итәсәк нәмә ҡәбилә вә нәҫел түгел – тәрбиәлер», – тип тағы бер тапҡыр тәкрарлай был китабында автор. Тәрбиәһе ниндәй – кешеһе шундай. Бында инде яҙыусының үҙ геройын юҡ-юҡта йәшәп килгән йәмғиәт тәртиптәре, социаль мөхит солғанышында һүрәтләй тороп та, мәғрифәтселек иллюзияларынан арына алмауы күренеп тора.

Бында шуныһы айырым билдәләүгә лайыҡ: түбән ҡатламдан сығып, уҡымышлы, абруйлы кешегә әүерелгән Ғәббәс һәм уның ҡыҙы Әсмә башҡорт халҡы вәкилдәренән иң колоритлы образдар булыуы менән әҙәбиәтебеҙ тарихы өсөн ҙур идея-эстетик ҡиммәткә эйә. Ә Әсмәнең олатаһының яҡын дуҫы булған Сәлим бабай – башҡорттоң «бөтә халыҡ бабаһы» булырҙай күркәм сифаттарын үҙенә туплауы, эш һөйөүсәнлеге, башҡорт тарихын, сәсәнлек сәнғәтен яҡшы белеүе, ҡурайға, йырға оҫталығы менән бик мөбәрәк образ. Ул, автор яҙғанса, «иҫке тарихыбыҙҙы һөйләгәндә, иҫке быуаттарҙы вә иҫке быуаттың халайыҡтарын тамам күҙ алдына килтерер ине». Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был колоритлы образ әҫәрҙәге ваҡиғалар үҫешендә бөтөнләй ҡатнашлыҡ итмәй. «Сәлим бабай» бүлегендә автор уҡыусыны уның менән йәнле итеп таныштырып тора ла, аҙаҡ уны бөтөнләй онота.

**Повестың төп идеяһы**

Яҙыусы әҫәрендә уҡыусыға еткерергә теләгән төп фекерен китап исеменең икенсе яртыһына уҡ сығарып ҡуйған: «Ғәмәл вә яза». Халыҡ мәҡәле әйткәнсә, «Ғәмәленә күрә әмәле, гонаһына күрә язаһы».

Әммә тормошта изге ғәмәлдәр, яҡшылыҡтар тиҙ генә һәм гелән генә тантана итеп тормай, яманлыҡтар ҙа еңел генә еңелеп бармай. Ҡай саҡ киреһенсә килеп сыҡҡылай. Ана бит Хикмәт хажи менән Муса мөрит Ғәббәс муллаға яла яғып, уның ниндәй татыу һәм бәхетле ғаиләһен еңел генә емереп ҡуялар, ҡатынын ваҡытһыҙ үлемгә, берҙән-бер ҡыҙҙарын үкһеҙ етемлеккә дусар итәләр. Бәхетһеҙ Әсмә шул арҡала әшәке Хәмиҙә ише ҡарсыҡтарҙан, әрәмтамаҡ, аҙғын Зәйнүш абыстай кеүек бәндәләрҙән күпме ыҙа-яфалар күрә. Хатта ошо әҙәм аҡтыҡтары тәрбиәле, йүнле кешеләр өҫтөнән көлөп, мыҫҡыллап тантана итә кеүек. Уҡыусы алдында: «Ғәмәлдең бер әмәле, гонаһтың бер язаһы юҡмы икән

ни? Кеше Хоҙай бәндәһе икән, бер мәл тәүбәгә килергә тейеш түгелме ни?» – тигән әрнеүле уй-тойғолар тыуып ҡуя.

Әҫәрҙең геройҙары менән шулай килеп сыға ла. Күпме матур ҡыҙҙарҙың яҙмыштарын боҙоп, оло гонаһтарға батҡан Хәмиҙә ҡарсыҡ та ахыр ғүмерендә тәүбәгә килә. «Күпме гонаһһыҙ йәндәрҙе харап иттем мин, үҙем эт кеүек тереклек иттем. Йөҙ дуҫымдан бер дуҫым ҡалманы. Эт урынында үләсәкмен. Минең хәлемдән ғибрәт алығыҙ! Минең хәлемдән Аллаһы Тәғәләгә һығынығыҙ!» – тип тәүбәләр ҡыла ул. Уның ауыҙынан ғәйепләү һүҙҙәрен байҙар адресына ла әйттертеп, әҫәрендә автор социаль мотивтарҙы ла яңғырата биреп ҡуя:«Үҙ туғрымда ғәйебебеҙ ҙурҙыр, – ти ул. – Ләкин Аллаһы Тәғәләнең иң ҡаты асыуы *был нәмәләрҙә сәбәп булған байҙарҙа булһа кәрәк.* Әгәр ҙә улар фәхешхана мөштәриҙәре (һатып алыусылары) булмаһалар ине, бындай хәлдәр донъяла һис булмаҫ ине. Ләкин буш ҡалмаҫтар, бер көн килер, минең кеүек улар ҙа ғәмәлдәренең язаһын һәм дә әсе язаһын күрерҙәр...»

Хәмиҙәнең оло гонаһтары өсөн күрер язаһы, повеста әйтелгәнсә, үҙе яман ауырыу әләктереп, ыҙа-яфалар күреп үлеүендә булһа, һаран һәм малға туймаҫ мәкерле Хикмәт хажиҙың язаһы мөлкәттәре таралып, үҙе ҡаҡҡа ултырып, михнәт эсендә донъя ҡуйыуында. Зәйнүш абыстай язаһы – Хоҙай һәм бәндә ҡарғыштарынан имгәнеп, үҙе хәйерсе хәленә ҡалыуында. Һәр кемдең гонаһтарына күрә язалары, уларҙы әхирәттән элек донъялыҡта ла күрергә тура килер, тип иҫкәртә кеүек автор был оло гонаһлы әҙәмдәр яҙмышында.

Повесть шундай юлдар менән тамамлана: «Донъяның бынса мәшәҡәттәрен күргәндәре һуңында Әсмә илә Ғәббәс йәнә Алланың бының кеүек латифаларына мазһар (яғымлылыҡтарына лайыҡ) булдылар. Әҙәмдәр кәрәк яҡшы, кәрәк яман булһын, ғәмәлдәренә күрә язаһын күрерҙәр!»

**Әҫәрҙең художество үҙенсәлектәре**

«Әсмә» повесы башҡорт әҙәбиәтенең мәғрифәтселек реализмына күсеүе юлында үҙе бер яңы күренеш булды. Был яңылыҡ уның йөкмәткеһендә генә түгел, художество эшләнешендә лә күҙәтелә. Автор хәл-ваҡиғаларҙы теҙеп хикәйәләүҙән художестволы тасуирлауға, ярым абстракт образдарҙан конкрет тормошсан образдарҙы кәүҙәләндереүгә, тел-стиль, һүрәтләү сараларын төрләләндереүгә өҫтөнлөк бирә. Хәҙер ул «Ғилме әхлаҡ» китаптарындағы, хатта «Сәлимә» әҫәрендәге шикелле иҫкелеккә, наҙанлыҡҡа ҡаршы өгөт-нәсихәт, мораль уҡыу аша көрәшеүсе булараҡ ҡына сығыш яһап ҡалмай, бәлки кешеләрҙе «әҙәм һүрәтендәге эт» хәленә төшөргә мәжбүр иткән йәмғиәт тәртиптәренең яман сирҙәрен, һәләкәтле әҙемтәләрен дә һүрәтләй, кешенең тормоштағы роленә, йәшәүҙең мәғәнәһе һәм

асылына бәйле социаль, фәлсәфәүи пландағы уйҙарға бирелә. Шундай мәлдәрҙә автор геройҙарынан социаль-сәйәси яҡтан ҡырҡа ғына фекерҙәр ҙә әйттереп ебәргеләй. Мәҫәлән, ауылда йәдит мәктәбе асыу хаҡындағы сходта ауылдың бер аҡһаҡалы бына ниндәйерәк һүҙҙәр ысҡындыра: «Беҙ әгәр ҙә үҙебеҙ өсөн үҙебеҙ ҡайғырмаһаҡ, беҙҙең өсөн кем ҡайғырһын! Һәр кем беҙҙән (йәғни крәҫтиәндән) алырға ғына ҡарай, әммә биреүсе юҡ! Бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға ҡәҙәр, хатта йәйгелеген көн-төн эшләп йөрөйбеҙ, тирҙәр ағыҙып мал табабыҙ. Башҡаға ни ҡалды, беҙҙән ғилемлекте лә күп күрәләр!.. Был һүҙҙәр бында йыйылмыш ҡарттарҙың йөмләһенең һүҙҙәрелер».

Р. Фәхретдинов кешеләрҙең, «бер ата вә әсә балаһы булып та», был ижтимағи тормошта «алған өлөштәре тигеҙһеҙ, ... бәхеттәре лә бик айырылып тороуы», берәүҙәр «ҡәҙер-хөрмәт вә наҙҙарға күмелгәндә», икенселәрҙең «эттәр ҡәҙәр булһын рәхәт күрмәүҙәре» менән һис тә килешә алмай. Уның тормошҡа булған был мөнәсәбәте *пафосҡаса* – һүрәтләгән күренештәргә, хәл-ваҡиғаларға һәм образдарға тәрән идея-эмоциональ баһа биреүгәсә күтәрелә. Автор заманының күп кенә насар күренештәрен әсенеп һүрәтләй, тәнҡит утына тота, ә ыңғайҙарын ҡыуанып, улай ғына ла түгел, үҙе күрергә теләгәнсә фантазияһында үҫтереп, идеаллаштырып һүрәтләй. Бындай саҡтарҙа ул сюжеттың тәбиғи ағышын кинәт кенә үҙенсә үҙгәртеп, лирик һәм публицистик сигенеүҙәр яһап ебәрә, шартлылыҡ, көтөлмәгәнлелек алымдарына мөрәжәғәт итеп, шаҡтай мажаралы, аянpolitically ла, ҡыуаныслы ла, көлкөлө лә ситуациялар тыуҙыра. Шул ерлектә әҫәрҙә драматик, романтик һәм сатирик пафостар бергә осраша. Повеста Көнсығыштың мажаралы хикәйәт формаһы менән Көнбайыштың авантюралы роман формаһы берләшеп киткәндәй була.

Яҙыусының тормошҡа әүҙем мөнәсәбәте образдарҙы асып биреү үҙенсәлектәрендә лә сағылыш таба. Автор геройҙарының күңел донъяһын, эш-ҡылыҡтарын, бөтә ҡатмарлылыҡтарында һәм ҡаршылыҡтарында уҡ булмаһа ла, уңышлы ғына индивидуаллаштереп, үҫеш-үҙгәрештә күрһәтеп биреүгә өлгәшә. Әҫәрҙә беҙ персонаждарҙың оҫта тасуирланған портреттарына, уларҙың характерҙарын асыуға булышлыҡ итерҙәй тормош һәм пейзаж картиналарына, ваҡыты-ваҡыты менән юмористик һәм сатирик стилдә сағылдырылған күренештәргә һәм хәл-ваҡиғаларға, тапҡыр сағыштырыуҙарға, матур ҡоролған диалогтарға тап булабыҙ. Унда драматик ситуациялар мул булыуға ҡарамаҫтан, автор хикәйәләүҙең уйсан, талғын тонын үҙ итә. Уның монологтарға, публицистик һәм лирик сигенеүҙәргә, халыҡсан хикмәтле һүҙҙәргә, мәҡәл-әйтемдәргә мөрәжәғәт итеүе – шуның бер дәлиле.

**Ижадының әһәмиәте**

Р. Фәхретдиновтың повестары шул заман башҡорт мәҙәниәте тормошонда яңы бер күренеш булды. Улар тиҙ арала киң йәмәғәтселектең иғтибарын яулап ала. Мәҫәлән, венгр гәзите «Слово»ның Башҡортостанда булып киткән хәбәрсеһе Урсын үҙенең «Алыҫ Көнсығышҡа сәйәхәттән» тигән юлъяҙмаһында: «Башҡорт прозаиктарының иң күренеклеһе Ризаитдин Фәхретдинов. Уның әҫәрҙәре – башҡорт һәм татарҙарҙың хөрәфәттәренә бик шәп сатира. Ул Европа мәғрифәтселегә тарафдары», – тип айырып әйтә. Бөйөк татар шағиры Ғ. Туҡай иһә уны: «Әсмә», «Сәлимә» китаптары менән яҙыу көсөн... күрһәткән, ... хикәйәләүе асыҡ, яҙыу стиле еңел гүзәл бер яҙыусылыр», – тип, бик юғары баһалай. Уның ижады менән күренекле рус яҙыусыһы М. Горький ҙа ҡыҙыҡһына.

Ғөмүмән, Ризаитдин Фәхретдинов фән, мәғрифәт һәм әҙәбиәт өлкәләрендәге ғәйәт ҙур эшмәкәрлеге менән туған башҡорт халҡының ғына түгел, башҡа төрки халыҡтарының да рухи-мәҙәни тормошонда тәрән эҙ ҡалдырған шәхес булды. Уның ғилми-әҙәби мираҫының әһәмиәте хәҙерге заман өсөн дә бик кәрәкле һәм ҡиммәтле.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Ризаитдин Фәхретдиновты ниндәйерәк кеше итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Уның тормош юлы, уҡыуҙары, ҡайҙа эшләүҙәре тураһында һөйләгеҙ. 2. Р. Фәхретдиновтың ғалимлығын ниндәй өлкәләрҙә күрәһегеҙ? Уның мәғрифәтселек ҡараштары тураһында һөйләгеҙ. 3. «Аҫар» китаптар серияһында мәғрифәтсе-ғалим үҙ алдына ниндәй бурыстар ҡуйған? 4. Башҡортостан тарихы буйынса яҙған хеҙмәттәрен, уларҙың эстәлектәрен иҫкә төшөрөгөҙ. 5. Р. Фәхретдинов ни өсөн әҙәбиәткә лә мөрәжәғәт иткән? «Сәлимә» повесы хаҡында һөйләгеҙ. «Идеаль образ» тигәнде нисек аңлайһығыҙ? Шәкерт һәм Сәлимә образдарына характеристика бирегеҙ. 6. «Әсмә» әҫәрен ни өсөн повесть тип атайбыҙ? Уның композицион төҙөлөшө, сюжеты хаҡында һөйләгеҙ. 7. «Әсмә» повесында гонаһ һәм яза мәсьәләһе нисек яҡтыртыла? Быны геройҙар яҙмышына бәйләп аңлатығыҙ. 8. Р. Фәхретдинов әҫәрҙәренең теле һәм стиле, художество үҙенсәлектәре тураһында фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.

# XX БЫУАТ БАШЫНДА ИЖТИМАҒИ ТОРМОШ, МӘҘӘНИӘТ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ

XX быуат башында башҡорттар араһына капиталистик мөнәсәбәттәр ныҡлап инә. Башҡорт эшселәренең һаны 17 проценттан уҙып китә, 1200-гә яҡын башҡорт төрлө сәнәғәт предприятиеларының, алтын приискыларының хужаларына әүерелә. Халыҡтың синфи ҡатлауланыуы көндән-көн көсәйә барған кеүек, социаль һәм милли-колониаль иҙелеүе лә көсәйә.

Башҡортостанда капитализмдың йылдам үҫеүе, 1905–1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция ваҡиғалары башҡорт халҡының милли аңын, мәҙәни тормошон үҙгәртеү өсөн этәргес көс булды. Яңылыҡҡа ынтылыш айырыуса мәғариф, мәҙәниәт өлкәләрендә күҙәтелде.

**Мәғарифтағы, мәҙәниәттәге үҫеш-үҙгәрештәр**

XX быуат башында башҡорт демократик интеллигенцияһы тормош-көнкүрештә Европаса йәшәү, мәктәп-мәҙрәсәләрҙә фәндәрҙе туған телдә уҡытыуҙы индереү, йәдитсә уҡытыу өсөн көрәште әүҙемләштерҙе. 1905–1907 йылдарҙағы революциянан һуң мәктәптәр айырыуса күп асыла. 1915 йылға уларҙың һаны 2000-гә етә яҙа. Уларҙа 110 меңдән артығыраҡ уҡыусы, шул иҫәптән 18 мең ҡыҙ бала белем алған. Уҡытыусыларҙың 30 проценты дөйөм урта йә махсус белемле заманса ҡарашлы кешеләр булған. 1917 йылға инде милли уҡыу йорттарының 53 проценты балаларға яңыса (йәдитсә) белем биргән була. Балаларға русса белем биреүгә лә иғтибар көсәйә. XIX быуат аҙағында 100-гә лә етмәгән башҡорт-рус, татар-рус мәктәптәренең һаны хәҙер 3,5 тапҡырға арта. 1905 йылда төбәктәге Өфө, Ырымбур йә Пермь кеүек ҙур ҡалаларҙың береһендә университет асыу мәсьәләһе лә күтәрелә. Әммә ул тормошҡа ашмай. 1909 йылда Өфөлә уҡытыусылар институты ғына асыла (бөгөнгө Башҡорт дәүләт университеты үҙенең юл башын ошо уҡыу йортонан ала). Был белем усаҡтарында уҡыған башҡорт балалары өсөн дәреслектәр яҙыу, һүҙлектәр төҙөү хәҙер көнүҙәк мәсьәләгә әүерелә. Уны хәл итеү буйынса

В. В. Катаринский, М. Ә. Ҡыуатов, А. Г. Бессонов, М. А. Ҡулаев кеүек ғалим-педагогтар ҙур эш башҡара.

1906 йылда Өфөлә төп иғтибарын дин әһелдәренән бигерәк уҡытыусылар, мәҙәни-ағартыу учреждениелары, нәшриәт хеҙмәткәрҙәре әҙерләүгә йүнәлткән юғары типтағы «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең асылыуы ла мөһим ваҡиға була. Унда уҡытыу юғары уҡыу йорттарындағы кимәлдә барған. Уны тамамлаған кешеләрҙең 10 проценттан саҡ ҡына артығыраҡы мулла, ҡалғандары мәғариф, мәҙәниәт, әҙәбиәт һәм фән эшмәкәрҙәре булып киткән. Улар араһында 17 башҡорт һәм татар әҙибе һәм ғалимы ла (М. Ғафури, С. Ҡудаш, Б. Ишемғолов, Х. Ғәбитов, Ш. Бабич, Ғ. Ибраһимов, Н. Иҫәнбәт, Х. Туфан һ. б.), Кәрим Хәкимов, Кәрим Иҙелғужин кеүек ҙур дәүләт эшмәкәрҙәре лә бар.

Халыҡтың милли аңы, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте үҫешендә китапханалар ҙа ҙур роль уйнай. XX быуат башында Башҡортостанда 360-лап китапхана, 500-гә яҡын уҡыу йорто йә бүлмәһе эшләгән. 1915 йылда Өфөлә тәүге милли китапхана эшләй башлаған.

Халыҡтың рухи-мәҙәни тормошонда ваҡытлы матбуғаттың роле баһалап бөткөһөҙ. Беренсе рус революцияһы йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа милли телдәрҙә гәзит-журналдар киң ҡолас менән үҫеп китте. «Ваҡыт», «Тормош», «Урал», «Азат халыҡ» кеүек гәзиттәрҙең, «Шура», «Сүкеш», «Ҡарсыға», «Ҡармаҡ» ише журналдарҙың һәм башҡа баҫмаларҙың күпселеге мәғрифәтселек һәм милли азатлыҡ идеяларын алға һөрҙө. Араларында халыҡты социаль ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы көрәшергә саҡырған, әҙәбиәттә революцион-демократик рухтағы тәнҡитле реализм йүнәлешенең, сатирик стилдең үҫеүенә этәргес биргән «Урал» гәзите, «Сүкеш», «Ҡарсыға» сатирик журналдары кеүек баҫмалар ҙа булды.

XX быуат башында халыҡтың мәҙәниәте, художестволы-эстетик фекере үҫешенә әҙәбиәт менән айырылғыһыҙ берлектә йәшәгән театр ҙур этәргес бирә. Рус, башҡорт-рус, татар-рус мәктәптәре, юғары типтағы мәҙрәсәләр шәкерттәренең бер-ике пәрҙәлек ябай ғына үҙ ижад емештәрен сәхнәләштереүҙәренән башланып киткән процестың әүҙемләшеүенә рус театры ҙур йоғонто яһай.

1906 йылда И. Ҡудашев-Ашҡаҙарский Ырымбурҙа профессиональ милли театр төҙөй. 1907 йылда унда эшләгән бер төркөм артистар «Сәйяр» («Күсмә») исемле профессиональ театр труппаһы барлыҡҡа килтерә. Был театрҙарҙа эшләп тәжрибә туплаған Сәхибьямал Ғиззәтуллина-Волжская 1912 йылда Өфөлә профессиональ труппа ойоштора. 1915 йылда Ырымбурҙа Вәлиулла Мортазин-Иманский етәкселегендә «Ширҡәт» исемле күсмә труппа барлыҡҡа килә. Был милли театр труппалары сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә рус һәм Европа әҙәбиәттәре классиктарының, татар һәм башҡорт драматургтарының әҫәрҙәренән торған бай репертуар барлыҡҡа килтерә.

Милли театрҙың тыуыуы башҡорт драматургияһының үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Сәхнәләрҙә Афзал Таһировтың «Бисура», «Салбарһыҙҙар», Фазыл Туйкиндың «Ватан ҡаһармандары», «Тормош ҡорбандары», Ғиләж Ғүмәрскийҙың «Һуғышта», Бәхтиәр Бәхтегәрәй улының «Ер һатыу» тигән пьесалары ҡуйыла. М. Горький драматургияһы тәьҫирендә Ғәбдрәүеф Ниязбаев «Көслөләр һәм көсһөҙҙәр» тигән тәүге драмаһын ижад итә. XX быуат башында башҡорт драматургияһы шулай милли театр менән айырылғыһыҙ берлектә нығына башлай.

**Әҙәби бәйләнештәрҙең үҫеше**

XX быуат башында Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәр нығына, революция һәм Беренсе донъя һуғышы ваҡиғалары ҡуйыра барған шарттарҙа башҡорт әҙәбиәтенең башҡа әҙәбиәттәр менән бәйләнеше бермә-бер әүҙемләшә. Айырыуса революцион һәм халыҡсан-демократик идеялар киң сағылыш тапҡан көнбайыш һәм рус әҙәбиәттәре менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә. Революцион йырҙар менән бер рәттән, рус һәм Европа әҙиптәренең эпик, лирик һәм драматик әҫәрҙәре күпләп тәржемә ителә башлай. Бигерәк тә А. Пушкин, М. Лермонтов, Н. Гоголь, Л. Толстой, А. Чехов, А. Островский, М. Горький, Мольер (Жан Батист Поклен), Ги де Мопассан, И. Шиллер, Дж. Байрон, Ж. Руссо, В. Гюго, Э. Беллами, Г. Гейне, Г. Андерсен, Д. Дефо, Г. Сенкевич әҫәрҙәре популярлыҡ ҡаҙана. Мәҫәлән, 1907–1917 йылдар араһында ғына ла Л. Толстойҙың әҫәрҙәре («Хажи Морат», «Тере мәйет», «Корней Васильевич», «Кавказ әсире», «Будда», «Крейцер сонатаһы», «Толстой бабай хикәйәләре», «Ильяс», «Кешегә күпме ер кәрәк?» һ. б.) тәржемәлә айырым китаптар булып 37 тапҡыр донъя күрә. Ошо ун йыл эсендә генә лә рус әҙәбиәтенән тәржемәлә 140 китап баҫылып сыға (Н. Гоголь. «Ревизор»; А. Пушкин. «Дубровский»; М. Лермонтов. «Черкес ҡыҙы»; И. Тургенев. «Аҡсаһыҙлыҡ»; А. Чехов. «Фаэтонсы» һ. б.)

XX быуат башында классик Көнсығыш әҙәбиәте өлгөләрен үҙләштереү традициялары ла дауам итә. Айырым йыйынтыҡтарҙа Хәйәм, Низами, Сәғҙи, Руми, Жәми, Рудаки, Физули кеүек бөйөк шағирҙарҙың, яңы осорҙа реалистик йүнәлештә ижад иткән әҙиптәрҙең әҫәрҙәре тәржемә ителеп баҫылып тора.

Әҙәби бәйләнештәрҙең офоҡтары бына ошолай киңәйә барыуы башҡорт әҙәбиәтенең яңы идеялар, мотивтар, сюжеттар, образдар, сара-алымдар, жанрҙар менән байыуына, унда тәнҡитле реализм һәм прогрессив романтизм йүнәлештәренең үҫешенә ҙур этәргес бирә. Мәҫәлән, Д. Юлтый, Я. Юмаев, Ш. Бабич, М. Ғафури, С. Яҡшығоловтарҙың А. Пушкин, М. Лермонтов, И. Крылов, А. Кольцов әҫәрҙәрендәге мотивтарҙы үҙҙәренсә эшкәрткән һәм үҫтергән шиғырҙар һәм мәҫәлдәр ижад итеүҙәре, Һ. Сәғҙиҙең «Бәхетһеҙҙәр» повесында И. Гончаровтың «Обломов» романы, В. Солтановтың «Астарға байрам» хикәйәһендә

Ф. Достоевскийҙың «Мальчик у Христа на Ёлке» хикәйәһенең мотивтары һәм сюжет элементтары ярайһы ғына файҙаланылыуы шул хаҡта һөйләй.

Әлбиттә, был осорҙа әҙәби бәйләнеш бер яҡлы ғына – башҡорт әҙиптәренең алдынғы рус, Көнбайыш һәм бүтән әҙәбиәттәре ҡаҙаныштарын өйрәнеү һәм ижади үҙләштереү йүнәлешендә генә барманы. Алдынғы ҡарашлы рус яҙыусылары Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының социаль-иҡтисади хәле, рухи-мәҙәни тормошо менән бығаса булмағанса ныҡлап ҡыҙыҡһындылар һәм гражданлыҡ пафосы, халыҡсан-демократик йөкмәтке, тәнҡит рухы менән һуғарылған реалистик әҫәрҙәр ижад иттеләр. Был йәһәттән П. И. Добротворскийҙың (псевдонимы – Пётр Кармасанов) урындағы халыҡтың аяныслы яҙмышын, капитализм шарттарында социаль айырымланыуҙарҙың көсәйеүен бөтә дөрөҫлөгөндә һүрәтләгән, башҡорт ерҙәренең аяуһыҙ таланыуын ҡыйыу фашлаған «В глуши Башкирии» («Башҡортостан төпкөлөндә»), «Моя исповедь» («Күңелемдәген асып һалыу») тигән хикәйәләр, очерктар һәм иҫтәлектәр йыйынтыҡтары айырылып торҙо. Н. А. Крашенинниковтың башҡорт хеҙмәтсәндәренең милли-колониаль иҙелеүен генә түгел, ислам дине әһелдәре тарафынан да таланыуын күрһәтеп биргән «Угасающая Башкирия» («Һүнеп барған Башҡортостан») тигән хикәйәләр йыйынтығы ла күп йәһәттән уларға ауаздаш булды. Унда яҙыусы тормош ауырлығына күнеккән, әммә көр күңелле, поэтик тәбиғәтле башҡорт ирҙәренең һәм ҡатын-ҡыҙҙарының иҫтә ҡалырлыҡ образдарын һынландырҙы.

Шул уҡ ваҡытта Н. А. Крашенинниковтың уларҙы бер яҡлыраҡ һүрәтләүе лә күҙгә ташлана. Быуаттар буйына үҙ ере азатлығы өсөн алышҡан, социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы көрәшкән башҡорт халҡының баҙыҡ рухи көсө, ҡыйыулыҡ һәм тәүәккәллек сифаттары уның әҫәрҙәрендә тейешле сағылышын тапмаған. Яҙыусы геройҙарының үҙ бәхете, киләсәге өсөн ҡыйыу көрәшеүсе ижтимағи зат булыуҙарын күрһәтеүгә ҡарағанда, «тәбиғәт балаһы» икәнен тасуирлауға нығыраҡ баҫым яһаған. Уның матур һүрәтләүҙәргә, нескә тойғоларға ифрат бай «Эмилә» романында был фекер айырыуса ныҡ үткәрелгән. Бәләкәйҙән үк етем ҡалып, мәҙәниле рус ғаиләһенә барып юлыҡҡан башҡорт ҡыҙы Эмилә, унда мәғрифәт донъяһына инеп китерлек тейешле тәрбиә, төплө белем алғас ҡына, тыуған яғын ныҡ һағыныу арҡаһында, барыһына ҡул һелтәп, үҙенең далаһына, тәбиғәт ҡосағына ҡайтып китә. Быным менән яҙыусы «тәбиғәт балаһы» булып тыуған Эмиләләрҙә – уларҙы күпме генә цивилизациялы итергә тырышма – бөтөнләйгә «тәбиғәт балаһы» булып ҡалыу теләге мәғрифәтле булып йәшәүҙән, ижтимағи прогресҡа, мәҙәниәт үҫешенә хеҙмәт итеү бурысынан көслөрәк тигән үкенесле уй-фекерҙәрен әйтеп бирмәксе.

«Дала балаһы», «тәбиғәт балаһы» мотивтары А. М. Фёдоровтың 1900, 1908 һәм 1912 йылдарҙа Мәскәү һәм Петербург ҡалаларында бер-бер артлы донъя күргән «Степь сказалась» («Дала үҙен белгертте») романында ла ярайһы сағылыш таба. Уның төп геройы Арыҫлан Арыҫланов, бәләкәйҙән үк етем ҡалып, ас-яланғас көн күрә, ҡоторған бүре тешләгәндән һуң үҙ эшенең оҫтаһы, мәрхәмәтле табип Рокотов ярҙамында үлемдән ҡотолоп ҡына ҡалмай, бәлки гимназияла, Петербург университетының медицина һәм юридик факультеттарында белем алыуға һәм аристократтар ҡорона килеп инеүгә өлгәшә. Ләкин ул Әмилә кеүек бөтәһен дә ташлап, тыуған далаһына ҡайтып китә. Әммә Әмилә кеүектәрҙән айырмалы рәүештә, Арыҫлан башҡорт ерҙәрен йыртҡыстарса талаған Брызгалов кеүек хәйләкәр байҙарға, чиновниктарға ҡаршы көрәшә, әммә уға ярҙам итеүселәр әллә ни осрап бармай. Уның яҙмышы трагик тамамлана. Үлеп ғашиҡ булған кешеһенең Брызгаловтың һөйәркәһе һәм компаньоны булыуын белгәс, башҡорттарға хас булғанса, алдашыуҙы белмәгән, саф күңелле, намыҫлы, тоғро тәбиғәтле Арыҫланов аҡылдан яҙа.

Был осорҙа башҡорт-рус әҙәби бәйләнештәрен үҫтереүҙә М. Горькийҙың роле ҙур була. Үҙе күрһәткәнсә, «башҡорт легендаһы» ерлегендә яҙылған «Немой» («Телһеҙ») әҫәрендә ул көтөүсе егет образы аша тормош «атынан» йығып төшөрөлгән, телһеҙ ҡалған, рухи һәм социаль йәбер-золомдарға дусар ителгән, әммә шуға ҡарамаҫтан, ғорурлығын, киләсәккә өмөтөн, үҙ көсөнә ышанысын юғалтмаған ирек һөйөр башҡорт халҡының дөйөмләштерелгән образын символик планда күрһәтеп биреүгә өлгәшә. Ә бына «Әсә» романында, Ниловнаның образын тыуҙырғанда, Өфө революционерҙары бер туған Иван менән Михаил Кадомцевтарҙың әсәһенә хас һыҙаттарҙы киң ҡуллана. Уның «Жизнь Клима Самгина» («Клим Самгиндың тормошо») роман-эпопеяһында ла башҡорт темаһы күпмелер кимәлдә сағылыш таба.

Ижадтарында башҡорт темаһына мөрәжәғәт иткән күп кенә рус яҙыусылары М. Горький менән тығыҙ бәйләнеш тотҡандар, унан кәңәш алғандар. Мәҫәлән, социал-демократ В. В. Брусянин үҙенең ысын мәғәнәһендә гуманлылыҡ идеялары менән һуғарылған тиҫтәләгән хикәйәләрендә, «В борьбе за труд» («Хеҙмәт өсөн көрәш») повесында капиталистик мөнәсәбәттәрҙең ҡала һәм ауыл ерҙәренә йылдам үтеп инеүе шарттарында башҡорт халҡының социаль һәм милли-колониаль иҙеүгә аяуһыҙ дусар ителеүе, башҡорт ерҙәрен вәхшиҙәрсә таланыуы күренештәрен ҡыйыу фашлай, рус, башҡорт һәм башҡа милләт эшселәренең ғәҙелһеҙлектәргә, яуызлыҡтарға ҡаршы берҙәм көрәшен реалистик планда күрһәтеп бирә.

Башҡорт ысынбарлығын реалистик планда сағылдырыуҙың матур бер битен А. Г. Туркин әҫәрҙәре тәшкил итә. 1914 йылда

Петербургта донъя күргән «Степное» («Далалы») тигән хикәйәләр йыйынтығында ул рус крәҫтиәндәре һәм эшселәренең, икеләтә иҙеүгә дусар ителгән, баҫылып йәшәгән, әммә күңел донъяһы бай, нескә тәбиғәтле, талантлы башҡорттарҙың михнәтле тормошон сағыу һүрәтләй, уларҙың бер-береһе менән аралашып, терәк-таяныс булышып, дуҫ йәшәүҙәрен бөтә күңеленән хуплай, үҙен йәбер-золомдарға нәфрәтләнеп ҡаршы сыҡҡан, халыҡтың үҙ яҙмышын үҙе хәл итергә һәләтле булыуына ышанып ҡараған демократик яҙыусы итеп күрһәтә.

Әйтергә кәрәк, XX быуат башында башҡорт әҙәбиәтенең бына ошолай алдынғы Көнбайыш, айырыуса рус әҙәбиәттәре менән бәйләнештәренең әүҙем үҫеүе, унда халыҡсан-демократик идеяларҙың, реалистик ижад принциптарының йылдам нығыныуына ҙур этәргес бирҙе.

**Әҙәбиәттең үҫеш тенденциялары**

XX быуат башында ижади бәйләнештәре, офоҡтары бермә-бер киңәйгән, илдә барған тарихи ваҡиғалар йоғонтоһон нык кисергән башҡорт әҙәбиәте идея-тематик йөкмәткеһе яғынан да, жанрҙар йәһәтенән дә йылдам байый барҙы. Унда мәғрифәтселек идеяларын сағылдырған, романтик уй-тойғолар менән һуғарылған әҫәрҙәр менән бер рәттән, тәнҡит рухлы, сатирик пафослы ижад емештәре лә күренә башланы. Модернистик йүнәлешле әҫәрҙәр ҙә үҙҙәрен ярайһы һиҙҙертте. Халыҡтың тормошон яҡшыртыуҙа аң-белемле, камил әхлаҡлы, мәҙәниәтле кешеләрҙең роленә ҙур өмөт бағлаған мәғрифәтсе яҙыусылар хикәйә, новелла, художестволы очерк, повесть кеүек эпик, мәктүп, хитап, мәҫәл, тәмҫил кеүек поэтик жанрҙарға әүҙем мөрәжәғәт иттеләр. Мәжит Ғафури, Закир Һаҙи, Сафуан Яҡшығолов, Зыя Өммәти, Һаҙи Сәғҙи, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый һәм башҡаларҙың был жанрҙарға ҡараған ижад емештәрендә халыҡты алға киткән рус һәм Көнбайыш мәҙәниәте ҡаҙаныштарын үҙләштерергә, русса белем алырға өндәү мотивтары айырыуса көсәйҙе. Шуның менән бер рәттән, әҙәбиәткә өр-яңы тема – *рус темаһы* килеп керҙе. Рус әҙиптәре ижадында башҡорт темаһы киң сағылыш тапҡан кеүек, башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрендә уртаҡ Ватан – Рәсәйҙең дөйөмләштерелгән образын тыуҙырырға ынтылыу, башҡорттарға хөрмәт менән ҡараған, уларға наҙанлыҡ, торғонлоҡ донъяһынан сығыуҙа, ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы көрәшеүҙә дөрөҫ юл күрһәтергә ынтылған изге күңелле, миһырбанлы рус кешеләре образдарын һынландырыу ҙа күренә башланы. Мәҫәлән, Афзал Таһиров үҙенең «Мазлумалар» повесында, Ғәли Рафиҡи «Рауза» хикәйәһендә һоҡланғыс тәбиғәтле, изге күңелле, ярҙамсыл рус кешеләренең идеаль образдарын тыуҙырып, мәғрифәтсел характерҙағы гуманистик ҡараштарын бик асыҡ сағылдырҙылар, шул уҡ ваҡытта йәшәп килгән

тәртиптәргә, ғәҙелһеҙлектәргә ҡарата тәнҡитле мөнәсәбәттәрен дә ярайһы һиҙҙерҙеләр.

XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә рус темаһына мөрәжәғәт иткән әҫәрҙәр араһында был милләт вәкилдәренең башҡорт халҡы яҙмышында кире роль уйнаған образдарын һынландырған ижад емештәре лә булды. Бәхтиәр Бәхтигәрәй улының «Ер һатыу» драмаһы – шуларҙың береһе. Унда автор, мәғрифәтсе әҙиптәрҙән айырмалы рәүештә, Иван менән Василий йөҙөндә башҡорт ерҙәрен алдау, хәйлә ҡороу юлдары менән талап, капитал туплаған, Этҡол менән Этҡусты ише меңәрләгән башҡорт крәҫтиәндәрен бөлгөнлөккә дусар иткән ҡомһоҙ, хәйләкәр һәм ҡаты күңелле рус баярҙарының кире образдарын тыуҙырҙы, улар йөҙөндә батша самодержавиеһының милли-колониаль сәйәсәтен фашланы.

Әйтергә кәрәк, Бәхтиәр Бәхтигәрәй улының был әҫәре, Фазыл Туйкиндың башҡорт халҡының патриотизмын, 1812 йылғы Ватан һуғышы осоронда күрһәткән героизмын сағылдырған «Ватан ҡаһармандары», Ғәбдрәүеф Ниязбаевтың милли буржуазияның формалашыуын һәм уның ысын йөҙөн күрһәтеп биргән, буржуаз йәмғиәттең кире яҡтарын асып һалған «Көслөләр һәм көсһөҙҙәр» драмалары, Афзал Таһировтың комедиялары был осорҙа башҡорт драматургияһының тулы ҡанлы үҫеш юлына баҫыуын күрһәттеләр.

Ғөмүмән, был осорҙа башҡорт әҙәбиәте тиҙләтелгән үҫеш юлына баҫты. Унда тәнҡит рухлы, революцион-демократик йөкмәткеле әҫәрҙәр ҙә йыш күренә башланы. Бына 1907 йылда «Сүкеш» журналында баҫылған «Эшсе ауыҙынан» исемле шиғыр. Унда эшселәрҙең көнө-төнө эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, ас-яланғас йәшәүҙәре тураһында әйтелә лә «Ни өсөн беҙгә донъяла был тиклем яфалар, ғүмер буйы бөтмәй торған хафалар? Беҙҙең дә рәхәт күрәһе көнөбөҙ бармы?» тигән һорау ҡуйыла.

> Юҡ, туғандар, рәхәт көтөргә ярамай,
> Берләшеп көрәшергә кәрәк, һис нигә ҡарамай,
> Көрәшеп кенә хаҡыбыҙҙы алырбыҙ,
> Юҡһа бөтөнләй мәхрүм ҡалырбыҙ, –

тип, эшселәрҙе революцион көрәшкә саҡырыу менән тамамлана был шиғыр. Ерҙе крәҫтиәндәргә биреү, крәҫтиәндәрҙең үҙ хоҡуҡтарын даулауы тураһында ла байтаҡ шиғырҙар донъя күрә.

Хеҙмәтсән халыҡтың мәнфәғәтен яҡлаған, тормошто нисек бар шулай реаль итеп һүрәтләгән әҫәрҙәр Вәсим Солтанов, Кәбир Туйкин, Әхкәметдин Иҫәнбирҙин, Закир Һаҙи, айырыуса Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый кеүек яҙыусылар ижадында күберәк күренә башлай. Һөҙөмтәлә, башҡорт әҙәбиәтендә ныҡлы традицияһы булған мәғрифәтселек реализмы үҙ

позицияһын тәнҡитле реализмға бирә бара. Әҙәбиәткә социаль һәм милли-колониаль иҙеүҙән ҡотолоу юлдарын эҙләгән яңы герой килә. Башлап М. Ғафури, рус әҙәбиәтендә М. Горький тормошҡа ашырған кеүек, үҙ әҫәрҙәрендә тормош төпкөлөнә ташланған «бәләкәй кеше» образын тыуҙыра. Уның һәм А. Таһировтың 1905 йылғы революциянан һуң яҙылған күпселек әҫәрҙәре тәнҡитле реализм методына нигеҙләнеп тыуа.

Был осор башҡорт әҙәбиәтендә иҫке тормошто, хөкөм һөргән ижтимағи ҡоролошто тәнҡитләү рухы менән һуғарылған реалистик әҫәрҙәр менән бер рәттән, романтик әҫәрҙәр ҙә байтаҡ булды. Романтизм методы айырыуса ҡара реакция йылдарында үҙенең юғары нөктәһенә етте. Уның, михнәтле тормоштан ситләшеп, күктәргә ашҡан йәки боронғо көнкүреште идеаллаштырған *консерватив,* хыялға бирелеп, ниндәйҙер абстракт мөхәббәт, хозур тәбиғәт донъяһын сағылдырған *пассив* һәм, күктәргә ашҡанда ла, «йондоҙҙар кискәндә» лә халыҡ яҙмышы, уның киләсәге тураһында уйлаған *прогрессив* йүнәлештәре барлыҡҡа килде. Тәүге йүнәлеш Д. Юлтый, Ф. Туйкин, С. Яҡшығолов, айырыуса Ф. Сөләймәнов, икенсеһе М. Ғафури һәм башҡа тиҫтәләгән шағир һәм прозаиктарҙың әҫәрҙәрендә сағылыш тапты. Прогрессив романтизм йүнәлешендә иң сағыу әҫәрҙәрҙе тыуҙырыусы Ә. Таңғатаров, бигерәк тә Ш. Бабич булды.

XX быуат башында башҡорт әҙәбиәтенә байтаҡ ҡына йәш әҙәби көстәр килде. Уларҙың шағирҙар Сафуан Яҡшығолов, Шафиҡ Әминев-Тамъяни, прозаик Закир Һаҙи кеүек вәкилдәре башлыса мәғрифәтселек реализмы нигеҙендә ижад итһәләр, Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый, Сәйфи Ҡудаш, Шәйехзада Бабич кеүек яҙыусылар аҡрынлап был ижад методынан алғараҡ китеп, тәнҡитле реализм принциптарын үҙләштерҙеләр һәм быуат башындағы әҙәби хәрәкәттең төп көстәренә әйләнделәр. Башҡорт әҙәбиәтенең йәш көстәре ижад оҫталығына М. Аҡмулланан, айырыуса М. Ғафуриҙан һәм Ғ. Туҡайҙан өйрәнделәр. Мәҫәлән, 1908 йылда әҙәбиәт майҙанына килгән һәм халыҡты аң-белемгә саҡырып, мәғрифәтселек идеялары менән һуғарылған шиғырҙар ижад иткән Д. Юлтый үҙе үк был хаҡта шулай тип яҙҙы: «Ул ваҡытта минең Мәжит Ғафури, Ғабдулла Туҡай, Аҡмулла шиғырҙарын уҡып, шулар менән аҙыҡланып йөрөгән саҡтар ине. Мин уларға эйәреп байтаҡ ҡына шиғыр яҙғайным... «Башҡорт хәле»ндә Мәжит Ғафуриҙың «Йәш ғүмерем»е ҙур тәьҫир тота».

Ижадын мәғрифәтселек реализмы йүнәлешендә башлап ебәргән Д. Юлтый һуңыраҡ азатлыҡ, бәхет, шәхес ирке һымаҡ демократик идеяларҙы алға һөрҙө. Беренсе донъя һуғышында шағир һалдат булып ҡатнашты һәм һуғыштың империалистик асылын фашлаған «Шинель», «Сумка», «Ҡан баҙары» кеүек

шиғырҙарын яҙҙы. Октябрь революцияһын Д. Юлтый көрәштәрҙә сыныҡҡан революцион-демократик ҡарашлы һалдат-шағир булып ҡаршылай.

Ырымбурҙа сыҡҡан «Ҡармаҡ» журналында һәм Өфөләге «Тормош» гәзитендә 1914–1916 йылдарҙа тәүге шиғырҙарын баҫтырған шағир С. Ҡудаш та әҙәбиәткә Ғ. Туҡай һәм М. Ғафуриҙарҙың шәкерте булып килеп инде. Муллалар, байҙарға ҡаршы йүнәлтелгән сатирик шиғырҙарында С. Ҡудаш Туҡай поэтик мәктәбенең иң яҡшы традицияларын дауам итте.

М. Ғафури артынан әҙәбиәткә килгән башҡорт яҙыусылары араһында А. Таһировтың ижады әһәмиәтле урын тота. Тәүге хикәйәләрен ул 1908 йылдарҙа яҙа башлай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышы, хоҡуҡһыҙлығы темаһына арналған хикәйәләренән («Һатылған ҡыҙҙар», «Мазлумалар») һуң, А. Таһиров кисәге ауыл крәҫтиәндәренән ҡала пролетарийҙарына әйләнгән иҙелеүсе ҡатлам кешеләре хаҡында «Әтрәгәләмдәр» исемле билдәле повесын яҙҙы. Бында А. Туркин, В. Брусянин, айырыуса М. Горький әҫәрҙәренең йоғонтоһо мөһим роль уйнаны. А. Таһиров үҙенең повесында башлап яңы типтағы геройҙар – күп милләтле Рәсәй хеҙмәтсәндәренең социаль-иҡтисади хоҡуҡтары, бәхетле тормошо өсөн әүҙем көрәшеүсе геройҙарҙы тыуҙырҙы, Сәғит кеүек кисәге крәҫтиәндәрҙең синфи аңы үҫеүен, революцион көрәш юлына баҫыуын, Иван һәм Андрей образдарында төрлө милләт эшселәренең интернациональ берҙәмлеген һүрәтләне.

Шулай итеп, М. Ғафури, Д. Юлтый, А. Таһиров, Ш. Бабич, С. Ҡудаш, Ғ. Ниязбаев һ. б. шағир һәм яҙыусылар әҙәбиәт майҙанына XX быуат башында сығып, Башҡортостандағы әҙәби хәрәкәттең үҙәгендә торҙолар. Уларҙың ижады алдынғы рус һәм Көнбайыш әҙәбиәттәренең шифалы йоғонтоһо аҫтында башҡорт әҙәбиәтен йылдам темптар менән үҫтереп ебәреүҙә ҙур роль уйнаны.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. 1905 йылғы буржуаз-демократик революцияның милли мәҙәниәткә һәм әҙәбиәт үҫешенә тәьҫир итеүен күрһәтеүсе күренештәрҙе һанап сығығыҙ. 2. XX быуат башында башҡорт әҙәбиәтендә ниндәй шағирҙар һәм яҙыусылар күтәрелеп сыға? Уларҙың әҫәрҙәрен әйтеп бирегеҙ. 3. Был осорҙа әҙәби бәйләнештәрҙең әүҙемләшеүе нимәгә бәйле? 4. Рус әҙәбиәтендә – башҡорт, башҡорт әҙәбиәтендә рус темаһының сағылышы хаҡында һөйләгеҙ, уның үҙенсәлектәрен асыҡлағыҙ. Әҙәби бәйләнештәрҙең әһәмиәтен билдәләгеҙ. 5. XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең төп үҫеш тенденциялары тураһында һөйләгеҙ, уларҙың характерлы һыҙаттарын асыҡлағыҙ.

# САФУАН ЯҠШЫҒОЛОВ

## (1871 – 1931)

XX быуат башындағы әҙәбиәтебеҙ тарихында Сафуан ЯҡшыҒоловтың поэзияһы күренекле урын тота. Уның шиғырҙары башҡорт тормошон сағылдырыуы, милли рухы менән көслө. Шул йәһәттән Сафуан Яҡшығолов ижады яңы башҡорт милли әҙәбиәтенең нығынып етеүендә бик мөһим роль уйнаны.

## ТОРМОШ ЮЛЫ

Сафуан Суфиян улы Яҡшығолов 1871 йылдың апрелендә Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенә ҡараған (Башҡортостандың хәҙерге Миәкә районындағы) Илсеғол ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Уның ата-бабалары Меңле аҫаба башҡорттарының данлы тарихлы, иркен ер биләгән хәлле нәҫелдәренән. Уларҙың байтағы, үҙ ректәрен даулап, XVIII быуаттағы башҡорт ихтилалдарында ҡатнашҡан. 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда Сафуан Яҡшығоловтың бишенсе быуын олатаһы Нуғай юлы Илекәй-Мең олоҫо старшинаһы Илсеғол Таймаҫов Пугачёв яҡлы булып, яуҙа күп батырлыҡтар күрһәткән. Илсеғол ауылы исеме лә ошо олатаһынан ҡалған. Шәжәрә быуындары: Таймаҫ – Илсеғол – Бәкер – Яҡшығол – Суфиян – Сафуан. Атаһы-картатаһы дин әһелдәре булараҡ күберәк танылған.

Сафуан бала сағынан ошо ата-бабаларының даны, башҡорт яуҙары, халыҡтың боронғо тарихы, мул ғына ер биләп йәшәүҙәре, йәмле йәйләү көнкүреше тураһында төрлө тәуарихтар, иҫтәлектәр, легендалар, йыр-бәйеттәр ишетеп үҫкән. Улар шағирҙың ижадына ла көслө йоғонто яһаған, милли рухлы, үҙ халҡының тарихын, фольклорын белгән шәхес итеп тәрбиәләшкән.

**Уҡыуы** Сафуан башланғыс белемде тыуған ауылы мәҙрәсәһендә алған. Уҡырға зирәклеге менән айырылып торған улын Суфиян мулла артабан ҙурыраҡ Дәүләкән мәҙрәсәһенә уҡырға биргән. Бында дин дәрестәре менән бергә донъяуи фәндәрҙе бер ни тиклем уҡытыу индерелһә лә, Дәүләкән мәҙрәсәһе лә шул замандарҙағы ҡәҙими мәҙрәсә булып ҡалған. Шуға күрә Сафуан шәкерт, был һабаҡтар менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, үҙ алдына уҡыу хәстәрлеген дә күргән. Тарих, география, тәбиғәт белеме китаптарын табып уҡыған, рус телен өйрәнгән, «Тәржеман» гәзите менән даими танышып барған. Көнсығыш мәҙәниәте, классик әҙәбиәте, фәлсәфәһе менән ҡыҙыҡһынған. Татар һәм башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен яратып уҡыған.

Уларҙың йоғонтоһонда, үҙе әйткәнсә, шатлығынан ҡулына ҡәләм ала, шиғриәт донъяһына инеп китә. Уның Имрел-Ҡайс, Сәғҙи Ширази, Ғәбдерәхим Усманов (Утыҙ Имәни), Ғәли Соҡорой, М. Аҡмулла, Ғ. Туҡай, М. Ғафури кеүек шағирҙарҙың ижады менән ҡыҙыҡһыныуы, М. Өмөтбаевҡа шиғыр менән хат яҙыуы, М. Ғафури менән осрашыуҙары билдәле.

**Хеҙмәте** Сафуан Яҡшығолов Дәүләкән мәҙрәсәһен тамамлап сыҡҡас, Өфөлә Диниә назаратына уңышлы һынау тотоп, указлы мулла сифатында Дим буйындағы Яңы Яппар ауылына ебәрелә. Шунда ул ғүмере буйы ауыл мәсетендә мулла булып эшләй, мәҙрәсә асып, балалар уҡыта, йәғни мөдәррислек вазифаһын башҡара. Мәҙрәсәһен яңы ысул менән уҡытыуға ҡора, донъяуи фәндәрҙе, рус теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыуҙы юлға һала. Етем балаларҙы, үҙ йортонда аҫрап булһа ла, уҡымышлы кеше итеү хәстәрлектәрен күргәне билдәле.

1904 йылда рус-япон һуғышында ҡатнашып, һуғыштың бөтә мәхшәрҙәрен, ҡыйралыштарын күреп, фронттар кисеп ҡайта. Был турала яҙған «Порт-Артурҙан» тигән шиғыры бар.

С. Яҡшығоловтың Октябрь революцияһына мөнәсәбәте, «1917 йыл Октябрь инҡилабы байрамы мөнәсәбәте илә» шиғырына ҡарағанда, ыңғай ҡарашта икәне күренә. «Ысын таң атып, ысын азатлыҡ нурҙары балҡып сығып, вәхшилек, ҡоллоҡ юйылған, «күк асылған» көн – был көн» тип ололай уны.

Ләкин совет власы йылдары дин әһеленә әллә ни ҡыуаныстар килтермәй. Ул мулла булып эшләүен дауам итә. Әммә большевиктарҙың динде ҡыҫыуы, мулла-монтағайҙарҙы ҡыйырһытыуы арҡаһында үҙ шөғөлөнән, ижад эштәренән дә ситләшә. Хәйер, ул муллалығынан ваз кисмәй, дингә лә, иманына ла тоғро ҡала. Диниә назараты сығарған «Диниәт» исемле журналда дини рухтағы бер нисә шиғырын, мәҡәләләрен баҫтыра.

Сафуан Яҡшығолов 1931 йылда 60 йәшендә Яңы Яппар ауылында вафат була.

## ИЖАДЫ

**Тәүге әҫәрҙәре**

Сафуан Яҡшығолов мәҙрәсәлә уҡыған сағынан уҡ шиғыр яҙыу менән мауыҡҡан. Шәкерттәр араһында улар ҡулъяҙма көйө таралған һәм уҡылып йөрөлгән. Милли матбуғат юлға һалынмаған саҡта, уларҙы баҫтырып сығарыу мөмкинлеге лә булмаған.

1905–1907 йылдарҙағы революция осоронда милли матбуғат барлыҡҡа килгәс тә, Сафуан Яҡшығоловтың бер шиғыры 1906 йылда Уральскиҙа Ғ. Туҡай эшләгән «Фикер» гәзитендә баҫылып сыға, «Яҙ килеүе» исемле шиғыры 1907 йылдың яҙында Ырымбурҙа нәшер ителгән «Урал» гәзитендә донъя күрә. Был шиғырҙың большевистик рухтағы гәзиттә сығыуының үҙ хикмәте лә бар шикелле. Унда тасуирланған яҙ образында илгә, йәмғиәт тормошона революция елдәре менән бергә яҙ һулышы, һалҡын ҡышты ҡыуып, йылылыҡ, илдә демократик үҙгәрештәр килерен символик һынландырыу тоҫмаллана:

Яҙҙар килеп, ҡотола алһаҡ ҡаты ҡыштан,
Иншалла, асылыр баҒ-бостан.
Ҡарға-ҡоҙғон ташлаһалар йыртҡыслыҡты,
Шатлыҡ илә һайрар ине һәзәрдастан.

Тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе йәмғиәт тормошондағы үҙгәрештәргә ишаралау йәш шағирҙың «Яҙғы таң», «Сулпан» тигән шиғырҙарында ла һиҙелеп тора.

С. Яҡшығоловтың 1908 йылда сыҡҡан тәүге китабы «Мөғәллим Солтангилде әфәнденең мәрҫиәһе» тип атала. Тимәк, М. Аҡмулла үҙенең тәүге китабын «Дамелла Шиһабетдин хәҙрәттең мәрҫиәһе» менән башлаған шикелле, С. Яҡшығолов та ижад емешен мәрҫиәнән башлай. Уның мәрҫиә бағышлаған кешеһе Ш. Мәржәни кеүек оло ғалим булмаһа ла, Мөғәллим Солтангилде Юлҡотло – башҡорттоң үҙ заманындағы уҡымышлы кешеһе, йәдитсе, яңы мәҙрәсә мөғәллиме, халҡының хөрмәтле бер улы. Йәш авторҙың бында халыҡ мәғарифына ғүмерҙәрен арнаған мөғәллимде ололауында мәғрифәтселек ҡараштары айырым-асыҡ сағыла.

**«Башҡорт хәлдәре», «Дим буйы» китаптары**

1911 йылда Стәрлетамаҡта баҫылған «Башҡорт хәлдәре», киләһе йылына Ҡазанда донъя күргән «Дим буйы» шиғыр йыйынтыҡтары С. Яҡшығоловтың ысын мәғәнәһендә мәғрифәтсе шағир булып китеүен таныта. Ул туған халҡын, бүтән алдынғы халыҡтар менән тиң булыр өсөн, М. Өмөтбаев, М. Аҡмулла шикелле, уҡырға, аң-белемгә өндәй, алға китештең мөһим сараһын шунда күрә:

Бағығыҙҙар был көн европалыларға!
Алға китеүгә былар тапты сара.
Бина итеп дәрелфәнүн (университет), гимназия,
Кешеләре хеҙмәт итә нисек, ҡара!

Мәғрифәт, ғилем, һөнәр – прогрестың төп юлы шул тигән идеяны уҙғара ул күп шиғырҙарында. Әммә был фекер менән генә хушһынып ҡалмай. Халҡының артта ҡалыуының төрлө сәбәптәрен эҙләй. Был хаҡта уйланып, туған халҡының бөгөнгө хәленә, кисәгеһенә ҡараш ташлай, тарихын байҡап ҡарай. Унынса, әүәле, боронораҡ башҡорттар бик иркен һәм шат йәшәгән.

Бар ине башҡорт илендә
Бик гүзәл, хозур заман,
Ере иркен, малдары күп,
Күсмәле йөрөгән заман, –

ти ул, мәҫәлән, «Боронғо башҡорт сәхрәһе» шиғырында. Шуға ул боронғо хозур замандарҙы, данлы саҡтарын һағынып, йәйләү көнкүрешен, йәмен, күркен маҡтап тасуирлай башлай. Тарихты, боронғо тормошто аштырып идеаллаштырырға тотона. Быны ул йөрәге янғандан, милләттәштәрен сәмләндереү, намыҫландырыу ниәтенән шулай итә кеүек.

Башҡорттарҙың бигерәк тә XIX быуаттың икенсе яртыһында – XX быуат башында тормоштары ауырайып, үҙҙәре ярлыланып ҡалыуҙарының төп сәбәбен элекке мул, иркен ерҙәренән яҙып, байтаҡ ерҙәрен һатып, үҙҙәре аҙ ерле йә ерһеҙ тороп ҡалыуҙарында күрә. Ғәмәлдә был шулай ҙа. 1866–1870 йылдарҙағы реформаларҙан һуң башҡорттарҙың иң яҡшы ерҙәрен ҡаҙнаға тартып, күп биләмәләрен байҙар, сауҙагәрҙәр, алпауыттар осһоҙға ғына һатып алалар, күсеп килгән татар, рус, сыуаш һәм башҡа халыҡтарға бүлеп бирҙертәләр. Хәҙер инде, шағирҙың «Ҡурай» тигән хитабындағыса, башҡорттарға «Ҡурайҙың хәл теле илә... һөйләнгән моң вә зарҙарҙы» тыңлайһы ғына ҡала:

Башҡорттарым! Беләһеҙме кемдәрҙән һеҙ
Борон булып бик мәшһүр тәрандаз (аһәңле) һеҙ...
Ихтыяри батшаға баш һалдығыҙ һеҙ...
Ергә-һыуға грамота алдығыҙ һеҙ...
Ул ваҡыттар башҡа ине хәлдәрегеҙ,
Бар ине, ағалар, ғәм, малдарығыҙ,
Азияла, Европала дандарығыҙ...
Ул ваҡытта һеҙгә килеп һыйындылар
Был көндәге типтәрҙәр һәм мишәрҙәр,
Ҡазан яғынан сыуаш, сирмеш, арҙар...
Ерегеҙгә ят кешеләр тулды имде.

Әҫәрҙә батша Рәсәйенең колонизаторлыҡ сәйәсәтенә, экспансияға ҡаршы протест та ишетелеп ҡала. Үткәндәргә үкенеүҙә, ҡоро моң-зарға бирелеүҙә һис бер төрлө мәғәнә юҡлығын аңлай, әлбиттә, шағир. Шуға ул башҡорттарҙы был ауыр хәлдәренән сығыр өсөн хәрәкәтләнергә, үҙҙәре хаҡында үҙҙәре хәстәрлек күрергә өндәй. Өндәп кенә ҡалмай, уларға туранан-тура шиғри хитап һүҙе менән мөрәжәғәт итә.

**«Башҡорт ағаларыма хитап»**

«Башҡорт ағаларыма хитап» – ана шундай мөрәжәғәт шиғыры ул. Шағир туған халҡын башта вайымһыҙлыҡ йоҡоһонан уянырға саҡыра; Беренсе рус революцияһынан һуң күп халыҡ үҙ хоҡуҡтарын даулап шаулағанда, башҡорттарҙың һаман ғәмһеҙ кәйеф-сафа ҡороп йөрөүенә бошона:

Һәр урында төрлө милләт ҡуҙғалыша,
Мәғариф, тәрәҡҡигә юлдар аса,
Һеҙҙәр йоҡлап ятаһыҙ һаманғаса,
Ниңә уянмайһығыҙ, башҡорттарым?..

Һәр бер халыҡ бергәләшеп, йыйылышып,
Думанан үҙенең өлөшөн һорай.
Һеҙ йөрөйһөгөҙ ҡымыҙ эсеп, уйнап ҡурай,
Баш күтәреп ҡарамайса, башҡорттарым.

Шул уҡ ваҡытта ул башҡорттоң бөтә яҙмышын ер мәсьәләһенә бәйләп ҡарай: ере бар икән, уның йәшәү сығанағы бар; ере юҡ икән, ул бөләсәк, бөтәсәк. Был хаҡта үҙ итеп, әммә өҙгөләнеп әйтә:

Хур булырһығыҙ үҙегеҙ, ерегеҙ бөтһә,
Ғәйре милләттәр ҡулына кереп китһә...
Балаларығыҙ ҡол булырҙар хохол, немескә,
Ниңә шуны уйламайһыҙ, башҡорттарым?

Наҙанлыҡтан, артта ҡалғанлыҡтан ҡотолоуҙың бер сараһы итеп заманында Аҡмулла «башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» тип мөрәжәғәт итһә, С. Яҡшығолов иһә «уҡыу кәрәк, ғилем, һөнәр, башҡорттарым», тип тә өҫтәй.

Был осорҙарҙа башҡорт халҡын мәғарифҡа, һөнәргә, ғилемгә өндәп, ер-һыуҙарын тартып алыуҙан йә ярым-ярты хаҡҡа һатып ебәреүҙән һаҡланырға саҡырып, күп кенә шағирҙар хитап шиғырҙары менән мөрәжәғәт итә. Хитап башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең үтемле бер жанры булып нығына. С. Яҡшығолов та башҡорттарҙың ғилемгә, һөнәргә, прогресҡа тартылыуҙарын көсәйтер өсөн хитап ише туранан-тура мөрәжәғәт жанрын йыш ҡуллана.

«Башҡорт хәлдәре» исемле китабында шағир башҡорттарҙың ауыр хәлдә ҡалыуҙарына, уның сәбәптәренә, унан сығыу

юлдарына ҡат-ҡат ҡайта. Берсә үткән иркенерәк дәүерҙәрен, данлы саҡтарын хәтерләтеп сәмләндереп ала, берсә вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек йоҡоһонан уятырға теләп өндәшә, берсә үҙенсә өгөт-нәсихәт ҡора, оран һала. «Башҡорт хәлдәре» тигән әҫәре иһә, гүйә, ошо төрлө мотивтарҙы бер үҙәккә йыя. Ул йәштәргә өндәш, кәңәш һүҙ менән тамамлана:

Бына, йәштәр! Һеҙгә алтын кәңәш бар:
Бойоҡмағыҙ, еребеҙ ҡалды, тип, тар,
Ҡырағайлыҡтан, наҙанлыҡтан ҡасығыҙ,
Уҡырға төрлө мәктәптәр асығыҙ...
Уҡыу, уҡыу, тиҙәр бит һәммә милләт,
Уҡыу өсөн ҡылығыҙ һеҙ ҙә һиммәт.

«Башҡорт хәлдәре» китабы хаҡында ул саҡтағы «Ваҡыт» гәзите: «Китап шиғыр илә ватандаштарыбыҙ башҡорттар хәлен гүзәл һүрәттә бәйән ҡылған, шуға тәртип ҡылыусыһы ла (яҙыусыһы) С. Яҡшығолов ысын башҡорттан булғанлығы сәбәпле тағы әһәмиәте ҙур», – тип яҙып сыҡты.

**«Дим буйы»**

Шағирҙың был шиғырҙар йыйынтығында ла «Башҡорт хәлдәре» китабындағы төп мотивтар дауам итә. Мәғрифәтселек ҡараштары артабан тәрәнәйтелә, уның яңы яҡтары асыла.

Бына «Сирек быуатлыҡ үҙгәреш» шиғыры. Дим буйында ултырған Этҡол тигән ауылдың тарихы, көнкүреше буйынса С. Яҡшығолов башҡорт халҡының яҙмышын конкрет күҙ алдына баҫтырырға теләгәндәй итә. Бер ауыл тарихын үҙенсә бер үрнәк тә, аҙаҡ ғибрәт тә итеп һөйләй. «Утыҙ өйләп кенә башҡорт халҡы ине үҙҙәре, яҙҙа күсеп, ҡырҙа йөрөп, ҡайта ине көҙҙәре. Мал аҫрап, йәйләгәндә сәхрә, эсеп ҡымыҙ, ҡышлағанда ит-май ашап, булалар ине һимеҙ». Бер заман был ауылдың ҡырынан үтте Һамар тимер юлы. «Дәүләкән» тигән станцияһына оло ауыл ҡороп, төрлө яҡтан урыҫы, немецы, латышы, йәһүде, татары килеп тулды. Тирмәндәр һалып, сауҙа йорттары асып, төрлө һөнәр эштәрен башлап ебәрҙеләр, ә Этҡол халҡы, быларҙы ҡоро күҙәтеп, ҡәҙимге көнкүреше, йәйләү ерҙәре менән йәшәп ятыуын белде. «Һанға алырлыҡ бер һөнәр ҙә белмәйҙәр башҡорт, татар, шуға күрә һәр ҡайһыһы ер-һыуын арзан һатар». Аҙаҡтан шағир, бының сәбәбе «ғилме мәғиш»те – донъя көтөү ғилемен белмәүҙә, наҙанлыҡта, тырыш булмауҙа, тип һығымта яһай.

«Донъя тәгәрмәсе» тигән шиғырында иһә ул тормоштоң ҡатмарлылығын фәлсәфәүи планда һүрәтләргә теләй. Донъя тәгәрмәсе туҡтауһыҙ әйләнеп тора, бер әйләнеп, бер баҫа, тимәксе шағир. Ҡайғыһы шатлыҡ менән, михнәте рәхәт менән алмашына. Донъя тәгәрмәсе бер ыңғай яғын, бер кире яғын күрһәтә.

Был донъяның ҡар-бураны тора яуып,
Ҡайғылары береһе артынан береһе ағып,
Ҡайғы-хәсрәт даръяһының тулҡындары
Тура килгән заттарҙы китә алып.

Әй, туғанҡай! Үҙгәрһә бер көн хәлең,
Ҡайғы-михнәт ҡамаһа мәхәлең (торор ерең),
Бик бойоҡма! Сабырлыҡ, ижтиһад ҡыл,
Күрһәтер бер көн шатлыҡ истиҡбалын (киләсәген).

Мәғрифәтселек рухы менән һуғарылған шиғырҙарын да хәҙер С. Яҡшығолов икенсерәк көйгә көйләй. Уларҙа шатыраҡ моңдар ишетелә, яҡтыраҡ буяуҙар күренә. Бына, мәҫәлән, «Дим буйы» шиғыры быға матур дәлил:

Дим һыуының буйылыр йәмле ялан,
Күрҙе башҡорттар рәхәтлек күп заман, –

шулай таныш хәтирәләр менән асыла ул. Унан Дим буйының яҙғы хозур тәбиғәте, күңелле ваҡыттары бик матур тасуир ителә, гүзәл шиғри тамаша хасил була. Шунан шағир ҡапыл күңелһеҙ хәтирәгә күсә. Элек иркен, мул йәшәгән ата-бабалары исеменән хәҙергеләргә өндәшә:

Бына был көн наҙанлыҡҡа баттығыҙ,
Ерегеҙҙе юҡ баһаға һаттығыҙ.
Беҙ ҙә был көндәр торабыҙ ҡалтырап,
Һатмағайылар ине, тип, хаҡтан һорап.
Шунда боронғо заман төшөп иҫкә,
Төрлө моң вә зарҙар йөрәк-бәгерең киҫә.

Әммә һуңғы строфа алдағы күркәм тамаша тоны менән тамамлана:

Әммә китәрә хәсрәт-моңдарҙы
Яҙ көнөндә йәмле Димдең буйҙары.

Тимәк, тәбиғәт йәме кешенең ҡайғы-һағышын да баҫа ала. «Дим буйында яҙғы таң» шиғыры был матур тамашаны тағы ла матурыраҡ буяуҙар, моңдар менән һуғара.

Шағирҙың социаль йөкмәткеле пейзаж лирикаһы шулай күркәмләнә, уй-тойғоға һәлмәкләнә бара. Уны автор үҙ уҡыусыһы уй-хисенә лә һалырға тырыша. Мәҫәлән, «Таң ата» шиғырында:

Аҡ таң ата, сыға ҡояш, йоҡондан тор!
Күҙең ас, тәбиғәттең хикмәтен күр…
Етер йоҡоң, уян инде, күтәрең баш, …
Һине лә зыяһынан (яҡтылығынан) мәхрүм ҡуймаҫ
Башҡаларҙы нурландырған нурлы ҡояш…

Тор урыныңдан, ҡыймылда, ынтыл, алға бар,
Ҡулыңда бар бит һинең бер өлөш ихтыяр, –

тип, ул ҡан-ҡәрҙәштәрен тәбиғәттән өлгө алырға, тырышырға саҡыра.

«Башҡорт ҡыҙына» тигән мәктүбендә шағир башта башҡорт ҡыҙының һылыу портретын тасуирлап тора ла («ҡара ҡаш, түңәрәк бит, бит осонда нурлы миң, зифа буй»), «Вә ләкин кәмселегең бар бер эштә: уйың-фекерең һинең алтын-көмөштә. Тағаһың тәңкәләр күп шалтыратып, йөрөйһөң алдың-артың ялтыратып. Еләнгә теҙәһең тәңкә йоҡалар, яға-итәктән әйләнә уҡалар», тип, былай биҙәнеп-төҙәнеп йөрөүҙе иҫкелеккә, юҡ ғәҙәткә сығара башлай. Аҙаҡ әлеге өгөт-нәсихәтенә күсә: «Һин алданма тышыңдан ялтырауға, ҡалай, ҡурғашың, көмөштәр шалтырауға. Тышыңдан ялтырайҙыр уҡа, көмөш, мәғариф нурынан һинең эсең буш... Әҙәп өйрән, тотоң өҫ-баштарың аҡ, ғилемле, мәғрифәтле бул, әй, ап-аҡ!»

**Шиғриәтенең жанр тәбиғәте**

1916 йылда Өфөлә сыҡҡан «Күңел ялҡындары» тигән шиғырҙар, мәҫәлдәр китабына ҡарағанда, С. Яҡшығоловтың тормош һәм ижад тәжрибәһе арта барған һайын, шиғриәте төрләрәк һәм тәрәнерәк була барғаны күҙәтелә. Уның башҡорт тормошо тураһындағы мәғрифәтсел өгөт-нәсихәт шиғырҙарын эске мәғәнәле пейзаж лирикаһы, фәлсәфәүи йөкмәткеле ҡыҫҡа шиғырҙар, ҡитғалар, аллегория менән һуғарылған мәҫәлдәр алмаштыра. Шиғриәте тәбиғәт, тормош, йәшәү һәм үлем хаҡындағы уй-тойғолар менән байыға. Шиғыр юлдарына күскән күңел ялҡындары ла ҡайнарыраҡ һәм тәбиғиерәк инде хәҙер.

Һәр ваҡыт тормош мине бик ҡыйын эштәргә ҡуша,
Ярһый күңелем, илағым килә лә, эстәрем боша, –

тип тә ебәрә шағир.

Сафуан Яҡшығолов, михнәтле тормошҡа ҡарап, ҡай саҡ күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп алһа ла, шиғыр яҙған саҡтарында ижадтан йәм һәм тәм таба, шиғриәт менән йыуана.

Йәм табам, ҡайғым тарала, баҫыла янған йөрәк,
Хистәрем – шиғырҙарым шул, башҡа нишләмәк кәрәк, –

ти «Йәм табам» шиғырында.

Халыҡ йыры, халыҡ моңо менән дә йыш ҡына күңелдәрен баҫа. Замандаштарының һөйләүе буйынса, Сафуан Яҡшығолов боронғо башҡорт йыр-көйҙәрен бик яратҡан, үҙе лә моңло итеп йырлар булған. Ул ауылдаштары, Дәүләкәндәге дуҫ-иштәре менән әңгәмәләшеп ултырғанда, мәжлестәрҙә үҙ шиғырҙарын да яттан һөйләп, көйләп ебәргән. Уны күптәр отоп йә күсереп алған, «Сафуан мулла йыры» тип йырлаған, «Сафуан мулла шиғыры» тип көйләп-һамаҡлап һөйләгән.

Шағир үҙе ятраҡан ҡайһы бер башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып алып, айырым өлгөләрен «Дим буйы» китабында баҫтырып та сығарған. «Мәшһүр Туҡаев әйтмешләй, – тип яҙа ул был китабындағы инеш һүҙендә, – халыҡ йырҙары гәүһәр вә яҡуттарҙан да ҡиммәтле бер нәмә ул, шуға күрә уларға әһәмиәт бирергә һәм һаҡлап алып ҡалырға тейешбеҙ».

Халыҡ йырының рухы, ритмик үлсәмдәре уның шиғриәтенә көслө йоғонто яһаған. Башҡорт халыҡ оҙон һәм ҡыҫҡа йыр үлсәмендәге шиғырҙар байтаҡ.

Ижадына дөйөм ҡараш ташлағанда, С. Яҡшығоловтың Көнсығыш шиғриәтен, өлөшсә Көнбайыш поэзияһын яҡшы белгәнлеге, уларҙан өйрәнгәнлеге күренә. Ул Көнсығыш шиғриәтенән килгән традицион мәҫнәүи, робағи, ғәзәл жанрҙары формаларын ҡуллана. Мәрҫиәләр, мәҙхиәләр яҙа. Шиғри мөрәжәғәт – хитап, шиғри хат – мәктүп жанрҙарын үҫ итә.

Мәҫәл жанры уның шиғриәтендә мәғлүм урын биләй. Ул рус әҙәбиәтенән И. Дмитриевтың «Йылан һәм һөләк», И. Крыловтың «Ағас», «Маймыл менән күҙлектәр», «Тирмәнсе», Л. Толстойҙың «Ҡуян һәм баҡалар» тигән әҫәрҙәрен иркле тәржемә итә. Шулар өлгөһөндәрәк үҙе «Быҡаулы фил», «Ынйы бөртөгө һәм һыу инәһе», «Төлкө менән торна» тигән мәҫәлдәрен яҙа.

Йыйып әйткәндә, Сафуан Яҡшығолов ижады XX быуат башында башҡорт әҙәбиәтенә милли тематиканы, башҡортлоҡ рухын үҙәккә ҡуйыуы менән бик әһәмиәтле. Ул – туған халҡының ҡайғы-шатлығы менән янып йәшәгән, башҡорт яҙмышы өсөн бөтә йөрәгенән борсолоп ижад иткән мәғрифәтсе шағир, башҡорт мәғрифәтселек реализмы әҙәбиәтенә милли колорит, социаль-сәйәси яңғыраш биргән шағир. Ошо йүнәлештә уның Ш. Бабич, Д. Юлтый, Х. Ғәбитов шиғриәттәренә үҙенсәлекле тәьҫире бар.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. С. Яҡшығоловтың тормошо менән ижады араһындағы бәйләнештәрҙе күрһәтегеҙ. 2. Башҡорттарҙың хәлдәре тураһында шағир ни өсөн борсола? Уларҙы нимәгә өндәй? Шул хаҡтағы шиғыр юлдарын табып, уҡып ишеттерегеҙ. 3. «Башҡорт ағаларыма хитап» шиғырын уҡып, фекер алышығыҙ. 4. С. Яҡшығолов ижадында мәҫәл жанрының урыны хаҡында һөйләгеҙ. 5. С. Яҡшығолов шиғриәтенең миллилеген ниҙәрҙә күрәһегеҙ? 6. Ижадының жанр тәбиғәтен асыҡлағыҙ. Шиғриәтенең башҡорт халыҡ ижады менән бәйләнешле яҡтары тураһында һөйләгеҙ.

# ЗАКИР ҺАҘИ

**(1863 – 1932)**

Закир Һаҙи – XX быуат башында бөтә йәһәттән дә тиҙләтелгән үҫеш юлына баҫҡан башҡорт әҙәбиәте майҙанына дәррәү килеп ингән тиҫтәләгән яҙыусылар араһында тәүге әҫәре менән үк уҡыусылар күңеленә юл ярған әҙип. Әҙәбиәтебеҙ тарихында ул үҙ заманы проблемаларын, мәғрифәтселек реализмы принциптарына таянып, ҡыйыу яҡтыртҡан, мәғрифәтселек прозаһына сатирик йүнәлеш бирергә ынтылған яҙыусы булараҡ эҙ ҡалдырған.

## ТОРМОШ ЮЛЫ

Мөхәмәтзакир Һаҙиев 1863 йылдың 15 мартында Өфө губернаһының Бәләбәй өйәҙенә ҡараған Йәрәмкә ауылында (Башҡортостандың хәҙерге Шаран районында) Һаҙиулла исемле урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Һаҙиулла, үҙ заманы өсөн ярайһы ғына белемгә эйә булып, ҡыштарын үҙ ауылы мәҙрәсәһендә балаларға һабаҡ биреүсе хәлфә булып эшләгән, йәйҙәрен иген игеү, умарта ҡарау менән шөғөлләнгән. Башланғыс белемде Закир тыуған ауылында атаһынан ала, 1876 йылда Йәрәмкәнән ҡырҡ саҡрым алыҫлыҡтағы Тымытыҡ ауылы мәҙрәсәһенә юллана, унда ун йыл самаһы уҡый, артабан замансараҡ мәҙрәсәгә инеп белем алырға ниәтләнеп, бер шәкерт дуҫы менән Түбәнге Новгород яҡтарына барып сыға. Әммә унда уның күңеленә хуш килерҙәй мәҙрәсә булмай һәм ул ваҡытлыса бер байҙың тире складына эшкә урынлаша. Ҡасим ҡалаһындағы яңы ысул менән уҡытҡан мәҙрәсәлә, артабан ҡаланан алыҫ булмаған бер ауылдағы йәдит ысулы менән эшләгән мөғәллимдәр курсында һабаҡ ала. Уны тамамлағас, Мулта тигән ауыл мәҙрәсәһендә уҡытыусы булып эшләй башлай. Унда эшләү осоронда Мәскәү, Петербург, Өфө кеүек ҡалаларға сәйәхәт ҡыла. Йәйге ял ваҡыттарын йыш ҡына тыуған ауылында

уҙғара; Ҡасим ҡалаһына барып айырым уҡытыусыларҙан рус теле буйынса дәрестәр алып йөрөй. Был уға рус әҙәбиәте менән яҡындан танышырға мөмкинлектәр аса. Ул әҙәбиәткә ныҡлап тартыла, үҙ көсөн әҙәби ижадта һынап ҡарай.

Беренсе рус революцияһын З. Һаҙи Одессала уҡытыусы сифатында ҡаршы ала. Бында ул илдә барған сәйәси ваҡиғалар, власть әһелдәренең йыртҡыслыҡтары тураһында повесть, рус-япон һуғышы темаһына арналған поэма һәм бер нисә хикәйә ижад итә. Әммә Ырымбурҙағы һәм Ҡазандағы нәшриәт хужалары был «фетнәсел рухлы» әҫәрҙәрҙе донъяға сығарыуҙан баш тарта. Уларҙың ҡулъяҙмалары менән танышҡан Ғ. Туҡай прозаиктың әҫәрҙәрен баҫтырып сығарырға булышлыҡ итергә тырышып ҡарай. Әммә был ынтылыштар тейешле һөҙөмтә бирмәй. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әҙиптең был ижад емештәре эҙһеҙ юғала.

1906 йылда Закир Һаҙи Мулта ауылына яңынан эшкә килә. 1907–1911 йылдарҙа бер нисә тапҡыр тыуған ауылына ҡайтып китә. 1908 йылда бер ни тиклем Ҡазанда йәшәй. Унда хикәйәләре йыйынтығын баҫтырып сығарырға уйлай. Әммә маҡсатына өлгәшә алмайынса, бары «Яңы әсхәбе кәһәф» хикәйәһен генә үҙ аҡсаһына айырым китап итеп сығара ала.

1914–1918 йылдарҙа яҙыусы Харьков ҡалаһында уҡытыусы булып эшләй. 1918 йылда туғандарының үтенесе буйынса тыуған ауылы Йәрәмкәгә ҡайтып бер аҙ йәшәгәс, артабан Шаран районының Бурһыҡ ауылында уҡытыусылыҡ эшен дауам иттерә. 1921–1922 йылдарҙа үҙ ауылында тора. Унан һуң йәнә Ҡасим ҡалаһы яғына сығып китә һәм ҡаланан биш километр алыҫлыҡтағы Бимсала ауылында нигеҙләнеп, ғүмеренең аҙағына тиклем шунда балалар уҡыта. Закир Һаҙи хәҙерге Рязань өлкәһенә ҡараған шул ауылда 1932 йылда вафат була.

## ӘҘӘБИ ИЖАДЫ

Закир Һаҙи шулай илгиҙәр тормош менән йәшәһә лә, ғүмерен башлыса сит ерҙәрҙә үткәрһә лә, уның ижады тулыһынса Башҡортостан, башҡорт ысынбарлығы менән бәйле. Яҙыусының һөҙөмтәле ижад итеү осоро XX быуаттың тәүге ун йыллығына тура килә. Уның Беренсе рус революцияһына тиклемге осорҙа яҙылған «Бәхетле ҡыҙ» (1904), «Официант» (1904), «Хәйер-доға» (1905), «Бәхетһеҙ ҡыҙ» (1905) тигән тәүге әҫәрҙәре Ырымбурҙа, ә Беренсе рус революцияһы һәм унан һуңғы йылдарҙа ижад ителгән «Мәғсүм» (1906), «Яңы әсхәбе кәһәф» (1908) һәм «Йыһанша хәҙрәт» (1908) исемле әҫәрҙәре Ҡазанда айырым китаптар рәүешендә донъя күрә. Әйтергә кәрәк, уларҙың

идея йөкмәткеһенә, тел-стиль тәбиғәтенә яҙыусының бөтә аңлы ғүмерен йәш быуынға аң-белем һәм тәрбиә биреүгә бағышлаған кеше булыуы, уҡытыусы психологияһы йоғонто яһамай ҡалмаған. Ул *аҙаҡҡаса мәғрифәтселек идеяларын алға һөрөүҙән, өгөт-нәсихәт уҡыу стиленән арынып бөтә алмаған әҙип булып ҡала.* Был йәһәттән ул замандаш ҡәләмдәше, мәғрифәтсе шағир Сафуан Яҡшығоловҡа оҡшай төшә.

**Тәүге әҫәрҙәре**

Закир Һаҙиҙы тыуған башҡорт халҡының томаналығы, тетрәндергес ауыр тормошо тәрән борсой. Заманының ошо хәл-күренештәренә бәйле проблемаларҙы ул мәғрифәтсе позицияһынан тороп күтәреп сыға һәм яҡтырта. Үҙенең тәүге әҫәрҙәрендә үк ул иҫкелек менән яңылыҡтың көрәше, йәш быуынға заманса аң-белем һәм тәрбиә биреү, әхлаҡи камиллыҡ, айырыуса ҡатын-ҡыҙ азатлығы, саф мөхәббәт, бәхетле ғаилә ҡороу мәсьәләләрен күтәреп сыға. Яҙыусы ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашырға, мөхәббәт һәм ғаилә мәсьәләләрендә күңеле, саф хис-тойғолары ҡушыуы буйынса эш итергә, үҙ яҙмышын үҙе хәл итергә, һөйөклө ғаилә тотҡаһы ғына түгел, хөрмәтле «ил әсәһе» лә булырға тулы хоҡуғы бар тип иҫәпләй. Был йәһәттән уның «Бәхетле ҡыҙ» тигән тәүге хикәйәһе иғтибарға лайыҡ. Иҫкелеккә йәбешеп ятҡан, хатта өйгә ҙур тәҙрә ҡуйҙырыуҙы ла тәкәбберләнеү, шәриғәт ҡушҡандарға ҡаршы эш, русса уҡымаҡ исламдан сыҡмаҡ менән бер, ҡатын-ҡыҙҙар бөтөнләй хоҡуҡһыҙ заттар тип иҫәпләгән Ибәт мулла мөғәллим булып эшләгән алтмыш ҡына йорттан торған башҡорт ауылында наҙанлыҡ һәм ярлылыҡ хөкөм һөрә. «Халҡы ҡатындарын ат, ишәк кеүек хеҙмәт өсөн яратылмыш бер хайуан» тип иҫәпләүҙән, «иртәгәһен ишәк ҡайғыртҡан» тип, емерелеп барған ҡотһоҙ йорт-ҡуралар араһында барына ҡәнәғәт булып йәшәп ятҡан был ауылға берҙән-бер көндө Ҡазан ҡалаһы мәҙрәсәләрендә ун йылға яҡын дини предметтарҙан тыш, төрлө донъяуи фәндәрҙе лә үҙләштергән, русса уҡырға һәм яҙырға өйрәнгән Ғәббәс яңыса ҡарашлы кеше булып ҡайтып төшә. Тыуған ауылында ул, ал-ял белмәй хәстәрләп, яңы мәсет, мәҙрәсә, мәктәп һалдыра, отҡорораҡ балаларҙы Ҡазан, Ырымбур ҡалаларына уҡырға ебәреү хәстәрлеген күрә. Ҡыштарын балаларға һабаҡ бирһә, йәйҙәрен иген кәсебе менән шөғөлләнә. Шулай ул тырышлығы, үрнәк булырҙай яҡшы эштәре менән халыҡтың күңелен, Ибәт мулланың әҙәплелеге йәһәтенән дә, уңғанлығы һәм һылыулығы буйынса ла таң ҡалдырырлыҡ булып үҫеп еткән ҡыҙы Ғәйшәнең мөхәббәтен яулай. Прозаик хикәйәһенең төп өлөшөн уларҙың тормошон, үҙенең ҡатын-ҡыҙ азатлығы, саф мөхәббәт, бәхетле ғаилә тураһындағы уй-фекерҙәрен сағылдырыуға, уҡыусыларға саф мөхәббәт ерлегендә тыуған ғаиләнең бер өлгөһөн күрһәтеп биреүгә арнай. Ике улын, бер ҡыҙын башҡа балаларға өлгө булырлыҡ белемле, бөхтә, тәртипле, эшһөйәр

кеше итеп тәрбиәләгән Ғәббәс менән һөйгән ире ярҙамында белемен камиллаштырған, ауыл ҡыҙҙарына һабаҡ һәм тәрбиә бирерлек дәрәжәгә ирешкән Ғәйшәнең татыу, тырыш, бәхетле ғаиләһе өлгөһөндә ауыл халҡы күҙгә күренеп яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлай.

«Бәхетһеҙ ҡыҙ» тигән икенсе хикәйәһендә З. Һаҙи иҫкелектең, томаналыҡтың, насар холоҡ һәм эш-ҡылыҡтарҙың ни тиклем прогресты тотҡарлаусы тормоздар булыуҙарын, трагик әҙемтәләргә килтереүҙәрен сағыу күрһәтеп бирә.

Хикәйәнең төп сюжет һыҙығын йәштән үк тәрбиә күрмәй үҫкән Хәнифә исемле ҡыҙҙың яҙмышын бәйәнләү тәшкил итә. Әгәр ҙә «Бәхетле ҡыҙ» әҫәренең геройы Ғәйшә үҙенең күркәм сифаттары, тырышлығы арҡаһында бәхеткә ирешкән, бөтәһенә лә өлгө булырлыҡ кимәлгә күтәрелгән ҡатын-ҡыҙ итеп бирелһә, икенсе әҫәрҙең геройы Хәнифә уның киреһе итеп тасуирлана. Автор уны фажиғәгә илткән сәбәптәрҙе асыҡларға ынтылғанда, «ни сәсһәң, шуны урырһың», «алма ағасынан алыҫ төшмәй» тигән позициянан сығып эш итә. Мөхәббәт, ғаилә ҡороу мәсьәләләрен иҫәп-хисапҡа ҡороу яғында торған, йәш сағында үҙе еңел холоҡло булған Шәрифә ҡыҙының, тәүге мөхәббәте булған ярлы Тимерханды ташлап, бай егеттәр менән йөрөүенә шатланып бөтә алмай. Әммә шатлыҡ оҙаҡҡа бармай. Йөрөгән егеттәренең береһенән дә ғаилә ҡороу тәҡдимен көтөп ала алмаған, исеме сыҡҡан ҡыҙға эскесе Тимербайға, ул ҡыуып сығарғас, ҡатыны үлгән Бикбау ҡартҡа тормошҡа сығып, эт күрмәгәнде күреп йәшәүҙән башҡа сара ҡалмай. Ахырҙа был бәхетһеҙ йән, яҡты донъянан ваз кисеп, үҙенә ҡул һала.

Йәштәрҙең ошондай фажиғәгә дусар булыуҙары сәбәптәрен яҙыусы бөтәһенән дә элек наҙанлыҡҡа, тейешле тәрбиә алмауға ҡайтарып ҡалдыра. Хикәйәһен ул ошондай юлдар менән тамамлап ҡуя: «Тәндең ҡеүәте ашамаҡ-эсмәк илә, рухтың ҡеүәте ғилем вә мәғрифәт иләлер...»

Мәғрифәтсе булараҡ, Закир Һаҙи бына шулай әҙәбиәттең тәрбиәүи роленә ҙур өмөт бағлай, уға әҙәп-әхлаҡ дәреслеге һымаҡ ҡарай. Быны уның «Официант», «Хәйер-доға» тигән хикәйәләре лә асыҡ күрһәтә. Улар ҙа өгөт-нәсихәткә, наҙанлыҡтан, әхлаҡи шөкәтһеҙлектән, иҫке тәртиптәрҙән арынырға өндәүгә ҡоролған. «Официант» әҫәрендә автор ошо мәсьәләләрҙе хәл итеүҙең үҙенсә бер «программаһын» бирһә (ауылдарҙа аң-белем усаҡтарын асыу, был изге эште уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн байҙарҙы күберәк ылыҡтырыу, мәхәллә башлыҡтары итеп халыҡ араһында һүҙе үтерҙәй уҡымышлы һәм абруйлы муллаларҙы һайлап ҡуйыу), икенсе хикәйәһендә инде ул бирелгән хәйерҙең күләменә ҡарап белемде баһалау тәртиптәренең халыҡтың томаналыҡ донъяһында йәшәүенең төп бер сәбәбе булыуын

ироник тонда асып һала, дини тышсаға йәшеренгән ришүәтселекте, ҡомһоҙлоҡто, ике йөҙлөлөктө тәнҡит утына тота. Мәҙрәсә хужаларына ике-өс тиндән артыҡ саҙаҡа бирә алмаған ярлы шәкерттәр, ысын ил ағаһы булырҙай һәләткә эйә булһалар ҙа, тейешенсә иғтибар бүленмәү арҡаһында, мәҙрәсәләрҙән наҙан сығалар, күптәре тормош төпкөлөнә ташланған хәлдә йәшәйҙәр. Ә бына бай, мулла йә чиновник балалары хәҙрәттәргә мул ғына хәйер биреп, мәҙрәсәләрҙә ваҡыттарын, Д. И. Фонвизиндың «Һаҡаллы сабый» («Недоросль») комедияһының «Уҡырға теләмәйем, өйләнергә теләйем» тигән геройы Митрофан кеүек, юҡ-бар хаҡында хыялланып, ашап-эсеп уҙғаралар ҙа аҙаҡ ил яҙмышын хәл итеүсе донъя тотҡалары булып китәләр. Шулай булғас, йәмғиәттә тейешле прогресс нисек булһын инде, тимәксе автор.

**«Мәғсүм», «Яңы әсхәбе кәһәф» («Мәмерйәнең яңы хужалары») хикәйәләре**

Прозаиктың был әҫәрҙәре З. Һаҙи ижадында реализмдың тәнҡитле йүнәлеше көсәйә барғанлығын күрһәтә. «Мәғсүм» хикәйәһендә яҙыусы иҫке тәртиптәр хөкөм һөргән мәктәп-мәҙрәсәләрҙең йәш быуынды рухи йәһәттән генә түгел, физик яҡтан да ғәриплəү усағы булыуын сағыу күрһәтеп бирә. Әҫәрҙең матур ғаиләлә, заманына күрә яҡшы тәрбиә алып, ғәрәп теленән алынған гонаһһыҙ, кәмселекһеҙ, керһеҙ тигәнде аңлатҡан исеменә есеме тап килерҙәй саф күңелле, баҫалҡы, әҙәпле, итәғәтле, тырыш булып үҫкән төп геройы ҙур өмөттәр бағлап килгән мәҙрәсәлә хайран ҡалырлыҡ тәртипһеҙлектәр һәм боҙоҡлоҡтар менән осраша. Баҡһаң, тейешле хәстәрлек булмауы, тәрбиә эшенең тейешенсә алып барылмауы, бөтә нәмәнең үҙ ағышына ҡуйылыуы арҡаһында, ата-әсәләренән ситтә үҙ көндәрен үҙҙәре күреп йәшәгән шәкерттәр араһында алама ғәҙәттәр, төрлө әшәкелектәр хөкөм һөрә икән. Баштараҡ Мәғсүм был әшәкелектәргә, йәбер-мыҫҡыллауҙарға үҙенсә ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡарай. Ләкин ғәрип мөхит үҙенекен итә. Мәҙрәсәлә ятҡан һигеҙ йыл эсендә ҡасандыр һәләтлеге, әҙәплеге, тырышлығы менән айырылып торған егеттең күңеле ҡарайып, ҡатып бөтә. Тәртипһеҙләнеп йөрөй торғас, үпкәһенә һалҡын тейҙереп, яҡты донъяны ҡалдырып китә.

Яҙыусының ижадында тәнҡит рухы ғына түгел, социаль мотивтар бөрөләнә, сатирик аһәң көсәйә барғанлығы «Яңы әсхәбе кәһәф» («Мәмерйәнең яңы хужалары») хикәйәһендә айырыуса күҙгә ташлана. Әҫәрҙең «был насар тормоштан нисек итеп ҡотолорға, ... яҡшы тормошто нисек итеп табырға» тип көнө-төнө баш ватып йәшәгән төп геройҙары – егерме ике йәшлек Миңлешаһ менән егерме биш йәште артылған Сәфәрғәли, ата-әсәләрен «күрше ауылға һабантуйға барабыҙ» тип алдаштырып, таң менән бәхет эҙләп юлға сығалар. Улар өсөн бәхет тигәнең берәй ҡалаға йә ҙур ғына ауылға барып эш табыу йә берәй

мәҙрәсәгә уҡырға инеп кеше булыу. Юлда уларға михнәтле тормоштан башҡаны күрмәгән егерме өс йәшлек көтөүсе Тимербай ҙа ҡушыла. Төбәп кенә ҡайҙа барырға белмәй ҡаңғырып китеп барғанда, егеттәргә аҡ һаҡаллы, тәҡүә ҡиәфәтле[1], иҫке кейемле ҡарт тап була. Ул был фани донъяға, үҙе әйткәнсә, «бер ҙә иҫе китмәй» генә хәйер-саҙаҡалар иҫәбенә йәшәгән мөрит[2] булып сыға. Бәхет эҙләүселәр уға үҙ уй-ниәттәре тураһында һөйләп биргәс, ҡарт уларға һис икеләнмәй Ташлы Йылға ауылындағы ишан мәҙрәсәһенә барып урынлашырға, ишан хәҙрәттең фатихаһын алырға кәңәш бирә. Был кәңәшен ул ошондайыраҡ «фәһемле» фекерҙәре менән дәлилләп ҡуя: «Уҡыған кеше һис бер ваҡытта ас вә яланғас булмай... Күрәһегеҙ бит муллаларҙы, икешәр оҫтабикә менән донъяһын теттереп торалар... Бына минең энем һуҡыр Шәрәфи, Ташлы Йылғала ишан хәҙрәт мәҙрәсәһендә тороп, шулай рәтләнеп китте бит. Ҡөрьәнде шаулата ғына... Шәкерттәрҙе ҡыраьәт иттерә[3], һәр ваҡыт үҙенә саҙаҡа ла керә тора, өшкөрөргә лә йөрөтәләр. Бына беҙҙең күрше ауылдан сулаҡ Рәхмәтулла менән аҡһаҡ Хөснөтдин, унан һуң бөкрө Әхмәди менән һаңғырау Ғиззәт шул мәҙрәсәлә теттереп хәлфә булып яталар... Шул ишан хәҙрәт мәҙрәсәһенә барығыҙ ҙа керегеҙ. Ишан хәҙрәттең фатихаһын алһағыҙ, кеше булырһығыҙ... Эш фатихала, фатиха алмаһаң, ғалим булһаң да файҙаһы булмаҫ». Наҙан егеттәргә ҡарт мөрит ауыҙынан бына ошондай «аҡыллы» һәм «дәлилле» һүҙҙәрҙе әйттереп, яҙыусы ***физик гәриплек*** *менән иҫке типтағы мәҙрәсәләрҙә хөкөм һөргән* ***рухи гәриплек*** *араһында тапҡыр ассоциация уҙғара, иҫке ҡарашлы дин әһелдәренән, схоластик уҡыу-уҡытыу тәртиптәренән әсе көлә.*

Ташлы Йылға ауылындағы ишан бәхет эҙләүсе егеттәрҙе бик йылы ҡаршы ала, тауҙай вәғәҙәләр бирә, сөнки уның ҡаршыһында һәр ҡайһыһы йөҙ тәңкә саҙаҡаға торош килем килтерерҙәй «һабан үгеҙҙәре ... тора ине», ти автор. Ысынлап та, күп тә үтмәй, ишан уларҙы үҙенең йөҙәрләгән дисәтинә ерҙәрен эшкәртергә, әллә күпме малдарын ҡаратырға ҡуша. «Бына сәғәҙәт (бәхет) ҡайҙа! – тип эске бер ирония менән яҙа был хаҡта яҙыусы. – Беҙҙең «бәхетле» егеттәр эҙләгәндәрен табып, ... көҙгә ҡәҙәр утарҙа ... «һабаҡтар уҡығандан» һуң, ҡар яуғас, йәнә ҡайтып, кәһәфкә, тау тишегенә, ... кереп ябылдылар. Беҙҙең бәхет эҙләүсе егеттәр ҡыш көндәрендә лә ... утарға ашлыҡ һуғырға, бесән ташырға барып киләләр ине. Улар шул мәҙрәсәлә теүәл утыҙ йыл ғүмер һөрҙөләр, һис ҡайҙа сыҡманылар, кәһәф илә утар араһында йөрөп, ғүмер кисерҙеләр».

---

[1] *Тәҡүә ҡиәфәтле* – дингә ныҡ бирелгән (динсел) ҡиәфәтле.
[2] *Мөрит* – берәй күренекле дин әһеленә өйрәнсек, эйәрсән булған кеше.
[3] *Ҡыраьәт иттерә* – уҡырға өйрәтә.

Бәхет эҙләгән хикәйә геройҙарына 50–55 йәшкә еткәндә лә бәхет тәтемәй, сөнки ишандың таш мәҙрәсәһендә, автор әйткәнсә, мәмерйәлә ята торғас, улар тормоштан, заман ағышынан бөтөнләй айырылған, тормошта кәрәкһеҙ кешегә әүерелгән. Үҙҙәренә лә, йәмғиәткә лә шулай бер файҙа килтерә алмаған кәһәф тотҡондары, ғүмерҙәрен бары заяға уҙғарып, бер-бер артлы яҡты донъянан баҡыйлыҡҡа китәләр.

Был хикәйәһендә Закир Һаҙи, иҫке схоластик уҡыу йортондағы күҙ йәше аша көлөрлөк, ғибрәт алырлыҡ тормошто һүрәтләп, динде ысын мәғәнәһендә халыҡты иҙеү, миңрәүләтеү ҡоралына әйләндергән ҡомһоҙ дин әһелдәренең социаль йөҙөн реалистик планда асып бирә, быңдай «ил ағаларынан» әсе көлә.

**«Йыһанша хәҙрәт»**

Жанр йәһәтенән повесҡа ҡараған был әҫәрҙә Закир Һаҙиҙың художестволы фекерләү ҡеүәһе, әҙәби оҫталығы, тормошҡа ҡарашы быға тиклемге хикәйәләре менән сағыштырғанда күпкә тулыраҡ һәм тәрәнерәк сағыла.

Повесть прозаиктың хикәйәләрендә киң ҡулланылған алымдан – хәл-ваҡиғалар барасаҡ урынды тасуирлауҙан башланып китә. Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙендәге бер нисә типтәр һәм татар ғаиләләре йәшәгән башҡорт ауылы Шүрәленең халҡы, ошондай «шөһрәтле һәм данлыҡлы» биш муллаһы, биш мәсете һәм мәҙрәсәһе булып та, бик наҙан ҡала, имза урынына «һәнәк, ... сүкеш һүрәте», «ҡаҙ, ... ҡуян эҙе төшөрөү»ҙән, «бармаҡ берлә хисап итеү»ҙән ары китә алмай. Был хәлдең сәбәбен яҙыусы төп геройҙың – төп мәсет имамы Йыһанша хәҙрәттең тормошон, дин юлындағы «ҡаҙаныштарын» ентекле яҡтыртыу аша яуап бирергә тырыша.

Йыһанша «муллалыҡты ... иң бейек мәртәбә» һанаған Дәүләтша исемле наҙан ғына крәҫтиән ғаиләһендә тәрбиәләнә. Атаһының ауыл муллаһы Ғибадулланы йылына ике-өс тапҡыр «арбаға яҫтыҡ өҫтөнә генә ултыртып» килтереп, түр башына ҡуҡрайтып ултыртып ҡунаҡ итеүен, өҫтәүенә, хәйер-саҙаҡа биреп, йәнә ат менән оҙатып ҡуйыуын күреп йөрөй торғас, бала сағында уҡ үҫмер «йәшел сапан, аҡ салма кейеп», ҡәҙер-хөрмәттә йәшәгән мулла булыу тураһында хыяллана башлай. Аҡрынлап ул үҙен генә яратыр, «ҡаршыһында булған нәмәләрҙең иң яҡшыһын үҙенә һайлар, һәр ваҡытта үҙенең башҡаларҙан өҫтөн булыуын уйлар», «хужалыҡ эштәренән ситләшер» кешегә әүерелә бара. Өҫтәүенә, уны ата-әсәһе: «Минең улым мәзин булыр, мулла булыр», – тип һөйөп-иркәләп, шуға өндәп-өгөтләп кенә тора. Алыҫтағы Сорнаш ауылы мәҙрәсәһендә уҡығанда ла ул үҙен «һәр эштә башҡаларҙан өҫтөн булыуҙы яратыр», маҡсатына ирешер өсөн төрлө хәйләләргә барыр кеше икәнлеген күрһәтә. Һигеҙ-туғыҙ йыл эсендә «моназир (һүҙ көрәштереү оҫтаһы)

Йыһанша», «Йыһанша хәлфә», «Йыһанша ҡазый» исемдәре менән танылыу ала. Тиҙҙән ул ябай ауыл муллаһынан күпкә шөһрәтлерәк дин әһеле – ишан булыу, мөриттәр йыйыу, дүрт ҡатын алып, мул тормошта теттереп йәшәү хыялы менән яна башлай. Бохара мәҙрәсәләренең береһендә бер нисә йыл һабаҡ алып, тыуған яғына әйләнеп ҡайтҡас, Бохара һынлы Бохарала белем алған уҡымышлы кеше һылтауы менән Шүрәле ауылында мулла булып, бай ҡыҙына өйләнеп алғас, төрлө хәйлә юлдары менән ундағы мәҙрәсәне лә, яңы мәсет мәхәлләһен дә үҙ ҡулына эләктерә. Наҙандар донъяһында бер ниндәй ҡаршылыҡҡа тап булмаған, нәфсеһе артҡандан-арта барған Йыһанша, артабан үҙен ислам ҡанундарының иң яҡшы белгесе итеп күрһәтеп, янына мөриттәр туплап, ишанлыҡ дәрәжәһенә ирешә, яҡынтирәләге бөтә ауылдарҙы үҙ йоғонтоһонда тота башлай. «Ғауам (ябай халыҡ) бисараларҙы теләгәнсә алдай», уларҙан килгән саҙаҡалар иҫәбенә ғәйәт ҙур байлыҡ туплай, бер нисә йөҙ дисәтинә ерҙең хужаһы булып китә, икенсегә ҡатын алып ебәрә.

Йыһаншаның ғалимлығы һәм әүлиәлеге бары алдауға, ысынбарлыҡ күренештәрен һәм факттарын бөтөнләй боҙоп, үҙгәртеп күрһәтеүгә ҡоролған. Файҙа алыр өсөн «хәйер-доғаны», үҙенә ҡаршы сыҡҡандарҙы ҡурҡытыр өсөн «бәддоғаны (насар, яуыз теләкте)» ул үҙенә бер ҡорал итеп алған. «Дошмандарынан береһе хәстә (сирле) йә фәҡир булһа, йә вафат булһа, «уға минең бәддоғам төштө», тип һөйләй, ... дуҫтарының береһе байыһа йәки дәрәжәгә менһә, «минең хәйер-доғам менән байыны, дәрәжәгә менде», тип маҡтана ишан. Ә наҙан халыҡ «хәйер-доға өсөн Йыһанша хәҙрәткә саҙаҡа бирә, хеҙмәт итә, бәддоғанан ҡурҡып, ... малдарын ҡорбан итә». Әммә тора-бара ысын мәғәнәһендә нәфсе ҡолона әүерелгән, халыҡҡа аң-белем биреү тураһында уйлап та ҡарамаған ишандың хәйлә-алдауҙарға ҡоролған абруйы, дан-шөһрәте буш ҡыуыҡтай шартлап юҡҡа сыға. Хәҙер ул халыҡты үҙенә ҡаратыу түгел, ғаиләһе менән дә идара итә алмай башлай. Тикмәгә генә яҙыусы әҫәрен символик мәғәнәгә эйә күренештәрҙе һүрәтләү менән тамамламай: ишан мәрхүм булғандан һуң, заманында унан тейешле тәрбиә ала алмаған улына тороп ҡалған мәҙрәсәһе, ҡараусыһыҙ эшлектән сығып, сәүкәләр, күгәрсендәр ояһына, «күргән кешеләрҙең күңелдәренә ҡайғы килтереп», балаларҙың ҡотон алып торған ташландыҡ йортҡа әүерелә. Шуның менән автор суфый ишандар һәм мөриттәр эшмәкәрлектәренең заман талаптарына, заман ағышына бөтөнләй яуап бирмәгән, тарих төпкөлөндә ҡала барған реакцион күренеш, «сәүкәләр ояһы» булыуын кинәйәләп һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Повесында З. Һаҙи хәйләгә, халыҡты алдауға нигеҙләнгән ишанлыҡты сатирик планда фашлау менән бер рәттән, был дини ағымға ҡаршы торорҙай көстөң, айыҡ аҡыллы, алдынғы

ҡарашлы кешеләрҙең барлыҡҡа килеүен күрһәтеүгә лә ҙур ғына урын бирә. Шундайҙарҙың береһе Йыһанша ишан мәҙрәсәһендә уҡыған сағында уҡ уның етешһеҙлектәрен, наҙанлығын күреп-белеп йөрөгән, һуңынан байтаҡ донъя гиҙеп, сит ил мәҙрәсәләрендә белем алып ҡайтҡан Хәсән мулла иҫке типтағы мәҙрәсәләргә ҡырҡа ҡаршы сыға. Тыуған ауылында мәктәп һалдырып, сәйхана һәм китапхана астырып, унда төрлө гәзит-журналдар алдырып, халыҡты «ғилем вә мәғрифәт, һөнәр вә сәнәғәт илә ҡыҙыҡтырыу» эшенә ең һыҙғанып тотона, уҡытыу һәм тәрбиә эштәрен йәдитсә ҡороп ебәрә. Шул сәбәпле уның ауылдаштары аҡрынлап яңылыҡҡа ынтыла, иген игеп, сауҙа итеп, башҡа ауылдарға ҡарағанда һәйбәтерәк көн күрә башлай.

Йыһанша ишандың антиподы рәүешендә биргән был образын яҙыусы, үҙенең «Бәхетле ҡыҙ» хикәйәһендәге алдынғы ҡарашлы Ғәббәс мулла кеүек, бер аҙ идеаллаштырып, аҡ буяуҙар менән генә һүрәтләй. Быны тѳп сәбәбе бѳтәһенән элек авторҙың халыҡҡа заман талаптарына яуап биргән мулланың ниндәйерәк булырға тейешлеген күрһәтеп бирергә, уның аша сағылдырған мәғрифәтселек ҡараштарын үҙенә күрә бер «эш итеү программаһы» рәүешендә еткерергә тырышыуына бәйле.

Повесында З. Һаҙи ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы темаһына ла мөрәжәғәт итә. Уны яҡтыртыуҙа Искәндәр хажиҙың ҡыҙы Фәхрелбанат образы айырыуса мөһим роль уйнай. Был образ әҫәрҙәге төп геройҙарҙың эске донъяларын, йәшәү принциптарын тулыраҡ күрһәтеп бирергә булышлыҡ итә. Ҡатын-ҡыҙҙарға уйнап ялҡҡандан һуң ташлап ҡуя торған бер тәтәй, туҡтауһыҙ алмаштырырға тейешле ләззәт сығанағы итеп кенә ҡараған Йыһанша уны өсөнсө ҡатынлыҡҡа алыу өсөн хәйләгә бара: имеш тә, уға был хаҡта төшөндә изге заттар әйткән. Ишандың хатына тапҡыр яуабы менән ҡыҙ уны фашлай, мәсхәрәгә ҡалдыра.

Фәхрелбанат уҡыусы алдына заманының алдынғы ҡарашлы, ҡыйыу тәбиғәтле, нескә хисле башҡорт ҡыҙы булараҡ килеп баҫа. Ул үҙҙәрен донъя тотҡаһы тип йөрөгән Йыһаншаларҙан аң-белеме, күңел донъяһы, әхлағы яғынан күпкә өҫтөн. Был уның уй-хистәре байлығында һәм нескәлектәрендә, тәбиғәттәге һәм кешеләрҙәге матурлыҡты күрә алыу һәләтендә, йәштән һөйгән егете Хәсәнгә ҡарата булған тойғолары сафлығын һаҡлап ҡалыуында, уның фекерҙәрен уртаҡлашҡан, иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр менән ҡыйыу көрәшкән тоғро тормош иптәше булыуында асыҡ күренә.

Ғөмүмән, «Йыһанша хәҙрәт» повесы идея йөкмәткеһе, художестволы эшләнеше менән Закир Һаҙиҙың иң юғары ижади ҡаҙанышы булып тора. Был әҫәре менән ул башҡорт әҙәбиәтендә реалистик ижад методының, тәнҡит йүнәлешенең, сатирик пафостың нығыныуына ҙур этәргес бирҙе.

**Әҫәрҙәренең художество үҙенсәлектәре**

Закир Һаҙиҙың прозаһы мәғрифәтселек реализмы йүнәлешендәге башҡорт әҙәбиәтенең XX быуат башында бер урында тапанмауын, үҫеш-үҙгәреш кисереүен асыҡ күрһәтә. Беренсенән, был процесс яҙыусының үҙ әҫәрҙәрендә халыҡтың йәнле һөйләү теленә, фольклор традицияларына таяныуында күренә. Уларҙағы шиғри әҫәрҙәргә тартым йырлап-көйләп торған һөйләмдәр, мәҡәл һәм әйтемдәр сюжеттарҙы художестволы байытып, йәнләндереп ебәреүгә, образдарҙың күңел донъяларын, холоҡ-фиғелдәрен, ситуацияларҙың тәбиғәтен тәрәнерәк асып биреүгә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, «Мәғсүм» хикәйәһендә төп геройҙың атаһын бына ниндәйерәк рифмалашып торған һүҙҙәр менән ҡылыҡһырлай яҙыусы: «Фәхри хәҙрәт егет *тәбиғәтле,* баһадир *ҡиәфәтле,* асыҡ *йөҙлө,* татлы *һүҙле,* һәр нәмәнән *хәбәрле,* вәғәз-нәсихәте бик *әҫәрле*, һәр эшендә *тәдбирле* (уйлап, алдан күреп эшләүсән) бер зат ине. Муллаларыбыҙ кеби мәжлестәрҙә *ғәйрәт күрһәтәм тип екермәҫ, ғилем күрһәтәм тип ... һикермәҫ, туҡлыҡ күрһәтәм тип кикермәҫ,* мужиктарҙың хәтере өсөн файҙаһыҙ һүҙҙәр *һөйләмәҫ, аштың татлылығынан, бәлештең яҡшылығынан, иттең һимеҙлегенән,* әтәстәрҙең *өлгөрөнән* бәхәс әйләмәҫ ине». Геройҙарының холоҡ-фиғелдәрен, күңел донъяһын асып биргәндә, теге йәки был ситуацияларға асыҡлыҡ индерергә теләгәндә, ул йыш ҡына йәйелеп китеп һүрәтләүҙәргә, сурытып бәйәнләүҙәргә төшөп китмәйенсә, тапҡыр һүҙҙәрҙе, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе ҡулланыуҙы хуп күрә: «Мәҙрәсәнең босмағы – был донъяның ожмахы», «Эт талашыр ҙа еҫкәшер», «Кемдең санаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың» («Мәғсүм»), «Ризыҡ теш һындырып керер», «Иртәгәһен ишәк ҡайғыртҡан», «Ике ҡатын бергә булһа, баҙар була», «Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ кейәүем менән ҡыҙыма. Яҙғы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ киленем менән улыма» («Бәхетле ҡыҙ»), «Аҫыл нәрҫә ҙур булмай», «Беҙ ҡапсыҡта ятмай», «Аш байҙан, үлем Хоҙайҙан», «Әҙәмдең кем икәнлеге эшләгән эшенән беленер», «Яҡшы ат ябыуһыҙ йөрөмәй», «Үпкән-ҡосҡан елгә осҡан, ат эйәһенә кергәс, аҡһамаһын» («Бәхетһеҙ ҡыҙ») һ. б. Әйтәйек, «Йыһанша хәҙрәт» повесында төп герой атаһына артабан да уҡырға теләге булыуын белдергәс, ул белем алыу өсөн күпме сығым, ваҡыт, тырышлыҡ кәрәклекте ентекләп аңлатып тормаҫтан, улына: «Уҡыр өсөн Нухтың ғүмере, Ҡарундың байлығы кәрәк... Уҡыу энә менән ҡойо ҡаҙыу кеүектер», – тип әйтеү менән генә сикләнә. Атай кеше шулай халыҡ аҡылына, тормош тәжрибәһенә һылтанып фекер йөрөтә, шуға таянып эш итә, тормош көтә.

3. Һаҙиҙың үҙ әҫәрҙәрендә шулай халыҡтың аҡылына, тапҡыр һүҙҙәренә киң мөрәжәғәт итеүе, әлбиттә, уларҙың стиленә

йоғонто яһамай ҡалмай. Әҫәрҙәрҙән халыҡса йәнле һөйләшеү, фекер алышыу, шаяртыу, «ҡыя атып тура тейҙереү» атмосфераһы бөркөлөп тора. Бындай тел-стиль тенденцияһы иһә был осорҙағы башҡорт прозаһының халыҡ тормошона ныҡлап яҡыная, халыҡсан-демократик, реалистик йүнәлештә йылдам үҫә барыуын асыҡ күрһәтә ине.

З. Һаҙи ижадына иғтибарҙы йәлеп иткән икенсе бер мөһим яңылыҡ булып уның башҡорт мәғрифәтселек реализмы прозаһына сатирик пафосҡа юл ярыуы, шуның менән уның фаш итеү, тәнҡитләү ҡеүәһен көсәйтеүе тора. Уның әҫәрҙәрендә кешеләге һәм йәмғиәттәге кире күренештәрҙе, иҫке тәртиптәрҙе тәнҡитләү еңелсә көлөп, «семтеп» алыуҙан алып әсе көлөү, сатирик пафос юғарылығынаса барып етә. Улар уҡыусыны уйланырға йә нәфрәтләнергә, йылмайырға йә көлөргә, әсенеп ғибрәт алырға, ниндәйҙер һығымталар яһарға этәрә. Мәҫәлән, «Бәхетле ҡыҙ» хикәйәһендә яҙыусы бер көнө йылды туйындырырҙай йәйге уттай эш ваҡытында бүрәнә өҫтөндә ләстит һатып ултырған ялҡау, наҙан, вайымһыҙ ауыл ирҙәренең ҡандарына һеңешеп бөткән түрәләргә баш эйеү, байҙарға бил бөгөп йәшәү психологияһын бер нисә тапҡыр деталь менән аса ла һала. Ауылға саң борхотоп яҡынлашып килгән тройканы күреп ҡалған ирҙәрҙең «үрәтник йә берәй начальник» килә тип, баласағалай янғын һүндереү һарайына ҡарай елдереүҙәрен, берәһененең уны һеперергә тотоноуын, икенсеһененең арыҡ атын килтерә һалып бәйләүен, өсөнсөһөнөң ҡорғаҡһып бөткән, бер тамсы ла һыу тотмаған мискәгә аһылдап һыу ташыуын күҙ алдына килтереп, нисек көлмәйһең дә ахмаҡлыҡтарына һәм ҡуштанлыҡтарына нисек хайран ҡалмайһың инде. Яҙыусы бына шулай тәү ҡарашҡа ваҡ күренгән тормош-көнкүреш күренештәренә иғтибар итеп, йыш ҡына тормоштоң характерлы, типик яҡтарын эләктереп ала, йәнле тормош картинаһы тыуҙыра. Күҙ йәше аша көлөрҙәй бындай күренештәрҙе уның «Яңы әсхәбе кәһәф», «Йыһанша хәҙрәт» һәм башҡа әҫәрҙәрендә әллә күпме осратырға була. Улар яҙыусының ваҡыт-ваҡыты менән мәғрифәтселек реализмы сиктәрен ашып, тәнҡитле реализм, сатирик фашлау юҫығына төшөп китеүен күрһәтә. Был инде XX быуат башы башҡорт прозаһында мәғрифәтселек юҫығындағы ҡалыплашҡан ижад методынан арыныу, яңы ысулдарҙы эҙләү һәм үҙләштереү йүнәлешендә эске процесс – яңы баҫҡысҡа күтәрелеү өсөн энергия туплау процесы барыуының сағыу бер күрһәткесе ине.

**Ижадының әһәмиәте**

Дөйөм алғанда, Закир Һаҙи – донъяға ҡарашы, ижад принциптары менән мәғрифәтселек позицияһында торған әҙип. Әммә «Бәхетһеҙ ҡыҙ», «Яңы әсхәбе кәһәф» тигән хикәйәләрендә, айырыуса «Йыһанша хәҙрәт» повесында уның, мәғрифәтселек реализмы рамкалары-

нан аша сығып, тәнҡитле реализмға табан һиҙелерлек аҙымдар яһағаны, быуаттар буйына халыҡтың аңын томалап килгән дини-мистик ҡараштарҙы аяуһыҙ фашлай килеп, кешенең үҙ яҙмышы үҙ ҡулында тигән материалистик ҡарашты яҡлай башлағаны күренә. Был иһә З. Һаҙи ижадының ҡаҙанышы ғына түгел, бәлки бөтә мәғрифәтселек әҙәбиәтенең дә халыҡ тормошона яңыса ҡараш ташларға, уның томаналыҡ эсендә, хәйерселектә йәшәүенең төп сәбәптәрен асыҡларға һәм ижади процесҡа йәмғиәттәге етешһеҙлектәрҙе фашлаусы сатирик йүнәлеш бирергә ынтылыуындағы етди алға китеше булды. Заманының мөһим проблемаларын күтәреп сыҡҡан һәм үҙенсәлекле яҡтыртҡан, прозабыҙға бик күп яңы биҙәктәр өҫтәгән халыҡсан рухлы әҫәрҙәре менән З. Һаҙи башҡорт художестволы-эстетик фекере үҫешенә ыңғай йоғонто яһаны.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. З. Һаҙиҙың тормош юлы тураһында һөйләгеҙ. Тормошо менән ижады араһында бәйләнештәр бармы? Булһа, уларҙы күрһәтегеҙ. 2. Тәүге хикәйәләрендә прозаик ниндәй проблемаларҙы күтәрә һәм яҡтырта? 3. З. Һаҙиҙың «Мәғсүм», «Яңы әсхәбе кәһәф» («Мәмерйәнең яңы хужалары») хикәйәләрен ҡылыҡһырлағыҙ. 4. Прозаиктың «Йыһанша хәҙрәт» повесын уҡып сығып, уның идея-йөкмәткеһе, сатирик һыҙаттары хаҡындағы фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. Йыһанша ишанға һәм уның антиподтарына характеристика бирегеҙ. 5. З. Һаҙи әҫәрҙәренең художество үҙенсәлектәре һәм әһәмиәте тураһында фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.

# ФӘТХЕЛҠАДИР СӨЛӘЙМӘНОВ

## (1889 – 1976)

Ҡан ҡойғос һуғыштары, революциялары, башҡа киҫкен үҙгәрештәре менән характерланған XX быуат башында Рәсәй халыҡтарының донъяға ҡарашында, идеологияла төрлө йүнәлештәр, баһалар алҡынып, бер-береһе менән бәрелешеп, үҙ-ара алмашынып торҙо. Шундай ваҡыттарҙа ла, бер нигә ҡарамай, мөмкин тиклем халыҡ тормошона яҡын килергә, ныҡышмалы рәүештә уның тарихи үткәне һәм бөгөнгө хәл-яҙмышы, теләк-ынтылыштары тураһында яҙырға тырышҡан яҙыусылар ҙа булды. 1913–1916 йылдарҙа ижадҡа әүҙем тотонған Фәтхелҡадир Сөләймәнов – шуларҙың береһе.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, большевиктар идеологияһын һәм совет ҡоролошон ҡабул итмәйенсә, сит илгә сығып китеүенә бәйле Ф. Сөләймәновтың әҫәрҙәренә оҙаҡ йылдар «яңы төҙөлгән йәмғиәт өсөн зарарлы, реакцион» тигән мөһөр баҫылып киленде.

### ТОРМОШ ЮЛЫ

**Уҡыуы һәм мөғәллимлеге**

Фәтхелҡадир Сөләймәнов 1889 йылдың 29 ноябрендә элекке Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе Шығай ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһе Сосновка районында) Мостафа исемле мулла ғаиләһендә тыуған. Шығай ауылын халыҡ араһында Һары Күлмәк тип тә йөрөтәләр. Атаһы Мостафа мулла ауыл мәҙрәсәһендә мөдәррис-мөғәллим булып та эшләгән, шәкерттәр уҡытҡан. Ҡартатаһы Сөләймән дә тирә-йүндә абруйлы, уҡымышлы кеше булған. Фәтхелҡадирҙың фамилияһы ошо ҡартатаһынан килә лә инде. Малайҙың әсәһе Зәкиә лә үҙ заманы өсөн уҡымышлы ғына ҡатын булған, оҫтабикә сифатында ҡыҙ балалар уҡытҡан.

Фәтхелҡадир башта тыуған ауылында атаһының мәҙрәсәһендә, һуңынан күрше ауылдағы рус-башҡорт мәктәбендә һабаҡ алған. Йәдитселек йүнәлешендәге мәҙрәсәлә уҡыу теләге

менән Силәбе ҡалаһына килгән, ундағы мәҙрәсәлә бер нисә йыл уҡыған. 1905–1907 йылдарҙағы революция ваҡиғаларын Фәтхелҡадир ошонда ҡаршылаған. Был ваҡиғалар шәкерттең аңына көслө генә йоғонто яһаған. Ул шәкерттәр хәрәкәтенә лә ҡушылып киткән. «Шәкерт хәрәкәте беҙҙең мәҙрәсәгә лә килеп инде, – ти ул. – Ҡалала был хәрәкәтте башлаусы мин булып сыҡтым. Йәшем бәләкәй булыуға ҡарамаҫтан, мәҙрәсәләге тынғыһыҙҙарҙың лидеры инем. Дүрт-биш арҡаҙаш, мәҙрәсәне ташлап, русса уҡып, университетҡа инеү маҡсатында аттестат имтихандарына әҙерләнергә ҡарар иттек».

Улының русса уҡып, бер «бунтарь» көфөр булып китеүен теләмәгән атаһы Фәтхелҡадирҙы Троицкиҙағы атаҡлы Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәһенә уҡырға барырға күндерә. Юғары типтағы был мәҙрәсәлә һабаҡты ул күберәк Зәйнулла хәҙрәттең улы Ғабдрахман Рәсүлевтән ала. «Рәсүлиә»ләге шәкерттәргә аң-белем биреү шарттары, донъяуи фәндәрҙе уҡытыуға ҙур иғтибар бүленеүе, ижади атмосфера уға бик оҡшай. Унда шәкерт донъяуи ғилемдәрҙе төплө үҙләштерә, рус телен өйрәнә, халыҡ ижады һәм әҙәбиәт менән ныҡлап ҡыҙыҡһына, һабаҡташтары ойошторған әҙәби-музыкаль кисәләрҙә, концерттарҙа ҡатнаша, шиғырҙар һәм мәҡәләләр яҙыу менән мауыға башлай.

Ғөмүмән, Фәтхелҡадир бала сағынан уҡ әҙәбиәт яратҡан, мөкиббән китеп китаптар уҡыған булған. «Күршеләребеҙ һәм атайыма килгәндәр гел китап уҡыуымды күреп: «Олатаһы Мөхибулла хәҙрәт кеүек ғалим буласаҡ, иншалла», – ти торғайны», тип яҙа ул иҫтәлегендә. Олатаһы, ысынлап та, заманы өсөн ҙур ғына уҡымышлы кеше булып, Шиһабетдин Мәржәниҙәр ҡатарына инеп, уның ҡайһы бер хеҙмәттәре хаҡында тәнҡит мәҡәләләре яҙып баҫтырып, аҙаҡ үҙе атаҡлы татар ғалимының тарафдары булып киткән. Был Мөхибулла хаҡында Аҡмулланың Мәржәнигә бағышланған атаҡлы әҫәрендә шундай юлдар ҙа бар:

> Уға шәриҡ – дамелла Мөхибулла,
> Саф күңелле ғалимдарҙы мөхиб (яратыусы) мулла
> Әүәле ҡырын-ярын йөрөй ине,
> Ахырында, ҡайтып, булды мөхиҡ (ғәҙел) мулла.

Фәтхелҡадир ошо олатаһының һәм еҙнәһенең бай китапханаһынан Р. Фәхретдиновтың, М. Өмөтбаевтың китаптарын, яңы әҙәби әҫәрҙәрҙе шәкерт саҡтарында уҡый.

«Рәсүлиә» мәҙрәсәһен тамамлау менән, Фәтхелҡадир ҡыҫҡа курслы махсус мөғәллимдәр мәктәбенә уҡырға инә. Уны 1914 йылда тамамлағас, башта хәҙерге Ҡурған өлкәһе башҡорт ауылдарында, Тубыл һыуы буйҙарында ултырған ҡаҙаҡ ауылдарында мөғәллим булып эшләй, артабан 1923 йылғаса Өфө губернаһының, Ҡаҙағстандың, Төркөстандың мәктәп-мәҙрәсәләрендә уҡытыусылыҡ эшен дауам итә. Был йылдарҙа ул,

«Рәсүлиә»нең мөдәррисе Ғабдрахман Рәсүлев менән «Мөғәллим» журналы мөхәррире һәм нәшире Хәсән Ғәлиҙең кәңәштәрен тотоп, фольклор әҫәрҙәрен һәм этнографик материалдар йыйыу менән дә шөғөлләнә. Уларҙың нигеҙендә бер нисә хикәйә, хикәйәт һәм нәҫер ижад итеп ваҡытлы матбуғатта баҫтырып сығара. «Мөғәллим» һәм «Шура» журналдарында тиҫтәгә яҡын шиғыры ла донъя күрә.

**Башҡорт хәрәкәтендә һәм эмиграцияла**

1917 йылдың Февраль буржуаз-демократик революцияһын Фәтхелҡадир Сөләймәнов Ырымбурҙа ҡаршылай һәм илдә барған ваҡиғаларға әүҙем ҡушылып китә. Большевиктарҙың Екатеринбургта үткән съездарында делегат булып ҡатнаша. Тиҙҙән башҡорт хәрәкәтенә ҡушылып китә. Шул уҡ ваҡытта уҡытыусылыҡ эшен дауам итә. Граждандар һуғышы осоронда башҡорт хөкүмәтенең «Башҡорт», «Башҡорт хөкүмәтенең теле» гәзиттәрендә мөхәррир вазифаһын башҡара. Башҡорт АССР-ы төҙөлгәс, республиканың Мәғариф комиссариатында фән буйынса комиссия эшенә етәкселек итә.

1919 йылдың аҙаҡтарында – 1920 йылдың баштарында Ф. Сөләймәнов Башҡорт дивизияһы составында Петроградты һаҡлауҙа ҡатнаша, дивизияның сәйәси бүлеге тарафынан сығарылған «Салауат» гәзитенең мөхәрририәт ағзаһы була. Петроград ҡала советы рәхмәт йөҙөнән дивизияға китаптар һәм Башҡортостан тарихына, филологияһына ҡағылышлы ҡайһы бер архив материалдары бүләк иткәс, ул был ҡиммәтле баҫма һәм ҡулъяҙма ҡомартҡыларҙы республикаға алып ҡайтыша һәм Стәрлетамаҡта фәнни китап фондын ойоштороша. Ошондай ҡатмарлы һәм ауыр осорҙа ижад эшен дә ташламай: шиғырҙар, йырҙар һәм пьесалар яҙа.

Совет хөкүмәте, 1920 йылдың майында Башҡорт АССР-ы тураһындағы килешеүҙе боҙоп, республиканың хоҡуҡтарын үтә ныҡ сикләгәс, Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге хөкүмәт ағзаларының күбеһе, быны менән ризалашмайынса, хөкүмәтте ташлап сығалар. Үҙ аллы Төркөстан Республикаһын төҙөүҙә ҡатнашыр өсөн Ф. Сөләймәнов та 1920 йылдың икенсе яртыһында йәшерен рәүештә Урта Азияға сығып китә. Яңы шарттарҙа азатлыҡ хәрәкәтенең уртаһында ҡайнай. 1920–1922 йылдарҙа Ташкентта нәшер ителгән «Аҡъюл» гәзите редакцияһында хеҙмәткәр, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ мәктәбендә директор һәм уҡытыусы булып эшләй. Был вазифалары уға халыҡ араһында сәйәси-ижтимағи эшмәкәрлекте киң йәйелдерергә мөмкинлек бирә. Был йылдарҙа ул «Аҡъюл» гәзитендә «Абдулҡадир Йылҡыбай» имзаһы менән фәнни-популяр мәҡәләләр яҙып баҫтыра. Төркөстандағы эшмәкәрлеген ул Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә алып бара.

Төркөстанда азатлыҡ хәрәкәте еңелеүгә дусар булғас, Вәлиди менән Сөләймәнов 1923 йылда сит илгә сығып китергә мәжбүр булалар. Улар башта Иранда, унан Афғанстанда булалар, артабан Һиндостанға күсәләр. 1924 йылда Европаға юл тоталар, Марсель, Париж ҡалаларында йәшәйҙәр. Унан Германияла, Венгрияла булып, Көнсығыштың Мәшхәт, Таһран, Ҡабул, Дели кеүек ҡалаларындағы архивтарҙа эҙләнгән кеүек, Париж, Берлин, Будапешт ҡалаларындағы үҙәк архивтарҙан боронғо китаптарҙы өйрәнәләр. Шулай төрлө илдәрҙә эмигрант-мосафир хәлендә йөрөй торғас, ниһайәт, 1925 йылда Төркиәгә килеп, Стамбул ҡалаһына төпләнәләр. Шулай Фәтхелҡадир Сөләймәновтың эшмәкәрлеге, алдағы яҙмышы Әхмәтзәки Вәлиди менән тығыҙ берлектә бара.

Стамбулда Фәтхелҡадир күренекле төрөк ғалимы Фуад Көпрүлү менән таныша һәм уның ярҙамында Төркиәт ғилми-тикшеренеү институтына эшкә урынлаша. Ошонан уның фән өлкәһендәге эше ныҡлап башланып китә. 1927 йылда ул фекерҙәш дуҫы Әхмәтзәки Вәлиди менән берлектә «Яңы Төркөстан» журналын сығара башлай. 1928 йылда «Халыҡ белеме хәбәрҙәре» тигән фәнни-популяр баҫманы ойоштороуҙа ҡатнаша һәм унда мәҡәләләр яҙып баҫтыра. 1928–1932 йылдарҙа Төрөк халыҡ берлеге ғилми коллегияһында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1933 йылда Төркиәнең баш ҡалаһы Анкараға Төрөк тел ғилеме йәмғиәтенә саҡырыла. Уның фәнни карьераһы күтәрелеүендә Төркиә хөкүмәтенең башлығы Ататөрөк – Мостафа Кемаль ҙур роль уйнай. Ул эмигрант ғалим-әҙипте ҡабул итә, уның ғилми эштәренә юғары баһа бирә һәм үҙенең мәҙәниәт мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләй. Анкарала Ф. Сөләймәнов фән докторы дәрәжәһенә ирешә, ундағы университеттың тел һәм тарих факультеты профессоры итеп һайлана, төркиәт ғилеме буйынса уҡыта. Аҙаҡ, ҡартлыҡ буйынса ялға сыҡҡанға тиклем, Төрөк мәҙәниәт институтында эшләй.

Яҙыусы һәм ғалим Фәтхелҡадир Сөләймәнов – Абдулҡадир Инан 1976 йылда Анкара ҡалаһында 87 йәшендә вафат була. 1938 йылда тыуған Йәшәр исемле берҙән-бер улы атаһы юлынан китмәгән, урмансы-инженер һөнәрен һайлаған булған.

## ӘҘӘБИ ИЖАДЫ

Фәтхелҡадир Сөләймәновтың әҙәбиәт өлкәһендә иң әүҙем эшләгән осоро Троицкиҙағы шәкертлек һәм артабанғы мөғәллимлек йылдарына тура килә. Башҡорттар тормошо тураһындағы мәҡәләләре Ырымбурҙа сыҡҡан «Ваҡыт» гәзитендә

1908 йылда «Башҡорттарҙа тупраҡ мәсьәләһе», «Башҡорт ғөләмәһе (уҡымышлылары)» исемдәре менән баҫылып сыға.

Шулай «башҡорт» тип теле асылған Фәтхелҡадир туған халҡы тураһындағы уйланыуҙарын, хис-тойғоларын артабан шиғыр юлдарына һалып, хикәйәләргә әйләндереп, 1914 йылда «Шура» һәм «Мөғәллим» исемендәге ҙур журналдар аша ла иғлан итә.

**«Башҡорт моңо», «Йәйләүҙе һағынғанда»**

Ф. Сөләймәновтың ваҡытлы матбуғат биттәрендә донъя күргән тәүге художестволы әҫәре «Башҡорт моңо» тигән шиғыр. 1914 йылда «Мөғәллим» журналының 8-се һанында баҫылып сыҡҡан был әҫәр йәш шағирҙың милли уй-тойғоларының тәүге моңло поэтик аккорды кеүек яңғырай. «Аҡ тирмәнән сығып, моңло төндә» ай батҡанын ҡарап торған лирик герой, ата-әсәләренең һағынып һөйләүҙәре буйынса, таң алдынан башҡорт халҡының данлы үткәнен, иркенерәк саҡтарын иҫенә төшөрөп, моңло-һағышлы уйҙарға бата:

Иҫкә төшә шунда иҫке саҡтар –
Ата-бабаларҙың дандары.
Күҙ алдында иләҫ-миләҫ итә
Көтөү-көтөү йөрөгән малдары.

Һаҙаҡтарын тартып, һөңгө тотоп,
Йөрөгән улар матур аттарҙа.
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Ил бирмәгән яман-яттарға.

Поэтик төҙөлөшө һәм яңғырашы буйынса шиғыр халыҡтың оҙон көйлө йырҙарын хәтерләтә. Уның һуңғы юлдарынан атаҡлы «Урал» йырының ҡаһарманлыҡ ауазы һүҙмә-һүҙ тиерлек яңғырап ишетелә.

Ошоларҙы иҫкә алып, йәш шағир хәҙерге көндәренә ҡайтһа, бөтөнләй ҡапма-ҡаршы, аяныс хәлдәрҙе күрә. Милләттәштәре араһында киң тарала барған вайымһыҙлыҡ, бахырлыҡ, ялҡаулыҡ, ҡурҡаҡлыҡ кеүек кире күренештәр уның һарыуын ҡайната. Ҡан-ҡәрҙәштәренең намыҫын уятырға теләп, ул быңдай меҫкенлекте күреп, хатта «ҡара урмандар» ҙа илай бит, тип баҫым яһап әйтә.

Быңдай һағышлы, үкенесле моңһоу мотив 1914 йылда «Шура» журналының 24-се һанында донъя күргән «Йәйләүҙе һағынғанда» элегик шиғырында тағы көсәйә төшә. Унда ла шағир башҡорттоң боронғо иркен йәйләү тормошон, аянысды бөгөнгөгә ҡаршы ҡуйып, антитеза рәүешендә һүрәтләй, шул тормошто ожмахтарға тиңләп, һағынып-зарығып йырлай. Әҫәр башынан алып аҙағына тиклем йәмле йәйләүҙәрҙең нилектән башҡорт ҡулдарынан китеүе хаҡындағы аптырашлы риторик һорауҙарҙан тора.

Ҡайҙа ғына китте беҙҙең күҙҙән
Йәйелеп кенә ятҡан йәйләүҙәр?
Уйнап-көлөп, йүгереп, тирләп-бешеп,
Сорҡоратып бейә бәйләүҙәр?..
Ҡурайсыны алып, моңландырып,
Ултырған саҡ ҡурай уйнатып,
Матур аттар менеп, юртып-елеп,
Йөрөгән саҡтар Урал буйлатып?..

Һорауҙар ҡәтғигә әйләнә, эмоциялар икенсе планға күсә бара. Шағир матур йәйләү тормошоноң, боронғо традицияларҙың һүнеп ҡалыу сәбәптәрен ситтән эҙләргә, кемдәргәлер япһарырға теләмәй, әҫәрен ҡәтғи һәм ҡаты яуап һүҙҙәре менән тамамлап ҡуя:

Ник илайһың, башҡорт? Ҡуй, илама!
Үҙең һатып ашап бөттөң бит!

Әле ул был аяныслы күренештең иң төп сәбәпсеһе халыҡты социаль һәм милли бөлгөнлөккә төшөргән йәмғиәт тәртиптәре, батша хөкүмәтенең колониаль сәйәсәте булыуын әйтеп, аңлатып биреүҙән алыҫ тора. Башҡорт ерҙәренең таланыуын, халыҡтың ауыр тормошон күреп ғазапланған шағир артабан 1915–1916 йылдарҙа үтә лә абстракт характерҙағы романтик уй-тойғолар менән һуғарылған шиғырҙар яҙып ташлай. «Батыр» (1915) тигән мәҙхиәһендә «Ил сигенә бөгөн яу килгән» мәлдә тимер кейем кейеп, һөңгө тотоп, ташты ярырҙай уҡтар атып, ат ауыҙынан «аҡ осҡондар» осороп, «аяҡ аҫтында таштар» һындырып, дөйөм Ватан – Рәсәй именлеге өсөн Беренсе донъя һуғышы осоронда яуға сапҡан башҡорт патриоты образын тыуҙыра. Ә бына «Мин үлгәс» (1916), «Килмешәкмен» (1916) тигән элегик шиғырҙарында һыҙланыу, ғазапланыу, фәнни термин менән әйткәндә, экзистенциализм мотивтарын сағылдыра: «ҡара таплы, гонаһлы, шомло ер... түгел илем минең», «күк – минең ил» тип, күңеле менән «ашҡына шунда таба».

Үткәндәрҙе идеаллаштырыу, боронғо йәйләү тормошон һағыныу һәм башҡа ғазаплы-әрнеүле мотивтар, башҡорт ерҙәренең күпләп һатылыуы күренештәре XX быуат башы башҡорт шиғриәтендә ярайһы киң сағылыш тапҡан. Башҡорт йорт-еренең төрлө тарафтарындағы аянысլы хәлдең уртаҡ булыуы Ф. Сөләймәнов шиғырҙарын да Фазыл Туйкин, Шафиҡ Әминев-Тамъяни, Шәйехзада Бабич, Дауыт Юлтый, Ғәлә Хоҙаяров, Ғиззетдин Иҫәнбирҙин, айырыуса Сафуан Яҡшығолов кеүек шағирҙарҙың ижад емештәре менән ауаздаш иткән.

Туған халҡының шул замандағы ҡыҫынҡы тормошон, ҡайғы-шатлыҡтарын күреп-кисереп үҫкән Ф. Сөләймәнов бала

сағынан уҡ әсәһенең башҡорттарҙың хөр үткәне, иркен йәйләү көнкүрештәре тураһында һөйләгәндәрен тыңлап, күңеленә һеңдерә барған. «Әсәйемдең атаһы бик матур боронғо тирмәһен амбарында һаҡлай ине, – тип хәтерләй Фәтхелҡадир бер иҫтәлегендә. – Уны күргән һайын әсәйем: «Һай, донъя! Ниндәй матур йәшәнек борон», – ти торғайны. Әсәйемдең йәйләү тормошон идеаллаштырып иҫкә алыуы миңә бик тәрән йоғонто яһаны. Боронғо башҡорт тормошо тураһында хикәйәләр яҙғанда һәр саҡ уның тәьҫире аҫтында булдым».

**Хикәйәләре** Ф. Сөләймәновтың 1914–1916 йылдарҙа яҙылып, «Шура» журналында донъя күргән «Башҡорт йәйләүендә» нәҫере, «Ил өсөн», «Ҡасҡын», «Ҡурайсы Тимербай», «Үләт» исемле хикәйәләре әсәһенең ана шул һөйләгәндәренә нигеҙләнеп ижад ителгәндәр. Был проза әҫәрҙәрендә автор, шиғырҙарындағы мотивтарҙы дауам итеп, халҡы тормошо, уның үткәне һәм хәҙергеһе хаҡында, халыҡ ғәме тураһында һөйләй. Бына «Башҡорт йәйләүендә» нәҫере. Унда боронғо йәйләү тормошон һағыныу мотивтары тағы ла көслөрәк сағыла. Серле йәйге таң. «Айҙың көмөш шарынан түгелеп торған яҡты тамсыларҙың» бөтә тарафты ҡаплап алған ҡараңғылыҡ менән алышҡан мәле. Был көсөргәнешле мәл ҡуйы романтик буяуҙарҙа тасуир ителә. Төрлө образлы һүрәтләү сараларын, бигерәк тә йәнләндереүҙе бик йәтеш һәм урынлы ҡуллана яҙыусы. Уның күк йөҙөндә һап-һары булып балҡыған айы торғаны бер йәнле зат: берсә асыуланып йөҙөн һытып, берсә көлөп-йылмайып ергә баға. Йондоҙҙары ла унан ҡалышмайҙар, йымылдашып ҡына ҡалмайҙар, күҙҙәрен уйнатып, бер асып, бер йомоп ниҙер эҙләгәндәй ҡылананалар. Тәбиғәт ана шулай төнгө йоҡоһонан уянған, ҡараңғылыҡ өҫтөнән яҡтылыҡ өҫтөнлөк ала барған бер мәлде тирә-яҡты кинәт моңло ҡурай тауышы сорнап ала. Тәбиғәттең илаһи мәлен һүрәтләгән юлдар хәҙер тыуған төйәкте, ил батырҙарын данлаған боронғо йырҙарға һәм көйҙәргә һоҡланыу һүҙҙәре менән алмашына. Моңло ҡурай тауыштары, күк Уралды, сая батырҙарҙы маҡтаған йырҙар әҫәрҙә шулай поэтиклаштырыла, уларҙың ярҙамында боронғо башҡорт йәйләүҙәре иң йәмле төбәктәр, иң хозур саҡтар итеп идеаллаштырыла. Тик әҫәрҙең аҙағында был рух күтәренкелеге, пафос юғарылығы һүнә, юҡҡа сыға бара. Уларҙың урынын ҡулдан киткән «киң йәйләүҙәр» хаҡындағы һағышлы-зарлы тойғолар, бары хыял ғына булып ҡалған хәтирәләр биләп ала. «Хәҙерге йәйләү – байғош ояһы», боронғо йәмдәр бөткән, башҡорт дәрте һүнгән, күңелендә ҡайғылы йырҙары ғына ҡалған, ти автор. Шулай әҫәрҙә идеаллаштырылып күҙ алдына баҫтырылған үткәнгә хәҙерге шыҡһыҙ ысынбарлыҡ, йәмһеҙ тормош, байғошлоҡ ҡаршы ҡуйыла.

1916 йылда «Шура» журналының 3-сө һанында донъя күргән «Үләт» исемле хикәйәһендә лә яҙыусы башҡорттоң хозур тәбиғәт ҡосағындағы боронғо иркен тормошон, мәртәбәле йыйындарын хәтеренә ала. Томана булһалар ҙа, хөрәфәттәргә ышанып йәшәһәләр ҙә, ата-бабаларыбыҙҙың боронғо тормошо күпкә ҡыҙыҡлыраҡ, матурыраҡ булған икән, ә хәҙерге Урал буйҙары, башҡорт мөхите ысын үләт төшкәнгә оҡшап ҡалған, ни йәм, ни ҡот юҡ, ти ул.

Заманының ошо өшәндергес ҡотһоҙлоғо, әхлаҡи шөкәтһеҙлеге, рухи йәмһеҙлеге Ф. Сөләймәновтың «Ҡасҡын» (1915) тигән хикәйәһендә тағы ла киҫкенерәк һәм сағыуыраҡ сағылыш таба. Иштимер йортауайҙың ҡотҡоһона бирелеп, үҙе ише көслө, дыуамал егеттәр менән төндәрен өйөр-өйөр йылҡы урлап, сауҙа каруандарын талап, алты йыл буйына уны байытҡан Ҡормаш ҡасҡын бер килеп уға кәрәкмәй башлай. Йортауай, әмәлен табып, Ҡормашты ҡара урман эсендәге иҫке зыяратта йәшеренеп, «бер телем икмәкһеҙ, бер ҡашыҡ һыуһыҙ», «ҡәберлектәге сүп-сар үләндәрен ашап» йәшәргә мәжбүр итә һәм ахырҙа бер бурҙан үлтертеп ҡуя. «Шулай итеп, иҫке ташландыҡ шәһиттәр ҡәберендә яңы бер шәһит артты, – ти яҙыусы. – Ләкин был шәһиттең гүре, кәфене, йыназаһы юҡ ине...»

Күренеүенсә, Ф. Сөләймәновтың хикәйәләрендә антитеза алымы, фольклорҙан килгән мотивтар киң ҡулланыла. Уларҙа үткән тормошто үтә ҡабартып, идеаллаштырып ҡуйыу романтик буяуҙарҙа тасуирлауҙар ҙа һәм, киреһенсә, бөгөнгөһөн үтә шыҡһыҙландырып, йәмһеҙләп, түбәнһетеп күрһәтеүҙәр ҙә етерлек.

**«Тимербай ҡурайсы» хикәйәһе**

Яҙыусының 1915 йылда донъя күргән «Тимербай ҡурайсы» хикәйәһендә башҡорт ҡурайсыһының тормошон хикәйәләү аша башҡорт халҡының трагик яҙмышын дөйөмләштереп бирергә тырышыу ярылып ята.

Бына бер заман йәмле башҡорт сәхрәләрен бында ағылып килгән крәҫтиән «туфаны» баҫып китә. Йәйләү ерҙәре һөрөлә, тәбиғәт ҡотһоҙлана, урмандар юҡ ителә, күп халыҡ ерһеҙ ҡала. Тимербай быларҙан ҡасып Урал төпкөлөнә йүнәлә. Тик унда ла эштәр мөшкөл икән шул. Тауҙар араһында заводтар төтәп ултыра, үҙәндәрҙе сусҡалар бысратып бөткән. Урмандары йоҡарған, йылғалары һайыҡҡан. Баш төртөр ер булмағас, Тимербай заводҡа эшкә инә. Өс йыл буйына үҙ ҡулдары менән ҡәҙерле башҡорт урмандарын ҡыра ул. Тир түгеп тә, тормошо ҡотаймай. Заводта хатта үҙ исемен юғалтып «Тимофей» ҡушаматына ҡала. Аҙаҡ боронғо башҡорт йәйләүенә хужа булып алған Гришка тигән мужикка һыйыр көтөргә ялланып, шунда мал өйөндә үлеп ҡала. Хикәйәлә әйтелгәнсә, үлгәндә уның өҫтөндәге рус

сәкмәненән һәм ҡулындағы биш тишекле ҡурайынан башҡа бер ние юҡ ине. «Гриша: «Ҡәҙерле нәмәһе бына шул сәкмәндән башҡа юҡ», – тип, ҡара сәкмәнде мөәзингә биреп ебәрҙе лә ҡурайҙы ҡураға ташланы. Биш тишекле ҡурай Гришаның эттәре, сусҡалары аяғы аҫтында тапалған кеүек, уның эйәһе – иркен даланың иркә балаһының моңло ҡәбере лә биш йылдан һуң һөрөлөп, иген аҫтында ҡалды». Бына ниндәй зиһенде зеңкеткес, күңелде тетрәндергес һағышлы, драматик юлдар менән тамамлана хикәйә.

Шундай алым-ишаралар, кинәйәле тамашалар менән тамамларға ярата яҙыусы хикәйәләрен. Быного менән башҡорт яҙмышының шулай һәләкәт, юҡҡа сыға барыу менән бөтөрөнә ишаралай йәки шулай фараз ҡылып, халыҡтың һәлкәүлегенә һәм моңһоҙлоғона күңеле әрнеп, кешеләрҙең намыҫына, зитына ҡағылырға, һүнеп барған милли тойғоларын уятып ебәрергә ниәтләй.

Ф. Сөләймәновтың хикәйәләре һәм шиғырҙары башҡорт тормошон, халыҡ яҙмышын үҙәккә ҡуйып һүрәтләүҙәре, заманы хәл-әхүәле менән ҡәнәғәт булмаған бунтарь шәхестең уй-тойғоларын сағылдырыуҙары менән үтемле, халыҡ күңеленә яҡын.

1917 йылдың Февраль революцияһы барышында, батша тәхеттән баш тартып, хөрриәт иғлан ителгәндән һуң, азатлыҡҡа һыуһаған Ф. Сөләймәнов революцияға, башҡорт хәрәкәтенә ҡушылып китә. Ижтимағи эшмәкәрлеге лә, ижады ла әүҙемләшә, башҡорт халҡын көрәшкә саҡырыр шиғырҙарын, йырҙарын, драмаларын яҙа.

**«Салауат батыр» драмаһы**

Граждандар һуғышы йылдарында, башҡорт хәрәкәте ҡыҙған дәүерҙә, Фәтхелҡадир Сөләймәнов ижадына азатлыҡ өсөн көрәш, ҡаһарманлыҡ темаһы килеп инә. «Батыр», «Башҡорт егетенең йыры» шиғырҙарынан юл алған был тема уның «Аҡшан батыр» менән «Салауат батыр» исемле драма әҫәрҙәрендә үҫтерелә һәм тәрәнәйтелә. Тик был героиканы, ҡаһарманлыҡтарҙы әҙип үҙе йәшәгән замандан түгел, бәлки тарихтан эҙләй. Уның ике пьесаһы ла башҡорт тарихының XVIII быуаттағы шәхестәре, үткәндәге яуҙар, ихтилал батырҙары хаҡында. Быного үҙ сәбәптәре лә барҙыр, әлбиттә.

Ф. Сөләймәнов иҫтәлектәрендә былай яҙа: «Әсәйем менән ҡартәсәйемдең боронғо башҡорт тормошо һәм «батырҙар заманы» хаҡында һөйләгәндәре миндә халҡыбыҙҙың үткәндәрен өйрәнеү теләген уятты. Пушкиндың «Капитан ҡыҙы» һәм «Пугачёв болаһы тарихы» беҙҙең халҡыбыҙҙың тарихына ҡарата ҡыҙыҡһыныуымды ғашиҡ дәрәжәһенә тиклем үҫтерҙе... Атайым яғынан булған атай-олатайҙарым Пугачёв күтәрелешенә ҡушылған, был һуғыштың ҡаһармандарының береһе булған

Юлай улы Салауат ойошторған ғәскәрҙә вазифа биләгәндәр. Беҙ бәләкәй саҡта «Салауат батыр йырҙары»н белгән бер нисә ҡарт бар ине».

«Салауат батыр» драмаһы ана шул ерлектә, шулай уҡ Башҡорт драма театры һәм һәүәҫкәр артистар һорауы буйынса ижад ителә. 1919 йылда Стәрлетамаҡта тиҙ арала яҙылған биш шаршаулыҡ был пьеса Башҡорт театры сәхнәһендә лә, һәүәҫкәрҙәр тарафынан да ҡуйыла, шуларҙың береһендә автор үҙе лә ниндәйҙер ролдә уйнай. Әҫәр заманы өсөн яңылыҡ, рухландырғыс көс була. Уның нигеҙендә ҡуйылған спектаклдәр яулы героик заман өсөн ҡаһарманлыҡ, азатлыҡ рухы, легендар милли батырыбыҙ образы менән айырыуса актуаль була һәм заманса яңғырай.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ф. Сөләймәновтың «Салауат батыр» драмаһы, уның икенсе бер «Аҡшан батыр» пьесаһы кеүек үк, ваҡытында баҫылып сыға алмай ҡала, ҡулъяҙма хәлендә йөрөй торғас, юғалып ҡуя. Бәхеткә күрә, уны тарихсы Сәғит Мирасов табып алып, үҙенсә яңынан эшкәртә, бер аҙ тулыландыра. Драманың шул яңы варианты XX быуаттың 20-се йылдарында яңынан Башҡорт дәүләт драма театры сәхнәләрендә ҡуйыла. Аҙаҡ 1924 йылда ул С. Мирасов авторлығында Мәскәүҙә айырым китап булып баҫылып сыға. С. Мирасов уға яҙған баш һүҙендә «Фәтхелҡадир китабынан бер аҙ файҙаландым» тиһә лә, асылда, әҙәбиәт белгесе М. Х. Нәҙерғолов әйткәнсә, «әҫәргә әллә ни ҙур үҙгәрештәр индерелмәгән һәм уның тексы, структураһы төп нөсхәләгесә ҡалдырылған».

Ф. Сөләймәнов драмаһы үҙәгендә башҡорттарҙың Салауат батыр етәкселегендә Пугачёв яуына килеп ҡушылыуҙары һәм ҡыйыу һуғышыуҙары ваҡиғалары тора. Биш шаршауҙан торған тарихи пьесала Юлай менән Салауаттың был азатлыҡ яуына нисек әҙерләнеүҙәре, үҙ тирәләренә батыр ир-егеттәрҙе туплауҙары, Пугачёвҡа барып ҡушылыуҙары шаҡтай ентекле бирелә. Хәл-ваҡиғалар Юлай Аҙналиндың өйөндә, йәйләүҙәрендә, Пугачёв ставкаһында бара. Салауат Юлаев оҫта ойошторousы яу башлығы, ҡыйыу һәм аҡыллы йәш кеше, батыр зат булып күҙ алдына баҫтырыла. Атаһы Юлай Аҙналиндың башта икеләнеүҙәре, аҙаҡ, бөтәһен уйлап, яуға улы менән күтәрелеүе лә ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнә. Емельян Пугачёв образы, уның яҡын яуҙаш ярандары ла хәтерҙә ҡала. Әҫәрҙә драматургик яҡтан ярайһы ғына яҡшы эшләнгән көсөргәнешле сәхнә тамашалары байтаҡ.

Драмала крәҫтиәндәр һуғышы заманын тойҙорор өсөн файҙаланылған Пугачёв манифестарынан, төрлө фармандарҙан, тарихи йырҙарҙан, ҡобайырҙарҙан өҙөктәр, персонаждар телендә мәҡәлдәр, тапҡыр һүҙҙәр уңышлы ҡулланыла. Мәҫәлән,

Аҡбулат ҡарт батырлыҡ тураһында бына нимә ти: «Майҙандарҙа, туйҙарҙа алған батырлыҡ батырлыҡ түгел. Хәҙерге көндә ялман ҡылысты ҡулға алып, ил эйәртеп дошманға ҡаршы тороу – батырлыҡ. Сәсәнмен тип кем әйтмәй, дау килгәндә өнө юҡ, батырмын тип кем әйтмәй, яу килгәндә йүне юҡ, тигән боронғолар».

Йәки Салауаттың походҡа китер алдынан һөйләгән һүҙенә ҡобайыр юлдары бына нисегерәк йәтеш ҡушылып китә: «Һөйгән һылыуыңдың күҙҙәренән ҡанлы йәш түктермәй, һөйөклө ата-әсәңдең ҡайғы менән билен бөктөрмәй, ирек, илеңә тыныслыҡты анһат ҡына алып буламы һуң?!

Ялп-ялп иткән ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш булмаған?
Бүтәгәләй үлән, буҙ ялан
Кемгә түшәк булмаған?
Яғаһына ҡош оялап,
Яңағына себен-серәкәй балалап,
Ир башҡорттоң кәүҙәһе иле өсөн
Ҡай ерҙәрҙә ятып ҡалмаған?

Минең уйым хәҙерге көндә ике генә: дошманды еңеп, ярлы илемде ирекле итеү йә шул юлда ҡорбан булыу».

Батырҙарын яуға оҙатыусы ҡатын-ҡыҙҙар, уларға һәм Салауаттың үҙенә төбәп, бына ниндәй йыр-наказ әйтәләр:

Батша, баяр илеңде
Яу ебәреп ҡырҙырған,
Ҡатын-ҡыҙҙы ҡол итеп
Баярҙарға һаттырған.
Диңгеҙ булып беҙҙең ҡан
Башҡорт илен буяған,
Яндырылған ауылдар,
Башҡорт илен ут алған.
Эй, батырым, яуға бар,
Шуның үсен бөгөн ал,
Ир Юлайҙың балаһы,
Дошмандарҙы ҡыр ҙа һал!
Ялман ҡылысың ҡулға ал,
Илең өсөн дошманға
Ғәйрәт менән ҡурҡыу һал!

Ф. Сөләймәновтың Сәғит Мирасов тырышлығы менән бына шулай аяҡҡа баҫтырылған «Салауат батыр» драмаһының артабан үҙ традициялары барлыҡҡа килә. Ул сюжетҡа XX быуаттың 20-се йылдарында Дауыт Юлтый «Салауат менән Пугачёв» тигән драма яҙып, Салауат Юлаев тураһындағы драма әҫәрҙәре серияһын асып ебәрә. Уны аҙаҡ Ғәлимов Сәләм менән Баязит Бикбай «Салауат Юлаев» драмаһында, Мостай Кәрим «Салауат» трагедияһында өр-яңыса дауам итәләр.

## ҒИЛМИ-АҒАРТЫУ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

1925 йылда Төркиәгә килеп урынлашҡас, Фәтхелҡадир Сөләймәновтың әҙәби-ғилми эшмәкәрлегенең икенсе ҙур осоро башлана. Был осорҙа инде ул йәшәгән илен генә түгел, донъяға ҡараштарын, ижади-ғилми эҙләнеүҙәре йүнәлештәрен дә үҙгәртә. Хатта элекке исем-фамилияһын да алмаштырып, Абдулҡадир Инан тигән псевдонимлы кеше булып китә. «Мин хәҙер өс нәмәгә инанам, – ти ул. – Беренсеһе – ислам дине, икенсеһе – ғилем, өсөнсөһө – бөйөк төрк (төрки. – *Ғ. Ҡ.*) милләте. Инан тигән исемем ана шул өс көскә инаныуҙың билдәһе ул».

Абдулҡадир Инан Төркиәлә әҙәби ижад эшен ташлап, башлыса, фән эше менән шөғөлләнә, журналистикаға, публицистикаға ныҡлап тартыла. Ул ошо яңы осорҙан төркиәт ғилеме белгесе, ғалим кеше булып фәндә, тарихта билдәлелек ала. Быны уның 1968 йылда ижади-фәнни эшмәкәрлеге башланыуға 60 йыл тулыу һәм 80 йәше яҡынлау уңайы менән Анкарала баҫып сығарылған «Мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр» тигән 712 битле ҙур һайланма хеҙмәттәр йыйынтығы ла раҫлап тора.

Абдулҡадир Инан – төрки ғилеменең этнография, фольклор, археология, тарих, тел ғилеме, дин һәм инаныстар, фәлсәфә өлкәләрендә эҙләнеүҙәр алып барған атаҡлы тюрколог. Ул бигерәк тә этнография һәм фольклор өлкәләрен үҙ итә.

Фольклорсы булараҡ ғалим бөтәһенән дә элек төрки дастандарын өйрәнеүгә лә иғтибар бүлә. Ҡырғыҙҙарҙың иң арҙаҡлы ҡомартҡыһы «Манас» эпосына бағышланған унлап хеҙмәте бөтә донъя тюркологтарына киң мәғлүм. Төрки-уғыҙ ҡәбиләләренең уртаҡ йәдкәре «Китабе деде-и Ҡорҡут» («Ҡорҡот ата китабы») дастанын тикшереүгә лә ул ҙур көс һала. Үҙенең биш-алты хеҙмәтендә был дастандың башҡа төрки халыҡтарындағы «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс» кеүек дастандар менән уртаҡ мотивтары булыуын асыҡлай, башҡорт фольклорындағы Ҡорҡот ата риүәйәттәре менән сағыштырыуҙар килтерә.

Ф. Сөләймәновтың фәнни эштәре араһында төрки-башҡорт яҙма эпик ҡомартҡыларының береһе «Сыңғыҙнамә» дастаны хаҡындағы хеҙмәттәре диҡҡәтте ныҒыраҡ биләй. Уның йөкмәткеһен, ижад ителеү һәм таралыу географияһын, поэтикаһын өйрәнеп, ғалим: «Был әҫәр, һәр хәлдә, Башҡортостандың үҙәгендә, элекке хандарҙың йәшәгән төйәге Торатауҙа яҙылғаны аңлашыла. Торатауҙа һәм шул тарафҡа яҡын Юрматы, Тамъян, Бөрйән кеүек ҡәбиләләр хаҡында һүҙ барышы ла быны дәлилләй, – тигән фекергә килә. – Яҙма нөсхәләренең төп сығанағы көнсығыш һәм көнбайыш Башҡортостан булып, Сыңғыҙға бәйле риүәйәттәр ҙә быға нигеҙҙер». Әҫәрҙең яҙылыу датаһы 1500 йылдан да һуң түгел, ти ғалим.

Нуғай осоронда, XIV–XVI быуаттарҙа, ҡаҙаҡ, нуғай, башҡорт, ҡарағалпаҡ халыҡтары араһында ҡырҡ эпостан торор «Ҡырҡ нуғай батыры» тигән ҙур шәлкем киң таралған булған. Абдулҡадир Инан ошо дастандар серияһына әһәмиәт биргән, бигерәк тә «Сура батыр», «Ғәҙел солтан» дастандарын ентекле өйрәнгән. Уларҙың ҡаҙаҡ, башҡорт, ҡырым татарҙары, нуғай версияларын үҙ-ара сағыштырып ҡараған.

Төрки халыҡтарының иң боронғо дине шаманизмды өйрәнеү – Инандың иң инаныслы шөғөлө, ғилем тажы. Уның был өлкәләге эҙләнеүҙәренең һөҙөмтәһе булып «Тарихта һәм бөгөн шаманизм» тигән ҙур китабы һәм тиҫтәгә яҡын мәҡәләләре донъя күрә.

Абдулҡадир Инандың әҙәбиәт ғилеменән хеҙмәттәре лә хәтһеҙ генә. Ул боронғо төрки ҡомартҡыларынан Орхон–Йәнәсәй ташъяҙмаларын, «Диуану лөғәт әт-төрк» («Төрки телдәре һүҙлеге»), «Ҡотаҙғу белек» («Ҡот килтереүсе белем»), «Кодекус куманикус» ҡомартҡыларын, Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин» дастанын, Әбүлғази Баһадир хандың «Шәжәрәи әт-төрки» («Төркиҙәр шәжәрәһе») китабын әҙәбиәт йәдкәрҙәре булараҡ та киң байҡаған. Ҡаҙаҡ һәм ҡумыҡ әҙәбиәттәре тарихы хаҡында яҙған. Ҡаҙаҡтың Абай Ҡонанбаевы һәм Чоҡан Вәлихановы тураһында махсус әҙәби портреттары бар. Рус һәм төрөк әҙәбиәттәре буйынса күҙәтеүҙәр яһаған.

Беҙҙең өсөн шуныһы ла мөһим: Абдулҡадир Инан һәр бер мәҡәләһендә тиерлек йә башҡорт тарихынан, йә этнографияһынан, йә фольклорынан мәғлүмәттәр килтерә, башҡорт тематикаһына ҙур ғына урын бирә. Ә ғилми баҫмаларҙа, журналдарҙа башҡорт тарихы, этнографияһы, фольклоры, әҙәбиәте тураһында махсус мәҡәләләре әллә ни хәтле: «Башҡорт тарихынан», «Башҡорттарҙың рус колонизацияһына ҡаршы көрәше тарихынан», «А. Чулошников. Восстание 1755 г. в Башкирии», «Башҡорттарҙа шаманизм ҡалдыҡтары» һ. б. Мәҫәлән, телгә алынған был мәҡәләләрҙең һуңғыһында ул башҡорттарҙа әле һаман йәшәп килгән ҡайһы бер йолаларҙың, инаныстарҙың, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең боронғо дин – шаманизм менән бәйле булыуын ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр менән иҫбатлап бирә. Уның «Төрк туйҙарында экзогамия[8] эҙҙәре» тигән хеҙмәтендә инде беҙ иғтибарҙы йәлеп итерҙәй ошондай күренеште һүрәтләгән юлдарҙы осратабыҙ: «Башҡорт ҡыҙҙары туйҙың аҙаҡҡы көнөн, йәғни ҡыҙҙың кейәү ауылына китәсәге көндө, ҡайғылы көнгә әйләндерәләр. Үлеләргә әжит (некролог) һөйләгән кеүек ғәйәт әрнеүле аһәң

---

[1] *Экзогамия* – бер ырыу эсендә үҙ-ара өйләнешеүҙе тыйған йола.

менән ҡырҡ-илле ҡыҙ бер ауыҙҙан бына шулай итеп халыҡ йырын йырлай:

Ебәк билбау, ҡондоҙ бүрек
Һин алдырҙың, атаҡай!
Алты ала байталға
Һин һатҡанһың, атаҡай!
Ебәк шаршау, төлкө тун
Һин алғанһың, инәкәй!
Алты ала һыйырға
Һин һатҡанһың, инәкәй!..

Ф. Сөләймәнов Башҡортостанда мөғәллимлек иткән йылдарында башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен байтаҡ яҙып алған, сәсәндәр менән осрашҡан. Шул материалдарын ошо рәүешле үҙенең хеҙмәттәрендә килтергән, башҡорт фольклорына, этнографияһына киң күҙәтеүҙәр яһаған. Араларында фольклорсыларыбыҙға билдәле булмаған үтә әһәмиәтле факттар, өлгөләр байтаҡ. Әйткәндәй, 1943 йылда ғалим башҡорт туй йолаларына махсус арналған «Башҡорт дүгүне» («Башҡорт туйы») тигән хеҙмәтен баҫтырып сығарған.

Абдулҡадир Инан – рус, ғәрәп, фарсы, немец һәм төрки телдәрен яҡшы белгән, төп сығанаҡтар, текстар менән ғәҙәттә оригиналда эш иткән полиглот ғалим. Был иһә уның ғилми хеҙмәттәренең әһәмиәтен бермә-бер күтәрә. Ул совет ижтимағи фәне, бигерәк тә рус көнсығыш ғилеме хеҙмәттәре менән даими танышып барған. Үҙенең хеҙмәттәре төрөк, немец, француз, рус, серб, башҡорт һәм башҡа телдәрҙә донъя күргән.

**Ижадының әһәмиәте**

Фәтхелҡадир Сөләймәнов, фәнгә Абдулҡадир Инан исеме менән ингән ғалим-әҙип тураһында Европа һәм Азия илдәренең белешмә китаптарында, гәзит-журналдарында, ғилми баҫмаларҙа мәҡәләләр, хәтирәләр, рецензиялар, библиографик мәғлүмәттәр ярайһы күп баҫылған. Уның, нигеҙҙә, тарихи-сағыштырмаса ысул менән яҙылған төркиәт ғилеме – төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы, инаныстары, мәҙәниәте, әҙәбиәте, халыҡ ижады, телдәре буйынса фәнни хеҙмәттәре халыҡ-ара ҙур әһәмиәткә эйә. Ә инде әҙәби әҫәрҙәре Ф. Сөләймәновтың үҙ ижад йөҙө, үҙ ижад манераһы булыуы тураһында һөйләй. XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә милли тематиканың көсәйеп, халыҡ тормошон, уның үткәнен һәм бөгөнгөһөн сағылдырыуҙың, киләсәген ҡайғыртыуҙың романтик юҫыҡта ла, реалистик йүнәлештә лә баҙыҡланып китеүендә, художестволы һүрәтләүҙең яңы алым-саралары ишәйеүендә, һис һүҙһеҙ, Ф. Сөләймәновтың да роле бар.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Фәтхелҡадир Сөләймәновтың тормош юлы хаҡында һөйләгеҙ. Ни өсөн бик күп йылдар уның исеме һәм әҫәрҙәре тыйылып килгәнлеге? 2. Ф. Сөләймәновтың башҡорт хәрәкәтендә ҡатнашыуы һәм Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә булыуҙары тураһында һөйләгеҙ. 3. Ф. Сөләймәнов шиғриәтендә башҡорт темаһының сағылышы. 4. Ф. Сөләймәнов хикәйәләренең идея йөкмәткеләрен асыҡлағыҙ. «Тимербай ҡурайсы» хикәйәһенең сюжетын ҡыҫҡаса һөйләгеҙ, был хикәйә аша автор нимә әйтергә теләгәнен аңлатығыҙ. 5. «Салауат батыр» драмаһын уҡып сығып, уның тураһында тыуған уй-фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. 6. Ф. Сөләймәнов – Абдулҡадир Инандың ғилми эшмәкәрлеген ҡылыҡһырлағыҙ.

# МӘЖИТ ҒАФУРИ

## (1880 – 1934)

Мәжит Ғафури – бөтә аңлы ғүмерен ябай халыҡтың үйтеләктәрен, ынтылыштарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшкә арнаған, шул юлда ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән, башҡорт әҙәбиәтенең халыҡсан-демократик юсыҡта үсешенә ифрат ҙур өлөш индергән, халыҡтың тәрән ихтирамын яулаған яҙыусы. Тикмәгә генә уға «Башҡортостандың халыҡ шағиры» тигән юғары исем тәү башлап бирелмәгән.

### ТОРМОШ ЮЛЫ

Мәжит Ғафури 1880 йылдың 3 авгусында Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (Башҡортостандың хәҙерге Ғафури районы) Еҙем-Ҡаран ауылында хәлфә ғаиләһендә тыуған. Атаһы Нурғәни оҫта булған, кистәрен ауылдаштарына китаптар уҡыған, хикәйәләр һөйләгән. Ул умартасылыҡ эше менән яратып шөғөлләнгән.

Мәжит бик зирәк бала була, бик йәшләй уҡырға өйрәнә. Башланғыс белемде атаһынан ала. 1893 йылдың көҙөндә уны Еҙем-Ҡарандан 3 саҡрым алыҫлыҡтағы Оло Үтәш ауылындағы төплөрәк белем биргән мәҙрәсәгә уҡырға ебәрәләр. Сит ауылда уҡыуҙың тәүге айҙарында уҡ үҫмер малайға ҙур ҡайғы килә: ҡапыл ауырып, атаһы Нурғәни хәлфә үлеп китә. Март айында шағирҙың әсәһе лә үлә. Мәжиткә Үтәш мәҙрәсәһендә уҡыу ауырлаша. Уға байыраҡ шәкерттәрҙең аштарын бешереп, самауырҙарын ҡуйып, бай балаларына китаптар күсереп яҙыу, йәй-көҙҙәрен байҙарға ялланып эшләү менән көн күрергә һәм уҡырға тура килә.

1896 йылдың көҙөндә Мәжит Үтәш мәҙрәсәһен ҡалдырып, Өфөләге «Ғосмания» мәҙрәсәһенә килә, ләкин унда аҡсаһыҙ уҡырға мөмкин булмай. Мәжит ҡаланан 20 саҡрымдағы Ҡыйышҡы мәҙрәсәһенә килеп урынлаша. Тағы ла бай шәкерттәргә

аш-һыу әҙерләп йәшәү башлана. Аслыҡ-яланғаслыҡ Мәжитте, уҡыуын ташлап, тыуған ауылына ҡайтырға, унда хәлфә ярҙамсыһы булып эшләй башларға мәжбүр итә. Тиҙҙән ул Урал тауҙары араһындағы Лапышты суйын заводы төҙөлөшөнә китә, ат менән балсыҡ ташыу эшенә яллана. Көҙ көнө тағы ла ауылға ҡайтып, балалар уҡыта. Мәжит Ғафури йәштән үк шулай, Горький һымаҡ, михнәтле тормош «университеттары» үтә башлай.

1898 йылдың көҙөндә 18 йәшлек Мәжит, Урал тауҙары аша 450 саҡрым йәйәү юл үтеп, Троицк ҡалаһына килә, Зәйнулла ишан мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Йәйҙәрен ҡаҙаҡ далаларына китеп, балалар уҡыта, миллионер Рәмиевтәрҙең алтын приискыларында эшләй. Был мәҙрәсәлә уның тәүге ижади аҙымдары башлана. 1902 йылдың ҡышында яҙған «Ишан шәкерттәренә» исемле беренсе шиғырын шәкерттәр ҡулдан ҡулға күсереп йөрөтәләр. Ишан яҡлы шәкерттәр йәш шағирҙы тотоп туҡмайҙар. Шул уҡ йылдың йәйендә ҡаҙаҡ далаларында мулдәкә булып йөрөгән сағында ул үҙенең «Фәҡирлектә үткән тереклек» тигән тәүге проза әҫәрен яҙа.

1902 йылдың көҙөндә һалдатҡа ҡаралырға Мәжит Ғафури Силәбе аша Себер тимер юлы менән ҡайта. Тәү тапҡыр тимер юлын күреү Ғафуриҙа онотолмаҫ тәьҫир ҡалдыра, һәм ул тиҙҙән «Себер тимер юлы» тигән шиғырын яҙа.

1904–1905 йылдарҙа Ғафури уҡыуын Ҡазандағы «Мөхәммәҙиә» мәҙрәсәһендә дауам иттерә. 1905 йылдағы революцияны йәш шағир шунда ҡаршылай. Революцион хәрәкәт шауҡымында барлыҡҡа килгән милли матбуғатта күпләп яҙыша. 1906 йылдың көҙөндә ул Өфөгә ҡайта, 1906–1908 йылдарҙа ундағы киң танылыу алған «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Ошо йылдарҙан башлап ул үҙенең бөтә ҡалған ғүмерен Өфө ҡалаһында үткәрә.

Беренсе рус революцияһы еңелеп, реакция башланған ауыр көндәрҙә М. Ғафури Өфө типографияһында корректор булып эшләй, эшселәр менән яҡындан аралаша һәм дуҫлаша. Батшалыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән шиғырҙары өсөн 1911 йылда уны полиция күҙәтеүе аҫтына алалар. Был осорҙа инде шағирҙың китаптары Өфөлә лә, Ҡазанда ла сығып торған була. Бер үк ваҡытта Ғафури халыҡ тормошон сағылдырған хикәйәләр ҙә, повесть та яҙа. Октябрь революцияһын ул хеҙмәтсән халыҡ тормошо менән тығыҙ бәйләнгән танылған шағир һәм прозаик булып ҡаршылай.

## ӘҘӘБИ ИЖАДЫ

**Тәүге әҫәрҙәре**

М. Ғафуриҙың 1902 йылда яҙылған тәүге проза әҫәре – «Фәҡирлектә үткән тереклек» хикәйәһе 1904 йылда Ҡазанда айырым китап булып баҫылып сыға. Үҙенең темаһы һәм тормош материалы менән был әҫәр башҡорт әҙәбиәтендә яңы һүҙ, яңы күренеш була. Уның

менән йәш яҙыусы башлап прозабыҙға бөтөнләй яңы герой – тормош төпкөлөнә ташланылған «бәләкәй кеше» образын алып килә. Хикәйәлә ауыл ярлыһы Ниғмәтулла менән уның ҡатыны Сәрүиҙең талаш-тартыш, янъял эсендә үткән ҡуңалтаҡ тормошо трагикомик ситуацияларҙа һүрәтләнә. Әммә ундағы көлөү – йәш аша көлөү. Фәҡирлек арҡаһында һәр саҡ көсөргәнешле атмосферала йәшәүсе Ниғмәтулла менән Сәрүиҙең эш хаҡы иҫәбенә алынған бер генә ус ярманан бешерелгән бутҡаны ла ашай алмай ҡалыуҙары үҙе үк бәләкәй бер трагедия. Ошо ваҡиға тирәһендә геройҙар яҙмышының трагиклығын күрһәтеүсе башҡа көлкөлө һәм ҡайғылы ваҡиғалар бер-бер артлы ойоша. Ниғмәтулла йортона йомош менән ингән баланың да, сыҡҡан ғауғаны туҡтатырға килгән кешеләрҙең дә күңелһеҙ һәм көлкөлө мажаралары уҡыусыла фәҡирлектә йәшәүселәрҙе йәлләү тойғоһо уята.

Әҫәр геройҙарының артабанғы яҙмышы тағы ла аяныслыраҡ. Ниғмәтулла, яҙғы буранда өйөнә аҙыҡ алып ҡайтып килгәндә, иҫерек килеш үлеп ҡала, Сәрүи өйҙән өйгә йөрөп хеҙмәт итеп тамаҡ туйҙырыусы Әхмәтғәлигә тормошҡа сыға, әммә насар холҡо арҡаһында, уның менән йәшәп китә алмай, үҙен тағы ла ауырыраҡ һәм өмөтһөҙөрәк яңғыҙаҡ тормошҡа дусар итә.

Яҙыусы үҙ геройҙарының ҡот осҡос хәлен реалистик планда һүрәтләй, әммә социаль тигеҙһеҙлектәрҙең сәбәптәрен, уларҙы бөтөрөү юлдарын күрһәтеп бирә алмай, бөтәһен дә Хоҙайҙың биреү-бирмәүенә, унан да бигерәк кешенең наҙанлығына, тәрбиәһеҙлегенә ҡайтарып ҡалдыра. Был – М. Ғафуриҙың мәғрифәтселек идеяларының хикәйәлә үҙенсәлекле сағылыуы ине.

Хикәйә әҙәбиәт уҡыусылар араһында тиҙ популярлыҡ ҡаҙана. Шунан ҡурҡып булһа кәрәк, батша цензураһының ҡыҫымы аҫтында уның икенсе баҫмаһы 1908 йылда «Араҡы эсеүҙең бәләһе» исеме менән сығарыла.

М. Ғафури тәүге шиғри әҫәрҙәрендә лә мәғрифәтселек идеяларын йырлап сыҡты, ҡан-ҡәрҙәштәрен белем алырға, замандан артҡа ҡалмаҫҡа саҡырҙы. Башҡа мәғрифәтселәр һымаҡ, йәмғиәт үҫешен артыҡ ябайлаштырып, бер ҡатлы аңлап, бары ошо юл менән тормоштағы ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы, тигеҙһеҙлектәрҙе бөтөрөү мөмкин тип уйланы.

**«Себер тимер юлы» йыйынтығы**

Был мәҙхиә М. Ғафуриҙың 1904 йылда Ырымбурҙа «Себер тимер юлы, йәки Әхүәле милләт» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығында донъя күрә. Әйтергә кәрәк, йыйынтыҡтағы әҫәрҙәрҙә атаҡлы мәғрифәтсе шағир Мифтахетдин Аҡмулла йоғонтоһо, Аҡмулла стиле ярылып ята. Бына уға дәлил булырҙай ике генә миҫал:

Ғилемеңдең ҡәҙерен бел, хасил булһа,
Һәр нәмә ҡиммәт була, аҫыл булһа...
Һәр тарафҡа ғаҡылды йөрөтөп ҡарап,
Файҙалы шәй (нәмә) булһа, ҡалма ҡороҡ һалмай...
Һөнәрһеҙ йөрөүебеҙ муйын һоноп,
Беребеҙ унда, беребеҙ бында аҙып-туҙып...

*(«Ғилем»)*

Һәр кемдең сырхауы бер ғиләттер (кәмселектер),
Тотош милләт сырхауы яһиллыҡтыр (наҙанлыҡтыр).
Һәр милләттең дауаһы булған кеүек,
Милләттең дә дауаһы ғалимлыҡтыр.

*(«Вә иннә миннә әш-шиғри лә-хикмәтин» – «Ысындан да шиғырҙа хикмәт бар»)*

«Мәғрифәт бабтарын (ишектәрен) беҙ асайыҡ, ... тәрәҡҡиғә (прогресҡа) беҙ баҫайыҡ», «милләттең дауаһы – аҡыл-һөнәр, ... тәрбиә, тәрбиә, тәрбиәлер», тип оран һалған шағир йыйынтығында төп урынды алған «Беренсе оҙон юл донъяла Себер тимер юлы» тигән әҫәрендә, наҙанлығы, вайымһыҙлығы арҡаһында, «туҙан кеүек, туҙа барған» халҡының сәменә тейеү, уны уйландырыу, фәһем, ғибрәт алдырыу һәм алға әйҙәү маҡсатында антитеза алымына мөрәжәғәт итеп, «һәр фәндән мәктәп асҡан, ... төрлө фәндәрҙән ғилем сәскән, ... һәр тарафҡа фонарь яндырған, ... фабриктар, ҡәрханалар (заводтар) төҙөгән» Европаға, «йыһанда мәшһүр Урал тауын» икегә ярып, «Азия менән Европаны тоташтырған» тимер юлды һалған, «олуғ шәһәрҙәр» төҙөгән, «Себерҙе баҡса ҡылған» Рәсәйгә дан йырлап сыға:

Беҙҙең был Русия һиммәт итте,
Һиммәте арҡаһында алға китте...
Русияға ҡәҙәри хәл мәдех кәрәк,
Булған өсөн баһадир бигерәк һирәк.

Шағир Тыуған иленең ҙурлығы, көс-ҡеүәте, фәнни-техник ҡаҙаныштары, төрлө халыҡтарҙың дуҫлашып йәшәүе менән ғорурлана. Был яңы ғына әҙәбиәткә килгән йәш шағирҙың үҙ заманының алдынғы идеяларын сағылдырыуы ине.

**Беренсе рус революцияһы осорондағы ижады**

1905 йылғы революцияға М. Ғафури ҙур өмөт менән ҡарай, уны «Шатлыҡ шиғыры» менән ҡаршылай. Был осорҙо ул «һәр йәһәттән хөрриәттәр асылған» заман тип атай. Батша хөкүмәтенең аҙ-маҙ демократик саралары өсөн шатлана, бигерәк тә халыҡтың күҙен буяу өсөн саҡырылған I Думаға һәм 17 октябрь манифесына ныҡ ышана.

Һуңыраҡ М. Ғафуриҙың донъяға ҡарашы үҙгәрә. Ул батшалыҡтың халыҡты алдауына төшөнә, синыфтар араһындағы

айырманы, ҡапма-ҡаршылыҡты аңлай башлай. Ғафуриҙың азатлыҡҡа ынтылышы, синфи аңының үҫә барыуы бигерәк тә уның «1906 йылдан 1907 йылға васыят» тигән васыятнамәһендә, «1907 йылдың яуабы» исемле мәктүбендә асыҡ күренде. Уларҙа халыҡ массаһының революцион һәм милли аңы күтәрелеше, азатлыҡ көрәше әүҙемләшеүе шатлыҡлы тондарҙа сағылыш таба. Беренсе әҫәр баштан алып аҙаҡҡаса панегирик рух менән һуғарылған. Шағир революцияның халыҡҡа алып килгән азатлығын юғары баһалай, уны «хөрриәт ҡоштары», «ҡәҙер кисе», «яңы бер нур», «һәр тарафҡа асылған юл» менән тиңләй. Шул уҡ ваҡытта ул «күп эштәрҙең тамам булмай тороп ҡалыуын», «ҙур ағасты ауҙарыуы еңел түгеллеген» яҡшы аңлай, шуға күрә 1907 йылда башлаған ҙур эштәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн көрәште дауам иттерергә саҡыра. 1907 йыл да үҙенең 1906 йылға яуап хатында:

Үҙегеҙгә бик мәғлүм «ҙур кешегә»
Хәл ҡәҙәре батырырбыҙ үткер теште...
Башҡа булыр беҙ етенсе йылдың эше,
Ныҡ төшөнөр хәҡиҡәткә барса кеше.
Ҡан эсергә һөжүм иткән бүреләрҙең,
Туҡтамаһа, ошбу йылда һыныр теше, –

тип, «тигеҙлек нурын ергә таратыу» өсөн көрәш эстафетаһын ҙур яуаплылыҡ менән ҡабул итеүен белдерә. Шағир киләсәккә өмөт менән ҡарай. Уның «ҙур кеше» тигәне – батша, самодержавие. Шағир инде революцияның маҡсаттарын яҡшы аңлай, халыҡты ана шул самодержавиены ҡолатырға, тормошто үҙгәртеп ҡорорға саҡыра:

Донъяға кейҙерербеҙ башҡа күлмәк,
Ҡайғы-хәсрәт һуңы булыр – уйын-көлмәк.

Шағирҙың революцион-демократик рухтағы был әҫәрҙәре хеҙмәтсәндәр күңеленә бик тиҙ барып етте. Улар батша ялсылары, цензор һәм жандармдарҙың да иғтибарын тартмай ҡалманы. Һуңыраҡ М. Ғафури полиция күҙәтеүе аҫтына алынды.

**Реакция йылдарындағы ижады**

Беренсе рус революцияһы еңелеп, зыялылар араһында тарҡалыу, тайшаныуҙар башланғанда ла Мәжит Ғафури хеҙмәтсән халыҡ менән бергә булды. Төшөнкөлөккә бирелгән саҡтары булғылап алһа ла, халыҡ менән бергә йәшәне, уның моң-зарын, ҡайғы һәм ынтылыштарын йырланы. Был хаҡта шағир «Үҙем һәм халҡым» исемле шиғырында:

Бер аҙым алға баҫам да,
Әйләнәм мин артыма,
Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,
Күҙ һаламын халҡыма, –

тип яҙҙы. «Мин ҡайҙа?» исемле икенсе бер шиғырында ул үҙенең иҙелеүсе синыф кешеләре менән яҡынлығы, рух яғынан берҙәмлеге хаҡында тағы ла асығыраҡ итеп әйтеп бирҙе:

Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңло күп була,
Мин шулар янында булам, улар менән килешеп була.
Юҡ уларҙа төрлө ҡатлау, юҡ уларҙа эс сере,
Тыштары керле, вә ләкин юҡ уларҙа эс кере...

Реакция осоронда Ғафури синфи тигеҙһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте реалистик алымдар менән тәнҡит иткән күренекле әҫәрҙәр яҙҙы. Тормошто шулай сағылдырыу методын тәнҡитле реализм тип атайҙар. «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» повесы, «Баҙарға сыҡтым» шиғыры Мәжит Ғафуриҙың ошо метод менән яҙылған иң яҡшы әҫәрҙәре булды.

**«Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын»**

М. Ғафуриҙың реалистик хикәйәләү тәрәнлеге, тәнҡит рухының киҫкенлеге, образдарҙың тормошсанлығы менән айырылып торған әҫәрҙәренең береһе булып «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» (1907) повесы тора. Ул башҡорт әҙәбиәтендә тәнҡитле реализм методына юл ярыусы әҫәр.

Әҫәрҙең геройҙары – тормош төпкөлөнә ташланған кисәге ауыл, бөгөнгө ҡала ярлылары. Повестың төп геройы – Шәриф, ике йәштән етем ҡалып, фәҡирлектә үҫкән, ғүмергә «ҡара эш» эшләгән, ләкин рәхәт күрмәгән кеше. Бер телем икмәклек кенә булһа ла эш табыу өсөн ҡала уртаһындағы баҙарҙа үҙәк өҙгөс ҡышҡы һалҡындарҙа ла, көҙгө ямғырҙарҙа ла көнө буйы «дер-дер ҡалтырап тороусы» Шәрифте автор ҡыҙғанып, симпатия менән һүрәтләй. Шәриф – эшһөйәр, ғаиләһенә тоғро, ярлыларға ярҙам итергә әҙер торған саф намыҫлы кеше.

Шәрифтең ҡатыны Бәҙриямал да әҫәрҙә ауырлыҡтарға түҙеүсән, сабыр, хәстәрлекле әсә итеп һүрәтләнә. Ул тормоштағы иң ауыр хәлгә – теләнсе булыуға тиклем барып етә, ләкин шунда ла һуңғы һыныҡтарын эскесе һәм наҙан ир менән йәшәп ыҙа сиккән бәхетһеҙ ҡатын Йәмилә менән бүлешә. Улай ғына ла түгел, Бәҙриямал менән Шәриф үҙҙәренән дә меҫкенерәк хәлгә тарыған, ире ташлап киткән ауырлы ҡатынды ысын күңелдән йәлләп, үҙҙәренә өйҙәш итеп индерәләр. Шул уҡ ваҡытта Йәмиләнең бай апаһы уны ҡатҡан икмәк киҫәктәре биреп ҡыуып сығара.

Повесть, бер яҡтан, ғәҙелһеҙлек донъяһына, уның серек мораленә киҫкен протест һүҙе, ә икенсе яҡтан, хеҙмәт кешеһенең гуманлығына дан йыры булып яңғырай. Ул трагик сиселеш менән тамамлана. Йәмилә балаһын таба алмай, күҙҙәренән ике генә тамсы йәшен – изге күңелле кешеләргә рәхмәт һәм рәхимһеҙ тормошҡа ләғнәт тойғоларын тамыҙып, үлеп китә. Ошо

уҡ йортта ҡаты ауырыуҙан һуң ғаилә башлығы Шәриф тә ғәҙелһеҙ донъяны ҡалдырып китә. Унының ҡатыны өс балаһы менән ауылға ҡайтып китергә мәжбүр була. Уларҙы артабан ниндәй яҙмыш көтәсәген күҙаллауы ауыр түгел.

Үҙенең был повесы менән М. Ғафури социаль тигеҙһеҙлекте, буржуаз йәмғиәттең мораль йөҙөн бөтә дөрөҫлөгөндә асып биреүсе, йәшәп килгән йәмғиәт тәртиптәрен аяуһыҙ фашлаусы реалист яҙыусы булыуын сағыу күрһәтте. Унының ярлыларға симпатияһы ни тиклем ҙур булһа, халыҡты иҙеүселәргә асыу-нәфрәте шул тиклем оло.

**«Баҙарға сыҡтым»**

М. Ғафуриҙың тәнҡитле реализм позицияһында торған әҙип булыуы социаль ғәҙелһеҙлектең киң картинаһын сағылдырған «Баҙарға сыҡтым» (1907) шиғырында ла асыҡ күренә. «Хәсрәт баҫҡан моңло күңелен асырға» теләгән шағир, баҙарға сығып, социаль тигеҙһеҙлек күренештәрен аҙым һайын осрата. Бына түҙеп торғоһоҙ һыуыҡта ҡабаҡ янында «һары боҙға аяҡ баҫып», «шап-шоп итеп шешә асып» тороусылар. Уларҙың балалары ас ята. Бында бер тин һорап, арттан килеүсе теләнсе ҡыҙ ҙа, шағирҙың уңы-һулы хәйерсегә тулып китеү ҙә, фәҡирлектән быларҙа һис бер әҙәп булмау – бөтәһе лә йөрәк өҙгөс итеп һүрәтләнгән.

Шағир алдына был фәҡирҙәрҙең «шулай насар булыуына, уйлағыҙ, әфәнделәр, кемдәр сәбәп?» тигән ҙур һорау килеп баҫа. Ул үҙе ошо һорауға яуап та бирә. Бына ҙур урам. Унда бөтөнләй башҡа күренеш. Бөтәһе лә бай, «эш булмағас, йөрөй былар ҡабаланмай...» Улар шул тиклем бай, ә ул байҙарҙың, ти шағир, «тик бер атын һатһаң, фәҡир ун йыл ашар...» Социаль тигеҙһеҙлек шиғырҙа бына шулай контраст картиналар аша бирелә.

**Мәҫәлдәре**

Үҙ ижадында Мәжит Ғафури форма һәм жанр төрлөлөгөнә лә ынтылды, күп эҙләнде. Унының эҙләнеүҙәре мәҫәлдәр яҙыуҙа ла күренде. 1913 йылда ул 20 мәҫәлен «Әмҫәл» («Мәҫәлдәр») тигән баш аҫтында айырым йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығарҙы. Мәҫәлдәрендә шағир заманының төрлө проблемаларына мөрәжәғәт итте. Ул наҙанлыҡты, кешенең кәмселектәрен тәнҡитләгән *әхлаҡи-көнкүреш* мәҫәлдәре менән бер рәттән («Балыҡтар һәм Ҡыҫала», «Йүләр һәм ынйы», «Ишәк», «Бабай менән Айыу» һ. б.), йәмғиәттәге кире күренештәрҙе, социаль ғәҙелһеҙлекте, милли-колониаль иҙеүҙе фашлаған, халыҡ-ара хәлдәргә арналған *социаль-сәйәси пландағы* мәҫәлдәр ҙә яҙҙы («Әтәс менән Һандуғас», «Бесәй менән сысҡандар», «Энә менән Еп», «Һарыҡты кем ашаған?» «Үгеҙ менән Бүре», «Януарҙарға килгән үләт», «Көс», «Ҡоштарҙың батша һайлауы» һ. б). Мәҫәлән, «Әтәс менән Һандуғас» мәҫәлендә кешеләрҙең тормош маҡсатын, йәшәү йәмен ике төрлө аңлауы

күрһәтелә. «Тәмле орлоҡтар ашап, рәхәтлек менән йәшәп» көн күреүсе Һандуғас ер ҡаҙып, ыҙа сигеп, сүплек башын аҡтарыусы Әтәстән көлһә лә, уға ҡарағанда бәхетһеҙерәк, сөнки ул ирекһеҙ, ситлектә йәшәй.

Йәки бына «Энә менән Еп» мәҫәлен алып ҡарайыҡ. Энә бил яҙмай, көнө-төнө эшләй, уның тырышлығы арҡаһында йөҙәрләгән кешеләр матур, хатта алтын нағыштар менән сигелгән атлас кейеп йөрөй, әммә уның үҙенә берәү ҙә иғтибар итеп бармай, сөнки ул бөтөнләй яланғас.

«Ишәк», «Кәзә тәкәһе менән көҙгө», «Бабай менән Айыу», «Маймыл менән күҙлектәр» мәҫәлдәрендә артта ҡалғанлыҡ, наҙанлыҡ фаш ителә. Кеше хеҙмәтен үҙләштереп, үҙен ҙур эшем эйәһе итеп күрһәтергә ынтылыусыларҙы, милли һәм синфи иҙеүҙәрҙе Ғафури айырыуса күрә алмай. «Ике себен», «Ҡоштарҙың батша һайлауҙары», «Януарҙарға килгән үләт», «Һарыҡты кем ашаған?» кеүек мәҫәлдәр – быға бик асыҡ миҫал. Уларҙың бөтәһе лә йөкмәткеләренең тапҡырлығы, халыҡсан тел, аныҡ образдар, ҡыҫҡалыҡ һәм асыҡлыҡ, һүрәтләү сараларының һәм интонацияларҙың төрлөлөктәре менән айырылып тора. Шуға ла уларҙы әҙәбиәт һөйөүселәр яратып ҡаршы алған.

**Беренсе донъя һуғышы йылдарындағы ижады**

Халыҡтың ҡайғыһы һәм шатлығы менән йәшәгән Мәжит Ғафури 1914 йылдың йәйендә башланған донъя һуғышын ил өҫтөнә төшкән оло бәхетһеҙлек тип ҡабул итте. Башта ул һуғышҡа Алла тарафынан ергә ебәрелгән ҙур яза тип ҡараһа, һуңыраҡ был яуызлыҡтың һәм ғәҙелһеҙлектең «көслөләр», «күҙ йәштәрен түктереүселәр», «ҡан эсеүселәр» – иҙеүсе синыфтар арҡаһында килгәнлеген аңлай («Фитрәт заманы», «Ҡиәмәт» шиғырҙары).

Был осорҙа шағир хеҙмәтсәндәрҙең күңел төшөнкөлөгөн, аһ-зарҙарын сағылдырған байтаҡ шиғырҙар («Күңелһеҙ бер көндә», «Күңелһеҙ минуттар», «Ила!») яҙҙы. Ләкин ул быны менән генә сикләнеп ҡалманы. Ғафури, гуманист шағир булараҡ, империалистик һуғышҡа ҡаршы өндәгән, ирек өсөн көрәшкә сығырға саҡырған һуғышсан шиғырҙар ҙа ижад итте. «Ул кем?» (1915) исемле шиғырында шағир, һуғышҡа ҡыуып индерелгән аңһыҙ һалдатҡа уның дошманы кем булыуы хаҡында ҡыйыу һорау ҡуйып, империалистик һуғыштың асылын фашланы. Һалдаттың дошманы Көнбайыштан үҙе кеүек үк һуғышҡа ҡыуып килтерелгән һалдат түгел, ә уның иркен тартып алып, һуғышҡа ҡыуған «ҡан эсеүсе» иҙеүселәр. Шағир һалдатҡа туранан-тура өндәшә:

Мин һорайым һинән хәҙер: үлтереп үс ҡандымы?
Һин уны сәнсеп үлтергәс, донъя иркен ҡалдымы?

Шунда уҡ автор ҡырҡа яуап та бирә, киҫкен һығымта ла яһай:

Юҡ!
Һин шулай ҡоллоҡта йөрөһәң, донъя киң булмаҫ һиңә,
Барса эштәрҙән элек баш бул, туған, үҙ иркеңә...

Һалдатты үҙ иркенә баш булырға саҡырыу шағирҙың империалистик һуғышҡа ҡаршы сығыуының юғары нөктәһе ине. Уның «Көс» (1916) исемле шиғыры ла шундай уҡ юғарылыҡтағы әҫәр булды. Унда шағир гел кеше хаҡын ашап, ҡан эсеп, күҙ йәштәре менән йыуыныусы ҡара көстөң – батшалыҡтың бер саҡ емерелеп, көлгә әйләнәсәгенә ышаныс белдерҙе.

«Юҡтырһың да, Алла!» (1915) мәктүбе инде Ғафуриҙың донъя һуғышы осоронда яҙған иң көслө әҫәре булды. Был осор әҙәбиәтендә шағир беренсе булып Алланың барлығын шик аҫтына ҡуйҙы. Аллаға мөрәжәғәт формаһында яҙылған шиғри хатта (мәктүптә) ғәҙелһеҙлек, алтын-көмөшкә табыныу, ерҙә татыулыҡ булмау фашлана:

Юҡтырһың да, Алла!.. Әгәр булһаң,
Сабыр итмәҫ инең был эшкә,
Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ
Инең ерҙә алтын, көмөшкә...

Күрер инең көсһөҙ бәндәләрҙе,
Ярҙам итер инең уларға,
Ирек бирмәҫ инең көслөләргә
Көсһөҙҙәрҙе былай таларға.

Был протест шиғыры ул заман йәмғиәтендә ҡеүәтле шартлау төҫлө яңғыраны. Өфө, Ҡазан, Ырымбур һәм башҡа ҡала, ауыл мәсеттәрендә «диндән яҙған» Ғафуриҙы ҡарғап вәғәздәр һөйләнелде. Ырымбурҙа сыға торған «Дин вә мәғишәт» исемле журналда шағирҙы мыҫҡыллап мәҡәлә һәм шиғырҙар баҫылды.

**Октябрь революцияһы алдынан**

1917 йылдың 27 февралендә (12 мартта) Рәсәйҙә буржуаз-демократик революция еңде, тәхетенән батша бәреп төшөрөлдө. Власть Ваҡытлы буржуаз хөкүмәткә күсте. Илдәге был тарихи үҙгәреште Мәжит Ғафури «Хөрриәт иртәһе» исемле мәҙхиәһе менән ҡаршыланы:

Әй, халыҡ шат!.. Һәммәһе уйнай, көлә...
Ҡаршынан балҡып Ҡыҙыл байраҡ килә!..
Эшселәрҙең ирҙәре һәм ҡыҙҙары
Йырлайҙар берҙәм азатлыҡ йырҙары...

Ләкин Февраль революцияһы халыҡ теләгән иректәрҙе килтерә алманы. Империалистик һуғыш туҡталманы. Крәҫтиәндәргә ер бирелмәне. Илдә икмәк етмәй ине. Йәйен контрреволюция баш күтәрҙе – Корнилов фетнәһе башланды.

Мәжит Ғафури бөтә был ваҡиғаларға үҙенең шиғырҙарында баһа бирә барҙы. Корнилов фетнәһен ул «Аждаһа» исемле шиғырында фашланы. Аждаһа – халыҡ ижадында уҫаллыҡ, яуызлыҡ, ҡанһыҙлыҡ символы. Шағир халыҡты азатлыҡты һаҡларға, контрреволюцияға ҡаршы көрәшкә өндәне:

Баҡсы! Дошман үлмәгән, ул ҡуҙғала,
Хөрриәт емешен халыҡтан ҡыҙғана.
Экрен-әкрен ҡанлы ҡылысын ҡулға ала –
Әһле хөрриәт, тағы ҡуҙғалығыҙ!..
Баш күтәрмәксе була дошманығыҙ…

Бына шулай шағир халыҡты уяу булырға, икмәк, бәхетле тормош өсөн көрәшергә саҡырҙы. Был мотив уның «Икмәк!» шиғырында асыҡ яңғыраны. Шағир «икмәк, икмәк!» тип урамға ташланған хеҙмәт кешеләренә теләктәшлек белдерҙе. «Бөтһөн һуғыш!» тигән шиғырында инде батшалыҡ иҙеүенән азатлыҡҡа сыҡҡан кешеләрҙе империалистик һуғышты туҡтатырға өндәне, халыҡ менән асыҡтан-асыҡ һөйләште:

Ундағы беҙҙең туғандар туп ата бер-берeһенә,
Ҡырыла унда ниндәй йәндәр, ҡандары ергә һеңә.
Ул туғандарҙың ҡулын сисәйек, улар булһын азат,
Ҡысҡырайыҡ бер юлы: «Бөтһөн һуғыш!.. Бөтһөн йыһат!»

1917 йылдың апрелендә М. Ғафури атаҡлы «Ҡыҙыл байраҡ» тигән мәдех шиғырын – батшалыҡтың тәхетен емергән, азатлыҡ яулаған эшсе синыфҡа маҡтау йырын яҙҙы. Ул халыҡтың азатлыҡ көрәше гимнына әүерелде. Уны халыҡ дәррәү күтәреп алды, сөнки йөкмәткеһе яғынан да, формаһы йәһәтенән дә новаторҙарса ижад ителгән әҫәр ине ул. Уға әҫәрләндергес тантаналы һәм сая тон, аныҡ ритм, романтик пафос, революцион йөкмәтке хас. Унда популяр булған рус, француз һәм поляк революцион йырҙарының, атап әйткәндә, «Марсельеза» һәм «Варшавянка» йырҙарының һулышы һиҙелде:

Ҡара һин алға!
Күрәмһең унда
Ҡыҙыл байраҡты –
Буялған ҡанға…
Хөрлөк, тигеҙлек
Уның шиғары[1] ...
Әй, Ҡыҙыл байраҡ,
Нур бир йыһанға!
Әйҙә, эшселәр,
Алға вә алға!

---

[1] *Шиғары* – өндәүе, лозунгыһы.

**Революцияға тиклемге ижадының әһәмиәте**

Мәжит Ғафури – Октябрға тиклемге башҡорт әҙәби хәрәкәтенең үҙәгендә торған, төрлө яҡлы эҙләнеүҙәре менән башҡорт әҙәбиәте тарихында тәрән эҙ ҡалдырған яҙыусы. Ҡәләмгә тартылыуының тәүге көндәренән үк ул халыҡсан әҙәбиәт өсөн көрәште, хеҙмәтсәндәрҙең уй-тойғоларын йырланы, социаль тигеҙһеҙлекте һәм ғәҙелһеҙлекте фашланы. Фәҡирлектә йәшәп иҙелгән кешеләр, кәмһетелгәндәр уның төрлө жанрҙарға ҡараған әҫәрҙәренең төп геройҙары булды. Ижадын мәғрифәтселек идеялары менән башлап ебәргән әҙип Беренсе рус революцияһы һәм унан һуңғы йылдарҙа революцион-демократик ҡараш кимәленә күтәрелде. Башҡорт әҙәбиәте тарихында ул тәнҡитле реализм методына нигеҙ һалыусы һәм прогрессив романтизм принциптарының үҫешенә ифрат ҙур өлөш индереүсе булды. Был әҙәби методтар, революцион-демократик йүнәлеш уның ижадының тәбиғәтен билдәләне.

Башҡорт фольклоры һәм мәғрифәтселәре, Көнсығыш һәм Көнбайыш классиктары, И. А. Крылов, Н. А. Некрасов, М. Горький кеүек күренекле рус яҙыусылары традицияларына ориентация тотоп ижад иткән Мәжит Ғафури үҙе лә байтаҡ йәш яҙыусыларға йоғонто яһаған, әҫәрҙәрендә халыҡ тормошоноң картиналарын, замандаштарының донъяға ҡарашын, уйҙарын, ынтылыштарын тәрән сағылдырған, үҙ халҡы вәкилдәренең иҫтә ҡалырлыҡ образдарын тыуҙырған үҙенсәлекле һүҙ оҫтаһы булды. Ғафури шәхесе, Ғафури рухы бөгөн дә халыҡтың, хеҙмәт кешеһенең бөйөклөгөн, күңел сафлығын йырлаған, Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләгән тәрән мәғәнәле, оло фекерле һәм зауыҡлы әҫәрҙәрендә йәшәүен дауам итә.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. М. Ғафури шиғырҙарының һәм хикәйәләренең төп тематикаһы нимәгә ҡайтып ҡала һәм ни өсөн? 2. Ғафуриҙың ҡайһы әҫәрҙәрендә мәғрифәтселек ҡараштары, ҡайһыларында революцион идеялар бигерәк тә асыҡ бирелгән? Шул урындарҙы уҡып күрһәтегеҙ һәм аңлатып бирегеҙ. 3. Ғ. Мостафиндың «Туҡай һәм Ғафуриҙың осрашыуы» картинаһы буйынса уларҙың ҡасан һәм ҡайҙа осрашыуы, нимә тураһында һөйләшеүе хаҡында һөйләп бирегеҙ. 4. Ғафури ижадында бәхетһеҙлек, һуғыш, тыныслыҡ, азатлыҡ темаларының сағылышы. 5. Классик тип ниндәй яҙыусыларға әйтәләр? 6. М. Ғафури ижады буйынса әҙәби викторина үткәрегеҙ.

## ХУДОЖЕСТВО МЕТОДЫ. РЕАЛИЗМ ҺӘМ ТӘНҠИТЛЕ РЕАЛИЗМ

Яҙыусылар бер үк осорҙа һәм ижтимағи мөхиттә йәшәгән, бер үк идея позицияһында тороп, бер үк тормош материалына мөрәжәғәт иткән булһалар ҙа, уларҙың әҫәрҙәре бер-береһенә тулыһынса оҡшамай. Шәхес булараҡ бит һәр яҙыусының үҙенә генә хас психологияһы, характеры, тормош тәжрибәһе, талант һәм донъяға ҡарашы, белем һәм мәҙәни кимәле бар. Былар бөтәһе лә уның тормошто үҙенсә аңлап, әҫәрҙәрендә уны үҙенсә генә кәүҙәләндереүен билдәләй.

Шул уҡ ваҡытта тормошто һүрәтләүҙә яҙыусыларҙың уртаҡ яҡтары ла була. Мәҫәлән, икеһе ике осорҙа ижад итеүҙәренә ҡарамаҫтан, М. Аҡмулла менән М. Ғафуриҙың күп кенә шиғырҙарында күтәрелгән проблемаларҙың, уларҙың үҙ һүҙҙәрен ҡулланып әйткәндә, «эстең керен паклау», «һөнәр, ғилемгә тырнаҡ батырыу» идеяларының, һүрәтләү сараларының, поэтик формаларҙың оҡшашлығын күрергә мөмкин. Бындай уртаҡлыҡтар төрлө географик урындарҙа, илдәрҙә һәм континенттарҙа, төрлө ижтимағи ҡоролош шарттарында йәшәгән, төрлө халыҡ йәки милләт вәкилдәре булған яҙыусылар ижадтарында ла осрай. Әйтәйек, М. Ғафури ижади эшмәкәрлегенең тәүге осоронда уҡ, бөйөк рус яҙыусыһы М. Горький кеүек, ябай халыҡ тормошона мөрәжәғәт итә һәм әҫәрҙәрендә уның ауыр көнкүрешен, бәхетле тормош хаҡындағы уй-хыялдарын, теләк-ынтылыштарын бөтә дөрөҫлөгөндә сағылдыра, byғаса байҙар, сауҙагәрҙәр, муллалар, шәкерттәр тирәһендә әйләнгән әҙәбиәткә «бәләкәй кеше» – хеҙмәт эйәһенең образын алып килә, уның дуҫы һәм яҡлаусыһы булып сығыш яһай, социаль тигеҙһеҙлекте һәм ғәҙелһеҙлекте аяуһыҙ тәнҡитләй.

Шул рәүешле, ваҡыт, йәшәгән урын, ижтимағи шарт, милли сығыш йәһәтенән бер-береһенән алыҫ торған яҙыусыларҙың да тормошҡа мөнәсәбәттәре оҡшаш булыуҙары, уны үҙ әҫәрҙәрендә сағылдырғанда бер үк юлдар, бер үк алымдар менән эш итеүҙәре мөмкин икән. *Ысынбарлыҡҡа яҡын килеүҙәге, ундағы күренештәрҙе, тормош факттарын һайлап алыуҙағы һәм баһалауҙағы, уларҙы образдар аша кәүҙәләндереүҙәге бына ошондай хәл иткес уртаҡ ысулдар, төп принциптар системаһын* ***художество*** *йәки* ***ижад методы*** *тип атайҙар.*

Художество методы кемдер тарафынан тыуҙырылған ниндәйҙер бер үҙгәрмәҫ ижади эш ысулы түгел. Билдәле бер тарихи-ижтимағи шарттарҙа барлыҡҡа килгән метод был шарттар үҙгәреү менән үҙгәрә, улар бөтөү менән юҡҡа сыға. Уны яңы метод алмаштыра. Әйтәйек, буржуаз йәмғиәттең формалаша

башлауы осоронда феодаль тәртиптәрҙе тамырынан юҡ итеү өсөн киҫкен көрәш барған шарттарҙа тыуған мәғрифәтселек реализмы методы, артабан капитализмдың йыртҡыс йөҙө асыла һәм халыҡ массаһы кешегә белем һәм әхлаҡи тәрбиә биреү ярҙамында ғына ғәҙел, бәхетле йәмғиәт төҙөү мөмкин түгеллегенә төшөнә башлағас, аҡрынлап йәшәүҙән туҡтай.

Донъя әҙәбиәте тарихында төрлө осорҙарҙа барлыҡҡа килгән һәм өҫтөнлөк иткән төрлө художество методтары бар. Мәҫәлән, реализм, сентиментализм, романтизм һ. б. Ысынбарлыҡты мөмкин тиклем бөтә тулылығында дөрөҫ итеп һүрәтләү реалистик методты талап итһә, уны бер аҙ биҙәп, уй-хыялдарыңда тыуғандарҙы, күрергә теләгәндәрҙе, өмөт иткәндәрҙе ҡушып, ҡабартыбыраҡ тасуирлау өсөн романтизм методы, ә инде үтә шартлы образдар, алым-саралар, фаразлауҙар ысулы менән сағылдырыу өсөн модернизм методы ҡулайыраҡ булалыр. Уларҙың берәүҙәре, яһалма булыуҙары һәм тормошто дөрөҫ кәүҙәләндермәүҙәре сәбәпле, бик тиҙ юҡҡа сығалар, икенселәре иһә, заман һәм тормош талаптарына яуап биреүҙәре арҡаһында, оҙағыраҡ йәшәйҙәр, төрлө йүнәлештәрен, ағымдарын барлыҡҡа килтерәләр. Мәғрифәтселек реализмы, тәнҡитле реализм, прогрессив романтизм методтары, мәҫәлән, шундайҙарҙан.

**Реализм методы** ысынбарлыҡ күренештәрен тормошта булғанса дөрөҫлөк, тәбиғилек менән һүрәтләүҙе күҙ уңында тота. Латин теленән алынған *реалист* һүҙе үҙе үк ысын, хаҡ тигән мәғәнәне аңлата. Ләкин шуны иҫтән сығарырға ярамай: реализм тормошто көҙгөләге йәки фотоһүрәттәге кеүек сағылдырыу, түкмәй-сәсмәй күрһәтеү тигән һүҙ түгел әле. Реалист яҙыусы *тормоштоң иң характерлы яҡтарын, иң мөһим күренештәрен күрергә, һайлап алырға һәм үҙенең әҫәрҙәрендә* ***дөйөмләштереп, типиклаштырып*** *бирергә тейеш.* «Реализм, – тигән Ф. Энгельс, – деталдәрҙең дөрөҫлөгөнән тыш, типик характерҙарҙы типик шарттарҙа дөрөҫ итеп кәүҙәләндереүҙе күҙҙә тота». Был метод донъя әҙәбиәте тарихында төп урынды алып тора. Бөтә халыҡтарҙың да һүҙ сәнғәтендә иң яҡшы әҫәрҙәр ошо метод менән тыуҙырылған.

XIX быуатта инглиз, француз, рус кеүек үҫешкән әҙәбиәттәрҙә реализмдың яңы этабы башлана. М. Горький уны **тәнҡитле реализм** тип атай. Сөнки ул кешене кеше иҙеүгә ҡоролған йәмғиәттәге айырым кәмселектәрҙе, кешенең үҙендәге кире күренештәрҙе генә түгел, бәлки был йәмғиәттең нигеҙҙәрен тәнҡитләй, уның халыҡҡа аһ-зар, бәхетһеҙлек алып килеүен күрһәтә, синфи тигеҙһеҙлеккә һәм ғәҙелһеҙлеккә протест белдерә.

Рус әҙәбиәтендә А. С. Пушкин, Н. В. Гоголь, М. Е. Салтыков-Щедрин, А. П. Чеховтарҙың ижадтарынан уҡ юл алған тәнҡитле реализм методы башҡорт һүҙ сәнғәтендә бары 1905 йылғы

революциянан һуң формалашты. Был метод менән яҙыуҙың тәүге өлгөләрен М. Ғафури бирҙе. Уның беҙ алдағы дәрестәрҙә танышып үткән «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» повесы һәм «Баҙарға сыҡтым» шиғыры – шуның асыҡ дәлиле. Уларҙа автор синфи йәмғиәттең яуыз тәбиғәтен фашлай, синфи тигеҙһеҙлекте тәнҡитләй, тормош төпкөлөнә ташланған «бәләкәй кешеләрҙең» – хеҙмәт эйәләренең саф намыҫлы, оло йөрәкле булыуҙарын ихтирам менән һүрәтләй. Уның был традицияларын үҙ ижадтарында А. Таһиров, Д. Юлтый кеүек яҙыусылар уңышлы үҫтерҙе.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Яҙыусының художество йәки ижад методын нисек аңлайһығыҙ? 2. Реализм, романтизм, модернизм методтары тормошто нисегерәк һүрәтләй? Реализм методы донъя әҙәбиәтендә ниндәй урын тота? 3. Тәнҡитле реализм методы нимә ул? Ул тормошто нисек сағылдыра?

# ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ

## (1895 – 1919)

XX быуаттың баштарында башҡорт әҙәбиәтенә байтаҡ ҡына һәләтле йәш яҙыусылар килде. Шулар араһында ижадының йөкмәткеһе һәм формаһы, поэтик таланты менән М. Ғафуриҙан ҡала балҡып, айырылып торған шағир Шәйехзада Бабич булды. Ул халыҡсан рухтағы башҡорт шиғриәтенең иң аҫыл өлгөләрен тыуҙырҙы, социаль шиғри сатираны яңы бейеклектәргә күтәрҙе. «Туҡай үҙендә татар халҡының милли талантын ниндәй юғарылыҡта кәүҙәләндергән булһа, Бабич та башҡорт халҡының үҙенсәлекле талантын шул дәрәжәлә сағылдырҙы», – тип әйтеүе менән профессор Ә. Харисов бик хаҡлы ине.

## ТОРМОШ ЮЛЫ

Шәйехзада Бабич 1895 йылдың 2 ғинуарында Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендә (хәҙерге Дүртөйлө районында) Әсән ауылында мулла һәм мөдәррис ғаиләһендә тыуған. Уның атаһы Мөхәммәтзакир шаҡтай хөр фекерле кеше булған. Батшаға тел тейҙергәне өсөн ул хатта әҙәрләнеүҙәргә дусар ителгән.

Шәйехзада башланғыс белемде атаһы уҡытҡан мәҙрәсәлә ала. Зирәк бала мәҙрәсә һабаҡтары менән генә хушһынып ҡалмай, үҙ алдына әҙәби китаптар уҡый, донъяуи ғилем менән ҡыҙыҡһына башлай. Туҡай, Аҡмулла, Ғафури уның иң яратҡан шағирҙарына әйләнә. Халыҡтың йырҙарын, бәйеттәрен, әкиәттәрен мауығып тыңлай, күптәрен йәһәт отоп ала, шәкерт дәфтәрҙәренә яҙып ҡуя.

1910 йылдың йәйендә Бабич «бәхет эҙләп» ситкә, ҡаҙаҡ далаларына, сығып китә. Ҡустанай өлкәһенең Турғай далаларында ятҡан Дүсәнбай тигән ҡаҙаҡ ауылында балалар уҡыта. Бер ни тиклем аҡса эшләп алғас, 1911 йылдың көҙөнә Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Ике йылдан һуң, 1913 йылдың йәйендә, йәнә Дүсәнбай ауылында мулдәкә булып эшләп ала. Был

юлы ул ҡаҙаҡ телен ныҡлап үҙләштереп өлгөрә, аҡындарҙың әйтештәрен, өләңдәрен тыңлай, ҡаҙаҡ халҡының бөйөк шағиры Абай Ҡонанбаевтың әҫәрҙәре, уның рус шиғриәтенән яһаған тәржемәләре менән таныша. Уны Абайҙың үҙенең, бигерәк тә Лермонтовтың шиғырҙары хайран итә. Аҙаҡ Өфө мәҙрәсәһендәге кисәләрҙә, шәкерттәр араһында Лермонтовтың «Яңғыҙ сығам юлға» тигән атаҡлы шиғырын русса ла, ҡаҙаҡса ла йыш ҡына яттан һөйләр була. Абайҙың шиғырҙарын иһә татарҙың Туҡайы, ғәрәптең Имреҡәйе әҫәрҙәренә тиңләй.

Шәйехзада Бабичтың әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһенә тартылыуында Өфөнөң мәҙәни тормошо, «Ғәлиә» мәҙрәсәһе ғәйәт ҙур роль уйнай. Ул мәҙрәсәлә сығарылған «Эләктергес», «Парлаҡ» исемле ҡулъяҙма журналдарҙа үҙенең тәүге шиғырҙарын баҫтыра, «Милли көй, сәхнә вә әҙәбиәт» түңәрәгендә йыш ҡатнаша. Йор һүҙле, музыкаль тәбиғәтле, мандолинала ғәжәп шәп уйнаусы Бабич әҙәби-музыкаль кисәләрҙең төп фигураһына әйләнә, ҡала күләмендәге кисәләрҙә лә йыш сығыш яһай. Уйнай, көлә, көлдөрә, һә тигәнсе таҡмаҡ сығара, шиғырын уҡый.

Мәҙрәсәнең үҙендә Ғәлимйән Ибраһимов кеүек танылған яҙыусының уҡытыуы Бабичтың әҙәби ижад эшенә ылығыуын тағы тиҙләтеп ебәрә, әҙәбиәткә, сәнғәткә, ғөмүмән, ижад эшенә етди ҡарарға өйрәтә.

1916 йылда Бабич «Ғәлиә»не тамамлағас, Троицк ҡалаһына барып, уҡытыусы булып эшләй. Шул ҡалала сыҡҡан «Аҡмулла» исемле сатирик журнал эшендә яҡындан ҡатнаша.

Бер йылдан һуң Бабич Өфөгә әйләнеп ҡайта, 1917 йылдың авгусында «Ҡармаҡ» журналы редакцияһының саҡырыуы буйынса Ырымбурға китә, шул журналдың секретары булып эшләй башлай. Был осорҙа ул Ырымбурҙа төҙөлгән милли Башҡорт хөкүмәте эшенә ылығып китә һәм милли азатлыҡ көрәше уртаһында ҡайнай. Уны Башҡортостан өлкә бюроһының сәркәтибе, бер үк ваҡытта «Башҡортостан» гәзитенең мөхәррире итеп һайлайҙар. 1919 йылдың февралендә Башҡорт ғәскәрҙәре Ҡыҙыл Армияға ҡушылғандан һуң, март айында Башҡорт хөкүмәтенең архивын һәм типографияһын Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә (Мораҡҡа) оҙатып барғанда, Бабич Йылайырҙан алыҫ булмаған урында ҡыҙылдар тарафынан ҡулға алына һәм 29 мартта язалап үлтерелә.

## ИЖАДЫ

Шәйехзада Бабичтың ҡыҫҡа, әммә бай емешле ижад юлын кескәй өс осорға бүлеп ҡарарға мөмкин: 1910–1913 йылдарҙағы башланғыс ижад, 1914–1916 йылдарҙағы өлгөрөп етеү осоро һәм 1917 йылғы Февраль революцияһынан һуңғы осор.

**Башланғыс осор**

Бабич ҡаҙаҡ далаларында уҡытып йөрөгәндә һәм «Ғәлиә»гә ингәс яҙған тәүге шиғырҙарын йыйып, 1912 йылда китап итеп сығарырға әҙерләй. Ләкин ул йыйынтыҡ ни сәбәптәндер баҫылмай ҡала. Был ҡулъяҙма йыйынтыҡ «Эй, китап» тигән шиғыр менән асылып, «Бәхетһеҙ мин» шиғыры менән дауам иткән була. Уларҙың исеме үк йәш шағирҙың ижад йүнәлешен ишаралап торғандай итә. Йыйынтыҡтағы әҫәрҙәрҙең бер өлөшө тәү башлап 1913 йылда «Шура», «Аҡмулла», «Ҡармаҡ» тигән журналдарҙа донъя күрә.

Шиғриәткә Бабич «Эй, китап, ... ысын, аҫыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә» тип, китапҡа мөрәжәғәт итеү формаһында ижад ителгән хитабында мәғрифәтселек идеяларын йырлап килһә лә, уның тәүге әҫәрҙәрендә үҙәк урынды һағыш, ниндәйҙер яҡты, матур тормошто эҙләү, унда үҙ урыныңды табырға, «ҡайғы-хәсрәт, моң вә зарлыҡтар»ҙан ҡотолорға ынтылыу хистәре алды. 1910–1913 йылдар арауығында ижад ителгән күп әҫәрҙәрендә («Күңел», «Моңланам», «Бәхетһеҙ мин», «Зарланыу», «Нәсихәт», «Выждан һәм нәфсе», «Күңелһеҙ саҡта», «Күңелле саҡта» һ. б.) шиғырҙарынан күңелендә ниндәйҙер һыҙлауыҡ булыуы асыҡ күренде. «Күңел» шиғырында ул «Күңел һыҙлай, һыҙлай, һыҙлауыҡ бар, ҡара көстәр мине тотҡанға, ... күңел яна, яна ут эсендә, йәш ваҡыттар әрәм үткәнгә», тип яҙһа, «Моңланам» тигән әҫәрендә шул саҡтағы күңел торошон «белмәйем инде, ниңәлер гел моңланам... ҡайғы-хәсрәт моң вә зарлыҡтар менән юҡ тыныслыҡ, тулғанам да тулғанам», тип белдерҙе.

Ҡара реакция йылдарын яуызлыҡтың азатлыҡҡа ҡаршы һөжүме, яҡшылыҡ һәм ғәҙеллек өҫтөнән хакимлыҡ итеүе кеүек ҡабул иткән, әҫәрҙәрендә көйөп-һыҙланып намыҫлылыҡ, яҡшылыҡ, тигеҙлек һәм тоғролоҡ тураһында һүҙ йөрөткән шағир тормошто үҙгәртеү мөмкинлегенә лә, ҡараңғылыҡты ярып, барыбер таң атырына, ҡояш ҡалҡырына ла ышанысын өҙмәне. Күңеле булғанда, һоҡланып ауыл тәбиғәтен тасуирланы, һабантуй, милли байрамдар хаҡында шиғырҙар яҙҙы.

**1914–1916 йылдарҙағы шиғриәте**

Бабичтың әҫәрҙәре 1914 йылдан алып матбуғат биттәрендә йыш күренә башлай. Тап ошо осорҙа ул «Халҡым өсөн», «Бай һәм ярлы», «Кем өсөн?», «Бер минут», «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде», «Көтәм», «Үткән көндәр» кеүек иң күренекле шиғырҙарын ижад итте, үҙен өлгөрөп еткән талантлы шағир итеп танытты. Бабич шиғриәтенең өлгөрөп етеүе халыҡты уйландырған мөһим мәсьәләләрҙе күтәреүе, гражданлыҡ пафосы һәм юғары поэтик сифаты менән билдәләнде.

Ш. Бабич ижадының өлгөрөп, киң танылыу алып киткән осоро уның «Халҡым өсөн» (1914) тигән шиғырынан башлана. Был әҫәр – үҙенең бөтә аңлы ғүмерен саф йөрәкле, дәртле, көләс халҡына хеҙмәт итергә, уның бәхетле киләсәге өсөн көрәшкә арнарға, сағыу һәм тулы ҡанлы йәшәргә ынтылған шағирҙың программа характерындағы ижад емеше.

Унда шағирҙың йәмғиәт тормошонда тотҡан урыны, шиғриәттең ижтимағи роле бик асыҡ итеп әйтеп бирелгән. Шағир үҙ йырҙарын күңел ауҡы өсөн дә, дан йә алтын өсөн дә түгел, бәлки туған халҡы өсөн, Тыуған иле өсөн йырлай. Уның өсөн халыҡ ғәме, ҡайғы, шатлығы уртаҡ ғәм, хәстәр, шатлыҡ булып тора. Шуға ла ул, ант иткәндәй итеп, бар көсө, һәләте менән халыҡҡа хеҙмәт итергә әҙер булыуын белдерә:

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

Шағир үҙенән-үҙе генә алда ирекле көндәр тыумаҫын яҡшы тоя. Шуға ла ул үҙенең «Әйҙә, милләт!» (1915) тигән хитабында халыҡты, тормош «йөгө ауыр, юлы болғауыр булһа ла, ... алда рәхәт ҡәҙерене белмәк» өсөн ҡуҙғалырға, унда күренгән «яҡты нурлы көндәргә» табан хәрәкәт итергә саҡыра. «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде» (1915) тигән шиғыр-монологында ирек, бәхет өсөн тырышлыҡ, алһыҙ-ялһыҙ көрәш кәрәклеген айырым һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтә, «Ысын ирекле алғы көндәр өсөн көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!» тигән ҡыйыу лозунг ташлай.

Ер йөҙөнән аһ-зар, ялғанлыҡ, яуызлыҡ, наҙанлыҡ ҡараңғылығын ҡыуыу, «ҡул-аяҡ бығауын» алып ташлау, халҡына «ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын», шатлыҡ нурҙарын илтеү Бабич тормошоноң һәм ижадының төп маҡсатына әүерелә. Ул шағирҙың «Кем өсөн?» (1916) тигән әҫәрендә романтик рухта үҙенсәлекле итеп әйтеп бирелгән. Ерҙә яныпкөйөп, күңел нурҙары эҙләп күктәргә ашҡан, айға менеп, ай нурында ҡойонған, хатта ҡояштың үҙенә үрелгән («Айға мендем») сағында ла шағир йыһанда үҙе алдында һәр саҡ торған «Кем өсөн?» тигән ҙур һорауға йәшәү, көрәшеү таянысы булырҙай изге яуап һүҙҙәрен ишетә:

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
– Ит ғәфү, әй, ай, – тинем мин, –
Нурҙарыңды урланым.

– Һис зарар юҡ, ал, – тине ай, –
Ал да сәс нур халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояштың нурҙарын.

Беҙҙең көндәрҙә башҡорт композиторы Хөсәйен Әхмәтов тарафынан «Кем өсөн?» шиғырына яҙылған музыкаль балладаһы әҫәрҙең идея-эстетик көсөн тағы тәрәнерәк аңларға ярҙам итә.

Был шиғыр Бабичтың әрнеп ярһыулы, берсә янып, берсә туңып үҙгәреп торған бунтарь күңел донъяһын тойоу яғынан әһәмиәтле.

Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут,
Берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут.
Бер минут бар донъяһын ҡарғап ҡабынды уттарым,
Янды, көйҙө, парса-парса булды меҫкен күкрәгем, –

ти ул өҙгөләнеп һәм кинәт ошондай оптимистик тойғоһон белдерә:

Эйе, янды күкрәгем... Тик, юҡ, ләкин меҫкен түгел,
Был йөрәк – утлы йөрәк, үткен күңел, киҫкен күңел.
Ул яна, тик ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән,
Ул яна был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән.

Был шиғри юлдар аша Бабич күңеленең бөтә барлығы, донъяны аҡлыҡ менән күрмәк өсөн янғаны әйтеп бирелгән.

Ләкин ҡараңғы, михнәтле тормош, донъяла барған һуғыш шағир аңында йыш ҡына ҡаршылыҡлы уйҙар, күңелендә бошонҡо тойғолар тыуҙыра. «Аптыраған минуттарҙа» шиғырында әйтелгәнсә, уның, «Мең төрлө уй, ҡатты баш, нишләргә лә аптыраш» тип, донъяһына ҡул һелтәп, әллә ҡайҙарға ҡасмаҡсы, күктәргә ашмаҡсы булып киткән мәлдәре лә юҡ түгел:

Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос,
Күккә ос: күктә тыныс, бында һуғыш, бында ҡылыс!

Шағир үҙен донъя ҡыҫымынан, тормош ҡыҫынҡылығынан азат күргеһе килә, донъялыҡҡа йөҙ сөйөрөп, ниндәйҙер илаһи азат шәхес хаҡында хыялланып ала, үҙен:

Үҙ маяғымды
Үҙемсә ҡаҙап,
Үҙ һабағымды
Үҙемсә аңлап,
Юлдар яһармын,
Шулай йәшәрмен,

Күккә осормон,
Йондоҙ үбермен,
Диңгеҙ кисермен,
Теләһәм нишләрмен:
Мин ирек йәне,
Ханы, солтаны, –

тип хис итмәксе була.

Шәйехзада Бабичтың 1914–1916 йылдарҙағы шиғриәтендә сағылған бындай ҡаршылыҡлы уй-тойғолар шул хаҡта һөйләй: берҙән, улар заман ысынбарлығының үҙ ҡаршылыҡтарын сағылдыралар, икенсенән, шағирҙың ирекҡә, яҡтылыҡҡа ынтылған шәхесе менән тар, ҡараңғы тормоштоң бәрелешен, шунда тыуған ризаһыҙлыҡтарын күрһәтәләр.

Бабич шиғриәтенең үҙәгендә торған бунтарь тәбиғәтле романтик шәхес, уның күңел драмалары, протест тойғолары, ниндәйҙер яҡтылыҡҡа, иркенлеккә ынтылыштары, матурлыҡ, яҡты киләсәк хаҡында хыялланыуҙары – прогрессив романтизм күренеше ул. Бабич башҡорт поэзияһында прогрессив романтизмдың нығыныуында ҙур роль уйнаны.

**Бабич – сатирик**

1914–1916 йылдарҙағы ижадында Шәйехзада Бабич үткер телле юморист һәм сатирик шағир булараҡ та киң танылып өлгөрҙө. Шағирҙың һәр бер тормош күренешендә, хәл-ваҡиғала көлкөлө яҡты, көлкөлө мәлде күрә һәм әҫәрҙәрендә сағыу яҡтырта алыу ҡеүәһе күп йәһәттән уның тәбиғи талантына бәйле ине. Ә инде ул йәшәгән осорҙағы социаль шарттар, хөкөм һөргән йәмғиәт тәртиптәре, әхлаҡи климат ана шул таланттың «дөрләп янып» китеүенең, әҙәби көрәш ҡоралына әүерелеүенең төп сәбәпсеһе булды. Быны уның «Ғәйет уҙғас», «Әй, мулла абзый», «Буржуй», «Мөртәт социалистарға», «Байҙарға», «Йәшәһен ҡиммәтселек» һәм башҡа әҫәрҙәрендә бик асыҡ тойорға була. Шағирҙың тынғыһыҙ, ярһыу һәм шаян күңеле бер нисек тә йәшәп килгән ғәҙелһеҙ тәртиптәр, яуызлыҡтар, мәғәнәһеҙ һуғыш, әхлаҡи шөкәтһеҙлектәр, томаналыҡ менән килешә алманы. Бына уның түҙеп торғоһоҙ әсе ирония менән һуғарылған «Әй, мулла абзый» тигән дүрт юллыҡ шиғри сатираһы:

Әй, мулла абзый, ант итәмен Аллаң менән,
Ант итәмен башыңдағы салмаң менән:
Өҫтән былай кеше төҫлө күренһәң дә,
Эсең-тышың тулы сеп-сей ялған менән!

Донъя һуғышы ҡыҙған осорҙа Бабич, халыҡ өҫтөнә төшкән ҡаза, ауырлыҡтан файҙаланып байып ҡалырға тырышҡан байҙарҙан, сауҙагәрҙәрҙән көлөп, «Йәшәһен ҡиммәтселек!» (1916) тигән шиғырын яҙғайны.

Әй, арыу булды, арыу булды мәғишәт айҡалып:
«Йәшәһен ҡиммәтселек!» – тип һикерә, ырғый бай халыҡ, –

тине ул халыҡ бәхетһеҙлегенән шатланған байҙарға үҙ һүҙҙәре менән.

Ә инде «Ҡандала» (1916) исемле балладаһында шағир кеше көсөн, кеше ҡанын һурып байыған байҙарҙы ҡан эскес ҡандалаға

тиңләп һүрәтләне. Уларҙың да ҡан эскес ҡандала һымаҡ бер һытылырҙарына кинәйәле ишара яһап, «күпме ҡан эстең, беләһеңме уны, тотто бит үҙеңде, күр, инсан (кеше) ҡаны», тип киҫәтеү ҙә яһаны.

Ш. Бабич, Алла ҡушҡан тип, уны үҙенә ҡалҡан итеп, ҡандала һымаҡ паразиттарса йәшәгән кешеләргә, Алланың үҙенә лә күп кенә әҫәрҙәрендә ҡаты тел тейҙерҙе. Төрлө ғәҙелһеҙлектәрҙең, бысраҡ эштәрҙең Алла исеменән эшләнгәнен, дин әһелдәренең «Алла», «дин» исеме, тәғлимәте менән кешенең бөтә рухын томалауҙарын рәхимһеҙ фаш итте. Ошоға бәйле рәүештә шағирҙың атаҡлы бер парсаһы бар:

Күктә – Алла,
Ерҙә – иблис,
мин – малай.
Береһе: «Дин!» – тип,
Береһе: «Мин!» – тип
тартҡылай.
Белмәйем,
Әллә Алла,
Әллә иблис
алдалай?!

Ш. Бабич үҙенең күренекле әҫәрҙәренең береһен – «Ғазазил» (1916) исемле сатирик поэмаһын ана шул Алла, иблистәрҙе һүрәтләүгә бағышланы. Унда кешене нисек тә үҙҙәренә буйһондороу, рухи ҡол итеү өсөн Алла менән иблистең үҙ-ара ҡаты тартышы сатирик фашлау юлы менән күрһәтелә.

Дини легенда буйынса, Ғазазил исемле фәрештә ожмахта сағында Алла менән әрепләшеп, был яман ҡылығы өсөн Алла тарафынан ожмахтан ҡыуылып, ергә, кешеләр араһына ебәрелгән, унда иблис затына әүерелгән. Хәҙер элекке фәрештә, Аллаға үс итеп, кешеләргә хөсөтлөк ҡылып, уларҙы аҙҙырып, нәфселәрен боҙоп, ен-шайтандарға баш булып, уларҙы әҙәмдәргә ҡаршы ҡотортоп, төрлө яуызлыҡтар ҡылдыртып йөрөй башлаған.

«Ғазазил» поэмаһы ошо дини легенда сюжетына ҡоролған. Әммә шағир легенда буйынса Алланы ололайһы, иблисте яманлайһы урында, Аллаһын да, иблисен дә, ен-шайтандарын да бер төрлөрәк итеп, бер сыбыҡтан ҡыуылған заттар итеп фашлай, рәхимһеҙ рәүештә көлә. Алла кешеләрҙе аҡылға ултыртам, тәүбәгә килтерәм тип, үҙе ебәргән иблистән ек күрһәтә, боҙа, ыҙалай. Кеше Алла тарафынан да, иблис тарафынан да рухи иҙелә, ҡол хәленә төшөрөлә. Сикһеҙ ҡөҙрәтле тигән Алланың аҙаҡтан иблистең яманлыҡтарын тыйырға ла көсө етмәй.

Иблис күктән ергә төшкәс, ен-шайтандар алдында нотоҡтелмәр тота. Әҙәм-инсандар хаҡында ул былай ти:

Мин уларҙы хәйлә менән алданым,
Инсан улын алдалау анһат, еңел,
Сөнки ул бер ҡатлы һәм йомшаҡ күңел,
Һүҙ менән иретеп уларҙы, йомшартып,
Үҙ-үҙемде изгеләрҙән күрһәтеп,
Орлоғом һиптем уларҙың ҡәлбенә...
Эске шайтан беҙгә ҙур ярҙамсылыр,
Бар иман, выжданға ҡаршы ҡамсылыр.
Инде тырышып ҡотортайыҡ, аҙҙырайыҡ,
Бәндәне выждан юлынан яҙҙырайыҡ.
Аҙҙырырға Тәңренән рөхсәт тә бар,
Кем, туғандар, бындай ҙур форсат табыр?
Йәшәһен шәүкәтле шайтан милләте!
Йәшәһен инсанға шайтан хеҙмәте!..

Иблистең бына был программа характерындағы телмәрендә кешелекте иҙеүсе, аҙҙырыусы иблис заттарҙың бар мәкерле фәлсәфәһе, тотҡан юлы әйтеп бирелгән. Замана иблистәрен, Аллаларын бына ошолай фаш иткән «Ғазазил» сатирик поэмаһы хәҙерге заманда ла үҙ әһәмиәтен юғалтмаған.

Ш. Бабич үҙ сатираһында төрлө кинәйә, аллегория, пародия алымдарын, әсе саркастик тел сараларын киң файҙаланды. Ә кешеләр холҡондағы йәки эшендәге ҡайһы бер йомшаҡ яҡтарҙан, тормоштағы айырым кәмселектәрҙән көлгәндә еңелсә йылмайыу ҡатыш юморға мөрәжәғәт итте. Уның «Исемдәр баҡсаһы» исемле ҡатын-ҡыҙҙарға бағышланған парсалар, «Китабеннас» тигән эпиграммалар шәлкемдәре ана шундай юмор менән һуғарылғайны.

«Китабеннас» әҫәре XX быуат башында башҡорт һәм татар йәмәғәтселеге тормошонда күпмелер исемдәре билдәле булған кешеләргә – уларҙың ыңғай йәки кире эшмәкәрлектәренә ҡарап – йә ярым көлөп, йә ҡаты мыҫҡыллап яҙылған икешәр юллыҡ шиғыр-ҡылыҡһырламаларҙан ғибәрәт. Мәҫәлән, фанатик дин әһеле Харрас Айҙар ишан тигән берәүгә бына ниндәйерәк ҡылыҡһырлама бирә ул:

Йып-йыуан Харрас ишан Айҙар түгел алдар ишан,
Төлкөләй алдар ишанға эт кеүек һаулар ишан!

Ә бына атаҡлы шағир Дәрдмәндкә еңелсә генә тәнҡит һүҙе әйтеү менән ҡәнәғәтләнә кеүек:

Дәрдмәнд, дәрт шәп сағында, Дәрдмәнд тип алдың ат.
«Иҫте елдәр... күсте ҡомдар...», бөттө дарман, һүнде дәрт.

Шағирҙың үҙ һүҙҙәренә эйәреп йомшаҡ әйтелә, әммә шаҡтай ҡатыға ултыртыла.

Ғөмүмән, Шәйехзада Бабич башҡорт сатираһының социаль үткерлеген һәм тәьҫир көсөн бермә-бер көсәйтеп ебәргән, уның үҫешенә иң ҙур өлөштө индергән шағир булды.

**Февраль революцияһынан һуңғы ижады**

Бабич шиғриәтендә 1917 йыл алдынан киләсәккә өмөт менән ҡарау, шатлыҡ, яҡты көндәр килерен көтөү тойғолары көсәйә бара. «Осоноп-осоноп, өҙөлөп-өҙөлөп, ашҡынып шатлыҡ көтәм», – тип белдерә шағир «Шатлыҡ көтәм» тигән шиғырында. Ә бына уның «Көтәм» шиғырынан аңлашылыуынса, башҡорт туғайҙарын ҡыҙырып йөрөгәндә, ул йөрәктәрҙе елкетер моңдар ишетә, йәннәт нуры балҡытҡан тауҡырҙары гөлостандай тойола. Ләкин ярлы-меҫкен ауылдарға күҙе төшһә, улар үлем, хәсрәт аңҡытырҙай гүрестан төҫлө күренә. Янып-көйөп, бәғере өҙгөләнеп, «килер микән аҡ көн беҙгә лә?» тип, Уралҡайға ҡарай. Күпте күргән Урал, үҙ олпатын боҙмай, тын ғына ята. «Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙары» шағирға тап Урал яҡтарынан ишетелгәндәй тойола. Әҫәр ошондай оптимистик юлдар менән тамамлана:

Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

Ана шул өмөтләнеп көткән аҡ көндө, ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын шағирға 1917 йылдың Февраль революцияһы алып килгәндәй була. Был көндәрҙе ул «Хөрриәт бүләге», «Йәшәһен эшселәр!», «Тәмҫил киҫәге» кеүек революцион рухлы шиғырҙары менән ҡаршылай. Февраль революцияһын шағир күптән көткән аҡ көндәр, ысын ҡояш, ә революцион эшселәрҙе «ирек сулпандары», «ысын изгелек солтандары» тип атай, уларға мең афарин яуҙыра.

Афарин, их... донъяға шатлыҡ килә,
Юйыла золмат, йылмайып аҡлыҡ килә;
Емерелә вәхшәт, хаҡһыҙлыҡ, золом;
Аҡрын, аҡрын нур сәсеп, хаҡлыҡ килә, –

ти ул ҡыуанып.

«Йәшәһен эшселәр!» шиғыры «ирек сулпандары» булыр революцион эшселәргә маҡтау йыры булып яңғырай:

Эшсе халыҡ йәшәһен,
Һөрһөн донъя сафаһын,
Берлек тыуын ҡулға алып,
Тигеҙ юлдар яһаһын.
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Гәзиттә баҫылып сығыу менән, был шиғырҙы хөр фекерле йәштәр марш темпына урамдарҙа йырлап йөрөй башлағандар.

Революция булғас, Бабич социаль тигеҙһеҙлектең тиҙерәк бөтөрөлөүен теләне. Уның был уй-теләктәре лә донъяға шиғыр булып ташып сыҡты.

Бөтһөн инде: буржуаздар
Донъяға баш булмаһын!
Бөтһөн инде: ярлылар мохтаж,
Яланғас булмаһын!
Бөтһөн инде киң йыһанда
Тар ҡәберҙәр тарлығы!
Бөтһөн инде бикләнеп ятҡан
Ҡарундар һандығы! –

тип яҙҙы ул «Байҙарға» шиғырында.

Ләкин Февраль революцияһы көткән өмөттәрҙе, алға ҡуйған теләктәрҙе ғәмәлгә ашыра алманы. Ваҡытлы хөкүмәт власты үҙ ҡулына алып, эшселәрҙең революцион хәрәкәтен ҡорал көсө менән баҫтырырға, революцион ойошмаларҙы таратырға тотондо, большевиктарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш башланы. Бабич әле илдәге был киҫкен ситуацияның асылына бик үк төшөнөп етмәне. Шулай ҙа ул был боролошло ваҡиғалар барышында аҡтан ҡараны, ҡоро һүҙҙән ысын эште айырырға тырыша, төрлө партиялар көрәшенә диҡҡәт итә. «Буржуй», «Мөртәт социалистарға» тигән әҫәрҙәрендә инде ул революцион ваҡиғаларға, заман ағышына яраҡлашырға тырышҡан буржуйҙарҙың, һүҙҙә «социалист» исемен йөрөтөп тә, билдәренә «ҡып-ҡыҙыл билбау урап», «ҡып-ҡыҙыл ҡыҙыл һүҙҙәр» һөйләп тә, революцион азатлыҡ хәрәкәтенә зыян иткән мөртәт социалистарҙың ике йөҙлөлөгөн күрерлек һәм фашларлыҡ кимәлгә күтәрелде.

**«Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар»**

1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙа үткән Өсөнсө бөтә башҡорт ҡоролтайы Башҡортостан автономияһын иғлан итте, Башҡорт хөкүмәтен һайланы. Был осорҙа Ырымбурҙа эшләп йөрөгән Шәйехзада Бабич тиҙ арала башҡорт хәрәкәтенә ҡушылып китте, Өсөнсө бөтә башҡорт ҡоролтайында делегат булып ҡатнашты, Башҡорт хөкүмәтендә алһыҙ-ялһыҙ тигәндәй эшкә сумды. 1918 йылдың көҙөндә Ырымбурҙа үҙҙәре ойошторған «Тулҡын» нәшриәтендә «Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығын баҫтырып сығарҙы. Унда шағирҙың башҡорт хәрәкәте, автономия өсөн көрәш дәүерендә күргән-кисергәндәрен, халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәшен, хөр фекерле уй-тойғоларын сағылдырған милли шиғырҙары, үҙе әйткәнсә, «зәңгәр йырҙары» тупланғайны. «Олуғ

шатлыҡ», «Истиҡбал», «Ғәскәр маршы», «Байрам», «Башҡортостан», «Салауат батыр», «Тупраҡ» кеүек мәдех шиғырҙарында, мәктүптәрендә һәм марштарында автор, иң беренсе сиратта, яу, көрәштәр аша, күпме ҡандар ҡойоп яуланған йәш Башҡортостан илен кәүҙәләндерә, үҙ аллы булаһы республикаға, шуның өсөн көрәшкән ҡаһармандарға дан яуҙыра. Уның һәм арыҫландай яулашҡан ир-егеттәр өсөн йәш Ватан, яңы Башҡортостан иң изге төйәк, гөлдәр баҡсаһы – гөлбостан, нурбостан, сөмбөлостан булып күренә («Башҡортостан»). Был гөллө, нурлы, былбыллы ил өсөн шағир йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. «Башҡортостан иҫән ҡала тиһәң, бер йәнемә миллион үлем бир!» – тип ебәрә ул ант иткәндәй. Ошо антына тоғро ҡалып, шағир һуңғараҡ ғәзиз Башҡортостаны өсөн йәнен ҡорбан итте лә инде.

Шәйехзада Бабич «беҙ үҙебеҙ – башҡорттар, күп ырыуға баш йорттар», тип, йәш Ватаны, уның арыҫландай батыр ир-егеттәре менән «Башҡортостан баҡсаһы – арыҫландар торған ер, арыҫландар бабаһы – ҡаһармандар йөрөгән ер», тип ғорурланды.

Илебеҙ түшәк, еребеҙ карауаттай,
Ҡары-боҙо эҫе юрғандай;
Түҙемлебеҙ батыр Салауаттай,
Күкрәк ғәйрәт менән тулғандай...
Беҙ йөрөйбөҙ илде һаҡлайбыҙ тип,
Һаҡлайбыҙ һәм Башҡортостанды;
Тураҡлайбыҙ, илде тапайбыҙ, тип,
Ҡаршы килгән яуыз дошманды!
Илкәй өсөн сыҡһын ғәзиз йәндәр,
...Хәләл ергә аҡһын хәләл ҡандар, –

ти шағир «Ғәскәр маршы»нда иле, батырҙары хаҡында.

Был осорҙа Бабич халыҡтың төрлө социаль төркөмдәренә «Ҡыҙыл вәғәз» тигән миниатюр хитаптары, «Список № 1», «Афарин», «Тупраҡ» кеүек мәктүптәре менән мөрәжәғәт итеп, ябай халыҡты «ҡанын эсеүселәр»ҙең вәғәҙәләренә алданмаҫҡа, «төпһөҙ мискәгә» төшмәҫкә, ҡан ҡойоп яулап алынған иректе һәм ерҙе күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға саҡырҙы. «Тупраҡ» тигән шиғри хатында (мәктүбендә) туған халҡының милли азатлығын, бәхетле киләсәген туранан-тура ер мәсьәләһенә бәйләп яҡтыртты. «Тупраҡ беҙҙең анабыҙ ... Тупраҡ беҙҙең атабыҙ ... Тупраҡ башҡорт бәхетелер, бәхетенең тәхетелер ... Тупраҡ ҡәҙерен аңламау беҙҙең өлкән хатабыҙ» тип, ҡан-ҡәрҙәштәрен тыуған еренең ҡәҙерен белергә, уның ысын хужаһы булырға өндәне.

**«Башҡорт халҡына көйлө хитап»**

Башҡорт халҡы яҙмышындағы һынылышлы бер мәлдә, 1919 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре килешеү нигеҙендә ҡыҙылдар

яғына сыҡҡанда, боронғо йыраууар һәм сәсәндәр, мәғрифәтсе шағирҙар кеүек, Шәйехзада Бабич та халҡына, һалдаттарға «Беҙ ник ҡыҙылдарға ҡушылдыҡ?» йәки «Башҡорт халҡына көйлө хитап» тигән әҫәре менән мөрәжәғәт итте. Ул хитап листовка рәүешендә баҫтырылып, башҡорт һалдаттары араһына таратылды.

Большевиктар әйтә: «Был донъяла
Ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн, – тип, –
Ярлы, эшселәрҙең хас дошманы –
Буржуйҙарҙың тамыры ҡороһон», – тип.
Дутов, Колчак әйтә: «Эш башына
Алтын тажлы батша менһен, – тип, –
Батша менеп, һаман Николайҙай,
Ярлыларҙың ҡанын имһен», – тип.

Шулай ҡапма-ҡаршы ҡуйып, ярып әйтте шағир ике төрлө сәйәсәтте. Ҡыҙыл Армия йөҙөндә ул эшсе халыҡ иркен, милләттәр азатлығын яҡлаусы ғәҙел көстө күрҙе:

Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына,
Ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға;
Азат Башҡортостан йөмһүрлеген
Таныймын, тип хуплап торғанға.

1919 йылдың 23 мартында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Тик күпме йылдар өмөтләнеп көткән азат Башҡортостанда Бабичҡа ең һыҙғанып эшләргә, ижад итергә генә насип булманы.

**Бабич – шиғыр оҫтаһы**

Шәйехзада Бабич ҡыҫҡа ғына ижад ғүмерендә тәрән йөкмәткеле, төрлө формалы шаҡтай бай поэтик мираҫ ҡалдырҙы. Уның эпиграммалары, пародиялары, шиғри сатиралары, мәҙхиәләре, мәрҫиәләре, элегиялары, йырҙары, мәктүптәре (шиғри хаттары), хитаптары (шиғри мөрәжәғәттәре), мәҫәлдәре, тәмҫилдәре, балладаһы һәм поэмаһы башҡорт халҡының рухи тормошона ныҡ йоғонто яһаған үҙе бер этапты тәшкил итерҙәй әҙәби-художестволы күренеш булды.

Бабич – башҡорт яҙма шиғыр поэтикаһын халыҡ поэзияһы традициялары менән тығыҙ бәйләүҙә ҙур хеҙмәт күрһәтте. Уның әҫәрҙәрендә башҡорт силлабик шиғырының бай ритмик интонацион һыҙаттарын, строфалар төрлөлөгөн, рифмалар ишлелеген күпләп табырға, аҫыл өлгөләрен килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, «Халҡым өсөн» әҫәре үҙенең шиғри төҙөлөшө буйынса йырға яҡын тора, дөрөҫөрәге, 8–7 ижекле үлсәмдәге йыр фольклорындағы дүрт юллыҡ строфаларҙан төҙөлгән. «Тимергә» тигән

мәктүптә ҡобайыр һәм һамаҡлау ритмикаһына ҡоролған строфалар осрай. «Яҙғы йыр» әҫәрендә фольклор мотивтары үҙҙәрен бигерәк тә ныҡ һиҙҙертә. Унда лирик геройҙың уй-кисерештәрен тәбиғәт күренештәре менән мәғәнәүи бәйләнештә йәнәш ҡуйып һүрәтләү, халыҡ йырҙарында ҡалыплашҡан һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр, хис-тойғоларҙың наҙлылығын һәм нескәлеген сағылдырған ялғауҙар киң урын ала:

Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә,
Йырҙар яҙам, ел***кәй,*** иҫмәй тор…
Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Ҡөҙрәтле ел, аҡрын, иҫмәй тор.
Һандуғас***ҡай,*** наҙ***лым,*** ҡуй, һайрама,
Һайрап, йәш бәғ(е)ремде киҫмәй тор.

Ғөмүмән, Бабич фольклорға йыш мөрәжәғәт итә, әҫәрҙәренең шаҡтай өлөшөн ҡобайыр, шаян йырҙар һәм әйтештәр формаһында тыуҙыра. Ҡайһы бер шиғырҙарында ул, һүҙ уйнатып, таҡмаҡлауға, һамаҡлауға ла төшөп китә. Мәҫәлән:

Алма, алма, алмаҡай,
Алдала ла ал да тай,
Алда, унда – бал да май,
Алдалай, янъял ҡамай!

*(«Хәҙрәте Сүнчәләй рухына»)*

Бында һүҙ уйнатыу ҙа, үтәнән-үтә рифмалашыу ҙа, таҡмаҡлау ҙа бар. Улар шағирҙың халыҡтың психологияһын, художестволы фекерләү үҙенсәлектәрен яҡшы аңлауын асыҡ күрһәтә. Уның шиғырҙары йыш ҡына йыр шикелле йырлап тора, үҙенсә бер моң булып ишетелә. Ул шиғырҙың музыкаллеген көсәйтеү өсөн эске һәм тышҡы рифмаларҙы, поэтик яңғыраштарҙы бик оҫта файҙалана. Бына, мәҫәлән, «Тын төн» исемле шиғырында ул тауыш оҡшатыу аша шау һәм тынлыҡты тойоп белерҙәй ғәжәйеп бер эске моң тыуҙыра:

Тын ғына, тып-тымыҡ бер төн ине…
Шишмәкәй шылтыр-шылтыр-шылтыр ине…
Йыраҡтан гөлдөр-гөлдөр арба килә,
Ул да тынлыҡты ҡуйыртыр өсөн генә…

«Исемдәр баҡсаһы» һәм «Китабеннас» тигән ҙур әҫәрҙәрендә автор һүҙ уйнатыу, поэтик каламбур сараларын юмор һәм сатираны көсәйтеү өсөн бик таһыллы ҡуллана. «Китабеннас»та, мәҫәлән, теге йәки был кеше хаҡында яҙғанда уның исем-фамилияһына оҡшаш һүҙ теҙемдәрен табып та ритмик интонация яғынан яңғырашлы, мәғәнә йәһәтенән иғтибарҙы биләрлек поэтик саралар һайлай. Бер миҫал:

Туҡтаров Мәхмүт түгел ул, туҡтамаҫ Мәхмүттер ул,
Туҡтамаҫ, тынмаҫ вә тындырмаҫ мәхлүктер ул.

Быңдай оҡшаш һүҙҙәр яңғырашы һүҙ барған кешенең кемлеген хәтерҙә нығыраҡ ҡалдырырға булышлыҡ итә.

Шиғырҙың музыкаллеген бермә-бер ҡеүәтләү ниәтенән Бабич үтәнән-үтә рифмалашыуҙы бик киң файҙалана.

Ярһымаһа күкрәк йәшнәп-күкрәп,
Телдәреңдә ялҡын яна алмай.
Аһ ормаһаң һыҡрап, тетрәп-тетрәп,
Ҡулдарыңдан алтын тама алмай.

Был строфала беренсе менән өсөнсө, икенсе менән дүртенсе юлдарҙа һәр бер һүҙ үҙ-ара рифмалашып килә.

«Бер минут» шиғырындағы түбәндәге строфа үтәнән-үтә рифмалашыуҙың шулай уҡ бынамын тигән үрнәге булырлыҡ:

Там, минең күҙ йәштәрем, там, там, тамып тор мәңгегә,
Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып тор мәңгегә.

Быңдағы һәр юлдағы һүҙҙәр яңғырашы, эске һәм тышҡы рифмалар, гүйә, тыпылдап күҙ йәше тамыуының һәм һулҡылдап йөрәк яныуының тауышын да ишеттереп торғандай була.

Бабич шиғриәтендә ритм-интонация төҙөк булған шикелле, унда ярты-йорто рифмалар ҙа юҡ. Бабич рифмалары сатнап, шыңғырлап торалар. Уның иң яратып ҡулланғаны – парлы рифма, шуға нигеҙләнгән *мәҫнәүи* строфаһы. Схемаһы: аа-бб-вв... Ижад емештәренең яртыһы тиерлек ана шул пар юллы строфаларҙан – мәҫнәүи формаларынан тора. Шағирҙың ҙур күләмле эпик әҫәрҙәре «Китабеннас» менән «Ғазазил» да шул уҡ пар юллылыҡҡа ҡоролған.

Революцияға тиклем генә түгел, хәҙерге көндәрҙә лә башҡорт шиғриәтендә һирәгерәк ҡулланылған сатраш (перекрестная) рифмалашыуҙы заманында Бабич активлаштырып ебәрҙе («Көтәм», «Гөл сәскәләре», «Ҡурайҡайға», «Күҙеңде ас» һ. б. шиғырҙары). Ул сатраш рифманы үтәнән-үтә рифмалашыу менән дә ҡушарлап ебәргеләй:

Утлы беләк беҙҙең утын яҡһа,
Кибер төҫлө өлкән диңгеҙ ҙә;
Ныҡлы беләк беҙҙең уғын атһа,
Тейер төҫлө Сулпан йондоҙға!

Башҡорт яҙма поэзияһында Бабич халыҡ йырҙарында киң ҡулланылған юл аша рифма (икенсе-дүртенсе юлдарҙың рифмалашыуы) формаһы менән ҡобайыр шиғыр формаһын активлаштырыуҙа ҙур эш башҡарҙы. Бына уның «Башҡортостан» шиғырынан бер өлгө:

Башҡортостан баҡсаһы –
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы –
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған[1] ер.
Башҡортостан – гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.

Шағир бында ҡобайыр поэтикаһын тағы төрләндереп, байытып ебәрә.

Классик шиғыр формаларынан Шәйехзада Бабичтың киң һәм ижади рәүештә ҡулланғаны – *ғәзәл* формаһы. Ғәрәп һәм фарсы шиғриәтенән килгән был форманы Бабич милли ерлектә тағы үҫтерә, байыта төшә. Бына уның ғәзәлдең типик бер үрнәге булған «Яҙғы байрамдар» әҫәренән бер өҙөк:

Төн тыныс үтһә, ҡасан да көндөҙөндә ел сығыр,
Көн тыныс үтһә, төнөндә суры Исрафил сығыр.
Ел-дауылдар тыуҙырып, күк күкрәтеп ямғыр яуа,
Ҡырға сыҡ ямғыр һуңында – һәр туғайҙан һил сығыр.
Яуһа ҡарҙар, туңһа боҙҙар, яҙ етер бер, боҙ китер,
Ер сығып, ер өҫтөнә үлән сығыр һәм гөл сығыр...

Бында ғәзәл формаһына хас булғанса аа-ба-ва-га... рәүешендәге рифмалашыу бөтә шиғырҙың башынан аҙағынаса бара.

### Ш. Бабич ижадының әҙәбиәт тарихындағы урыны

Шәйехзада Бабич башҡорт әҙәбиәте майҙанына XX быуаттың 10-сы йылдарында килеп, һигеҙ-туғыҙ йыл самаһы ғына ижад ғүмерендә ошо дәүерҙең барышын һәм ҡаршылыҡлы яҡтарын сағылдыра алды. Ул тормоштоң төрлө ҡаршылыҡтарын кисергән, замандың төрлө ел-дауылдарын күргән шәхестең тынғыһыҙ күңел донъяһын асып бирҙе, романтик тәбиғәтле герой образын кәүҙәләндерҙе, башҡорт шиғриәтен мәғрифәтселек һәм революцион-демократик идеялар, романтик мотивтар менән һуғарҙы, унда романтизмдың прогрессив йүнәлеше үҫеүен тиҙләтте. Шағирҙың романтизмы реаль ерлектән, шул дауыллы осор ысынбарлығынан айырылғыһыҙ булды, шул замандың, романтик тәбиғәтле кеше күңеленең бер сағылыш формаһы булып тыуҙы.

---

[1] *Тәрсим ҡылған* – һүрәтләндергән.

Бабич шиғриәтте тормошҡа тағы яҡынайта төштө, уны демократик уй-тойғолар, халыҡсанлыҡ менән ныҡ һуғарҙы, кешеләге һәм йәмғиәттәге кире күренештәрҙе, социаль һәм милли ғәҙелһеҙлектәрҙе тәнҡит утына тотто, халыҡты яҡтылыҡҡа, камил тормошҡа әйҙәне. Шул юлда шиғриәттә сатирик һәм романтик пафостарға быға са булмаған са юл ярҙы, шиғриәттең хайран ҡалырлыҡ тапҡырлығына һәм ябайлығына өлгәште, үҙен шиғыр мәҙәниәтен юғары күтәргән шиғыр оҫтаһы итеп танытты. М. Аҡмулла, Ғ. Туҡай традицияларын уңышлы дауам итеп, башҡорт шиғриәтендә юмор һәм сатираның быға са күрелмәгән аҫыл-аҫыл өлгөләрен тыуҙырҙы, уны сатирик шиғыр, пародия, эпиграмма, мадригал, сатирик баллада, сатирик поэма кеүек өр-яңы жанрҙар һәм жанр формалары менән байытты.

Шәйехзада Бабич шиғриәтенең иң яҡшы үрнәктәре илебеҙ халыҡтары әҙәбиәтенең алтын фондына инде. XX быуат башындағы башҡорт әҙәбиәте тарихында ул иң күренекле, иң талантлы шағир булып Мәжит Ғафури менән йәнәш төп урынды алды.

***Һорауҙар һәм эштәр.***

1. Шәйехзада Бабич әҙәбиәткә килгән осорҙо һүрәтләгеҙ. 2. Унын балалыҡ һәм уҡыу йылдарын иғтибар менән күҙәтегеҙ. 3. Бабичтың әҙәби ижад, сәнғәт өлкәһенә тартылыуының сәбәптәрен билдәләгеҙ. 4. Бабичтың һәр осор поэзияһын ҡылыҡһырлағыҙ. 5. Бабич лирикаһы ни менән характерлана? 6. Юмористик һәм сатирик шиғырҙарының асылын билдәләгеҙ. 7. Шағирҙың милли шиғыр мәҙәниәтен үҫтереүҙәге ролен күрһәтегеҙ. 8. Әҙәбиәт тарихында Шәйехзада Бабич ижадының әһәмиәтен һөйләп бирегеҙ.

# ӘҘӘБИӘТ ИСЕМЛЕГЕ

## Халыҡ ижады

Башҡорт халыҡ ижады. Эпос: Беренсе – өсөнсө китаптар. – Өфө, 1972, 1973, 1982.
Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар: Беренсе китап. – Өфө, 1974.
Башҡорт халыҡ ижады. Экиәттәр: Беренсе – бишенсе китаптар. – Өфө, 1976, 1976, 1978, 1981, 1983.
Башҡорт халыҡ ижады. Бәйеттәр. – Өфө, 1978.
Башҡорт халыҡ ижады. Йомаҡтар. – Өфө, 1979.
Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. – Өфө, 1980.
Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр һәм легендалар. – Өфө, 1980.
Башҡорт халыҡ ижады. Көләмәстәр. – Өфө, 1985.
Урал батыр: Башҡорт халыҡ эпосы. – Өфө, 2010.
*Кирәй Мәргән.* Башҡорт халыҡ ижады. – Өфө, 1982.
*Сәғитов М. М.* Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. – Өфө, 1987.
Иҙеүкәй менән Мораҙым: Башҡорт халыҡ эпосы. – Өфө, 1994.
*Галин С. Ә.* Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. – Өфө, 2004.

## Ауыҙ-тел әҙәбиәте

### *XIV–XVI быуаттар йырауҙары*

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда, 1-се том. – Өфө, 1990.
*Иҙелбаев М. Х.* Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәте. – Өфө, 2007.
«Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт»: XIV–XX быуаттар йырауҙары һәм сәсәндәре сығармалары / Төҙөүсеһе *М. Х. Иҙелбаев.* – Өфө, 2013.
*Иҙелбаев М. Х.* Боронғонан аманат. – Өфө, 2007.
*Иҙелбаев М. Х.* Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәте. – Өфө, 2007.

### *XVI–XVIII быуаттар сәсәндәре*

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда, 1-се том. – Өфө, 1990.
*Буранғолов М.* Сәсән аманаты. – Өфө, 1995.
*Иҙелбаев М. Х.* Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәте. – Өфө, 2007.
«Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт»: XIV–XX быуаттар йырауҙары һәм сәсәндәре сығармалары / Төҙөүсеһе *М. Х. Иҙелбаев.* – Өфө, 2013.
Юлаев Салауат. Шиғырҙар, йырҙар, рәсми ҡағыҙҙар / Төҙөүсеһе *М. Х. Иҙелбаев.* – Өфө, 1994.
*Иҙелбаев М. Х.* Юлай улы Салауат. – Өфө, 1994.

## Башҡортостанда боронғо һәм урта быуаттарҙағы ҡулъяҙма әҙәбиәт

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. I том. XIII–XVIII быуаттар. – Өфө, 1999.
Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда, 1-се том. – Өфө, 1990.
Башҡорт шиғриәте антологияһы. – Өфө, 2001.
*Әхмәтйәнов К.* Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 2004.
*Хөсәйенов Ғ.* Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 2010.
*Харисов Ә.* Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. – Өфө, 2014.
*Хөсәйенов Ғ.* Быуаттар тауышы. – Өфө, 1984.
*Надергулов М.* Историко-функциональные жанры башкирской литературы. – Уфа, 2002.

*Дастансылыҡ традициялары*

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда, 1-се том. – Өфө, 1990.
*Иҙелбаев М. Х.* XIV–XIX быуаттар башҡорт әҙәбиәте. – Өфө, 2012.
*Иҙелбаев М. Х., Мырҙағолова З. Ғ.* Башҡорт әҙәбиәте тарихы: боронғо дәүерҙән XIX быуат башына тиклем. – Өфө, 2015.
*Кәтиб Хөсәм.* Жөмжөмә Солтан. – Казан, 2000.
*Ҡотб.* Хөсрәү вә Ширин. – Казан, 2003.
*Сараи Сәиф.* Гөлестан. Лирика. Дастан. – Казан, 1999.

*XVI–XVIII быуаттар ҡулъяҙма шиғриәте*

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда, 1-се том. – Өфө, 1990.
*Иҙелбаев М. Х.* XIV–XIX быуаттар башҡорт әҙәбиәте. – Өфө, 2012.
*Иҙелбаев М. Х., Мырҙағолова З. Ғ.* Башҡорт әҙәбиәте тарихы: боронғо дәүерҙән XIX быуат башына тиклем. – Өфө, 2015.

*XVI–XVIII быуаттар прозаһы*

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда, 1-се том. – Өфө, 1990.
Башҡорт шәжәрәләре / Төҙөүселәре *Булгаков Р. М., Нәҙерғолов М. Х.* – Өфө, 2002.
*Иҙелбаев М. Х.* XIV–XIX быуаттар башҡорт әҙәбиәте. – Өфө, 2012.
*Иҙелбаев М. Х., Мырҙағолова З. Ғ.* Башҡорт әҙәбиәте тарихы: боронғо дәүерҙән XIX быуат башына тиклем. – Өфө, 2015.

## XIX быуатта Башҡортостанда яҙма һәм баҫма әҙәбиәт

*XIX быуаттың беренсе яртыһында ижтимағи тормош һәм мәҙәни-әҙәби хәрәкәт*

Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Икенсе китап. – Өфө, 1973.
Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өсөнсө китап. – Өфө, 1982.
Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Ике томда. II том. XIX быуат. – Өфө, 2007.
Башкирия в русской литературе. В 6 томах. Т. I. – Уфа, 1989.
*Ҡунафин Ғ. С.* XIX быуат башҡорт әҙәбиәте. Башҡортостандың юғары һәм махсус урта уҡыу йорттары өсөн дәреслек. – Өфө, 2010.
*Ҡунафин Ғ. С.* XIX–XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш үҙенсәлектәре. – Өфө, 2014.

*Мәргән К.* Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. – Өфө, 1961.

*XIX быуаттың икенсе яртыһында ижтимағи тормош, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт*

*Аҡмулла М.* Шиғырҙар. – Өфө, 1981 (икенсе баҫмаһы – 2006).
*Вилданов Ә.* Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы. – Өфө, 1981.
*Вильданов Л. Х., Кунафин Г. С.* Башкирские просветители-демократы XIX века. – М.: Наука, 1981.
*Ҡунафин Ғ.* Мәғрифәтсе, ғалим һәм әҙип М. Өмөтбаев. – Өфө, 1991.
*Кунафин Г.* Культура Башкортостана и башкирская литература XIX – начала XX века. – Уфа, 2006.
*Ҡунафин Ғ.* XIX быуат башҡорт әҙәбиәте. Башҡортостандың юғары һәм махсус урта уҡыу йорттары өсөн дәреслек. – Өфө, 2010.
*Ҡунафин Ғ.* Аҡмулланың шиғри йәйғоро – Поэтическая радуга Акмуллы. – Өфө, 2010.
*Ҡунафин Ғ.* XIX–XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш үҙенсәлектәре. – Өфө, 2014.
*Өмөтбаев М.* Йәдкәр. – Өфө, 1984 (тулыландырылған 2-се баҫмаһы – 2011).
*Өмөтбаев М.* Шиғырҙар. – Өфө, 2001.
*Өмөтбаев М.* Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр. – Өфө, 2016.
*Хөсәйенов Ғ.* Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. – Өфө, 1991.
*Хөсәйенов Ғ.* Ризаитдин бин Фәхретдин. – Өфө, 1997.
*Фәхретдинов Р.* Нәсихәттәр. – Өфө, 2006.
*Фәхретдинов Р.* Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө, 2009.
*Шакур Р.* Звезда поэзии Мифтахетдин Акмулла. Жизнь. Творчество. Мировоззрение. – Уфа: Китап, 1996.

## XX быуат башында ижтимағи тормош, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт

Башҡорт поэзияһы антологияһы. – Өфө, 1971.
Башҡорт әҙәбиәте. XX быуат башы. Беренсе китап. Поэзия. – Өфө, 1983; Икенсе китап. Проза, драматургия. – Өфө, 1984.
Башҡорт шиғриәте антологияһы. – Өфө, 2001.
Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 2-се том. – Өфө, 1990.
*Бабич Ш.* Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар. – Өфө, 1994.
*Бикбаев Р.* Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады. – Өфө, 1981.
*Ғафури М.* Әҫәрҙәр. Дүрт томда. I, II томдар. – Өфө, 1978–1979.
*Кунафин Г.* Культура Башкортостана и башкирская литература XIX – начала XX века. – Уфа, 2006.
*Ҡунафин Ғ. С.* XIX–XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш үҙенсәлектәре. – Өфө, 2014.
*Ҡунафин Ғ. С.* XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество үҙенсәлектәре. – Өфө, 2016.
*Рамазанов Ғ.* Мәжит Ғафури ижады. – Өфө, 1965.
*Ҡунафин Ғ. С.* Шәйехзада Бабичтың ижад офоҡтары – Творческие горизонты Шайхзады Бабича. – Өфө, 2015.
*Сөләймәнов Ф.* Башҡорт йәйләүендә. – Өфө, 1996.
*Яҡшығолов С.* Башҡорт хәлдәре. – Өфө, 1994.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**Инеш** . . . . . . 4
Художестволы әҙәбиәт . . . . . . 4
**Халыҡ ижады** . . . . . . 19
«Урал батыр» . . . . . . 43
«Иҙеүкәй менән Мораҙым» . . . . . . 48
**Ауыҙ-тел әҙәбиәте** . . . . . . 53
XIV–XVI быуаттар йыраүҙары . . . . . . 56
XVI–XVIII быуаттар сәсәндәре . . . . . . 65
**Салауат Юлаев** . . . . . . 76
Халыҡ ижадында һәм әҙәбиәттә Салауат Юлаев образы . . . . . . 83
**Башҡортостанда боронғо һәм урта быуаттарҙағы ҡулъяҙма әҙәбиәт** . . . . . . 90
Дастансылыҡ традициялары . . . . . . 100
XVI–XVIII быуаттар ҡулъяҙма шиғриәте . . . . . . 111
XVI–XVIII быуаттар прозаһы . . . . . . 116
**XIX быуатта Башҡортостанда яҙма һәм баҫма әҙәбиәт** . . . . . . 130
XIX быуаттың беренсе яртыһында ижтимағи тормош һәм мәҙәни-әҙәби хәрәкәт . . . . . . 130
«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» . . . . . . 140
«Зөһрә менән Алдар» . . . . . . 149
«Буҙйегет» . . . . . . 155
XIX быуаттың икенсе яртыһында ижтимағи тормош, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт . . . . . . 159
**Мифтахетдин Аҡмулла** . . . . . . 169
**Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев** . . . . . . 183
**Ризаитдин Фәхретдинов** . . . . . . 196
**XX быуат башында ижтимағи тормош, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт** . . . . 218
**Сафуан Яҡшығолов** . . . . . . 227
**Закир Һаҙи** . . . . . . 236
**Фәтхелҡадир Сөләймәнов** . . . . . . 248
**Мәжит Ғафури** . . . . . . 263
Художество методы. Реализм һәм тәнҡитле реализм . . . . . . 274
**Шәйехзада Бабич** . . . . . . 277
*Әҙәбиәт исемлеге* . . . . . . 293

*Учебное издание*

**Кунафин** Гиниятулла Сафиуллович
**Идельбаев** Мирас Хамзович

**БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 9 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Ҡунафин** Ғиниәтулла Сафиулла улы
**Иҙелбаев** Мирас Хәмзә улы

**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Тышлыҡта – *Н. Х. Ғәлиев,*
форзацтарҙа *А. Ә. Василов* фотолары файҙаланылды

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррирҙәре *В. У. Сафина, Г. Ә. Таһирова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *А. Х. Хәкимова, Л. Ф. Саниева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.09.2017. Форматы 60×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. BTSchoolBook гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 18,50+0,31 форз. Шартлы буяу отт. 20,56. Иҫәп-нәшер таб. 16,59+0,40 форз. Тиражы 6 900 дана. Заказ 1.0147.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



КИТАП